М.Х.ӘХТӘМОВ

# ОМОНИМДАР
(аҙаш һүҙҙәр)
# ҺҮҘЛЕГЕ

УДК 811.512.141'374 (038)
ББК 81.2 Баш=4
Ә 89

**Әхтәмов М. Х.**

Ә 89 Омонимдар (аҙаш һүҙҙәр) һүҙлеге. — Өфө: Китап, 2006. — 384 бит.

ISBN 5-295-03783-5

Һүҙлек әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан нык айырылған һүҙҙәрҙе эсенә ала. Уларҙың һәр береһенә аңлатма бирелде; әҙәбиәттән, халыҡ ижадынан, матбуғаттан миҫалдар килтерелде, төп материалды тулыландырған ҡушымталар ҙа бирелде.

Һүҙлек юғары уҡыу йорттары, педучилищелар, колледждар, лицейҙар, урта мәктәп уҡытыусылары, уҡыусылар һәм шулай уҡ башҡорт теле менән ҡыҙыҡһынған бөтә кешеләргә тәғәйенләнә.

УДК 811.512.141'374 (038)
ТП—058/06 ББК 81.2 Баш=4

ISBN 5-295-03783-5

© М. Х. Әхтәмов, 2006

*Атайым*
*Хөснөлхаҡ Әбделбарый улының*
*яҡты иҫтәлегенә арнайым*

## БАШ ҺҮҘ

Ғәҙәттә, төрлө мәғәнәле һүҙҙәр төрлөсә яңғырай: *ағас, йөрәк, кеше, кил, ҡал, ҡурпы, ҡыяр, тойғо, тор, тот, тәҙрә, һөт, эш* һ. б. Ләкин телдә бер үк төрлө әйтелеп һәм яҙылып, мәғәнәләре яғынан ныҡ айырылған һүҙҙәр ҙә байтаҡ осрай. Мәҫәлән, *ая* (дебет яҙыу өсөн булған ҡулайлама) һәм *ая* (ус яҫылығындағы үлсәү берәмеғе) һүҙҙәре икеһе лә бер үк төрлө әйтелә һәм яҙыла, әммә мәғәнәләре менән бер-береһенән ныҡ айырыла. Үҙең менән бер үк исем йөрөткән тиҫтереңә *аҙаш* тип өндәшкән кеүек, бындай һүҙҙәрҙе *аҙаш һүҙҙәр* тип атарға була. Был осраҡта *аҙаш* һүҙе фәҡәт күплектә генә ҡулланыла: *аҙаш кешеләр, аҙаш һүҙҙәр* ниндәйҙер бер исем йөрөткән кеше, ниндәйҙер бер һүҙ, шул уҡ исемде йөрөткән икенсе бер кеше йәки шундай уҡ яңғырашлы һәм яҙылышлы икенсе бер һүҙ булмаһа, *аҙаш* һүҙенең кәрәге ҡалмай. Шуға ла *аҙаш кеше, аҙаш һүҙ* тип әйтеп булмай, тик *аҙаш кешеләр, аҙаш һүҙҙәр* тип кенә әйтергә мөмкин.

*Аҙаш һүҙҙәр* тел ғилемендә *омонимдар* (иғтибар итегеҙ: бында ла һүҙ күплектә ҡулланыла) тип йөрөтөлә. *Омоним* һүҙе үҙе грек теленең *homos* «бер үк» һәм *onyma* «исем» һүҙҙәренән яһалған. Шулай итеп, ***омонимдар (аҙаш һүҙҙәр)* тип әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан ныҡ айырылған ике йәки унан артыҡ һүҙҙәрҙе атайҙар.**

Һуңғараҡ *омонимдар* тигән термин, әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан ныҡ айырылған, башланғыс формалағы һүҙҙәргә генә түгел, уларҙың башҡа формаларына ла, һүҙҙәрҙең өлөштәренә лә таратыла. Мәҫәлән, *ояла* һүҙ формаһын ике төрлө мәғәнәле өлөштәргә айырып ҡарарға мөмкин: *оя-ла* һәм *оял-а*. Уларҙың икеһе лә башланғыс формала тормай: тәүгеһе *оя* исеменең урын-

ваҡыт килеше формаһы, ә икенсеһе — *оял* ҡылымының хәҙерге заман формаһы. Тимәк, улар тик ошо формаларҙа ғына әйтелештәре менән яҙылыштары тап килгән башҡа-башҡа ике һүҙҙең формалары була. Бындай формаларҙы *омоним(ик) формалар (омоформалар)* тип йөрөтәләр (тәүге *оял-а* һүҙендәге *-ла* ялғауын *оя* исеменән ҡылым яһаусы ялғау тип тә ҡарарға була, әммә ул саҡ һүҙ башланғыс формала торған һүҙгә әйләнә).

*Йышҡы* һәм *ҡышҡы* һүҙҙәрен ҡарайыҡ. Тәүге һүҙҙә *-ҡы* ялғауы *йыш* ҡылымынан исем яһай, ә икенсеһендә *-ҡы* ялғауы ҡыш исеменән сифат яһай. Тимәк, әйтелештәре менән яҙылыштары тап килһәләр ҙә, *-ҡы* һәм *-ҡы* ялғауҙары башҡа-башҡа мәғәнәле ялғауҙар була. Бындай ялғауҙарҙы инде *омоним(ик) ялғауҙар (омоялғауҙар)* тип атайҙар.

Башҡорт телендә әйтелештәре йәки яҙылыштары ғына тап килгән һүҙҙәр бар. Әйтелештәре тап килеп, яҙылыштары менән мәғәнәләре яғынан айырылғандарҙы *омофондар* (грек теленең homos «бер үк» һәм phone «өн» һүҙҙәренән) тип атайҙар, мәҫәлән: *бал* (ҡорттоң сәскә һутынан йыйып яһаған татлы ҡуйы матдәһе) — *балл* (берәй тәбиғәт күренешенең көсөн, ҡеүәтен үлсәү берәмеге). Икенселәрен, йәғни яҙылыштары тап килеп, әйтелештәре менән мәғәнәләре яғынан айырылғандарын, *омографтар* (ғрек теленең homos «бер үк» һәм grapho «яҙам» һүҙҙәренән) тип йөрөтәләр, мәҫәлән: *классик* (исем) — *классик* (сифат).

**Был китапҡа әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан ныҡ айырылған *башланғыс формалағы* һүҙҙәр тупланған.** Китап уҡыусыларға тәғәйенләнгәнлектән, уны һүҙлек формаһында биреү кәрәк табылды. Һүҙлек рус һәм башҡа телдәрҙә ошондай һүҙлектәр төҙөү тәжрибәһен иҫәпкә алып төҙөлдө. Унда һүҙҙәр һәм миҫалдар, нигеҙҙә, башҡорт теленең ике томлыҡ аңлатмалы һүҙлегенән алынып, үҙебеҙҙекеләр менән тулыландырылды.

Һүҙлеккә лексикографтар иләгенән үткән, мәғәнәһе һис бер шик тыуҙырмаған асыҡ һәм аңлайышлы булған һүҙҙәр генә алынды. Шуның менән бергә унда башҡорт телендәге омонимдарҙың үҙенсәлектәре тураһында ла уҡыусыларға төшөнсә биреп китеү кәрәк тип табылды.

Әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан айырылған һүҙҙәр һәр телдең лексикаһында бар. Ундай һүҙҙәр башҡорт телендә лә күп. Мәҫәлән:

**азаш I** *и.* Бер исем йөрөткән ике йәки бер нисә кеше (бер-береһенә ҡарата). [*Пугачёв*]*: Кем кисәге дозор башлығы ине?* [*Пётр*]*: (алға сыға). Мин, император.* [*Пугачёв*]*: Исемең кем?* [*Пётр*]*: Ун башы Пётр.* [*Пугачёв*]*: Тимәк,* ***аҙаш.*** [*Пётр*]*:* ***Аҙаш****, батша хәҙрәттәре,* ***аҙаш.*** *Тик нумерым ғына юҡ.* М. Кәрим.

**аҙаш II** *ҡ.* Юлдан яҙыу, юл юғалтыу. *Ҡурҡыныс ҡара урманда ул кескәй ҡыҙ* ***аҙашып*** *йөрөй, имеш.* М. Кәрим. [*Асия*:] *Атайым менән ҡалаға килгәйнем, мин унан тороп ҡалдым да* ***аҙаштым.*** К. Мәргән. *Яңғыҙ йөрөп юл ярғансы, күмәк менән бергә* ***аҙаш.*** Әйтем.

Был килтерелгән һүҙҙәрҙең әйтелештәре менән яҙылыштары берҙәй, әммә мәғәнәләре төрлө, улар араһында бер ниндәй мәғәнәүи бәйләнеш юҡ. Шулай итеп, ниндәй телдә булһа ла, әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре башҡа-башҡа һүҙҙәр омонимдар (аҙаш һүҙҙәр) тип атала.

Һүҙҙәр тамыр көйөнсә лә, яһалма һәм ҡушма төрөндә лә үҙ-ара омонимдаш булырға мөмкин. Ҡайһы бер телдәрҙә тамыр омонимдар һирәк осрап, яһалма омонимдар күп була. Ҡайһы берҙәрендә омоним һүҙҙәрҙең ике төрө лә (тамыр омонимдар ҙа, яһалма омонимдар ҙа) осрай. Акад. В. В. Виноградов рус телендә яһалма омонимдарҙың аҙ булыуын билдәләй.[1]

Башҡорт теле лексикаһында **тамыр һүҙҙәрҙән торған омонимдар** йыш осрай. Мәҫәлән:

**йыр I** *и.* Көй менән башҡарыла торған шиғри әҫәр. ***Йыр*** *күтәреү. Моңло* ***йыр.*** — *Тыуған ерҙәр гүзәллеге булып, йөрәктән* ***йыр*** *күпме ағыла. Күптәрҙе бит* ***йырҙар*** *осраштыра,* ***йыр*** *менән дуҫ, иптәш табыла.* Н. Нәжми. ***Йырҙың*** *йыртығы юҡ.* Әйтем. *Моңһоҙҙоң да бер* ***йыры*** *була.* Әйтем.

**йыр II** *ҡ.* 1. Ниҙелер өңөп, ашап, юл ярыу. *Тауҙарҙы* ***йырып****, Кураған йылғаһы аға.* К. Мәргән.

2. Кимереп, өңөп, юлаҡ яһау. [*Һандыҡтың*] *таҡталарын корт* ***йырып*** *бөткән.* З. Биишева.

3. Буйға ярыу, телеү. *Һаҙаҡ Аҡһаҡ ҡоланың һыртын ярып бер ҡолағын* ***йырып*** *барып сыға.* «Аҡһаҡ ҡола».

---

[1] *Виноградов В. В.* Об омонимии и смежных явлениях // Вопросы языкознания, 1960, № 5.

4. Ниҙелер ян-яҡҡа аралап, алға хәрәкәт итеү. *Көрт* ***йырып*** *барыу.* ▬ *Зөһрә ысыҡлы һаҙ үләнен* ***йырып****, тар ғына һуҡмаҡтан бара.* З. Хисмәтуллин.

***Яһалма омонимдар,*** ниғеҙҙә, **омоним ялғауҙар** (омоялғауҙар) **ҡушып яһала.** Омоним ялғауҙар һөҙөмтәһендә яһалған омоним иштәр составындағы һүҙҙәр бер һүҙ төркөмөнә лә, төрлө һүҙ төркөмонә лә ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән:

**алыш I** *и.* Ике аралағы бәрелеш, һуғыш. *Бөтә табын йорто ҡатаиҙарға ташланған.* ***Алыш*** *ҡаты булған.* Ә. Вахитов.

**алыш II** *ҡ.* Бәрелешеү, һуғышыу. *Урмандарҙа айыу менән* ***алыша*** *һәм күтәреп бәрә йылт итеп; ат өҫтөндә елеп, ҡош тотмағас, егетме ни башҡорт егете!* Н. Нәжми.

**башлыҡ I** *и.* Берәй төркөмгә, хужалыҡҡа етәкселек итеүсе; етәксе. *Ғәскәр* ***башлығы.*** *Звено* ***башлығы.*** ▬ *Кем уҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше* ***башлыҡ*** *була.* М. Кәрим. *Аҡырған* ***башлыҡ*** *түгел, аҡылы бар* ***башлыҡ.*** Мәҡәл.

**башлыҡ II** *и.* Еңел баш кейеме. ***Башлыҡ*** *бәйләү.* ***Башлыҡ*** *кейеү. Буҫтау* ***башлыҡ.***

Юғарыла килтерелгән яһалма омонимдарҙың тәүге ишендә беренсе һыңары (*алыш I*) исем һүҙ төркөмөнә, икенсе һыңары (*алыш II*) ҡылым һүҙ төркөмонә, һуңғы ишендә ике һүҙ ҙә (*башлыҡ I һәм башлыҡ II*) бер үк исем һүҙ төркөмонә ҡарай һәм һәр омоним иш (*алыш I — алыш II* һәм *башлыҡ I — башлыҡ II*) омоним ялғауҙар кушылыу һөҙөмтәһендә яһалған. Быны тағы башҡа күп кенә яһалма омонимдарға ҡарата ла әйтеп була.

Омонимдарҙы күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айыра белергә кәрәк. Әммә уларҙы бер-береһенән айырыу проблемаһы тел белемендә бик ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе иҫәпләнә.[2]

Шулай булһа ла омонимдарҙы күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айырыу мәсьәләһе барлыҡ омонимдарға берҙәй ҡағылмай. Мәҫәлән, «умыртҡалы йән эйәләренең күкрәк ҡыуышлығында урынлашҡан тын алыу ағзаһы» мәғәнәһендәге *үпкә* һүҙе менән «ғәҙел булмаған бер нәмәгә йәберһенеү, рәнйеү тойғоһо» мәғәнәһендәге *үпкә* һүҙе үҙ-ара омоним һүҙҙәр икәнлеғе һис бер шик тыуҙырмай. Әлек үк асыҡтан-асыҡ

---

[2] Омонимдарзы күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айырыу мәсьәләһенә арналған дискуссия материалдарын ҡарағыҙ: Лексикографический сборник. Вып. 4. — М., 1960.

омоним һүҙҙәр булғанлыҡтан, улар күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән еңел айырыла.

Омоним һүҙҙәрҙе күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айырыу мәсьәләһе күп мәғәнәле һүҙҙәр менән сиктәш булған, уларға сиктәш ятҡан омонимдарға ғына ҡағыла. Мәҫәлән, «ер тирәһендә әйләнгән иң яҡын күк есеме» мәғәнәһендәге *ай* менән «йылдың ун ике өлөшкә бүленгән ваҡыт берәмеге» мәғәнәһендәге *ай* бер һүҙҙең мәғәнәләреме, әллә улар омоним һүҙҙәрме? Был һорауға яуап биреү өсөн иң элек мәғәнәләр араһында бәйләнеш һаҡланыу-һаҡланмауҙы асыҡларға кәрәк. Әгәр бәйләнеш һаҡланған булһа, улар бер һүҙҙең төрлө мәғәнәләре була, ә мәғәнәләр араһында семантик бәйләнеш алыҫлашып, юйылып, өҙөлөп, хәҙерге ваҡытта ундай бәйләнеш һиҙелмәһә, элекке бер һүҙҙең мәғәнәләре айырым-айырым һүҙҙәргә әйләнгән һәм үҙ-ара омоним һүҙҙәр төҙөгән була. Ындай осраҡтар һүҙлектәрҙә омоним һүҙҙәр рәтендә ҡаралырға тейеш.

Ә инде мәғәнәләр араһындағы семантик бәйләнештең ныҡ алыслашыуын (өҙөлөүен, юйылыуын) билдәләгәндә мәғәнәләрҙең һүҙ яһауҙа ерлек була алыу-алмауын да иғтибарға алырға кәрәк. Мәҫәлән, үрҙә һүҙ барған «Ер юлдашы» мәғәнәһендәге *ай* һүҙе *айлы* (*айлы кис*) яһалма һүҙен һәм *айбалта, айһын* ҡушма һүҙҙәрен яһауҙа ҡатнашһа, «ваҡыт берәмеге» мәғәнәһендәге *ай* һүҙенән *айлап* (*айлап эшләү*), *айлыҡ* (*айлыҡ эш хаҡы*) һүҙҙәре яһала. Был инде элекке бер һүҙ мәғәнәләренең бер-береһенән айырылыуы, уларҙың үҙ аллы юл алыуы тураһында һөйләй. Тимәк, күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләре айырылып, ул мәғәнәләр айырым һүҙҙәр булып китеү-китмәүен билдәләгәндә, ул мәғәнәләрҙең (һүҙҙәрҙең) һүҙ яһай алыу-алмауын да иҫәпкә алырға кәрәк.

Әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан айырылған һүҙҙәрҙең һәр ҡайһыһы башланғыс формала, бер һыңары башланғыс, ә икенсе һыңары башланғыс булмаған формала һәм һәр ҡайһыһы башланғыс булмаған формала торорға мөмкин. Мәҫәлән, «үҫемлек һәм уның орлоғо» мәғәнәһендәге *борсаҡ* исеме менән «атмосфера күренеше» мәғәнәһендәге *борсаҡ* исеме икеһе лә башланғыс формала тора: икеһе лә берлектә, төп килештә (ә исем өсөн төп килеш, берлек формаһы башланғыс форма иҫәпләнә). «Туңған һыу» мәғәнәһендәге *боҙ* исеме менән «ватыу» мәғәнәһендәге *боҙ* ҡылымы ла башланғыс формала торған һүҙҙәр:

*боҙ* исеме төп килештә, берлектә торһа, *боҙ* — ҡылымдың тамыр формаһы була (билдәле булыуынса, ҡылымдың башлангыс формаһы булып уның тамыры (нигеҙе) иҫәпләнә). Үрҙә һүҙ барган *ояла* (*оя* исеменең урын-ваҡыт килеш формаһы) һәм *ояла* (*оял* ҡылымының хәҙерге заман формаһы) һүҙҙәре икеһе лә башлангыс формала түгел (был йәйәләр эсендә бирелгән аңлатмаларҙан асыҡ күренә).

Әйтелештәре менән яҙылыштары башлангыс формаларҙа тап килешкән һүҙҙәрҙең *грамматик формалары оҡшаш булырға ла, оҡшаш булмаҫҡа ла* мөмкин, ә башланғыс булмаған формаларҙа тап килешкәндәрҙең грамматик формалары бер ваҡытта ла оҡшаш булмай. Мәҫәлән, югарыла һүҙ барған *борсаҡ* һәм *борсаҡ* иштәре лә, *боҙ* һәм *боҙ* иштәре лә әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, үҙҙәренең башлангыс формаларында торған һүҙҙәр һанала. Ләкин тәүге иштәр (*борсаҡ* һәм *борсаҡ*) оҡшаш грамматик формала (икеһе лә төп килеш, берлек формаһында) тап килешһә, икенсе иштәр (*боҙ* һәм *боҙ*) оҡшаш булмаган грамматик формаларҙа (тәүге һыңары төп килеш, берлек формаһында) тап килешкән. Билдәле булыуынса, төп килеш, берлек формаһы менән ҡылымдың тамыры оҡшаш грамматик формалар түгел. Тимәк, башлангыс формала тап килешкән һүҙҙәрҙең грамматик формалары оҡшаш һәм оҡшаш булмаҫҡа мөмкин. Ә инде әйтелештәре менән яҙылыштары башланғыс булмаған формаларҙа тап килгән шулай уҡ үрҙә һүҙ барган *ояла* һәм *ояла* һүҙҙәренең тап килешкән грамматик формалары, әлбиттә, оҡшаш түгел: урын-ваҡыт килеше менән хәҙерге заман оҡшаш грамматик формалар булмай.

Әйтелештәре менән яҙылыштары оҡшаш грамматик формала тап килгән һүҙҙәр үҙҙәренең башланғыс формаларында тап килмәҫкә лә мөмкин. Мәҫәлән, «кем йәки нәмә икәнен иҫләп алыу, белеү» мәғәнәһендәге *таныу* ҡылымы менән «эшләгән эшеңдән йәки әйткән һүҙеңдән баш тартып, кире ҡағыу» мәғәнәһендәге *таныу* ҡылымы оҡшаш грамматик формала (икеһе лә исем ҡылым формаһында) тап килгән, ләкин башлангыс формалар уларҙың башҡа-башҡа: беренсеһенең башланғыс формаһы *таны,* ә икенсеһенең — *тан.* Шундай уҡ фекерҙе түбәндәге ҡылымдарга ҡарата ла әйтеп була:

*ейеү* (ей) — *ейеү* (ейе)
*кубеү* (күп) — *күбеү* (күбе)

*ҡороу* (ҡор) — *ҡороу* (ҡоро)
*ташыу* (таш) — *ташыу* (ташы)
*яныу* (ян) — *яныу* (яны)

Әйтелештәре менән яҙылыштары тап килеп, мәғәнәләре яғынан ныҡ айырылған һүҙҙәрҙең береһе башланғыс, ә икенсеһе башланғыс булмаған формала булһа, улар бер үк һүҙ төркөмөнә лә, төрлө һүҙ төркөмөнә лә ҡарап, тап килешкән формалары оҡшаш булмай: *ҡолға* (төп килештә, берлектә торған исем) — *ҡолға* (*ҡол* исеменең төбәү килеш формаһы), *ҡала* (төп килештә, берлектә торған исем) — *ҡала* (*ҡал* ҡылымының хәҙерге заман формаһы).

Әйтелештәре менән яҙылыштары башланғыс формаларҙа тап килгән һүҙҙәр лексик-семантик һәм грамматик мәғәнәләре яғынан бер-береһенән лексик планда ғына (лексик мәғәнәләре менән генә) һәм лексик мәғәнәләре менән дә, грамматик мәғәнәләре менән дә айырылырға мөмкин. Лексик мәғәнәләре менән генә айырылғандарын *лексик омонимдар*, лексик мәғәнәләре менән дә, грамматик мәғәнәләре менән дә айырылғандарын *лексик-грамматик омонимдар* тип атайҙар. Мәҫәлән, «кәүҙә өлөшө атамаһы» мәғәнәһендәге *аяҡ* һүҙе һәм «һауыт төрө атамаһы» мәғәнәһендәге *аяҡ* һүҙе *лексик*, ә «быу, пар» мәғәнәһендәге *боҫ* һәм «башты, кәүҙәне аҫҡа баҫып, йәшеренеү» мәғәнәһендәге *боҫ* һүҙҙәре *лексик-грамматик* омонимдар була, сөнки тәүге иштәге һүҙҙәр (*аяҡ I* — *аяҡ II*) әйтелештәре менән дә, яҙылыштары менән дә, грамматик мәғәнәләре менән дә (икеһе лә төп килештә, берлектә) тап килеп, бер-береһенән лексик мәғәнәләре менән генә айырылһа, икенсе иштәгеләр (*боҫ I* — *боҫ II*) лексик мәғәнәләре менән дә, грамматик мәғәнәләре (береһе исем, икенсеһе — ҡылым) менән дә айырыла. Тимәк, ***лексик омонимдар* тип әйтелештәре менән яҙылыштары оҡшаш (бер үк) грамматик формаларҙа тап килеп, лексик мәғәнәләре менән генә айырылған һүҙҙәр, ә *лексик-грамматик омонимдар* тип әйтелештәре менән яҙылыштары оҡшаш булмаған грамматик формаларҙа тап килеп, лексик мәғәнәләре менән дә, грамматик мәғәнәләре менән дә айырылған һүҙҙәр атала.**

Бер үк һүҙҙең омоним формалары һәм омоним ялғауҙар *грамматик омонимдар* төҙөй (***Китап өҫтәлдә ята*** һәм ***Мин китап алдым*** һөйләмдәрендәге ***китап*** һүҙенең һәм үрҙә һүҙ барған ***-ҡы I*** һәм ***-ҡы II*** ялғауҙарының грамматик формаларына иғтибар итегеҙ).

Башҡорт телендә лексик омоним төҙөүсе компоненттар һәр саҡ бер үк һүҙ төркөмөнән була. Мәҫәлән, лексик омоним төҙөгән *арпа* (ашлыҡ һәм уның орлоғо) — *арпа* (шешек) һүҙҙәре икеһе лә исем һүҙ төркөмонә, *иш* (бау яһау) — *иш* (кәмәне йөҙҙөрөү өсөн ишкәк менән һыуҙы ярып этеү) һүҙҙәре икеһе лә ҡылым һүҙ төркөмөнә ҡарай. Лексик-грамматик омоним тоҙөүсе компоненттар бер һүҙ төркөмөнә лә, төрлө һүҙ төркөмөнә лә ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән, *ҡарға* (ҡош) — *ҡарға* (ҡар исеменән төбәү килеш формаһы) иштәрендә ике компонент та исем һүҙ төркөмөнә, *тарай* (*тар* сифатынан *-ай* ялғауы ҡушып яһалған ҡылым) — *тарай* (*тара* ҡылымынан хәҙерге заман формаһы) иштәрендә ике компонент та ҡылым һүҙ төркөмөнә ҡараһа, *арба* (ҡорамал) — *арба* (сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп үҙеңә буйһондороу) иштәрендә тәүге компонент исем һүҙ төркөмөнә, икенсе компонент ҡылым һүҙ төркөмөнә ҡарай.

Башҡорт телендә лексик омонимдар һәр ваҡыт тулы була, йәғни лексик омоним төҙөүсе компоненттар үҙҙәренә хас булған барлыҡ ғрамматик формаларҙа ла тап килә. Мәҫәлән, «иҫке яр» мәғәнәһендәге *ҡабаҡ* һәм «күҙҙең ҡаштан түбәнге өлөшө» мәғәнәһендәге *ҡабаҡ* һүҙҙәре тулы лексик омонимдар, сөнки улар үҙ-ара ошо килтерелгән формаларҙа ғына түгел, исемгә хас булған килеш, эйәлек һәм һан категорияларының барлыҡ формаларында ла тап килә.

Лексик-ғрамматик омонимдар иһә бер ваҡытта ла тулы булмай, сөнки уларҙы төҙөүсе компоненттар айырым формаларҙа ғына тап килә.

Башҡорт телендә лексик омонимдар төрлө юлдар менән яһала:

1. Лексик омонимдар полисемия, йәғни һүҙҙең күпмәғәнәлелеге, тарҡалыу ерлегендә барлыҡҡа килә: *ай* (Ерҙең эйәрсене) — *ай* (йылды ун икегә бүлгән ваҡыт берәмеге), *аҡла* (аҡҡа буяу) — *аҡла* (ғәйепһеҙгә сығарыу), *бал* (ҡорттоң сәскә һутынан йыйып яһаған ҡуйы матдәһе) — *бал* (иҫерткес эсемлек), *борсаҡ* (түңәрәк орлоҡло бер йыллыҡ үҫемлек һәм уның емеше) — *борсаҡ* (бәләкәй генә йомро боҙ рәүешендә яуған яуын), *иҙ* (ҡаты нәмәне төйгөләп, баҫҡылап ваҡлау) — *иҙ* (кешене нык хоҡуҡһыҙға әйләндереп, ҡаты ҡыҫыу), *иш* (бау яһау) — *иш* (ишкәк менән), *көн* (ҡояш) — *көн* (тәүлектең ҡояшлы ваҡыты), *ҡыр* (ниҙеңдер өҫкө ҡатлауын алыу) — *ҡыр* (күпләп үлтереп, юҡ итеү), *нигмәт* (бай-

лыҡ) — *ниғмәт* (аҙыҡ, ашамлыҡ), *туҡы* (болғатыу) — *туҡы* (тауар һуғыу), *ябаға* (алты айлыҡтан алып бер йәшкә тиклемге йылҡы малы) — *ябаға* (йылҡы малының яҙ ҡойған йөнө) һ. б.

Тарихи планда килтерелгән иштәр бер һүҙҙең мәғәнәләренән барлыҡҡа килгән, әммә ваҡыттар үтеү менән мәғәнәләр араһындағы бәйләнеш шаҡтай алыҫлашып, айырым-айырым һүҙҙәр булып киткән.

Телдә бер мәғәнәле һүҙҙәрҙең күп мәғәнәле булып китеүе, күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләре артыуы тәбиғи күренеш иҫәпләнә. Ә бына күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләре араһындағы бәйләнеш нык алыҫайып йәки юйылып, ул мәғәнәләрҙең айырым һүҙҙәргә әйләнеп китеүе бәхәс тыуҙыра. Ҡайһы бер ғалимдар (башҡорт тел белемендә, мәҫәлән, Ж. Ғ. Кейекбаев) күп мәғәнәле һүҙ мәғәнәләре араһындағы бәйләнеш нык алыҫлашып йәки юйылып, ул мәғәнәләр айырым-айырым омоним һүҙҙәр булып китеү мөмкинлеген танымай. Уларса омоним һүҙҙәр бер-береһе менән бер ҡасан да бәйләнеше булмаған айырым-айырым һүҙҙәр булып, күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән омонимдар яһалмай. Ләкин бындай ҡараш телдең үҫеүен инҡар итеүгә килтерә. Әйтәйек, *ай* (Ер эйәрсене) — *ай* (йылды ун икегә бүлгән ваҡыт берәмеге) һәм *борсаҡ* (түңәрәк орлоҡло бер йыллыҡ үҫемлек) — *борсаҡ* (бәләкәй генә йомро боҙ рәүешендә яуған яуын) омонимдарын тәҙоүсе компоненттар бер үк һүҙҙәргә барып тоташһалар ҙа, телдең хәҙерге торошонда улар айырым-айырым һүҙҙәр иҫәпләнә. Шуға күрә лә телдә күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең барлыҡҡа килеүен тәбиғи һәм законлы күренеш тип, ә шул уҡ нигеҙҙә омонимдар яһалыуҙы кире күренеш тип ҡарап булмай. Телдә күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең барлыҡҡа килеүе тәбиғи һәм законлы булған кеүек, күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләре алыҫлашып, улар нигеҙендә омонимдар барлыҡҡа килеү ҙә шулай уҡ тәбиғи һәм законлы була.

2. Лексик омонимдар бер үк тамырға (нигеҙгә) омоним ялғауҙар (омоялғауҙар) ҡушыу юлы менән яһала: *башлыҡ* (баш кейеме) — *башлыҡ* (етәксе кеше), *баҫма* (ҡоролма) — *баҫма* (еп үлсәү берәмеге), *берлек* (берҙәмлек) — *берлек* (бер һумлыҡ аҡса), *иәймә* (йәйелгән ҡамыр) — *иәймә* (ниҙеңдер өҫтөнән йәйә торған нәмә), *күҙлек* (прибор) — *күҙлек* (битлек), *тәмәкесе* (тәмәке тартырға әүәҫләнгән кеше) — *тәмәкесе* (тәмәке үҫтереү эше менән шөғөлләнгән кеше) һ. б.

3. Лексик омонимдар бер үк һүҙгә күп мәғәнәле һүҙҙең төрлө мәғәнәләре ҡушылып та яһала: *аҡбаш* (үлән) — *аҡбаш* (шешәһенең ауыҙы тығын өҫтөнән аҡ сургуч менән ялатылған аҡ араҡы), *күкбаш* (үлән) — *күкбаш* (ҡош), *ҡарабаш* (ҡош) — *ҡарабаш* (үлән), *ҡарағанат* (ҡош) — *ҡарағанат* (балыҡ).

4. Һүҙҙең төҙөлөшө фонетик үҙгәрештәргә осрап һәм үҙенең һуңғы әйтелеше һәм яҙылышы менән быға тиклем үк шундай әйтелеп һәм яҙылып йөрөгән икенсе бер һүҙгә тап килеп, лексик омоним барлыҡҡа килергә мөмкин. Мәҫәлән, элек *аҫ* (йәнлек төрө) — *аҫ* (түбән тараф), *ат* (исем, атама) — *ат* (хайуан төрө), *ут* (үлән) — *ут* (ут яғыу) омонимдары булмаған, сөнки һәр иштең беренсе һүҙҙәрҙәге һуҙынҡылар оҙон һуҙынҡылар булып, һуҙып әйтелгән. Ләкин ваҡыттар үтеү менән уларҙың әйтелеше үҙгәреш кисергән: һуҙынҡы өндәр ҡыҫҡарып, был һүҙҙәр әйтелеше һәм яҙылышы менән быға тиклем телдә булған *аҫ* (түбән тараф), *ат* (хайуан төрө), *ут* (ут яғыу) һүҙҙәренең әйтелеше һәм яҙылышы менән тап килгән һәм шул арҡала *аҫ* (йәнлек төрө) — *аҫ* (түбән тараф), *ат* (исем, атама) — *ат* (хайуан төрө), *ут* (үлән) — *ут* (ут яғыу) лексик омонимдары яһалған. *Аяҡ* [адаҡ] (кәүҙә өлөшө атамаһы) — *аяҡ* [айаҡ] (һауыт төрө) лексик омонимы ла беренсе һүҙҙең фонетик үҙгәреш кисереүе — [д] өнөнөң [й] өнө менән сиратлашыуы — һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

5. Телдең үҙ һүҙҙәре әйтелеше һәм яҙылышы менән осраҡлы тап килеү һөҙөмтәһендә лә лексик омонимдар яһала: *ҡор* (ҡош) — *ҡор* (төркөм), *ҡуш* (беректереү) — *ҡуш* (бойороу), *саң* (туҙан) — *саң* (ҡыңғырау), *сар* (үткерләү ҡорамалы) — *сар* (йәнлектәр һуҡмағы), *төш* (кон үҙәге) — *төш* (йоҡола күргән төрлө күренеш), *яҙ* (төрлө график тамғалар төшөрөү) — *яҙ* (төҙ, тигеҙ хәлгә ҡайтарыу) — *яҙ* (мәхрүм булыу) һ. б.

6. Диалекталь һүҙҙәрҙең әҙәби телгә үтеп инеп, унда булған һүҙҙәрҙең әйтелеше менән яҙылышына тап килеү һөҙөмтәһендә лә лексик омонимдар яһала. Мәҫәлән, «тәртә» мәғәнәһендәге *арыш,* «ямау» мәғәнәһендәге *ашлама,* «ырыу» мәғәнәһендәге *баҙа,* «башҡаланыу» мәғәнәһендәге *башҡар,* «боҙлауыҡ» мәғәнәһендәге *борғаҡ,* «бырау» мәғәнәһендәге *борғо,* «билғау» мәғәнәһендәге *бута,* «бөрләтеү» мәғәнәһендәге *бутәгә,* «сағараҡ» мәғәнәһендәге *тағараҡ* һүҙҙәре диалекттарҙан әҙәби телгә килеп инеп, ундағы шундай үк

әйтелгән һәм яҙылған *арыш* (ашлыҡ төрө), *ашлама* (үҫемлектәрҙе туҡландырыу һәм уңышын күтәреү өсөн тупраҡҡа ҡушыла торған төрлө матдә), *баҙа* (ҡаушау), *башҡар* (бойомға ашырыу), *борғаҡ* (буранка), *борғо* (музыка ҡоралы), *бута* (дөйә балаһы), *бүтәгә* (үлән төрө), *тағараҡ* (ялғаш) һүҙҙәре менән лексик омонимдар яһаған: *арыш I — арыш II, ашлама I— ашлама II, баҙа I — баҙа II, башҡар I — башҡар II, борғаҡ I — борғаҡ II, борғо I — борғо II, бута I — бута II, бүтәгә I — бүтәгә II, тағараҡ I — тағараҡ II* һ. б.

7. Лексик омонимдар бер үк һүҙҙең төрлө мәғәнәләренә бер үк мәғәнәле ялғау йәки бер үк һүҙгә төрлө мәғәнәле ялғауҙар ҡушып та яһала: *арҡала* (йөкмәү) — *арҡала* (аралау), *асыҡлыҡ* (асыҡ ер) — *асыҡлыҡ* (аңлайышлыҡ), *баҫма* (ҡоролма) — *баҫма* (еп үлсәү берәмеге), *башлыҡ* (етәксе) — *башлыҡ* (баш кеше), *йөҙлөк* (аяҡта, аяҡ кейемендә) — *йөҙлөк* (урындыҡта), *өйөр* (бер ергә туплау) — *өйөр* (өйөрөлдөрөү), *ултырма* (тау тоҡомо) — *ултырма* (йыйын) һ. б.

8. Башҡорт телендә фонетик үҙгәрештәргә осраған үҙләштерелгән һүҙҙәр үҙҙәренең әйтелештәре һәм яҙылыштары менән телдәге быға тиклем булған һүҙҙәрҙең әйтелешенә һәм яҙылышына тап килеп, лексик омонимдар яһарға мөмкин: *бот* (*рус.* пуд) — *бот* (кәүҙә өлөшө тамғаһы), *бур* (*рус.* вор) — *бур* (аҡбур), *ҡомаҡ* (*рус.* хомяк) — *ҡомаҡ* (юшҡын), *һабаҡ* (*ғәр.* сабаҡ) — *һабаҡ* (үҫемлектәрҙең өҫкө өлөшө), *һеркә* (*фарс.* серкә) — *һеркә* (беттең йомортҡаһы) һ. б.

9. Үҙгәрешһеҙ үҙләштерелгән һүҙҙәр үҙҙәренең әйтелештәре һәм яҙылыштары менән төп башҡорт һүҙҙәренә тап килеп, лексик омонимдар яһала. Мәҫәлән, *ар* (йөҙ квадрат метрға тиғеҙ булған ер үлсәү берәмеге) — *ар* (удмурт халҡының әүәлге исеме), *бал* (ҙур танса кисәһе) — *бал* (ашамлыҡ), *май* (йылдың бишенсе айы) — *май* (ашамлыҡ), *талаҡ* (шәриғәт буйынса, ирҙәрҙең ҡатын айырыуы) — *талаҡ* (ағза) һ. б. Быңдағы иштәрҙең тәүге һүҙҙәре (компоненттары) сит телдәрҙән үҙләштерелгән: *ар* һәм *бал* — рус теле аша француз теленән, *май* — рус теле аша латин теленән, *талаҡ* — ғәрәп теленән.

10. Сит телдәрҙән әҙер лексик омонимдар үҙләштереү һөҙөмтәһендә лә лексик омонимдар барлыҡҡа килә: *актив* (коллективтың, ойошманың иң алдынғы эшмәкәр өлөшө) — *актив* (предприятие балансының бөтә байлыҡ һәм мөлкәтте

эсенә алған бер өлөшө), *лама* (будда монахы) — *лама* (хайуан), *нота* (музыкаль тауыштың шартлы билдәһе) — *нота* (дипломатик хат), *тур* (вальста) — *тур* (ҡырағай үгеҙ) һ. б.

Лексик-грамматик омонимдар ҙа төрлө юлдар менән яһала:

1. Диалекттарҙан килеп ингән һүҙҙәр үҙҙәренең әйтелеше һәм яҙылышы менән шундай уҡ әйтелешле һәм яҙылышлы әҙәби телдәге бапгка мәғәнәле һүҙҙәргә тап килеп, лексик-грамматик омонимдар яһалырға мөмкин. Мәҫәлән, диалекттарҙан алынған «ағын» мәғәнәһендәге *ағым*, «айыш» мәғәнәһендәге *аңыш*, «тығыҙ» мәгәнәһендәге *ҡат*, «табан» мәғәнәһендәге *ҡата*, «ҡорма» мәғәнәһендәге *ҡорғаҡ*, «табан» мәғәнәһендәге *таба*, «табан, тартым» мәғәнәһендәге *һалым* һүҙҙәре әҙәби телдәге «һыу, һауаның бер йүнәлешендәге хәрәкәте» мәғәнәһендәге *ағым*, «тиҙ генә аңлай, төшөнә алмаусан» мәғәнәһендәге *аңыш*, «аҫлы-өҫлө йәки йәнәш-йәнәш булған бер нисә нәмә һаны» мәғәнәһендәге *ҡат*, «күндән тәрән калуш һымаҡ итеп теккән боронғо аяҡ кейеме» мәғәнәһендәге *ҡата*, «бик ҡоро, үтә ҡыуан» мәғәнәһендәге *ҡорғаҡ*, «аҙыҡты утта ҡурыу, мейескә ултыртып бешереү өсөн ҡулланылган түңәрәк яҫы һауыт» мәғәнәһендәге *таба*, «берәр ойошманан, халыҡтан һ. б. алыу өсөн хөкүмәт тарафынан билдәләнгән түләм аҡса, йәки башҡа нәмә, яһаҡ» мәғәнәһендәге *һалым* һүҙҙәренә тап килеп, *ағым I — ағым II, аңыш I — аңыш II, ҡат I — ҡат II, ҡата I — ҡата II, ҡорғаҡ I — ҡорғаҡ II, таба I — таба II, һалым I — һалым II* лексик-грамматик омонимдары яһалған.

2. Лексик-грамматик омонимдар бер үк тамырға (нигеҙгә) омоним ялғауҙар ҡушып та яһала.

Лексик-грамматик омонимдар яһай торған ҡайһы бер омоним ялғауҙар:

а) исем яһаусы ***-лыҡ(-лек, -лоҡ, -лөк)*** һәм сифат яһаусы ***-лыҡ(-лек, -лоҡ, -лөк)*** ялғауҙары. Был омоним ялғауҙар бер генә тамыр һүҙгә ҡушылыуҙан омонимдаш яһалма ике һүҙ — исем менән сифат — яһала: *айлыҡ I — айлыҡ II.* Мәҫәлән: *1 октябрҙән Өфөлә юбилейға бағышланған театр* ***айлығы*** *уҙғарыласаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 26 август. *Ә ул иген һеҙгә барлығы бер* ***айлыҡ*** *аҙыҡ ҡына бит, ә артабан?* Һ. Дәүләтшина.

б) исем яһаусы ***-ма(-мә)*** һәм сифат яһаусы ***-ма(-мә)*** ялғауҙары. Был омоним ялғауҙар ҙа бер тамырҙан исем

менән сифат яһай: *ҡушма I — ҡушма II, өйөрмә I — өйөрмә II, һыҙма I — һыҙма II.* Мәҫәлән: *Аҡым кирәгә кейеҙен күтәреп, кирәгә* ***ҡушмаһының*** *ебен киҫә лә, эскә инеп, Шүрәлене уята.* Хикәйәттән. *Бер нисә һөйләмдән төҙөлгән һөйләм* ***ҡушма*** *һөйләм тип атала.* Ғ. Сәйетбатталов. *Бишенсе көн инде буран ҡотора. Ҡарлы* ***өйөрмә*** *шул тиклем көслө, хатта күршеләге йорттар ҙа күренмәй.* З. Хисмәтуллин. ***Өйөрмә*** *тал уртаһынан күгел өйрәк осто талпынып.* Ҡ. Даян. *Ул [художник] буласаҡ картинаның* ***һыҙмаһын*** *... сәнғәт институтының икенсе курсында уҡыған сағында уҡ эшләне.* «Ағиҙел», 1969, № 6. *Йәшел генә сана* ***һыҙма*** *тимер — һыҙҙырайыҡ урам буйына.* Халыҡ йырынан.

в) исем яһаусы ***-ым(-ем, -ом, -өм, -м)*** һәм сифат яһаусы ***-ым(-ем, -ом, -өм, -м)*** ялғауҙары. Был омоним ялғауҙар ҙа бер үк ҡылым тамырынан исем һәм сифат яһай: *бәйләм I — бәйләм II*. Мәҫәлән: *Гранаталар* ***бәйләменә*** *ҡушып, тыйып булмаҫ йөрәк тауышын [Билал] танк аҫтына ырғытты.* Х. Кәрим. *Артелдә ...* ***бәйләм*** *бейәләр генә дүрт өйөр ине.* Н. Мусин.

ғ) исем яһаусы ***-ын(-ен, -он, -өн, -н)*** һәм ҡылым яһаусы ***-ын(-ен, -он, -өн, -н)*** ялғауҙары. Был омоним ялғауҙар иһә бер үк тамырға ҡушылып исем менән ҡылым (йүнәлеш) яһай. Мәҫәлән: *Күк күкрәй, ер һелкенә,* ***ҡойондар*** *өйөрөлә.* З. Биишева. [*Һыуһылыу*:] *Был күл минең һарайым. Көн дә сығып* ***ҡойонам.*** «Заятүләк менән Һыуһылыу».

Омоним ялғауҙар бер тамырҙан булған һүҙҙәргә генә түгел, төрлө тамырҙан булған һүҙҙәргә ҡушылып та яһалма омонимдар яһарға мөмкин. Мәҫәлән, *сабын I* исеме «үҫеп ултырған үләнде йыйып алыр өсөн салғы йәки машина менән төптән ҡырҡыу» мәғәнәһендәге *сап* ҡылымынан яһалһа, *сабын II* ҡылымы «мунса эҫеһендә парланған миндек менән тәнгә һуғып-һуғып алыу» тигән мәғәнәле *сап* ҡылымынан яһалған. Шуның менән бергә был иштәрҙең омонимлығы ялғауҙарҙың омонимлығына ғына түгел, тамырҙарҙың омонимлығына ла нигеҙләнә.

3. Лексик-грамматик омонимдар осраҡлы рәүештә һүҙ яһалыу процесында ла тыуа, мәҫәлән: *арба* (исем) — *арба* (ҡылым), *арҡала* (ҡылым) — *арҡала* (бәйләүес), *көҙгө* (исем) — *көҙгө* (сифат), *көй* (исем) — *кой* (ҡылым), *күп* (рәүеш) — *күп* (ҡылым), *ҡап* (исем) — *ҡап* (ҡылым), *табан* (исем) — *табан* (бәйләүес), *туй* (исем) — *туй* (ҡылым), *үт*

(исем) — *үт* (ҡылым), *һал* (исем) — *һал* (ҡылым), *эт* (исем) — *эт* (ҡылым), *яра* (исем) — *яра* (ҡылым) һ. б.

4. Лексик-грамматик омонимдар полисемия, йәғни һүҙҙең күпмәғәнәлелеге, тарҡалыу ерлегендә барлыҡҡа килә: *күс* (урын алыштырыу) — *күс* (бал ҡортоноң гаиләһе), *ҡун* (йоҡлап сығыу) — *ҡун* (осоп килеп ултырыу), *туң* (һыуыҡҡа ҡатыу) — *туң* (ниҙеңдер һыуыҡҡа ҡатҡан хәле), *үт* (уҙыу) — *үт* (яҡшы ҡырҡыу йәки телеү), *һыры* (тегеү) — *һыры* (йәбешеү, уратыу) һ. б.

5. Һүҙ бер һүҙ төркөмөнән икенсе һүҙ төркөмөнә күскәндә лә лексик-грамматик омонимдар яһала: *алда* (рәүеш) — *алда* (бәйләүес), *бөркөү* (ҡылым) — *бөркөү* (сифат), *күк* (сифат) — *күк* (исем), *ҡара* (сифат) — *ҡара* (исем), *ҡарт* (сифат) — *ҡарт* (исем), *ҡырҡыу* (ҡылым) — *ҡырҡыу* (сифат) һ. б.

6. Лексик-грамматик омонимдар телдең үҙ һүҙҙәре менән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ауаздашлығы арҡаһында барлыҡҡа килә, мәҫәлән: рус теле аша инглиз теленән үҙләштерелгән «бәләкәй ресторан» мәғәнәһендәге *бар* һүҙе, гәрәп теленән үҙләштерелгән «күп халыҡлы урын» мәғәнәле *ҡала* һәм «намаҙ» мәғәнәле *сала* һүҙҙәре әйтелештәре һәм яҙылыштары менән башҡорт теленең ярашлы рәүештә *бар* (мөнәсәбәт һүҙ), *ҡала* (бәйләүес), *сала* (сифат) һүҙҙәренә тап килеп, лексик-грамматик омонимдар яһалған һ. б.

7. Лексик-грамматик омоним төҙөүсе компоненттарҙың барыһы ла үҙләштерелгән һүҙ булырға мөмкин. Мәҫәлән, *дана* (бөртөк, экземпляр) — *дана* (уҡымышлы, белемле, аңлы) лексик-грамматик омонимы төҙөүсе компоненттарҙың икеһе лә фарсы теленән, *саф* (таҙа) — *саф* (рәт һәм шул рәтте төҙөгән төрком) лексик-грамматик омонимын төҙөүсе компоненттарҙың икеһе лә гәрәп теленән алынған. *Актив* (предприятие балансының бөтә байлыҡ һәм мөлкәтте эсенә алған бер өлөшө) — *актив* (эшкә ихлас; алдын, эшмәкәр) лексик-грамматик омонимын төҙөүсе компоненттарҙың тәүгеһе рус теле аша латин теленән алынһа, икенсеһе рус теленең *активный* сифатын «ҡырҡып» үҙләштерелгән һүҙ.

8. Лексик-грамматик омонимдар телдең тарихи үҫеш һөҙөмтәһе булараҡ та барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, *углан, олан* һүҙҙәре *ул* формаһына әйләнгән һәм *ул* зат алмашы менән лексик-грамматик омоним төҙөгән; *барғыл, барың, барғай* формаларындағы ялғауҙар төшөп ҡалып, *бар* ҡылымы *бар* мөнәсәбәт һүҙенә лексик-грамматик омоним булып киткән.

*Беҙ* (исем) — *беҙ* (алмаш) лексик-грамматик омонимы ла фонетик үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә яһалған: ҡорал мәғәнәһендәге *беҙ* һүҙе элекке *бегиз*, ә *беҙ* зат алмашы элекке *би* (мин) һүҙенә *-з* (ҙ) күплек ялғауы ҡушыуҙан барлыҡҡа килгән һ. б.

Башҡорт телендә омофон төҙөүсе һүҙҙәрҙең грамматик формалары оҡшаш булырға ла, оҡшаш булмаҫҡа ла мөмкин. Мәҫәлән, *ҡарлуғас* (ҡош исеме) — *Ҡарлуғас* (ҡатын-ҡыҙ исеме) омофонын төҙөүсе компоненттар үҙ-ара оҡшаш грамматик формала тап килгән: икеһе лә улар берлектәге төп килеш формаһында тора. Ә *ғәзиз* (сифат) — *Ғәзиз* (ир-ат исеме) омофонын төҙөүсе компоненттарҙың грамматик формалары оҡшаш түгел: беренсеһе уларҙың төп формалағы сифат һүҙ, икенсеһе берлектә торған төп килештәге исем һүҙ.

Башҡорт телендәге омофондарҙың күбеһе уртаҡлыҡ исемдәрҙең йәки сифаттарҙың яңғыҙлыҡ исем итеп ҡулланылыуынан яһала: *дәүләт* (уртаҡлыҡ исем) — *Дәүләт* (яңғыҙлыҡ исем), *зифа* (сифат) — *Зифа* (яңғыҙлыҡ исем) һ. б. Омофондар араһында үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең әйтелеше төп башҡорт һүҙҙәренең әйтелешенә тап килеп яһалғандары ла бар: *балл* (берәй тәбиғәт күренешенең көсөн, ҡеүәтен үлсәү берәмеге) — *бал* (ҡорттоң сәскә һутынан йыйып яһаған татлы ҡуйы матдәһе) һ. б.

Омофондар рәтенә компоненттарының береһе ботөн һүҙ, ә икенсеһе һүҙбәйләнеш йәки һүҙҙәр теҙмәһе булған күренештәрҙе лә индерәләр, мәҫәлән: *Алтай — алты ай, балауыҙ — бал ауыҙ, бишбармаҡ — биш бармаҡ, ҙурайыу — ҙур айыу, ҙурат — ҙур ат, иҫкермәү — иҫ кермәү, ҡартайыу — ҡарт айыу, таралыу — тары алыу, тарҡалыу — тар ҡалыу* һ. б.

Төп башҡорт һүҙҙәре араһында үҙҙәренең башланғыс формаларында тап килешкән бер генә омограф иш бар: *барлыҡ* (исем) — *барлыҡ* (билдәләү алмашы). Ҡалған омограф төҙөүсе һүҙҙәрҙең йә береһе генә башланғыс формала тора, йә береһе лә башланғыс формала булмай, мәҫәлән: *айырма* (исем) — *айырма* (ҡылым), *аҡлама* (исем) — *аҡлама* (ҡылым), *алынма* (сифат) — *алынма* (ҡылым), *башҡарма* (сифат) — *башҡарма* (ҡылым); *атығыҙ* (исем) — *атығыҙ* (ҡылым), *һалығыҙ* (исем) — *һалығыҙ* (ҡылым).

Башҡорт телендә омографтар түбәндәге юлдар менән яһала:

- 19828 -
Акъяр... 
средняя школа № 1
БИБЛИОТЕКА

1. Бер үк ҡылым тамырына (нигеҙенә) *-ма (-мә)* омограф ялғауҙары ҡупып: *аңлатма́* (исем) — *аңлатма* (ҡылым), *асыҡлама* (исем) — *асыҡлама* (ҡылым), *күсмә* (сифат) — *күсмә* (ҡылым), *ҡаҙылма* (сифат) — *ҡаҙылма* (ҡылым) һ. б.

2. Үҙҙәренең башланғыс формаларында лексик-грамматик омоним төҙөүсе иштәргә *-ығыҙ ( егеҙ, -оғоҙ, -өгөҙ)* омограф ялғауҙары ҡушыла: *өйөгө́ҙ* (исем) — *өйөгөҙ* (ҡылым), *уйығыҙ* (исем) — *уйығыҙ* (ҡылым), *этеге́ҙ* (исем) — *этегеҙ* (ҡылым) һ. б.

3. Үҙҙәренең башланғыс формаларында лексик-грамматик омоним төҙоүсе ҡайһы бер иштәргә *-сы ( се, -со, -сө)* ялғауы һәм *-сы (-се, -со, -со)* киҫәксәһе ҡушып: *итсе́* (исем) — *и́тсе* (ҡылым), *ҡуйсы* (исем) — *ҡуйсы* (ҡылым), *һалсы* (исем) — *һалсы* (ҡылым) һ. б.

4. Бер үк тамырға (нигеҙгә) һүҙ яһаусы *-сы (-се, -со, -со)* ялғауы менән *-сы (-се, -со, -со)* киҫәксәһе ҡушып: *тамсы* (исем) — *тамсы* (ҡылым), *ташсы* (исем) — *ташсы* (*-сы* киҫәксәле исем), *һабансы* (исем) — *һабансы* (*-сы* киҫәксәле исем) һ. б.

5. Сит телдәрҙән әҙер омографтар үҙләштереп: *замок* (феодал һарайы һәм уны уратып алған ҡәлғә) — *замо́к* (туп көбәгенә йәҙрәне биклəп ата торған механизм), *ирис* (баҡса гөлө) — *ирис* (кәнфит төрө), *орган* (ойошма) — *орган* (музыка ҡоралы) һ. б.

6. Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең яҙылышы топ башҡорт һүҙҙәренең яҙылышы менән тап килеп: *бит* (информация күләмен үлсәү берәмеге) — *бит* (кеше башының алғы яғы), *бор* (химик элемент) — *бор* (ҡылым тамыры), *кит* (диңгеҙ хайуаны) — *кит* (ҡылым тамыры), *тик* (ағас төрө) — *тик* (теркәүес), *тип* (өлгө, төр) — *тип* (ҡылым тамыры), *тир* (атырға өйрәнә торған урын) — *тир* (тире аҫтындағы махсус биҙҙәрҙән сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк һыу), *тире* (һыҙыҡ) — *тире* (кеше, йәнлек, ҡош тәнен көп булып тыштан ҡаплаған ҡатлам), *тол* (шартлатҡыс матдә) — *тол* (ире йәки ҡатыны үлеп, яңғыҙ ҡалған), *том* (әҫәр йәки баҫманың айырым китаптан торған өлөшө) — *том* (дауа), *тон* (билдәле бер юғарылыҡтағы музыкаль тауыш) — *тон* (ҡылым тамыры) һ. б.

7. Рус теленән йәки рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән исем һүҙҙәрҙең яҙылышына шулай уҡ рус теленән йәки рус теле аша башҡа телдәрҙән «ҡырҡып»

үҙләштерелгән сифат һүҙҙәрҙең яҙылышы тап килеп: *комик* (исем) — *комик* (сифат), *косметик* (исем) — *косметик* (сифат), *критик* (исем) — *критик* (сифат), *лирик* (исем) — *лирик* (сифат) һ. б.

Шулай итеп, башҡорт телендә лексик омонимдар ҙа, лексик-грамматик омонимдар ҙа, ғрамматик омонимдар ҙа, омофондар ҙа, омографтар ҙа йыш осрай. Яһалыштары ла уларҙың күп төрлө.

Айырым торғанда омонимы булған һүҙҙең мәғәнәһен асыҡ, дөрөҫ билдәләп булмаһа ла, контекст эсендә уның мәғәнәһе бер ниндәй буталсыҡ тыуҙырмай. Шуға күрә омонимдар телде ҡыйлай, аралашыуҙы ҡыйынлаштыра тигән ҡараш менән килешеп булмай.

# ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ ҺӘМ ФАЙҘАЛАНЫУ ТӘРТИБЕ

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

1. Һүҙлеккә баш һүҙ булып ингән бөтә һүҙҙәр алфавит тәртибендә бирелде.

2. Омонимы булган киҫәксәләрҙең төп һүҙе эргәһенә түңәрәк йәйә эсендә омонимы булған варианты күрһәтелде, мәҫәлән:

**кенә (ҡына) I** *киҫ.* ...

**ҡына (кенә) III** *киҫ.* ...

3. Омонимдар рим цифрҙары менән билдәләнеп, һәр ҡайһыһы баш һүҙ итеп алынды, мәҫәлән:

**ала I** *с.* Аҡ менән ҡара йәки башҡа төҫ аралаш ...

**ала II** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, «тәңгәл», «тотош» тигән мәғәнә бирә ...

**ат I** *и.* 1. Йомро тояҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, яллы эре йорт хайуаны...

**ат II** *и.* Кешегә ҡушылған исем ...

## ҺҮҘЛЕК СТАТЬЯҺЫНЫҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

4. Һүҙлек статьяһында һүҙ тураһында мәғлүмәт бирелә.

Баш һүҙ яңы юлдан ярым ҡалын бәләкәй хәреф менән баҫыла. Баш һүҙҙән һуң квадрат йәйә эсендә сит телдән ингән һүҙҙәргә этимологик белешмә бирелә. Артабан тейешле билдәләр менән (*бәйл., и., киҫ., биол., һөйл.* һ. б.) грамматик һәм стилистик баһа бирелә.

Һүҙлек статьяһының төп эстәлеген һүҙҙең мәғәнәләрен аңлатыу һәм һәр мәғәнәне иллюстрациялаған миҫалдар тәшкил итә. Аңлатманан һуң һүҙбәйләнештәр бирелде.

Ундай һүҙбәйләнештәр менән сығанаҡлы миҫалдар араһына дүрткел аҡ билдә (▬) ҡуйылды, мәҫәлән:

**баҙыҡ I** *с.* 1. Тулы көскә эйә; ныҡ, елле. ***Баҙыҡ** бағана.* ***Баҙыҡ** имән.* **Баҙыҡ** таш. ***Баҙыҡ** теш.* ▬ [*Ғариф*] *өй башына менеп, ... иҫке булһа ла әле **баҙыҡ** ҡына бер ыңғырсаҡ тапты.* Б. Бикбай.

Һүҙ күп мәғәнәлә булганда, һәр мәғәнәһе гәрәп цифрҙары менән билдәләнеп, юл башынан бирелә, мәҫәлән:

**аяҡ I** *и.* 1. Кешенең, ҡош-ҡорттарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың баҫып йөрөү өсөн хеҙмәт итә торган ағзаһы. *Уң **аяҡ**. Һул **аяҡ**...*

2. Ултыртмалы нәмәләрҙең аҫтагы терәге; тояҡ. *Өҫтәл **аягы**. Ултыргыс **аягы**.*

5. Сит телдәрҙән ингән һүҙҙәргә баш һүҙҙән һуң квадрат йәйәләр эсендә уларҙың сығанаҡ теле күрһәтелә. Рус теленән һәм уның аша башҡа телдәрҙән русса яҙылышында үҙләштерелгән һүҙҙәргә башта *рус.* тигән билдә ҡуйылып, һуңынан тәүге сыганагы бирелде, мәҫәлән:

**аккорд I** [*рус.* < *ит.*] *и.* ...

**бал II** [*рус.* < *фр.*] *и.* ...

**гранат I** [*рус.* < *лат.*] *и.* ...

6. Башҡорт теленә рус теленән һәм уның аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелеп, фонетик үҙгәрештәр кисергән һүҙҙәргә этимологик белешмә менән бергә русса яҙылышы ла бирелде, мәҫәлән:

**дан II** [*рус.* дань] *и.* ...

**душ II** [*рус.* душа] *и.* ...

**күсер I** [*рус.* кучер < *нем.*] *и.* ...

**мөшкәт I** [*рус.* мускатник] *и.* ...

**мөшкәт II** [*рус.* мускат < *фр.*] *и.* ...

7. Һүҙҙең мәғәнәһе уны мөмкин тиклем ҡыҫҡа һәм аныгк аңлатыу юлы менән асып бирелде, мәҫәлән:

**аҙман I** *и.* Эре һагыҙаҡ. ...

**аҙман II** *с.* 1. Өйҙә тормай, аҙып-туҙып йөрөүсән. ...

2. Төрлө тоҡом ҡатнашҡандан килеп сыҡҡан (малға ҡарата). ...

8. Һүҙлектә һүҙҙәрҙең хәҙерге башҡорт телендә киң ҡулланылған мәғәнәләре бирелде.

9. Аңлатыла торған һүҙҙең синонимдары булған осраҡтарҙа, улар аңлатма бирел бөткәндән һуң, нөктәле өтөр аша һүҙгә өҫтәмә характеристика рәүешендә килтерелде, мәҫәлән:

**кран I** [*рус.* < *гол.*] *и.* 1. Һауыттан шыйыҡлыҡ йәки газ алыу өсөн хеҙмәт иткән бороп бикләнмәле трубка; һемәк. ...

**күбә II** *и. иҫк.* Боронго батырҙарҙың уҡ үтмәҫлек тимер кейеме; ҡояҡ. ...

10. Һөйләү телендә, диалекттарҙа, шулай уҡ айырым стилдәрҙә генә ҡулланылган һүҙҙәр әҙәби телдә йөрөгән һүҙҙәр ярҙамында билдәләнде, мәҫәлән:

**ағым II** *с. диал.* Агын.

**буҙ II** *и. иҫк.* Ыласын.

11. Күсмә мәғәнә *күсм.* билдәһе менән баш һүҙҙен артынан уҡ башҡа билдәләрҙән алда ҡуйылды, мәҫәлән:

**баҫым I** *и.* 1. ...

3. *күсм.* Кешенең көсөн, ихтыярын баҫыу өсөн яһалған тышҡы тәьҫир; ҡыҫым. ...

**битлек I** *и.* 1. ...

2. *күсм.* Кемдеңдер ысын йөҙөн йәшереп торған хәйлә, алдыҡ. ...

12. Терминдарға, ҡорал-ҡорамалды белдергән һүҙҙәргә, шулай уҡ үҫемлек, хайуан, ҡош-ҡорт, матдә һ. б. шундайҙарҙың атамаларына ҡыҫҡаса характеристика төшөнсәне асыҡлау йәки нәмәнең, матдәнең һ. б. үҙен тасуирлау юлы менән бирелде, мәҫәлән:

**аҡбаш I** *и.* Роза сәскәләр ғаиләһенә ҡараған, аҡ йәки ал төҫтәге ойҡаш сәскәле, ҡауырһын япраҡлы уйһыу ер үләне. ...

**ҡарағош I** *и.* Ҡарсығалар гаиләһенә ҡараған, бөркөттән бәләкәйерәк ҡара йыртҡыс ҡош (агас башына оялай). ...

13. Һүҙҙең антонимы *киреһе* тигән билдә менән аңлатманан һуң өҫтәмә характеристика рәүешендә бирелде, мәҫәлән:

**аҡ I** *с.* 1. Ҡар, һөт төҫөндәге; *киреһе* ҡара. ...

14. Һүҙҙең мәғәнәһе ниндәйҙер шарттар менән сикләнгән булһа, улар төрлө билдәләр ярҙамында һәм һүҙҙең аңлатмаларында бирелә торған асыҡлау юлы менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**сираҡ II** *с.* Ныҡ, тығыҙ ишелгән, ҡаты боролған (бау, епкә ҡарата). ...

15. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләренә бирелгән аңлатмаларҙан һуң миҫалдар килтерелә. Улар һүҙҙең телмәрҙә ҡулланылышын күрһәтеү, аңлатманы тулыландырыу, шулай уҡ уны грамматик һәм стилистик йәһәттән асыу өсөн бирелде. Ошо маҡсаттан сығып, ҡайһы бер үҙенсәлекле диалект һүҙҙәренә лә миҫалдар алынды.

16. Миҫал рәүешендә килтерелгән цитаталар баҫма сығанаҡтарҙан — әҙәби әҫәрҙәрҙән, халыҡ ижадынан, журналдарҙан һәм «Совет Башҡортостаны» гәзитенән алынды. Цитатаның һуңында уның сығанағы йәки әҫәрҙең авторы күрһәтелде.

17. Оҙон цитаталар, эстәлегенә зыян килтермәҫлек итеп, ҡыҫҡартып алынды. Ҡыҫҡартмалар һөйләм уртаһына тура килгәндә, алып ташланган һүҙҙәр урынына өс нөктә (...) ҡуйылды. Ә ҡыҫҡартыу һөйләмдең башында йәки аҙағында булганда, бер ниндәй ҙә билдә менән күрһәтелмәне.

18. Һөйләмгә һүҙҙең кем тарафынан әйтелгәнен, эш-хәрәкәттең кем тарафынан башҡарылганын күрһәткән, йәки һүҙ кем, нәмә тураһында барганын, асыҡлаган һүҙҙәр индерелгәндә, улар квадрат йәйә эсендә бирелде.

## ҺҮҘҘӘРГӘ ГРАММАТИК ХАРАКТЕРИСТИКА

19. Һүҙҙәрҙе ғрамматик яҡтан тасуирлау һүҙлектәрҙә ҡабул ителгән махсус билдәләр ярҙамында башҡарылды.

20. Грамматик билдәләр менән һүҙҙең ҡайһы төркөмгә ҡарағанлыгы күрһәтелде.

21. Исемдәр берлек формаһында төп килештә бирелде.

22. Сифаттар төп дәрәжә формаһында бирелде.

23. Һан төркөмсәләре грамматик билдәләр менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**йөҙ II** *төп һ.* ...

**ҡырҡ I** *төп һ.* ...

24. Алмаш төрҙәре грамматик билдәләр менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**ни I** *һор. а.* ...

**ул II** *зат а.* ...

25. Ҡылымдар башлангыс (тамыр йәки нигеҙ) формала алынып, аңлатма исем ҡылым формаһында бирелде, мәҫәлән:

**ал II** *ҡ.* 1. Ҡул (йәки сәнске һ. б. нәмә) менән тотоп үҙеңә ҡабул итеү. ...

**аша I** *ҡ.* Туҡлыҡ өсөн аҙыҡ йотоу; аҙыҡланыу, туҡланыу. ...

26. Рәүештәрҙең семантик төркөмсәләре айырым күрһәтелмәй, *р.* билдәһе менән генә бирелә, мәҫәлән:

**аҙ I** *р.* Һаны, күләме гәҙәттәгенән кәм; кәм һанда, күләмдә. ...

**алда I** *р.* Йөҙ, күҙ ҡараған яҡта. ...

27. Ярҙамлыҡ һүҙҙәр грамматик билдә менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**алда II** *бәйл.* ...

**йә I** [*фарс.*] *терк.* ...

**ҡына (кенә) II** *киҫ.* ...

28. Ымлыҡтар *ымл.* билдәһе менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**ай III** *ымл.* ...

29. Модаль, мөнәсәбәт һүҙҙәр *мөн.* билдәһе менән күрһәтелде, мәҫәлән:

**бар I** *мөн.* ...

30. Оҡшатыу һүҙҙәре *оҡш.* билдәһе менән бирелде, мәҫәлән:

**кап II** *оҡш.* ...

**ҡыңғыр II** *оҡш.* ...

31. Стилистик билдәләр (*диал., дини, иҫк., кит* һ. б.) грамматик билдәләрҙән һуң ҡуйылды, мәҫәлән:

**алағанат I** *и., һөйл.* ...

**аңыш II** *и. диал.* ...

**ҡырғы II** *с. иҫк.* ...

**парса II** [*фарс.*] *и. кит.* ...

32. Фән, техника, сәнғәт һ. б. айырым бер эш өлкәһенә ҡараған термин һүҙҙәр шулай уҡ стилистик билдә менән бирелде, мәҫәлән:

**вал II** [*рус.*] *и. тех.*

**көйә I** *и. зоол.* ...

**ҡушылдыҡ II** *и. мат.*

## ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ҺҮҘЛЕКТӘР ИСЕМЛЕГЕ


*Аҙнағолов Р. Ғ.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. Өфө, 1998.

*Ахманова О. С.* Словарь омонимов русского языка. М., 1974.

*Ахтямов М. Х.* Обратный словарь башкирского языка. Уфа, 1999.

Башкирско-русский словарь. М., 1958.

Баиґкорт теленең диалекттары һүҙлеге. Өфө, 2002.

Башҡорт теленең һүҙлеге: 2 томда. М., 1993.

Башҡортса-русса һүҙлек. М., 1996.

*Белбаева М.* Ҡаҙаҡ теленең омонимдар һүҙлеге (ҡаҙаҡ телендә). Алматы, 1988.

Древнетюркский словарь. Л., 1969.

Словарь иностранных слов. М., 1964.

Словарь русского языка: в 3 т.М., 1957—1961.

Татар теленең аңлатмалы сүзлеге: 3 томда. Казан, 1977—1981.

*Тышлер И. С.* Словарь лексических и лексико-грамматических омонимов современного английского языка. Саратов, 1975.

*Ураҡсин З. Ғ.* Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. Өфө, 1996.

*Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге. Өфө, 1987.

*Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең грамматика һүҙлеге. Өфө, 1994.

*Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең морфемалар һүҙлеге. Өфө, 1992.

*Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең омонимдар һүҙлеге. Өфө, 1966.

*Әхтәмов М. Х.* Омонимдар һүҙлеге. Өфө, 1986.

*Әхтәмов М. Х.* Әсә. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Һүҙлек. Өфө, 2002.

*Әхтәмов А. М.*, Әхтәмов М. Х. Һынамыштар. Һүҙлек. Өфө, 2002.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

| | |
|---|---|
| *а.* | алмаш |
| *анат.* | анатомия |
| *астр.* | астрономия |
| *билд.* | билдәләү (алмашы) |
| *билдһ.* | билдәһеҙлек (алмашы) |
| *биол.* | биология |
| *бухг.* | бухгалтерия |
| *бәйл.* | бәйләүес |
| *геол.* | геология |
| *гол.* | голланд (һүҙе) |
| *гр.* | грек (һүҙе) |
| *грам.* | грамматика |
| *ғәр.* | ғәрәп (һүҙе) |
| *диал.* | диалекталь (һүҙ) |
| *дини* | дини (һүҙ) |
| *диңг.* | диңгеҙселек (термин) |
| *зат.* | зат (алмашы) |
| *зоол.* | зоология |
| *и.* | исем |
| *ингл.* | инглиз (һүҙе) |
| *инш.* | инеш (һүҙ) |
| *ирк.* | иркәләү (формаһы йәки мәғәнәһендә) |
| *иҫк.* | иҫкергән (һүҙ) |
| *ит.* | итальян (һүҙе) |
| *йыйн.* | йыйнау (мәғәнәһендә) |
| *киҫ.* | киҫәксә |
| *кит.* | китап (телендәге һүҙ) |
| *күпл.* | күплек (формаһында) |
| *клш.* | килеш |
| *күрһ.* | күрһәтеү (алмашы) |
| *күсм.* | күсмә (мәғәнәлә) |
| *ҡ.* | ҡылым |
| *лат.* | латин (һүҙе) |
| *лингв.* | лингвистика |
| *мат.* | математика |
| *махс.* | махсус (термин) |
| *мед.* | медицина |
| *мөн.* | мөнәсәбәтле, модаль (һүҙ) |
| *муз.* | музыка |
| *нем.* | немец (һүҙе) |
| *оҡш.* | оҡшатыу (һүҙе) |
| *р.* | рәүеш |
| *рус.* | рус (һүҙе) |
| *рәт* | рәт (һаны) |
| *с.* | сифат |
| *сығ.* | сығанаҡ (килеш) |
| *тар.* | тарихи (һүҙ) |
| *терк.* | теркәүес |
| *тех.* | техника |
| *төб.* | төбәү (килеш) |
| *туҡ.* | туҡыу (әше термины) |
| *у.-в.* | урын-ваҡыт (килеш) |
| *фарс.* | фарсы (һүҙе) |
| *физ.* | физика |
| *физиол.* | физиология |
| *филос.* | философик (термин) |
| *фр.* | француз (һүҙе) |
| *хим.* | химия |
| *хәрби* | хәрби (термин) |
| *һ.* | һан |
| *һ. б.* | һәм башҡалар |
| *һор.* | һорау (алмашы) |
| *һөйл.* | һөйләү (телендәге һүҙ) |
| *ымл.* | ымлыҡ |
| *этн.* | этнография |
| *ярҙ.* | ярҙамлыҡ (ҡылым) |

## ШАРТЛЫ БИЛДӘЛӘР

■■■ миҫал итеп килтерелгән һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәрҙе айырған билге

... һөйләмдәге ҡыҫҡартмалар

# Һүҙлек

## БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

| | | |
|---|---|---|
| Аа | Ҡҡ | Фф |
| Бб | Лл | Хх |
| Вв | Мм | Һһ |
| Гг | Нн | Цц |
| Ғғ | Ңң | Чч |
| Дд | Оо | Шш |
| Ҙҙ | Өө | Щщ |
| Ее | Пп | Ъъ |
| Ёё | Рр | Ыы |
| Жж | Сс | Ьь |
| Зз | Ҫҫ | Ээ |
| Ии | Тт | Әә |
| Йй | Уу | Юю |
| Кк | Үү | Яя |

# А

**абау I** *и. иçк.* Эс майын иретеп майын алгандан һуң иремәй ҡалған ҡалдығы; һыҙлыҡ. *Ауыҙыңа **абауҙың** кергәне — ҡарыйлыҡтың билдәһе.* Ҡобайырҙан.

**абау II** *ымл.* 1. Ҡурҡып, һиçкәнеп киткәндә әйтелә. ***Абау**, аяҡ аçтына һыу сыҡҡан.* Һөйләү теленән.

2. Мыçҡыл итеүзе белдергәндә әйтелә. — ***Абау**, эшем кешеһе Йәнтимер, йыуан менән ҡыçҡа араһында әллә кем булып ултыра.* С. Агиш.

3. Аяп, иркәләгәнде белдергәндә әйтелә. [*Миңлекәй*:] ***Абау**, ҡыҙым, һағындыңмы? Әиҙә, мин һиңә ниҙәр алып ҡайттым. Әиҙә, ҡыҙым!* Һ. Дәүләтшина.

**аванғард I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Ғәскәрҙең йәки флоттың төп көстәрҙән алда бара торған отряды. *Ҡыҙыл ракетаның һауаға күтәрелеүе булды, дивизияның **авангарды** — 275-се полктың һалдаттары һәм командирҙары ... ауыл янына барып та сыҡтылар.* Ә. Ихсан.

**аванғард II** [*рус.* авангардный] *с.* Алдынғы. *Совет йәмғиәтендә эшселәр синыфы **авангард** урын алып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 февраль.

**ағар II** *с.* Туҡтауһыҙ ағып ятҡан, аға торған. ***Агар** күл. **Агар** һыу.*

**ағар II** *ҡ.* 1. Аҡ төçкә инеү. *Арыштан ҡалмай, бойҙай менән һоло **агарып** етеп килә.* М. Кәрим.

2. *күсм.* Яҡшырыу, һәйбәтләнеү (тормошҡа ҡарата). *Заманға заман уралған, берәү бәхетен бере алған. Алғандың көнө **агарган**, алмағандың — ҡаралған.* Ҡобайырҙан.

**ағым I** *и.* 1. Һыу, һауаның бер йүнәлешендәге хәрәкәте. *Түбәнге **ағым**. Һауа **ағымы**.* ▬ *Ағиҙелдең **ағымын** күргәндә һеҙҙе һағынып йырҙар яҙырмын.* Д. Юлтый.

2. Ижтимағи-политик йәки әҙәби йүнәлеш. *Әҙәби ағым.* ▬ [*Казаков*:] *Бер **ағым**, бер группаға ла монополлекте бирергә ярамай. Дәүергә яраҡлы стиль табылыр, ләкин икенсе метод менән табылыр.* С. Агиш.

3. Бер йүнәлештәге талғын хәрәкәт (болот, күк есемдәренә ҡарата). *Болоттар **ағымы**.*

4. Күмәк төркөмдөң бер йүнәлештәге хәрәкәте. *Халыҡ **ағымы**.* ▬ *Кешеләр **ағымы** шаулап аҡҡан саҡта, һин урамдан үттең бик уйсан.* Ғ. Амантай.

5. *күсм.* Бер эш-хәлдең барышы; *ағыш.* [*Айбулаттың*] *шоморт ҡара күҙҙәре кешегә тура ҡарай, үҙенең фекер **ағымына** ҡарап, бер йылы нур ала, бер ут уйнатып яна.* Һ. Дәүләтшина.

**ағым II** *с. диал.* Ағып ятҡан, аҡҡан (һыуға ҡарата); ағын. ***Ағым** һыуҙы ат кисер, ауыр көндө ир кисер.* Мәҡәл.

**аҙ I** *р.* 1. Һаны, күләме ғәҙәттәгенән кәм, кәм һанда, күләмдә. ***Аҙ** белеү. **Аҙ** күреү. **Аҙ** һөйләү.* ▬ *Мин башты **аҙ** ғына күтәреп ҡараным һәм бөтөнләй аптырап киттем.* С. Агиш. *Аҙамат ирҙең билдәһе — **аҙ** һөйләр ҙә, күп тыңлар, арғымаҡ аттың билдәһе — **аҙ** уртлар ҙа күп юшар.* Мәҡәл.

2. Сағыштырмаса дауамы ҡыҫҡа. ***Аҙ** йәшәү. **Аҙ** тороу.*

**аҙ II** *ҡ.* 1. Өйҙә тормай, ауыл араһында, ситтә йөрөү (кешегә, малға ҡарата). [*Батша*:] *Минең ун һыйырым бар ине. Шулар, бына йыл тула инде, ҡураға ҡайтмай, мөстәнләнеп **аҙып** йөрөй.* Әкиәттән.

2. Бер ергә лә ерекмәй, төрлө ерҙә йөрөү. *Мин илдән **аҙған** бер етем. Өсөнсө кон инде шыр урманда юл таба алмай йөрөп интектем.* Б. Вәлит.

3. Әхлаҡ-тәртип ҡағиҙәләрен тотмау, тәртипһеҙгә әйләнеү; боҙолоу. — *Эй ғүмеркәйҙәр, ахыры заман яҡындыр инде. Шулай булмаһа, халыҡ был тиклем **аҙмаҫ** ине,* — *тип зарланырға тотондо* [*ҡортҡа*]. Т. Йәнәби.

4. Боҙолоп, шешеп китеү (тәнгә ҡарата). — *Бынау бала тубығын ташҡа һыҙырғайны, **аҙған** да киткән.* Һөйләү теленән.

**аҙаҡ I** *и.* 1. Билдәле бер ваҡыттың, миҙгелдең, эш-хәлдең йәки берәй нәмәнең бөтөп йәки тамамланып барған өлөшө. *Йыл **аҙағы**. Йәй **аҙағы**. Көн **аҙағы**. Эш **аҙағы**.*

2. Эш-хәлдең һөҙөмтәһе, һуңынан килеп сыҡҡан шауҡымы; эҙемтә. — *Хупъямал, ҡара, арҡыры төшә торған булһаң, **аҙағы** насар булыр.* Һ. Дәүләтшина. *Һүҙҙең башынан элек **аҙағын** уйла.* Әйтем.

**аҙаҡ II** *р.* Бер ни тиклем ваҡыт үткәс; һуңыраҡ. ***Аҙаҡ** улар ҡайтып китте аманлашып, батырҙарға төшкән эште тамамлашып.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**аҙаҡ III** *бәйл.* Берәй эш булғас, шунан һуң. *Яуҙан **аҙаҡ** йоҙроҡ күтәргән.* Әйтем.

**аҙан I** [*ғәр.*] *и. дини.* Намаҙға саҡырғанда йәки балаға исем ҡушҡанда әйтелә торған ҡыҫҡа доға; тәкбир. *Иртәнге **аҙан**. Киске **аҙан**.* ▬ *Мәзин ҡарт **аҙан** әйтергә тип ике ҡулы менән ҡолаҡтарын ғына тотҡайны, ауыл яғынан председатель... менән бер нисә кеше килеп сыҡты.* А. Карнай.

**аҙан II** *ҡ. диал.* Ни эшләргә белмәй, аптырашта ҡалыу. ***Аҙанып** тороу.* ▬ *Шлыков, ҡапыл ғына ни әйтергә белмәй **аҙанып** ҡалды.* Ш. Бикҡол.

**аҙау I** *ҡ.* Ни эшләргә белмәй, аптырау; ҡаушау. *Ҡарамырҙа ла ҡапыл ишетелгән тауыштан **аҙап** ҡала.* Х. Ғәбитов.

**аҙау II** *с.* Оҙаҡ һаҡланған, оҙаҡ һаҡланып иҫкергән. ***Аҙау** бал. **Аҙау** бесән. **Аҙау** таҡта.* ▬ *Аҡланда лыпашып бөткән ҡап-ҡара **аҙау** кәбән ултыра: был аҡландарҙы үткән йылдарҙа сапҡан булырға тейештәр.* Ж. Кейекбаев.

**аҙаш I** *и.* Бер исем йөрөткән ике йәки бер нисә кеше (бер-береһенә ҡарата). *Ана, мәктәп директоры ла Зыя ағай — минең **аҙаш**. Уның исемен онотмағыҙ, иҫкә төшөрһәгеҙ, минекен дә онотмаҫһығыҙ.* М. Тажи.

**аҙаш II** *ҡ.* 1. Юлдан яҙыу, юл юғалтыу. *Арлы-бирле утын йыя һалып, ҡайтыр юлға сыҡһа, әбей бик ҡаты буранға осрап **аҙашҡан**, ти.* Экиәттән.

2. Башҡаларҙан айырылып, яҙлығып ҡалыу. *Яңғыҙ йөрөп һуҡмаҡ ярғанса, күп менән бергә **аҙаш**.* Әйтем.

**аҙман I** *и.* Эре һағыҙаҡ. *Аҙмандар, гәҙәттә, парлап ҡына ергә соҡоп яһаған ояла йәшәй.* Б. Бикбай.

**аҙман II** *с.* 1. Өйҙә тормай, аҙып-туҙып йөрөүсән. [*Ҡунаҡбикә*:] *Йә,* ***аҙман,*** *ҡайҙа йөрөнөң? Көнө буйы өйҙә тормайһың, мөхәббәтһеҙ.* Д. Юлтый.

2. *диал.* Тиҙ боҙолоусан, бәләкәй генә яранан да боҙолоп китеүсән; аҙғын (тәнгә ҡарата). *Тәне бик* ***аҙман.***

**аҙналыҡ I** *с.* 1. Аҙна буйына дауам иткән. *Шул ваҡыт мин ҡырҙа инем, ҡырҙа ине бар халыҡ.* ***Аҙналыҡ*** *эштән бушағас, ята инек хәл алып.* Ғ. Ғүмәр.

2. Азна буйына етерлек. *Бер көнлөк юлға сыҡһаң,* ***аҙналыҡ*** *аҙыҡ ал.* Мәҡәл.

3. Аҙнаһына бер була торған, аҙна һайын ҡабатланып торған. ***Аҙналыҡ*** *журнал.* ▬ *1925 йылдың 27 мартынан башлап башҡорт телендә* ***аҙналыҡ...*** *«Башҡортостан йәштәре» гәзите сыға башланы.* Т. Йәнәби.

**аҙналыҡ II** *и.* Берәй ваҡиғаға, эшкә бағышлан үткәрелгән аҙна. *Китап* ***аҙналығы.*** *Әҙәбиәт* ***аҙналығы.*** ▬ *Яланға сығасаҡ машиналарға һынау, тикшереү* ***аҙналығы*** *үткәрелде.* Ф. Иҫәнголов.

**ай I** *и.* Ер тирәһендә әйләнгән иң яҡын күк есеме, Ерҙең эйәрсене. ***Ай*** *ҙа, Ер кеүек үк, шар рәүешендә, ләкин ул Ерҙән 29 тапҡыр бәләкәйерәк.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 25 ноябрь.

**ай II** *и.* Йылды ун ике өлөшкә бүлгән ваҡыт берәмеге. *Йәй* ***айҙары.*** *Ҡыш* ***айҙары.*** ▬ *Көндәрҙән бер көн, Бабсаҡтың үлтерелеүенә ете* ***ай*** *тулғанда, Йәмиләнән бер ир бала тыуа.* «Бабсаҡ менән Күҫәк». *Ат* ***айҙа*** *һыналыр, әҙәм йылда һыналыр.* Әйтем.

**ай III** *ымл.* 1. Төрлө тойғоларҙы белдергәндә әйтелә. ***Ай,*** *бер генә йотом һыу булһасы!* М. Тажи. — ***Ай,*** *аптыраттың да баһа!* И. Насыри. — ***Ай,*** *шәп булыр ине!* Ғ. Әмири. — ***Ай,*** *минең бәләкәсем!* Һ. Дәүләтшина.

2. Йырҙарҙа, ҡобайырҙарҙа тойғоно көсәйтеү һәм шиғыр үлсәмен теүәлләү өсөн ҡулланыла. *Ағиҙелкәй ҡайҙа* ***ай*** *туғайҙа, Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа. Ағиҙелкәйҙәрҙең* ***ай*** *һауаһы йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа.* Халыҡ йырынан. *Сахрала кәкүк* ***ай*** *саҡыра ҡарағайҙин бейек ҡайында. Илама ла, атай, әсәй, беҙ ҡайтырбыҙ кәкүк айында.* Халыҡ йырынан.

**айлыҡ I** *и.* Берәй эш-ваҡиғаға бағышланған ай. *Урман* ***айлығы.*** *Юл төҙөү* ***айлығы.*** ▬ *1 октябрҙән Өфөлә юбилейға бағышланған театр* ***айлығы*** *уҙғарыласаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 26 август.

**айлыҡ II** *с.* Айға етерлек, айға иҫәпләнгән, ай менән иҫәпләнгән, айға тейешле. ***Айлыҡ*** *план.* ***Айлыҡ*** *уҡыу.* ***Айлыҡ*** *эш хаҡы.* ▬ *Көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта,* ***айлыҡ*** *аҙыҡ арҡала.* Мәҡәл.

**аймылыш I** *и.* Яңылышлыҡ, яҙыҡлыҡ. *Ҙур, һынаулы юл уҙымы. Оҙон юлдан атлағанда* ***аймылыштар*** *ҙа булғыланы, ләкин беҙ аҙашманыҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 гинуар.

**аймылыш II** *ҡ.* Үҙ-ара тап булмай яҙа йөрөү. *Бер-беребеҙ өсөн ергә тыуған булғанбыҙ: үҙебеҙ юл башында уҡ* ***аймылышҡанбыҙ.*** Ғ. Әмири.

**айыл I** *и.* Ыңғырсаҡты бауыр аҫтынан тарттырып нығыта торған яҫы бау. *Алтмыш йылҡы араһында атлығып торған алты ат юҡ,* ***айыл*** *етмәҫ ала ат юҡ, ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола».

**айыл II** *и.* Ҡайыш осондағы ҡаптырғыс тимер; ҡайыш тимере, таралғы: *Мостафиндың еҙ төймәләре, ҡайыш* ***айылдары,*** *погон йондоҙҙары ялтлап тора.* Т. Килмөхәмәтов.

**айырма I** *и.* Бер нәмәне икенсеһенән айырып күрһәткән сифат; үҙенсәлек. [*Айбулат*:] *Шулай инде ул. Һыу менән һыуҙың да, кеше менән кешенең дә* ***айырмаһы*** *күп була.* Һ. Дәүләтшина.

**айырма II** *и.* Дөйөм тәртип ҡағиҙәләренән тайпылыш. ***Айырма*** *яһау.*

**айырма III** *и.* Икегә айырылған урын; айырса, сатлыҡ. *Урал тауҡайҙары борма-борма, бормалары һайын* ***айырма.*** Халыҡ йырынан.

**айырма IV.** *и. мат.* Алыу ғәмәле һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан һан. ***Айырманы*** *ҡушыу. Квадраттар* ***айырмаһы.***

**аккорд I** [*рус.* < *ит.*] *и.* Бер нисә музыкаль тауыштың гармоник ҡушылышы. ***Аккорд биреү. Һуңғы аккорд.*** ▬ [*Мазһар*] *бер нисә көйҙөң* ***аккордын*** *алып ҡарай.* С. Кулибай.

**аккорд II** [*рус.* < *ит.*] *и. иҫк.* Эш буйынса төҙөлгән килешеү. ***Аккорд буйынса эшләү.***

**актив I** [*рус.* < *лат.*] *и. бухг.* Предприятие балансының бөтә байлыҡ һәм мөлкәтте эсенә алған бер өлөшө. *Баланс счётының* ***активы.***

**актив II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Коллективтың, ойошманың иң алдынғы эшмәкәр өлөшө. *Класс* ***активы.*** *Колхоз* ***активы.*** *Партия* ***активы.***

**актив III** [*рус.* активный] *с.* Эшкә ихлас; алдын, эшмәкәр; *киреһе* пассив. ***Актив*** *эшсе.*

**акция I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Капиталистик предприятиеға күпмелер пай индерелгәнлекте дөрөҫләп, уның эшен башҡарғанда һәм табышын бүлгәндә ҡатнашлыҡ итергә хоҡуҡ биргән ҡиммәтле ҡағыҙ. ***Акцияһы*** *күтәрелеү. Керемле* ***акция.***

**акция II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Берәй маҡсат менән башҡарылған эш. *Дипломатик* ***акция.*** *Һуғыш* ***акцияһы.***

**аҡ I** *с.* Ҡар, һөт төҫөндәге; *киреһе* ҡара. ***Аҡ*** *кейем.* ***Аҡ*** *ҡағыҙ.* ***Аҡ*** *төҫ.* ▬ *Ҡыш та килер, болондағы әҙебеҙҙе* ***аҡ*** *япмалар менән күмер.* Ғ. Рамазанов. *Ҡояш ҡына сыға ай әйләнеп,* ***аҡ*** *болоттарға төрөнөп.* Халыҡ йырынан.

**аҡ II** *и.* Төрлө нәмәнең аҡ төҫ менән айырылып торған бер өлөшө. *Йомортҡаның* ***ағы.*** *Күҙҙең* ***ағы.***

**аҡ III** *и.* Һөттән әҙерләнгән төрлө ашамлыҡ; һөт-ҡатыҡ. ***Аҡ*** *төҫө күрмәү.* ▬ ***Ағы*** *барҙың туғы бар.* Әйтем.

**аҡ IV** *и.* Күҙҙең ҡараһын ҡаплап һуҡырайтҡан шекәрә. ***Аҡ*** *төшөү.* ***Аҡ*** *һалыу.* ▬ *Ҡыҙ минән ерәнгән һымаҡ итеп битен ситкә бора биреп, сырайын һытып, миңә күҙенең* ***ағы*** *менән ҡарап ҡуйҙы.* Т. Йәнәби.

**аҡ V** *ҡ.* Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү (шыйыҡлыҡҡа, уның менән бергә булған нәмәләргә ҡарата). *Шулай итеп, был байғош япа-яңғыҙ тора ла ҡала. Кейемдәре лә* ***ағып*** *китә.* Әкиәттән. *Һыу* ***ағыр,*** *таш ҡалыр.* Әйтем.

**аҡай I** *с. диал.* Аҡыш. ***Аҡай*** *күҙ.*

**аҡай II** *ҡ.* Күҙҙе ҙур асып, асыу менән ҡарау. ***Аҡайып*** *ҡарау. Күҙе* ***аҡайҙы.*** ▬ ***Аҡайған*** *күҙҙә аҡыл юҡ.* Әйтем.

**аҡбаш I** *и.* Роза сәскәләр ғаиләһенә ҡараған, аҡ йәки ал төҫтәге ойҡаш сәскәле, ҡауырһын япраҡлы уйһыу ер үләне; ураз уты. ***Аҡбаш*** *ҡоро тупраҡлы туғайҙарҙа, далаларҙа, аҡландарҙа, урман ситтәрендә үҫә.* З. Ғүмәров.

**аҡбаш II** *и.* Яман шешек, сиҡан. ***Аҡбаш*** *сығыу.* ***Аҡбаш*** *һытылыу.*

**аҡбаш III** *и. һөйл. иҫк.* Мороно аҡ сургуч менән көпләнгән шешәгә һалынған аҡ араһы. [*Ҡотлояр Әхмәҙигә:*] *Ҡоҙа, ниңә берәр шешә* ***аҡбаш*** *алмайһың, әллә ҡоҙағыйҙан ҡурҡаһыңмы?* Һ. Дәүләтшина.

**аҡла I** *ҡ.* Аҡҡа буяу, аҡ төҫ биреү; ағартыу. *Мейесте* ***аҡлау.*** *Өйҙө* ***аҡлау.***

**аҡла II** *ҡ.* Аҡ төшөү (күҙгә ҡарата). *Күҙе* ***аҡлаған.***

**аҡла III** *ҡ.* Ғәйепһеҙгә сығарыу, ғәйепһеҙ тип табыу. *Ғәйеплене* ***аҡлау.***

**аҡлан I** *и.* Урман, ағаслыҡ араһындағы асыҡ ер. *Алп батыр баҫҡан ете* ***аҡлан*** *ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти.* Әкиәттән.

**аҡлан II** *ҡ.* Ғәйепһеҙ тип табылыу. *Ғәйебе* ***аҡланған.***

**аҡшар I** *и. диал.* Аҡбур. ***Аҡшар*** менән яҙыу.

**аҡшар II** *с. диал.* Аҡһыл һары сәсле, аҡ сәсле. ***Аҡшар*** *малай.*

**ал I** *и.* 1. Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған тараф; *киреһе* арт. ***Ал*** *менән боролоу.* ***Ал*** *менән тороу.*

2. Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған яҡтағы өлөшө. *Арбаның* ***алды.*** *Күлдәктең* ***алды.***

**ал II** *с.* Аҡһыл ҡыҙыл, асыҡ ҡыҙыл. ***Ал*** *байраҡ.* ***Ал*** *сәскә.* ***Ал*** *шәфәҡ.* ▬ ***Ал*** *еләнем тектергәнһең, ябынып өсонмө, атаҡайым.* Сеңләүҙән.

**ал III** *ҡ.* Үҙеңә ҡабул итеү. *Бүләк* ***алыу.*** *Сәнске менән* ***алыу.*** *Телеграмма* ***алыу.*** ▬ [*Старшина*] *ҡулындағы ҡамсыһын* ***алып,*** *Сейәбикәнең башынан аша бер-ике тартып ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин. *Алмағаста биш алма, мин* ***алмаһам,*** *һин дә* ***алма.*** Халыҡ йырынан.

**ала I** *с.* Аҡ менән ҡара йәки башҡа төҫ аралашҡан. ***Ала*** *ҡаҙ.* ***Ала*** *һыйыр.* ***Ала*** *эт.* ▬ *Алтмыш йылҡы араһында*

*атлығып торған алты ат юҡ, айыл етмәҫ* **ала** *ат юҡ, ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола».

**ала II** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге исемдәр менән килеп, «тәңгәл», «тотош» тигән мәғәнәне бирә. *Баштан* **ала** *ябыныу. Билдән* **ала** *батыу.*

**алағанат I** *и.* Күкһел түбәле, күрән ҡыҙыл түшле, ала ҡанатлы турғай (инәһе буҙ). ***Алағанат*** *ултыра.*

**алағанат II** *и. һөйл.* Еңел тормош эҙләп, төрлө ерҙә йөрөгән елғыуар кеше. — *Һин бит* **алағанат**, *летун, бисәңдең елкәһен кимереп ятаһың.* М. Тажи.

**алай I** *и. иҫк.* Дивизия йәки бригада составына инә торған ғәскәри бүлем; полк. *Бер* **алай**. ▬ *Йөрәктау янына ебәрелгән Хохловтың полкын пыран-заран килтергәс, улар [башҡорттар] үҙҙәренең* **алайҙары** *менән Өфөгә йүнәлде.* Ғ. Ибраһимов.

**алай II** *р. һөйл.* Улай. ***Алай*** *булһа.* ***Алай*** *ҙа.* ***Алай*** *икән.*

**алап I** *и.* Иген йәки башҡа нәмә һалыу өсөн талдан үреп йәки ҡабыҡтан тегеп эшләнгән оҙонса ҙур һауыт. *Солан эсендә, бер мөйөштә, бер ҙур ҡабыҡ* **алап** *менән көл тора.* М. Ғафури. *Ҡыш ҡорһағы — киң* **алап**. Әйтем.

**алап II** *и.* Оран. *Әзрәҡә эште аңлаған,* **алап** *һалып, Ҡот тауға бар дейеүҙе йыйнаған.* «Урал батыр».

**алар I** *ҡ.* Алаға әйләнеү, ала төҫкә инеү; алаланыу. *Ҡояш нурын бөрктө, ҡар* **аларҙы**, *нурҙар менән уйнаған ел иҫте.* Ш. Галин.

**алар II** *ҡ.* Ағы әйләнеп, ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата). *Ҡыҙмаса Ғәйфулланың күҙҙәре* **аларып** *китте.* Б. Хәсән. *Ҡала тиҙәр, күргән юҡ ине, күргәс, малай, күҙҙәр* **аларҙы**. Ғ. Амантай.

**алға I** *р.* Ал яҡҡа табан. ***Алға*** *барыу.* ***Алға*** *сабыу.* ***Алға*** *ынтылыу.* ▬ *Кешеләр ҡуҙғалалар,* **алға** *шыуышалар.* Д. Юлтый.

**алға II** *ымл.* Эш-көрәшкә өндәшкәндә әйтелә. ***Алға***, *иптәштәр,* **алға**, *бөйөк идеалға.* Һ. Дәүләтшина.

**алғыш I** *и. иҫк.* Дуҫ. *Тапҡан — табыш, танылған —* **алғыш**. Әйтем.

**алғыш II** *и. иҫк.* Яҡшы теләк. *Ата-әсә **алғышы**. **Алғыш** алыу.* ▬ ***Алғыш** та төшә, ҡарғыш та төшә.* Әйтем.

**алда I** *р.* 1. Йөҙ, күҙ ҡараған яҡта. ***Алда** команда тауышы ишетелде.* Д. Юлтый.

2. Киләсәктә, киләсәккә ҡарата. ***Алда** ҙур эштәр тора.* ▬ ***Алда** булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк.* Әйтем. ***Алда** буласаҡ туй өсөн бөгөн бейей башлама.* Мәҡәл.

3. Беренсе булып, беренселәрҙән булып. *Ярышта **алда** барыу.* ▬ ***Алда** килһәң, ит бешә; һуңға ҡалһаң, бит бешә.* Мәҡәл.

**алда II** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге исемдәр йәки сифат ҡылымдың **-р** формаһы менән килеп, эш-хәлдең үтәлеш ваҡытын белдерә; элек. *Бөтә кешенән **алда**, бөтә кешенән күп һөйләшә торған Новиков та бөгөн һөйләшмәй.* Д. Юлтый. *Бәйгегә етер **алда** һәр бер йүгерек ат таһыллана торғайны.* Д. Юлтый. *Бөгөн кәрәгеңде иртәнге кәрәгеңдән **алда** әҙерлә.* Мәҡәл.

**алда III** *ҡ.* Дөрөҫ булмағанды ысын итеп һөйләү; ялғанлау. — *Апай, **алдай** ул, Фатима түгел, ысын исеме уның Батый.* М. Тажи. [*Һыуһылыу — Һәүбәнгә*:] *Шүлгән батша ҡыҙымын, һине **алдап** тормамын.* «Аҡбуҙат».

**алдан I** *р.* 1. Башлап, беренсе булып. *Бисәһе **алдан**, Тимербулат уның артынан барған.* Әкиәттән. *Бәләкәй тәгәрмәс **алдан** тәгәрәй.* Мәҡәл.

2. Ваҡытынан элек, көн элгәре. *Ниңә кеше үҙенең һәләкәтен **алдан** белеп, ҡасып ҡотола алмай икән.* З. Биишева. ***Алдан** ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.* Мәҡәл.

**алдан II** *ҡ.* Дөрөҫ булмаған һүҙҙе, ысын булмаған нәмәне ысынға алыу. *Ҡош емгә **алданыр**, кеше һүҙгә **алданыр**.* Мәҡәл.

**алдыр I** *и.* Туҫтаҡтан ҙурыраҡ йәйенке һауыт. *Оһолло еңгәнең һыйлы итеп әсеткән, баплап һыуытҡан яҡшы ҡымыҙын бер-ике **алдыр** эсеү менән үк башыңа сығ*[*а*]. Ғ. Дәүләтшин. *Тултырғанса һалып киң **алдырҙы**, аяҡсы ҡарт ҡымыҙ тоттора.* Б. Вәлит.

**алдыр II** *ҡ.* Үҙ исемеңә яҙҙырып алыу. *Гәзитте киоскынан ғына* ***алдыр.*** Һөйләү теленән.

**алла I** *и.* Дини ҡараш буйынса, бөтә донъяны яратҡан, уның менән идара иткән юғары зат, хоҙай, тәңре. ***Аллаға*** *табыныу.* ***Аллаға*** *ышаныу.* ***Аллаға*** *ялбарыу.* ▬ *Күктә* ***алла,*** *ерҙә иблис, мин — малай. Береһе «дин» тип, береһе «мин» тип тартҡылай. Белмәйем, әллә* ***алла,*** *әллә иблис алдалай.* Ш. Бабич.

**алла II** *ҡ.* Ал төҫкә буяу. *Ике битең алһыу-алһыу, алһыу битте* ***аллама.*** Халыҡ йырынан.

**алла III** *ымл.* Төрлө тойғоларҙы белдергәндә әйтелә. *Абау* ***алла!*** *Ай* ***алла!*** ▬ [*Ҡотлояр*:] ***Алла,*** *харап булған икәнһең!* Һ. Дәүләтшина.

**алма I** *и.* Алһыу йәки аҡ сәскәле, итләс мурт емешле ағас һәм шул ағастың емеше. *Ваҡ* ***алма.*** *Ҡаты* ***алма.*** *Эре* ***алма.*** *Әсе* ***алма.*** ▬ [*Баҡсала*] *ер еләге, сейә,* ***алма*** *һәм төрлө-төрлө сәскәләр ... тулып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин. ***Алма*** *ағасынан алыҫ төшмәҫ.* Мәҡәл. ***Алманың*** *аҫылын ҡорт ашар. Мәҡәл.*

**алма II** *и.* Ауыр нәмәне һалмауырлап күтәрә торған оҙон нәҙек бүрәнә. *Нигеҙ бүрәнәләрен* ***алма*** *менән күтәрҙек.* Һөйләү теленән.

**алмаш I** *и.* Тейешле ваҡытта кемдеңдер йәки кемдәрҙеңдер урынына баҫып, эшен дауам иткән кеше йәки кешеләр төркөмө. ***Алмаш*** *әҙерләү.* ▬ *Ул* [*Айбулат*] *үҙ* ***алмашы*** *эш башламаҫ борон уҡ барып, эште барлай.* Һ. Дәүләтшина. *Комсомолдар үҫеп тора партияға* ***алмашҡа.*** Халыҡ йырынан.

**алмаш II** *ҡ.* Бер үк төрлө нәмәне үҙ-ара бирешеү. *Тауар* ***алмашыу.*** *Урын* ***алмашыу.*** ▬ *Улар* [*Айбулат менән Зөфәр*] *береһе яҙғанды икенсеһе* ***алмашып*** *уҡып төҙәттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**алтынсы I** *и.* Алтын менән эш иткән кеше; алтын оҫтаһы. ***Алтынсы*** *килде.*

**алтынсы II** *рәт һ.* Урын тәртибе алты (6) менән билдәләнгән. ***Алтынсы*** *кеше.* ***Алтынсы*** *урын.*

**алым I** *и.* Ниҙер эшләгәндә бер иңләп үтерлек ара; ал, алырым. [*Ҡорбандың атаһы*:] *Әйҙә, тиҙерәк китәйек, юҡ*

*нәмәне күтәп, бер* ***алым*** *урырлыҡ ваҡытты әрәмгә үткәрҙек.* С. Ҡудаш. *Алғыр кеше* ***алымынан*** *билдәле.* Мәҡәл.

**алым II** *и.* Ниҙелер башҡарыу, үтәү юлы; ысул. *Бейеү* ***алымы.*** *Методик* ***алым.*** *Эш* ***алымы.*** *Әҙәби* ***алым.***

**алым III** *и.* Йомошо төшкән кешенән тейешһеҙгә алынған йәшерен хаҡ; ришүәт. ***Алым*** *алыу.* ***Алым*** *биреү.*

**алыш I** *и.* 1. Көс һынаш, ярыш, көрәш. *Аҡмырҙа, ҡылысын һуҙып, күпер артынан сыҡҡан. «****Алыш*** *кәрәкме, атыш кәрәкме?» — тигән дейеү уға.* Әкиәттән.

2. Ике аралағы бәрелеш, һуғыш. *Бөтә табын йортто ҡатайҙарға ташланған.* ***Алыш*** *ҡаты булған.* Ә. Вахитов.

**алыш II** *и. иҫк.* Дуҫ. *Тапҡан — табыш, таныған —* ***алыш.*** Мәҡәл.

**алыш III** *ҡ.* Бәрелешеү, һуғышыу. *Салауат батыр ир ине, менгән аты кир ине. Дошман менән* ***алышҡанда*** *ил эсендә бер ине.* Халыҡ йырынан.

**ана I** *и.* Әсә. *Һалдат хәсрәтен күргәнсә, тыумаһамсы* ***ананан.*** Халыҡ йырынан. ***Ана*** *күңеле балала, бала күңеле далала.* Мәҡәл.

**ана II** *күрһ. а.* 1. Нимәгәлер тоҫҡап күрһәткәндә әйтелә. ***Ана*** *һул яҡта, бик алыҫ түгел ауыл күренә!* Д. Юлтый.

2. Нимәгәлер кешенең иғтибарын йүнәлтеү өсөн әйтелә. [*Сәғиҙә:*] ***Ана*** *эт өргән тауыш ишетелә.* М. Тажи. *Яҙҙар килә,* ***ана,*** *тамсы тама, иҫкә төшә үткән ғүмерем.* Ш. Бабич.

**аң I** *и.* 1. Үҙ-үҙеңде, тирә-йүнде тойоу, ҡабул итеү һәләте; иҫ. ***Аң*** *инеү.* ***Аңды*** *юғалтыу.*

2. Кешенең ысынбарлыҡты төшөнөү, белеү, фекер итеү һәләте. ***Аң*** *менән эш итеү.* ***Аң*** *үҫеү.*

**аң II** *и. иҫк.* 1. Ҡырағай йәнлек, кейек. *Был* ***аңдан*** *бар халыҡтың ҡото осҡан, өиҙә-төҙҙә хайуанат ҡурҡып ҡасҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

2. Ау, һунар. ***Аңға*** *барыу.* ***Аңға*** *йөрөү.*

**аң III** *с.* Һаҡ, уяу, һиҙгер. ***Аң*** *кеше.*

**аңкау I** *и.* Ауыҙ эсенең өҫкө өлөшө; таңлай. *Алғы* ***аңҡау.*** *Артҡы* ***аңҡау.*** *Йомшаҡ* ***аңҡау.*** *Ҡаты* ***аңҡау.***

**аңҡау II** *с.* Әйткәнде аңламайыраҡ тора торған; аңра. *Гөлъямал, төнөн, тигән, һин булма* ***аңҡау****, бул уяу.* Ш. Бабич. *Аңра халыҡҡа* ***аңҡау*** *мулла.* Мәҡәл.

**аңыш I** *с.* Тиҙ генә аңлай, төшөнә алмаусан. ***Аңыш*** *кеше.*

**аңыш II** *и. диал.* Айыш. ***Аңышына*** *төшөнөү.*

**ар I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Йөҙ квадрат метрға тигеҙ. *Бер* ***ар*** *ер.*

**ар II** *и. иҫк.* Удмурт халҡының башҡорттарҙа йөрөгән әүәлге исеме. ***Ар*** *килде.*

**ар III** *и. иҫк.* Оятсылыҡ, намыҫ, гәр. *Ярлыға* ***ар*** *килешмәҫ.* Әйтем.

**ара I** *и.* 1. Ике нәмәне айырып торған урын. *Бармаҡ* ***араһы****. Рәт* ***араһы****. Тау* ***араһы****.*

2. Бер ерҙән икенсе ергә тиклем булған алыҫлыҡ. *Яҡын* ***ара****.* ▬ *Халыҡ Ырымбур* ***араһын*** *ҡуна ятып йөрөй. Ә Хисамыи был* ***араны*** *атын бер ашатмай барып етә.* Б. Бикбай.

**ара II** *и.* Ырыу эсенә инған вағыраҡ төркөм. *Ҡыпсаҡ* ***араһы*** *үҙен ауылдың аҫаба башҡорто һанай. Улар ипле лә, берҙәм дә халыҡ.* Б. Бикбай. *Алабута аш булмаҫ,* ***ара*** *бутаған иш булмаҫ.* Әйтем.

**аралаш I** *р.* Ниҙер бергә, ҡатнашҡан килеш, ҡатыш; ҡатнаш. *Арыш* ***аралаш*** *бойҙай. Ҡар* ***аралаш*** *ямғыр.*

**аралаш II** *ҡ.* Үҙ-ара бәйләнеш, танышлыҡ тотоу; ҡатнашыу. *Кеше менән* ***аралашыу****. Халыҡ менән* ***аралашыу****.*

**ара-тирә I** *р.* Ваҡыт-ваҡыты менән, унда-һанда, һирәкләп. *Урман тып-тын,* ***ара-тирә*** *баш өҫтөнән генә ярғанаттар ... осоп үтә.* М. Тажи. *Аҡһырғаҡ, бөргәк, сәнскәк кеүек үләндәр араһында* ***ара-тирә*** *бөрлөгән, ҡарағат кеүек емешле ҡыуаҡтар ҙа күренеп ҡала ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Ит турауы табыштыр,* ***ара-тирә*** *ҡабыштыр.* Әйтем.

**ара-тирә II** *и. йыйн. һөйл.* Ҡатнашып, аралашып йөрөгән туғандар; яҡын кешеләр. ***Ара-тирәне*** *саҡырып алыу.*

**арба I** [*гәр.*] *и.* Егеп йәки тағып йөрөтә торған тәгәрмәсле ҡорамал. *Оҙон* ***арба****. Тағылма* ***арба****.* ▬ *Йәйланым да*

*майланым күсәрҙәрен **арбаның**.* Ш. Бабич. *Яман **арба** юл боҙор, яман кеше ил боҙор.* Әйтем.

**арба II** *ҡ*. 1. Сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп үҙеңә буйһондороу. *Йылан **арбау**.* ▬ [*Әбей:*] *Айыуҙы **арбап** булмай.* М. Тажи.

2. *күсм.* Берәүҙе үҙеңә ҡаратыу, аҡыл, күңелен биләп, әүрәтеү. — *Тәки был наян Зөһрә, башын-күҙен уйнаҡлата торғас, егетте **арбаны** бит.* Ф. Исәнғолов.

**арҡа I** *и.* Кеше кәүҙәһенең яурындан билгә тиклем булған һәм хайуандарҙың муйынынан ҡойроҡҡа тиклем булған һырты. *Көмрө **арҡа**.* ▬ *Тәндәр ҡыҙып китте, **арҡаға** йылы ҡояш төштө.* Д. Юлтый.

**арҡа II** *ҡ*. Арҡыры еп һалыу. — *Уҡалар менән **арҡап**, ебәктәр менән ҡайып, нәғешләп, суҡлы буяуҙар тағып, тәмәке янсығы әҙерлә.* Б. Ишемғол.

**арҡала I** *бәйл. функцияһында.* Эш-хәлдең үтәлеү-үтәлмәүенә килтергән сәбәпте белдергәндә ҡулланыла. *Минең **арҡала**.* ▬ [*Буранбай*] *бик оҙаҡлап китте. Шул **арҡала** ул көн мунсаға ла бара алманыҡ.* Д. Юлтый.

**арҡала II** *ҡ*. Арҡаға аҫыу; йөкмәү. *Ауыр йөктө **арҡалаһаң**, юл ҡыйын, оҙаҡ була.* С. Кулибай.

**арҡала III** *ҡ*. Берәй кешене яҡлау, аралау. *Батырҙың асыуы инде тарҡаланды, баланы ерҙән алып **арҡаланы**.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

**арҡалыҡ I** *и.* Ҡамыт, дуғаны күтәреү өсөн ыңғырсаҡ аша тәртәнән тәртәгә тарттырыла торған бау. *Ҡайыш **арҡалыҡ**. Сүс **арҡалыҡ**.* ▬ [*Сыуаш*] *атының **арҡалығын** төшөрөп, йәш бесәнгә ҡушты.* Ф. Исәнғолов.

**арҡалыҡ II** *и.* Сәс толомоноң өҫтөнән кейеү өсөн оҙон тар туҡыманан иң оҫҡә сытра ҡуйып ике буй тәңкә баҫып, түбәнге осона сулпы тағып яһалған биҙәүес; сәсҡап. ***Арҡалыҡ** тағыу.* ▬ [*Ҡатын-ҡыҙҙың*] *түшендә муйынса әмәйлек. Артында — **арҡалыҡ**, ҡайһы берҙәрендә — елкәлек. Беләгендә — беләҙек, ҡулында — ҡашлы йөҙөк.* К. Мәрғән.

**арҡан I** *и.* Йыуан итеп ишелгән оҙон бау. ***Арҡан** ишеү. Оҙон **арҡан**.* ▬ *Фатих... санаға баҫырау, һәнәк, тырма-*

*ларҙы һалып,* ***арҡан*** *менән бәйләне лә, ныгытып кейенергә тип өйгә инде.* Б. Ишемғолов.

**арҡан II** *р.* Арт менән, һырт менән. ***Арҡан*** *тороу.* ▬ *Янһары кеткелдәп, көлөп,* ***арҡан*** *әйләнеп ята.* Б. Бикбай.

**арҡыры I** *р.* Буйға киҫә йүнәлештә. ***Арҡыры*** *ҡырҡыу.* ***Арҡыры*** *сығыу.* ***Арҡыры*** *һалыу.* ▬ *Береһе* [*бүрәнәләрҙең*] *юл ситенә ултырған, береһе юлға* ***арҡыры*** *төшөп ятҡан.* Д. Юлтый.

**арҡыры II** *бәйл.* Ниҙеңдер бер яғынан икенсе яғына табан булған йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; аша, үтә. *Соҡор* ***арҡыры.*** *Тәҙрә* ***арҡыры.*** ▬ *Мин тимер юл* ***арҡыры*** *сығып, юлдың канауына яттым.* Д. Юлтый.

**армыт I** *и.* Бер урындан башҡа-башҡа киткән тармаҡ. *Тау* ***армыты.***

**армыт II** *и.* Гөлйемеш һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған аҡ йәки алһыу сәскәле емеш ағасы һәм уның емеше; ғруша. ***Армыт*** *ашау.* ***Армыт*** *ултыртыу.*

**арпа I** *и.* Орлоғо ярма, һыра һәм фураж әҙерләүҙә файҙаланыла торған оҙон ҡылсыҡлы ашлыҡ һәм шул ашлыҡтың орлоғо. ***Арпа*** *гына сәсһәң, сәс сиҙәмгә, яҙгы ла гына монар алмаһын.* Халыҡ йырынан.

**арпа II** *и.* Керпек төбөнә сыға торған эренле шешек. ***Арпа*** *сығыу.*

**арт I** *и.* Йоҙгә, күҙгә кире тараф; *киреһе* ал. ***Арт*** *менән боролоу.* ***Арт*** *менән тороу.*

**арт II** *ҡ.* 1. Һан, күләм яғынан үҫеү; күбәйеү, ишәйеү. *Көс* ***арта.*** *Эш* ***арта.*** ▬ *Һәр йыл сәскә* ***арта*** *баҡсала.* Ғ. Сәләм. *Иттең тәмлеһе — ҡарта, ашаған һайын* ***арта.*** Әйтем.

2. Өҫтәлеү. [*Фәхри:*] *Һөйөнсө, тагы бер колхозсы* ***арт-ты.*** Б. Бикбай. *Ата-инә ҡәҙерен белгәндең ырыҫы* ***артыр.*** Мәҡәл.

3. Кимәл яғынан үҫеү йәки күтәрелеү. [*Сәмреғош:*] *Йылғаның бынау тәңгәлендә һыу кисәгегә ҡарағанда* ***артып*** *тора.* Әкиәттән.

4. Билдәле бер сикте үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Хәҙер Юлияның бында килеп әшләй башлауына инде йылдан* ***артты.*** Һ. Дәүләтшина.

5. Кәрәктән, саманан артыҡ булыу. [*Көтөүсе ҡарт*:] *Беҙҙең Күсәр хандан кеше* **артмаҫ**. Әкиәттән. *Бер тиренән тун да тек, мул да тек, бер бейәләйлек* **артып** *та ҡалһын*. Әйтем. *Тауҙан таш* **артмаҫ**, *байҙан эш* **артмаҫ**. Мәҡәл.

6. Көс-ҡеүәт алып, шәбәйеү; көсәйеү, үҫеү. *Йә тағы, Зариф Мозаффар ватмаймы бик милләтең? Ватһа ватһын милләтең, хеҙмәткә* **артһын** *һиммәтең*. Ш. Бабич. *Һөйгән йәрең матур булһа, ғишыҡ* **артыр** *көн һайын*. Халыҡ йырынан.

7. Мөлкәт йыйып хәлләнеү; байыу. [*Миңһылыу*:] *Күпме серәнһәк тә беҙ* **артманыҡ**, *ә Исхаҡ ҡалынайҙы*. К. Кинйәбулатова.

**арт III** *ҡ*. Ике яҡҡа һалындырып, эш хайуанына йөк аҫыу; артмаҡлау. *Ул* [*Арғынбай*] *дөйәһенә Аҡмәғәмбәт тигән байҙың мал тиреләрен* **артҡан** *да, ҡалаға алып бара*. С. Ағиш.

**ары I** *р*. Билдәле бер тәңгәлде үтеп; артабан. *Сынбулатов, Сәғиҙә менән хушлашып,* **ары** *китте*. М. Тажи.

**ары II** *ҡ*. Көс-хәлдән яҙыу, хәлдән тайыу; хәлһеҙләнеү. *Бейек икән Балҡан тауы, менә алмай* **арыныҡ**. Бәйеттән.

**арыҡ I** *и*. Ер һуғарыу өсөн ҡаҙылған канау. **Арыҡтарҙа** *тамам һыу кипте, әсә күкрәгенән һөт китте*. М. Кәрим. *Һыуҙар аға* **арыҡтан** *да ҡыҙҙар ҡарай ярыҡтан*. Халыҡ йырынан.

**арыҡ II** *с*. Үтәябыҡ; *киреһе* һимеҙ. ***Арыҡ** мал*. ▬ ***Арыҡ** ат һимерһә, ҡурайын бәйләтмәҫ*. Мәҡәл. ***Арыҡ** һыйыр ҡойоға төшһә, тулай-тулай төпкә батыр; һимеҙ һыйыр һаҙға батһа, һикереп сығып ергә баҫыр*. Мәҡәл.

**арыш I** *и*. Оҙонса нәҙек орлоҡло, ҡыяҡ япраҡлы ашлыҡ һәм шул ашлыҡтың орлоғо. ***Арыш** сәсеү*. ***Арыш** урыу*. ▬ *Һаламға үҫкән* **арыштың** *башы булмай*. Әйтем.

**арыш II** *и. диал*. Артылыш. *Анау ғына тауҙың* **арышы** *бынау ғына тауға ҡар(ы)шы*. Халыҡ йырынан.

**ас I** [*рус*. < *фр*.] *и*. Һауа һуғышында һәм һауала осоуҙа иң оҫта батыр лётчик. *Һауа* **асы**.

**ас II** *с.* Оҙаҡ ашамаған, ашағыһы килгән, тамағы туҡ түгел. *Ас айыу. Ас бүре.* ▬ *Ас кешенең асыуы яман.* Әйтем.

**ас III** *ҡ.* Ниҙелер йомоҡ, ябыҡ хәлдән асыҡ хәлгә килтереү. *Ауыҙҙы **асыу**. Ишекте **асыу**. Күҙҙе **асыу**.* ▬ *Битһеҙ бүркен баҫмаҫ; бите бешһә лә, күҙен **асмаҫ**.* Мәҡәл.

**асамай I** *и.* Остары бер-береһенә киртеп кейҙерелгән, ҡыуышлап ултыртылған ҡыйыҡ терәүе. *Ғатаулла ҡарт ... өрлөк өҫтөндә **асамай** ояһы соҡоп ултыра.* Й. Солтанов.

**асамай II** *с.* Береһе икенсеһенә арҡыры. ***Асамай** юл.*

**асыҡ I** *с.* Ябылмаған. ***Асыҡ** тәҙрә.* ▬ ***Асыҡ** ҡапҡанан кем кермәҫ.* Әйтем.

**асыҡ II** *и.* Ялан. *Бер **асыҡта** донъя йөҙөн ҡаплап мал ята, ти.* Әкиәттән.

**асыҡ III** *ҡ.* Ас хәлгә килеү, ас булыу. [*Төлкө*] *күптән бирле ашамағанға, бик **асыҡҡан** булған.* Ж. Кейекбаев. *Бына бер заман йотлоҡ килгән: иген уңмаған, бесән үҫмәгән, халыҡ **асыға** башлаған.* Әкиәттән.

**асыҡлыҡ I** *и.* Ағас менән ҡапланмаған асыҡ ер, аҡлан. *Тау ҡырлатып ятҡан берләм һуҡмаҡ менән бер-ике саҡрым үткәс, алда **асыҡлыҡ** күренде.* Ә. Вахитов.

**асыҡлыҡ II** *и.* Ниҙеңдер сәбәбенә, мәғәнәһенә, торошона ҡарата булған аңлайышлылыҡ. ***Асыҡлыҡ** индереү.* ▬ *Үмәрҙең тәбиғәте шулай: ул ғазаплы икеләнеүҙә оҙаҡ ҡала алмай, уның натураһы **асыҡлыҡ** талап итә.* М. Минһажетдинов.

**асылы I** *и. диал.* Татырлы ер. *Малдар **асылыла** йөрөй.*

**асылы II** *инш.* Күрәһең, ахыры. *Ул ҡайтҡан, **асылы**.*

**аҫ I** *и.* Һыуһарҙар төркөмөнә ҡараған затлы тиреле, йәйен һор, ҡышын аҡ төҫтәге йыртҡыс йәнлек. *Аҫ тотоу.*

**аҫ II** *и.* Билдәле бер кимәлдән түбән булған тараф; киреһе өҫ. *Аҫҡа төшөү. Аҫта тороу.*

**аҫ III** *ҡ.* 1. Һалындырып тағыу, күтәреп бәйләү. *Утҡа сәйнүк **аҫыу**.*

2. Муйынына элмәкле бау һалып күтәреү (үлем язаһының бер ысулы). *Аҫып үлтереү.* ▬ [*Батша*] *теге алдаҡсы вәзирҙе **аҫырға** ҡушҡан, ти.* Әкиәттән.

**ат I** *и.* Йомро тояҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, яллы эре йорт хайуаны. ***Ат** егеү. **Ат** менеү. Ерән **ат**. Менге **ат**.* ▬ ***Ат** айғырланһа, үҙ башына була.* Мәҡәл. ***Ат** юлда, ир яуҙа һынала.* Мәҡәл.

**ат II** *и.* 1. Кешегә ҡушылған исем. ***Ат** биреү. **Атың** кем?* ▬ *Атаң ҡуйған **атың** менән аталырһың, хеҙмәтеңә ҡарай маҡталырһың.* Аҡмулла.

2. Яҡшы йәки яман яҡ менән алынған дан. *Яҡшы **ат** алыу. Яман **ат** алыу.* ▬ *Алма **ат** «алдаҡсы» тип, кәкрене турыла, алдама.* Ш. Бабич.

**ат III** *ҡ.* Көс менән һелтәп ырғытыу; бәреү. *Таш **атыу**. Таш менән **ат**.*

**ат IV** *ҡ.* Ҡоралдың уҡ-яһағын осортоу. *Мылтыҡтан **атыу**. Туп **атыу**.* ▬ *Йөрәгеңә **атҡан** дошман уғын тәнем ҡаплар минең, уҙғармаҫ.* Р. Ниғмәти.

**ата I** *и.* Балаһы булған ир кеше (үҙ балаһына ҡарата). *Кук ыласындың балаһы бауҙа үлә талпынып, яҡшы **атаның** балаһы шәһит үлә яу йөрөп.* Салауат Юлаев. ***Атанан** бала тыуһа ине, **ата** юлын ҡыуһа ине.* Мәҡәл.

**ата II** *ҡ.* Кешегә йәки бер нәмәгә исем ҡушыу; исемләү. *Йылғаны Һоябикә хөрмәтенә Һоя тип, ә ауылды уның ҡарты хөрмәтенә Ишәле тип **атағандар**, ти.* Экиәттән.

**атаҡ I** *и.* Кемдер тураһында таралған хәбәр; дан. ***Атаҡ** сығыу.* ▬ *Ҡалһын исемең мәңгегә, ысын һүҙ менән ал **атаҡ**!* Ш. Бабич.

**атаҡ II** *ымл.* Ғәжәпләнгәндә, аптырағанда әйтелә. — ***Атаҡ**, ни һөйләйһең, балаҡайым? Беҙ кешенән кәм торабыҙҙыр шул.* Т. Йәнәби.

**атама I** *и.* Ниҙеңдер үҙенә бәйләп ҡушҡан исем. *Ер-һыу **атамалары**. Халыҡ **атамаһы**.*

**атама II** *с.* Бер кешенең үҙенә исемләнгән; исемле. [*Таҙ — ханға*:] *Ханым, ҡулыңдағы **атама** балдағыңды бир.* «Маҡтымһылыу».

**ау I** *и.* 1. Балыҡ, йәнлек, ҡош тота торған төрлө ҡорал. ***Ау** бәйләү. **Ау** ҡороу. **Ау** ултыртыу. Ваҡ **ау**. Сүмес **ау**.* ▬ *Ағиҙелкәйҙәргә **ауҙар** һалдым аҡ балыҡҡай менән саҙанға.* Халыҡ йырынан.

2. *иҫк.* Тотола торған йәнлек. *Мәсем хан ғәскәр менән ауға сыҡҡан **ау** эҙләп, бейек-бейек тауға сыҡҡан.* «Бабсаҡ менән Күҫәк». *Арыҫлан **ау** тапмай ҡайтмаҫ.* Мәҡәл. ***Ауға** барһаң зирәк бул, юлдашыңа терәк бул.* Әйтем.

**ау II** *ымл.* 1. Үҙ-ара ҡысҡырып тауыш биргәндә әйтелә. ***Ау!** Ҡайҙа киттегеҙ?*

2. Иыр, ҡобайырға үлсәм йәки көй өсөн ҡушыи ебәреләә. *Ҡайҙа ла ғына барһаң, **ау** дуҫ-иш кәрәк.* Халыҡ йырынан. *Ир-егеттең ҡылғаны илдән башҡа була алмаҫ **ау**, илдән башҡа була алмаҫ.* Ҡобайырҙан.

**ау III** *ҡ.* Торған ерҙән ҡолау. *Тирәк тамыры аҡтарылып, диңгеҙ өҫтөнә **ауа**.* Әкиәттән.

**ауыр I** *с.* 1. Ауырлығы ҙур; һәлмәк, тос. ***Ауыр** йөк. **Ауыр** таш.*

2. Башҡарыуға ҡыйын; ҡатмарлы. ***Ауыр** мәсьәлә. **Ауыр** эш.*

3. Ҡыйын кисерелгән. ***Ауыр** һағыш.*

4. Күңелгә ҡыйын; ҡайғылы, бошонҡо. ***Ауыр** кисереш. **Ауыр** тойғо. **Ауыр** тынлыҡ. **Ауыр** уй.*

**ауыр II** *и. һөйл.* Буйҙағы бала. *Өс айлыҡ **ауыр** күтәргән.* ▬ *Ҡушылған көндө үк минең **ауырым** булып ҡалды.* Әкиәттән.

**ауыш I** *с.* Торошо-ятышы бер яҡҡа ҡыйыш; иңкеү. ***Ауыш** бағана. **Ауыш** иҙән.*

**ауыш II** *ҡ.* 1. Тура килештән тайыу, ауышҡа әйләнеү; ҡыйшайыу. *Иҙән **ауышҡан**. Өй **ауышҡан**.* ▬ *Телеграмма бағанаһы ныҡлы бит **ауышырға**.* Халыҡ йырынан.

2. *күсм.* Көн йәки төн үҙәгенән үтеү (ваҡытҡа ҡарата). *Төн таңға **ауышҡан**.* ▬ *Төш **ауышҡас** сахранан ҡайтыр халыҡ, йыйын бөтөр.* Ш. Бабич.

3. *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсеү. *Халыҡтың күбеһе Бүгәсәү яғына **ауышҡан**.* Ә. Ғафаров.

**ахыры I** *р.* Күпмелер ваҡыт үтеүгә; аҙаҡ сиктә. ***Ахыры** Аҙнағол килмәҫ була.* З. Биишева.

**ахыры II** *бәйл.* Эш-хәлдең үтәлеү-үтәлмәүенә килтергән сәбәпте белдергәндә ҡулланыла; һуңынан. *Ошо*

*ҡурҡҡандан* **ахыры** *теге әбей бер ергә лә сыҡмай өйҙә ултыра.* Экиәттән.

**ахыры III** *инш.* Икеләнеүҙе, фаразды белдерә. *Йылтлап уйнай күктә йондоҙҙар.* ***Ахыры,*** *осҡондарға дуҫ улар.* Ғ. Амантай. *Әсәһе [Кәримдең] ҡайтҡанын оҙаҡ көткәндер,* ***ахыры.*** *Ҡапҡа менән соланды ла бикләмәгән.* Я. Хамматов.

**аш I** *и.* Кеше туҡлана торған һәр төрлө нәмә; аҙыҡ, ашамлыҡ, ризыҡ. ***Аш*** *бешереү.* ***Аш*** *һалыу.* ***Аш*** *һеңдереү. Иртәнге* ***аш.*** *Киске* ***аш.*** ▬ *Бөгөн Гөлбоҫтан еңгә иртәнсәктән бирле балалары менән бер... төйөрөм* ***аш*** *йотҡаны юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. *Аҡназар әҙ-әҙләп ауыҙына* ***аш*** *ала башлай.* Экиәттән.

**аш II** *и.* Туҡыма тауарға һеңдерелгән крахмал. *Яңы күлдәгеңде йыуып кей,* ***ашы*** *бөтһөн.*

**аш III** *диал.* Эрен. *Бармағым* ***аш*** *йыйып, һыҙлап тора.*

**аш IV** *ҡ.* 1. Ниндәйҙер кимәлдән югары күтәрелеү. *Болоттан* ***ашыу.*** *Ярҙан* ***ашыу.*** ▬ *Һурәм генә һыуы ташты инде, тал башҡаиҙарынан* ***ашты*** *инде.* Халыҡ йырынан.

2. Ниндәйҙер кимәлгә үрләү; күтәрелеү. *Бейеккә* ***ашыу.*** *Һауаға* ***ашыу.*** ▬ ***Ашыр*** *булһаң, бейек тауҙарға* ***аш.*** М. Кәрим.

**аш V** *ҡ.* Нимәгәлер ыраҡлы хәлгә килеү; үтәлеү. *Бойомға* ***ашыу.*** *Ғәмәлгә* ***ашыу.*** *Тормошҡа* ***ашыу.*** ▬ [*Наташа*:] *Түккән күҙ йәштәрем, һораған теләктәремдең барыһы ла ҡабуллыҡҡа* ***ашһа*** *ине.* Д. Юлтый.

**аша I** *и.* Ау бәйләй торган ағас энә. ***Аша*** *яһау.*

**аша II** *бәйл.* 1. Бер ситтән икене ситкә түбәндән; арҡыры. *Болон* ***аша.*** ▬ *Бынан күп йыл элек Урал* ***аша*** *бер поезда китеп барабыҙ.* Ғ. Сәләм. *Йүгереп сыҡтым урам* ***аша,*** *өҫтә күлдәк аласа.* Б. Ишемгол.

2. Бер нәмәнән икенсе нәмәгә өҫтән, үрҙән. *Ҡойма* ***аша.*** ▬ *Пулялар, бомбалар беҙҙән* ***аша*** *төшә.* Д. Юлтый. [*Старшина*] *ҡулындағы ҡамсыһын алып, Сейәбикәнең башынан* ***аша*** *бер-ике тартып ебәр*[*ҙе*]. Т. Хәйбуллин.

3. Бер яҡтан икенсе яҡҡа үтәләй. *Быяла **аша**. Күҙлек **аша**. Тәҙрә **аша**.* ▬ *Күршеләрҙең һөйләшкәне стена **аша** ишетелеп тора.*

4. Билдәле бер ваҡыт араһы үткән һайын ҡабатланып торған эш-хәлде белдереү өсөн ҡулланыла. *Аҙна **аша**. Көн **аша**.*

**аша III** *ҡ.* 1. Туҡлыҡ өсөн аҙыҡ йотоу; аҙыҡланыу, туҡланыу. *Аш **ашау**. Ит **ашау**. Тамаҡҡа **ашау**. Туиғансы **ашау**.* ▬ *Турысай ҙа атым ай **ашамай**, таңға яҡын ятып юшамай.* Халыҡ йырынан. *Ит **ашаһаң** — дарыу, күп **ашаһаң** — ағыу.* Мәҡәл. *Көтөүҙән айырылған ҡуйҙы бүре **ашар**.* Мәҡәл.

2. Кимереп, ҡырҡып тишкеләү. *Алманы ҡорт **ашаған**. Кейемде көйә **ашаған**.*

**аша IV** *ҡ.* 1. Өйкәп, ҡырып йоҡартыу. *Тәгәрмәс көбәгенең тимере күсәрҙе **ашаған**.*

2. Йыуып, оңөп емереү; умыртыу. *Йылға ярҙы **ашаған**.*

3. Йылылыҡ тәьҫире йәки химик тәьҫир менән уйыу, ҡырҡыу. *Тут тимерҙе **ашай**. Кислота кейемде **ашай**.* ▬ *Яҙғы елдәр ҡарҙы туҡтауһыҙ **ашаған**.* Әкиәттән.

4. *күсм.* Нәмәнең төҫөн алыу; уңдырыу. *Байрам, өйгә инеп, көн **ашаған** йәшкелт фуражкаһын сөйгә элде.* Р. Низамов.

**ашҡаяҡ I** *с.* Ҡабығы еңел ҡубыусан (яҙғы ағасҡа ҡарата). [*Баҡый халҡы*] *йүкә ағасы **ашҡаяҡ** саҡта, кемуҙарҙан һалабаш төшөргән.* Ж. Кейекбаев.

**ашҡаяҡ II** *ҡ.* Яҙғы ағас әҙерләү эше. ***Ашҡаяҡҡа** барыу.*

**ашҡын I** *с.* Ашҡынып торған; ярһыу. ***Ашҡын** йөрәк. **Ашҡын** күңел. **Ашҡын** хистәр.*

**ашҡын II** *ҡ.* Йөрәкһеп нимәғәлер ынтылыу; ярһыу. *Сәлимдең күҙҙәре ут булып яна, йөрәге һикерә, **ашҡына** ине.* Н. Ҡәрип. *Батша өтәләнеп, күрергә **ашҡынып**, ҡумтаны аса.* Әкиәттән.

**ашла I** *ҡ.* Буйлыҡ епте йәки туҡыманы крахмаллау. *Туҡыманы **ашлау**.*

**ашла II** *ҡ.* Тупраҡҡа ашлама индереү. *Ерҙе* ***ашлау.*** *Өҫтәмә рәүештә* ***ашлау.***

**ашла III** *ҡ.* 1. Һап ҡуйыу; һаплау. *Балтаны* ***ашлау.*** *Көрәкте* ***ашлау.*** *Салғыны* ***ашлау.***

2. Үҙ урынына ҡуйыу. *Рамды тәҙрәгә* ***ашлау.***

**ашыҡ I** [*ғәр.*] *и.* 1. Малдың бәкәл быуынындағы ваҡ һөйәк һәм уйын өсөн файҙаланылған шул һөйәк. *Ҡуҙыйкүрпәс уйындан һуң балаларҙың* ***ашыҡтарын,*** *буралары талап ҡайтып китә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ашыҡ II** *р. диал.* Артыҡ. *Ике тоннанан* ***ашыҡ*** *иген.*

**ашыҡ III** *ҡ.* Етеҙ, тиҙ ҡуҙғалып, тиҙ булырға тырышыу; ҡабаланыу. *Арғы остан* ***ашығып*** *берәү килә — минең йәнкәйемдең атлауы.* Халыҡ йырынан. ***Ашыҡҡан*** *арыр, әкрен һаман барыр.* Мәҡәл.

**ашыр I** *ҡ.* Ниндәйҙер сиктән, күләмдән үткәреү. *Саманан* ***ашырыу.*** ▬ *Арыш уңышын һәр гектарҙан 30 центнер* ***ашырҙыҡ.*** «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 август.

**ашыр II** *ҡ.* Нимәгәлер яраҡлы хәлгә килтереү; үтәү. *Бойомға* ***ашырыу.*** *Ғәмәлгә* ***ашырыу.*** *Тормошҡа* ***ашырыу.*** *Эшкә* ***ашырыу.***

**ая I** *и.* Дүрт бармаҡ киңлегендәге үлсәү берәмеге. *Итенең ҡырҡмаға ҡараһы юҡ. Ҡабырға һырттары бер* ***ая*** *май, байғоштоң.* Һ. Дәүләтшина.

**ая II** *и.* Дебетте таҙартыу, тетеү өсөн ҡулланылған энә тараҡлы ҡорал. ***Ая*** *менән тетеү.*

**аяҡ I** *и.* 1. Кешенең, ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың баҫып йөроү өсөн хеҙмәт итә торған ағзаһы. *Уң* ***аяҡ.*** *Һул* ***аяҡ.*** ▬ *Башыңда аҡылың булмаһа,* ***аяғыңа*** *кос.* Мәҡәл. *Яза — баш осонда, ҡаза —* ***аяҡ*** *аҫтында.* Әйтем. *Юрғаныңа ҡарап* ***аяғыңды*** *һуҙ.* Әйтем.

2. Ултыртмалы нәмәләрҙең аҫтағы терәге; тояҡ. *Өҫтәл* ***аяғы.*** *Ултырғыс* ***аяғы.***

**аяҡ II** *и.* Ағас табаҡ. *Сөм* ***аяҡ.*** *Бер* ***аяҡ*** *ҡымыҙҙың ике аяҡлыҡ еле бар.* Әйтем.

**аяҡ III** *и.* Кәлепләнгән епте, йөндө үлсәү берәмеге. *Бер* ***аяҡ*** *йөн.*

**аяҡла I** *ҡ.* Аяҡ менән тәрән һыуҙың төбөнә етеү, буйлау (тәрәнлеғен самалар өсөн). *Күлде **аяҡлап** ҡарау түгел, унда һыу инергә лә ҡурҡа инек.* З. Ураҡсин.

**аяҡла II** *ҡ.* Сиратҡан епте, йөндө тубыҡҡа, кәләпкә һалып урау. *Йөндө **аяҡлау**.*

# Б

**баба I** *и.* Нәҫел, ырыуҙың боронғо быуыны. *Бер беҙ түгел, **бабалар** ҙа беҙҙең михнәт күреп ғүмер иткәндәр.* Х. Ҡунаҡбай. [*Һәүбән — Һыуһылыуға*:] ***Бабам** Урал батырҙың Аҡбуҙ атын бир, һылыу*! «Аҡбуҙат».

**баба II** *и.* 1. Сөннәткә ултыртыусы. ***Баба** килгән.*

2. Сөннәт. ***Бабаға** биреү. **Бабаға** ултыртыу.*

**бағана I** *и.* Ергә ҡаҙып ултыртылған бүрәнә. ***Бағана** ултыртыу. Күпер **бағанаһы**. Ҡапҡа **бағанаһы**.* ▬ *Маһира менән Шәйхи ҡаҙылған соҡорға **бағана** ултыртып маташа ине.* Х. Ғиләжев.

**бағана II** *и.* Бармаҡ араһына сыҡҡан шешек. ***Бағана** сығыу.*

**бағын I** *ҡ.* Тирә-яҡҡа ҡарау; ҡараныу. ***Бағынып** тороу.*

**бағын II** *ҡ.* 1. Хөкөмгә баш һалыу, бойондороҡло булыу; буйһоноу. ***Бағынған** ғәскәр. Ғәскәр **бағынды**.*

2. *күсм.* Бөтә булмышы менән берелеү; табыныу. *Матурлыҡҡа **бағыныу**. Йырға **бағыныу**.*

**баҙла I** *ҡ.* Сағылйып йымылдау; йылҡылдау. *Күктә, ынйыы бөртөктәре кеүек, йондоҙҙар **баҙлай**.* Ж. Кейекбаев. *Инде ағаһы алып ҡайтҡан матур **баҙлап** торған сатин күлдәкте тегергә кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина.

**баҙла II** *ҡ. диал.* Баҙ ҡаҙып күмеү. *Амбарҙарға иген бушаталар, һыймағанын ергә **баҙлайҙар** ине.* И. Көҫәпҡол.

**баҙыҡ I** *с.* Тулы көскә эйә, ныҡ, көслө. ***Баҙыҡ** бағана. **Баҙыҡ** теш.* ▬ *Йыр, бейеүгә һөнәрле ҡыҙ, көрәшкә **баҙыҡ** егет.* С. Кулибай.

**баҙыҡ II** *с.* Бик ныҡ, сағыу. ***Баҙыҡ** йондоҙ. **Баҙыҡ** күлдәк.* ▬ *Ал ҡояштың **баҙыҡ** нурҙары еҙ батмуста сағылып уйнаны.* М. Тажи.

**баҙыҡлан I** *ҡ.* Баҙыҡҡа, көслөгә әйләнеү; баҙыҡ булыу. *Уҡыусылар ҡояшҡа ҡарайып, эштә сыныгып, **баҙыҡланып** киткән.* Б. Ноғоманов.

**баҙыҡлан II** *ҡ.* Бик асыҡ, сағыуға әйләнеү. [*Зәлифә гөлгә*] *һалҡын һыу һибеп ебәрә торгайны. Гөл йәнә **баҙыҡланып**, балҡып киткәндәй була* [*ине*]. З. Ураҡсин.

**байы I** *ҡ.* 1. Күп мал-мөлкәткә эйә булыу, байға әйләнеү. *Бара-тора Ирйегет үҙе лә **байып**, карап хужаһы булып алган.* З. Биишева.

2. Состав һәм эстәлек йәһәтенән тулыланыу. *Белемгә **байыу**.* ▬ [*Айбулат:*] *Аҡсага булмаһа, аҡылга **байып** ҡайттым.* Һ. Дәүләтшина.

**байы II** *ҡ.* Офоҡ артына күсеү (күк есемдәренә карата); батыу. *Ҡояш **байыны**.* ▬ ***Ай байыны**, таң атты.* М. Ғафури.

**баҡ I** *ҡ.* 1. Күҙ йүнәлтеү, ҡарау. *Алга **багыу**. Тура **багыу**.* ▬ *Миңлегөл ике сикәһенән ҡыҫып, Буранбайҙы үҙенәрәк тартты. Сылт та итмәй уга **баҡты**.* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡайҙа **баҡма** — унда упҡын, унда ҡанлы кәүҙәләр.* Д. Юлтый.

2. Ҡарап тәрбиәләү. *Бала **багыу**. Мал **багыу**.* ▬ [*Илбикә:*] *Үҙем **багып**, үҙем буй еткергәс, үҙ ҡыҙыма үҙем хужа мин.* Х. Ғәбитов.

**баҡ II** *ҡ.* Буйһоноу. *Ата-әсәгә **багыу**.*

**баҡыр I** *и.* 1. Ҡыҙғылт төҫтәге һуҙылыусан һәм еңел сүкелә торған йомшаҡ металл. *Урал тауҙың ҡуйынында алтын да, **баҡыр** ҙа бар.* Ҡобайырҙан. ***Баҡырҙы** күпме йышһаң да алтын булмаҫ.* Мәҡәл.

**баҡыр II** *ҡ.* 1. Ныҡ итеп ҡысҡырыу (кәзә, һарыҡ, һыйыр малына ҡарата). [*Сәрби әбей:*] *Көтөүҙән ҡалганга, иптәштәренән айырылганга күрә **баҡыра** меҫкен кәзәм.* М. Ғафури. *Югары оста... һарыҡтар **баҡыр***[*а*]. И. Көҫәпҡол.

2. *күсм.* Асыуланып яман ҡысҡырыу (кешеғә ҡарата); аҡырыу. *Әмирханов минең ни әйткәнде белгәс, йөҙөнөң һөрөмөн ҡойҙо: «Һай, ахмаҡ, был ниндәй оятһыҙлыҡ!» — тип **баҡырҙы**.* С. Агиш.

**бал I** *и.* Ҡорт, иңкештең сәскә һутынан йыйып яһаған татлы ҡуйы матдәһе. *Йүкә* ***балы****. Кәрәҙле* ***бал****. Һитәле* ***бал****.* ▬ *Бал ҡорттары май сәскәләренән тәүге* ***балдарын*** *йыя башланы.* Д. Юлтый. ***Бал*** *себенде, яҡшы һүҙ әҙәмде эйәләштерә.* Мәҡәл.

**бал II** *и.* Балдан йәки шәкәрҙән әсетелгән иҫерткес эсемлек. *Бал* ***балы****.* ***Бал*** *ҡойоу. Шәкәр* ***балы****.* ▬ *Хафиз ҡарт, бер-ике стакан* ***бал*** *эсеп алғас, һүҙгә йомартланып китте.* М. Тажи.

**бал III** [*рус.* < *фр.*] *и.* Ҙур танса кисәһе. *Костюмлы* ***бал****. Маскарад* ***балы****. Яңы йыл* ***балы****.*

**бар I** *мөн.* 1. Кемдең йәки ниҙеңдер ғәмәлдә булғанлығын белдерә; *киреһе* юҡ. *Атым* ***бар*** *— йүгәнем юҡ, дәртем* ***бар*** *— һөйгәнем юҡ.* Халыҡ йырынан.

2. Исем функцияһында. ***Бар*** *яраштырыр, юҡ талаштырыр.* Мәҡәл. ***Барҙың*** *барлығы тейер, юҡтың тарлығы тейер.* Мәҡәл.

3. Хәбәр функцияһында. — *Ҡуйсы әле, ниндәй кеше икәнен дә белмәйһең, изге кеше булыуы* ***бар****, үҙеңә насар булып ҡуймаһын.* Әкиәттән.

**бар II** *билд. а.* Бөтә булған; һәммә. *Ғариф ҡарттың тәҡдимен йыйылыштағы* ***бар*** *кеше урынлы тапты.* Б. Бикбай.

**бар III** [*рус.* < *англ.*] *и.* Бәләкәй ресторан. ***Барҙа*** *ашап сығыу.*

**бар IV** *ҡ.* 1. Ниндәйҙер бер йүнәлештә хәрәкәт итеү. *Йәйәү* ***барыу****. Поезд менән* ***барыу****. Шәп* ***барыу****.* ▬ *Эй* ***бара****, ти, былар, эй* ***бара****, ти, эт алдан йүгерә, көтөүсе уның артынан йүгерә, ти.* ***Бара*** *торғас, әлеге урманға барып инделәр, ти.* Әкиәттән.

2. Ниндәйҙер маҡсат менән ҡайҙалыр йүнәлеү йәки булыу. *Ауға* ***барыу****. Баҙарға* ***барыу****.*

3. Тәғәйенләнгән ергә етеү (хат һ. б. нәмәгә ҡарата). *Хат яҙғас, бер аҙ йөрәк баҫыла, күңел тынысланa: бәлки хат* ***барыр****, бәлки алып уҡырҙар.* Д. Юлтый.

4. Ниндәйҙер йүнәлештә булыу (һүҙ, уй, ниәт кеүек нәмәгә ҡарата). *Ғәләметдин шаян Сөләйҙең тел төбө*

*ҡайҙа **барғанын** аңламайыраҡ ҡалды, күрәһең.* Ш. Насыров.

5. Дауам итеү, булыу (эш, әңгәмә һ. б. ҡарата). *Ҡыҙыу бәхәс **бара**. Һүҙ уның тураһында **бара**.* ▬ *Юҡҡа болоҡһой кеше, ә тормош һаман үҙ юлынан **бара** бирә.* Б. Бикбай.

6. Билдәле бер йәш уҙғарыу. *Ҡыҫығыраҡ күҙле, өс йәше менән **барған** малай шым ғына тора.* Ә. Вәли.

7. Ниндәйҙер ғәмәлде кисереү; ғәмәлләшеү. *Сауҙа насар **бара**. Уҡыу яҡшы **бара**. Эштәр һәйбәт **бара**.* ▬ [*Егет — Алпамышаға*:] *Тиҙерәк ҡайт, унда бәйге **бара**, һуңлап ҡалма.* «Алпамыша».

8. Кейәүгә сығыу. [*Зәйнәп*:] *Ғарифтың нисә ҡыҙ алып айырғанын бик яҡшы беләм. Мин уға үлһәм дә **барасағым** юҡ.* М. Ғафури.

9. *күсм.* Берәй йүнәлештә үҫеш алыу. *Техник прогресс юлынан **барыу**.*

10. *күсм.* Ниндәйҙер эш, ҡылыҡҡа аҙым яһау. *Түбәнлеккә **барыу**.* ▬ *Үҙ теләге менән ошондай эшкә **барыр** инеме ни ул?* З. Биишева.

11. Ниндәйҙер сифат, тәбиғәттән сығып эш итеү. *Уҫаллығыңа **бараһың**.* ▬ *Эй, малай саҡ, шуҡлығыңа **барып**, сәскәләргә булдың хаяһыҙ.* В. Әхмәҙиев.

12. *күсм.* Ярарлыҡ булыу; ярау. *Уҫаҡ балта һабына **бармай**.*

13. Төҫ булыу; килешеү. *Зәңгәр күҙгә зәңгәр күлдәк бик **бара**.*

14. *күсм.* Үтемле булыу; үтеү. *Тамаҡҡа аш **бармай**.*

15. Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, башҡа ҡылымдар менән ҡушма ҡылымдар яһай. ***Барып** етеү. **Барып** инеү. **Барып** йөрөү. **Барып** ҡушылыу. **Барып** тоташыу. **Барып** ултырыу. **Барып** һуғылыу. **Барып** әйтеү.*

16. **-а/-й** формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамсы ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай. а) эш-хәрәкәттең даимилыҡ мәғәнәһен белдерә. *Гәзит-журналдарҙы уҡып **барыу**. Йырлап **барыу**. Китеп **барыу**. Ҡарап **барыу**. Радионан кәрәкле нәмәне тыңлап **барыу**. Һәр һүҙҙе яҙып **барыу***; б) *эш-хәрәкәттең нимәгәлер йүнәлеш*

*алыуын белдерә. Аҙыҡ бөтә* ***бара****. Арта* ***барыу****. Бөтә* ***барыу****. Байый* ***барыу****. Ҙурайып* ***бара****. Ишәйә* ***бара****. Иомшара* ***бара****. Камиллаша* ***барыу****. Көн кисләп* ***бара****. Көсәйә* ***барыу****. Үрсей* ***барыу****. Һауыт тулып* ***бара***; в) нимәгәлер тиҙ генә ыңғайлауҙы белдерә. *Илап* ***барыу****. Ярһып* ***барыу****.*

**бараба I** *и.* Ҡыҙғылт супай башлы, күк аралаш ҡанатлы эре буҙ турғай; суҡ турғай, сойка. ***Бараба** килгән.*

**бараба II** *с. диал.* Аумаҡай. ***Бараба** кеше.*

**барнау I** *и. иҫк.* Боронғо өс тинлек баҡыр аҡса. *Эй ҡоҙаның бүләге, ошомо икән күргәне, етмешлек тип көткән булһаҡ, һуҡыр* ***барнау*** *биргәне.* Туй йырынан. *Бер* ***барнау*** *юҡ кеҫәлә, ике күҙе бисәлә.* Мәҡәл.

**барнау II** *с. иҫк.* Ҡәҙере булған, ҡәҙерле. *Малын түгел, йәнен алырбыҙ, Мәжит илгә* ***барнау*** *ир түгел.* Халыҡ йырынан.

**барыш I** *и.* Бер йүнәлеш буйынса булған хәрәкәт. *Аттың* ***барышы*** *менән ... Аҡназар ҡалғып, һуңғараҡ ойоп китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**барыш II** *ҡ.* Бер-береңә барыу. *Улар [Күсәр менән Күсмәҫ] икеһе бик дуҫ булып, ҡунаҡҡа* ***барышыр,*** *... һунарға йөрөшөр булған, ти.* Әкиәттән.

**баҫма I** *и.* Йылға, соҡор аша йәйәүле кеше өсөн эшләнгән тар ҡоролма. *Бүрәнә* ***баҫма****. Таҡта* ***баҫма****.* ▬ *Һыу арҡыры* ***баҫма*** *һалдым тал-тирәктәр буйынан.* Халыҡ йырынан.

**баҫма II** *с.* Типографик ысул менән яҙылған; ташҡа баҫҡан. ***Баҫма** табаҡ.* ***Баҫма** хәреф.*

**баҫма III** *и.* Нәшриәттән сыҡҡан әҫәр. *Академик* ***баҫма****. Китаптың икенсе* ***баҫмаһы****. Әҙәби* ***баҫма****.*

**баҫма IV** *и.* Еп үлсәү берәмеге (утыҙ һабаҡтан тора). *Ҡоҙағыйҙың күлдәгенә һигеҙ* ***баҫма*** *еп киткән.* Туй йырынан.

**баҫма V** *и.* Үҫемлектән алынған ҡара сәс буяуы. *Сәс буяу өсөн иң һәйбәте — ҡына менән баҫма.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 декабрь.

**баҫтыр I** *ҡ.* Аяҡ өҫтө ҡуйыу, аяҡ үрә торғоҙоу. *Ергә* ***баҫтырыу****.* ▬ *Ул [Хафиз ҡарт] Булатты арбаның артына* ***баҫтыр****[ҙы]*. М. Тажи.

**баҫтыр II** *ҡ.* Арттан ҡыуыу. *Аҡ ҡуянҡайҙарҙы ай ҡасырҙым, аҡбуҙ атҡай менән* ***баҫтырҙым.*** Халыҡ йырынан.

**баҫым I** *и.* 1. Ғаз һәм шыйыҡлыҡтың баҫыу һәм яняҡҡа этеү көсө. *Атмосфера* ***баҫымы.*** *Газ* ***баҫымы.*** *Һауа* ***баҫымы.*** *Һыу* ***баҫымы.***

2. Кешенең көсөн, ихтыярын баҫыу өсөн яһалған тышҡы тәьҫир; ҡыҫым. ***Баҫым*** *яһау.* ▬ [*Йәрмәт*] *аҡтыҡҡы һулышына тиклем һуғыша, ахырҙа күмәк көстөң* ***баҫымы*** *аҫтында ҡарыуы ҡайтып ергә йығыла.* Хикәйәттән.

**баҫым II** *и.* Һүҙҙәге бер ижектең тауыш менән айырылыуы һәм шундай айырылыуҙы күрһәтеп, хәреф өҫтөнә ҡуйылған билдә. ***Баҫым*** *ҡуйыу.*

**баҫым III** *с.* Бер һалып йәки өйөп баҫҡан. *Бер* ***баҫым*** *балсыҡ.* ▬ *Атайым, Дәүләтгәрәйҙең атаһына ике* ***баҫым*** *тиҙәк һуғырға булып, миңә ҡыҙыл бәҙҙән бишмәт тектерҙе.* Ғ. Ғүмәр.

**батыр I** *с.* Ҡурҡыу белмәҫ; ҡыйыу. *Ил намыҫын һаҡлап, яуға сығыу* ***батыр*** *егеттәрҙең бурысы.* Халыҡ йырынан.

**батыр II** *и.* Ҡыйыулығы, көсө менән танылған кеше. *Яу* ***батыры.*** ▬ ***Батырға*** *ҡурҡыныс нәмә юҡ.* ***Батыр*** *үлемдән ҡурҡмаҫ булыр.* Әкиәттән.

**батыр III** *ҡ.* Шыйыҡ, бөртөклө һәм башҡа нәмә эсенә индереү. *Ҡарға* ***батырыу.*** *Ҡомға* ***батырыу.*** *Һыуға* ***батырыу.*** ▬ [*Гөлйөҙөм*] *силәген* ***батырып,*** *һыу алайым тип эйелгәндә генә ... ҡар шығырлаған тауышты ишетте.* Һ. Дәүләтшина.

**баһа I** [*фарс.*] *и.* 1. Аҡсалата хаҡ. ***Баһа*** *ҡуйыу.* ▬ *Урал тауҙарының аҫыл ташы,* ***баһалары*** *— оло мал башы.* Халыҡ йырынан.

2. Кемдең йәки ниҙеңдер тотҡан әһәмиәте, урыны; ҡәҙер. *Уҡ* ***баһаһы*** *— атылғандан һуң, һүҙ* ***баһаһы*** *— әйтелгәндән һуң.* Мәҡәл.

**баһа II** *киҫ.* Әйтелгән фекерҙе нығыта. *Ана тора ла* ***баһа.*** *Аты бар ҙа* ***баһа.*** *Ҡайтҡан да* ***баһа.*** ▬ *«Һуң бит,*

*Айбулат быйылдан да ҡалмай хеҙмәткә китергә тейеш тә баһа»,* — *тип ... һөйләнде* [*Ныязғол*]. Һ. Дәүләтшина.

**башаҡ I** *и.* Ҡыяҡлы үҫемлектең емле башы. ***Башаҡ*** *ебәреү.* ***Башаҡ*** *сүпләү.* ***Башаҡҡа*** *ултырыу. Ҡылсыҡлы* ***башаҡ.*** ▬ *Ғимран бер бөртөк* ***башаҡты*** *көлтәнән һабағы менән һурып алып, усына ыуҙы ла тарыныӊ уӊғанлығына бик һоҡланды.* Ж. Кейекбаев.

**башаҡ II** *и.* Уҡ башына ҡуйылған үткер ос. *Еҙ* ***башаҡ.*** *Ҡорос* ***башаҡ.*** *Уҡ* ***башағы.***

**башка I** *с.* Бынан икенсе, бүтән. ***Башҡа*** *ваҡыт.* ***Башҡа*** *ер.* ***Башҡа*** *ҡала.* ▬ *Зөлхизә* ***башҡа*** *бер егеткә лә ҡарамай. Аҙнағолдо көтөп, ... моңайып йырлап йөрөй.* З. Биишева.

**башҡа II** *р.* 1. Бынан ары; бүтән. *Муйылбикә* ***башҡа*** *өндәшмәне.* Һ. Дәүләтшина.

2. Үҙенә бер яры; айырым. *Башмаҡ тапһа* — ***башҡа*** *ашар, егет тапһа* — *бергә ашар.* Мәҡәл.

**башҡа III** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, «бүтән» мәғәнәһен бирә. *Атайыма бер салбарлыҡтан* ***башҡа*** *бер нәмә лә алып ҡайта алманым.* Т. Йәнәби.

**башлыҡ I** *и.* Берәй төркөм, ойошма һ. б. башында тороусы кеше, баш кеше, етәксе. ***Башлыҡ*** *булыу. Делегация* ***башлығы.*** *Ғәскәр* ***башлығы.*** *Хөкүмәт* ***башлығы.*** ▬ *Кемуҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше* ***башлыҡ*** *була.* М. Кәрим. *Егерме рус һалдаты, алдан бара* ***башлығы.*** Бәйеттән. *Аҡырған* ***башлыҡ*** *түгел, аҡылы бар* ***башлыҡ.*** Мәҡәл.

**башлыҡ II** *и.* Еңел баш кейеме йәки пальто, куртка, комбинезон яғаларына беркетеп ҡуйылған һәм башҡа кейелә торған махсус әйбер; капюшон. ***Башлыҡ*** *алыу.* ***Башлыҡ*** *бәйләү.* ***Башлыҡ*** *кейеү. Бүҫтау* ***башлыҡ.*** *Бәйләгән* ***башлыҡ.*** *Йөн* ***башлыҡ.*** *Плащ* ***башлығы.***

**башмаҡ I** *и.* Ярты йәштән алып йәш ярымға тиклемге һыйыр малы. *Орғасы* ***башмаҡ.*** *Үгеҙ* ***башмаҡ.*** ▬ *Анау ҡара* ***башмаҡ*** *һәр көн һайын инәһен имә лә ҡуя.* Д. Юлтый. ***Башмаҡ*** *тапһа* — *башҡа ашар, егет тапһа* — *бергә ашар.* Мәҡәл.

**башмаҡ II** *и.* Ҡунысһыҙ аяҡ кейеме. *Һин оҡшайһың күлдә йөҙгән аҡҡоштарға, йөрөгәндә аҡ күлдәк, аҡ **башмаҡ** менән.* Ш. Бабич. *Әсәй икебеҙгә лә бер юлы берәр пар **башмаҡ** һуҙа, өр-яңы күн **башмаҡтар**.* М. Кәрим. *Ҡотлой, һикенән тиҙ төшөп, ялан аяғына **башмаҡ** кейҙе.* А. Таһиров. *Ағас **башмаҡ** менән йөрөү — үҙе һиңә бер ғазап.* Бәйеттән.

**баян I** [*рус.*] *и.* Күп телле ҙур гармун. ***Баян** алыу. **Баян** уйнау.* ▬ *Йәш егет **баянын** һуҙып ебәрҙе.* Д. Юлтый.

**баян II** [*ғәр.*] *и.* Ниҙер хаҡында хәбәр итеп һөйләгән һүҙ. ***Баян** итеү.* ▬ *Әбей Күсәк батырҙың ҡайһы ырыуҙан икәнен **баян** ҡылған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**беҙ I** *зат а.* Һөйләүсе һәм уның менән бергә булган бер нисә шәхесте белдерә. *Әле мыйыҡ сығып, ир булғансы, **беҙ** күтәрҙек ауыр бер эште. Булыр көнгә ижад көсөн бәйләп, **беҙ** төҙөйбөҙ бергә тормошто.* Ғ. Амантай. *Беҙ подвалдан, ер аҫтынан сыҡтыҡ; **беҙ** иҙелгән халыҡ тоҡомо.* Х. Кәрим.

**беҙ II** *и.* Сәнсеп тишә торған эш ҡоралы. *Йыуан **беҙ**. Нәҙек **беҙ**.* ▬ ***Беҙ** ҡапсыҡта ятмай.* Мәҡәл.

**белеш I** *и.* Башҡорттоң аралашып йөрөгән рус дуҫы. *Ваһап ҡарт тарыны быйыл **белешенән** сәстерҙе.* Ж. Кейекбаев.

**белеш II** *ҡ.* Кем йәки нимә хаҡында һорашып, мәглүмәт алыу. *Хәл **белешеү**. Эш **белешеү**.* ▬ *Атайым, Хәмит ағай эргәһенә барып, ҡайһы ылауға ултырырға икәнен **белешкәс**, тоғон арбаға илтеп һалды.* Н. Мусин.

**берлек I** *и.* Бер һумлыҡ аҡса. *Ике **берлек** биреү.*

**берлек II** *и.* Эш, тормоштағы уй, ниәт уртаҡлығына нигеҙләнгән тығыҙ мөнәсәбәт; берҙәмлек. *Күңел **берлеге**. Ҡараштар **берлеге**.* ▬ *Көслө эш, ныҡлы көс — **берлектә**. **Берлектә**! Йәшәһен элемтә!* Ғ. Амантай. ***Берлектә** — терелек.* Әйтем.

**бес I** *ҡ.* Кейем тегеү өсөн тауарҙы үлсәп ҡырҡыу. ***Бесә** белеүсе юҡ. Шулай ҙа ҡыҙҙар ... күлдәктең бөтә ҡатмарын хәтерҙәренә төшөрә-төшөрә икәүләп **бесте**.* Һ. Дәүләтшина. *Атанан күргән уҡ юныр, инәнән күргән тун **бесер**.* Әйтем. *Буйыңа ҡарап туның **бес**.* Әйтем.

**бес II** *ҡ.* Аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыу; һылыулау. *Мал **бесеү**.*

**беш I** *ҡ.* Ҡайнап юғары эҫелектә тороп, ашау-эсеү өсөн әҙер булыу. *Бутҡа **бешеү**. Ҡоймаҡ **бешеү**.* ▬ *Ул арала һалма **бешеп** өлгөрҙө.* Һ. Дәүләтшина. *Һәр походта рустың һәм башҡорттоң бер ҡаҙанда **беште** аштары.* Р. Ниғмәти. *Иртә барһаң, ит **бешер**; һуңға барһаң, бит **бешер**.* Мәҡәл.

**беш II** *ҡ.* 1. Көбөгә һалып, аҫҡа-өҫкә табан болғатыу (*ҡымыҙ, айран, май яһау* өсөн). *Май **бешеү**. Ҡымыҙ **бешеү**.* ▬ *Мин тиҙ генә күнәгемдән бер туҫтаҡ ойотҡан алдым да, һыуыҡ һыу ҡойоп, көбөлә **бешә** һалып, айран һыулап, өлкән алдыр менән ике ҡуллап бабайға һуҙҙым.* Һ. Дәүләтшина. *Көбөләрҙе ыҫлағанға, ваҡытында **бешеп** торғанға шулай көслө һәм хуш еҫле була ул ҡымыҙ.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 июнь.

2. *күсм.* Ныҡ әрләү; бешереү. — *Ҡыланды инде* [*бабай*] *заманында, хәҙер ҙә тынғы бирмәй. Бигерәк тә комбайнерҙарҙы **бешә**; урылған ерҙә бер генә башаҡ күреп ҡалһа ла, тегеләрҙең йәнен ала.* И. Ғиззәтуллин.

3. *күсм.* Ныҡ туҡмау. [*Ғәйзулла:*] *Ниңә илайһың? Әллә малайҙар **бештеме**?* Я. Хамматов.

**биҙ I** *и.* Тереклектәрҙең эске эшмәкәрлеге өсөн кәрәкле матдәләр эшләп сығара торған махсус ағза. *Боғаҡ **биҙе**. Йәш **биҙе**. Ҡалҡан **биҙе**. Май **биҙе**. Тир **биҙе**. Төкөрөк **биҙе**.*

**биҙ II** *ҡ.* Бик нык ялҡып, ҡабат әйләнеп ҡарамаҫтай булыу. *Тар ҡәберҙең ҡуйынына керҙем — ҡотолдом донъянан, сөнки **биҙҙем** донъянан, артыҡ тораһым килмәне.* Ш. Бабич. *Гәрәй **биҙҙе**, ни сара, ғүмерең үтте бисара; яңғыҙ һалҡын төндәрең ҡайғы менән киселә.* М. Өмөтбаев.

**биҙгәләк I** *и.* Ҙурлығы тауыҡ хәтле, арҡаһы һор сыбар, ҡорһағы аҡ, аяғы оҙон йүгерек дала ҡошо; ҡарһаҡ туғаҙаҡ. ***Биҙгәләк** бәләкәй генә бер ырҙын яһап ала ла һәр ваҡыт шунда өйөрөлөп бейей. Бейегән ырҙыны ҡатып, ялтырап китә.* Һ. Дәүләтшина.

**биҙгәләк II** *с.* Ҡулға ылыҡмаҫ, ҡырағай (малға ҡарата). [*Айбулат:*] *Ул шайтан шикелле дөйәләр, балаларға*

*түгел, Сәйетҡол ағайҙың үҙенә лә баш бирмәй китә әле. Бигерәк тә анау Нар дөйә, Моҡаш, Күк дөйә* ***биҙгәләк.*** Һ. Дәүләтшина.

**биҙәрлә I** *ҡ.* Биҙәкле итеү; биҙәкләү. *Ауылдың* ***биҙәрләп*** *эшләнгән киң ҡапҡаһынан кереүем булды — гөлдөр итеп ебәрҙе лә, ҡойоп ямғыр яуа башланы.* Ә. Вахитов.

**биҙәрлә II** *ҡ.* Биҙрәү. *Ауыл тып-тын: һәр йән эйәһе, туңыуҙан* ***биҙәрләп,*** *үҙенең йылы мөйөшөнә һыйынған.* Й. Солтанов.

**бик I** *и.* Ишек, ҡапҡа, ҡапҡасты кеше аса алмаһын өсөн эләктереп ҡуя торған ҡулайлама. *Аҙбарға ябылған кәзә бәрәсе кеүек, нисек* ***бик*** *аҫтында ултыраһың инде ул?* М. Кәрим.

**бик II** *киҫ.* Сиктән тыш, саманан тыш дәрәжәлә; үтә, ғәйәт. *Кәмәләр күл уртаһына еткәс,* ***бик*** *моңло йыр яңғыраны.* М. Кәрим. *Тау* ***бик*** *бейек, диңгеҙ иһә* ***бик*** *киң — икеһе лә шундай мөһабәт!* Н. Нәжми.

**биклә I** *ҡ.* Бик һалып ябыу. *Ишекте* ***бикләү.*** ▬ *Әсәһе Кәримдең ҡайтҡанын оҙаҡ көткәндер, ахыры. Ҡапҡа менән соланды ла* ***бикләмәгән.*** Я. Хамматов.

**биклә II** *ҡ.* Ятлау. *Шиғырҙы ятҡа* ***бикләү.***

**билә I** *ҡ.* Ниҙелер үҙ ҡарамағында тотоу, үҙ ҡарамағына алыу. *Вотчиналарҙың ярлыланыуының һәм бөтөүенең иң төп сәбәбе булып шул тора: ... күп урында ерҙе әле булһа X ревизия буйынса* ***биләйҙәр,*** *ә ул ревизия буйынса иҫәпләп йөрөтөлгән кешеләрҙең өстән бер өлөшө хәҙер донъяла юҡ.* М. Өмөтбаев. *Ныязғол, Айбулаттың атаһы үлгәс, уның опекуны булып алды ла, уның йәшләгенән файҙаланып, уға тейгән ике душ ерҙең бөтәһен дә үҙе* ***биләне.*** Һ. Дәүләтшина.

**билә II** *ҡ.* Йәш баланы йүргәккә урап бәйләү. *Сәңгелдәктә аҡ* ***биләүгә*** *биләнең һин, киләсәккә миңә бәхет теләнең һин.* Н. Иҙелбай.

**бире I** *р.* Был яҡҡа яҡыныраҡ, былай табан; киреһе ары. [*Урманцева:*] *Аҡыллым, кил әле* ***бире!*** С. Ағиш.

**бире II** *бәйл.* Сығанаҡ килештән йәки эйәлек ялғаулы ***-ған*** формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәт, хәл-ваҡиғаның

башланғыс мәленән дауамын белдерә. *Кистән **бире**. Киткәне **бире**. Кисәнән **бире**. Баянан **бире**. Шунан **бире**.*

**бит I** *и.* 1. Кеше башының алғы яғы. *Киң **бит**. Оҙонса **бит**. Түңәрәк **бит**.* ▬ *Күп ятып та тар ерҙәрҙә һаргайҙы **бит**. Был ерҙәрҙә йәндәй яҡын булалыр сит.* Аҡмулла. *Алмалыгөл, аһ, бешеп еткән алмалы **бит**, иманлы **бит**, илһамлы **бит**, аллалы **бит**.* Ш. Бабич. *Һыу ситендә саҡ ҡына өргән дымлы еләҫ ел, сәскә еҫтәре менән ҡатнашып, **бит**, ҡул, муйындарҙы иркәләп һыйпаны.* Һ. Дәүләтшина.

2. Иөҙҙөң яңаҡ өлөшө; яңаҡ. *Пар алма уның **биттәре**, ирендәре ер еләге, күҙҙәре — яҡты йондоҙҙар, леп-леп тибә йөрәге.* Р. Ниғмәти.

3. Тау, ҡалҡыулыҡтың һ. б. һарҡыу өлөшө. ***Биттәреңдә**, Урал тау, ҡамыштай ҡарағай урманың; итәгеңдә, Урал тау, балаҫтай болон, ҡырҙарың.* Салауат Юлаев.

4. Ниҙеңдер йәйелеп күренеп ятҡан майҙаны; йөҙ. *Ер **бите**. Күл **бите**. Ҡар **бите**.* ▬ *Эре һорғолт ҡара болоттар бер-береһенә ҡушылып күк **битен** ҡаплап алды.* М. Ғафури.

**бит II** *и.* Китаптағы, дәфтәрҙәге һ. б. ҡағыҙҙың бер яғы. *Дәфтәр **бите**. Китап **бите**.* ▬ *Гәзиттең дүртенсе **битенән** мин уҡырға тейеш ерҙе бармаҡ менән төртөп күрһәттеләр.* С. Ағиш. *Һәр бер **бите**, хатта һәр бер юлы уйҙарымдай таныш китаптың.* Х. Ҡунаҡбай. *Тарих ҡала китап **биттәрендә**, һәм ул ҡала таштар **битендә**.* Н. Нәжми.

**бит III** *киҫ.* Әйткән фекерҙе раҫлап көсәйтә. ***Бит** егерме бер йыл ошо мейес янынан китмәй, ошо сусҡаларға аш бешерҙем **бит**.* Һ. Дәүләтшина. *Йәш күңел **бит** инде, миңә тәү башлап ҡалаға барыу ҙа ҡыҙыҡ булып тойолдо.* Т. Йәнәби. — *Бурылҡайым, мин **бит** яҡшы инем, эш эшләнем, туктем тиремде.* Ғ. Сәләм. [*Бибикамал:*] *Эй тәкәббер кешеһегеҙ **бит**. Сер бирмәйһегеҙ **бит**. Улымдың аты ла бар **бит**, арбаһы ла бар **бит**, урманға үҙе баш **бит**, үҙе түш бит — шунда утынын түгел, атын да һорамайһығыҙ **бит**.* Н. Нәжми.

**битлә I** *ҡ.* Ғәйепләп әйтеү. *Кеше алдында яманлап **битләү**.*

**битлә II** *ҡ.* Китап, дәфтәрҙең битен асыу. *Ул [Шәмси] ҡулындағы китапты **битләп** ултырҙы ла уҡый башланы.* Ғ. Хәйри.

**битәр I** *и.* Йөҙ йыртып әйтелгән һүҙ. *Бей **битәрен** ишеткән, йәнен бейҙән өшөткән ил күрмәйенсә, кем күрер.* Ҡобайырҙан.

**битәр II** [*фарс.*] *р.* Артыҡ, бигерәк, нығыраҡ. *Беҙ үҙебеҙҙән **битәр** аттарҙы йәлләй торғайныҡ.* С. Агиш. [*Хәмиҙә*:] *Шатландыҡ. Минән **битәр** килен шатланды.* С. Ҡудаш.

**бишбармаҡ I** *и.* Тураған ит менән эре һалманан торған тоҙлоҡло аш; ҡуллама. ***Бишбармаҡ** бешереү.*

**бишбармаҡ II** *и.* Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бейеүе. *Фирүзә сәхнәгә сығып, **бишбармаҡты** бейене.* К. Мәргән.

**бишнәк I** *и.* Тар итеп йырып, сит-ситен көпләп ағыҙған һыу. *Кәмә тирмән **бишнәгенән** һыу үренә күтәрелде.* Ғ. Хәйри.

**бишнәк II** *и.* Мәңгелеккә, ғүмерлеккә һатылған ер һәм уны һатҡан кеше. *Ерҙе **бишнәккә** һатыу.* ▬ *Ураҡсыларҙың күбеһе — ерҙәрен һатып, ерһеҙ ҡалып, бер нисә йылдан бирле **бишнәк** исеме күтәреп йөрөгән башҡорттар.* Һ. Дәүләтшина.

**блок I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Бер нисә дәүләт, партия йәки ойошманың бергә эш итеү маҡсатындағы берекмәһе. ***Блокка** инеү. Уң партиялар **блогы**.*

**блок II** *и.* Бау, сынйыр һ. б. шыуҙырып йөрөтөү өсөн улаҡ һымаҡ итеп эшләнгән, бер күсәрҙә әйләнә торған тәгәрмәстән ғибәрәт иң ябай йөк күтәреү һәм кос йүнәлешен үҙгәртеү йайланмаһы; сығыр. ***Блок** ярҙамында күтәреү.*

**блок III** *и.* Берәй төрлө ҡоролманың бер нисә элементтан торған өлөшө; секция. *Шлак-бетон **блоктар**.* ▬ *Баҡса йортона әҙер тәҙрә һәм ишек **блоктары** алыр инем.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 9 июнь.

**боҙ I** *и.* Туңған һыу. ***Боҙ** китеү. Йоҡа **боҙ**. Көҙгө **боҙ**.* ▬ *Йәйрәп ятҡан ялтыр һыу өҫтөнә көҙгө кеүек ялтыр **боҙ***

*туңған.* Ғ. Амантай. *Ҡыш бабай* ***боҙҙан,*** *былтырғынан да матурыраҡ итеп, бейек, яҡшы һарайҙар, селтәрле күперҙәр һалды.* М. Кәрим. *Ағиҙелкәй буйы киртләс-киртләс, киртләстәре китер* ***боҙ*** *киткәс.* Сеңләүҙән.

**боҙ II** *ҡ.* Төҙөк түгел хәлгә килтереү, яраҡһыҙ итеү. *Арбаны* ***боҙоу.*** *Машинаны* ***боҙоу.*** *Сәғәтте* ***боҙоу.*** ▬ *Йөрөй белмәгән юл* ***боҙор,*** *әйтә белмәгән һүҙ* ***боҙор.*** Мәҡәл. *Май бутҡаны* ***боҙмай.*** Мәҡәл.

**бокс I** [*рус.* < *ингл.*] *и.* Махсус ҡағиҙә буйынса йоҙроҡ менән һуғыша торған спорт төрө. ***Бокс*** *менән шөғөлләнеү.*

**бокс II** [*рус.*] *и.* Ирҙәрҙең түбәлә генә ҡалдырып алдырылған сәсе. *Сәсте* ***бокс*** *итеп алдырыу.*

**бокс III** [*рус.* < *ингл.*] *и.* Дауалау урындарындағы ауырыу кешене айырып тотоу бүлмәһе. *Ауырыуҙы* ***бокска*** *һалыу.*

**болон I** *и.* Үлән менән ҡапланған иркен ер. *Арҡа ерҙең үләне* ***болондарҙа*** *үҫкән гөл кеүек.* Халыҡ йырынан.

**болон II** [*рус.* полон] *и. һөйл.* 1. Хәрби тотҡонлоҡ; әсирлек. ***Болон*** *төшөү.* ▬ [*Юлдыбай:*] *Алығыҙ Ҡарамырҙаны* ***болонға!*** *Бикләп ҡуйығыҙ... бер йылға!* Х. Ғәбитов.

**боралҡы I** *и.* 1. Атаһынан йәтим ҡалып, әсәһе менән икенсе ауылға күскән йәки кейәүҙән айырылып ҡайтҡан ҡыҙ. ***Боралҡы*** *ҡайтһа, илгә бола килтерер.* Мәҡәл.

2. Ситтән килгән нәҫел-ырыуһыҙ кеше; килмешәк. [*Имай:*] *Ни нәмәһе шул Сәлимә* ***боралҡының*** *эте менән һөйләшеп тораһың, атай, ҡыу ҙа сығар!* Һ. Дәүләтшина. ***Боралҡы*** *килһә, боронғоға урын юҡ.* Мәҡәл.

**боралҡы II** *с. диал.* 1. Йыйыштырылмаған, йыйнаҡһыҙ. ***Боралҡы*** *өй.*

2. Әҙәпкә һыймаған, әҙәпһеҙ (һүҙгә ҡарата). [*Таһыл:*] *Атай, ҡуйсәле!* ***Боралҡы*** *һүҙ һөйләп, соҡонғолап, әллә ни нәмәләр аҡтарма!* Х. Ғәбитов.

**борғаҡ I** *и.* Шыйыҡлыҡты тар муйынлы һауытҡа ҡойоу өсөн ҡулланылған киң ауыҙлы, тар төплө ҡулайлама; буранка. ***Борғаҡ*** *менән ҡойоу.*

**борғаҡ II** *с. диал.* Ҡыҙыу, ҡыҙмалы. *Ул бик* ***борғаҡ*** *кеше.*

**борма I** *и.* Һыуҙың, юлдың һ. б. боролған урыны; бөгөл. [*Окоп*] *ҡайһы урында төп-төҙгә тура килә, ҡайһы урында **бормалары** бик йыш.* А. Таһиров. ***Борма, борма** һайын боролма ир-егеттәр үткән юл булыр.* «Аҡбуҙат».

**борма II** *с.* 1. Боролоп киткән, бормалы. ***Борма** юл.*

2. Ишеп, бороп эшләнгән. ***Борма** беләҙек.*

**бормас I** *и.* Шешә тығынын аса торған бормалы беҙ. ***Бормас** менән асыу.*

**бормас II** *с.* Боролоп-боролоп киткән. ***Бормас** юл.*

**борон I** *р.* 1. Бик элек; әүәле. *Йоҡас олатай!.. **Борон,** йәш саҡтарҙа, былай булмағанһыңдыр бит?* Ғ. Дәүләтшин. *Был ерҙә ғүмер кисергән атай-бабайҙар **борон.*** Р. Ниғмәти.

2. Беренсе башлап; алдан, элек. *Туиға барһаң **борон** бар; **борон** барһаң, урын бар.* Мәҡәл.

**борон II** *бәйл.* Төп йәки сығанаҡ килештәге һүҙҙәр һәм ***-маç, -мәç*** формалы сифат ҡылымдан һуң килеп, эш-хәрәкәттең кемдән, нимәнән йәки ниндәйҙер эш-хәлдән алда булғанын белдерә; элек. *Ағайҙан **борон** тороу. Унан **борон** килеү.* ▬ *Тимерлектә йәштәр тимер һуға — һабан әҙерләйҙәр көн **борон**.* Б. Ишемғолов. *Көн эçеп китмәç **борон** эшләп ҡалыу кәрәк, — тине Зилский.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡояш батмаç **борон** уҡ һыйырын һауа һалып, иртәрәк сират алырға китте* [*Нәсимә*]. Һ. Дәүләтшина.

**борош I** *и.* Түбән ауыҙлы, һорғолт һыртлы, асыҡ төçтәге ҡабырғалы йылтыр йылға балығы. ***Борош** тотоу.*

**борош II** *с.* Бер урында боролоп әйләнгән. ***Борош** ағас.*

**борсаҡ I** *и.* 1. Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, баҡсала йәки яланда үçтерелә торған, түңәрәк орлоҡло бер йыллыҡ үçемлек. ***Борсаҡ** сабыу.*

2. Шул үçемлектең ашай торған орлоғо. *Иҙән уртаһына ҙур ғына ҡоштабаҡ бүрткән **борсаҡ** ултыртты. **Борсағы** ап-аҡ, эре ине. Ысынлап та, былдай эре **борсаҡ** теләһә ҡасан эләкмәй ул.* М. Кәрим.

**борсаҡ II** *и.* Һауанан бәләкәй генә йомро боҙ рәүешендә яуған яуын. ***Борсаҡ** яуыу. Игенде **борсаҡ** һуҡҡан.* ▬ *Ҡапыл шатыр-шотор йәшен атып ебәрҙе лә шаулатып **борсаҡ** яуа башланы.* Р. Солтанғәрәев.

**босоҡ I** *и.* Килешмәгән, ғәйеп эш, насар ҡылыҡ. *Үҙ **босоғон** күрмәй, кеше **босоғон** ҡуймай.* Мәҡәл.

**босоҡ II** *и.* Көбөләҙ ҡымыҙ, май бешә торған оҙон һаплы, гөмбөр башлы ағас ҡорал. ***Босоҡ** яһау.*

**боҫ I** *и.* 1. Шыйыҡса киҫәксәләренең күпләп осоп күтәрелеүенән барлыҡҡа килгән газ. *Аш **боҫо**.* ▬ *Суйын ҡаҙандарҙың ауыр ҡапҡастары асылыу менән... бешкән аштың **боҫо** күтәрелеп, тирә-яҡҡа таралды.* М. Тажи. *Ултыртылды һыйҙың бары ла: **боҫ** борҡотоп торған тәмле бәлеш, сирек тулы әсе балы ла.* Ш. Бикҡол.

2. Йылы һауа менән һыуыҡ һауа аралашҡанда барлыҡҡа килгән ҡуйы аҡ томан. *Заһитҡа эйәреп тыштан ингән һалҡын һауа **боҫ** булып иҙәнгә йәйелде.* С. Агиш.

**боҫ II** *ҡ.* 1. Башты, кәүҙәне аҫҡа баҫып, йәшенеү. *Бүтән малайҙар «Һуғыш уйыны» уйнағанда, ошо таштар араһына **боҫоп** атышалар ине.* М. Кәрим. *Яҡуп ҡой ма буйына килеп **боҫто** ла әсәһенең ҡайһы яҡҡа киткәнен ярыҡ аша күҙәтеп торҙо.* М. Кәрим.

2. *күсм.* Шым булып, ситтә ҡалыу; ҡасыу. *Көрәштәрҙән **боҫҡан** ҡорбанһыҙҙар юл бирһендәр көслө ҡулдарға.* Д. Юлтый.

**бот I** *и.* Кешенең, ҡош-ҡорттарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың баҫып йөрөү өсөн хеҙмәт итә торған ағзаһы. *Ямандты турә ҡылһаң, йортоң боҙар; аҡылһыҙҙы иркәләһәң, **ботон** һуҙар.* Аҡмулла. *Таҙа кәүҙәле, ҡыҫыҡ күҙле Ғисмәт Хисамға ҡарап, **бот** сабып көлә башланы.* А. Таһиров. [*Бибикамал:*] *Көш! Көш! Һай **ботон** һуғып һындырырлыҡ.* Н. Нәжми.

**бот II** [*рус.* пуд] *и.* 16,3 кг ауырлығына тигеҙ булган ауырлыҡ үлсәү берәмеге. *Хәллерәк көн күргәндәр үҙҙәренең өс-дүртәр дисәтинә ерҙәренән 200 **бот** самаһы иген ала.* М. Өмөтбаев. *Аҡназар ағайҙар үткән йылдарҙа ни саҡлы тырышһа ла йыйған игендәре утыҙ-ҡырҡ **боттан** артмай торғайны.* Ғ. Дәүләтшин. *Үткән баҙарҙа бойҙайҙың **ботo** бер һум һикһән тингә етте тигәйнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**бот III** *и.* Мәжүсиҙәр табына торған һын. ***Ботҡа** табыныу.* ▬ *Ошо революциянан һуң ғына, Мөхәммәт тыуған*

*көндө* ***бөттар*** *ҡолаған төҫлө, буржуазия баш эйгән капитал ҡоланы*. В. Исхаҡов.

**бөрөш I** *с*. Бөрөлөп бәләкәсәйгән. ***Бөрөш*** *ауыҙ*.

**бөрөш II** *ҡ*. 1. Кибеп, һулып, йомарланыу. *Боиҙай уңманы, башаҡланып, һутлана ғына башлағанда ... эҫегә сыҙамай* ***бөрөштө***. Я. Хамматов.

2. Йыйырылып, тартылыу (телгә, ауыҙ эсенә ҡарата); ҡурышыу. *Муйыл ашаһаң, ауыҙ эсе* ***бөрөшә***. Һөйләү теленән.

**бөтәш I** *с*. Ауыҙланып, тишек булып торған ере тыштан тартылып көпләнгән. ***Бөтәш*** *яра*.

**бөтәш II** *ҡ*. Тартылып, тығылып көпләшеү (ауыҙланып, тишек булып торған ергә ҡарата). *Уны [парафинды] ваҡытында таҙартып өлгөрмәһәң, ... нефть юлы* ***бөтәшә***. Ә. Байрамов. [*Ғәйзулланың*] ***бөтәшкән*** *яраһы асылған ине*. Д. Бүләков.

**бригадир I** [*рус.*] *и*. Бригада етәксеһе. *Баҫыусылыҡ бригадаһы* ***бригадиры***. ***Бригадир*** *итеп тәғәйенләү*.

**бригадир II** [*рус. < нем.*] *и. тар*. Полковник менән генерал араһындағы хәрби дәрәжә (рус ғәскәренә Петр I индергән, Павел I бөтөргән) һәм шул дәрәжәләге хәрби кеше. ***Бригадир*** *булған һай Салауат егерме лә ике йәшендә*. Халыҡ йырынан.

**буҙ I** *с*. Көлһыу күгелйем төҫлө. ***Буҙ*** *ат*. ***Буҙ*** *төҫ*. **━** *Сиҙәм ерҙәр асыла, баш эйә* ***буҙ*** *яландар*. Н. Иҙелбай. *Бүтәгә үлән* ***буҙ*** *ялан кемгә түшәк булмаған?* Салауат Юлаев.

**буҙ II** *с*. 1. Иркендә йөрөгән, иректе. *Урал тауы буйлап ҡайтып килә Хәнәлә лә баиҙың* ***буҙ*** *малы*. Халыҡ йырынан.

2. Яҡыны, иптәше булмаған; яңғыҙ. [*Сәғиҙә*:] *Бутаһынан айырылған* ***буҙ*** *дөйәләй булып, буҙлап ултырам инде бына*. Һ. Дәүләтшина.

**буҙ III** *и. иҫк*. Ыласын. *Атҡыстан йүгерек уҡ булмаҫ, атһаң тейеп,* ***буҙ*** *алмаҫ*. Ҡобайырҙан.

**буҙ IV** *и. иҫк*. Ғауға, шау-шыу. *Киҫекһеҙ кешенән* ***буҙ*** *сыға*. Мәҡәл.

**бур I** *и.* Аҡ төҫтәге йомшаҡ эҙбиз ташы. ***Бур** менән яҙыу.* ▬ *Ҡунай ... үҙ бейәһенең ҡашҡаһына һыйыр тиҙәге һөртөп, ә Ҡупай бейәһенә **бурҙан** ҡашҡа яһап ҡуйған икән.* Әкиәттән.

**бур II** [*рус.* вор] *и.* Урлаша торған кеше; уғры. ***Бур** байыҡмаҫ, бирән туймаҫ.* Мәҡәл. *Дөйә урлаған да **бур**, төймә урлаған да **бур**.* Мәҡәл. *Атаҡлы **бур** астан үлгән.* Мәҡәл.

**бура I** *и.* 1. Бүрәнәләрҙең баш-башын киртеп, өҫтө-өҫтөнә һалып күтәргән ҡоролма. *Ҡоҙоҡ **бураһы**. Өй **бураһы**.* ▬ [*Тимер*] урманда **бура** *буратып ҡуйҙы.* Н. Нәжми.

2. Келәттә ашлыҡ, он кеүек нәмә һалыу өсөн бүлеп ҡуйылған урын. ***Бура** ла **бура** ашлығың аш итмәнең миңә, атаҡайым.* Сеңләүҙән.

**бура II** *и.* Уйын төрө. *Хәҙер **бура** һуғыусылар зона ярышына әҙерләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 29 июнь.

**бура III** *и.* Оло ата дөйә. ***Бура** йөрөй.*

**бура IV** *ҡ.* Бура итеп һалыу. *Ҡоҙоҡтоң эсен таш йә булмаһа бүрәнә менән **бурарға** кәрәк.* В. Ғүмәров.

**бура V** *ҡ.* Өйөрөлтөп-өйөрөлтөп осороу; ойоҡһотоу. ***Бурай** ҙа ғына **бурай** ҡарҙар яуа.* Халыҡ йырынан.

**бурка I** [*рус.*] *и.* Кавказ халҡының тула һымаҡ итеп кәзә йөнөнән баҫылған еңһеҙ ябынсаһы. *Иңгә **бурка** һалып, хәнйәр тағып, Дағстандан ҡайттым ҡунаҡтан.* М. Кәрим.

**бурка II** [*рус.* бурка] *и.* Кейеҙ фетрҙан күн табанлап тегелгән итек. *Ғәлиәкбәрҙең өҫ-баш та бик шәп бит инде. Каракүл яғалы өр-яңы пальто, ҡаракүл бүрек, аяҡта һары күн һыҙмалы, ҡунысы ҡайтарылған аҡ **бурка**.* З. Биишева.

**бута I** *и.* Дөйә балаһы. [*Сәғиҙә:*] ***Бутаһынан** айырылған буҙ дөйәләй буҙлап ултырам инде бына.* Һ. Дәүләтшина.

**бута II** *и. диал.* Билғау. *Аяғында йәшел ҡатаһы, билкәйендә ебәк **бутаһы**.* Халыҡ йырынан.

**буш I** *с.* Эсендә бер нәмә лә булмаған. *Көршәк тулы булһа, ныҡлығын ул оҙаҡ йылдар һаҡлай. Ә **буш** көршәк иһә тора-бара үҙ алдына сатнай.* М. Кәрим.

**буш II** *р.* Бушаҡ. *Алға эйелеп килеп, аттың арҡаһына еңел генә ҡамсы төшөрөп, теҙгенен **буш** ҡуйҙым ... Уҡ кеүек алға ынтылды.* Д. Юлтый.

**буш III** *р.* Бер ниндәй маҡсатһыҙ, сәбәпһеҙ, былай ғына; тик. [*Хөрмәт:*] *Ниңә көләһең — **Буш!** — тине Исмәғил, ауыҙы ҡолағына еткәнсе йылмайып.* Я. Вәлиев.

**буш IV** *р.* Хаҡ түләмәйенсә, түләүһеҙ. [*Ниғмәтулла — Ғәйзуллаға:*] *— Кем быҙауҙары? — Хажисолтан байҙыҡы. — Берәүһен һуйып ашайыҡмы? — Юҡ. — Ниңә? — Буш. — Мин дә аҡсаға тимәйем, **буш** тием.* Я. Хамматов.

**буша I** *ҡ.* 1. Ниҙеңдер эсе йәки өҫтө буш ҡалыу. *Урам **бушау**. Һандыҡ **бушау**.*

2. Йөгө алынып, йөкһөҙ ҡалыу. *Арба **бушау**. Сана **бушау**.*

3. Биләүсеһе китеп, буш ҡалыу. *Өй **бушау**. Ултырғыс **бушау**. Урын **бушау**.*

**буша II** *ҡ.* **1.** Тығыҙ, ҡыҫтау хәлдән бушаҡ хәлгә килеү. *Арҡалығы **бушаған**.* ▬ *Бөтәбеҙ ҙә машинанан төштөк. Беҙ ҡуйған тәгәрмәстең тыны тамам **бушаған** ине. Алмаш-тилмәш тын ултырҙыҡ.* Н. Нәжми.

2. Көс-ҡеүәттән яҙыу; йомшау, хәлһеҙләнеү. *Нәфисә хәлһеҙләнде. Аяҡ быуындары **бушап**, тәне дерелдәй башланы.* Я. Хамматов.

**бушат I** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәнең эсен йәки өҫтөн буш ҡалдырыу. *Загонды **бушатыу**. Шешәне **бушатыу**.*

2. Йөктәге нәмәне алыу. *Бесәнде **бушатыу**. Утынды **бушатыу**.*

3. Эш урынынан алыу; төшөрөү, сығарыу. *Көндәрҙең береһендә Ирғәлиевты мин-минлектә, дәүләт байлығына һарауһыҙ ҡарауҙа ғәйепләп, эшенән **бушаттылар**.* Ш. Насыров.

**бушат II** *ҡ.* Тығыҙ, ҡыҫтау хәлдән бушаҡ хәлгә килтереү. *Арҡанды **бушатыу**. Дилбегәне **бушатыу**.*

**бүл I** *и. иҫк.* Ҡарындағы бала. — ***Бүлле, бүлле, бүлле** бул, бүҙәнәнән түлле бул, ҡарлуғастан һылыу бул, ыласындан өлгөр бул.* Йола йырынан.

**бүл II** *ҡ.* Бөтөндән бер киҫәк йәки күмәктән бер төркөм айырыу. *Иген **бүлеү**. Икмәк **бүлеү**.* ▬ *Үҙ йәнемде **бүлеп***

*бирер инем, йәндән башҡа йөрөр хәлем юҡ.* Халыҡ йырынан. [*Тайба*] *итте өлөшләп **булергә** кереште.* З. Биишева. [*Ҡарт*] *үҙе иҫән саҡта барлы-юҡлы мөлкәтен уландарына **булеп** бирмәксе булған.* Экиәттән.

2. Эш-хәлде киҫеп туҡтатыу. *Йоҡоно **булеү**. Уйҙы **булеү**. Һүҙҙе **булеү**. Эште **булеү**.*

**бүл II** *ҡ.* Бер һандың икенсе һанды нисә мәртәбә үҙ эсенә алғанлығын белеү; *киреһе* ҡабатлау. *Меңде бишкә **булеү**.*

**бүлә I** *и.* Бүлеп-бүлеп, ял итеп эшләгән эштең бер өлөшө; тына. *Ашлыҡты ике **булә** урыу. Бер **булә** эшләп алыу.*

**бүлә II** *и.* Ейән йәки ейәнсәрҙең улы; өсөнсө быуын. *Минең **булә**.*

**быу I** *и.* Йылы урындан сыҡҡан (күтәрелгән) аҡ томан. *Күк тонйорап, күтәрелә ерҙән **быу**. Ҡыҙ балалар сырҡылдаша геү ҙә геү.* Аҡмулла. *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа диңгеҙ йөҙөн ҡайнарлатып, **быу** булып күккә оса ла һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич. ***Быу** бөркөп торған баҫыуҙа сәсеүҙәр ҡыҙыу бара.* Р. Ниғмәти. *Малайҙың өҫтөнән **быу** сығып тора.* Я. Вәлиев. *Бейек кенә бейек ерҙәрҙән төтөн генә сыға **быу** кеүек.* Халыҡ йырынан.

**быу II** *ҡ.* 1. Бау йәки башҡа нәмә менән уратып ҡыҫыу йәки бәйләү. *Билде **быуыу**. Ҡулды **быуыу**.* ▬ *Сәлмән ... тороп, йәһәт кенә сәкмәнен кейеп, билен һығып **быуған**.* Экиәттән.

2. Берәй нәмәнең хәрәкәтен кәртәләү. *Зариф ҡарт Муйыллы йылғаһын **быуып** ... балыҡ үрсетте.* Б. Бикбай.

3. Ныҡ ҡыҫып, тын юлын бикләү. *Мәскәй ҡапыл Тамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә **быуа** башлаған.* Экиәттән.

**быуа I** *и.* 1. Быуып яһаған һыу һаҡлағыс. *Павловка һыу һаҡлағысы — **быуаларҙың** иң ҙурыһы.* М. Хисмәтов.

2. Шул һыу һаҡлағысты тотоу өсөн төрлө нәмә менән ныҒытылған кәртә. [*Хәлимулла:*] *Ямғырҙы әйтәм, шәп яуа бит. Тирмәнсенең **быуаһын** да йырып ебәрер әле.* С. Ағиш.

**быуа II** *и.* Ҙур булмаған ваҡыт аралығы. *Еләҫ ел иҫеп үтте лә, сарсаған халыҡтың теләген үтәгәндәй, ике* ***быуа*** *килеп, ямғыр һибәләп үтте.* С. Кулибай.

**быуын I** *и.* Кеше, йәнлек организмындағы һөйәктәрҙең йәки кимерсәктәрҙең ҡуҙғалмалы булып, бер-береһенә тоташҡан, ялғанған урыны. ***Быуын*** *сығыу. Бәкәл* ***быуыны.*** *Терһәк* ***быуыны.*** *Тубыҡ* ***быуыны.*** ▬ *Оҙон юлдар уның* ***быуындарын,*** *елек һөйәктәрен талдырған.* Б. Вәлит.

**быуын II** *и. мат.* Сикләүһеҙ унарлы кәсерҙәге ҡабатланып килгән һандар төркөмө. *Оҡшаш* ***быуындарҙы*** *берләштереү.*

**быуын III** *и.* Бер осорҙа йәшәп, йәш араһы яҡын булған кешеләр. *Бер* ***быуын*** *кешеләре. Йәш* ***быуын.*** *Киләсәк* ***быуын.*** *Оло* ***быуын.*** ▬ *Ағиҙелкәй һинең буйҙарыңда нисә* ***быуын*** *ғүмер кисергән.* Р. Ниғмәти.

**бәбәк I** *и.* 1. Үҫә торған һәр нәмәнең башланғыс яралғыһы. ***Бәбәк*** *ебәреү.*

2. Сәскә үҙәгендәге емешлек. *Сәскә* ***бәбәге.*** ▬ [*Бал ҡорто*] *оҙон томшоғон сәскәнең һары һеркәле* ***бәбәгенә*** *батырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

3. Яңы сыҡҡан йәш ботаҡ, һабаҡ. *Көн күрергә ынтылған ыуыҙ ғына* ***бәбәк*** *тә ниндәй ҡаты асфальтты тишеп сыға.* Ф. Иҫәнғолов.

**бәбәк II** *и.* Күҙ ҡабағының керпек үҫкән сите, керпек төбө. [*Мөләк ағаиҙың*] *атылып сыҡҡан күҙ йәштәре,* ***бәбәктәренән*** *ашып, битен йыуып ағып төштө.* Т. Хәйбуллин.

**бәй I** *и.* Берәй нәмәне быуыу йәки ҡуша нығытыу өсөн бороп, ишеп әҙерләнгән еп; бау. [*Үмәр ҡарт*] *ҡапҡаның сүс* ***бәйе*** *ныҡмы икән тип, ҡабат-ҡабат тартып ҡараны.* Һ. Дәүләтшина.

**бәй II** *ымл.* Аптырағанда әйтелә. *Күрше ҡыҙ Яланбикә ояламаны:* ***Бәй,*** *Айбулат ағайым бит, — тине ул.* Һ. Дәүләтшина. ***Бәй,*** *мин уларҙан кәм мәллә?* Ғ. Дәүләтшин. ***Бәй,*** *был Яҡуп та баһа!* М. Кәрим. ***Бәй,*** *Софочка, һинең күҙҙәрең ҡара икән дә баһа!* З. Биишева.

**бәйләм I** *и.* Йыйып, төрөп йәки сорнап, бер киҫәк итеп бәйләнгән бер иш әйберҙәр. *Аҫкыстар **бәйләме**. Китаптар **бәйләме**.*

**бәйләм II** *и.* Бәйләнелә торған нәмә. ***Бәйләм** бәйләү.* ▬ [*Ғәйникамал инәй*] *кулына **бәйләмен** алып, тәҙрә каршыһына килеп ултырҙы. Ләкин бер-ике генә күҙ әйләнде лә эшен ситкә куйҙы.* Я. Вәлиев.

**бәйләм III** *с.* Бәйләп куйылған, бәйләнелә торған (кымыҙға һауыла торған бейәләргә карата). *Артелдә ... **бәйләм** бейәләр генә дүрт өйөр ине.* Н. Мусин.

**бәлеш I** *и.* Йәйелгән камыр эсенә ни ҙә булһа һалып, камыр менән өҫтөн каплап мейестә бешерелгән ашамлык. *Балан **бәлеше**. Вак **бәлеш**. Ит **бәлеше**. Кабак **бәлеше**.*

**бәлеш II** *ымл.* Капыл аптырағанда әйтелә. ***Бәлеш!** Килеп тә еттекме?*

**бәпкә I** *и.* Каҙ йәки өйрәк себеше. *Каҙҙар булып оса инде хәҙер яҙын сыккан һары **бәпкәләр**.* Н. Нәжми. *Һәр өй тәңгәлендә **бәпкәләре** етеп бөткән каҙ көтөүҙәре тора.* З. Биишева. *Күҙен йома-йома йокомһорап, һуңға калған бер каҙ ояла. Әй ултырған була көнө-төнө **бәпкә** сығарам тип донъяла.* Р. Ғарипов.

**бәпкә II** [*рус.* бабка] *и.* Асамай, атлама. *Их, өй **бәпкәләрен** һүтеп ташларға ине! Улар яна башлаһа, янғын тағы көсәйәсәк, бөтә ауылға таралаcак.* «Совет Башкортостаны», 1965, 10 апрель.

**бәрәкәт I** [*ғәр.*] *и.* Тормош-көнкүрештәге материаль муллык, иркенлек. *Атайың кейәү булған, әсәйең килен булған ете ырыу йортоңа кот, **бәрәкәт** килтерер.* «Акбуҙат». *Һәр бер өиҙә муллык һәм **бәрәкәт**, юрый ғына кереп күр әле.* Т. Арслан. *Берлектә — **бәрәкәт**, таркаулыкта — һәләкәт.* Мәкәл. *Бәрәшән кулда **бәрәкәт** юк.* Мәкәл. *Хәрәкәттә — **бәрәкәт**.* Әйтем.

**бәрәкәт II** *ымл.* Аптырағанда әйтелә. *Әбей уның* [*Билалдың*] *артынан: — **Бәрәкәт**, ас карынлай барғансы, ашап барһаң ни була, эшең касмаҫ ине әле, — тип һөйләнде.* А. Таһиров. [*Бәҙекәй әбей:*] ***Бәрәкәт**, индермәиҙәр ҙәһә!* С. Ағиш.

**бәрәмес I** *и.* Йәйелгән камырға эремсек йәки картуф һалып, өҫтөн япмайынса мейестә бешерелгән ашамлык. *Картуф **бәрәмесе**. Кыҙыл эремсек **бәрәмесе**.*

**бәрәмес II** *ымл.* Ғәжәпләнгәндә, аптырағанда әйтелә. ***Бәрәмес**, уйламай әйттем!* Һөйләү теленән.

**бәрәс I** *и.* Һарыҡ йәки кәзә балаһы. *Көҙгө **бәрәс**. Яҙғы **бәрәс**.* ▬ *Һарыҡ бәрәсләп биргәс, саҡ-саҡ туңманы **бәрәс**. Шуға өйгә индерҙек, шешәнән һөт имдерҙек.* Ә. Әхмәтҡужин.

**бәрәс II** *ымл.* Ҡапыл аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. — ***Бәрәс**, — тине ябай башҡорт ҡатыны, — электрҙы белмәҫ ниндәй аҡыл ул?* Х. Ғиләжев.

**бәҫ I** *и.* Кешегә, нәмәгә йәм биреп торған сифат; күрк, йәм. ***Бәҫен** ебәреү.* ▬ [*Килен:*] *Ҡәйнәм, ин инде тиҙерәк, сәйҙең **бәҫе** китә бит.* И. Ғиззәтуллин. [*Ҡунаҡбикә:*] *Йә, йә, юҡҡа ҡунаҡтың **бәҫен** ебәреп торма. Башҡа ваҡытта, урамда әрләшерһең.* Д. Юлтый. *Ир намыҫы — ат **бәҫе**.* Мәҡәл. *Майыңды ҡыштан сығарма, ҡатыныңды **бәҫтән** сығарма.* Мәҡәл.

**бәҫ II** *и.* 1. Әйберҙәр һыуынған ваҡытта уларҙың үҙ парҙарынан өҫтәренә ултыра торған йоҡа ғына ҡар һымаҡ ҡатлам (ҡырауҙан башҡа); көслө һыҡы. ***Бәҫ** ҡаплау.* ▬ *Туғайҙарға болот ҡатыш төшә аҡ томан. Мамыҡ төҫлө **бәҫ** бөркөтә әрәмә, ҡыуаҡ.* М. Тажи.

2. Һауала еңелсә томан булып күренә торған һыҡы бөртөктәре. ***Бәҫ** күтәрелде — яуыр.*

**бәҫле I** *с.* 1. Кешегә, нәмәгә йәм биреп торған яҡшы сифатлы; ҡәҙерле, күркәм. ***Бәҫле** кейем.*

2. Кеше алдында ҡәҙерле; абруйлы. ▬ *Байтаҡ көндәр уҙған һуң, **бәҫле** ҡунаҡ булған һуң, Урал иртүк торған, ти. Һомайға саҡырып алған, ти.* «Урал батыр».

**бәҫле II** *с.* Бәҫ менән ҡапланған. ***Бәҫле**, сап-сал бөгөн урман, ер ябынған ап-аҡ өрпәк ҡалын юрған.* Ҡ. Даян.

# В

**вал I** [*рус.*] *и.* Дошмандан һаҡланыу өсөн йәки хужалыҡ маҡсаттарынан сығып, тупраҡтан йәки башҡа нәмәнән өйөп яһалған оҙон һәм бейек нығытма; үр. *Фашистар буйҙан-буйға ҡар ҡатыш һалам өйөп, уның өҫтөнә һыу һиптереп, бейек **вал** яһағандар.* Ж. Кейекбаев.

**вал II** [*рус.*] *и. тех.* Төрлө механизмдарҙа: терәктәрҙә әйләнеп, механизмдың үҙе менән тоташҡан башҡа киҫәктәрен дә әйләндерә торған металл йәки ағас үҙәк. *Бүлеү **валы**. Ишеү **валы**. Терһәкле **вал**.*

**вираж I** [*рус.* < *фр.*] *и.* 1. Самолёт, автомобиль, велосипед һәм мотоциклдың әйләнә буйынса боролошо. *Самолёт **вираждан** сыҡты.*

2. Автомобиль, велосипед, мотоцикл ҡапыл боролғанда аумаһын өсөн, юлдың эске яҡҡа ауышыраҡ итеп һалынған бер өлөшө. *Текә **вираж**.*

**вираж II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Фотоға билдәле бер төҫ бирә торған химик иретмә. *Фотоны **виражда** тотоу.*

# Г

**газ I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Айырым киҫәксәләре үҙ-ара тығыҙ бәйләнмәү сәбәпле һауаға, бушлыҡҡа тиҙ һәм еңел тарала торған физик есем. *Ағыулы **газ**. Йәшкәҙәткес **газ**. Тонсоҡторғос **газ**.*

**газ II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Үтә күренмәле йоҡа ебәк туҡыма. *Аҡ төҫтәге **газ**.*

**график I** *и.* Күләме һәм үтәлеү ваҡыты асыҡ күрһәтелгән эш планы. ***График** буйынса эшләү. Поездар йөрөү **графигы**. Эш **графигы**.*

**график II** *и.* Графика өлкәһендә эшләгән художник. *Билдәле **графиктың** күргәҙмәһе.*

**гриф I** [*рус.* < *нем.*] *и. муз.* Ҡыллы музыка ҡоралдарының ҡылдарына бармаҡ менән баҫҡылап төрлө тауыш сығара торған ағас йәки пластмасса планкаһы. *Гитара **грифы**.*

**гриф II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Китаптың тышына йәки титул битенә яҙыла торған яуаплы ойошманың исеме. *Китапты институт **грифы** менән сығарыу.*

# Ғ

**ғәйеп I** [*ғәр.*] *и.* 1. Халыҡ, йәмғиәт тарафынан йәки традиция, ғөрөф-ғәҙәт буйынса тыйылған булыуға ҡара-

маҫтан эшләнгән эш; ярамаған эш; *руссаһы:* поступок. *Был гәйебең онотолмаҫ.* — ***Ғәйебенә*** *күрә язаһы.* Әйтем.

2. Шул ярамаған эш өсөн яуаплылыҡ; *руссаһы:* вина. ***Ғәйепте*** *үҙ өҫтөңә алыу.*

3. Етешмәгән урын, кәмселек, етешһеҙлек. *Приказчиктар һәр ситсаны йыртҡан һайын: «Их, тауары!» — тип маҡтап ҡуялар. Алыусылар ниндәй ҙә булһа* ***гәйеп*** *табып, яманларға тырышалар.* С. Ағиш. *Был кәбәндә бер* ***гәйеп*** *бар, һиҙһә кем дә шелтәләр: эреле-ваҡлы, башлы-башһыҙ булды ҡуйҙы көлтәләр.* Ш. Бабич.

4. Оят, ғәрлек. *Белмәү* ***гәйеп*** *түгел, белергә теләмәү* ***гәйеп.*** Әйтем. *Бәреп әйткәндең* ***гәйебе*** *юҡ.* Әйтем.

**ғәйеп II** [*ғәр.*] *с.* Йәшерен, билдәһеҙ, берәүгә лә билдәле түгел. [*Батыр*:] *Бына һис көтмәгән ерҙән хоҙай бирҙе. Электән дә* ***гәйеп*** *хазиналы тиҙәр ине был ерҙе.* М. Ғафури.

**ғәм I** [*ғәр.*] *и.* 1. Күңелдәге ауыр кисереш; көйөк, ҡайғы, хәсрәт. *Урғылып, ҡайнап сыға күкрәк төбөмдән утлы* ***гәм.*** Ш. Бабич. *Кешене эш ҡартайтмай,* ***гәм*** *ҡартайта.* Мәҡәл.

2. Ниндәй ҙә булһа эш, әйбер, хәл тураһында ҡайғыртыу, шул эш ҡайғыһы, хәстәре; моң, уй. *Сәмһеҙгә —* ***сәм,*** *ғәмһеҙгә —* ***гәм*** *бирә торған хикмәтле кеше ине мәрхүмең* [*Ғизетдин бабай*]. Ә. Гәрәев. *Тыуған Рәсәй, туған әсәйем, һин* ***гәм*** *уятҡан яҡты уйҙарым.* К. Кинйәбулатова. ***Ғәме*** *барҙың йәме бар.* Мәҡәл.

**ғәм II** [*ғәр.*] *и.* Бөтә халыҡ, ябай халыҡ. [*Байҙар — батшаға*:] *Бөтә* ***гәм*** *бергәләп хәл итә алманыҡ, инде үҙең нишләһәң дә эшлә.* Әкиәттән.

**ғәрип I** [*ғәр.*] *с.* Берәй ере имгәнгән, зәғиф. — *Нур, һин беҙҙең ауылды дошмандарҙан азат иткәндә һуҡырайҙың. ... Аңла, һин бит* ***ғәрип.*** И. Абдуллин.

**ғәрип II** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* 1. Үҙ иленән айырылып, ситтә йөрөгән кеше; юлсы, мосафир. [*Күсер хан*:] *Илдән илгә йөрөйөм, балам, ил* ***ғәриптәре*** *булайым, балам, Ҡуҙыйкүрпәс кеүек егетте табайым, балам.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

2. Йортһоҙ-ерһеҙ ярлы, меҫкен, хәйерсе кеше. ***Ғәриптәрҙе һис әҙәм алмаҫ һанға.*** Бәйеттән.

**ғәрип III** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғәҙәттән тыш ят, ғәжәп. ***Ғәрип хәл. Ғәрип һөнәр.***

# Д

**да (дә) I** *терк.* Һөйләмдәге ике тиң киҫәктәрҙе һәм һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәй. *Ваҡырҙы күпме ағартһаң **да** көмөш булмаҫ.* Мәҡәл. *Моңһоҙҙоң **да** бер йыры була.* Мәҡәл. *Тауға ҡарап тау булмаһаң **да** яуға ҡарап арт бирмә.* Мәҡәл.

**да (дә) II** *киҫ.* Бер төшөнсәне бүтән тиң төшөнсәләрҙән айырып, баҫым яһай. *Аҡыллыға ым **да** етә, ахмаҡҡа туҡмаҡ **та** аҙ.* Мәҡәл. *Йылы ергә йылан **да** эйәләшә.* Мәҡәл.

**дан I** *и.* Ниндәйҙер өлкәләге батырлыҡ, хеҙмәт, һөнәр, талант һ. б. ҡаҙаныштар һөҙөмтәһендә бөтә халыҡ араһында таралған маҡтау һүҙе, хөрмәтле танылыҡ, шөһрәт. *Батырлыҡ **даны**. Хеҙмәт **даны**.* ▬ *Ағас ботаҡһыҙ булмаҫ, **дан** уртаҡһыҙ булмаҫ.* Мәҡәл. *Ата **даны** менән һүҙ үтер.* Әйтем. *Батыр үҙе үлһә лә **даны** үлмәй.* Әйтем. ***Даның** сыҡҡан менән йәнең сыҡһын.* Әйтем. *Егет күрке **дан** менән.* Әйтем. *Яҡшыларҙан зат ҡалыр, батырҙарҙан **дан** ҡалыр.* Әйтем.

**дан II** [*рус.* дань] *и.* Яһаҡ. *Ул ваҡыттарҙа* [*16 быуатта*] *көн башындағы башҡорттар Ҡазан ханына **дан** түләйҙәр ине.* Ф. Вәлиев.

**дана I** [*фарс.*] *и.* Һандар һәм һандарҙы белдергән һүҙҙәр менән: бер төрлө нәмәләрҙең береһе; бөртөк. *Биш **дана** дәфтәр. Китаптың тиражы ун мең **дана**.* ▬ *Ул* [*Зөһрә*] *баҙарға сығып, күлдәклек алды, бер генә **дана** булһа ла күлдәк текте.* М. Ғафури.

**дана II** [*фарс.*] *и. иҫк.* Уҡымышлы, белемле, аңлы. *Бала бирһәң, **дана** бир, **дана** бирмәһәң, ала бир.* Мәҡәл.

**дауа I** [*ғәр.*] *и.* 1. Ауырыуҙы, сирҙе бөтөрөү өсөн ҡулланыла торған шифалы нәмә; дарыу. ***Дауа** яһау.* ▬ *Тап сәс-*

*кә ваҡытында йыйып ҡарағат япрағы менән ҡайнатҡан мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуҙан* ***дауа.*** Б. Бикбай.

2. *күсм.* Төрлө ауырыу хәлде, күңелһеҙлекте бөтөрөүгә ярҙам итә торған сара, әмәл. *Һинең менән бер һөйләшеү* [*Хаят*] *дәртк*ә ***дауа.*** Ш. Бабич. *Йомшаҡ, йылы, иркә май һауаһы — талған йөрәктәрҙең* ***дауаһы.*** Ғ. Амантай. *Дәртһеҙгә* ***дауа*** *юҡ.* Әйтем. *Саф һауа — тәнгә* ***дауа.*** Әйтем.

**дауа II** [*ғәр.*] *и.* Ашыҡ уйнағанда ашыҡтың салҡан әйләнеп ятҡан хәле. *Хан алсы уйнағанда ашыҡтарҙы бүлеп алалар. Һуңынан бергә ҡушып һибеп ебәрәләр ҙә ашыҡтарҙың ятышына ҡарап, алсыһын алсы менән, бөгәһен бөгә менән, сигәһен сигә менән, дауаһын* ***дауа*** *менән парлап алалар.* Хикәйәттән.

**дежур I** [*рус.* дежурный < *фр.*] *с.* 1. Йәмәғәт эшен һ. б. вазифаны сират тәртибендә башҡарған. ***Дежур*** *врач.* ***Дежур*** *класс.* ***Дежур*** *уҡыусы.*

2. Ниндәйҙер эште, хеҙмәтте бүтәндәрҙең ялы ваҡытында үтәгән. ***Дежур*** *аптека.* ***Дежур*** *магазин.*

**дежур II** [*рус.* дежурство] *и.* Сиратлап башҡарылған ижтимағи вазифа йәки эш. ***Дежурҙа*** *булыу.* ***Дежурҙа*** *тороу.*

**дең I** *оҡш.* Тимер-томор бер-береһенә һуғылғанда яңғырап сыҡҡан нәҙек тауышты белдергән һүҙ. ***Дең*** *итеү.*

**дең II** *р.* Төп-төҙ, ныҡ. ***Дең*** *йөрөү.* ***Дең*** *тороу. Кәүҙәне* ***дең*** *тотоу.* ▬ *Аҡъял менән Тау батырың да ...* ***дең*** *баҫып, ары торған булған, ти.* Әкиәттән.

**дөмбөр I** *оҡш.* Ҡаты нәмә бушлыҡта ҡағылып-һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Дөмбөр*** *итеү.*

**дөмбөр II** *и.* 1. Балыҡты өркөтөп ҡыуа торған суҡмар башлы оҙон таяҡ; гөмбөр. ***Дөмбөр*** *менән балыҡ ҡыуыу.*

2. Иттең бот-аяҡ һөйәге; шаҡалай. *Туй үткәс,* ***дөмбөргә.*** Әйтем.

**дөңгөр I** *и.* Түңәрәк тирәскә сей күн киреп яһалған, һуғыш уйнай торған боронғо музыка ҡоралы; барабан. *Йоҡларға ятҡан һалдаттарҙы уятып аяҡҡа баҫтырыр өсөн барабансы* ***дөңгөр*** *ҡаҡты.* Ғ. Ибраһимов.

**дөңгөр II** *оҡш.* Ҡаты нәмә шундай уҡ нәмәгә ҡағылып-һуғылғанда яңғырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Дөңгөр*** *итеү.*

**душ I** [*рус.* < *фр.*] 1. Һыу һиптереп ҡойона торған ҡулайлама. ***Душты** ремонтлау.*

2. Шул ҡулайлама менән йыуыуына торған урын. ***Душҡа** инеү.*

**душ II** [*рус.* душа] *и. тар.* 1. Йән. ***Душ** башына бүлеү.* ▬ *Заводсылар ... һәр мең бот баҡыр сығарыу өсөн илле **душ** крәҫтиән һатып алалар.* Ғ. Фәхретдинов.

2. Ер бүлгәндә өлөш сығарыу өсөн иҫәпкә алынған ир кешеләр һаны. ***Душҡа** тейгән ер.*

3. Йән башына һалынған яһаҡ. *Ә шулай ҙа эштәр насар беҙҙең, былай булһа, асҡа үлербеҙ ... Ысынлап та, нимә ашарбыҙ беҙ, нимә менән **душты** түләрбеҙ.* Х. Ҡунаҡбай.

**дәүләт I** [*ғәр.*] *и.* Илдә тәртип һаҡлау, ундағы синфи ҡаршылыҡтарҙы баҫыу һәм үҙ власын ғәмәлгә ашырыу өсөн башында хөкүмәт, уның органдары торған политик ойошма һәм ошондай политик ойошмаһы булған ил. *Буржуаз **дәүләт**.* ▬ [*Дәүләтхан*:] *Беҙҙең көндәрҙә һәр бер ваҡ ҡына айырым утрауҙа айырым **дәүләт** төҙөлә.* Н. Нәжми.

**дәүләт II** [*ғәр.*] *и.* Мал-мөлкәт, байлыҡ. ***Дәүләт** туплау.* ▬ *Мин ҡайтыуға инде атайың башҡа сығып, үҙенең **дәүләте** лә бик ҡалынайғайны.* Н. Ҡәрип. *Артыҡ **дәүләт** күҙ сығара.* Мәҡәл. *Изге ниәт — ярты **дәүләт**.* Мәҡәл. *Ҡәрҙәшһеҙгә ҡеүәт юҡ, уланһыҙға **дәүләт** юҡ.* Мәҡәл. *Яҡшы ҡатын — өй **дәүләте**, яҡшы кейем — туй **дәүләте**.* Әйтем.

# Е

**ек I** *и.* Үҙ-ара тығыҙ ятҡан бүрәнә, таҡта, таш һ. б. нәмәләр араһындағы тар асыҡлыҡ. *Бүрәнә **еге**. **Еккә** ҡыҫтырыу.* ▬ *Ҡунай тәҙрә ҡапҡасының **егенән** байҙың утары эсен күҙәтә башланы.* Әкиәттән.

**ек II** *ҡ.* Һөйрәтеү, тарттырыу өсөн екте малға арба, сана һ. б. тағыу. *Арбаға **егеү**. Ат **егеү**. Үгеҙ **егеү**.* ▬ *Иәнең теләгән атты тот та **ек**. Теләйһең икән, мисәүләп **ек**.*

Д. Исламов. *Атты екһәң ек ерәнен, ялы ергә тейгәнен.* Халыҡ йырынан. *Бәләкәй атты маҡта, оло атты ек.* Әйтем.

**ел I** *и.* 1. Һауа ағымының ғоризонталь йүнәлештәге хәрәкәте. *Йомшаҡ ел. Ҡаты ел. Әсе ел.* ▬ *Зәғфран нурын йәйеп, офоҡҡа ҡояш байый, йомшаҡ ел иҫә.* ***Ел** иркенә уйнап сәскәләр тулҡына, гүйә, йүгерешә.* Ғ. Амантай. ***Ел** ашлыҡты әле улай, әле былай бөгөп, һығып уйнай.* Һ. Дәүләтшина. *Ағас башын **ел** бутай, әҙәм башын һүҙ бутай.* Мәҡәл. ***Елдән килгән елгә оса.*** Әйтем. ***Ел** өрмәй — ҡурай һелкенмәй.* Мәҡәл. *Йыл башында **ел** булһа, йыл әйләнә **ел**-дауыл булыр.* Әйтем. *Ярыҡ ҡайҙа — **ел** шунда.* Мәҡәл.

**ел II** *ҡ.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү. *Ат менән **елеү**. Машина **елә**.* ▬ ***Ел**, ерәнем, егетеңде еткер **ел** етмәҫ ергә.* Н. Иҙелбай. *Әй саңғысым! Тау түбәненә **ел** генә, уйнап ҡалһын артыңдан **ел** генә.* Ш. Бикҡол.

**елбәҙәк I** *с.* 1. Елберләп осоп торған; еңел. ***Елбәҙәк** ҡар.* ▬ *Шайморатов **елбәҙәк** байраҡты күкрәгенә ҡыҫты, ҙур ҡулдары менән алтын суҡтарын һыйпаны.* Ә. Ихсан.

2. *күсм.* Еңел, осоп-төшөп торған, осҡалаҡ ҡылыҡлы. ***Елбәҙәк** ҡыҙ.*

**елбәҙәк II** *и.* Балыҡ тәңкәһе кеүек кенә, йоҡа, ялтыраүыҡ, йылтыр биҙәүес. ***Елбәҙәк** тағыу.*

**елбәҙәклә I** *ҡ.* Еңел генә елберләп осоу. *Һалмаҡ ҡына **елбәҙәкләп**, мамыҡ ҡар яуҙы ергә.* С. Муллабаев.

**елбәҙәклә II** *ҡ.* Елбәҙәк тағыу, елбәҙәк баҫыу. ***Елбәҙәкләп** теккән зәңгәр бәрхәт зифа буйға бигерәк килешкән.* Ш. Бабич.

**елкәлек I** *и.* 1. Ҡамыт яҡтарын тоттороп тороу өсөн юғары осонан ҡушып бәйләнгән бау. *Ҡамыт **елкәлеге**.*

2. Кейем елкәһенә тағылған элгес; элмә. *Тундың **елкәлеге** өҙөлгән.*

**елкәлек II** *и. этн.* Елкәғә сәс толомо өҫтөнән таға торған тәңкә, мәрйен баҫып һәм тәңкә, мәрйен менән суҡлап яһалған ҡатын-ҡыҙ биҙәүесе. ***Елкәлек** тағыу.* ▬

[*Ҡатын ҡыҙҙың*] *түшендә муйынса әмәйлек. Артында — арҡалыҡ, ҡайһы берҙәрендә — **елкәлек**. Беләгендә — беләҙек, ҡулында — ҡашлы йөҙөк.* К. Мәрғән.

**елле I** *с.* Еле көслө булған, ел иҫеп торған. ***Елле көн.*** ▬ *Ялан яҡтарында ғына була торған ҡырҡыу **елле**, епшек март бурандары башланып китте.* Б. Бикбай. *Таштуғайҡай **елле** туғай икән, сәскәләре ҡойола ел менән.* Халыҡ йырынан.

**елле II** *с.* Яҡыны, һәйбәт, шәп. ***Елле китап. Елле өй.*** ▬ [*Хисаметдин*:] *Анауында бик **елле** шишмә бар.* Р. Солтангәрәев. *Әбүзәр бейек ҡарағайҙарҙы һәм ҡарағастарҙы күргән һайын аптырап: — Бәт **елле** ағас! Йығып яргылаһаң, күпме тыранса сығыр ине, — ти.* Я. Хамматов.

**елләнү I** *ҡ.* Елдән еләҫ алыу, елгә һыуыныу. *Һауаға сығып **елләнеү**.* ▬ *Януҙаҡ ҡарт камзул төймәләрен ысҡындырып **елләнеп** алды.* М. Тажи.

**елләнү II** *ҡ.* Оҙаҡ елдә булыу сәбәпле уңыу. *Һалдаттарҙың өҫтөндә елгә **елләнеп**, туҙып бөткән һоро шинелдәр.* Б. Рафиҡов.

**елләнү III** *ҡ.* 1. Эш-хәрәкәткә ҡыҙыулыҡ, кос алыу. [*Торналар*] *муйындарын һуҙып йүгереп ... баралар ҙа, **елләнгәс** кенә ҡанаттарын йәйеп осоп китәләр.* Ә. Бикчәнтәев.

2. *күсм.* Дәрткә, хискә тулышыу, елкенеү. *Ул* [*Айбулат*] *батша төшкән хөрриәт менән **елләнеп**, учредительный собраниеларга барып йөрөнө.* Һ. Дәүләтшина.

3. *күсм.* Асыу менән ярһыу; енләнеү. *Өмөтбикә **елләнеп** тағы ла ире эргәһенә килеп етте: — Баш тигән нәмәң бармы, юҡмы һинең аҙыраҡ?* Р. Ғабдрахманов.

**елләнү IV** *ҡ.* Еллеғә, яҡшыға, һәйбәткә әйләнеү; яҡшырыу, шәбәйеү. *Хәҙер колхоз **елләнде**. Баҫыуҙағы бөтә эш машина менән генә бара бит.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 июнь.

**елпеү I** *и.* 1. Һауаны тулҡынландырған етеҙ хәрәкәт. ***Ҡул елпеүе.*** ▬ *Түрҙән түбәнгә, түбәндән түргә уҙған һәр бер кешенең аяҡ **елпеүенән** саң күтәрелә.* Т. Хәйбуллин.

2. *курсм.* Боронғо хөрәфәт буйынса насар шауҡым. ***Елпеү** ҡағылыу.* ***Елпеү** һуғылыу.*

**елпеү II** *с.* Елберләп осоп тирбәлеп торған, еңел. ***Елпеү** байраҡ.* ▬ *Тәненә һылашып торған **елпеү** ҡара күлдәк кейгән ... ҡыҙ Сағыл моронона ... ҡарай йүнәлде.* Х. Ғиләжев.

**елән I** *и. этн.* Ҡатын-ҡыҙҙарға билләп, ситенә уҡа, түш-яурыны, бөйөрҙәренә тәңкә-мәрйен, уҡа-суҡтар баҫып, ҡашлы ҡаптырма ҡуйып, ә ирҙәргә ҡара тауарҙан киң, билһеҙ итеп тегеләә торған эсе мамыҡһыҙ, оҙон өҫ кейеме. *Атлас **елән**.* *Ҡытат **елән**.* *Әҙрәс **елән**.* ▬ *Еңгәләре Фатимаға яңы күлдәген, ... салғыйы икешәр ҡат тәңкә менән уратылған уҡалы **елән** кейҙерҙеләр.* Ж. Кейекбаев. *Ҡара ҡытат **елән** ай иңемдә, ҡара ебәк билбау билемдә.* Халыҡ йырынан.

**елән II** *с.* Елпелдәп торған; елғер. ***Елән** ат.*

**ең I** *и.* Өҫ кейеменең беләкте ҡаплай торған өлөшө. ***Ең** уйыу.* *Тун **еңе**.* ▬ *Былар икәү юлда хәл йыялар **ең** һыҙғанып бесән сабырға.* Т. Йәнәби. *Кейһәм күлдәк, **еңе** тар, ең осонда хаты бар.* Халыҡ йырынан. ***Ең** һыҙғанған егеттең тамағы туҡ.* Әйтем.

**ең II** *ҡ.* 1. Һуғышта, яуҙа ҡаршы яҡты буйһонорға мәжбүр итеү, еңеүсе булып сығыу. *Дошманды **еңеү**.* ▬ *Бар миндә быны шул нәфрәт, бар миндә асыу көсө, шул нәфрәт менән дошманға ташланып **еңә** кеше.* Р. Ниғмәти.

2. Берәй төрлө ярышта, көрәштә өҫтөнлөк, беренселеккә сығыу, уңыш ҡаҙаныу. [*Барсынһылыу*:] *Көрәштә **еңеп** дан алдың, батыр егет Алпамыша, йөрәгемә ут һалдың.* «Алпамыша».

3. *курсм.* Тормоштағы төрлө хәлдәрҙе тырышлыҡ, ихтыяр көсө менән йырып сығыу, бирешмәү, сыҙау. *Ауырлыҡты **еңеү**.* *Ҡайғыны **еңеү**.* *Ҡаршылыҡты **еңеү**.* ▬ *Был донъяның ауыр ҡайғыларын **еңеп** була берҙәм булғанда.* Халыҡ йырынан. *Алйот **еңдем** тиер, аҡыллы ҡуйҙым тиер.* Мәҡәл. ***Еңгән** еңелгәндең елкәһенә менгән.* Мәҡәл. *Кешене сир **еңер**, сирҙе аҙыҡ **еңер**.* Мәҡәл.

**еңгәсәй I** *и. ирк.* Агайҙың ҡатыны. *Аласа шаршау, ҡылыс бау, һин бәйләнең дә, **еңгәсәй**.* Сеңләүҙән.

**еңгәсәй II** *и.* Арҡаһы ҡыҙыл, ҡара төрткөлө ҡуңыҙҙар гаиләһенә ҡараған бөжәк; ҡыр тараҡаны; сеңгәсәй. *Көнгә сығырға, **еңгәсәйҙәр** кеүек ҡояшҡа арҡа йылытып алырға кәрәк.* З. Биишева. *Беҙҙә башҡорттар **еңгәсәйҙе** лә, баҡаны ла үлтермәйҙәр.* Хикәйәттән.

**еңел I** *с.* 1. Күтәрергә, тартырға ауыр түгел, ергә тартым көсө бәләкәй; *кирәһе* ауыр. ***Еңел** йөк. **Еңел** кәрәк. **Еңел** таш.* ▬ *Толпарҙың үҙ аяғы үҙенә **еңел**.* Мәҡәл.

2. Үҙләштереүгә, аңлауга, башҡарыуга, үтәүгә ҡыйын түгел; анһат. ***Еңел** дәрес. **Еңел** мәсьәлә. **Еңел** эш.*

**еңел II** *ҡ.* Еңергә мөмкинлек биреү. *Кешенән **еңелеү**.* ▬ *Көрәш һабаҡтарын тылҡый-тылҡый үҫкән батырҙар **еңелмәҫтәр** мәңге!* Ғ. Амантай. *Гел күтәреп күнеккәнгә иң еңелде, көрәштә иң көсһөҙҙән дә ул **еңелде**.* Н. Иҙелбай. *Барсынһылыу **еңелде**, ти, Алпамышаға бирелде, ти.* «Алпамыша».

**ерек I** *и.* Ҡайындар гаиләһенә ҡараған еүеш, һыулы ерҙә, яр буйҙарында үҫә торған мурт ағас. *Һаҙлыҡтағы **ерек** араһында тартай тартылдаи.* Б. Бикбай.

**ерек II** *ҡ.* 1. Ергә тамыр ебәреү; тамырланыу. *Гөлдәр матур булып **ереген**, үҫеп китте.* Ф. Иҫәнголов.

2. *күсм.* Яңы ултырған урынға, яңы ергә өйрәнеү, шул ерҙе яҡын, үҙ күреп, яратып йәшәи китеү; үҙләшеү. *Яңы ерҙә **ереген** йәшәп китеү.*

**ерек III** *и.* Берәй төрлө аҙыҡтан ныҡ биҙеү һәм икенсеһен ныҡ ашарга теләү. ***Ереккән** йылан ите ашаған.* Әйтем.

**ерле I** *с.* 1. Ере булған, ере бар. *Күп **ерле** колхоздар.* ▬ [*Үмәр ҡарт — Тимерғәлегә*:] *Мин һине аталы, әсәле, йортло, **ерле** бер кеше балаһынан килгәнһеңме тип тыңлап ултырһам, һин төптө бер юҡ урындан килеп һүҙ асҡанһың икән.* Һ. Дәүләтшина.

2. Билдәле бер урынга, өлкәгә ҡараған. ***Ерле** һөйләш.*

3. Ошо урында йәшәгән; урындағы. *Разведчик һәм **ерле** халыҡтарҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, аҡтарҙың ике полкы Тоҙтүбә эргәһендә урынлашҡан.* А. Таһиров.

**ерле II** *киҫ.* Көсәйтеү мәғәнәһе бирә; һис, бөтөнләй. ***Ерле** көтмәгәндә. **Ерле** хәтер юҡ. Әйткәнде **ерле** тыңламай.* ▬ *Аҙашырлыҡ яман таш ҡала, тип һөйләүҙәре **ерле** буш икән.* Ғ. Амантай.

**ерлә I** *ҡ.* Үлгән кешене ергә күмеү; ҡуйыу. *Мәйетте **ерләү**.* ▬ *Ҡыпсаҡтар ҙа ҡайтып китте батырҙарын **ерләп**, Мәсем менән дошман булып, яманлашып.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

**ерлә II** *ҡ.* Үҙ ереҥ, төйәгеҥ күреп ҡабул итеп йәшәү. *Кемдеҥ ерен **ерләһәҥ**, шуның йырын йырларһың.* Мәҡәл.

**ерән I** *с.* Ҡыҙыл менән һары ҡатыш; ҡыҙғылт һары. ***Ерән** сәс. **Ерән** һаҡал.* ▬ *Оҙонса йөҙө турғай йомортҡаһы төҫлө сып-сыбар: **ерән** кешеләрҙеҥ күпселеге кеүек, Васяның бөтә тәнен һипкел баҫҡан.* Х. Мохтар. *Менгән генә атың **ерән** икән, елгән һайын алдан килә икән.* Халыҡ йырынан.

**ерән II** *ҡ.* Бысраҡҡа һанап ытырғаныу; сикәнеү. *Батша [халыҡ] менән бер табаҡтан ашарға, бер көрәгәнән ҡымыҙ эсергә **ерәнә**.* Әкиәттән.

**ет I** *ҡ.* **1.** Нимәнеҥ артынан ҡыуып килеп, шул нәмә менән тигеҙләнеү, йәнәшәләшеү. *Йүгереп **етеү**. Ҡыуып **етеү**.* ▬ *Күп ҡыуа торғас, ҡуян арыны, бара алмай туҡтала. Мин **етеп**, таш, кәҫ менән орғас, сабырға уҡтала.* Ш. Бабич. *Үрелдем — тота алманым, йүгерҙем — **етә** алманым.* Халыҡ йырынан.

2. Алдан билдәләп ынтылған нәмәгә өлгәшеү. *Маҡсатҡа **етеү**.* ▬ *Ниәтләнеп егет атҡа менһә, ниәтенә **етмәй** булырмы?* Халыҡ йырынан. *Сабыр иткән — моратына **еткән**.* Мәҡәл.

3. Үҫеп, бала йәшенән сығыу; балиғ булыу, ҙурайыу. *Һәр өй тәңгәлендә бәпкәләре **етеп** бөткән ҡаҙ көтөүҙәре ята.* З. Биишева. *Улың **етһә**, ҡыҙы яҡшы менән ауылдаш бул.* Мәҡәл.

**ет II** *ҡ.* **1.** Оҙонлоҡ, һан, күләм йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек, кәрәк саҡлы булыу. *Арҡан бәйләргә **етә**. Утын ҡышҡа **етә**.* ▬ *Ҡара ҡытат бишмәтеңә **етмәй** ҡалған яғалыҡ.* Халыҡ йырынан. [*Үмәр*:] *Яңғыҙ ҡыҙымды кейендерергә генә аҡсам **етер** әле.* Һ. Дәүләтшина.

2. Башҡа нәмә талап итмәү, булғаны менән ҡәнәғәтләнерлек булыу. *Башҡорт булыу өсөн уның һүҙен белеү генә **етмәй**, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаһын белергә кәрәк.* С. Агиш. *Аҡыллыға ишара ла **етә**.* Мәҡәл. *Күңел **етһә**, аш **етә**.* Мәҡәл.

**етеҙ I** *с.* Эшкә, хәрәкәткә сос; уңған. ***Етеҙ** ҡыҙ.* ▬ *Совхоз эше мохтаж икән **етеҙ** беләклеләр көсөнә.* Д. Юлтый. ***Етеҙ** бала етегә еткәнсе тешәй.* Мәҡәл.

**етеҙ II** *с.* Тәме үткер. *Ҡаҙ майы **етеҙ**, ашауға ауыр.* Һөйләү теленән.

**етеш I** *с.* Кәрәк ҡәҙәрле; етерлек, мул. ***Етеш** кеше. **Етеш** тормош.* ▬ *Барсынһылыуҙың бөтә нәмәһе **етеш**, тик күңеле урынында түгел, ти.* «Алпамыша».

**етеш II** *ҡ.* 1. Ваҡытында тейешенсә башҡарыу; өлгөрөү. *Мал ҡарауға көтөүселәр генә **етешә** алмағас, ярҙамға Маянһылыу сыға торғайны, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». ***Етешкән** ете елән кейгән.* Мәҡәл.

2. Үҫеп етеү. *Егет булып **етешеү**.* ▬ *Аҡъял —ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып **етешкән**.* Әкиәттән.

**етеш III** *ҡ.* Һан, күләм йәһәтенән ҡәнәғәтләнерлек булыу; кәрәк хәтле булыу. *Аҡса **етешә**. Кеше **етешмәй**. Тәртип **етешмәй**.*

**еткер I** *ҡ.* 1. Ҡыуып етергә мөмкинлек биреү. *Толкө ҡыуҙым — тотторманы, ҡуян ҡыуҙым — **еткермәне**.* Мәҡәл.

2. Алдан билдәләнгән нәмәгә өлгәштереү. *Тай атҡа, ат моратҡа **еткерә**.* Мәҡәл.

**еткер II** *ҡ.* 1. Оҙонлоҡ йәһәтенән кәрәк самаға килтереү. *Малай ... ат әҙенә **еткерә** баҫырға тырышып, эре-эре атлай.* Б. Бикбай.

2. Һан, күләм йәһәтенән билдәле бер талапты ҡәнәғәтләндереү, етерлек итеү. *Бер йылға **еткереү**. Оҙаҡҡа **еткереү**.* ▬ *Ир килтерә белһен, ҡатын **еткерә** белһен.* Мәҡәл.

**етә I** *бәйл.* Төбәү килештәге һүҙҙәр менән кем йәки нимәнеңдер артынан булған урынды белдерә; кемгәлер йәки нимәгәлер эйәрә; ҡала. *Беренсе колоннаға **етә** икенсеһе бара.*

**етә II** *р.* Бигерәк, үтә. *Төн уртаһы еткәс, бер ҡыҙ илай **етә** бәхеттәрем юҡ-юҡ тип.* Халыҡ йырынан.

# З

**замир I** [*ғәр.*] *и.* Тәьҫир, шауҡым. [*Мәғүзә:*] *Беҙҙең тиҫтер бисәләр береһе-бер тиерлек пенсияға әләкмәне. Һуғыш ваҡытында ауыр эштән ватылып, ҡыйралып бөткәс ни... Ҡайһыныһының биле эшкинмәһенме, икен сеһенең башы ауыртһынмы — былар бөтәһе лә һуғыш* ***замиры*** *инде.* Т. Килмөхәмәтов.

**замир II** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Намыҫ, выждан. *Тәғәссөбөн ҡалдырмаҫ боҙоҡ* ***замир***. Аҡмулла.

**зенит I** [*рус.*] *и. астр.* Күк көмбәҙенең баш осонда күренгән иң юғары нөктәһе. *Ҡояш* ***зенитта*** *тора.*

**зенит II** [*рус.* зенитный] *с. хәрби.* Һауалағы дошман самолёттарына һ. б. ата торған. ***Зенит*** *артиллерия.* ▬ *Йылғаның һул яғында 37 мм-лы* ***зенит*** *орудие ултыра.* Ә. Ихсан.

# И

**икеле I** *с.* Ике төрлө уйларлыҡ; шикле. ***Икеле*** *һүҙ.*

**икеле II** *и. диал.* Биш баллы баһа системаһындағы «насар» билдәһе. ***Икеле*** *алған.*

**илек I** *и.* Боландар ғаиләһенә ҡараған көйшәүсе һөтимәр кейек; ҡоралай. *Тәбиғәте матур был урындың: сылтырап аға тауҙан шишмәләр.* ***Илек,*** *болан, мышы — күп кейектәр, шишмәләрҙән һыуҙар эсәләр.* Б. Вәлит.

**илек II** *ҡ.* Кешегә өйрәнеп, яҡынайып, үҙ итеү; эйәләшеү. *Малайҙарға бөтөнләй* ***илегеп*** *киткән ҡолон ... арттарынан эйәреп йөрөй.* Х. Мөхтәр.

**илә I** *бәйл. иҫк. кит.* Менән. *Дәүләт* ***илә*** *тулды ғаләм, зиннәт* ***илә*** *ер йөҙө.* Ғ. Соҡорой.

**илә II** *ҡ.* Иләк аша үткәреп, сүп-сарҙан, эре-торонан таҙартыу. *Он* ***иләү.*** ▬ [*Тимерғәле — Үмәргә:*] *Юҡ, ҡорҙаш, яманлау ҡайҙа ул. Әле ана Ныяҙголға бойҙай* ***иләп*** *йөрөп һуңға ҡалып киттем.* Һ. Дәүләтшина.

**илә III** *ҡ.* Йөн, киндер һәм башҡаларҙы орсоҡ ярҙамында ишеп еп итеү. *Дебет* ***илә.*** *Еп* ***илә.*** ▬ *Ҡолғаларға*

*бәйләп йөн **иләйем**, әллә ниңә йөндәрем ырамай.* Халыҡ йырынан.

**илә IV** *ҡ.* Сей тирене махсус юл менән эшкәртеү. *Күн иләү. Тире иләү.*

**иләү I** *и. иҫк.* Бер йәмғиәт рәүешендәге төркөм; ырыу. *Табын **иләүе**.* ▬ *Бәне уран **иләүенә**, Уртауыл тигән ауылға алдырҙылар.* «Батыршаның хаты».

**иләү II** *и.* Төрлө сүп-сар ағас, тупраҡ һ. б. өйөп эшләнгән ҡырмыҫҡа ояһы. [*Айыу*] *бер ҡулы менән ҡырмыҫҡа **иләүен** аҡтара биреп ҡуя ла көтөп тора.* С. Кулибай.

**иләү III** *с.* Ҡапыл ярһып, ҡыҙып китеүсән; сыҙамһыҙ. ***Иләү** ат. **Иләү** кеше.*

**им I** *и.* Ауырыуға ҡаршы ҡулланылған сара; дауа. *Битенең бере көләр, бере һүгәр, тура һүҙе — берәүгә **им**, берәүгә ыу.* Аҡмулла. *Сут-сут һайрар ҡоштарына емдәр табылыр әле; мөхәббәттән тилерһәк тә, **имдәр** табылыр әле.* М. Кәрим. ***Имгә** ҡалған имгәкләп йөрөгән.* Мәҡәл. *Һәр ауырыуҙың үҙ **име** бар.* Мәҡәл. *Ярғанатҡа көн юҡ, иманға **им** юҡ.* Мәҡәл.

**им II** *ҡ.* 1. Тел, ирен ярҙамында имсәктең һөтөн һурыу. *Бала **имә**. Имсәк **имеү**.* ▬ *Һөтөн **имгән** әсәйемдең ҡайғынан билен бөктөрмәй, тотҡон ҡоштай башҡортҡа әҙер ирек бармы ни?* Салауат Юлаев. ***Имә** белгән ҡолон ике бейәнең һөтөн бөтөргән.* Мәҡәл.

2. Ниҙе лә булһа ауыҙға алып һурыу. *Бармаҡ **имеү**.*

**имлә I** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре; орфография. *Башҡорт теленең **имләһе**. Иҫке **имлә**. Яңы **имлә**.*

**имлә II** *ҡ.* Төрлө ырым-хөрәфәт буйынса дауалау. *Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы ауырып китте, ти. Тирәяҡтағы ... бөтә им-томсыларҙы, бағыусыларҙы килтереп, **имләп**, бағып ҡараһалар ҙа, береһе лә ярҙам итә алманы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**имән I** *и.* Бук ағастары ғаиләһенә ҡараған, киртләс эре япраҡлы, сәтләүеге булған ҡаты ағас. *Алтмышты ҡыуа барһа ла, Әбделҡадир ағай **имән** кеүек мыҡты ине.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡайындың туҙын маҡта, **имәндең** үҙен маҡта.* Мәҡәл.

**имән II** *ҡ.* Сирҡаныу, ытырғаныу. *Өйрәнгән күҙгә генә Мырҙаш артыҡ ят күренмәй. Тәү күргән кешеләр Мырҙаштың йөҙөнә **имәнеп** ҡарап тора.* Д. Юлтый.

**ин I** *и.* Малдың ҡолағына, ҡош-ҡорттоң тәпәй ярыһына ҡырҡып һалынған тамға; инәү. ***Ин** һалыу.* ▬ [*Аҡһаҡ ҡола:*] *Һыртымды ярып хур иттең, ҡолағымды ярып **ин** иттең.* «Аҡһаҡ ҡола».

**ин II** *ҡ.* 1. Хәрәкәт итеп берәй нәмәнең эсенә үтеү, эсенә элэгеү; кереү. *Өйгә **инеү**.* ▬ *Аҡмырҙа ... таш күперҙең аҫтына **инеп** ултырған.* Әкиәттән. *Күршеңә онға **инмәһәң** дә көлгә **инерһең**.* Әйтем. *Үләһе мал һаҙға **инер**.* Мәҡәл.

2. Һиҙеү-тойоу ағзаларына үтеп, тәьҫир яһау. *Ҡолаҡҡа **ингән** тауыш.* ▬ *Был бәлеш, күмәстәрҙең тәмле еҫтәре Айбулаттың танауына килеп **инә**.* Һ. Дәүләтшина. *Ана һөтө менән **инмәгән**, тана һөтө менән **инмәҫ**.* Әйтем.

3. Кешенең аҡыл-зиһененә, күңел-хәтеренә үтеп, урын алыу. *Күңелгә **инеү**.* ▬ *Ниндәй йылы һүҙ бар икән телдә, Әсмә йөрәгенә **инерлек**!* С. Кулибай. *Кеше ҡайғыһы кешегә иртә **инә**, кис сыға.* Әйтем. *'Ҡолаҡтан **ингән** һалҡын һүҙ йөрәккә барып етеп боҙ була.* Мәҡәл.

**инде I** *р.* Хәҙер. ***Инде** тоттом тигәндә генә улар* [*Мәскәй ҡыҙҙары*] *балыҡҡа әйләнгән дә, диңгеҙгә төшкән дә киткән.* Әкиәттән.

**инде II** *киҫ.* 1. Һүҙ йәки һөйләмдәге фекерҙе айырым бер баҫым менән көсәйтеп, нығытып ҡуя. — *Ҡысҡырма, ағай, ҡысҡырып эш ҡыра алмаҫһың. Хәҙер һин еңелдең **инде**.* Әкиәттән. *Бұлмаҫты һөткә һалып ҡайнатһаң да булмаҫ **инде**.* Әйтем.

2. Өндәү, саҡырыу, бойороу, үтенеүҙе, теләк-маҡсатты һ. б. белдергән һөйләмдәргә йомшаҡлыҡ бирә. [*Новиков:*] *Ҡыҙҙар эргәһенә барғас, шартына килтерәйек **инде**.* Д. Юлтый. — *Йә, егет, хәҙер һин әйләнеп йөрөп кил **инде**.* Әкиәттән.

**инеш I** *и.* Ер аҫтынан урғылып сығып ағып ятҡан бәләкәй һыу сығанағы; шишмә. ***Инеш** һай, һыуы — йөҙләктән, ваҡ таштар ята ялтлап.* Ш. Бикҡол. ***Инештең** һыуы йәйҙең эҫе көндәрендә лә боҙ кеүек, һалҡын*

*була. Беҙ ... **инештең** көмөштәй таҙа, һалҡын һыуына айран яҙып эсә торғайныҡ.* С. Кулибай.

**инеш II** *и.* Телмәрҙең, яҙма хеҙмәттең йәки музыкаль әҫәрҙең башланғыс өлөшө. *Хеҙмәт **инеш** менән башлана.*

***инә*** **I** *и.* Балаһы булған ҡатын (үҙ балаһына ҡарата); әсә. ***Инә** булыу. Атанан тыумай ул булмаҫ, **инәнән** тыумай ҡыҙ булмаҫ.* Мәҡәл. ***Инәнән** ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.* Мәҡәл.

**инә II** *ҡ.* Ин һалыу; инәүләү. *Һарыҡтың ҡолағын **инәп** ҡуйыу.*

**иң I** *и.* Кәүҙәнең бер ҡулбаштан икенсе ҡулбашҡа ҡәҙәр булған артҡы өлөшө; яурын. *Сүкеш ҡоралдарын **иңгә** һалып, эшсе заводтарға бара.* Д. Юлтый. *Ҡара ҡытат ай **иңемдә**, ҡара ебәк билбау билемдә.* Халыҡ йырынан. *Ил яҙмышы ир **иңендә**.* Әйтем. *Ҡулың менән эшләгәнде **иңең** менән күтәр.* Әйтем.

**иң II** *и.* Ниҙеңдер бер ситенән икенсе ситенә тиклем булған ара; киңлек. *Баҫыуҙың **иңе**. Тауарҙың **иңе**.* ▬ *Һарғайып таң атҡанда, был бабай сумып төбөнә етмәҫ, үлсәп **иңенә** етмәҫ бер күлгә балыҡҡа барған, ти.* Экиәттән.

***иң*** **III** *киҫ.* Сифат, рәүеш, һан һәм ҡайһы бер исемдәр менән килеп, мәғәнәне көсәйтә. ***Иң** беренсе. **Иң** көслө. **Иң** һылыу.* ▬ ***Иң** ахырҙа ҡуҙғала бер мәсьәлә, бар хыял-уйҙар ҙа шуға ташлана.* Ш. Бабич. *Погондарым бөгөп тыныс өйҙөң **иң** түрендә тора эленеп.* Ғ. Әмири.

**ирек I** *и.* 1. Бер кемгә лә бәйле булмаған, бер кем борсомаған, азат, иркен хәл; шәхси азатлыҡ. ***Ирек** бар. **Ироктә** йәшәү.* ▬ *Беҙҙең көндәр бындағы **ироктә** иҫереп үтә. Һис бер тынысһыҙлаған, борсоған кеше юҡ.* Д. Юлтый. *Бәхет хаҡы күп ғүмерҙәр тора, ҡәҙерле ул **ирек** шул ҡәҙәр.* М. Хәй. *Бүрек баҙарҙа һатылһа ла **ирек** баҙарҙа һатылмай.* Мәҡәл.

2. Кешенең үҙ маҡсаты, үҙ теләге менән эш-хәрәкәт ҡылыу мөмкинлеге; ихтыяр. ***Ирек** биреү.* ▬ [*Уралтау*:] *Алтыны ла үҙемдә, баҡыры ла үҙемдә, ни бирергә теләһәм, шуны бирер **иркем** бар.* Р. Ниғмәти. *Ҡолой кантонды ла бай тиҙәр ... үҙ хөкөмө уның үҙ ҡулында, ни ҡылһа ла*

***ирке** бар тиҙәр*. Халыҡ йырынан. *Ҡайҙан ҡолаҡ сығарһа ла ҡаҙансының **ирке** бар*. Мәҡәл.

**ирек II** *и. этн.* Тире иләгәндә уны йомшартып алыу өсөн махсус әҙерләнгән әсетмә (ғәҙәттә, әсе ҡатыҡҡа, эркеткә, арыш оно, он эреһе һалып әсетелеп әҙерләнә). *Тирене **ирекқә** һалыу.*

**ирек III** *ҡ.* Эшһеҙ, хәрәкәтһеҙлектән йонсоу, ялҡыу. *Туҡ эсәге тулышып, эшһеҙлектән **ирегеп** ятҡан ике бай ... Ирәндеккә һунарға сыҡҡан.* Н. Иҙелбай. *Сәфәр ҡылдым дәрүишлектән түгел, түгел ирмәк күреп, **ирегеп**.* М. Илбаев.

2. Ирекқә сығып рәхәтләнеү, ирекқә кинәнеү. ***Ирегеп** китеү.* ▬ *Мохтажы юҡ бирәү күңеле көр, ни эшләргә белмәй **ирегә**.* Х. Ғәбитов. ***Ирекқән** бала атаһының һаҡалы менән уйнар.* Мәҡәл.

**ирен I** *и.* Ауыҙҙың аҫтын-өҫтөн ҡымтып торған хәрәкәтсел өлөшө. *Аҫҡы **ирен**. Ҡалын **ирен**.* ▬ *Ҡыҙыл **ирен** бер йылмайһа, хоҙай шаһит, бөтә фекер әсир төшөр.* Ш. Бабич. *Илдә булһа, **иренгә** тейә.* Мәҡәл.

**ирен II** *ҡ.* Ҡуҙғалырға, ниҙер башҡарырға ауырһыныу; йыбаныу. ***Иренеп** тороу.* ▬ *Миңлебикә утын килтерергә **иренеп**, мунсаны һалам менән яҡҡан.* Әкиәттән.

**иреш I** *и. туҡ.* Буйлыҡтың көрөҫтән артҡы сөйгә тиклемге өлөшө. ***Ирeш** буйы. **Ирeш** ебе. **Ирeш** таяғы.*

**ирeш II** *и.* Әрләш, талаш. ***Ирeш** ишетеү. **Ирeш** сығарыу.*

**ирeш III** *ҡ.* 1. Көс, тырышлыҡ менән ниҙеңдер ғәмәлгә ашыуына килеү, нимәғәлер өлгәшеү. *Байлыҡҡа **ирешеү**. Дәрәжәгә **ирешеү**. Еңеүгә **ирешеү**. Маҡсатҡа **ирешеү**. Моратҡа **ирешеү**.*

2. Ниндәйҙер хәлдең ғәмәлләнешенә барып етеү; өлгәшеү. [*Тимерғәле*:] *Шул көндәргә тиҙерәк **ирешһәк** ине инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ирeш IV** *ҡ.* Һүҙгә килешеү, әйтешеү; әрләшеү. ***Ирешеп** китеү.* ▬ [*Шәһәрбаныу*:] *Сәйетҡол бисәһе лә кеше булып һүҙ һөйләгәс, ҡалайтып **ирешмәй** тораһың.* Һ. Дәүләтшина. *Яҡшы килен күрешеп һөйләшер, яман килен **ирешеп** һөйләшер.* Мәҡәл.

**ирештер I** *ҡ.* Тейешле урынға йәки кешеһенә еткереү, еткереп тапшырыу. *Сәләм **ирештереү**.* ▬ [*Ҡарағол*:] *Һин, Мозой, ... кантон тирәһендә йөрөштөр. Тегеләй-былай хәбәр булһа, беҙгә **ирештер**.* Д. Юлтый.

**ирештер II** *ҡ.* Төртмә һүҙ менән шаяртыу; мәрәкәләү, үсектереү. — *Эй, егет, егет. Бер еңгәңде лә еңеп, көмөш балдағын ала алмағас, ҡалайтып ҡәйнеш булып йөрөгән булаһың! — тип Заһит ҡустыһын **ирештерҙе**.* Һ. Дәүләтшина.

**иртә I** *и.* Тәүлектең бер өлөшө, көндөң тәүге мәле. *Иәмле **иртә**.* ▬ *Ниндәй йәнле **иртә**! Бына бер саҡ — тау биттәрен солғап яҡтыға ҡояш сыға башлай.* Ғ. Сәләм. ***Иртә** лә ҡил, кис тә ҡил, тәҙ(е)рәмде сиртә ҡил.* Халыҡ йырынан. ***Иртә** уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ.* Мәҡәл. *Кеше ҡайғыһы **иртә** инә, кис сыға.* Мәҡәл.

**иртә II** *р.* Ғәҙәти, билдәләнгән ваҡытҡа ҡәҙәр, ваҡытынан элек. ***Иртә** ҡартайыу. **Иртә** өйләнеү. **Иртә** ятыу.* ▬ ***Иртә** барһаң, ит бешә; һуңға ҡалһаң, бит бешә.* Әйтем. ***Иртә** килгән урын өсөн, һуң килгән тамаҡ өсөн.* Әйтем. ***Иртә** ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.* Мәҡәл. ***Иртә** торған бай булған, һуңлап торған хур булған.* Әйтем. ***Иртә** торғандың ырыҫы артыр.* Әйтем. ***Иртә** ятып, **иртә** торған донъяла йөҙ йыл торған.* Әйтем.

**ирәбе I** *с.* Кешегә ҡарата асыҡ, хуш күңелле, мөләйем йөҙлө: илгәҙәк. ***Ирәбе** кеше.*

**ирәбе II** *с.* Эре һөйәкле, ҙур. ***Ирәбе** бала. **Ирәбе** ҡатын иллелә лә бала табыр.* Мәҡәл.

**ирәүән I** *с.* 1. Иркен, киң тәбиғәтле. ***Ирәүән** кеше.*

2. *күсм.* Мул, иркен. ***Ирәүән** тормош.*

**ирәүән II** *и.* Төптән өйкөм булып сыҡҡан эре, киң япраҡлы, оҙон һабаҡлы, һепертке сәскәле ҡара бойҙайҙар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үлән (тамырынан дарыу яһайҙар). ***Ирәүән** барҙа ир үлмәҫ, андыҙ барҙа ат үлмәҫ.* Мәҡәл.

**иҫ I** *и.* 1. Элекке тәьҫирҙәрҙе башта һаҡлай һәм яңырта алыу һәләте; хәтер. ***Иҫе** юҡ. **Иҫе** яҡшы. **Иҫтә** тотоу. **Иҫтән** сығарыу.* ▬ *Иҫәрҙең **иҫе** булмаҫ, ялҡауҙың эше булмаҫ.* Мәҡәл. *Иҫерек **иҫендәге** һөйләр.* Мәҡәл.

2. Тирә-йүндәге мөхитте һиҙеү һәләтлеге; аң, һуш. ***Иҫ алыу. Иҫте юғалтыу.*** ▬ *Маян ... төшәгенә **иҫе** ауып йығыла.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Хөрмәт **иҫенә** килә алмай аңшайып байтаҡ торҙо.* Ф. Иҫәнғолов. ***Иҫең** киткән иҫке сәкмәнгә.* Әйтем.

**иҫ II** *ҡ.* Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү (елгә ҡарата); өрөү. ***Иҫте** елдәр сайҡалдырып ҡамыштар башын.* Р. Ниғмәти. *Ә ҡайҙа китергә икәнде миңә ел әйтте: «Мин ҡайһы яҡҡа **иҫһәм**, һин шул яҡҡа бар», — тине.* М. Кәрим. ***Иҫер** ел, һин ҡайҙан **иҫтең**, нисә ҡала үтә кистең, балаларымды күрҙеңме? — тип һорайым мин елдәрҙән.* Бәйеттән.

**иҫке I** *с.* Тотоноу, ваҡыт үтеү арҡаһында таушалған, туҙған; *киреһе* яңы. ***Иҫке** быйма. **Иҫке** кейем.* ▬ *Гүрҙә ҡалайлы **иҫке** һандыҡ. Уның эргәһендә бер-ике башҡорт балаҫы.* Ғ. Дәүләтшин. *Саматтың өҫтөндә әлеге шул **иҫке** пинжәк, башында ҡояшҡа янып бөткән кепкаһы.* Ә. Бикчәнтәев. ***Иҫке** йорттоң кәрәген яңыһында белерһең.* Әйтем. *Яңы ҡолаҡсынға ышанып, **иҫке** ҡолаҡсыныңды утҡа яҡма.* Әйтем.

**иҫке II** *и. диал.* Йүргәк. *Баланы **иҫкегә** төрөү.*

**ит I** *и.* Мал, төрлө йәнлек йәки ҡош-ҡорттарҙың ашау өсөн тәғәйенләп һуйылған түшкәһе йәки шул түшкәнең берәй киҫәге. *Йылҡы **ите**. Ҡаҙ **ите**. Һыйыр **ите**.* ▬ *Фәйзрахман ағай **итте** өлөшләп ултыртты ... Тоҙлоҡлап **ит** һоғондороштолар.* Н. Мусин. ***Ите** — иткә, һурпаһы — биткә.* Мәҡәл.

**ит II** *ҡ.* Исем, сифат, рәүеш һ. б. һүҙ төркөмдәре менән килеп, ҡушма ҡылым яһай һәм шул һүҙҙәрҙән аңлашылған мәғәнәгә ярашлы берәй эш башҡарыу, булдырыу, ниҙер яһау, ҡылыу, эшләү, үтәү һ. б. мәғәнәләрҙе бирә. *Бик күп **итеү**. Бик шәп **итеү**.* ▬ *Асыуыңды ат **ит**, аҡылыңды теҙген **ит**.* Мәҡәл. *Балта сапҡансы тумәр ял **итә**.* Әйтем. *Барлыҡ бар **иткән**, юҡлыҡ тар **иткән**.* Мәҡәл. *Илсе **итеп** эт ебәрһәң, илеңә яу килтерер.* Мәҡәл. *Кеше аҡылын ишет, үҙ аҡылың менән эш **ит**.* Мәҡәл. *Ҡатынды кеше **иткән** егет, арбаны яҡшы **иткән** дегет.* Әйтем. *Ҡыу тирәк талға һөйкәлеп, ҡырҡ йыл ғүмер*

***иткән***. Мәҡәл. *Этте түрә* ***итһәң*** *— эттәр ҡәҙере күтәрелә*. Әйтем. *Ямандан яҡшы тыуыр — әҙәм* ***итеп*** *танығыҙ*. Әйтем. *Ямандығы бағауыл* ***итһәң****, «яу килә» тип ҡысҡырыр*. Әйтем.

**итәклә I** *ҡ*. Ҡатмар һалыу, ҡатмарлау. *Ҡыҙҙарға* ***итәкләп*** *теккән бик тә килешә*. Һөйләү теленән.

**итәклә II** *ҡ*. 1. Итәккә һалыу, итәккә тултырыу. *Үткән көҙ* ***итәкләп*** *алып ҡайтырлыҡ та иген үҫмәне*. Һ. Дәүләтшина.

2. Итәк буйлау, тау итәге булыу. *Зәңгәр шаршау ҡороп, тау* ***итәкләп****, ҡояш боҫто*. Ғ. Амантай.

**иш I** *и*. 1. Исем, дәрәжәһе менән бер үк кимәлдәге, тиң; тиңдәш. ***Иш булыу. Иш итеү.*** ▬ *Аш табылыу бер бәхет,* ***иш*** *табылыу бер бәхет*. Әйтем. *Яманға яман* ***иш*** *була*. Мәҡәл.

2. Ҡуштың, парҙың һыңары; пар. ***Ише бар.*** ▬ ***Иш*** *—* ***ише*** *менән, ҡуш — ҡушы менән*. Мәҡәл. *Тун тиреһе* ***ише*** *менән*. Мәҡәл.

3. Ниҙеңдер төҫ-сифат яғынан оҡшаш тиңе. *Тик ике ҡолаҡ япрағым гел генә ике төрлө килеп сыҡты ... Һис кенә лә* ***иш*** *килмәнеләр*. М. Кәрим. [*Әбей*:] *Ул яулыҡтың бер ерҙә лә* ***ише*** *юҡ*. Әкиәттән.

4. Иптәш, дуҫ. *Әҙәм уйлай: «Кисер, яраббым, кешеләрҙе ниңә яраттың? Мин уларға, имеш,* ***иш*** *һанап, сер асырға нисек ышанам?»* М. Кәрим. *Атаһы юҡта әсәгә* [*бала*] *көңгөр-ҡаңғыр* ***иш*** *ине*. «Ҡараһаҡал».

**иш II** *ҡ*. Ике-өс тындан бороп, алмаш-тилмәш салып, бау яһау. *Гөлнисалар орлоҡ ағыулай, Айсыуаҡтар һабан йүнәтә. Аҡ һаҡаллы ҡарттар бау* ***ишә****. Яҙ алдынан аттар ял итә*. Т. Йәнәби. *Байтаҡ ултырғас ҡына Ҡара Йомағолға һүҙ ҡушам: Нимә* ***ишәһең****? — тим. — Арҡан. Бау ишкәндә ваҡыт тиҙ үтә ул. Осо ла, сиге лә юҡ уның —* ***иш*** *тә* ***иш*** *кенә*. М. Кәрим. *Бер ҡылдан арҡан* ***ишеп*** *булмай*. Мәҡәл.

**иш III** *ҡ*. Кәмә йәки башҡа нәмәне йөҙҙөрөү өсөн ишкәк йәки башҡа нәмә менән һыуҙы ярып үтеү. *Вәзир уға* [*Яҡупҡа*] *команда бирҙе: — Артҡа күс! Уртаға баҫып кем ишкәк* ***ишә****, ә!* М. Кәрим. *Егет йырлап ишкәк* ***ишә****,*

*тырыша егет*. Н. Нәжми. *Эҫе көндә Дим өҫтөндә бер ҡыҙ йөҙә кәмәлә. Үҙе* ***ишә****, үҙе йырлай, тулҡындарҙа тирбәлә.* Ҡ. Даян.

**иш IV** *ҡ.* 1. Өйөлгән, ойошҡан нәмәләрҙе тотош-тотош, күп-күп итеп аҫҡа емереү. *Бер мендем дә тауға, бер төштөм, аҡ таштарҙы түбән мин* ***иштем****.* Й. Солтанов.

2. *күсм.* Ниҙелер самаһыҙ күп итеп башҡарыу. *Ҡатын эшләй, ә был «сырхау» [ир] йоҡоно* ***ишә*** *генә.* И. Әхмәтйәнов. *Тел тигәндә телеп һала, эш тигәндә* ***ишеп*** *һала.* Мәҡәл.

# Й

**йоғош I** *и.* Аҙыҡтың файҙа биреше, туҡлығы. *Ҡурпының малға* ***йоғошо*** *булмай.* Һөйләү теленән.

**йоғош II** *ҡ.* Кешегә тартылып, эргәһендә уралыу; һырлығыу. [*Мулла*:] *Анау Зәйнәп камсамулдарға* ***йоғошоп*** *бара.* И. Ғиззәтуллин.

**йоло I** *ҡ.* Ауыр хәлдән аралап ҡотҡарыу; әрсәләү. *Бәләнән* ***йолоу****. Дошмандан* ***йолоу****. Үлемдән* ***йолоу****.*

**йоло II** *ҡ.* Ейеп ҡойолоу (сәс, йөнгә ҡарата). *Тиренең йөнө* ***йолоп*** *төшкән.* Һөйләү теленән.

**йомол I** *ҡ.* Бер-береһенә тейеп, ҡымтылып ябылыу. *Ауыҙ* ***йомола****. Ирендәр* ***йомолдо****.* — *Йоҡо баҫҡан күҙҙәр* ***йомолдо****.* Д. Юлтый.

**йомол II** *ҡ.* 1. Етеҙ хәрәкәт менән һөжүм итеү; ташланыу. [*Йыуан ҡорһаҡтар*] *йоҙроҡтарын күтәреп, таяҡтарын болғап уҡытыусыға* ***йомолдолар****.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Ботә ынтылыш менән нимәгәлер, ҡайҙалыр йүнәлеү; ташланыу. *Һунарға йөрөп өйрәнгән башҡорт аты ҡуян артынан* ***йомолдо****.* Б. Хәсән. *Аттар йомро һуҡмаҡ ситендәге йәшел үләнгә* ***йомолдо****.* Ж. Кейекбаев.

**йомро I** *с.* 1. Тумалаҡ рәүешендәге. ***Йомро*** *таш.* — ***Йомро*** *матур тояғыңды дағаларбыҙ, юрғам.* Халыҡ йырынан.

2. Арҡыры киҫелеше түңәрәк (оҙонса нәмәгә ҡарата). ***Йомро*** *таяҡ.* — *Тимер менән көпләнгән* ***йомро*** *һалҡын*

*мейескә һөйәлеп торған егет ... ҡайтырға йыйынды.* Я. Хамматов.

3. Тулы итле, һимеҙ. *Килдебай урта ғына* ***йомро*** *кәүҙәле. Яурындары, аяҡтары, хатта ҡул һырттары ла* ***йомро.*** Һ. Дәүләтшина.

4. *күсм.* Күләме, һаны арыу уҡ ҙур. *Йыйып, күҙ алдына ҡуйып, тикшереп ҡараһаҡ,* ***йомро*** *ғына әҙәбиәт байлығы йыйылған.* Д. Юлтый.

**йомро II** *и.* Сынаяҡ өҫтө. *Бер сынаяҡ сәй эстем дә* ***йомромдо*** *түңкәреп ҡуйҙым.* Ғ. Ғүмәр.

**йот I** *и.* Ҡоролоҡ булып, илгә килгән аслыҡ. *Ҡола ялан! Йәйен үлән көйрәй, көҙгә керһәң — батҡаҡ, ҡышын —* ***йот.*** Р. Бикбаев. *Илеңә* ***йот*** *килһә, малыңа көс.* Әйтем. *Белемлегә* ***йот*** *юҡ, белемһеҙгә ҡот юҡ.* Мәҡәл.

**йот II** *ҡ.* Нәмәнелер (ашамлыҡ, эсемлекте һ. б.) мускулдар ярҙамында ауыҙҙан ҡыҙыл эсәккә һәм ашҡаҙанға оҙатыу. ***Йотоп*** *ебәреү. Сәйнәп* ***йотоу.*** ▬ *[Ҡауҙы] ниҙер тотоп алып, һоғаланып* ***йотоп*** *ебәрҙе.* З. Биишева. *Урал батыр һыуҙың бер тамсыһын да* ***йотманы, ...*** *тирә-яҡҡа бөркөп ебәрҙе.* «Урал батыр». — *Бирерһегеҙ, бирмәй ни. Ашарһығыҙ туйҙы. Тамағығыҙға арҡыры тормаһын, туй итен иплән кенә, ҡылҡынып ҡына* ***йот.*** Һ. Дәүләтшина. [*Урал:*] *Апай, һ-ы-у! — Хәҙер ... бына килтерҙем,* ***йот ...*** Н. Ҡәрип. *Малды тота бел, ашты* ***йота*** *бел.* Мәҡәл.

**йотлоҡ I** *и.* Ҡоролоҡ булып, илде ас иткән хәл; йот. *Бына бер заман* ***йотлоҡ*** *килгән: иген уңмаған, бесән үҫмәгән, халыҡ асыға башлаған.* Әкиәттән.

**йотлоҡ II** *ҡ.* Аслыҡ кисереү; асығыу. [*Атайҙар*] *мәңге бил бөгөп тә, тир түгеп тә, икмәк төҫө күрмәй* ***йотлоҡҡан.*** Ш. Бикҡол.

**йөҙ I** *и.* 1. Кеше башының алғы яғы; бит. *Ғүмерем буйы көйә-көйә,* ***йөҙҙә*** *нурым ҡалманы.* Аҡмулла. *Һүҙҙәреңдең барыһы ла ялған, береһе ысын һүҙ түгел, һиндә юҡ ысын һүҙ менән ап-асыҡ* ***йөҙ,*** *төҙ күңел.* Ш. Бабич. *Яҡуптың* ***йөҙө*** *борған сепрәк төҫлө ап-аҡ ине.* М. Кәрим. ***Йөҙ*** *йыуыу менән яманлыҡ китмәҫ.* Мәҡәл.

2. Низең дә булһа өҫкө яғы, өҫтө. *Икмәктең **йөҙө**.* — *Елән итәге аяҡ **йөҙөнә** төшөп тора.* М. Тажи.

3. Низеңдер киң өҫтө йәки күҙгә күренгән өҫлөгө. *Күк **йөҙө**.* — *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа көн диңгеҙ **йөҙөн** ҡайнарлатып, быу булып күккә оса ла һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич. *Тулған айҙың **йөҙөндә** көйәнтәле ҡыҙ бармы? Ана шул була ай ҡыҙы.* Әкиәттән.

4. Ҡырҡа торған нәмәнең үткер ҡыры. *Балтаның **йөҙө**. **Йөҙө** ҡайтарылған. Салғының **йөҙө**.* — *Зәки ... бәкенең **йөҙөн** бармағы менән ҡарап, сәсенә тейҙереп-тейҙереп алды.* В. Нафиҡов.

**йөҙ II** *төп һ.* 1. 100 һаны. ***Йөҙгә** тиклем һанау. Меңде **йөҙгә** бүлеү.*

2. Кем йәки нимәнең 100-гә тиклем иҫәбе. ***Йөҙ** баш мал. **Йөҙ** йыл. **Йөҙ** метр.* — *Ятып ҡалған бер бәрәс **йөҙ** ҡуй булып үрсер ер.* Ҡобайырҙан. ***Йөҙҙәреңә йөҙ** ҡараным, **йөҙ** ҡараным, туйманым.* Халыҡ йырынан. ***Йөҙ** һум аҡсаң булғансы, **йөҙ** дуҫың булһын.* Мәҡәл.

**йөҙ III** *ҡ.* 1. Ҡул, аяҡ, тәнде ҡыбырлатып һыуҙа хәрәкәт итеү. *Ҡолас ташлап **йөҙөү**. Салҡан **йөҙөү**.*

2. Төрлө ҡулайлашҡан ағзалар ярҙамында һыуҙа хәрәкәт итеү (балыҡ, һыу йәнлектәре һ. б. ҡарата). *Аҡҡоштар күлде буйлап **йөҙөп** китте.* Ш. Бабич.

3. Һыу транспортында барыу. *Пароходта **йөҙөү**.* — *Зәйнәп менән икәү **йөҙөп** бара улар кәмәлә.* Ғ. Сәләм.

4. Һауала талғын ғына хәрәкәт итеү. *Көн әҙ генә болотло. Бөгәрләнеп-бөгәрләнеп болоттар **йөҙә**.* С. Агиш.

**йөҙлөк I** *и.* Ҡарындағы баланы уратып ҡаплаған яры. ***Йөҙлөк** менән тыуыу.*

**йөҙлөк II** *и.* Аяҡтың йәки аяҡ кейеменең алҡымдан түбәнге өҫтө. ***Йөҙлөгөм** көптәй булып шешеп китте.* Н. Мусин. *Инеш һай, һыуы — **йөҙлөктән**, ваҡ таштар ята, ялтлап.* Ш. Бикҡол.

**йөҙлөк III** *и.* 1. Урындыҡтың таҡта һалынған алғы буй ағасы. *Закир ... урындыҡ ситенә, **йөҙлөккә** барып ултырҙы.* З. Биишева.

2. Тәҙрәне уратып тыш яҡтан ҡағылған таҡта (ғәҙәттә семәрләп эшләнә). ***Йөҙлөк** ҡуйыу. Семәрле **йөҙлөк.** Тәҙрә **йөҙлөгө.***

**йөҙлөк IV** *и.* Көлдөксә. *Ҡуҙҙы **йөҙлөккә** тартыу.*

**йөҙлөк V** *и.* Йөҙ һумлыҡ аҡса. ***Йөҙлөктө** ваҡлау.*

**йөҙлә I** *ҡ.* Йөйҙө эскә бөкләп, икенсе ҡатҡа һырыу. ***Йөҙләп** сығыу.*

**йөҙлә II** *ҡ.* Ныҡлыҡ, матурлыҡ өсөн таш, таҡта йәки башҡа нәмә менән көпләү. *Кирбес менән **йөҙләү.***

**йөрөш I** *и.* 1. Кеше йәки йәнлек, хайуандың үҙ аяғы менән хәрәкәте. ***Йөрөштө** тиҙләтеү.* ▬ *Аҡтүбә дөйә **йөрөшө** менән өс көнлөк юл алыҫлығында тороп ҡалды.* Ғ. Ғүмәр. *Йәш ҡар саңғыларҙы тота. Шулай ҙа Хашимов **йөрөшөн** әкренәйтмәне, алдан юл һалып барҙы ла барҙы.* Б. Бикбай.

2. Транспорт сараларының бер урындан икенсе урынға хәрәкәте. *Индрил ... пароходтарҙың көслө хәрәкәттәрен, **йөрөштәрен** ҡарап ултырырға ярата.* Д. Юлтый. *Пароход мороно менән аҡ тулҡындарҙы яра-яра **йөрөшөн** шәбәйткәндән-шәбәйтә.* М. Тажи.

3. Шыйыҡлыҡтың, газдың һ. б. төрлө көпшә, торба, ҡан тамырҙары буйлап таралыу хәрәкәте. *Тән сымырлап, тамырҙарҙа ҡан **йөрөшө** туҡтап ҡалғандай була.* Ә. Ханыш.

4. Атлау рәүеше. *Еңелсә **йөрөш.** Һалмаҡ **йөрөш.*** ▬ [*Тимергәле*:] *Бына әле һинең артыңдан ҡарап килдем дә: **йөрөшөң** хас атайыңдыҡы.* Һ. Дәүләтшина.

**йөрөш II** *ҡ.* Бер-береңә барып йөрөү. *Ҡунаҡҡа **йөрөшөү.** Сәйгә **йөрөшөү.***

**йүнәл I** *ҡ.* 1. Берәй тарафҡа юл алыу. *Ауыл яғына **йүнәлеү.** Ҡайтырға **йүнәлеү.*** ▬ *Балыҡсылар ашығып диңгеҙ ярына **йүнәлде.*** З. Биишева.

2. Китергә юл алыу, юлға сығыу. [*Баҡый*:] *Сәй эсеп, бер-ике сәғәт йоҡларбыҙ ҙа **йүнәлербеҙ.*** Һ. Дәүләтшина.

3. Берәй тарафҡа йәки нәмәгә төбәлеү (кәүҙәгә ҡарата). *Уның* [*Бәкерҙең*] *күҙҙәре бер нөктәгә **йүнәлгән.*** Х. Зарипов.

**йүнәл II** *к.* 1. Тейешле хәлгә, йүнгә килеү. *Эш **йүнәлде**.* ▬ *Үткән ҡыш ҡар ҡалын булып, йылҡы ... йөҙәү булды. Әле һаман **йүнәлеп** бөтә алмаиҙар.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Ауырыуҙан һ. б. төҙәлеү, һауығыу, сәләмәтләнеү. *Аяғы **йүнәлгән**. Яраһы **йүнәлгән**.* ▬ *Утыҙ бер йыл ауырыған бер ҡатын ҡымыҙҙан **йүнәлде**.* М. Ғөбәйҙуллин.

**йыйын I** *и.* 1. Йәмәғәттең ниндәйҙер мәсьәләне ҡарау өсөн йыйылған йыйылышы. ***Йыйын** йыйыу. Ырыу **йыйыны**.*

2. Яҡын-тирә ауылдарҙы йыйып, һый, уйын, төрлө ярыш менән үткәрә торған йәйге байрам; бәйге. *Майҙы үткәргәс халыҡтар, эш менән июнь етер. Милли байрамдар килерҙәр, бик матур **йыйын** етер.* Ш. Бабич. *Ул [Әхмәҙи] **йыйындарҙа** көрәшеп һебәләр алған.* Ж. Кейекбаев.

3. Саҡырылған ҡунаҡ мәжлесе. *Йәйләүҙә өс көн буйы **йыйынға** әҙерләнәләр: был **йыйын** Ныязғолдоң еңеү көнөн билдәләп, дуҫтарҙы шатландырырлыҡ, дошмандарҙың эсен яндырырлыҡ шәп булырға тейеш ине.* Һ. Дәүләтшина.

**йыйын II** *ҡ.* 1. Кәрәк-яраҡ нәмәне хәстәрләп берәй эш-шөғөлгә әҙерләнеү. *Ҡунаҡҡа **йыйыныу**.* ▬ *Рәзилә ... йәһәт кенә **йыйынды** ла ҡапҡа алдына сыҡты.* Н. Мусин.

2. ***-рға*** формаһындағы төп ҡылымдан һуң килеп, берәй эш-хәрәкәтте башҡарыуға ниәт иткәнде белдерә. *Ҡайтырға **йыйыныу**. Ятырға **йыйыныу**.* ▬ *Батша үҙенең берҙән-бер ҡыҙын кейәүгә бирергә **йыйына**, ти.* Әкиәттән.

**йыр I** *и.* Көй менән башҡарыла торған шиғри әҫәр. ***Йыр** йырлау.* ▬ *«Ашҡаҙар» — шул исемдәге йылғала батып үлгән ире тураһында башҡорт ҡатыны сығарған **йыр**, башҡа **йырҙарға** ҡарағанда нығыраҡ хөрмәтләнә.* М. Өмөтбаев. *Тыуған ерҙәр гүзәллеге булып, йөрәктән **йыр** күпме ағыла. Күптәрҙе бит **йырҙар** осраштыра, **йыр** менән дуҫ, иптәш табыла.* Н. Нәжми. ***Йыр** йырлауы беҙгә тәсбих түгел, **йыр** йырлауы күңел күтәрә.* Халыҡ йырынан. ***Йырҙың** йыртығы юҡ.* Әйтем. ***Йыры** барҙың көйө бар.* Мәҡәл. *Моңһоҙҙоң да бер **йыры** була.* Әйтем.

**йыр II** *ҡ.* 1. Ниҙелер өңөп, ашап, юл ярыу. *Тауҙарҙы **йырып**, Ҡураған йылғаһы аға.* К. Мәргән.

2. Кимереп, өңөп юлаҡ ярыу. [*Һандыҡтың*] *таҡталарын ҡорт **йырып** бөткән.* З. Биишева.

3. Буйға ярыу, телеү. *Һаҙаҡ Аҡһаҡ ҡоланың һыртын ярып, бер ҡолағын **йырып** барып сыға.* «Аҡһаҡ ҡола».

4. Ниҙелер ян-яҡҡа аралап, алға хәрәкәт итеү. *Батҡаҡ **йырыу**.* ▬ *Зөһрә ысыҡлы һаҙ үләнен **йырып**, тар ғына һуҡмаҡтан бара.* З. Хисмәтуллин.

**йыуан I** *с.* 1. Әйләнәһе ҙур (оҙонса, йомро нәмәнең арҡырыһына ҡарата); *киреһе* нәҙек. ***Йыуан** ағас. **Йыуан** бүрәнә. **Йыуан** таяҡ.* ▬ *Ит ашағандың балтыры **йыуан**.* Мәҡәл.

2. Кәүҙәгә ҡалын; һимеҙ, таҙа. *Ҡалын атҡарыу өсөн бер **йыуан** ат һуйғандар.* М. Буранғолов.

**йыуан II** *ҡ.* Ауыр, күңелһеҙ хәлгә өмөт, ҡыуаныс табып, үҙеңде әүрәтеү. [*Фәтхи*] *яҙ ҡайтып иген сәсеү, ат, һыйыр алыу ... өмөттәре менән **йыуана**.* А. Таһиров. *Мин йырымда туйғансаға тиклем һине һөйөп, тирбәп **йыуандым**.* Х. Ҡунаҡбаев.

**йыуын I** *и.* Һыйырҙың һиғеҙгүҙ өҫтө (быҙаулар алдынан йомшап, соҡорланып төшә). *Һыйыр **йыуынын** йомшатҡан.*

**йыуын II** *ҡ.* Бит, ҡулыңды йәки тотош тәнеңде йыуыу. [*Муйылбикә:*] *Йә, килендәр, ҡыҙҙар, **йыуынығыҙ**, тамаҡланып алайыҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Ваннаға, душҡа ҡарағанда, мунсала **йыуыныу** һәйбәтерәк.* В. Ғүмәров.

**йыш I** *с.* 1. Бер-береңә яҡын урынлашҡан бер төрлө нәмәләрҙән йәки өлөштәрҙән торған. ***Йыш** тараҡ.*

2. Бер төрлө хәрәкәттәрҙең, тауыштарҙың һ. б. тиҙ алмашыныуынан торған. ***Йыш** пульс. **Йыш** һулыш.*

3. Ҡыҫҡа ваҡыт һайын ҡабатланыи, булып торған. ***Йыш** осрашыу. **Йыш** ойоштороу.*

**йыш II** *ҡ.* 1. Ағас нәмәләрҙең өҫтөн юнып шымартыу. *Таҡта **йышыу**.* ▬ *Улар* [*Ирек менән Толя*] *ағасты оҙон көйо **йыша**, шунан фуганка менән тигеҙләй, закрой алалар.* Ғ. Шәрипов.

2. Ҡом, көл кеүек онтаҡ нәмә менән йылтыратыу; ағартыу. *Самауыр йышыу.* ▬ ***Йышып** ағартылған еҙ тас, еҙ ҡомған тотоп, Байрас ... ҡунаҡтарҙың ҡулын йыуҙырып сыҡты.* З. Биишева.

йә I *терк.* 1. Яңғыҙ йәки ҡабатланып килеп, мәғәнә яғынан берен-бере алмаштырған һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. *Һөйләүсе **йәки** йырлаусы үҙенең отоп алған йырына **йә** әкиәтенә яңы һүҙҙәр ҡушып, арттырып һөйләй.* Ғ. Амантай. *Радио беҙҙең бүлмәлә ҡысҡырып һөйләп тора, **йә** Мәскәүҙән, **йә** Өфөнән музыка гөрләп тора.* Р. Ниғмәти.

2. Ҡабатланып килеп, мәғәнә яғынан берен-бере инҡар иткән һөйләм һәм һөйләм киҫәктәрен сағыштырыу өсөн ҡулланыла. [*Айбулат:*] *Хәҙерге көндә **йә** беҙ, **йә** улар.* Һ. Дәүләтшина. *Көн елләһә, уны **йә** аяҙға, **йә** ямғырға, тиҙәр кешеләр.* Н. Нәжми. [*Ҡыҙ:*] *Иртәгә **йә** һинең башың бөтә, **йә** мин һинең ҡатының булам.* Әкиәттән. ***Йә** уңдым, **йә** туңдым.* Әйтем.

йә II *киҫ.* 1. Йомошто йәки һүҙҙе тыңлап, үтәргә ризалыҡ биргәндә әйтелә; ярар. — *Һыуға барып кил әле, ҡыҙым.* — ***Йә.***

2. Ҡеүәтләү, әйҙәләү, өндәүҙе белдергәндә әйтелә; әйҙә. [*Сынбулатов:*] ***Йә**, һөйлә, Хафиз ағай, тик ҡыҫҡараҡ тот.* М. Тажи.

3. Һүҙгә, яуапҡа ыңғайлатып, һорау биргәндә әйтелә; шунан. — ***Йә, йә** шунан?* Һ. Дәүләтшина. — ***Йә**, ни хәл?* — *Шул бер көйө.* С. Ағиш. ***Йә**, улым, һин ниндәй төш күрҙең?* Әкиәттән.

4. Мөрәжәғәткә ҡаршы өндәшкәндә әйтелә. — ***Йә**, нисек мөмкин түгел! Әллә кәйефегеҙ юҡмы!* [— *тине Мәрйәм*]. Д. Юлтый.

5. Киҫәтеү, сикләүҙе белдергәндә әйтелә; етәр. — ***Йә**, күп сыуылдашмағыҙ.* Һ. Дәүләтшина. — ***Йә**, ҡайһығыҙ бара?* — *тине ат хужаһы.* М. Кәрим.

йә III *ымл.* Ҡәнәғәтһеҙлек белдергәндә әйтелә. ***Йә**, ошо кешегә Юламан ҡарт ҡалайтып ышанһын!* З. Биишева.

йәй I *и.* Йылдың яҙ менән көҙ араһындағы иң йылы ваҡыты. *Ике **йәй** бит инде, һәр иртәлә ҡорос ҡоштар оса*

*түбәнән.* Ғ. Сәләм. *Шул **йәйҙе** мин Фәтхерахман муллаға ялсы малай булып керҙем.* А. Карнай. *Эй йылмая ҡояш ... Күҙгә ҡояш ... Ә ерҙә шул барыбер **йәй** түгел.* Н. Нәжми. ***Йәйгә** сыҡҡан йән үлмәҫ.* Әйтем. ***Йәй** ҡышты туйҙыра.* Әйтем.

**йәй II** *ҡ.* 1. Ян-яҡҡа иркен итеп һуҙыу. *Аҙнагөл ҡоласын **йәйеп,** кәмәлә аяғүрә баҫып килә.* З. Биишева. *Ул бармаҡтарын **йәйеп,** ҡулын күкрәгенә ҡуйҙы.* С. Агиш.

2. Йоҡа, киң нәмәне таратыу; яҙыу. *Ашъяулыҡ **йәйеү.*** ▬ *Үҙе торҙо, ярға күҙ ташланы, ... унан чертёждарын **йәйҙе.*** Ғ. Сәләм.

3. Ятыр йәки ултырыр өсөн аҫҡа түшәү. *Түшәк **йәйеү.*** ▬ *Ямал Сәғиҙәне арба аҫтына бесән **йәйеп,** балаҫ түшәп ятҡырҙы.* М. Тажи. [*Әсәйем*] *һикенең бер мөйөшөнә йәһәт кенә урын **йәйҙе** лә атайымдың майлы бишмәтен өҫтөмә япты.* Д. Юлтый.

4. Ҡоршап, теҙеп һалыу, түшәү. *Иҙән **йәйеү.** Таҡта **йәйеү.***

5. Ҡамырҙы уҡлау тәгәрләтеп йоҡартыу. *Туҡмас **йәйеү.** Һалма **йәйеү.***

6. Йоҡа итеп таратыу. *Ҡаҡ **йәйеү.*** ▬ *Сейәбикә өйөнә инә һалып, алып ҡайтҡан сейәләрен **йәйеп** ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

7. Киптереү өсөн таратып һалыу, таратып элеү. *Кер **йәйеү.*** ▬ [*Хисам*] *ау, нәрәтәләрен яр башына сығарып **йәйә** лә ... бесән сабырға тотона.* М. Тажи.

**йәйек I** *и.* Ылыҫлы ағастың тарбаҡлы ботағы. *Артыш **йәйеге.** Шыршы **йәйеге.***

**йәйек II** *с.* Арҡырыға йәйелгән; йәйенке; киң. ***Йәйек** ҡойроҡ кир бейә, ти, тайҙар менән ул да юҡ, ти.* «Аҡһаҡ ҡола».

**йәйен I** *и.* Киң ялпаҡ ауыҙлы, оҙон мыйыҡлы, сөсө һыуҙа йәшәгән шыма тәнле, тәңкәһеҙ бик эре йыртҡыс балыҡ. *Бер мәл балыҡ һөҙөп йөрөгәндә, инде ярға сығарып еткәндә генә, бер ҙур **йәйен** йылымын йыртып сығып ҡаса.* И. Насыри.

**йәйен II** *р.* Йәйге көндә, йәйге ваҡытта. *Ә бына Бәләбәй өйәҙендәге Асылыкүл, киреһенсә, **йәйен** бик ташып китә.*

М. Өмөтбаев. *Урамдарың буйлап сабып үтте,* ***йәйен*** *— туҙан, ҡыш — ҡар туҙҙырып, баллы кәрәҙ кеүек шаҙра малай үҫтем һиндә гармун һыҙҙырып.* Н. Нәжми. *Төнләккә ҡармаҡ һалдым быйыл* ***йәйен,*** *бер мәл ҡапты хатта ... үҙем буйлыҡ йәйен!* Ш. Бикҡол. *Әй әйҙәне лә, әйҙәне, Әй буйында* ***йәйен*** *йәйләне.* Халыҡ йырынан.

**йәйә I** *и.* Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тартҡан ҡорал, ян. ***Йәйә*** *тартыу.* ***Йәйәнән*** *атыу.*

**йәйә II** *и.* Ярым түңәрәк йәки ярым квадрат рәүешендәге пунктуацион билдә. ***Йәйә*** *асыу.* ***Йәйәләр*** *эсенә алыу. Квадрат* ***йәйә.*** *Түңәрәк* ***йәйә.*** *Фигуралы* ***йәйә.***

**йәнәш I** *и.* Һөйгән йәр. ***Йәнәшемде*** *оҙатҡанда яулыҡтарым болғаным.* Халыҡ йырынан.

**йәнәш II** *р.* Берәй кеше йәки нәмә менән бер рәттән; йәнәшә, ҡатар. ***Йәнәш*** *атлау.* ▬ [*Әҡлимә*:] *Талға ҡунған пар һандуғас кеүек* ***йәнәш*** *кенә ултырһындар. Икеһе лә ниндәй һөйкөмлө!* Ҡ. Даян. *Командир атлыларға юл ҡатыһынан сыҡмаҫҡа, икәүҙән артыҡ* ***йәнәш*** *бармаҫҡа, артта ҡалмаҫҡа бойорҙо.* Ә. Вахитов.

**йәп I** *и.* Осо тармаҡланып торған нәмәнең бер айырсаһы; сата. *Һәнәк* ***йәбе.*** ▬ *Һабы килһә,* ***йәбе*** *килмәй,* ***йәбе*** *килһә, һабы килмәй.* Мәҡәл.

**йәп II** *и.* Урын-еренә килеп, килешеп торған бер хәл. *Мин йылымды үҙ* ***йәбе*** *менән генә һыуын сығарып, яр башындағы аҡланға йәйеп һалдым.* Ф. Иҫәнголов.

**йәплә I** *ҡ.* Йәп ҡуйыу, сата яһау. *Һәнәге ҡыйбат түгел,* ***йәпләгәс*** *ҡыйбатлана.* Әйтем.

**йәплә II** *ҡ.* 1. Уңайлы, йәтеш итеү; ҡулайлау. ***Йәпләп*** *ултырыу.* ▬ *Бабай күҙлеген* ***йәпләп*** *ҡуйҙы ла йылмая биреп һөйләргә кереште.* Р. Солтангәрәев.

2. Урын-еренә килтереү, йәтешләп ҡуйыу; ҡулайлаштырыу. *Атайыма оҡшатыбыраҡ тубыҡландым. Мылтыҡты* ***йәпләй*** *башланым.* Ә. Зәйнуллин.

**йәпрәй I** *с.* Нык ҡуйы үҫешкән. ***Йәпрәй*** *ҡаш.* ***Йәпрәй*** *ҡыуаҡ.* ▬ *Тирмә ишеге асылды. ...* ***Йәпрәй*** *ҡашлы бер ҡарт күренде.* Ш. Шәһәр.

**йәпрәй II** *ҡ.* Боҙолоп, йәмшәйеп, аҫҡа һалбырау. ***Бабай йәпрәйгән** ҡалпағы аҫтынан ҡыҙҙар яғына боролоп ҡараны.* Һ. Дәүләтшина.

**йәтмә I** *и.* Яны менән сиртеп ҡыҫа торған ҡорал (ваҡ йәнлеккә, ҡуянға ҡуйыла). ***Йәтмә** һалыу.*

**йәтмә II** *и.* 1. Тоҡ рәүешендәге ваҡ ау йәки йылымдың тоҡо. *Балыҡ **йәтмәһе. Йәтмә** менән күбәләк тотоу.* ▬ ***Йәтмәгә** эләккән аҡ сабаҡтар һикерешә.* З. Әхмәтов.

2. *күсм.* Кешене алдар өсөн эшләнгән хәйлә. [*Рогаткин:*] *Корниловтар ни тиклем генә **йәтмә** ҡорһа ла халыҡ беҙҙең яҡта.* В. Исхаҡов.

**йәһәт I** [*ғәр.*] *и.* 1. Эш, хәлдең йүнәлеше; яҡ, тараф. *Ғилми **йәһәттән** ҡарағанда. Һәр **йәһәттән** уңайлы.* ▬ *Ырымбурҙа башҡорт халҡының культура тарихына бәйле булған иҫтәлекле урындар шаҡтай күп. Был **йәһәттән** иң тәүҙә Караүанһарай телгә алына.* К. Мәргән.

2. Ниҙәндер йүне, яйы. [*Бай балалары*] *кәйеф асыу, рәхәт йөрөү **йәһәтен** ҡарайҙар ине.* М. Ғафури.

**йәһәт II** [*ғәр.*] *р.* Тиҙ хәрәкәт менән, тиҙ генә; етеҙ, тиҙ. [*Ишбай:*] *Бар, әҙерлән, әсәй, тиҙ, **йәһәт** бул.* З. Биишева. *Ниңә моңаяһың, Йәнгүзәлем, **йәһәтерәк** һөйләп бир инде.* А. Игебаев. *Аҡъял батыр **йәһәт** кенә ағас башына менеп киткән.* Әкиәттән.

**йәһәтлә I** *ҡ.* Хәстәрлек итеп әҙерләү, йүнләү. *Ашарға **йәһәтләү**. Утын **йәһәтләү**.*

**йәһәтлә II** *ҡ.* Тиҙләтеү, тиҙ-тиҙ ашыҡтырыу. *Аҙымды **йәһәтләү**. Эште **йәһәтләү**.* ▬ *— Килен, килен, ҡунаҡ килде бит, сәйеңде **йәһәтлә**.* Н. Мусин.

**йәш I** *с.* 1. Ғәмәлдәге йәшәгән ғүмере әле әҙ; *киреһе* ҡарт. ***Йәш** кеше. **Йәш** быуын. **Йәш** үҫмер.* ▬ ***Йәш** егеттәр гармун ҡосаҡлап, урам буйлап йырлап үттеләр.* Ғ. Амантай.

2. Бүтән берәү менән сағыштырғанда, гәмәлдәге йәшенән ғүмере кәм, кесе; *киреһе* оло. ***Йәш** еңгә. **Йәш** ҡоҙа.* ▬ *Асатай Айбулатҡа ҡарағанда байтаҡ **йәш**.* Һ. Дәүләтшина.

3. Күптән түгел барлыҡҡа килгән. Күптән түгел йәшәй, үҫә башлаған. ***Йәш** мал. **Йәш** үҫенте. **Йәш** әҙәбиәт.*

4. Кибеп ҡатмаған, ҡоромаған; сей. ***Йәш** утын.*

5. Иҫкереп өлгормәгән; яңы. *Һуңғы япраҡ, һыйғыр һабағынан өҙөлөп төштө **йәш** ҡар өҫтөнә.* Р. Ғарипов.

**йәш II** *и.* Йәшәгән ғүмер оҙонлоғон билдәләгән йыл иҫәбе. ***Йәште** иҫәпләү.* ▬ *— Нисә **йәштә**? — Ун алтыла. — Тимәк, оло ғына бер һыйыр **йәше** бар икән.* С. Агиш. *Ун дүрт **йәше** тулғанда,* [*Салауат*] *яңғыҙ айыу аулаған.* Р. Ниғмәти. *Әсәһе үлгән ваҡытта Айбулатҡа ун дүрт **йәш** ине.* Һ. Дәүләтшина. *Ашын ашаған, **йәшен** йәшәгән.* Әйтем. *Ирҙең **йәше** ике утыҙ.* Әйтем.

**йәш III** *и.* Илағанда, бик ныҡ тулҡынланғанда йәки көслө ауыртыуҙан күҙ биҙҙәре тарафынан бүлеп сығарыла торған әскелтем шыйыҡлыҡ. *Күҙгә **йәш** килеү.* ▬ *Ул* [*Шәүәли*] ***йәшенә** быуылып, һүҙенән туҡтаны.* Б. Бикбай. *Ирочка үкһеп иланы. Минең беләккә ҡайнар күҙ **йәше** тамды. Д. Юлтый. Аҡъял батырға бик ҡыйын булып киткән, күңеле тулып, мөлдөрәп күҙенән **йәш** тамған.* Әкиәттән. *Ата һуккән аш ейер, әсә һуккән **йәш** түгер.* Әйтем. *Баиҙың татлы ашы, фәҡирҙең ҡанлы **йәше**.* Мәҡәл. *Юрғаның тире кипмәҫ, иркәнең **йәше** кипмәҫ.* Әйтем.

**йәшен I** *и.* Атмосфера электрының һауала зарядһыҙланыуы ваҡытында барлыҡҡа килгән атҡы. ***Йәшен** атыу.* ▬ *Бына ҡапыл дауыл күтәрелде, йәшнәп китте **йәшен** ялт итеп. Күк күкрәтеп, ер тетрәтеп, йәшен сытырлатып үпте тау битен...* Н. Нәжми. *Уйна, **йәшен**! Һығып йәшен, ҡабарһын күк болоттар.* В. Әхмәҙиев. *'Капыл күк күкрәгән, **йәшен** йәшнәгән, ҡойоп ямғыр яуа башлаған.* Әкиәттән.

**йәшен II** *ҡ.* Күҙҙән ҡасып ышыҡланыу, ышыҡланып боҫоу. ***Йәшенеп** тороу.* ▬ *Мин ҡурҡып, ҡапҡаның йыуан бағанаһы артына **йәшендем**.* Н. Ғәлимов. *Мөхәббәт — ул, әйтерһең дә, утлы йәшен, һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен, һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен; көиҙөрор тип ҡурҡһаң әгәр, ҡас һин, **йәшен**, ҡоя күрмә тик аҙаҡтан күҙең йәшен! Мөхәббәт — ул, әйтерһең дә, утлы-йәшен.* Р. Назаров.

**йәшлек I** *и.* Үҫмер саҡтан алып үҫеп еткәнгә, балиғ булғанға тиклемге саҡ; йәш саҡ; *киреһе* ҡартлыҡ. *Үткән ғүмерҙе кире ҡайтарып булмай,* ***йәшлегеңдең*** *ҡәҙерен белеп йәшәргә тырыш.* М. Тажи. *Беҙҙең* ***йәшлек*** *ҡабатланмаҫ өсөн юғала.* Ғ. Хәйри.

**йәшлек II** *с.* Күпмелер йәштә булған; йәштәге. *Алты* ***йәшлек*** *бала.* ▬ *Усманғәле ун алты* ***йәшлек*** *егет булып киткән, кәүҙәгә ҙурайған.* Ғ. Дәүләтшин.

**йәшәр I** *ҡ.* Йәшерәк булып китеү, йәшкә әйләнеү, йәштәр төҫө инеү, үҙеңде йәш тип хис итеү. *Ғариф ҡарт та был арала байтаҡ* ***йәшәреп*** *киткән кеүек тоиҙо үҙен.* Б. Бикбай. *Бөгөн, һине күргәс,* ***йәшәрҙем*** *мин.* М. Хәй.

**йәшәр II** *ҡ.* 1. Йәшелгә әйләнеү; йәшелләнеү. *Яҙҙар етте, көн йылытты,* ***йәшәрҙе*** *дала.* К. Кинйәбулатова.

2. Йәшел булыу. *Иртәнсәккәй тороп мин ҡараным,* ***йәшәрептәй*** *ята тау башы.* Халыҡ йырынан.

**йәшәрт I** *ҡ.* Йәшелгә әйләндереү, йәшел итеү. *Ямғыр ерҙе* ***йәшәртә.***

**йәшәрт II** *ҡ.* Йәш итеү, йәшкә әйләндереү. [*Кузьма*:] *Ә бына һин, иптәш, ҡарттарҙы* ***йәшәртеү*** *тураһында ни уйлайһың?* С. Агиш.

# К

**кавалер I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙ менән ҡушлап бейегән ир. ***Кавалер*** *менән бейеү.*

**кавалер II** [*рус.* < *ит.*] *и.* Орден менән бүләкләнгән кеше. *Дан ордены* ***кавалеры.***

**кадр I** [*рус.* < *фр.*] *и.* 1. Киноплёнка йәки фотоплёнкалағы бер һүрәт. *Тоноҡ* ***кадр.*** *Уңышлы* ***кадр.***

2. Кинофильмдағы бер күренеш. *Фильмдан* ***кадр.***

**кадр II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Берәй учреждение, предприятие, ойошма йәки профессия кешеләренең әҙерлекле төп составы (ғәҙәттә күплектә ҡулланыла). ***Кадрҙар*** *һайлау.* ***Кадрҙарҙы*** *һаҡлау. Һыналған* ***кадрҙар.***

**кеҙә I** *и.* Уҫал бейәне һауған саҡта һыңар артҡы аяғын муйынына тарттырып бәйләгән бау. ***Кеҙә*** *һалыу.*

**keҙә II** *и.* Ырғаҡ рәүешендәге бик, элгес; келә. *Ике-өс ҡыҙ ишекте астырмаҫҡа була* ***keҙәгә*** *килеп йәбеште.* Ж. Кейекбаев.

**keҙәлә I** *ҡ.* Кеҙә һалып бәйләү. *Бейәне* ***keҙәләү.***

**keҙәлә II** *ҡ.* Келә һалыу. *Ишекте* ***keҙәләү.***

**кейек I** *с.* Ҡулға эйәләшмәгән; ҡырағай. ***Кейек*** *йәнлектәр.* ***Кейек*** *ҡаҙҙар.* ▬ *[Ҡасҡындар] көндөҙҙәрен һунарға йөрөп,* ***кейек*** *йәнлек аулаған.* Н. Иҙелбай. *Тыуған илен һағынып, ҡаңғылдашып,* ***кейек*** *ҡаҙҙар килә ҡулдәргә.* Ҡ. Даян.

**кейек II** *и.* Ҡырағай йәнлек. *Йыртҡыс* ***кейектәр. Кейек*** *аулау.* ▬ *Йондоҙ ҡашҡа, урмандан ҡайтҡан* ***кейек*** *һымаҡ, һаман эйәләшмәй.* Р. Солтангәрәев.

**кейә I** *и.* Умартаның ҡорт инә торған еге. ***Кейәне*** *асыу.* ▬ *Бал ҡорттары [солоҡтоң]* ***кейәһенән*** *бер инеп, бер сығып геүләп осоп тора, ти.* Ж. Кейекбаев.

**кейә II** *и.* Ниҙеңдер ҡәҙерен белмәй шашыуҙың, насарлыҡ эшләүҙең һуңынан килгән язаһы; ҡоһор. ***Кейәһе*** *етеү.* ***Кейәһе*** *төшөү.* ***Кейәһен*** *күреү.*

**кем I** *а.* 1. *һор.* Кешенең исемен йәки ниндәй кеше булыуын һорағанда ҡулланыла. ***Кем*** *килә?* ***Кем*** *кәрәк?* ▬ *Эстән берәү сығып, нәҙек тауыш менән: «****Кем*** *бар?» — тип ҡысҡырҙы.* Т. Йәнәби. — *Балаң булһа,* ***кем*** *тип ҡуштырыр инең?* Б. Ишемғол.

2. *билдһ.* Атап әйтелмәгән бер шәхесте белдерә. ***Кем*** *дә булһа.* ▬ *Баиҙар бара ҡырандаста, ярлылар артта — йәйәү.* ***Кемгә*** *рәхәт,* ***кемгә*** *михнәт, Урал буйында йәйләү.* С. Кулибай. ***Кем*** *арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.* Мәҡәл. ***Кем*** *эшләмәй, шул ашамай.* Мәҡәл. *Ҡымыҙҙы* ***кем*** *яратмай, ҡыҙҙы* ***кем*** *һоратмай.* Мәҡәл. *Әйтмәгәнде* ***кем*** *белә, асмағанды* ***кем*** *күрә.* Мәҡәл.

**кем II** *инш.* 1. Хәл, ваҡиғаның көсөргәнешле булыуына баҫым яһау, тыңлаусының иғтибарын тартыу өсөн ҡулланыла. *Аҡбуҙ асыуланып Уралды шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти,* ***кем,*** *теге атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти.* «Урал батыр». *Ямғыр шул тиклем шәп яуҙы,* ***кем,*** *һыуланмаған еребеҙ ҡалманы.* Ж. Кейекбаев.

2. Йырҙарҙа «һай», «вай» ымлыҡтары менән бергә көсәйтеү вазифаһын үтәй. *Ҡаһым түрә менән һор юрғаҡай, вай* ***кем****, тояҡтары ҡупҡан, баҫа алмай.* Халыҡ йырынан. *Карауан да ғына һарай ай асылғас, һай* ***кем****, яуҙан ҡайтҡас, кантондарға булды ай фарман.* Халыҡ йырынан.

**кендек I** *и.* 1. *анат.* Ҡарындағы баланы, яралғыны инә ҡарынына тоташтырып, уны туҡландырыу хеҙмәтен үтәгән нәҙек кенә эсәк. ***Кендек бәйләү. Кендек ҡырҡыу.*** ▬ *Дәхи атайыңдың да, әсәйеңдең дә* ***кендеген*** *киҫеп, өйҙә лә, илдә лә хөрмәт күреп торған Иәмлегөл инәйеңдән сәләм.* М. Кәрим.

2. Ҡорһаҡ уртаһында соҡорайып торған урын. ***Кендек*** *ауыртыу.*

**кендек II** *и.* Арбаны алтәкмәккә тоташтырған үҙәк. *Ул* [*Әбделкәбир*] *ишек алдында, итегенең эсенә арба* ***кендеге*** *кейҙереп, үксәһенә сыҡҡан ҡаҙауҙарҙы төйөп маташа.* Ф. Иҫәнғолов.

**кенә I** *и.* Күңелдә йөрөтөлгән асыу; үс. [*Тимерғәле ҡарт:*] *Ҡан ҡатышҡанға йыл тулды, үпкәләр,* ***кенәләр*** *бөттө инде.* Һ. Дәүләтшина.

**кенә II** *и.* Телгеләнеп торған япрай япраҡлы, суҡ сәскәле, сәнскәк орлоҡло, һөтлөгәндәр ғаиләһенә ҡараған ағас һымаҡ үҫемлек (орлоғонан костор майы, һабағынан сүс алалар). ***Кенә*** *үҫә.*

**кенә (ҡына) III** *киҫ.* 1. Һәр төрлө мәғәнәһен айырым алып сикләй. *Ипләп* ***кенә*** *һөйләү.*

2. Һүҙҙең мәғәнәһен сикләп, әҙһетеү, кәмһетеү төҫмөрө бирә. *Ун йәшлек* ***кенә*** *бала.*

3. Һөйләм, хәбәр эсендә айырым һүҙгә баҫым яһау өсөн ҡулланыла. *Кис* ***кенә*** *ҡайтыу.*

4. Һүҙҙең мәғәнәһенә баҫым яһай. *Бәләкәс* ***кенә*** *көйө.*

5. Ҡайһы бер рәүеш һәм сифатты айырым бер шартта ҡылымға теркәй. *Тик* ***кенә*** *ултырыу.*

6. Эмоциональ һөйләмдәге алмаш, рәүеш һүҙҙәренең мәғәнәһен көсәйтә. *Эт* ***кенә*** *йөрөй бында.*

7. Эш-хәрәкәттең процесын көсәйтә. *Этеп* ***кенә*** *ҡара.*

8. Зат, килеш ялгауҙары менән килгәндә иркәләү йәки кесерәйтеү, йылылыҡ мәғәнәһен бирә. *Һәтес, һәтес, һәтес кенәһе лә кемдең бәпес кенәһе?* Ғ. Амантай. *Бит кенәһе сейәләй, танау ғынаһы төймәләй.* Р. Ниғмәти.

**кер I** *и.* 1. Тәндәге, кейемдәге бысраҡ. ***Кергә** батҡан күлдәк. Тән **кере**.* ▬ *[Ҡыҙҙың] өҫтөндә ... **керенә** ҡырҡылып бөткән киндер күлдәк.* К. Ибәтуллин.

2. *күсм.* Эстәге, күңелдәге насарлыҡ. *Ай зирәк ҡыҙ, ай зирәк ҡыҙ, үткер теле, изгеләрҙән изгерәктер, юҡтыр **кере**.* Ш. Бабич.

**кер II** *и.* Йыуылған йәки йыуырға ҡуйылған кейем, ҡаралды әйбере. *Йыуылмаған **кер**. **Кер** йыуыу. **Кер** сайҡау. **Кер** үтекләү. Таҙа **кер**.* ▬ *Тау аҫтынан шишмә аға **керҙе** ағарта торған.* Халыҡ йырынан.

**кер III** *ҡ.* 1. Хәрәкәт итеп (атлап һ. б.) берәй нәмәнең эсенә үтеү; эсенә эләгеү, инеү. *Килеп **кереү**. Өйгә **кереү**.* ▬ *Шаршау асылғанда, бүлмә буш. Бер аҙҙан Ләйлә **керә**.* Н. Нәжми. ***Кереүеңдән** алда сығыуыңды уйла.* Мәҡәл.

2. Ниндәйҙер йәшәү, дауаланыу һ. б. маҡсаттар менән ҡайҙалыр урынлашыу. *Фатирға **кереү**.*

3. Берәй маҡсат менән кемгәлер йәки ҡайҙалыр барыу; инеү. *Йомошҡа **кереү**.*

4. Ниҙелер тишеп эскә үтеү, ҡаҙалыу. *Шырау **кереү**.*

5. Эш, хеҙмәт, уҡыу һ. б. ҡабул ителеү. *Колхозға **кереү**.* ▬ *Шул йәйҙе мин Фәтхерислам муллаға ялсы малай булып **керҙем**.* А. Карнай.

6. *күсм.* Кешенең аҡыл-зиһененә, күңел-хәтеренә үтеп, урын алыу. *Һөйгән генә йәрең ҡуштан булһа, **кереп** бара йөрәк-бауырыңа.* Халыҡ йырынан.

7. Өлөш булып берәй нәмәнең эсендә урын алыу. *Иҫәпкә **кереү**.*

**кереш I** *и.* 1. Яндың сирткес бауы. *Ебәк **кереш**. Тарамыш **кереш**.* ▬ *Рогатканың резина **кереше** һуҙыла торғас, нәп-нәҙек булып ҡалды. Яҡуп **кереште** ыҫҡындырҙы.* М. Кәрим. *[Аҡъял] уғын алған да, янға ҡуйып, **керешен** тартҡан. Уҡ атылып, һыҙғырып киткән.* Әкиәттән. *Әҙернә лә йәйә, ай һөйәк баш, йәшел ебәк кәрәк **керешкә**.* Халыҡ йырынан.

2. Ҡайһы бер эш ҡоралдарының тарттырып ҡуйған бауы. *Быҫҡының **керешен** тартыу.*

3. Тел аҫтындағы тартылып торған яры. *Телдең **керешен** киҫеү.*

**кереш II** *и.* Әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәрҙең, докладтарҙың һ. б. башланғыс өлөшө, төп өлөшкә тиклем булған киҫәге. *Спектаклдең әкиәтсә **кереш** менән башланыуы.*

**кереш III** *ҡ.* Берәй эште эшләй башлау, эшләргә тотоноу. *Уҡырға **керешеү**.* ▬ *Малайҙар шунда уҡ эшкә **кереште**.* М. Кәрим. *Балаһы булмау арҡаһында бығаса ғаилә бәхете күрмәгән Ғәрифә бик ихласланып алып донъя көтөргә **кереште**.* Ф. Иҫәнғолов. *Ике ҡулыңа бер эш — тот та **кереш**.* Мәҡәл.

**киҙеү I** *и.* 1. Бер-бер артлы килгән тәртип һәм шул тәртип эсендәге урын; нәүбәт, сират. *Фәһим менән Низай аҫҡы урам малын көтә, өйҙән өйгә йөрөп **киҙеү** буйынса ашай.* Ф. Иҫәнғолов. *Бай ҡыҙын ҡарауыллау йәштәргә **киҙеү** менән килеп тора.* Әкиәттән.

2. Бер-бер артлы алмашлап башҡарылған эш. ***Киҙеү** атҡарыу.* ▬ *Ашығыс ярҙам станцияһында көнө-төнө бер врач, ике фельдшер **киҙеүҙә** тора.* «Совет Башҡортостанының ун йылы». 1929.

3. Хужа кешегә эш ҡоралын файҙаланған өсөн бирелгән өлөш; түләү, гәрнис. ***Киҙеү** биреү.* ▬ *Ике күнәк һөт һыйышлы сипарат алды Гәрәй. ... Күршеләр сипаратҡа йөрөй, аҙна һайын **киҙеү** түләй.* Б. Бикбай.

**киҙеү II** *и.* Кешенән кешегә күсеп йөрөгән йоғошло ауырыу (тымау һ. б.). *Ваба **киҙеүе**. Һары **киҙеүе**.* ▬ *Тапма **киҙеүе** уҙып, күҙен асҡанда,* [*Емештең*] *янында бойоғоп ҡына Бибеш апаһы ултыра ине.* З. Биишева. *Бабай ҡайтыуға өс улының өсөһө лә **киҙеү** менән ауырып үлгән.* Әкиәттән.

**килер I** *и.* Алда буласаҡ тормош; киләсәк. ***Килерҙе** уйлау.* ▬ *Беҙҙең илдә күрә бөтә донъя үҙенең тыныс, яҡты **килерен**.* Ғ. Әмири.

**килер II** *и.* Хеҙмәттән йәки йыйымдан аҡсалата, нәмәләтә төшкән файҙа; килем. *Айлыҡ ... **килере** тамаҡ хаҡына ла етмәне.* Д. Юлтый.

**килеш I** *и.* Тышҡы ҡиәфәт, килбәт. [*Гөлйөҙөм*] *бөтә килеше һәм торошо менән ... әбеиҙе хәтерләтә.* К. Мәргән.

**килеш II** *и.* Һүҙҙәрҙең башҡа һөйләм киҫәктәренә бәйләнеш күрһәткән, үҙенә башҡа ялғауҙар менән билдәләнгән грамматик категория. *Төп* ***килеш.*** *Эйәлек* ***килеш.***

**килеш III** *ҡ.* 1. Төҫ-башҡа, буй-һынға матур булып тура килеү. *Кейем* ***килешеү.*** ▬ *Сиратлашып йөҙөк һайлай ҡыҙҙар ... эй,* ***килешә*** *һуң, тип бынау ҡаш.* Ә. Таһирова. *Селтәрҙәрем минең, сей мәрйен,* ***килешмәгән*** *ерен һүтәйек.* Халыҡ йырынан.

2. Әҙәп, тәртип йәһәтенән урынлы булыу. *Зөләйхаға берәй төрлө күстәнәс алыу мәсьәләһе иҫкә килеп төштө ... Әтү* ***килешмәҫ*** *тип уйлаған булам инде.* Т. Йәнәби. *Ни ҡыланһа — шул* ***килешә*** *өйләнмәгән егеткә.* Халыҡ йырынан.

3. Яҡшы йоғонтоло, файҙалы булыу. *Дарыу* ***килеште.*** ▬ [*Гөлйөҙөм:*] *Кеше ҡоно беҙгә* ***килешмәй. Килешкән*** *һеҙгә* ***килешһен.*** Һ. Дәүләтшина.

**килеш IV** *ҡ.* 1. Һөйләшеп, аңлашып уртаҡ фекергә килеү. ***Килешеп*** *эшләү.* ▬ [*Ҡоҙалар эште*] *ҡыҫҡараҡ тоторға* ***килешкәндәр*** *күрәһең, тәүге сана юлы төшкәс тә, ҡыҙ яғына туйлай киттеләр.* Ғ. Хөсәйенов.

2. Риза булыу, күнеү. *Бураншалар китергә йыйынып бөтә. «Ярай, һеҙҙеңсә булһын», — тип Юламан ҡарт* ***килешеп*** *ҡуя.* З. Биишева.

**килеш V** *бәйл.* 1. Төп, урын-ваҡыт килештәрҙәге исем, сифат, күрһәтеү алмашынан һәм үткән заман сифат ҡылымынан һуң килеп, ниндәй хәлдә, ни рәүешле булғанды белдерә; көйө. *Һыу* ***килеш.*** ▬ *Мин дә ҡуҙғалайым, күҙемдең ҡыры менән генә түште ергә терәп ятҡан* ***килеш*** *ҡарайым.* Д. Юлтый. *Әсәһе уны* [*Яҡупты*] *өйгә шул ҡосағында* ***килеш*** *күтәреп индерҙе.* М. Кәрим. *Береһе мөйөштә, икенсеһе иҙәндә ултырған* ***килеш*** *шым ғына илай башланылар.* К. Мәргән. *Сажидә бер ҡулы менән сәйнүкте тотҡан, икенсеһе менән Сәлимйәндең сынаяғына үрелгән* ***килеш*** *ҡатып ҡалды.* Ғ. Лоҡманов.

**килештер I** *ҡ.* 1. Килбәткә, ҡиәфәткә йәтеш, килешле итеү. [*Исхаҡ*] *ҡалын ҡара сәсен аҫҡа тараған да, йәшел*

*һалдат фуражкаһын бик* ***килештереп*** *баҫып кейгән.* Һ. Дәүләтшина.

2. Әҙәп, тәртипкә ярашлы, урынлы тип табыу; оҡшатыу. [*Зөһрә*] *иптәштәре янына ... буш ҡул менән генә сығыуҙы* ***килештермәне.*** М. Садыҡова.

**килештер II** *ҡ.* Үҙ-ара яраштырыу, татыулаштырыу. *Бөрйәндәр ҙә ... шаҡмандар менән ҡыпсаҡтарҙы үҙ-ара* ***килештерергә*** *яратҡан. Әммә ике арала дау тынмаған.* Б. Бикбай.

**киптергес I** *и.* Дымлы нәмәләрҙе киптереү өсөн эшләнгән ҡоролма. *Иген* ***киптергес.***

**киптергес II** *и.* Ҡара һурҙыра торған ҡағыҙ. *Ике йөҙ дана дәфтәр, һәммәһенең дә эсендә* ***киптергес*** *бар.* М. Тажи.

**кир I** *с.* Һарғылт туры (ат төҫөнә ҡарата). ***Кир*** *бейә.* ***Кир*** *дүнән.*

**кир II** *ҡ.* 1. Нимәнелер тартып, йәйеп, яҡ-яғынан, ситенән ныҡытыу. ▬ *Бал ҡорттары сәскә һайын, ҡунаҡсыллап, килеп ҡунды. Үрмәкселәр ебәк ауын егәрләнеп,* ***киреп*** *ҡуйҙы.* Б. Бикбай.

2. Ныҡ һуҙып тартылдырыу. *Егет ... йәйәһен* ***киреп,*** *керешен тарта башлаған.* Әкиәттән.

3. Киң итеп айырыу, аралы итеү. *Аяҡты* ***киреп*** *баҫыу.* ▬ *Тимер ергә салҡан төшөп, ҡоластарын* ***киреп,*** *һуҙылып ятты.* Б. Бикбай.

4. Ҡайырып яҙылдырыу. *Егет аяғына баҫып, киң күкрәген* ***киреп,*** *һыҙҙырып* [*йырлап*] *ебәр*[*ә*]. Ә. Вахитов.

**кире I** *с.* 1. Тейешле йәки төп тарафҡа ҡаршы. ***Кире*** *йүнәлеш.* ▬ [*Ҡотлояр:*] *Ныязғол да улай иреп китһәс, ... иртән ҡояш* ***кире*** *яҡтан сыҡмаһа ярар ине.* Һ. Дәүләтшина.

2. Көткәнгә ҡапма-ҡаршы булған, ҡапма-ҡаршы эстәлекле. ***Кире*** *яуап.* ***Кире*** *мәғәнә.*

3. Хуп күрелмәгән, ыңғай булмаған; насар, тиҫкәре сифатлы. ***Кире*** *образ. Тәрбиә эшендәге* ***кире*** *күренештәр. Холоҡ, ҡылыҡтағы* ***кире*** *яҡтар.*

4. Кеше яйына килмәгән; тиҫкәре. *Беҙҙең ауыл халҡы әллә ни иткән* ***кире*** *халыҡ: үҙ файҙаһын үҙе аңларға теләмәй.* Ә. Чаныш. *Яҡшы аҙамат йорт көтһә, йорто*

*имен көтөлөр; **кире** аҙамат йорт көтһә, йортон-илен йүнкетер.* Ҡобайырҙан. ***Кире** кешенең аҡылы кермәле лә сыҡмалы.* Мәҡәл.

5. *мат.* Береһенең артыуы менән икенсеһе кәмей торған (йәки кireһенсә). ***Кире** пропорциональ бәйлелек. **Кире** пропорциональ ҙурлыҡтар.*

6. *физ.* Электрондарҙан торған, электр төронә бәйле: *киреһе* ыңғай. ***Кире** заряд.*

**кире II** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге исем йәки алмаштарҙан һуң килеп билдәле бер мәлдән, эштән һуңғы ваҡытты белдерә; һуң, ары. *Бынан **кире**. Төштән **кире**.* ▬ *Әгәр быға тиклем славяндар бөтә яҡтан — дин, яҙма тел, әҙәбиәт, алфавит һәм орфография яҡтарынан — Византияға ҡараған, буйһонған булһалар, бынан **кире** үҙ славян яҙма телен һәм ул тел өсөн яңы славян алфавитын булдырыу сараһына тотоналар.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 7 февраль.

**кис I** *и.* Тәүлектең көн менән төн араһындағы бер мәле, ҡараңғы төшә башлаған ваҡыт. ***Кис** булыу. **Кис** һайын. Көн **кискә** ауышты.* ▬ *Бөгөн Гөлбоҫтан еңгәй ... шәкәр һеҙ ҡоро сәй менән көндө **кис** итте.* Ғ. Дәүләтшин. *Шулай ҙа Вәзир, **кис** ҡайтҡанда, балыҡты, эреһен эрегә, вағын ваҡҡа айырып, һәр ваҡыт ҡап уртаға бүлде.* М. Кәрим. ***Кис** ҡурҡҡан, көндөҙ сыра яндырыр.* Мәҡәл.

**кис II** *ҡ.* 1. Һыуға төшөп, алға хәрәкәт итеү; һыуға төшөп атлау. ***Кисеп** йөрөү. **Кисеп** сығыу.* ▬ *Аттар йылғаның уртаһына тиклем **кисеп** барҙы ла, муйындарын һуҙып эсә-эсә туҡтаны.* Ш. Янбаев. *Ағын һыуҙы ат **кисер**, ауыр көндө ир **кисер**.* Мәҡәл.

2. Ниҙер эсенән йырып хәрәкәт итеү, йырып атлау. *Ҡар **кисеү**.*

3. *күсм.* Үҙ башында татып үткәреү, күреү. *Ғүмер **кисеү**.* ▬ *Яуҙа минең менән бергә булып, ҡайғыларҙы бергә **кистегеҙ**.* Х. Кәрим. *Ҡыуат һымаҡ ирҙәр һирәк, аҡыл менән дау **кисә**.* Халыҡ йырынан. *Ағын һыуҙы ат кисер, ауыр көндө ир **кисер**.* Мәҡәл.

**кисә I** *и.* Берәй ваҡиғаға бағышланған киске йыйылыш. *Байрам **кисәһе**. Шиғыр **кисәһе**.* ▬ *Үтәголов унын-*

*сы класс уҡыусыларына арналған хушлашыу **кисәһенән** төнләтеп ҡайтып йоҡларға ятты.* Ж. Кейекбаев. *Хәтереңдәлер, улым, оҙатҡанда кескәй генә **кисә** яһаныҡ.* Р. Нигмәти. *Ҡалала приказчиктар йыйылып театр уйнаиҙар, **кисә** яһаиҙар.* А. Таһиров. [*Айҙар — Наиләгә*:] *Мин **кисәгә** бер үҙем генә бара алмайым.* Н. Нәжми.

**кисә II** *р.* Үткән көнө, бөгөнгөнән алдағы көндә. ***Кисә** кис.* ▬ *Ҡыҙмаса баштан берәүҙе **кисә** хаҡһыҙ маҡтаным.* М. Кәрим. [*Айҙар*:] *Камил, **кисә** ҡатыраҡ бәрелеп ташланым, бугай, бөтәһе өсөн дә ғәфү ит.* Н. Нәжми. ***Кисә** мине өс айлыҡ трактористар курсына ебәрергә булдылар.* Н. Ҡәрип.

**киҫәк I** *и.* **1.** Бөтөндән бүленгән бер өлөш, бәләкәй бер өлөш. *Балсыҡ **киҫәге**. Икмәк **киҫәге**. Ҡағыҙ **киҫәге**. Таш **киҫәге**.*

2. Сама менән бүлгеләнгән нәмәнең бер өлөшө (төп һандар менән ҡулланыла). *Бер **киҫәк** икмәк.* ▬ [*Тимашев*] *берәр **киҫәк** май, колбаса менән барыбыҙҙы ла һыйланы.* Д. Юлтый.

3. Әҫәрҙең бер бүлеге, бер өлөшө. *Романдың беренсе **киҫәге**. Өс **киҫәктән** торған симфоник әҫәр.*

4. *грам.* Һүҙ йәки һөйләмдең грамматик функцияга эйә булган бер өлөшө. *Баш **киҫәктәр**. Тиң **киҫәктәр**. Эйәрсән **киҫәк**.*

5. Ишарат. *Үҙәк усадьба тиғәненең бөтә хазинаһы иҫке шпалдарҙан өйөлгән бер өй **киҫәгенән** ... тора ине.* Д. Исламов.

**киҫәк II** *р.* Көтмәгәндә, ҡапыл. *Төндә Имәнтауҙан Иомағужа ҡарттың **киҫәк** кенә вафат булыуы тураһында хәбәр иттеләр.* Ә. Вәли. *Мин **киҫәк** шикләнә төштөм: ысынлап та, [күгәрсендәр] икенсе яҡҡа осоп китһә, нишләрһең!* Н. Ҡәрип.

**кит I** *ымл.* 1. Берәй нәмәгә ышанып етмәй, аптырап ҡалганда әйтелә. *«Сапаныңдан ҡолаҡ ҡаҡтың инде», — тине Билалов ... Егеттең ҡото алынды: «**Кит**, әй! Ысынлапмы?»* Д. Исламов.

2. Берәүҙең һүҙен йәки үҙен кире ҡаҡҡанда әйтелә. [*Шәрифә*:] ***Кит**, алйот, ... башымды әйләндереп йөрөмә.* Һ. Дәүләтшина.

**кит II** *ҡ.* 1. Торған урынды ҡалдырыу, кем йәки нимәнеңдер янынан ситкә хәрәкәт итеү, ҡайҙалыр йүнәлеү. *Ары **китеү**.* — *Шәрәфи ҡойма буйында бер аҙ ҡарап торҙо ла, шәп-шәп атлап Ғарифтарға табан **китте**.* И. Насыри. [*Ҡотлояр*:] — *Ни һин, Айбулат, шуларҙың ыҙыр-мыҙырына ҡарайһың. Ҡыҙҙы алып ҡас та **кит**.* Һ. Дәүләтшина. *Юҡ, былар бит бары ла ваҡытлыса: килер өсөн **китә** ҡоштар ҙа. Үтә йәйҙәр, яҙҙар, шиңә гөлдәр, **китер** өсөн килә ҡоштар ҙа. **Китһә** лә йыр минән үс итеп, ул барыбер килер үҙ итеп.* Н. Нәжми.

2. Дауам итеү, һуҙылыу (дауамлы эш-хәл, күренештәр тураһында). *Бәхәс оҙаҡҡа **китте**.* — *Һеҙҙең менән беҙҙең дуҫлыҡ **китһен** ғүмер буйына.* Халыҡ йырынан.

3. Бөтөү, юйылыу, юҡҡа сығыу. *Төҫө **китеү**.* — *Ҡул яраһы **китер**, тел яраһы **китмәҫ**.* Мәҡәл.

4. Тотолоу, сарыф ителеү. *Аҙыҡ күп **китте**.* — *Айбулат әсәһен ерләгәндә хоҙай өсөн **киткән** был сығымды унан түләтерҙәр тип башына ла килтермәгәйне.* Һ. Дәүләтшина.

5. Эш, профессия һайлауҙа, ҡараштарҙа һ. б. кемгә лә булһа эйәреү, уның һөнәрен үҙләштереү. *Балалары аталары эҙенән **китте**. Большевиктар юлынан **китеү**.*

6. *күсм.* Хәл итеү өсөн ҡайҙа, кем-нәмә ҡарамағына ебәрелеү, тапшырылыу. *Эш судҡа **киткән**.*

7. *күсм.* Вафат булыу, үлеү. *Иәшләй **китте**.* — [*Әхмәт*] *бәхетле тормошто тиҙерәк төҙөйөк, тип, янып-көйөп йөрөгәндә генә үпкә ауырыуынан **китеп** барҙы.* З. Биишева. *Ауыр тупрағың еңел булһын инде, атай. Ваҡытһыҙ **киттең** һин, йәшләй **киттең**.* В. Исхаҡов.

**кит III** *ҡ.* Берәй нәмәнең ситен киртмәле итеп уйыу. *Иренде **китеү**. Сынаяҡты **китеү**.* — *Хәмди еңгәм ... табамдың бер яҡ ситен **китеп** алып килеп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *Кеше күрмәгәндә, йә ҡулымды һындырып ташлай, йә ҡолағымды ҡуптарып ала, йә танауымды **китеп***

*төшөрә, йә кәүҙәмә таяҡ тығып китә. Ҡыҙғаныу ҙа, оят та юҡ үҙендә. Ҡарҙан яһалған булһам да, мин кеше бит әле.* М. Кәрим.

**коллектив I** [*рус.* < *лат.*] *и.* Дөйөм бер эш башҡарған, маҡсаттары бер булган кешеләр төркөмө. *Студенттар* ***коллективы.***

**коллектив II** [*рус.* коллективный] *с.* Күмәк кеше тарафынан башҡарылган; күмәк. ***Коллектив** етәкселек.* ***Коллектив** ижад.* ***Коллектив** хужалыҡ.* ***Коллектив** эш.*

**комиссия I** [*рус.* < *лат.*] *и.* Махсус магазиндың шәхси кешегә нимәһендер һатышып биргән ярҙамы; аралашлыҡ. ***Комиссия** аша һатыу.* ***Комиссияға** тапшырыу.*

**комиссия II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Айырым рәсми хоҡуҡ менән билдәле бер вазифа башҡарган кешеләр төркөмө йәки бер нисә кешенән торған орган. *Планлаштырыу* ***комиссияһы.*** *Ревизия* ***комиссияһы.*** *Һайлау* ***комиссияһы.*** ▬ *Закондар сығарыу* ***комиссияһы*** *1767 йылдың 30 июлендә Мәскәүҙә ... асылды.* Ғ. Хөсәйенов.

**корнет I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Революцияға тиклемге кавалерия һәм сик һаҡлау ғәскәрендәге иң бәләкәй офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Гусарҙар полкы* ***корнеты.*** ▬ ***Корнет*** *бер ни ҙә өндәшмәй, иҙән буйланы.* А. Таһиров.

**корнет II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Борғоға оҡшаш еҙ тынлы музыка ҡоралы. ***Корнетта** уйнау.*

**костёр I** *и.* Яндырыу өсөн әҙерләнгән ағас өйөмө, ошо өйөмдөң янып тороу процесы. ***Костёр** яғыу.*

**костёр II** *и.* Бесән өсон сәселә торган ҡайһы бер ҡый үләндәренең дөйөм атамаһы; кустерә. *Был тирәне яҙ көнө бөтөнләй һыу баҫа икән. Шуға күрә улар бында тик йәшелсә һәм* ***костёр*** *сәсергә уйлайҙар.* Р. Солтангәрәев.

**коҙгө I** *и.* 1. Сагылдырып күрһәтеү өсөн махсус эшкәртелгән шыма быяла. *Түңәрәк* ***көҙгө.*** ▬ [*Арыҫланғәли*] *тәҙрә төбөндә ултырған бәләкәс кенә* ***көҙгөгә*** *ҡарап ҡалын ҡара сәстәрен артҡа тараны.* Ғ. Дәүләтшин. ***Көҙгө*** *шулай гәҙел ул — яҡты матур быяла. Һис алдашмай, ысын күрһәтә, алдашырға ояла.* С. Исмәгилев.

2. *күсм.* Кемдең йәки нимәнең дә булһа сағылышы. *Уҡытыусы — ауылдың да, халыҡтың да* ***көҙгөһө*** *ул.* М. Тажи. *Дуҫ — дуҫтың* ***көҙгөһө.*** Мәҡәл.

**көҙгө II** *с.* Көҙ була торған, көҙ ваҡытына хас. ***Көҙгө*** *көн.* ***Көҙгө*** *һыуыҡ.* ***Көҙгө*** ямғыр. ▬ *Сентябрҙең әскелт шаҙра еле,* ***көҙгө*** *көйҙө уйнап һыҙғыра.* Ғ. Амантай. *Бүлмәмдә тын ... Тышта ярһый елдәр,* ***көҙгө*** *елдәр тәҙрә аҫтында.* Н. Нәжми.

**көй I** *и.* 1. Бер бөтөн йөкмәткегә эйә булған аһәңле тауыштар теҙмәһе. *Башҡорт* ***көйө.*** *Бейеү* ***көйө.*** ***Көй*** *сығарыу. Моңло* ***көй.*** *Табын* ***көйө.*** ▬ *Һин йырлаװың тағы өҙҙөрөп, бигерәк оҡшай миңә һеҙҙең* ***көй.*** Н. Нәжми. *Егеттәр яҙған һүҙҙәргә* ***көй*** *уйлап таба ҡыҙҙар.* С. Кулибай. *Алып бирсе, еңгә, ҡурайымды, «Кәкүк» кенә* ***көйөн*** *тартайым.* Халыҡ йырынан. *Ҡурайсынан* ***көй*** *сығар, ҡурҡаҡ ирҙән ни сығар?* Ҡобайырҙан. ***Көйҙөң*** *оҙоно яҡшы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.* Мәҡәл.

**көй II** *ҡ.* 1. Уттан ҡара яныу, янып тыштан ҡарайыу. *Икмәк* ***көйөү.*** *Утҡа* ***көйөү.*** ▬ *Ҡуҙыйкүрпәс көл эсенән ҡара күмер булып* ***көйгән*** *сөсө икмәк табып алды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». [*Рәхимйән*:] *Кемдең һөтө* ***көйә*** *тиһәм, быларҙыҡы* ***көйә*** *икән.* Н. Нәжми. *Ит өсөн шеш* ***көйә,*** *ил өсөн ир көйә.* Мәҡәл.

2. Ҡыҙыулыҡ тәьҫирендә кибеү. *Көнгә* ***көйөү.*** *Үләндәр* ***көйөү.*** ▬ *Өсөнсө ай инде ямғырҙар юҡ, иҫә афәт келе. Ерем* ***көйә.*** *Тик бер генә яуыр ямғыр булһам ине.* М. Кәрим.

3. Рухи яҡтан ғазап сигеү; ҡайғырыу. *Йәшәйемсе ҡалған гүмерҙе лә һөйөп, янып,* ***көйөп,*** *юҡһынып.* Р. Сафин. *Янмаҫ инем,* ***көймәҫ*** *инем, йәремде ят һөймәһә.* Халыҡ йырынан. *Ит өсөн шеш көйә, ил өсөн ир* ***көйә.*** Мәҡәл.

**көйә I** *и. зоол.* Ҡарышлауығы йөн әйберҙәрҙе, ашлыҡты, ҡайһы бер үҫемлектәрҙең япрағын һ. б. ашай торған ваҡ ҡына күбәләк һәм уның ҡарышлауығы. *Иген* ***көйәһе.*** *Кейемгә* ***көйә*** *төшкән.*

**көйә II** *и.* Төтөн тейгән нәмәләгә йоҡа ғына ҡором. *Ҡаҙан* ***көйәһе.***

**көйәлән I** *с.* Тиҙ генә янып, ҡайғырып барыусан. ***Көйәлән*** *кеше.*

**көйәлән II** *ҡ.* Һәр төрлө сәбәптән янып, көйөп, хәсрәткә бирелеү; хафаланыу. — *Ямғыр, ямғыр кәрәк. Юғиһә ашлыҡ харап була, — тип* ***көйәләнә*** *[Баттал].* Ш. Насыров.

**көл I** *и.* Ниҙер янғандан ҡалған күкһел һоро төҫтәге онтаҡ. ***Көл йыйыу. Көл*** *менән ашлау. Ҡайын* ***көлө****. Тәмәке* ***көлө.*** ▬ *Камил ... балыҡтарҙың эсенә тоҙ һипте лә берәм-берәм япраҡҡа төрөп,* ***көлгә*** *күмде.* Ф. Иҫәнғолов. *Күп йылдар буйына йыйылған был* ***көл*** *бара-бара ҙур уба хәленә килә.* Ғ. Дәүләтшин.

**көл II** *ҡ.* 1. Ҡыҙыҡ күргән, шатланған саҡтағы тойғоно күҙ-йөҙ һәм үҙенсәлекле өҙөк-өҙөк тауыш аша сағылдырыу. *Илағансы* ***көлөү****. Кеткелдәп* ***көлөү****. Тыйыла алмай* ***көлөү.*** ▬ *Көлгәндә ... уның [Ғәләүҙең] тотош кәүҙәһе, хатта танау тишектәренә тиклем кинәнеп* ***көлә.*** Б. Бикбай.

2. Кемдеңдер эш-ҡылығынан, төҫ-киәфәтенән ҡыҙыҡ йәки сәбәп табып мыҫҡыл белдереү йәки шаяртыу. *Мин тинем: «Иптәш, улар минән түгел, һинән* ***көлә****. Күркә төҫлө ҡыланышың һәм дә фәсеңдән* ***көлә****».* Ш. Бабич. *Кешенән* ***көлмәк*** *— үҙеңә килмәк.* Әйтем.

3. *күсм.* Нур һибеү, balҡыу (ай, ҡояш, йондоҙҙарға ҡарата). *Ҡышҡы ҡояш* ***көлөп*** *торһа ла, йылыһы юҡ.* Ш. Янбаев.

4. *күсм.* Йәмле, матур булыу. *Убаларҙың ҡояшҡа ҡараған биттәре ... яңы ғына сыҡҡан үләнән йәшәреп,* ***көлөп*** *тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**көмбәҙ I** [*фарс.*] *и.* Ярымшар рәүешендә ҡабарып, түңәрәкләнеп торған түбә. *Тирмә* ***көмбәҙе.*** ▬ *Ағастар араһынан төрлө биҙәкле таштарҙан эшләнгән* ***көмбәҙ****, манаралар күренә башланы.* Н. Нәжми.

**көмбәҙ II** [*фарс.*] *и.* Еҙ йәки ҡалайҙан көмрө итеп биҙәкләп һуҡҡан тәңкә һымаҡ биҙәү әйбере. ***Көмбәҙ*** *баҫыу.* ▬ *Еңгәләре [Фатиманың] ... муйынына һумлыҡтар,* ***көмбәҙҙәр*** *баҫылған, мунсаҡ менән ҡайылған һаҡал таҡты.* Ж. Кейекбаев.

**көн I** *и.* 1. Ҡояш сыҡҡандан байығанға тиклемге ваҡыт, иртәнән алып кискә тиклемге ваҡыт. ***Көн*** *үткәреү. Ҡыҫҡа* ***көн.*** ▬ *Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай,*

*сәғәтте алға бороп, төн* ***көн*** *булмай.* Аҡмулла. *Беҙ таш юл буйынан* ***көн*** *барабыҙ, төн барабыҙ. Ҡайҙа туҡталырбыҙ — билдәле түгел.* Д. Юлтый. *Тышта нindәй матур ҡояшлы* ***көн*** *... Донъя балҡып, нурға күмелгән.* Н. Нәжми.

2. 24 сәғәтте эсенә алған ваҡыт берәмеге; тәүлек. *Өс* ***көн*** *элек.* ▬ *Алты йыл, аһ! Һәр йылың өс йөҙ ҙә алтмыш* ***көн*** *бит ул.* Ш. Бабич. *Дүртенсе* ***көнгә*** *сыҡҡас, өс* ***көн*** *буйы керпек тә ҡаҡмаған Ҡыҙрас йоклап китә.* Әкиәттән.

**көн II** *и.* Ҡояш. ***Көн*** *байыу.* ▬ *Көндөҙ күккә* ***көн*** *ҡалҡһа, көмөштәй балҡый Уралтау.* Салауат Юлаев. ***Көн*** *сығалыр, күтәрелеп баталыр, дөм алыҫҡа ян-януар яталыр.* Аҡмулла. ***Көн*** *дә батты, һалҡын ел дә үтте, сыбарланды түңәрәк күл өҫтө.* Б. Ишемғол. *Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең ҡылысы* ***көнгә*** *ҡаршы ялтырай, марш атлап беҙ үткәндә, бар дошмандар ҡалтырай.* Халыҡ йырынан. *Ай ҡолаҡланһа, аяғыңды нығыт;* ***көн*** *ҡолаҡланһа, ҡолаҡсыныңды нығыт.* Мәҡәл.

**көнлөк I** *и.* Эш көнө иҫәбенән түләнә торған ваҡытлы йәки сезонлы эш. *Эш эҙләп* ***көнлөккә*** *килеүселәр бер минут эсендә был уҫал ҡиәфәтле кешене әйләндереп алдылар.* М. Ғафури.

**көнлөк II** *с.* 1. Бер көнгә билдәләнгән, билдәләп ҡуйылған. ***Көнлөк*** *аҙыҡ.* ***Көнлөк*** *задание.*

2. Бер көн эсендә булған, бер көндә башҡарылған йәки башҡарыла торған. ***Көнлөк*** *эш.*

3. Бер көн эсендә йыйылған, тупланған йәки йыйыла, туплана торған. ***Көнлөк*** *һауым.*

**көнәркәш I** *с.* Эштә, тормошта кешенән уҙҙырырға тырышҡан; көнсөл, сәмле. ***Көнәркәш*** *кеше.*

**көнәркәш II** *и.* Мөхәббәте кем менәндер уртаҡ ҡатынҡыҙ. [*Альберт:*] *Ниңә, Тәнзилә һинең* ***көнәркәшме*** *ни! Ул йондоҙ булһа, һин минең өсөн яҡты ай бит, Хәҙисә.* Ғ. Ибраһимов.

**көрпә I** [*рус.* крупа] *и.* Ашлыҡтың он итеп тартҡанда онталмай ҡалған ҡабығы. ***Көрпәгә*** *күп сығарыу.* ▬ [*Әхмәт Бурылға*] *йомшаҡ үләндәрҙе* ***көрпә*** *менән бутап бирә торғайны.* С. Ағиш.

**көрпә II** *с.* Ҡуңыр (һыйыр төҫөнә ҡарата). ***Көрпә*** *һыйыр.*

**көрәш I** *и.* 1. Билдәле ҡағиҙә менән кем йығарҙан башҡарылған көс һынаш; алыш. *Милли* ***көрәш.*** ▬ ***Көрәш*** *үҙенән-үҙе ҙурайып китте. Йәш батырҙар* ***көрәшкә*** *исемле батырҙарҙы саҡырырға тотондо.* Ш. Шәһәр.

2. Йәмғиәттең ҡапма-ҡаршы көстәре араһындағы алыш. *Политик* ***көрәш.*** ▬ *Беҙҙең* ***көрәш*** *мал өсөн түгел, беҙҙең* ***көрәш*** *— синфи* ***көрәш.*** Д. Юлтый.

3. Ауырлыҡты, ҡаршылыҡты еңеүгә, юҡ итеүгә, бөтөрөүгә йүнәлтелгән эш. *Тәртипһеҙлеккә ҡаршы* ***көрәш.*** ▬ *Тулҡынға ҡаршы* ***көрәш*** *оҙаҡ барған.* З. Биишева.

4. *күсм.* Бәхәс, үҙ-ара әйтеш. *Һүҙ* ***көрәше.*** ▬ *Күберәк кинәйәнән торған был* ***көрәште*** *Гөлйөҙөм тулыһынса аңлай алманы.* Һ. Дәүләтшина.

**көрәш II** *ҡ.* 1. Билдәле ҡағиҙә буйынса билдән алып көс һынашыу; алышыу. *Бәйгелә* ***көрәшеү.*** ▬ *Бик оҙаҡ* ***көрәшкәс,*** *Алпамыша бер килеп уң ҡулы менән Барсынды күтәреп алды, ти.* «Алпамыша».

2. Ҡаршы торған ижтимағи көс менән алышыу. *Дошман менән* ***көрәшеү.*** ▬ *Күп ерҙәрҙә крәҫтиәндәр батша хөкүмәте менән* ***көрәшергә*** *күтәрелә, уларҙың түрәләр ҡулында ҡол булып торғолары килмәй.* Һ. Дәүләтшина.

3. Ауырлыҡ, ҡаршылыҡ менән алышыу; еңеп сығырға көс һалыу. *Короләк менән* ***көрәшеү.*** ▬ [*Айбулат*] *йөрәген өҙөп барған әрнеү менән* ***көрәшеп*** *тыныс булырға һәм Гөлйөҙөмдө лә тынысландырырға тырышты.* Һ. Дәүләтшина.

4. Билдәле бер маҡсатҡа ирешеү өсөн ныҡышмалы эш алып барыу. *Хаҡлыҡ өсөн* ***көрәшеү.*** ▬ *Тыныслыҡты тик ятып түгел, ә* ***көрәшеп*** *алырға кәрәк уны.* Ә. Бикчәнтәев.

**көсөк I** *и.* Эт балаһы. *Ата* ***көсөк.*** ▬ *Ала эт ике* ***көсөгөн*** *эйәртеп сыҡты ла, ике генә өргәс, ... кире боролдо.* С. Ағиш. *Рәми был этте бынан йыл ярым элек, өс айлыҡ* ***көсөк*** *сағында һатып алғайны.* Х. Мохтар. *Йүгер,* ***көсөк,*** *һин һөт эсеп, уйна малайҙар менән.* Ғ. Дәүләтов. — *Эт — кешенең дуҫы, — тиеп, баҙар түрендә Ғата, тирә-яҡты*

*дыу килтереп, мат͡ктап* ***көсөктәр*** *һата.* Р. Шағалиев. *Этенән күреп* ***көсөгө*** *өрөр.* Әйтем.

**көсөк II** *и.* Тал, өйәңке бөрөһө. *Апрель. Йылға һәм күл буйы туғайҙарында өйкөм-өйкөм булып ултырған талдар* ***көсөк*** *сығарҙы ла инде.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 13 февраль.

**көсөклә I** *ҡ.* 1. Балалау (эткә ҡарата). *Эт* ***көсөкләгән.***

2. *күсм.* Ҡыҙарып, сабыртып ярылыу (яҙ көнө ялан аяҡ һыу кискән балалар аяғында була). *Аяҡ* ***көсөкләгән.***

**көсөклә II** *ҡ.* Бөрөләнеү. *Ҡоба тал* ***көсөкләгән.***

**көт I** *ҡ.* 1. Килерен, булырын белеп, урында ҡалыу. ***Көтөп*** *тороу. Машина* ***көтөү.*** *Ямғыр туҡталғанын* ***көтөү.*** ▬ *Әжәл* ***көтөп*** *ятыу хурлыҡтыр, ҡорал тотоп үлеү ҙурлыҡтыр.* М. Кәрим. *Эт алдан китә лә [көтөүсене] туҡтап-туҡтап* ***көтә,*** *ти.* Әкиәттән.

2. Нимәгәлер иҫәп тотоу, өмөтләнеү. *Иртәгеһен бригадалар ял итер тип* ***көткәйне*** *Тимер Янһаров, ләкин тынғыһыҙ Фатима киреһенсә эш итте.* Б. Бикбай. *Алланан* ***көткән*** *ут йотҡан, эшләп тапҡан тун теккән.* Мәҡәл. *Үҙеңдә айран булмаһа, кешелә ҡымыҙ* ***көтмә.*** Әйтем. *Күпте* ***көтөп*** *әҙҙән буш ҡалма.* Әйтем.

3. Киләсәктә тормошҡа ашырға тейеш булыу, алда тороу (киләсәктә буласаҡ эш-хәлдәргә ҡарата). *Көтә белгән кешене бәхетле осрашыу* ***көтә*** *ул.* И. Абдуллин.

**көт II** *ҡ.* Күмәк малды утауҙа әйҙәп, ҡарап йөрөтөү. *Быҙау* ***көтөү.*** *Йылҡы* ***көтөү.*** *Көтөү* ***көтөү.*** *Мал* ***көтөргә*** *ялланыу.* ▬ *Атайым минең көтөүсе, йылҡылар* ***көтә.*** *Яҙ еткәс тә ауылдан ул тауҙарға китә.* Ш. Бикҡолов.

**көшөл I** *и.* Һуғылған ашлыҡ өйөмө. *Арыш* ***көшөлө.*** *Борсаҡ* ***көшөлө.*** ▬ ***Көшөл*** *ятһа ырҙында, әләгеп ҡуйһа ямғырға, мөмкин унан, ашлыҡ сереп, ике ҡулһыҙ ҡалырға.* Ғ. Амантай.

**көшөл II** *и.* Күкшел, йөнлө кимереүсе ер-һыу йәнлеге; һыу сысҡаны. ***Көшөл*** *йылға буйҙарындағы яр тишектәрендә оя яһай, бик тиҙ үрсей.* Ҡ. Фәхретдинов. *Күлдә* ***көшөл*** *типтем тип, әтәлге ҡош маҡтанып, мәңге ҡыйғыр була алмаҫ.* «Юлай менән Салауат».

**кран I** [*рус.* < *гол.*] *и.* Һауыттан шыйыҡлыҡ йәки газ алыу өсөн хеҙмәт иткән бороп бикләнмәле трубка; һемәк. *Газ **краны**. **Кранды** ябыу. Һыу **краны**.*

**кран II** [*рус.* < *нем.*] *и.* Ҙур, ауыр нәмәләрҙе күтәреп күсерә торған механизм; йөк күтәргес машина. *Башнялы **кран**. **Кранда** эшләү.*

**креп I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Бик сираҡ ептән ҡытыршы итеп һуғылған ебәк йәки йөн туҡыма. *Ебәк **креп**.*

**креп II** [*рус.* крепь] *и.* Шахтала ер ишелеп төшмәһен өсөн ҡуйылған терәү рәүешендәге ныҡытма; таяу. *Забойҙың ике урынына **креп** һуҡҡандан һуң да емерелеү ҡурҡынысы бөтмәне.* Я. Хамматов.

**куб I** [*рус.* < *гр.*] *и.* **1.** Һәр яғы квадрат рәүешендәге алты ҡырлы геометрик есем. ***Куб** яһау.*

2. Һандың үҙ-үҙенә ике тапҡыр ҡабатландығы, һандың өсөнсө дәрәжәһе. ***Кубҡа** күтәреү. Өстөң **кубы** — егерме ете.*

**куб II** [*рус.*] *и.* Шыйыҡлыҡты ҡайната йәки эҫетеп ҡыуа торған цилиндрик һауыт. *Балаларға һыу ҡайнатыу өсөн мәктәпкә ҡаҙан **куб** ҡуйҙырып, усаҡ сығарҙылар.* С. Ҡудаш.

**кубик I** [*рус.*] *и.* Өс яғы (буйы, арҡырыһы, бейеклеге) бер сантиметрға тиң булған дәүмәл үлсәү берәмеге. *Ике **кубик** һерҡә эссенцияһы.*

**кубик II** *с.* Кубҡа (1, 2) мөнәсәбәтле. ***Кубик** берәмек. **Кубик** сантиметр. **Кубик** система. **Кубик** тигеҙләмә.*

**күбек I** *и.* 1. Шыйыҡлыҡтан ҡыуыҡланып-ҡыуыҡланып өрөлөп сыҡҡан нәмә; күперек. *Һабын **күбеге**. Һөт **күбеге**.* ▬ *Урғып-урғып һыуҙар аға, һыу өҫтө **күбек** кенә.* Халыҡ йырынан.

2. Ниҙелер ҡайнатҡанда ҡыуыҡланып-ҡыуыҡланып өҫкә ҡалҡҡан нәмә. *Варенье **күбеге**. Май **күбеге**.*

3. Ауыҙ-морондан, тәндән күпереп сыҡҡан шыйыҡлыҡ (тир, шеләгәй). *Ҡара тиргә батҡан күк саптарҙың өҫтөнән **күбектәр** оса.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡотора [Иблис], тулай, зыҡ ҡуба ғифрит кеүек, үкерә, ауыҙынан сәсеп ҡайнар **күбек**.* Ш. Бабич.

**күбек II** *ҡ.* Күбеклеғә әйләнеү, күбекле булыу; күбекләнеү, күпереү. [*Маҡтымһылыу:*] *Атың ауыҙы **күбеккән**, татыр ялар малға оҡшай.* «Ҡара юрға».

**күбә I** *и.* Бер нисә күтәремдән ослап һалынған бесән өйөмө. *Бер **күбә** бесән. **Күбә** тарттырыу.*

**күбә II** *и. иҫк.* Боронғо батырҙарҙың уҡ үтмәҫлек тимер кейеме; ҡояҡ. [*Хәбибә инәй:*] *Кинйә батырҙың тимер кейеме бынан ун биш-егерме йыл элек кенә лә бар ине әле ... — Ул кейем — тимер **күбә** ҡайҙа һуң? — тим мин ҡыҙыҡһынып.* Б. Бикбай.

**күгән I** *и.* 1. Ишек, ҡапҡа кеүек асмалы нәмәнең арт яғын ҡуҙғалырлыҡ итеп беркетеп торған тимер. *Ҡапҡа **күгәне**. Тәҙрә **күгәне**.* ▬ *Ишек өҫкө **күгәненән** һурылып сығып, салшайып аҫылынып тора.* Б. Бикбай.

2. Йоҙаҡ элеп йоҙаҡлай торған атлама тимер; келә. *Амбар ... ишегенең ҡалын **күгәненә** аҫылған йоҙаҡ шылтырай башланы.* Ғ. Хәйри.

**күгән II** *и.* 1. Ваҡ ҡына күкһел ҡара емешле, энәле ағаслыҡ. ***Күгән** ултыртыу.* ▬ *Сәнскеле **күгән** ултыртҡан йөҙөм йыймаҫ.* М. Өмөтбаев.

2. Шул ағастың емеше. ***Күгән** вареньеһы. **Күгән** йыйыу.*

**күҙә I** *ҡ.* 1. Атыу өсөн ҡоралды сәпкә турылау; тоҫҡау, төҙәү. ***Күҙәмәй** атыу.* ▬ *Һунарсы тиҙ генә яны менән уғын алып, эткә **күҙәй**.* Әкиәттән. ***Күҙәмәй** осҡан ҡош ҡуныр урын тапмаған.* Мәҡәл.

2. Еп үткәреү, һабаҡлау. *Ҡатының һәпрә булһа, энәңде үҙең **күҙәрһең**.* Мәҡәл.

**күҙә II** *ҡ.* Ярма өсөн тын бойҙайҙы һыулап киләлә төйөү. *Ярма **күҙәү**.*

**күҙә III** *ҡ.* Болғатыу, ҡуҙғатыу (утты). *Утын ағасы менән ут **күҙәмә**.* Мәҡәл.

**күк I** *и.* 1. Ерҙән көмбәҙләнеп күренгән һауа, ерҙән юғары тараф. *Аяҙ **күк**.* ▬ *Ҡап-ҡараңғы төн, йә **күктә** ай ҙа юҡ, йондоҙ ҙа юҡ.* Ш. Бабич. *Баш өҫтөндә зәп-зәңгәр **күк**, йә бер семтем болот ҡына.* Н. Нәжми. *Ҡошон осорған **күккә** ҡарар, ҡуйын юғалтҡан ергә ҡарар.* Мәҡәл.

2. Дини ҡарашса, шул көмбәҙ өҫтөндәге алла, фәреш-тәләр урыны. ***Күктә** алла, ерҙә иблис, мин — малай. Береһе «дин» тип, береһе «мин» тип тартҡылай.* Ш. Бабич.

**күк II** *с.* 1. Спектрҙағы төп төҫтәрҙең береһе; фиолет менән зәңгәр араһындагы төҫ; шул төҫтә булған. ***Күк** буяу. **Күк** күлдәк.* ▬ *Салауат кейгән **күк** сәкмән Гөлбизәр-кәйенә саҡ икән.* Халыҡ йырынан.

2. Көлһыу төҫтәге, күкһел. ***Күк** болот.* ▬ *Үҙән буйына әкрен генә **күк** томан һарыла.* З. Биишева.

3. Йәшел (үләнгә ҡарата). *Йылға ғына буйы **күк** үлән ашап ҡына тора күк дүнән.* Халыҡ йырынан.

4. Аҡ (атҡа ҡарата). ***Күк** бейә әллә тамағы туҡлыҡ-тан, әллә иртәнге һалҡынса һауаға рәхәтләнеп, бышҡыра-бышҡыра атлай.* Ә. Вәли. *Ҡарамаҡай дуға ай **күк** юрға, ҡайҙан ғына алдың был атты.* Халыҡ йырынан.

**күкбаш I** *и.* Тарбаҡ һабаҡлы, күк тубырсыҡ сәскәле, сәнскеләнеп бөткән ваҡ япраҡлы ҡый үләне. *Баҡса тирәһен **күкбаш** баҫты.*

**күкбаш II** *и.* 'Ҡарабаш тургайҙар ғаиләһенә ҡараған, күк түбәле, һары түшле, йәшел ала ҡанатлы ваҡ турғай; күкәнәш. ***Күкбаш** япраҡлы урмандарҙа йәшәй.*

**күн I** *и.* Махсус юл менән эшкәртелгән (иләнгән) хайуан тиреһе йәки шундай тиренең бер киҫәге. *Болан **күне**. Кәзә **күне**. Ҡара **күн**.* ▬ [*Әхмәҙи*] *латыш байҙарына тире-яры апарып, **күнгә** иләтеп ... йөрөнө.* Ж. Кейекбаев.

**күн II** *ҡ.* 1. Кемдеңдер ихтыярына, өгөтләүенә ыңғай-лау; ризалашыу. *Әйткәнгә **күнеү**.* ▬ *Минең ситкә китеп уҡырға теләүемә әсәйем риза булһа ла, атайым бик үк **күнеп** етмәне.* Т. Йәнәби. [*Сәрүәр*:] *Нишләйем һуң, һорауыңа әллә **күнәйемме** икән?* Х. Ибраһимов.

2. Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә өйрәнеп, күңелдән ризала-шыу. *Төн үткәреү Тимеркәй өсөн ҡайҙа ла бер. Ул уға **күнгән** инде.* Д. Юлтый. *Ахыры, мин дә **күнеп** барам, айы-рылғанда һүҙһеҙ айырылам, ҡайғым булһа, һинһеҙ ҡайғырам.* М. Басыров.

**күңелле I** *с.* 1. Төрлө мәрәкә менән күңелде күтәрерҙәй; уйын-көлкөлө, ҡыҙыҡ. ***Күңелле** байрам. **Күңелле** мәж-*

*лес.* ▬ *Бындай шау-шыулы **күңелле** сход Айҙаҡайҙың ғүмерендә беренсе тапҡыр булғандыр.* Һ. Дәүләтшина.

2. Шат тәбиғәтле; уйынсыл. ***Күңелле** кеше.* ▬ [*Ямал*] *бик **күңелле** саф йөрәкле ҡатын. Яҡшы йырсы.* М. Тажи.

**күңелле II** *с.* Һуғыш ваҡытында үҙ теләге менән армияға яҙылып хеҙмәт иткән; ирекле. *Отрядҡа **күңелле** булып яҙылыу.* ▬ *Алдан ҡыҙыл флаг тотҡан йөҙгә яҡын атлы күренде. Ул баҫмасылар менән көрәшеү өсөн төрөкмәндәрҙән торған **күңелле** отряд ине.* А. Таһиров.

**күп I** *р.* 1. Һаны, күләме ғәҙәттәгенән артыҡ, ҙур һанда, ҙур күләмдә. ***Күп** биреү. **Күп** йөрөү. **Күп** һөйләү.* ▬ ***Күп** тә китмәнем «Салих!» — тип ҡысҡырған тауыш ишеттем.* С. Агиш. *Эшсене **күп** иҙҙеләр ... фирғәүендәр ҡарундар.* Ш. Бабич. *Аҙ һөйлә, **күп** тыңла.* Мәҡәл.

**күп II** *ҡ.* Өрөлөп күтәрелеү; ҡабарыу. ***Күбеп** сығыу.* ▬ [*Ҡарт*] *тултырған тауыҡ һымаҡ **күпкән** портфелде ҡуш ҡуллап күтәреп алды.* Б. Бикбай.

**күпер I** *и.* Йылға, соҡор йәки башҡа бер ҡаршылыҡ аша сығыу өсөн һалынған ҡоролма. *Ағас **күпер**. Йылға **күпере**. Тимер юл **күпере**.* ▬ *Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне, ... диңгеҙ аша бөгөлөп-һығылып торған быяла **күпер** һалынды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**күпер II** *ҡ.* 1. Ваҡ ҡына булып ҡыуыҡланып өрөлөү (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Бер ҡола бейә ... рәхәтләнеп ҡолонон имеҙеп тора. Ҡолондоң ауыҙ ситенә һөт **күпереп** сыҡҡан.* Ш. Шәһәр.

2. Ҡабарып күтәрелеү (йомшаҡ, кәүшәк нәмәләргә ҡарата). ***Күпереп** ятҡан бесән. **Күпереп** торған мендәр.* ▬ *Үҙем матур булмаһам да сәстәрем ... **күпереп**, ебәк кеүек елпелдәп тора.* М. Садыҡова.

**күпкәк I** *с.* Күбеп торған ҙур эсле, күпкән ҡорһаҡлы. *Ҡыҫҡа муйынлы, **күпкәк** ҡара бейәнең йүкә нуҡтаһын Ибрай менән Әсғәт ике яҡтан тотоп алған.* М. Кәрим.

**күпкәк II** *и.* Һыйыр малының эсен күптерә торған ауырыу. [*Баҙлый бабай*] ***күпкәк** булған быҙауҙарҙы ла, ... ҡорсаңғы аттарҙы ла рәткә индерә.* Б. Бикбай.

**күпсек I** *и.* Бәләкәй генә йомшаҡ мендәр. *Түбәндән ултыра торған кешеләр өсөн балаҫ өҫтөнә дүрт-биш* ***күпсек*** *ташланған.* Ш. Шәһәр. *Ҡуҙыйкүрпәс ... башы аҫтына* ***күпсек*** *һалып, татлы йоҡоға сума.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**күпсек II** *с.* Ныҡ әсеп, бызырлап, ҡабарып сыҡҡан. ***Күпсек*** *ҡатыҡ.*

**күрән I** *и.* Дымлы урында үҫә торған суҡ тамырлы бейек ҡаты ҡыяҡ үлән. *Йәш* ***күрән.*** ***Күрән*** *сабыу.* ▬ [*Күлдәрҙең*] *күбеһендә һыу кәмегән, ситтәрен ҡамыш,* ***күрән*** *баҫҡан.* Ә. Вәли.

**күрән II** *и., иҫк.* Ғәскәр ваҡытлыса туҡтап ятҡан урын; лагерь. [*Егеттәр*] *бер-бер артлы ҡуҙғалып, драгундар ҡырылған* ***күрәнгә*** *ҡарай сапты.* Ғ. Ибраһимов.

**күс I** *и.* 1. Бал ҡортоноң бер инә эргәһендәге ғаиләһе. *Йәш* ***күс.*** ▬ *Был тирәлә элек йыл да* ***күс*** *ҡуна торғайны.* Ж. Кейекбаев.

2. Котоү булып китеп барған йәнлек, ҡош-ҡорт төркөмө. *Ҡаҙ* ***күсе.*** ▬ *Ыласын да оса,* ***күсте*** *ҡыя, ҡанаттары талып бер төшә.* «Юлай менән Салауат».

3. Тейәнеп, малын эйәртеп китеп барған халыҡ төркөмө. *Күсәрем һынды тип,* ***күстән*** *ҡалма.* Мәҡәл.

4. Йәйгелеккә күсеп килеп йәшәгән урын: йәйләү. *Ул замандарҙа беҙҙең халыҡ* ***күскә*** *... Урал буйҙарына китә торғайны.* С. Кулибай.

**күс II** *ҡ.* 1. Бер урындан икенсе урынға китеү; урын алыштырыу. *Икенсе партаға* ***күсеү.*** ▬ *Таң яҡтылығы ситендә бер йондоҙ ялтырай. Ул* ***күскән,*** *миңә табан килгән кеүек була.* Д. Юлтый.

2. Урындан китеү, төйәк алыштырыу. ***Күсеп*** *ҡайтыу.* ▬ *Бөтә ауыл халҡы мал-тыуары менән йәйләүгә* ***күсеп*** *бөткәйне.* С. Кулибай. ***Күсеп*** *киткән иҫке йортонан ҡотолған.* Мәҡәл.

3. Ниндәйҙер ҡараш, фекерҙе ҡабул итеү, уны яҡлаусылар яғына сығыу. *Мосолман диненә* ***күсеү.***

4. Ниндәйҙер эш-хәрәкәтте тамамлап йәки ташлап, икенсене башлау, икенсегә төшөү. *Һөжүмгә* ***күсеү.*** *Һүҙҙән эшкә* ***күсеү.*** ▬ *Мин шулай моңлана торғас, татлы*

*уйҙарға* ***күсәм****. Төрлө хыялдарға батып, гәрше әгләгә осам.* Ш. Бабич.

5. Эш итеү рәүешен үҙгәртеү, икенсе ысулға ҡороу. *Ултыраҡ тормошҡа* ***күсеү****. Хозрасчётҡа* ***күсеү****.*

**күсер I** [*рус.* кучер < *нем.*] *и.* Кеше ултыртып, ат тотоп барыусы; ат тотоусы. ***Күсер*** *ултыртыу.*

**күсер II** *с.* Күҙен йылы яҡка осоп китә торған; күсмә. ***Күсер*** *ҡоштар.*

**күсер III** *ҡ.* 1. Бер урындан икенсе урынға шылдырыу; урынын үҙгәртеү. *Өҫтәлде* ***күсереү****.* ▬ *Айыуғолаҡ бара торғас, бер ерҙәге имәндәрҙе йолҡоп икенсе ергә* ***күсереп*** *йөрөгән кешене күргән, ти.* Әкиәттән.

2. Бөтә донъяһы, мал-мөлкәте менән бер ерҙән алып икенсе ергә урынлаштырыу. *Яңы йортҡа* ***күсереү****.* ▬ *Утарҙың эҙе-юлы юҡ. Уны колхоз* ***күсереп*** *һалған.* Ә. Вахитов.

3. Булыу шартын үҙгәртеү, икенсе ысулға ҡороу. *Халыҡты ултыраҡ тормошҡа* ***күсереү****.*

4. Билдәләнгән ваҡытын үҙгәртеү. *Йыйылышты* ***күсереү****.*

5. Берәүҙең ҡарамағынан икенсе кеше ҡарамағына тапшырыу. *Был ерҙәр Ныязғолдоң ... үҙенә* ***күсереп*** *бөткән ерҙәре.* Һ. Дәүләтшина.

6. *күсм.* Бүтән өлкәгә, икенсе яҡҡа йүнәлтеү (һүҙҙе һ. б.); бороу. *Фәхри башта тоҡанмаған шырпыны һүгеп алды ... Шунан һүҙҙе колхоз хәленә* ***күсерҙе****.* Б. Бикбай.

7. Бер ҡағыҙҙан ҡарап икенсеһенә яҙыу. *Китап* ***күсереү*** *эше менән күбеһенсә матур каллиграфиялы шәкерттәр, хәлфәләр шөғөлләнгән.* Ә. Харисов.

8. Бер телдән икенсе телгә әйләндереү. *Шәмсе ҡояш тигән һүҙ ул, беҙҙең телгә* ***күсерһәң****.* М. Марат.

**кәңәш I** *и.* 1. Нисек итергә өйрәтеп әйткән һүҙ. ***Кәңәш*** *биреү.* ***Кәңәш*** *итеү.* ***Кәңәш*** *һорау.* ▬ [*Ыҫмаҡай — Алдарға:*] *Һин, уҙаман сабыр аҡыллы кеше.* ***Кәңәшеңде*** *бирһәң икән: нишләргә беҙгә? Был яфаларҙан нисек ҡотолорға?* Ғ. Хөсәйенов.

2. Нисек итергә үҙ-ара фекер алышыу рәүешендәге әңгәмә. ***Кәңәш*** *итешеү.* ***Кәңәш*** *ҡороу.* ***Кәңәшкә*** *йыйылыу.*

— *Суд **кәңәшкә** киткәндә, көн кискә ауышып бара ине.* Ғ. Әмири. *Ике **кәңәш** бер булһа, илле егет йөҙ була.* Мәҡәл.

**кәңәш II** *ҡ.* Кәңәш итешеү; кәңәшләшеү. ***Кәңәшеп** эшләү.* — [*Юлтыев — Кусимовҡа*:] *Бөгөн идара ағзаларын йыйып һөйләш, **кәңәш**.* Ғ. Әмири. ***Кәңәшкән** үкенмәҫ.* Әйтем.

**кәтмән I** *и.* Арҡыры башлы көрәк рәүешендәге ҡорал; тәпке. ***Кәтмән** менән картуф күмеү.*

**кәтмән II** *и.* Аяҡтың бәкәлдән түбәнге өлөшө; аяҡ башы. ***Кәтмәнде** ауырттырыу.*

**кәтмән III** *и.* 1. *иҫк.* Бер биҙрә һыйышлы ағас һауыт; күнәк. *Бер **кәтмән** бал.*

2. Хужалыҡтағы төшөмдән, яңы игендән күршекүләнгә сығарылған өлөш. ***Кәтмән** биреү.* — [*Ҡатындар*:] *Ярҙай булып үҫкән, ҡуйсы ла, Кинйәбикә, һинән **кәтмән**.* [*Кинйәбикә*:] ***Кәтмәне** лә булыр, бутҡаһын да ашарһығыҙ, йәл түгел.* Ж. Кейекбаев.

**кәүеш I** [*фарс.*] *и.* Йоҡа табанлы итеп күндән теғелгән ҡуныссыҙ аяҡ кейеме (ситек тышынан кейелә). *Семәрле ҡыҙыл **кәүеш**.*

**кәүеш II** *с.* Бер яҡҡа ҡыйшайған; ҡыйыш, салыш. ***Кәүеш** ауыҙ.* — [*Ҡасҡындар*] *тыранса баш, **кәүеш**, шалҡы йортло бер ауылға барып еткәндәр.* Б. Вәлит.

# Ҡ

**ҡабаҡ I** *и.* Емерелеп, һөҙәкләнеп, үлән, ағас үҫеп бөткән иҫке яр; ҡашлаҡ. ***Ҡабаҡҡа** менеү. **Ҡабаҡты** сығыу. Яр **ҡабағы**.* — *Теге кеше … һулаҡайға боролдо ла **ҡабаҡ** ҡырлап китте.* Ж. Кейекбаев.

**ҡабаҡ II** *и.* 1. Оҙон елеле, эре һары сәскәле, эре йомро йәшелсәле баҡса үҫемлеге. ***Ҡабаҡ** ултыртыу.*

2. Шул үҫемлектең йәшелсәһе. *Бында* [*баҡсала*] *үҫте **ҡабаҡтар**, ҙур булып дәү табаҡтан …* Ғ. Ғүмәр. ***Ҡабаҡтар** мискә урынына тәгәрәп яталар, носилка менән ташырға тура килер инде.* М. Кәрим.

**ҡабаҡ III** [*рус.*] *и. иҫк.* Революцияға тиклемге Россияла иң түбән дәрәжәләге эскелек ханаһы. ***Кабаҡта** ултырыу.* ▬ *Дөрөҫ, **ҡабаҡ** менән фәхишәләр өйөнә мин дә ҡаршы, — тине корнет.* А. Таһиров.

**ҡабалан I** *с.* 1. Йәһәт башҡарылырға тейешле, тиҙ-тиҙ башҡарылышлы; ашығыс. ***Ҡабалан** яуап.* ▬ *Әсәй ҙә шулай ашыҡты, самауырын йыйҙы **ҡабалан**.* С. Агиш. ***Ҡабалан** эшкә аҡыл эйәрмәй.* Мәҡәл.

2. Ашығып, ҡабаланып эш итеүсән. ***Ҡабалан** кеше.*

**ҡабалан II** *ҡ.* Тиҙ-тиҙ йәһәтләп ҡуҙғалыу; ашығыу. ***Ҡабаланып** атлау. **Ҡабаланып** эшләү.* ▬ *Малай бер ҙә **ҡабаланмай**, атты үҙ яйына ғына ҡуйып бара.* М. Тажи. *Хушлашайым тип, мин **ҡабаланып** килдем әле һиңә бик иртә.* Х. Ҡунаҡбай.

**ҡабат I** *и.* Эргә, ян. *Атым юртаҡ тип әйтерһең, **ҡабатымдан** юртып уҙ.* Халыҡ йырынан.

**ҡабат II** *р.* Яңынан, тағы; икенсе ҡат, икенсе тапҡыр, икенсе мәртәбә. [*Тимер*] *конвертты йәбештергәс, **ҡабат** асты.* Б. Бикбай. *Шул китеүҙән тыуып үҫкән яҡҡа **ҡабат** ҡайтырға тура килмәне.* М. Тажи. *Ҡыҙыл ғәскәр аҡтарҙы ҡыуып киткән. Яҡты тормош **ҡабат** ҡайтҡан.* Ә. Вахитов.

**ҡабыҡ I** *и.* 1. Төрлө нәмәнең тыштан ҡаплап торған көбө. *Ағас **ҡабығы**. Йомортҡа **ҡабығы**. Картуф **ҡабығы**. Һуған **ҡабығы**.* ▬ *Аҡ уҫаҡҡайҙарҙың, ай, **ҡабығы** аҡ ҡуянҡайҙарҙың аҙығы.* Халыҡ йырынан.

2. Йыуан йүкә йәки ҡарама ағасынан ҡуптарып, таҡта һымаҡ тигеҙләп баҫырылған ҡайыр. ***Ҡабыҡ** төшөрөү. Һалабаш **ҡабығы**.* ▬ [*Сәмиғулла*:] *Бер ыңғай өйөнөң башын да йүнәтеп япһаҡ был ҡарттың, шәп булыр ине, әҙерәк **ҡабыҡ** булғанда.* Ж. Кейекбаев.

**ҡабыҡ II** *ҡ.* 1. Оҙаҡ баҫырылып ятҡанлыҡтан бәҫәреү. ***Ҡабыҡҡан** бесән.* ▬ [*Кинйәбай*:] — ***Ҡабыҡҡан** тауарҙы арзан хаҡҡа алып, бында килтереп биш хаҡына һата* [*Шәғәли*]. С. Мифтахов.

2. Ҡабыҡланып ҡатыу. *Эшләп өҫ-баштарым тиргә **ҡабыҡты**.* Т. Хәйбуллин.

**ҡағыл I** *с.* Ҡар йоҡа ятҡан, ҡалҡыуыраҡ (урынға, ергә ҡарата). *Малды **ҡағыл** ергә сығарырға кәрәк, бесәнгә еңеллек килер.* Һөйләү теленән.

**ҡағыл II** *ҡ.* 1. Килеп һуғылыу, бәрелеү. [*Гөлйөҙөм*] *боролоп ишеккә барып **ҡағылды**, ул тыштан бикле ине.* Һ. Дәүләтшина. *Ашыға ла тулҡын, ашыға, ярға бер **ҡағылып** тымырға.* М. Уразаев.

2. Кемгә йәки нәмәгә еңелсә генә бәрелеү, тейеү, ороноу. *Шул уйҙарҙа килә ине Сәйҙел, ... кемдер уға **ҡағылып** китте татлы хыялдарын бүлдереп.* Ғ. Сәләм.

3. Кемгә йәки нәмәгә ҡул менән тотоноу; тейеү, ороноу. *Был дәфтәр һеҙгә иҫтәлек булыр! Хәҙергә уҡымағыҙ. Беҙҙән киткәс, юлда ғына уҡырһығыҙ, — тине. Әлбиттә, мин дәфтәргә **ҡағылманым**.* Д. Юлтый. *Ғәли ашҡа ла, сәйгә лә **ҡағылманы**.* З. Ғәлимов.

**ҡаҙ I** *и.* 1. Өйрәктәр гаиләһенә ҡараған оҙон муйынлы эре һыу ҡошо. *Ата **ҡаҙ**. Кейек **ҡаҙ**. Ҡыр **ҡаҙы**. Өй **ҡаҙы**.* ▬ *Әбейҙәре тауыҡ, өйрәк, **ҡаҙҙарға** ем бирә.* Ғ. Дәүләтшин. *Һәр бер өйҙөң һике аҫтында бер ыҫылдап, бер ҡаңғылдап **ҡаҙ** ултыра.* К. Мәргән. *Ят ерҙәрҙә йөрөйбеҙ осоп киткән **ҡаҙ** кеүек.* Бәйеттән.

2. Шул ҡоштоң ашамлыҡ итеп ҡулланылған ите. *Бешкән **ҡаҙ**. Ҡаҡланған **ҡаҙ**.* ▬ *Һимеҙ **ҡаҙҙың** тәмле еҫтәре Васяның ауыҙ һыуын ҡойҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡаҙ II** *ҡ.* 1. Ерҙең өҫтөн аҡтарып өңөү; соҡоу. *Тәрән **ҡаҙыу**.* ▬ *Ажар дошман үҙ башына үҙе етер, әгәр һиңә хаслап тороп бер баҙ **ҡаҙһа**.* Аҡмулла. *Ер күкрәген **ҡаҙып**, тамыр ярып, машиналар төшә тәрәнгә.* Б. Ишемғолов. *Иомран кеүек ер **ҡаҙабыҙ**, көрәк беҙгә бик кәрәк.* Бәйеттән. *Кешегә соҡор **ҡаҙма**, үҙең төшөрһөң.* Мәҡәл.

2. Ерҙән соҡоп алыу, соҡоп сығарыу. *Селәүсен **ҡаҙыу**. Сөгөлдор **ҡаҙыу**.* ▬ *Алёша ... күнәккә дыңғырлатып яңы ғына **ҡаҙған** картуфты һала.* З. Биишева.

3. Тупрағын көрәк менән соҡоп йомшартыу. *Түтәл **ҡаҙыу**.* ▬ *Ҡайтһалар, Сәлмән бөтә ерҙе **ҡаҙып**, ҡул тырмаһы менән тырматып, картуф ултыртырға әҙерләп ҡуйған.* Экиәттән.

**ҡаҙаҡ I** *и.* Ҡаҙағстан Республикаһының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). ***Ҡаҙаҡта** борондан бер мәҡәл бар, әйткәндәр: ауырыу — аштан, дау — ҡәрендәштән.* Аҡмулла. *Степной станцияһына яҡын бер разъезда дүрт йөҙҙән артыҡ **ҡаҙаҡ** эшләй* (*империализм һуғышы осоронда тыловой армияға алынған **ҡаҙаҡтар***). А. Таһиров. *Инде минең дуҫтарым да һанап бөткөһөҙ: рус, украин, грузин, **ҡаҙаҡ** — бер туғандар беҙ.* Б. Бикбай.

**ҡаҙаҡ II** *и.* Боронғо ауырлыҡ үлсәү берәмеге (96 мыҫҡалға, хәҙерғесә 409,5 ғрамға тиң). *Ун —ун биш минут ваҡыт үтмәгәндер, бер ҡатын ҙур аҡ икмәк, ике **ҡаҙаҡ** самаһы ит, колбаса, бер сүлмәк һөт килтерҙе.* А. Таһиров. *Бәҙерниса әбей ... өс-дүрт **ҡаҙаҡ** май бешеп, ҡар баҙына төшөрҙө.* Р. Низамов.

**ҡаҙаҡ III** *и.* Бик эре тимер сөй. *Ҡарт бер уйынсыҡ тәгәрмәсте быраулап тиште лә, бағаналағы **ҡаҙаҡҡа** элеп ҡуйҙы.* М. Тажи. *Ир дәрт итһә, була тау күсереп, була ташҡа **ҡаҙаҡ** ҡағып та.* Т. Арслан. *Тырышҡан табыр, ташҡа **ҡаҙаҡ** ҡағыр.* Мәҡәл.

**ҡаҙан I** *и.* 1. Аҫтына ут яғып, аш-һыу әҙерләй торған йәйенке ауыҙлы, йомро төплө сөм һауыт. *Бәләкәй **ҡаҙан.** **Ҡаҙан** тултырыу.* ▬ ***Ҡаҙан** тултырып һалынған ит бешкәнсе, Татлыбикә ҡунаҡтарына сәй эсерә торҙо.* Я. Хамматов. ***Ҡаҙанда** ни булһа, сүместә шул сыға.* Мәҡәл.

2. Төрлө маҡсатта һыуҙан пар алыу өсөн хеҙмәт иткән ябыҡ һауыт. *Паровоз **ҡаҙаны**.*

**ҡаҙан II** *ҡ.* Тырышлыҡ, хеҙмәт менән нәмәләр яулап алыу. *Абруй **ҡаҙаныу**. Дан **ҡаҙаныу**. Ышаныс **ҡаҙаныу**.* ▬ *Фронттарҙа Совет Армияһы көн һайын яңы еңеүҙәр **ҡаҙанып** алға бара.* Ә. Вәли. [*Көбәк*:] *Ғүмерем буйы дан артынан ҡыуҙым, малдар йыйҙым, тарханлыҡ **ҡаҙандым**.* Б. Бикбай. *Ауыр йылда усаҡ яғып, аҫҡан ҡаҙан, аш-һыуыңды уртаҡлашып хөрмәт **ҡаҙан**.* Н. Иҙелбай.

**ҡаҙна I** [*ғәр.*] *и.* 1. Дәүләттең аҡса, ер, аҙыҡ продукттары йәки башҡа байлыҡтары йыйылмаһы; дәүләт милке. ***Ҡаҙна** ашаған ҡазалы булыр.* Мәҡәл.

2. Шул милеккә эйә булған дәүләт һәм ошо милекте тотонған дәүләт ойошмаһы. *Был аҡса йәмғиәт **ҡаҙнаһына** тапшырылырға тейешле.* М. Өмөтбаев. *Ныязғолға бының өсөн **ҡаҙна** күп аҡса түләйҙер әле.* Һ. Дәүләтшина. [*Моталлап:*] *Биксәнтәй ҡустым, әйт әле, быйыл да игендәрегеҙҙе уҙған йылғы кеүек бүлеп алаһығыҙмы? Әллә **ҡаҙна** аламы?* Н. Ҡәрип.

3. Байлыҡ, хазина, аҡса. *Михнәт сигеп тапҡан бер тәңкә бушҡа килгән **ҡаҙнанан** яҡшыраҡ.* Мәҡәл.

**ҡаҙна II** *и.* 1. Ниҙеңдер ултырған ниғеҙе, нигеҙ өлөшө. *Мейес **ҡаҙнаһы**.* ▬ *Ҡарабай урындыҡ **ҡаҙнаһында** ултырған ҡыҙҙы еп менән сырмап бәйләй.* Әкиәттән.

2. Теш ултырған ниғеҙ һөйәк. *Тешем ҡойолоп бөттө, ә **ҡаҙналар** нык. Шул **ҡаҙналар** менән сәйнәп ашайым инде.* Д. Бураҡаев.

**ҡажҡылда I** *ҡ.* Ҡаж-ҡаж итеп, нык йүткереү. *Андрей ҡарт **ҡажҡылдап** йүткерергә кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡажҡылда II** *ҡ.* Ҡаж-ҡаж ҡысҡырыу. *Өйрәк **ҡажҡылдай**.*

**ҡайтыш I** *с.* Сифат йәһәтенән сағыштырмаса түбән; насарыраҡ. *Былдағы квартира Ишембайҙағынан, әлбиттә, күп **ҡайтыш** ине.* Х. Ғиләжев.

**ҡайтыш II** *ҡ.* Йыйылған ерҙән ҡайтырға таралыу. *Ҡунаҡтар **ҡайтышты**.* ▬ *Кешеләр **ҡайтышып** бөттө.* М. Кәрим.

**ҡайыр I** *и.* Ағастың һыҙырып алынған ҡаты ҡабығы. *Садрый һәргәүе менән **ҡайырҙы** ярып, һалабашын ҡуптарып ала.* Н. Мусин.

**ҡайыр II** *ҡ.* 1. Көс менән кире яҡҡа, ситкә ҡарай тартыу; шаҡарыу. *Артҡа **ҡайырыу**. **Ҡайырып** бәйләү.* ▬ *Ҡуҙыйкүрпәс уның* [*ирҙең*] *ҡулынан ҡылысын **ҡайырып** ала.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». [*Бай — батшаға:*] *Бынау һанаттарың ҡулдарымды **ҡайырып** имгәтте.* Әкиәттән.

2. Әйберҙең бер башын йәки яғын кире яҡҡа йүнәлтеү; бороу. [*Ҡатын*] *шәлен* ***ҡайырып****, йөҙөн ҡапланы.* Я. Хамматов.

3. Күп итеп умырып, айырып алыу. [*Ғази*] *сүлмәктән ҡаймаҡ* ***ҡайырып*** *алып, икмәккә яҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

4. Хәрәкәттең йүнәлешен үҙгәртеү, юлдан ситкә бороу. *Ул килгән юлдан үҙе генә белгән һуҡмаҡ менән һулғараҡ* ***ҡайырҙы****.* Ә. Вахитов. [*Айбулат*:] *Асатай, көтөүҙең башын* ***ҡайыр****.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡайыш I** *и.* 1. Иләнгән сей күн. *Зилский ... ҡамытсбруйҙарҙы яңы* ***ҡайыштан*** *һатып, дегетләп ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин. *Йүкәне майлаһаң да* ***ҡайыш*** *булмаҫ.* Мәҡәл.

2. Шул сей күндән яһалған оҙонса таҫма, бау. *Шуны ғына көтөп торған бай Оморҙаҡты тирегә төрөп, оҙон-оҙон итеп теленгән* ***ҡайыш*** *менән сырмап бәйләгән дә ташлаған, ти.* Әкиәттән.

3. Күндән һ. б. нәмәнән яһалған билбау. *Һалдат* ***ҡайышы****.* ▬ *Насрулла күн тужуркаһын кейеп, билен* ***ҡайыш*** *менән быуып тора ине.* Ә. Вахитов. *Ҡаптырмалы* ***ҡайыш*** *менән ҡыҫып быуҙым билемде.* Халыҡ йырынан.

4. *тех.* Әйләнеү хәрәкәтен бер шкивтан икенсе шкивка тапшырыу өсөн күндән йәки тығыҙ, ныҡ материалдан оҙон итеп эшләнгән, остары бер-береһенә тегелгән киң таҫма. *Молотилка* ***ҡайышы****.* ▬ *Тирмән геүләй. Иҫәпһеҙ күп эреле-ваҡлы* ***ҡайыш*** *биш этаж тулы тәгәрмәстәрҙе зырлатып әйләндерә.* И. Насыри.

**ҡайыш II** *ҡ.* 1. Баҫымға һығылыу. *Иҙән* ***ҡайышҡан****. Түбә таҡтаһы* ***ҡайышҡан****.* ▬ *Урҙа* ***ҡайышҡан*** *икән, һынып төшмәһен, бағана ултыртып, таятып ҡуйырға кәрәк.* Т. Морат.

2. *күсм.* Ҡайғырыу, әрнеү. [*Айһылыу*:] *Ана бит, һин үҙ туғандарың өсөн ҡалай* ***ҡайышаһың****!* З. Биишева.

**ҡаҡ I** *с.* 1. Бер нәмә лә үҫмәгән; таҡыр. ***Ҡаҡ*** *тау.*

2. Сәсе булмаған, ялтыр. *Хәсби апай ... ҡулындағы ике сатлы көлтә һәнәге менән Тәүкәй мулланың* ***ҡаҡ*** *башына берҙе ҡундырҙы.* Т. Йәнәби. ***Ҡаҡ*** *маңлайыма һуға-һуға ҡайтып киттем.* Ғ. Лоҡманов.

3. Бер ни түшәлмәгән, бер ни менән дә ҡапланмаған. ***Ҡаҡ** иҙән. **Ҡаҡ** таҡта.* ▬ *Ҡапҡан һалдым **ҡаҡ** боҙға, ҡама менән ҡондоҙға.* Халыҡ йырынан.

4. Ҡороған, артыҡ нык кипкән (ағасҡа ҡарата). ***Ҡаҡ** ағас.* ▬ *... Мин ишеттем, **ҡаҡ** бамбуктан яуҙа уҡ юнылған, һөңгө ослаған.* М. Кәрим.

5. Күләгәгә элеп киптерелгән. ***Ҡаҡ** балыҡ. **Ҡаҡ** ит.*

6. *күсм.* Бер нигә лә ярамаған; кәрәкһеҙ, мәғәнәһеҙ, буш. *Уңған бисә — аҡ бәхет, уңмаған бисә — **ҡаҡ** бәхет.* Мәҡәл.

**ҡаҡ II** *и.* Иҙеи таҡтаға йәйеп киптерелгән емеш-еләк. *Балан **ҡағы**. Еләк **ҡағы**. **Ҡаҡ** ҡойоу.* ▬ [*Ғәйшә әбей:*] *Ғәҙелшам һалҡын алдырып, ауырыҡһынып тора әле. Ҡарағат **ҡағынан** сәй яһап эсерәйем тиһәм, **ҡағым** бөтөп киткән икән.* З. Биишева. *Төндә генә барып йөрөһәм, ашатырҙар микән баллы **ҡаҡ***? Халыҡ йырынан.

**ҡаҡ III** *ҡ.* 1. Осло бер нәмәне һуғып, бәреп индереү. *Атай-бабай шунда ғүмер иткән, ҡаҙыҡ **ҡаҡҡан**, нигеҙ һылаған.* Б. Бикбай. *Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ **ҡағыр**.* Мәҡәл.

2. Кире һуғыу, килтереп һуғыу. *Малай тупты **ҡағып** ебәрә.* Әкиәттән.

3. Һуҡҡылау, бәргеләү, шаҡылдатыу. *Ҡапҡа **ҡағыу**.* ▬ *Ишек **ҡағам**. Бер ни тиклем көттөрөп, ишек асыла.* Ғ. Хәйри. *Бабай ошо өйгә килгән дә, тәҙрә **ҡаҡҡан**.* Әкиәттән.

4. Һелккеләп, һуҡҡылап, саң, бысраҡтан таҙартыу. *Балаҫ **ҡағыу**.* ▬ *Ғәрифә үҙе ... он саңы туҙҙырып тоҡ **ҡаға**.* Ф. Иҫәнғолов. *Тун күрмәгән тун күрһә, **ҡаға-ҡаға** туҙҙырыр.* Мәҡәл.

5. Атты ҡуҙғалырға йәки йөрөшөн тиҙләтергә әйҙәп дилбегәне, өҙәңгене еңелсә генә һелкетеп, һуғып ҡуйыу. *Дилбегәне **ҡағыу** менән ат ҡуҙғалды.*

6. Елпеү хәрәкәте яһау (ҡоштар ҡанаты тураһында). *Иҙел яры шыңшый ... Урманында төн бөркөтө ҡанат **ҡағалыр**.* Ғ. Сәләм.

7. *күсм.* Үҙ итмәй рәнйетеү; ҡыйырһытыу. *Минән дә генә ҡалған ир баланы аталары юҡ тип* ***ҡаҡмағыҙ.*** Халыҡ йырынан. *Ир ҡаҡҡанды мир* ***ҡағыр.*** Мәҡәл.

8. Өрөп һелкендереү; елпетеү. *Ҡапҡаһынан эт баҡмай, төнлөгөнән ел* ***ҡаҡмай.*** Мәҡәл.

9. Килгән ерҙән кирегә бороу; кире ҡайтарыу. *Яңғыҙ батыр яу* ***ҡаҡмаҫ.*** Мәҡәл.

**ҡаҡ IV** *оҡш.* Ҡаҙ тауышын белдергән һүҙ. *Ҡаҙ* ***ҡаҡ*** *итте лә осоп китте.*

**ҡаҡлан I** *и.* Ел ҡағып торған ҡалҡыулыҡ. *Әле булһа ул бар ҡая бите* ***ҡаҡланда,*** *шыр урмандар эсендә.* «Юлай менән Салауат».

**ҡаҡлан II** *ҡ.* 1. Ҡояшта, елдә кибеү (иткә, балыҡҡа һ. б. ҡарата). *Тоҙлаған ҡаҙҙар* ***ҡаҡланып*** *кибә булыр ҡыйыҡтарҙа.* Т. Арслан.

2. *күсм.* Йонсоу, кибеү. [*Гөлгәйшә:*] *Өфөлә асфальтта* ***ҡаҡланып*** *йәй үткәргәнсә, бында саф һауа еҫкәһен, тигән булам.* Ш. Янбаев.

**ҡала I** [*гәр.*] *и.* Сәнәғәт һәм сәнғәт үҙәге булған күп халыҡлы урын. ***Өфө ҡалаһы*** *Ҡариҙел йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған урынында, Өфө тауы башында ултыра.* Ж. Кейекбаев. *Тау башында балҡый бер* ***ҡала,*** *ул* ***ҡала*** *Өфө тип атала.* Р. Янбулатова. *Таҙ бер* ***ҡалаға*** *килеп сыҡты, ти. Был* ***ҡала*** *бер ҡарт батшаның баш* ***ҡалаһы*** *икән, ти.* Әкиәттән. *Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ, яңғыҙ таш* ***ҡала*** *булмаҫ.* Мәҡәл.

**ҡала II** *бәйл.* Төп йәки сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән нимәнеңдер артынса килгән урынды белдерә. *Уның* [*Ҡотлояр ҡарттың*] *... Ишбулаттан* ***ҡала,*** *ун туғыҙ йәштәрҙәге ҡыҙы менән ун етегә сыҡҡан кесе улы Ишбулдынан башҡа бала-сағаһы юҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Был байлыҡҡа ни атаһынан* ***ҡала*** *Имай баш бит инде.* Һ. Дәүләтшина. *Уның* [*Константиндың*] *атаһы Берлин янында еңеүгә ике көн* ***ҡала*** *һәләк булған.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 24 апрель. *100 метрға тиклем үҫеүсе эвкалипттар секвойянан* ***ҡала*** *икенсе урында тора.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 23 июнь.

**ҡалай I** *и.* Табаҡлы йоҡа тимер. *Аҡ **ҡалай**.* ▬ *Ҡарттың өй ҡыйығы зәңгәр **ҡалай**. Тәҙрә ҡапҡастары биҙәрле.* С. Кулибай.

**ҡалай II** *а.* 1. *һор.* Эш-хәрәкәттең нисек башҡарылыуын һорауҙы белдерә. — *Был мәсьәләне беҙ **ҡалай** итеп хәл итербеҙ икән һуң?* С. Ағиш. *Бар менән юҡты **ҡалай** итеп табайым икән?* Әкиәттән.

2. *билд.* Билдәле бер сифаттың, эш-хәрәкәт йәки хәлдең юғары дәрәжәһенә һоҡланғанда әйтелә; ниндәй. ***Ҡалай** ауыр. **Ҡалай** матур.* ▬ ***Ҡалай** төлкөләнеп алдыңдан-артыңдан әйләнеп йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин. *Минең әүәлге хаталарымды ала алмауың **ҡалай** йәл, бик йәл.* Р. Ниғмәти.

**ҡалдау I** *с.* Иген сәсмәй ташланған (ерғә ҡарата). ***Ҡалдау** ерҙәр.*

**ҡалдау II** *с.* Тәненә ит ҡунмай, ябыҡ һымаҡ күренә торған (малға ҡарата). ***Ҡалдау** ат. **Ҡалдау** һыйыр.*

**ҡалын I** *с.* 1. Арҡыры киҫеме, аҫҡы йөҙө менән өҫкө йөҙөнөң араһы сағыштырмаса ҙур; *киреһе* йоҡа. ***Ҡалын** боҙ. **Ҡалын** китап. **Ҡалын** таҡта.* ▬ *Яр ситендәге талдарҙы **ҡалын** ҡар күмеп киткән.* Ш. Янбаев.

2. Тулышып торған; итләс, йыуан. ***Ҡалын** елкә. **Ҡалын** кәүҙә.*

3. Тығыҙ, күп булып үҫкән; ҡуйы. ***Ҡалын** сәс. **Ҡалын** үлән.* ▬ *Борон заманда Ҡариҙел башындағы **ҡалын** урманда йәшәгән, ти, бер батыр.* Әкиәттән.

4. Тоноҡ, түбән яңғырашлы (тауышҡа ҡарата). *Иренең тауышы бик **ҡалын**, тамаҡтан түгел, ҡайҙандыр ситтән килгән кеүек ишетелә.* С. Ағиш.

**ҡалын II** *и. этн.* Егет яғы ҡыҙҙың атаһына бирә торған мал. ***Ҡалын** алыу. **Ҡалын** биреү.* ▬ ***Ҡалын** атҡарыу өсөн бер йыуан ат һуйғандар.* М. Буранғолов. *Сафанан яусы килде. Йөҙ егерме һум мәһәр, инә тунына батшай сапан, ... **ҡалынға** бер ат, туйына бер һыйыр һуйһа, Нәфисәне кулак Сафа ҡартҡа бирергә риза булдылар.* И. Көҫәпҡол.

**ҡалып I** [*ғәр.*] *и.* 1. Нәмәне бер рәүешкә һалып, күпләп эшләү өсөн ҡулланылған ҡорамал. *Быйма **ҡалыбы**. Итек **ҡалыбы**. Кирбес **ҡалыбы**.*

2. *күсм.* Эште бер рәүешкә ҡороу өсөн билдәләнгән тәртип. *Эште яңы **ҡалыпҡа** ҡороу.*

3. Бер тәртипкә килтереү өсөн билдәләнгән үлсәм. *Башҡортостан хөкүмәте Өфөгә күсеү менән телде бер **ҡалыпҡа** һалыу юлында байтаҡ мөҙәкәрәләр булды.* Т. Йәнәби.

4. Әҙәби әҫәрҙең үҙенсәлеген билдәләй торған алымдар системаһы. *Шиғри **ҡалып.***

**ҡалып II** *и.* Тотҡондағы кешенең аяҡ-ҡулын ҡоршай торған боронғо ағас ҡыҫа; ҡандал. ***Ҡалып** һалыу.*

**ҡалыпла I** *ҡ.* 1. Ҡалыпҡа һуғыу, ҡалыпҡа кейҙереү. *Итекте **ҡалыплау.*** — *Балсыҡ әҙер булғас та станокка ҡуялар, унда уны **ҡалыплап**, сынаяҡ итеп ҡоялар.* Ғ. Амантай.

2. Бер үлсәмгә, бер рәүешкә килтереү. *Әҙәби телде **ҡалыплау.***

**ҡалыпла II** *ҡ.* Ҡул-аяҡты ҡалып менән ҡоршау; ҡалып һалыу. *Тотҡондо **ҡалыплау.***

**ҡама I** *и.* 1. Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙон ҡойроҡло, ҡара көрән йөнлө йыртҡыс, һыу йәнлеге. *Аҡ көҙән, һары шәшке, тейен, **ҡама** кеүек йәнлектәрҙе аулау ҙа бик ныҡ кәмене.* «Совет Башкортостаны», 1965, 24 ноябрь. *Ай-һай тигән тауышҡа **ҡама** ҡаса ҡамышҡа.* Халыҡ йырынан.

2. Шул йәнлектең тиреһе. *Ҡара бәрәс тиреһе **ҡама** булыр тиһеңме.* Халыҡ йырынан.

3. Төрлө аҫыл йәнлек тиреһе. *Ҡамсат **ҡама**. Ҡондоҙ **ҡама.*** — *Кейгән тундарыңдың әй яғаһы, ниндәй ҙә генә йәнлек **ҡамаһы**.* Халыҡ йырынан.

**ҡама II** *ҡ.* 1. Тирә-яҡлап уратыу, әйләндереү. *Аҫыл гөлдәр **ҡамап** алған тирә-яғымды.* Ғ. Әмири.

2. Уратып, инер-сығыр юлды бикләү. ***Ҡамап** тотоу. Юлды **ҡамау.*** — *Пайтәхетте, шанлы ҡаланы, дошман яуы килеп **ҡаманы**.* М. Кәрим.

**ҡамҡа I** *и.* Биҙәкле ҡытай ебәге. *Сыңғыҙ хан да яу асып, ... бөтә улын бай иткән, кейемен ебәк, **ҡамҡа** иткән, атын арғымаҡ иткән.* «Мәргән менән Маянһылыу».

**ҡамҡа II** *и.* Ҡанат өҫтө ҡыҙыл йәки һары төҫтәге, ҡара түрткөлө ваҡ ҡына йомро ҡуңыҙ. *Ете түрткөлө **ҡамҡа**. Ике түрткөлө **ҡамҡа**.*

**ҡан I** *и.* Күҙәнәктәрҙе туҡландырып, тән буйлап йөрөгән ҡыҙыл шыйыҡса. *Артерия **ҡаны**. Вена **ҡаны**. **Ҡан** биреү. **Ҡан** ебәреү. **Ҡанға** туҙыу.* ▬ *Сергеевтың битенән юлаҡ-юлаҡ булып **ҡан** ағып төшкән.* Д. Юлтый.

**ҡан II** *ҡ.* 1. Ҡәнәғәтлек алып баҫылыу, бөтөү (ашау, эсеү һ. б. булған теләккә ҡарата). *Һыуһын **ҡаныу**.* ▬ *Ҡунаҡтар ашап-эсеп **ҡанғас**, хужа ҡатынға ысын күңелдән рәхмәт уҡып таралыштылар.* «Алдар менән Зөһрә».

2. Ҡәнәғәтлек алып, юйылыу, баҫылыу (уй-тойғо, теләккә ҡарата). *Асыу **ҡаныу**. Танһыҡ **ҡаныу**. Үс **ҡаныу**.* ▬ *Алпамыша йоҡоһо **ҡаныып** уяныып китһә, ҡул-аяғы бәйле.* «Алпамыша».

**ҡана I** *ҡ.* Йәрәхәтле урындан ҡан сығыу, ҡан ағыу. *Күлдәктә ҡандар күренде, ҡараһам, түш буй-буй булып һыҙырылған, **ҡанаған**.* Д. Юлтый. *Биргән бейгә яраған, ауыҙы-башы **ҡанаған**.* Мәҡәл. *Иәтимдең ауыҙы ашҡа тейһә, танауы **ҡанай**.* Мәҡәл.

**ҡана II** *ымл.* 1. Берәй эшкә өндәүҙе, ҡеүәтләүҙе, саҡырыуҙы, әҙләүҙе белдерә; йә, әйҙә. ***Ҡана** әле.* ▬ *Эй, ирекле, наҙлы һеңлем, тор йоҡоңдан, тор, **ҡана**!* Д. Юлтый. [*Мәүлетбай*:] ***Ҡана**, тиҙерәк эште бөтөрөп алайыҡ. Хәҙер төн уртаһы уҙып бара, былай яраймы ни?* Ғ. Дәүләтшин.

2. Берәй эшкә ыңғайлыҡ, теләк белдергәнде аңлата; йә, булмаһа. — ***Ҡана**, үҙем бара һалып, таһырлатып алып килəйем.* Б. Бикбай.

3. Берәй нәмә һорағанда әйтелә; ҡайҙа, бир әле. ***Ҡана**, билеттарығыҙҙы бирегеҙ әле бында.* И. Насыри.

4. Берәй эшкә, ярҙамға рөхсәт һорағанда әйтелә; бир әле. *Урал ҡыҙҙы йәлләп китеп: «**Ҡана**, һылыу, тоғоңдо үҙем күтәрәйем», — ти*[*гән*]. «Урал батыр».

**ҡаңғы I** *ҡ.* Ҡаңғаҡҡа әйләнеү; ҡаңғаҡлау. *Көн **ҡаңғыны**.*

**ҡаңғы II** *ҡ. диал.* Ҡаңғырыу. *Баш **ҡаңғыны**.*

**ҡап I** *и.* 1. Ниҙер һалырға йәтешләп эшләнгән һауыт; ҡумта. *Шырпы* ***ҡабы.*** ▬ *Салих һары ҡағыҙҙан бер әсмуха тәмәке һыйырлыҡ* ***ҡап*** *яһай.* Х. Мохтар. [*Мин*] *ҡулыма сәғәт һалынған* ***ҡапты*** *алдым.* Н. Мусин.

2. Йүкәнән һуғылған ҙур тоҡ. *Мәғфүрәне* ***ҡап*** *тоттороп тиҙәк йыйырға ебәрмәк булдылар.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡарттар һүҙен* ***ҡапҡа*** *йый.* Мәҡәл.

3. *иҫк.* Тире. *Күркәмгә күмер* ***ҡабы*** *ла килешә.* Мәҡәл.

**ҡап II** *ҡ.* 1. Ауыҙға алыу. *Икмәк* ***ҡабыу.*** *Өрөп* ***ҡабыу.*** *Тәмәке* ***ҡабыу.*** ▬ *Рәхимә уны* [*Мәғфүрәне*] *ҡыҫтаны: — Йә, ҡунаҡтар килер ҙә китер,* ***ҡап, ҡап.*** *Мәғфүрә шунан ғына уның ҡулынан һоғондо.* Һ. Дәүләтшина. [*Мәрйәм*:] *Бөгөн һәйбәтләнгән кеүек, ләкин һаман тамағына* ***ҡапмай.*** Н. Нәжми. *Батша ҡыҙы балдаҡты ебәк еп менән бәйләгән дә, ауыҙына* ***ҡабып*** *йоҡлаған, ти.* Әкиәттән. *Әҙ* ***ҡап*** *— май* ***ҡап.*** Мәҡәл.

2. Ҡармаҡҡа эләгеү, тотолоу. *Боғаҙаҡҡай күлгә ҡармаҡ һалдым, ҡармағыма сабаҡ* ***ҡапманы.*** Халыҡ йырынан.

3. *күсм.* Ҡулға эләгеү; тотолоу. [*Айыуғолаҡ — бабайға*:] ***Ҡаптыңмы?*** *Барыбер ҡасып ҡотола алмаҫһың!* Әкиәттән.

4. Бармаҡ тейҙергәндә шыумай эләгеп, ҡырҡып барыу (үткер ҡоралдың йөҙөнә ҡарата). *Бәке үткерләнгән,* ***ҡабып*** *тора.*

**ҡап III** *ҡ.* 1. Килеп төшөп яна башлау (утҡа ҡарата). *Ут йортҡа* ***ҡапҡан.***

2. Тәьҫир итеп ауырттырыу (башты); тейеү. *Башҡа эҫе* ***ҡабыу.*** *Еҫ* ***ҡабыу.***

**ҡап IV** *окш.* Ҡалын, йомшаҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдерә. ***Ҡап*** *итеү.*

**ҡап V** *киҫ.* Урталыҡ төшөнсәһен көсәйтә; тап, нәҡ. ***Ҡап*** *уртаға төшөү.* ***Ҡап*** *урталай ярыу.* ***Ҡап*** *уртаҡ бүлешеү.* ▬ *Бысаҡ алып, бүлдем* ***ҡап*** *уртаға мин бер алманы.* М. Кәрим. *Берегеҙ ошо ваҡытта торор* ***ҡап*** *ярты юлда.* Р. Нигмәти. *Яландың* ***ҡап*** *уртаһынан сик һыҙығы үткән.* Ә. Вахитов.

**ҡаплан I** *и.* Бесәйҙәр ғаиләһенә ингән ҡара-сыбар төҫтәге имеҙеүсе йыртҡыс йәнлек. *Сыбар **ҡаплан.***

**ҡаплан II** *ҡ.* 1. Йөҙ менән нәмәгәлер ятыу, йөҙҙө нимәгәлер ҡуйыу, йәшереү. *Мендәргә **ҡапланыу.*** ▬ *Ҡыш үтеп яз аиҙары килһә, керәм шул баҡсаға, сыҡмайым, шунда ятам мин, **ҡапланам** да сәскәгә.* Ш. Бабич.

2. Йөҙ түбән йығылыу, йөҙ менән ауыу. *Аҫылбикә ... йөгөнән төштө, йөҙө менән ҡарга **ҡапланды.*** Т. Хәйбуллин.

3. Төбө, аҫҡы яғы менән өҫкә әйләнеү, аҫты өҫкә әйләнеү, түңкәрелеү. *Күнәк **ҡапланды.*** ▬ *Бына ҡапыл ... һиҙмәй ҡалдым кәмәнең **ҡапланғанын.*** Ш. Бабич.

4. *күсм.* Барлыҡ иғтибарҙы берәй нәмәгә йүнәлтеү, берәй нәмә менән бик ныҡ мауығыу. *Иртәнән кискә тиклем китапҡа **ҡапланып** ултырыу.* ▬ [*Саҡаиҙың ҡатыны:*] *Ағайымды йәлләйем, ... өйгә саҡ ҡайтып керһә, китабына **ҡаплана.*** Б. Бикбай.

**ҡаптыр I** *ҡ.* Берәй нәмәне кемдеңдер ауыҙына ҡабырға биреү. *Дарыу **ҡаптырыу.*** ▬ *Кейеҙбай ... алмаһын ҡырҡып ҡыҙға **ҡаптырҙы.*** Әкиәттән.

**ҡаптыр II** *ҡ.* 1. Төймә, ҡаптырма, элгес кеүек нәмәне эләктереү. *Иҙелбай ағай урынынан торҙо ла, ҡуйтырының йомро төймәләрен **ҡаптыра** башланы.* Х. Мохтар.

2. Ҡармаҡҡа эләктереү. *Балыҡ **ҡаптырыу.***

3. Ҡоралдың үткерлегән һынау өсөн ҡулды тейҙереү. [*Ғатау ағай*] *бысаҡты оҙаҡ итеп, бармаҡ битенә **ҡаптырып** ҡарай-ҡарай үткерләне.* Р. Ғабдрахманов.

4. *күсм.* Ҡулға төшөрөү; эләктереү, тотоу. [*Ҡатын:*] *Спектакль ҡарарға йөрөй тиһеңме ни уны! Ҡыҙҙар **ҡаптырырға** йөрөй ул бында.* А. Ғирфанов. [*Асияның*] *угрылыҡ буйынса иптәше булған. Уны ҡаиҙалыр Себерҙә **ҡаптырғандар.*** Н. Иҙелбай.

**ҡаптыр III** *ҡ.* Тоҡанып яныуға килтереү, янып китеүгә сәбәпсе булыу. *Ут **ҡаптырыу.***

**ҡара I** *и.* Яҙыу өсөн ҡулланылған, ниндәйҙер буяу иҙелгән шыйыҡлыҡ. *Зәңгәр **ҡара.** Ҡара **ҡара.** Ҡыҙыл **ҡара.*** ▬ *Ул хатыңды яҙырға ни ҡәҙәр **ҡара,** күпме кәрә-*

*син, әҙме ваҡыт әрәм киткәндер.* И. Насыри. *Ләкин өйҙә ҡәләм заты ла, яҙыу* ***ҡараһы*** *ла табылманы.* М. Кәрим.

**ҡара II** *с.* **1.** Ҡором, күмер төҫөндәге; *киреһе* аҡ. ***Ҡара*** *костюм.* ***Ҡара*** *ҡаш.* ***Ҡара*** *сәс.* ***Ҡара*** *таҫма.* ***Ҡара*** *төҫ.* ▬ *Һылыубикә, һылыу туташ, ҡыҙ солтаны, бит уртаңда* ***ҡара*** *миң бар — бит сулпаны.* Ш. Бабич. ***Ҡара*** *ҡытат елән ай иңемдә,* ***ҡара*** *ебәк билбау билемдә.* Халыҡ йырынан. ***Ҡара*** *ташты йыуһаң да ағармай.* Әйтем.

2. Төрлө төҫтөң үҙенә бер төрлө ҡоңғорт төҫмөрөн белдерә. ***Ҡара*** *йәшел.* ***Ҡара*** *күк.* ***Ҡара*** *ҡыҙыл.*

3. Ғәҙәттәге йәки төп төҫкә ҡарағанда ҡуйыраҡ төҫтә булған. ***Ҡара*** *ҡан.* ***Ҡара*** *төтөн.* ***Ҡара*** *туҙан.* ▬ *Әле генә тып-тын торған һауа ҡапыл боҙолоп,* ***ҡара*** *болот сыҡты.* М. Тажи. *Аҙашмам тигән егетте* ***ҡара*** *томан аҙаштыра.* Мәҡәл.

4. Көн яҡтыһы булмаған йәки көн яҡтыһы төшмәгән; ҡараңғы. ***Ҡара*** *кис.* ***Ҡара*** *таң.* ***Ҡара*** *урман.*

5. Тәне аҡ булмаған йәки ҡояшта янып аҡлығын юғалтҡан. ***Ҡара*** *кеше.* ***Ҡара*** *тәнле халыҡ.* ▬ *Аҡ матур — саҡ матур,* ***ҡара*** *матур — бик матур.* Әйтем. ***Ҡара*** *кешенең тире сыҡҡансы, аҡ кешенең йәне сығыр.* Әйтем.

6. Ҡар булмаған, ер асыҡ ятҡан; ҡарһыҙ. ***Ҡара*** *күҙ.* ***Ҡара*** *туң.* ***Ҡара*** *һыуыҡ.* ▬ *Тирә-яҡтағы ауылдарҙың ярлы-ябағалары ...* ***ҡара*** *күҙгә кергәнсе урағын урып, игенен һуғып, тау-тау итеп мөгәзәйгә ташып ҡалғандар.* М. Тажи.

7. Керле, бысраҡ. *Бите* ***ҡара.*** *Бысраҡ* ***ҡара*** *ҡул. Йыуылмаған* ***ҡара*** *кер.*

8. Айырым оҫталыҡ, квалификация талап итмәгән, күберәк ҡул көсөнә, физик эшкә бәйле булған. ***Ҡара*** *көс.* ***Ҡара*** *эш.* ▬ *Үҙемдеке тигәндә үгеҙҙәй* ***ҡара*** *көсөм бар.* Әйтем.

9. Революцияға тиклемге Рәсәйҙә: түбәнге ҡатламға ҡараған, ябай халыҡҡа мөнәсәбәтле; белемһеҙ, наҙан. ***Ҡара*** *мужик.* ***Ҡара*** *эшсе.* ▬ [*Баяр*:] *Һеҙҙең кеүек гимназисткаға* ***ҡара*** *халыҡ араһында бил бөкрәйтеп, бесән сабып йөрөү оҡшамай.* М. Тажи.

10. *күсм.* Йәм-тәм бирерлек сифаты булмаған. ***Ҡара бутҡа.*** — *Ҡаиҙа ал таң, ҡояш, яҡты ай! Елдәр бейей **ҡара** яланда.* Ғ. Хәйри.

11. *күсм.* Ҡыуанысһыҙ, ҡайғылы, ғазаплы, ауыр. ***Ҡара*** *бәхет.* ***Ҡара*** *көндәр килде.* ***Ҡара*** *тәҡдир.* ***Ҡара*** *яҙмыш.*

12. *күсм.* Үҙе эйәреп килгән исемдәрҙең мәғәнәһенә ҙур кимәл, көслө дәрәжә төҫмөрө бирә. ***Ҡара*** *аҡһаҡ.* ***Ҡара*** *аслыҡ.* ***Ҡара*** *бай.* ***Ҡара*** *ҡайғы.* ***Ҡара*** *тир.* ***Ҡара*** *ямғыр.* ***Ҡара*** *яу.*

13. Ҡайһы бер зоологик һәм ботаник атамалар составында килә. ***Ҡара*** *айыу.* ***Ҡара*** *ерек.* ***Ҡара*** *ҡайын.* ***Ҡара*** *төлкө.*

14. *күсм.* Күңел бысраҡлығынан килгән; яуыз, мәкерле. ***Ҡара*** *ниәт.* ***Ҡара*** *уй.* — *Тулҡынлана **ҡара** көскә ҡаршы дәһшәт менән эшсе донъяһы.* Д. Юлтый.

15. Ҡайһы бер ауырыу исемдәре менән килеп, уның көсәйгәнен белдерә. ***Ҡара*** *ҡылау.* ***Ҡара*** *һырҡау.* — [*Ғәләмшә әбейҙең*] *ире һары менән өс йыл ауырыны. Шунан **ҡара** һарыға әйләнеп, ярты йыл йөрөнө лә үлеп китте.* С. Агиш.

**ҡара II** *ҡ.* 1. Күҙҙе ҡайҙалыр йәки нәмәгәлер йүнәлтеү. *Боролоп **ҡарау**. Күтәрелеп **ҡарау**.* — *Зөлҡәрнәй ҡапыл һиҫкәнеп, Зөлхизәне ҡосағынан ысҡындырған да, ялтйолт **ҡарап** алған.* Н. Иҙелбай. *Бер **ҡараһам** һиңә, күңелем була, бер йылмайып ҡуйһаң ни була.* Халыҡ йырынан. *Асыҡҡан ат ҡулыңды ялай, яратҡан ат күҙеңә **ҡарай**.* Әйтем. *Юғарыға **ҡарап** фекер ит, түбәнгә **ҡарап** шөкөр ит.* Мәҡәл.

2. Тамаша итеү, күҙәтеү. *Кино **ҡарау**. Спектакль **ҡарау**.* — *Бала-саға, ут **ҡарарға** тип, ҡоймаларға, өй баштарына менеп китте.* М. Тажи. *Кейәүҙәре һуғыша, ә батша үҙе **ҡарап** тора.* Әкиәттән.

3. Кемгәлер йәки нәмәгәлер эйәреү, өлгө йәки сығанаҡ итеп алыу. *Һүрәткә **ҡарап** эшләү.* — ***Ҡарап** бесергә күлдәк һорап Ныязғол баиҙарға барыуҙы уйларға ла ярамай ине.* Һ. Дәүләтшина. *Инә ҡаҙ ҙа, ата ҡаҙ ҙа, уларға **ҡарап** бәпкәләр ҙә һис йылғаға төшмәй, ти.* Әкиәттән.

*Атаһына **ҡарап** улын ҡос, инәһенә **ҡарап** ҡыҙын ҡос.* Мәҡәл. *Ҡарағайға **ҡарап** тал үҫер.* Мәҡәл.

4. Тикшереп асыҡлау, асыҡлап хәл итеү. *Ғаризаны **ҡарау**. Яҙғы сәсеү мәсьәләһен **ҡарау**.* ▬ *Хәҙер был фирҡәнең ниҙән ғибәрәт икәнен **ҡарайыҡ**.* Һ. Дәүләтшина.

5. Тейешле хеҙмәт күрһәтеү, тәрбиә итеү, тәрбиәләү. *Бала **ҡарау**. Мал **ҡарау**. Сирле кешене **ҡарау**.* ▬ *Мин уларҙы тыуған көндәренән бирле **ҡарайым**. Мин генә **ҡарарға** тейешлеме инде.* Ш. Шәһәр. *Ат арымай тау менгәнгә, арымай юртып килгәнгә, арый **ҡарай** белмәгәнгә.* Әйтем.

6. Йөҙ менән билдәле бер яҡҡа йүнәлгән булыу. *Өйҙөң алты тәҙрәһе бейек террасаға **ҡарай**.* Һ. Дәүләтшина.

7. *күсм.* Таяныс итеп күреү, өмөт бәйләү. *Балаға **ҡарап** ҡалыу.* ▬ *Аҡназар иттән шыпа өҙөлдө. **Ҡарап** ҡына торған яңғыҙ һыйыры һыуалып китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҡарағанат I** *и.* Турғай һымаҡтар отрядына ҡараған сыйырсыҡ ҙурлыҡ, ҡанат-ҡойроғо ҡара, башы менән арҡаһы буҙ урман ҡошо (килбәте, ҡылығы һайыҫҡанға оҡшап тора). ***Ҡарағанат** ҡыуаҡта оялай.*

**ҡарағанат II** *и.* Сазандар ғаиләһенә ҡараған, ҡорман балығына оҡшаған йылға балығы. *Ебеткән борсаҡҡа, бешергән һолоға, боиҙаиға опто, **ҡарағанат** һәйбәт ҡаба.* Ә. Чаныш.

**ҡарағош I** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған, бөркөттән бәләкәйерәк ҡара йыртҡыс ҡош (ағас башына оялай). *Күлдә йөҙгән ҡаҙҙы тиберге һауаларҙан оса **ҡарағош**.* Сеңләүҙән.

**ҡарағош II** *и.* Салғыны һапҡа нығытыу өсөн арҡыры ҡуйылған тимер. *[Ғариф ағай] ике иҫке **ҡарағош** табып колхоз салғыларын ялғаны.* Б. Бикбай.

**ҡарай I** *ҡ.* 1. Ҡара төҫкә инеү, ҡара төҫ алыу. *Снарядтан емерелгән стеналар, пожарҙан **ҡарайған** өйҙәр, асыҡ түбәләр күңелгә шомлоҡ бирәләр.* Д. Юлтый. *Алмалар алланғандар, ҡарағаттар **ҡарайғандар**.* Т. Арслан.

2. Ҡара төҫтә булыу, ҡара булып күренеү. *Алыҫтарҙан **ҡарайып** ай күренгән Ҡара төлкө тигән тау микән.* Халыҡ йырынан.

3. Кер ҡунып бысрау. ***Ҡарайған** күлдәк.* ▬ [*Гөлбоҫтан*:] *Яҫтыҡ, мендәр тыштары ла туҙып, **ҡарайып**, йыртылып бөттө.* Ғ. Дәүләтшин.

4. *күсм.* Кеше теленә эләгеү, хурлыҡҡа ҡалыу. *Кем менән **ҡарайғанһың**, шуның менән ағар.* Мәҡәл.

**ҡарай II** *бәйл.* Төбәү килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, хәрәкәттең йүнәлеш яғын белдерә; табан. *Кискә табан немецтар әллә нисә батареяҙан беҙҙең артҡы линияға **ҡарай** ут астылар.* Д. Юлтый. *Көнө буйы яуған ямғыр кискә **ҡарай** ҡапыл туҡтаны.* М. Кәрим. *Йондоҙ ҡашҡа Арал диңгеҙе яғына **ҡарай** сабып сыға ла китә.* Әкиәттән. *Ҡайтыр юлҡайына **ҡарай** киттем, ике күҙкәйемә йәш алып.* Халыҡ йырынан.

**ҡаралыҡ I** *и.* Йөндән үреп, осона суҡлап тәңкәләр, сулпылар тағып эшләнгән сәс үрмесе. ***Ҡаралыҡҡайы** ҡара ебәк, тороп һала ҡыҙҙар яурынға.* Халыҡ йырынан.

**ҡаралыҡ II** *и.* 1. Ҡара тоҫ, ҡара төҫтә булғанлыҡ. *Ҡашың **ҡаралығы** еткән, һөрмә тартаһың тағын.* Халыҡ йырынан.

2. Томана булған хәл, наҙанлыҡ. [*Хәйретдин*:] ***Ҡаралыҡ** — ҡара инде. Ҡул ҡуйыуы көнө буйы таш ташығандан да ауырыраҡ* [*булды*]. Я. Хамматов.

3. *күсм.* Оятлыҡ, хурлыҡ. *Йөҙгә **ҡаралыҡ** килтереү.*

**ҡарама I** *и.* Йылалар ғаиләһенә ҡараған оҙонсараҡ япраҡлы, йәйек ботаҡлы, ҡубып тора торған ҡытыршы ҡабыҡлы, эре ҡайышҡаҡ ағас. *Йәш **ҡарама**.* ▬ *Ишле ише менән, **ҡарама** ҡыуышы менән.* Мәҡәл.

**ҡарама II** *и.* Сана табанының ҡара-ҡаршы тырнаҡтарын тоташтырған бөгәзе. ***Ҡарама** бөгөү. Сана **ҡарамаһы**.*

**ҡараҫҡыл I** *с.* Ҡара төҫкә тартым; ҡараһыу. *Бейек ҡарағайҙың **ҡараҫҡыл** баштары ... ҡара болотҡа оҡшай.* С. Агиш.

**ҡараҫҡыл II** *и. диал.* Ҡараҫҡы. *Алыҫта ... донъяны ҡаплап алған аҡ ҡар өҫтөндә бер-ике **ҡараҫҡыл** күренде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҡарға I** *и.* Ҡоҙғондар ғаиләһенә ҡараған йылтыр сөм ҡара төҫтәге ҡош. *Яҙ көнө ырҙын өҫтөндә йәки ер һөргән саҡта, ... балалар, һеҙ күрерһегеҙ* ***ҡарға*** *исемле ҡошто.* С. Кулибай. ***Ҡарға*** *күҙен* ***ҡарға*** *суҡымай.* Мәҡәл.

**ҡарға II** *ҡ.* Яман теләк теләп әрләү. [*Үмәр:*] *Утҡа һалды бит йөҙө ҡара, битҡә ҡара яҡты бит сусҡа бала. Ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙғын ҡыҙ!* [*Тимерғәле:*] *Ҡуй, ҡорҙаш, ҡуй. Әйтмәгәнең булһын! Ул ни эш: күҙ йәше түгеп, үҙ балаңды* ***ҡарғайһың!*** Һ. Дәүләтшина.

**ҡарт I** *с.* 1. Оҙаҡ йәшәгән, йәшкә оло; *киреһе* йәш. ***Ҡарт*** *ағас.* ***Ҡарт*** *бүре.* ***Ҡарт*** *кеше.* ▬ *Был кеше, тауышына ҡарағанда, бик* ***ҡарт*** *ине.* С. Агиш. *Йәш кәләшен һөйгән була Сонайым,* ***ҡарт*** *кәләшен һуҡҡан була Сонайым.* Халыҡ йырынан. ***Ҡарт*** *кешенең ни байлығы — таяғы ла тамағы.* Әйтем.

2. Бик әүәлдән килгән; боронғо. ***Ҡарт*** *тарихтың серегән йомаҡтарын һүтер өсөн ҡыҙыл көрәшселәр ... еңеү йырын йырлап уҙалар.* Ғ. Хәйри.

**ҡарт II** *и.* 1. Оло йәштәге ир кеше. *Аҡ һаҡаллы* ***ҡарт.*** ▬ *Һай* ***ҡарттарыбыҙ, ҡарттарыбыҙ,*** *ни күрмәгән* ***ҡарттарыбыҙ,*** *ҡартлас Урал ни күрһә, барын күргән* ***ҡарттарыбыҙ.*** Ғ. Сәләм. ***Ҡарт*** *ҡуйынында ҡалас бар — ҡаласынан ҡан тамыр, йәш ҡуйынында ҡамсы бар — ҡамсыһынан бал тамыр.* Мәҡәл. *Иәштәр килһә — эш башлай,* ***ҡарттар*** *килһә — һүҙ башлай.* Әйтем.

2. *күпл.* Оло йәшкә етеп аҡыл, тәжрибәләре менән хөрмәт ҡаҙанған ирҙәр. *Ауыл* ***ҡарттары.*** ▬ *Ил* ***ҡарттары*** *ни тиҙәр? Янып йәшә һин, тиҙәр.* А. Игебаев. *«Һаулығың — байлығың», – тигән боронғо* ***ҡарттар.*** Ғ. Дәүләт-шин.

3. Оло йәштәге ҡатындың йәмәғәте; бабай. *Хәсби апай ...* ***ҡартының*** *туҡмала башлағанын күргәс, сыҙап тора алманы.* Т. Йәнәби.

**ҡарһаҡ I** *с.* Кәүҙәгә, буйға бәләкәй; тәпәшәк. ***Ҡарһаҡ*** *кеше.* ▬ *Хан улы үҙе* ***ҡарһаҡ,*** *үҙе аҡһаҡ, көмрө, етмәһә бик уҫал бер әҙәм икән, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҡарһаҡ II** *и.* Һары төҫтәге ваҡ дала төлкөһө. *Ҡыя ҡарап, ҡырға юртҡан **ҡарһағы** бар Балҡан тау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҡаршылаш I** *с.* Бер-береһенә ҡаршы урынлашҡан. ***Ҡаршылаш** өйҙәр.*

**ҡаршылаш II** *ҡ.* 1. Берәүҙең ниәтенә, теләгенә кире тороу; ҡаршылыҡ күрһәтеү. *Ҡарт **ҡаршылашманы**, сыбыртҡыһын алып, атын һуҡты.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Кеше һүҙенә ҡаршы тороп, һүҙ әйтешеү. *Ҡотлояр байҙың мыжымаған сәғәте юҡ. Тимеркәй уның менән **ҡаршылашманы**. **Ҡаршылашып** ҡайҙа бараһың.* Д. Юлтый.

**ҡарыу I** *и.* Көс, ҡеүәт, ғәйрәт. ***Ҡарыу** ҡайтыу. **Ҡарыуҙан** ҡалыу.* ▬ *Һунарға йөрөргә минең **ҡарыуым** бөттө.* С. Кулибай. *Хәҙер аяҡ-быуын ҡалтырана, атларға ла йүнләп **ҡарыу** юҡ.* Б. Вәлит.

**ҡарыу II** *и.* 1. Нимәгәлер ҡаршы эшләнгән яуап; ҡоһор. [*Йылан — Урал батырға:*] *Ай, егетем, ярҙам ит, ... ярҙамыңа **ҡарыуға** мин дә ярҙам итермен.* «Урал батыр». [*Сәлимә*] *бында иркенгә сыҡҡас, ҡыштың ҡыш буйы са раһыҙҙан өндәшмәй телен тешләп йөрөгәндең **ҡарыуын** ҡайтара.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Ҡылынган яуызлыҡҡа яуап итеп эшләнгән уҫаллыҡ; үс, ҡон. ***Ҡарыу** ҡалыу.* ▬ ***Ҡарыуға** — **ҡарыу**, ҡарт атҡа — ябыу.* Мәҡәл.

**ҡарыу III** *и.* Боронго һуғыш ҡоралы. *Арыҫланды күреү менән батыр шашҡан: «Йә, хоҙай, үҙең ярҙам бирә күр», — тип, **ҡарыуын** ҡулына алып яҡынлашҡан.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

**ҡарыуһыҙ I** *с.* Көсһөҙ, ҡеүәтһеҙ, ғәйрәтһеҙ. ***Ҡарыуһыҙ** кеше.*

**ҡарыуһыҙ II** *с.* Ҡаршылыҡһыҙ, яуапһыҙ; ыңғай, күндәм. *Был командир шулай ихтыярһыҙ, **ҡарыуһыҙ** йомшаҡ иптәш инде.* С. Әлибаев.

**ҡарыш I** *и.* Киреп ҡуйылған баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡ араһындагы үлсәү берәмеге. *Ул* [*Фәйзуллин*] *әле грамотаны насар белә ... Ҡасандыр аршынды ла белмәй, **ҡарыш**, һөйләм менән, аҙым менән үлсәй ине.* С. Агиш.

*Күлдәгемдең итәктәре ергә етмәй бер **ҡарыш**.* Халыҡ йырынан.

**ҡарыш II** *ҡ.* Ыңғайға килмәй, ҡаршы тороу; тиҫкәреләнеү. *Мәрғүп, **ҡарышып** тормай, өйгә инеп Ғәләүгә Шәхмиҙең кейемдәрен алып бирҙе.* Т. Йәнәби. *Эшләһәң, эш **ҡарышмай**.* Әйтем.

**ҡарыш III** *ҡ.* Тартышып ҡатыу; ҡорошоу. *Ғариф староста уянып китте ... Ул тороп ултырҙы һәм яңағы **ҡарышҡанса** иһәнәне.* Ж. Кейекбаев.

**ҡасыр I** *и.* Айғыр менән ишәктән булған ҡатнаш тоҡом хайуан. ***Ҡасыр** нәҫел бирмәҫ.* ▬ [*Кәрим Хәкимовтар*] ... *тауҙарҙағы һуҡмаҡтар буйлап ҡайҙа йөк йөрөтә торған **ҡасырҙар** менән, ҡаиҙа дөйәләр менән үттеләр.* Л. Гадилов. ***Ҡасырҙан** ат та тыумаҫ, ишәк тә тыумаҫ.* Әйтем.

**ҡасыр II** *ҡ.* 1. Ҡасырға мәжбүр итеү, ҡасырға мөмкинлек биреү, ирек ҡуйыу. ***Ҡасырып** ебәреү.* ▬ *Аҡ ҡуянҡайҙарҙы ай **ҡасырҙым**, аҡбуҙ атҡаи менән баҫтырҙым.* Халыҡ йырынан.

2. *һөйл.* Йәшереп, йыйып ҡуйыу. *Баланы **ҡасырып** ҡуйыу.*

**ҡасыр III** *ҡ.* Орғасы малды иркәк малға ҡушыу; аталандырыу, тороҡтороу. *Иртә **ҡасырыу**. Яһалма рәүештә **ҡасырыу**.*

**ҡат I** *и.* 1. Аҫлы-өҫлө йәки йәнәш-йәнәш булған бер нисә нәмә һаны. *Бер **ҡат** тәҙрә. Ике **ҡат** юрған.* ▬ *Гәрәй түргә менеп, аҫтына ике **ҡат** мендәр һалып, аяҡтарын бөкләп ултырҙы.* Б. Бикбай.

2. Аҫлы-өҫлө йорт йәки башҡа ҡоролмаларҙың бер кимәлдәге айырым-айырым өлөшө. *Өҫкө **ҡат**.* ▬ *Пароходтың аҫҡы **ҡатында** кемдер моңландырып гармун уйнап ебәрҙе.* М. Тажи.

4. Эш-хәлдең башҡарылыш, үтәлеш һаны; мәртәбә, тапҡыр, ҡабат. *Биш **ҡат** әйтеү.* ▬ *Бер һынаған яманды икенсе **ҡат** һынама.* Аҡмулла. *Үткән көндөң ғәйебен аҡлар өсөн ун **ҡат** артыҡ эшлә иртәгә.* Ғ. Әмири. *Ете **ҡат** үлсә, бер **ҡат** ҡырҡ.* Әйтем.

**ҡат II** *ҡ.* 1. Ҡаты йәки ҡатыраҡ хәлгә килеү. *Таш кеүек* ***ҡатыу.*** ▬ *Иҙәндең соҡор саҡырҙары әлдән-әле тигеҙләп һылап торғанға, тора-бара ул тип-тигеҙ булып* ***ҡатып*** *киткән.* Ғ. Дәүләтшин. *Әбей уға* [*егеткә*] *әсе ҡатыҡ менән бер телем* ***ҡатҡан*** *икмәк кенә бирә.* Әкиәттән.

2. Туң хәлгә килеү; туңыу. *Марттың егерме бишендә һыу* ***ҡатһа,*** *бер аҙналыҡ юлға сыҡ.* Һынамыш. *Ҡарҙын өҫкө ҡатламы шығырлап* ***ҡатҡан,*** *ләкин ат тояғы баҫҡан бер ергә дағаланып һыу сыға.* Й. Солтанов.

3. Дым, еүешлек етмәү, артыҡ ҡоро булыу йәки өлгөргәс оҙаҡ ултырыуҙан кибеү; ҡорошоу. *Бойҙай һарғайып* ***ҡатҡан.*** ▬ *Йәй бик ҡоро булды. Игендәр баш ҡоҫмаҫ элек* ***ҡатып*** *ҡалды.* З. Биишева. *Көн буйына елгә бәйләнгән, тамағы* ***ҡатып*** *сарсаған ҡолондар ҙа ағыты-ла.* Т. Хәйбуллин.

4. Тән йәки берәр ере ауыртыу һ. б. сәбәптән шул ағзаларҙың хәрәкәт итеү мөмкинлеге сикләнеү йәки бөтөнләй хәрәкәтһеҙ ҡалыу. *Аяҡ-ҡул* ***ҡатыу.*** *Бил* ***ҡатыу.*** *Тән* ***ҡатыу.*** ▬ *Хәлилдең кәкрәйеп* ***ҡатҡан*** *бармаҡтары ҡәләм тоторға хәрап ипһеҙ.* З. Биишева. *Ҡыш буйы тик тороп, быуындарым* ***ҡатып*** *киткән икән.* М. Кәрим. *Ҡотлоғужа бабай көрәген ҡуйып, билен яҙып алды ла: «Бил* ***ҡата,*** *уландар», — тине.* Р. Солтангәрәев.

5. Ныҡ керләнеү, бысраныу. *Кергә* ***ҡатыу.*** ▬ *Старшина кеҫәһенән* ***ҡатып*** *бөткән янсығын сығарып, йырлаусыға бер нисә тин аҡса бирҙе.* Т. Хәйбуллин.

6. *күсм.* Бик ныҡ өшөү; туңыу. *Шаҡырайып* ***ҡатыу.*** ▬ [*Сурағолға*] *ике-өс сәғәт буйы тышта* ***ҡатып*** *торорға тура килде.* Т. Хәйбуллин.

**ҡат III** *ҡ.* 1. Осло нәмәне һуғып, сәнсеп индереү; ҡағыу, сәнсеү. *Ҡаҙау* ***ҡатыу.*** ▬ *Турғайҙар бик йөҙәткәс, малайҙар тары өҫтөнә сыбыҡ* ***ҡатып,*** *иҫке сепрәктәр элде.* Ж. Кейекбаев.

2. Буйҙан-буйға сәнсеп үткәреп, эләктереү. *Ҡармаҡҡа ем* ***ҡатыу.***

3. Аяҡ кейемен кейеү. *Калуш ҡатыу.* ▬ *Бауһыҙ сабата ҡатып йөрөгән Зөләйха менән эт кенә өйҙә ине.* Ғ. Хәйри.

**ҡат IV** *ҡ.* Ашҡа, һурпаға ҡатыҡ, ҡөрот һалыу, һалып болғатыу. *Ашҡа ҡатыҡ ҡатыу.* ▬ [*Ҡарлуғас:*] *Әсәй, бына мин айран ҡатҡайным, эсеп ебәр, йөрәгеңә ял булыр.* Б. Бикбай. *Яҡшы менән һөйләшһәң, балға шәкәр ҡатҡандай.* Мәҡәл.

**ҡата I** *и.* Күндән тәрән калуш һымаҡ итеп теккән бөронғо аяҡ кейеме (сарыҡ , итек, ситек өҫтөнән кейелгән). *Күн ҡата.* ▬ *Хәҙрәттең салшайып бөткән ситеге менән ҡатаһы йәмһеҙ.* И. Насыри.

2. Ҡатын-ҡыҙҙың ҡуҙырлаған тула ҡуныслы, күн башлы, бейек үксәле аяҡ кейеме. *Ҡата тегеү.* ▬ *Урамығыҙ матур икән суҡлы ҡата кейергә.* Халыҡ йырынан.

**ҡата II** *бәйл.* Билдәле бер ваҡыт миҙгеленең, берҙәмлегенең башынан аҙағынаса. *Көҙ ҡата. Ҡыш ҡата.* ▬ *Мин һәр ерҙә: шағир өҫтәлендә заман йырын яҙам төн ҡата.* Х. Ғиләжев.

**ҡатмарла I** *ҡ.* Ҡатмарлыға әйләндереү, ҡатмарлы итеү. *Йәшлек, тормош — бөтәһе лә ябай. Ә һин уны үҙең ҡатмарлайһың.* Ҡ. Даян.

**ҡатмарла II** *ҡ.* Ҡатмар һалыу. *Ҡатмарлап күлдәк тегеү.*

**ҡатмарлы I** *с.* Ҡатмар һалып тегелгән. *Ҡатмарлы күлдәк.* ▬ *Бибеш бөгөн һандыҡ төбөнән күп ҡатмарлы, ор-яңы күк сатин күлдәк алып Емешкә бирҙе.* З. Биишева.

**ҡатмарлы II** *с.* 1. Төҙөлөшө менән бер нисә айырым өлөштәрҙән, бүлектәрҙән, бүленештәрҙән торған, күп берәмекле; *киреһе* ябай. *Ҡатмарлы булыу. Ҡатмарлы итеү. Ҡатмарлы матдә.*

2. Күп яҡлы, күп төрлө өлөштәрҙән торған. *Ҡатмарлы аппарат.* ▬ *Ҡатмарлы технологик установкаларҙа халыҡ хужалығы өсөн бик кәрәкле күп төрлө продукция эшләп сығарыла.* «Совет Башҡортостаны», 1979, 30 апрель.

3. Ҡоролошо, төҙөлөшө бормалы-бормалы; бай. ***Ҡатмарлы*** *биҙәк.* ▬ *«Урал» көйөнөң ... **ҡатмарлы** моңо Айбулаттың ауыр уйҙарын, ялҡынлы хәсрәттәрен таратҡандай булды.* Һ. Дәүләтшина.

4. Эске тәбиғәте күп яҡлы, төрлө һыҙаттарҙы эсенә алған; ҡаршылыҡлы. *Бабич ул, бер ҡараһаң, бик ябай, икенсе ҡараһаң, ғәжәп үҙенсәлекле **ҡатмарлы** кеше ине.* С. Агиш. *Кеше үҙенең тәбиғәте менән бик **ҡатмарлы**, уның тышҡы күренешенән тыш эске донъяһы бар, кешене аңлар өсөн иң элек уның йөрәген аңлай белергә кәрәк.* М. Тажи.

5. Баҫҡарылышы, хәл ителеше һ. б. бик ауыр; аңлауы ҡыйын. ***Ҡатмарлы*** *мәсьәлә.* ***Ҡатмарлы*** *эш.* ▬ *Хәрби врач Әхмәт Дәүләтов ауыр яралыларға **ҡатмарлы** операциялар яһай.* Ә. Ихсан. *Ул* [*Индрил*] *тағы ла тәрәнерәк, тағы ла **ҡатмарлыраҡ** фәлсәфәләргә инеп китә.* Д. Юлтый.

**ҡатнаш I** *с.* Билдәле бер нәмәнең бер нисә төрөнән йәки төрлө элементтарынан, компоненттарынан торған, составы ҡатмарлы булған, төрлө нәмәләр бергә аралашып ҡушылған. ***Ҡатнаш*** *команда.* ***Ҡатнаш*** *масса.* ***Ҡатнаш*** *тоҡомдар.* ***Ҡатнаш*** *урмандар.*

**ҡатнаш II** *бәйл.* Менән, бергә, аралаш. *Бесән **ҡатнаш** һалам. Көл **ҡатнаш** тупраҡ. Ҡайын **ҡатнаш** ҡарағай урманы.*

**ҡатнаш III** *и.* Берәй эштә, ваҡиғала баҫҡалар менән бергә күрһәтелгән эшсәнлек, ярҙам, булышлыҡ. ***Ҡатнашы*** *юҡ.* ▬ *Ҡыҙҙы үлемдән алып ҡалыуҙа өс егеттең дә **ҡатнашы** бар.* Экиәттән.

**ҡатнаш IV** *ҡ.* 1. Икенсе бер нәмә менән ҡушылыу, ҡушылып аралашыу; ҡатышыу. *Саҡ ҡына өргән дымлы еләҫ ел сәскә еҫтәре менән **ҡатнашып**, бит, ҡул, муйындарҙы иркәләп һыйпай.* Һ. Дәүләтшина.

2. Башҡалар менән бергә берәр эш, хәл, ваҡиғала эшлеклелек итеү. *Йыйылышҡа **ҡатнашыу**. Уйынға **ҡатнашыу**. Һайлауҙа **ҡатнашыу**. Һуғышта **ҡатнашыу**.* ▬ *Үҙ ғүмерендә күп донъя күргән, заманында йыр менән күп*

*йыйындарҙа* ***ҡатнашҡан*** *етмеш йәшәр йырау ҡарт Ҡәҙерғол ... һүҙгә кереште.* Н. Иҙелбай.

3. Кеше менән яҡын бәйләнеш тотоу; аралашыу. ***Ҡатнашып*** *йәшәү.* ▬ *Яманға* ***ҡатнашһаң***, *үҙеңде үлтерер; яҡшыға* ***ҡатнашһаң***, *эшеңде бөтөрөр.* Әйтем.

**ҡатыш I** *и.* Бер эшкә туранан-тура бәйләнеш; ҡағылыш, ҡыҫылыш. ***Ҡатышы*** *юҡ.* ▬ *Дошманды еңеүҙә, колхозды байытыуҙа уның* [*Сафаның*] *тиҫтерҙәренең дә* ***ҡатнашы*** *бар.* Ф. Рәхимғолова.

**ҡатыш II** *бәйл.* Айырғыһыҙ бергә аралашҡан булыуҙы белдерә. *Ҡар* ***ҡатыш*** *ямғыр. Һоло* ***ҡатыш*** *арыш.* ▬ *Польша ҡышы. Көндөҙ ҡар* ***ҡатыш*** *ямғыр яуа.* Д. Юлтый.

**ҡатыш III** *ҡ.* 1. Икенсе бер нәмәгә ҡушылыу, ҡушылып аралашыу; ҡатнашыу. *Ҡыуыҡһыҙ янған бишле лампаның ҡоромо быуға* ***ҡатышып***, *өйгә еҫ тарата.* Һ. Дәүләтшина. *Ике тамсы бер булды нур* ***ҡатышып***, *ике йөрәк бер булды юлға төшөп.* Ш. Бабич.

2. Башҡалар менән бер рәттән эшмәкәрлек итеү; ҡатнашлыҡ итеү, ҡатнашыу. *Йыйылышҡа* ***ҡатышыу***. *Туйға* ***ҡатышыу***. ▬ [*Зөләйха*:] *Унда* [*уйында*] *ҡарап ҡына ултырыу гәҙәте булмай, бергә* ***ҡатышырһың*** *инде.* Т. Иәнәби. *Ултыра торғас, Сынбулат та һүҙгә* ***ҡатышты***. М. Тажи.

3. Кешеләр менән барышып-килешеү, бәйләнеш тотоу; аралашыу. ***Ҡатышып*** *йәшәү.* ▬ *Мин ауылда саҡта Байғужаларға бик һирәк* ***ҡатыша*** *торғайным.* Д. Юлтый.

**ҡау I** *и.* 1. Йылан-саян һымаҡ төрлө ҡорт, йәнлектәрҙең кибеп төшкән көбө. *Йылан* ***ҡауы***. *Йылан яҙ конө* ***ҡауын*** *һала.*

2. Йәнлек, хайуандарҙың иҫке көбө; баҡта. ***Ҡауҙы*** *ҡойоу.* ***Ҡауҙы*** *ташлау. Ноябрҙә тейендәр, ҡуяндар* ***ҡауҙарын*** *ҡоя.*

3. Ҡауаҡ. *Ялҡауҙың башы* ***ҡау***, *үҙенә яу.* Әйтем.

**ҡау II** *и.* Тамырында ултырып ҡышлаған ҡоро үлән; ҡаулан. ***Ҡау*** *үртәү.* ▬ *Яҙғы* ***ҡауға*** *үрт һалһаң, утты ҡаиҙан утларһың.* М. Буранғолов. *Бесән генә сапһам, сал-*

*ғым үтмәй, сабынымдың төбө* ***ҡау*** *икән.* Халыҡ йырынан.

**ҡаулан I** *и.* Тамырында ултырып ҡышлаған ҡоро үлән; ҡау. ***Ҡаулан*** *үртәү.* ▬ *Иртә яҙҙан ... беҙҙең һыйырҙар һауа алмаштырып, елләп,* ***ҡаулан*** *ашап ҡайталар.* И. Ғиззәтуллин.

**ҡаулан II** *и.* Үләндәр кипкән ҡоро миҙгел. [*Ҡотлоғужа*:] *Көҙгө* ***ҡауланда*** *кеше күмер үртәйме ни!* Н. Мусин.

**ҡаш I** *и.* 1. Күҙ ҡабағының өҫтөндә һыҙылып үҫкән төк. *Ҡара* ***ҡаш.*** ▬ *Мәрйәм ҡулын ҡуйып* ***ҡашына,*** *ҡояш нурҙарына ҡараны.* М. Кәрим.

2. Тәҙрә, ишек һымаҡ нәмәләрҙең өҫтөнә эске йәки тышҡы яҡтан буй ҡуйылған йоҡа таҡта; ҡашаға. *Ҡыйыҡ* ***ҡашы.*** *Мейес* ***ҡашы.***

3. Эйәрҙең алдан һәм арттан дуғаланып ҡалҡып торған өлөшө. *Ҡаҙаҡтарҙың алдынан батыры килә, ти. Эйәренең* ***ҡашы*** *шундай ҙур булған, хатта батыр уҡ, һөңгөнән ышыҡланып килә, ти.* Легенданан. *Бүзәкәев кантон эйәренең алтынлатҡан икән уң* ***ҡашын.*** Халыҡ йырынан.

4. Йөҙөк, беләҙек, ҡаптырма кеүек нәмәләргә биҙәү өсөн ҡуйылған аҫыл таш йәки затлы металл киҫәге. *Аҡыҡ* ***ҡаш.*** *Беләҙек* ***ҡашы.*** ▬ *Иң яҫы, үҙенән* ***ҡаш*** *сығарып һуғылған «Сафура» тип яҙылған ҡара биҙәкле йөҙөк Зәлифәгә тейҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Алмас тимер менән яҙалар икән көмөш йөҙөктәрҙең* ***ҡаштарын.*** Халыҡ йырынан.

**ҡаш II** *и.* Ян, эргә, ал. *Баҡса* ***ҡашында.*** *Ҡыҙҙар* ***ҡашына*** *ултырыу. Өй* ***ҡашында.*** ▬ *Юҡты түгел, улым, ысын, — тине ҡарт, ... — мин олатайҙар* ***ҡашына*** *китәм.* Б. Бикбай. *Төшөндә Буҙйегеттең* ***ҡашына*** *ҡырҡ ҡыҙ килгән.* «Буҙйегет». *Хан* ***ҡашында*** *ғәйебең булһа, ҡара ерҙән ҡайыҡ тарттырыр.* Мәҡәл.

**ҡашлау I** *и. диал.* Ҡашлаҡ. *Ошондай яҙ конө алалы-ҡолалы бер* ***ҡашлауҙа*** *ут яғып ултырыу балалар өсөн ... күңелле булыр ине.* Ғ. Ибраһимов.

**ҡашлау II** *и.* Йүгән маңлайсаһы. *Йүгән* ***ҡашлауы.***

**ҡоба I** *с.* Аҡһыл, шыйыҡ көрән (хайуан төҫөнә ҡарата). ***Ҡоба** ат.* — [*Күршенең*] ***ҡоба** һыйыры уҫал да инде, бөтә көтөүҙе айҡап йөрөй.* Ғ. Ғүмәр.

**ҡоба II** *с.* Бер ниндәй йәшел үҫемлек булмаған, бупбуш асыҡ ятҡан; ҡола. *Бушлыҡ булған **ҡоба** далала бөгөн тормош шаулай.* А. Иғебаев.

**ҡойма I** *и.* Нимәнелер айырып йәки уратып һалынған ҡоролма; кәртә. *Ағас **ҡойма**. Бейек **ҡойма**. Таш **ҡойма**.* — ***Ҡойма** аша ҡыҙыл флагтар күренде.* И. Насыри. *Буяғанда **ҡойманы** өҫтән ямғыр ҡойманы.* С. Муллабаев. [*Ҡыҙрас*] *өсөнсө ҡат һуға, айғыры **ҡойма** аша һикереп сыға ла күҙҙән юғала.* Әкиәттән.

**ҡойма II** *с.* 1. Ҡойоп яуған, көслө (ямғырға ҡарата). *Һиндостанда һәм Филиппинда көслө **ҡойма** ямғырҙар яуа.* «Совет Башҡортостаны», 1963, 25 ғинуар.

**ҡойон I** *и.* Өйөрөлөп юғары күтәрелгән көслө саң бураны; өйөрмә. ***Ҡойон** килә.* — *Күк күкрәй, ер һелкенә, **ҡойондар** өйөрөлә.* З. Биишева. *Баҫыуҙың көпкән тупрағын **ҡойон** күтәреп алып киткән.* Ә. Вәли.

**ҡойон II** *ҡ.* 1. Баштан аша һыу ҡойоп сайыныу. *Душта **ҡойоноу**.* — [*Һыуһылыу*:] *Был күл минең һарайым, көн дә сығып **ҡойонам**.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

2. *күсм.* Нимәғәлер баштан-аяҡ сумыу. *Түбәндә, тау аҫтында, ай нурына **ҡойоноп**, тауышһыҙ ғына Ағиҙел ағып ята.* М. Тажи.

**ҡола I** *с.* Үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара (ат төҫөнә ҡарата). ***Ҡола** тай.* — *Серле урман ... Һирәк-һаяҡ доңғорлаҡ тауышына ҡушылып, **ҡола** бейәнең быштырғаны ишетелә.* В. Әхмәҙиев. *Кейеҙбай **ҡола** толпарын атланып, ҡалаға, батша һарайы алдындағы майҙанға ҡарай сығып китә.* Әкиәттән.

**ҡола II** *с.* Асыҡ, буп-буш, бер нәмә булмаған. ***Ҡола** ялан.* — *Был ауылдарҙың тирә-яғы **ҡола** дала. Яҡын тирәлә һис бер ауыл юҡ.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҡола III** *ҡ.* 1. Торған ерҙән йәки үрҙән ауыу; йығылыу. *Арбанан **ҡолау**. **Ҡолап** төшөү. Эләгеп **ҡолау**.* — *Тайып китеп аяғы, киткән, ти, егет **ҡолап**.* Ғ. Әмири. *Төлкө*

*стена буйлап өй башына менә башлаған да, **ҡолап** төшкән.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Хакимлығы бөтөү, урынынан төшөү. *Романовтарҙың өс йөҙ йыллыҡ тәхете **ҡоланы**.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡолаҡбау I** *и.* Ҡамыттың тәртә менән дуға башына эләктерә торған ике яҡ бауы. *Иүкә **ҡолаҡбау**. Ҡайыш **ҡолаҡбау**.* ▬ *Ат шаршыға санаһы менән төшөп киткән. Тыпырсынып ятҡан атты, **ҡолаҡбауҙарын** киҫеп, һөйрәп сығарғандар.* Й. Солтанов.

**ҡолаҡбау II** *и. диал.* Ҡолаҡ артына сыҡҡан шешек; *руссаһы* свинка. ***Ҡолаҡбау** булыу.*

**ҡолан I** *и.* Кәүҙәһе аттан бәләкәйерәк, башы ҙурыраҡ, текә яллы, йомро тояҡлылар ғаиләһенә ҡараған ишәк ҡойроҡло ҡырағай дала аты. *Мендем генә тауҙың ай башына **ҡолан** менән болан ауларға.* Халыҡ йырынан. *Атаһы болан алмағандың улы **ҡолан** алмаҫ.* Мәҡәл.

**ҡолан II** *с.* Һорғолт һары. ***Ҡолан** сәс.* ▬ [*Ишҡужа — ҡатынына:*] *Мин әйтәм, әллә булмаһа ... Ҡолансәстең исемен ҡушабыҙмы? Беҙҙең баланың да сәсе **ҡолан** ғына булып үҫеп килә.* М. Буранғолов.

**ҡолан III** *и.* Асыҡ урын, аҡлан. *Былар икәү* [*Һарыбайхан менән Ҡарабайхан*] *йәйен **коланда** таныша.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**комаҡ I** *и.* Кимереүселәр ғаиләһенә ҡараған, сысҡандан ҙур, нәҙек оҙон ҡойроҡло, һор төҫлө йәнлек. [*Бесәй*] *алдында яңы ғына йәне сыҡҡан ҙур **комаҡ** ҡанһырап ята.* Ф. Исәнғолов.

**комаҡ II** *и.* Һыу ҡайната торған һауыт (самауыр, сәйнүк һ. б.) төбөнә ултырып ҡатҡан ҡом һымаҡ ҡатлам; юшҡын. *Сәйнүкте **комаҡтан** таҙартыу.*

**комой I** *и.* Балсыҡтан яһалған сеүәтә; йәйпәк көршәк. *Һөттө **комойға** ҡойоу.*

**комой II** *и.* Ташбаш. ***Комой** тотоу.* ▬ *Һыу керҙем ҡолас ташлап, ашауҙы ла онотоп йөрөнөм, көн буйы **комой** аулап.* Б. Бикбай.

**ҡор I** *и.* Тауыҡтар отрядына ҡараған эре ҡыр ҡошо; ҡыр тауығы. *Ҡаран тауы итәктәрендәге сауҡалыҡта **ҡор** уйнай.* С. Кулибай. *Ноябрҙең беренсе яртыһында ҡар*

*ята, ... ҡорҙар ҡайын, ә һуйырҙар ҡарағай урмандарына күсәләр.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 1 ноябрь.

**ҡор II** *и.* 1. Түңәрәкләп ултырған кешеләр төркөмө. *Йыйынға килгәндәрҙең бөтәһе лә аттарынан төшөп,* ***ҡор*** *булып түңәрәкләп ултыралар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

2. Һөйләшер, кәңәшләшер өсөн йыйылған йыйын; йыйылыш. ***Ҡор*** *йыйыу.* ▬ *Яман кеше* ***ҡор*** *боҙа.* Әйтем.

3. Һый мәжлесе; табын. [*Тәңкәбикә*:] *Ялсығол эште яйлап ҡайтһа, ололар* ***ҡоро*** *уҙғарырбыҙ.* М. Кәрим.

4. Бер берәмеккә ойошҡан халыҡ. [*Моталлап*:] *Таралды* ***ҡор****, тырым-тырағай килде! Юлай, Кинйә, Ҡанзафар батырҙар күптән интегәләр тотҡонлоҡта.* Б. Бикбай.

5. Ҡатнашып йәшәгән бер тиҫтер яҡын кешеләр төркөмө. *Үз* ***ҡоронда*** *Әхсән иң зирәк, иң сос егет булған.* Хикәйәттән.

**ҡор III** *ҡ.* 1. Ҡаплау, ябыу өсон элеү. *Сымылдыҡ* ***ҡороу****.* ▬ *Йәш килендәр шаршау* ***ҡорғандар*** *ҙа, парлап, талығып төнөн йоҡлаиҙар.* Ғ. Амантай. *Француз да шаршау, тартма бау,* ***ҡор*** *тиһәң дә* ***ҡормам****, әсәкәй.* Сеңләүҙән.

2. Өҫтөн ябып яһау, ултыртыу. *Ҡыуыш* ***ҡороу****. Палатка* ***ҡороу****. Сатыр* ***ҡороу****.* ▬ *Аҡмырҙа карауанды туҡтатып, тирмәләр* ***ҡороп*** *ебәргән.* Әкиәттән.

3. Төҙөү, һалыу (торлаҡ, бина һ. б.) *Йорт* ***ҡороу****. Нигеҙ* ***ҡороу****.* ▬ *Окоп түгел, канал ҡаҙа халҡым, доттар түгел, ГЭС-тар* ***ҡорабыҙ****.* Ш. Бикҡол.

4. Билдәле бер тәртиптә йыйып яһау; эшләү. *Йәйләү* ***ҡороп*** *ятыу. Оя* ***ҡороу****.* ▬ *Лагерь* ***ҡормаҫ*** *борон был урында, бәлки, сәскәләр ҙә булғандыр.* Ғ. Сәләм. *Бөркөт оя* ***ҡормай*** *һаҙлыҡтарҙа.* К. Кинйәбулатова.

5. Булдырыу, барлыҡҡа килтереү, төҙөү. *Гуманистик йәмғиәт* ***ҡороу****. Ғаилә* ***ҡороу****.* ▬ [*Батша*:] *Донъяларҙы* ***ҡороп*** *ебәреү өсөн мин һеҙгә әҙерәк мал бирәм.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

6. Ойоштороу, йыйып үткәреү (кисә, туй, уйын һ. б.) *Кәйеф-сафа* ***ҡороу****. Кәңәш* ***ҡороу****. Мәжлес* ***ҡороу****. Табын*

***ҡороу***. — *Иәштәр киске уйын **ҡорҙолар**, ҡоймаҡ бешерҙеләр йәш ҡыҙҙар*. М. Хәй.

7. Берәй нәмәне нигеҙ итеп алыу, нимәгәлер нигеҙләнеп ойоштороу. *Алдаҡҡа **ҡороу**. Хәйләгә **ҡороу**. Уҡытыуҙы яңыса **ҡороу**. Эште үҙенсә **ҡороу***. — *Даян үҙ йырҙарының композицияһын ... ҡайһы саҡта эпик сюжетҡа **ҡора***. Ғ. Хөсәйенов.

8. Уйлап сығарыу, фекерләп билдәләү; төҙөү. *План **ҡороу**. Хәйлә **ҡороу***. — *Алғы көнгә тағы ла бөтмәҫ көстәр йыйып, матур уйҙар мин **ҡорам***. Ғ. Амантай. *Әбей ниндәй генә хәйлә **ҡорһа** ла егетте еңә алмаған*. Әкиәттән.

**ҡор IV** *ҡ*. 1. Берәр төрлө атыу йәки шартлатҡыс ҡоралға заряд, снаряд, патрон ҡуйыу. *Автоматты **ҡороу**. Шартлатҡыс **ҡороу***. — ***Ҡорҙо** мылтыҡты охотник. ... Тине: мин атам ҡуянды, һалдырам ғәзиз тунын!* Ш. Бабич.

2. Өлөштәрҙән торған нәмәне эшләрлек хәлгә килтереү, йыйып көйләү. *Радионы **ҡороу**. Сепараторҙы **ҡороу**. Фотоаппаратты **ҡороу***. — *Молотилканы ... трактор менән эшләүгә **ҡорғандар***. Б. Бикбай.

3. Аулау, тотоу өсөн ниндәй ҙә булһа яйланманы көйләп ҡуйыу. *Ау **ҡороу**, Бүрегә ҡапҡан **ҡороу***. — *Имән ағас төбөндә тоҙаҡ **ҡорҙом** төлкөгә*. Халыҡ йырынан.

**ҡорбан I** [*ғәр.*] *и*. 1. Мосолман динендә: Алла исеменә салынған мал. ***Ҡорбан** салыу*.

2. Кем йәки нәмәләр хаҡына ғазап сигергә, нимәлер өсөн үҙен бирергә дусар иткән йән эйәһе йәки нәмә. ***Ҡорбан** итеү. **Ҡорбан** һорау*. — *Яңы өсөн иҫке **ҡорбан**, бабай, йәш ағыҙма һалҡын күҙеңдән*. Ғ. Хәйри. *Донъяһы **ҡорбан** һиңә, эй ... ҡыҙ бала*. Ш. Бабич.

3. Төрлө бәлә-ҡаза ваҡытында һ. б. зыян күргән йәки һәләк булған кеше йәки башҡа йән эйәһе. *Көрәш **ҡорбаны**. Һуғыш **ҡорбаны***. — *Көрәш юлында **ҡорбан** булған кешеләр ҡаланың матур еренән һаналған почта ҡаршыһына ерләнгән*. З. Шәрҡи. *Ялтырай үткер ҡылыстар, һәр минут **ҡорбан** көтә*. Б. Мирзанов. *Миһран ҡарттың ... аслыҡҡа **ҡорбан** булыуҙан башҡа әмәле ҡалманы*.

Т. Хәйбуллин. *Торомтайы йөрөй ... өсло күҙҙәре менән* ***ҡорбанын*** *эҙләп.* Ғ. Дәүләтшин.

4. Яманлыҡ һәм фажиғә арҡаһында ауыр хәлгә ҡалған кеше. *Ғәйбәт* ***ҡорбаны.*** *Яуызлыҡ* ***ҡорбаны.*** ▬ *Ямандың юлдашы булғансы, яҡшының* ***ҡорбаны*** *бул.* Мәҡәл.

**ҡорбан II** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған эре аҡ тәңкәле, яҫы, ялпаҡ сөсө һыу балығы. [*Тайфур ҡарт*] *еҙ бат мустай яҫы* ***ҡорбан,*** *ҡарабалыҡ ҡаптыра.* Ә. Чаныш.

**ҡорғаҡ I** *с.* Бик ҡоро, үтә ҡыуан. ***Ҡорғаҡ*** *көн.* ***Ҡорғаҡ*** *һауа.* ▬ *Күсеп килдем мин ҡалаға Ырымбур далаһынан,* ***ҡорғаҡ*** *елдәр иҫкән яҡтан, ҡылғандар араһынан.* Й. Солтанов.

**ҡорғаҡ II** *и. диал.* Ҡорма. *Тәҙрәгә* ***ҡорғаҡ*** *ҡороу.*

**ҡорғо I** *и.* Һаҙлыҡтағы ҡоро урын, ҡоро һуҡмаҡ. *Ҡорамша керәкәлек аша* ***ҡорғо*** *тапҡан.* Т. Морат.

**ҡорғо II** *и. диал.* Ҡорма. *Тәҙрә* ***ҡорғоһо.***

**ҡоро I** *с.* 1. Дымланған, һыу теймәгән. ***Ҡоро*** *кейем.* ***Ҡоро*** *күлдәк.* ▬ *Тышта ғына түгел, өй эсендә лә* ***ҡоро*** *нәмә ҡалмаған.* Т. Йәнәби. *Күлдәктәрем* ***ҡоро,*** *тик салбарым ғына һыуланған.* Д. Юлтый. *Ер шундай* ***ҡоро,*** *йылы, хәл йыйҙырғыс рәхәтлек бирә.* Һ. Дәүләтшина.

2. Дымы бөтөп кипкән; *киреһе* сей. *Өйҙөң тирәһенә ҡырҡ таяҡ* ***ҡоро*** *утын өйөп сыҡҡандар.* Әкиәттән.

3. Дымһыҙ, дымлы түгел, һыу парҙары булмаған. ***Ҡоро*** *ел.* ***Ҡоро*** *һауа.* ▬ *Әсе ел битте, ҡулды көйҙөрә,* ***ҡоро*** *һауа тынды ҡура.* З. Биишева.

4. Эсенә әйбер һалынмаған, буш. ***Ҡоро*** *мискә.* ***Ҡоро*** *һауыт.* ▬ *Егет* [*ҡыҙҙың*] *әсәһенә ... ҡымыҙ һалмай ғына* ***ҡоро*** *туҫтаҡты бирә.* М. Буранғолов.

5. Бер нәмә лә ҡушылмаған, ҡушырлыҡ бер нәмә лә булмаған. ***Ҡоро*** *икмәк.* ***Ҡоро*** *сәй.* ▬ *Ашығыҙҙың ярмаһы юҡ, торғаны* ***ҡоро*** *һыу бит.* Ғ. Дәүләтов.

6. *күсм.* Йылы тойғоға һаран, ҡаты күңелле, ҡырыҫ. ***Ҡоро*** *кеше.*

**ҡоро II** *ҡ.* 1. Тейешле дымы, һыуы бөтөп, артыҡ ҡороға әйләнеү; кибеү. ***Ҡороған*** *ер.* ▬ *Тел көрмәлгән кеүек тотлоҡто,* ***ҡороп*** *китте.* Һ. Дәүләтшина.

2. Тереклек һуты бөтөп, ҡыуға әйләнеү; ҡыуарыу. **Ҡороған ағас.** — *Шаулап торған урмандар ... **ҡороғандар**, йәнһеҙләнгән, үлгәндәр. Яу, яу, тимен, яу, ямғыр.* Ш. Бабич. *Нур күрмәһә, яҙғы гөл дә сәскә сығармай, **ҡорой**.* А. Иғебаев.

3. Һыуы бөтөү, һыуһыҙ ҡалыу; кибеү (йылға, күлгә ҡарата). *Элегерәк бында аҙым һайын күл булған, тиҙәр. Тора-бара һыуҙары кәмегән, ситтәрен ҡамыш-үрән баҫҡан. Аҙаҡ килеп улар **ҡороған**.* Ә. Вәли.

4. *күсм.* Юҡҡа сығыу, юҡ булыу; бөтөү. *Нәҫел **ҡороу**. Тоҡом **ҡороу**.* — *Ярлы, эшселәрҙең хас дошманы буржуйҙарҙың тамыры **ҡороған**.* Ш. Бабич.

**ҡорот I** *и.* Эркеттән ҡайнатып яһалған һөт аҙығы (ашҡа ҡатыу өсөн ҡулланыла). *Бер баш **ҡорот**. **Ҡорот** ҡайнатыу.* — *Аш артынан **ҡорот** иҙеп ҡатылған, ҡара борос һалынған һурпа бирелде.* Б. Бикбай.

**ҡорот II** *ҡ.* 1. Һыуын, дымын бөтөрөп, ҡоро итеү. *Әҡлимә иҙән **ҡорота** сепрәген бороп. Буяулы иҙән ҡала ҡоп-ҡоро булып.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

2. Һыу сығанағын, һыу ятҡылығын юҡ итеү. *Йылғаны **ҡоротоу**. Күлде **ҡоротоу**. Шишмәне **ҡоротоу**.* — *Иҫән ҡалған дейеү пәреиҙәре, әҙәм затына ҡалмаһын тип, Тереһыуҙы **ҡоротҡан**.* «Урал батыр».

3. Һауыт эсендәге һыу йәки бүтән нәмәне бөтөрөү. *Шешәләр буш ине, кисә **ҡоротоп** ҡуйғандар.* Б. Бикбай.

4. *күсм.* Юҡ итеү, юҡҡа сығарыу; бөтөрөү. *Донъяны **ҡоротоу**. Дарманды **ҡоротоу**. Нәҫелде **ҡоротоу**. Тереклекте **ҡоротоу**.* — *Ниндәй ҡырмыҫҡа иләүҙәрен **ҡороталар**! Ҡаиҙалыр үрсетергә тырышалар, ә беҙ бында туҙҙырабыҙ.* Я. Хамматов. *Ярлының ашын бисмилла **ҡорота**.* Мәҡәл.

**ҡороштор I** *ҡ.* 1. Тартыу, йыйырыу (тәндең тиреһен). *Кер һабыны тәндең тиреһен **ҡороштора**.* Һөйләү теленән.

2. Өшөтөп бөршәйтеү, хөжөрәйтеү. *Ҡырҡ градуслы һыуыҡ тәнде **ҡороштора**.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 6 сентябрь.

**ҡороштор II** *ҡ.* Арлы-бирле ялғап ҡороу. *Халыҡ эркелеп, оҙон таҡталарҙан* ***ҡороштороған*** *сәхнә һымаҡ урынға ҡарай ағылды.* И. Насыри.

**ҡорт I** *и.* 1. Оҙонса кәүҙәһе менән борғаланып йәки бер йыйырылып, бер һуҙылып хәрәкәт итә торған умыртҡаһыҙ тереклек эйәһе (йәшелсә, еләк-емештәрҙә тереклек итә торған бөжәк); личинка. *Ағас* ***ҡорто.*** *Ебәк* ***ҡорто.*** *Кәбеҫтә* ***ҡорто.*** *Япраҡ* ***ҡорто.*** ▬ *Алманың аҫылын* ***ҡорт*** *ашай.* Әйтем. *Йомшаҡ ағасты* ***ҡорт*** *баҫа.* Әйтем. *Тымыҡ күлдә* ***ҡорт*** *уйнар.* Мәҡәл.

2. Ҡанатһыҙ һәм күпселек аяҡһыҙ төрлө бөжәктәрҙең дөйөм исеме. *Ярмаға* ***ҡорт*** *төшкән.*

3. Яры ҡанатлылар отрядынан сәскә нектары һәм һеркә йыйып, нектарынан бал һеркәһенән һитә эшләп сығара торған бөжәк; бал ҡорто. *Инә* ***ҡорт. Ҡорт*** *айырыу.* ***Ҡорт*** *сағыу.* ***Ҡорт*** *ҡуныу.* ***Ҡорт*** *һарытыу. Эшсе* ***ҡорт.*** *Әре* ***ҡорт.*** ▬ *Эҙләгән* ***ҡорт*** *бал табыр, эшләгән ир мал табыр.* Әйтем.

**ҡорт II** *и. иҫк.* Бүре. [*Йосоптоң ағалары*:] *Аһ! Ул ерҙә бер яуыз* ***ҡорт*** *бар имеш. Хәҡиҡәт, Йосопто шул* ***ҡорт*** *еймеш.* «Йосоп вә Зөләйха».

**ҡотан I** *и. иҫк.* Күрк, йәм, ҡот. *Атлас кейем кейгән, юрға менгән — әммә илә егет* ***ҡотаны.*** Халыҡ йырынан.

**ҡотан II** *и.* Ситәндән түңәрәкләп үргән ҡуй-һарыҡ аҙбары. ***Ҡотанда*** *ҡуй ҡырылһа, ҡутыр кәзә баш булыр.* Мәҡәл.

**ҡотан III** *и. диал.* Мәскәй. *Көнө-төнө ашай* ***ҡотан,*** *туймай тамағы.* Б. Бикбай.

**ҡотороҡ I** *и.* 1. Аҡылды зәғифләп, ҡоторта торған йоғошло ауырыу. ***Ҡотороҡ*** *йоғоу.* ***Ҡотороҡ*** *менән ауырыу.*

2. *диал.* Ҡотҡо. *Кеше* ***ҡоторогона*** *эйәреү.* ▬ [*Сөнәғәт тураһында Ғилаж*:] *Ул минән бәләкәйҙән сығып китте. Ташбаҡан ауылындағы балаларының* ***ҡоторого*** *менән ҡайтып китте лә, шунан аҙаҡ миндә торманы.* Ж. Кейекбаев.

**котороҡ II** *с.* Ярһыулы, шашҡын; ҡоторонҡо. *Минең күңел иләҫ-миләҫ булып китте. Күңелгә әллә ниндәй **котороҡ** дәрттәр йүгерҙе.* Т. Йәнәби.

**күҙ I** *и.* Баҙлап янып торған утлы күмер; тере күмер. ***Күҙ** төшөрөү. **Күҙгә** әйләнеү.* ▬ [*Мәһипәрүәс:*] *Усаҡта **күҙы** ла шауҙырлап төшкән, бәхеткә. **Күҙ** һалып, самауырымды гөжләтеп ебәрҙем.* К. Кинйәбулатова. ***Күҙҙы** күҙгыма — кулың бешер, уты өҫтөңә төшөр.* Мәҡәл.

**күҙ II** *ҡ.* 1. Шашҡынланыу, көсәйтеү. *Болот сыҡһа, ел **күҙыр;** ямғыр яуһа, ер йыуыр.* Ҡобайырҙан.

2. Ярһыуланыу, ҡыҙыу. *Бәләкәстән генә башланған бәхәс **күҙҙы** ла китте.*

3. Ярһып, боҙолоп көсәйеү, аҙыу (ауырыуға, яраға ҡарата). *Ауырыу **күҙҙы**. Яра **күҙҙы**.*

**күҙағай I** *с.* Бөхтә, еңел кейенергә яратҡан; ҡупшы, фырт. ***Күҙағай** кеше.* ▬ ***Күҙағай** ҡала егеттәрен ҡурҡытам тип, буран үкерһен.* Р. Ниғмәти.

**күҙағай II** *с.* Киң, йомарт күңелле. ***Күҙағай** ҡатын. Ҡулыңда бар — **күҙағай**, ҡулыңда юҡ — ҡомағай.* Мәҡәл.

**күҙаҡ I** *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең орлоҡтарын эсенә йомоп торған оҙонса көп. *Борсаҡ **күҙағы**.* ▬ *Селек ағастары **күҙаҡ** ебәреп ултыра.* С. Ағиш.

**күҙаҡ II** *и. диал.* Уҙаҡ. *Егет һаман алға китә. Был хәл Аҡһаҡ ҡоланың төшөнә инә. Аҡһаҡ ҡола төшөн **күҙаҡтарына** һөйләй.* Әкиәттән.

**күҙғалыш I** *и.* Ҡыҫымға ҡаршы күҙғалған хәрәкәт; бола. *Крәҫтиәндәр **күҙғалышы**. Эшселәр **күҙғалышы**.* ▬ *Россиялағы крәҫтиәндәр **күҙғалышы** һәм уларҙың юлбашсыларының тарихын өйрәнеү менән Пушкин айырыуса ҡыҙыҡһынды.* Ә. Усманов.

**күҙғалыш II** *ҡ.* Күҙғалыу, хәрәкәт итә башлау (күмәк кешегә ҡарата). *Урал егеттәре **күҙғалышып**, мылтыҡ алып, ҡылыс тағып, ... мендек беҙ аттарға.* Ғ. Әмири. *Урындан **күҙғалышҡас**, Назаров эшселәр менән ҡул бирешеп хушлашты.* Н. Мусин.

**күҙра I** *ҡ.* Йомшаҡ ҡына, тоноҡ ҡына итеп тауыш биреү (ҡуй-һарыҡҡа ҡарата). *Ай, тыуған ер, тыуған ер,*

*олатайҙар торған ер; йылҡылары сыңрап, һыйырҙары мөңрәп, ҡуй-һарығы* ***ҡуҙрап****, көтөү-көтөү йөрөгән ер.* «Урал батыр».

**ҡуҙра II** *ҡ.* Ҡуҙ булып яныу; ҡуҙланыу. [*Фәсхи*] *көлдөксәгә* ***ҡуҙрап*** *ятҡан утлы тимер башын күтәреп, тәмәке тоҡандырҙы.* Й. Солтанов.

**ҡуҙы I** *и.* Һарыҡ бәрәсе. *Сәскәләргә күмелеп, күк* ***ҡуҙылар*** *һикереп уйнай киске һалҡында.* Т. Йәнәби.

**ҡуҙы II** *и.* 1. Ҡабыҡтан яһалған ҡул кәрзине. *Бер* ***ҡуҙы*** *еләк.*

2. Ебәк ҡортоноң ҡурсаҡ көбө. *Ҡорттоң* ***ҡуҙыһы****.*

**ҡуй I** *и.* Оса майы яҫтыҡланып торған үҙенә бер төрлө һарыҡ. *Шешәк* ***ҡуй****.* ▬ *Хужа ҡатын таныш-белештәрен тиҙ генә саҡырып, һимеҙ* ***ҡуй*** *һуйып, егет менән ҡыҙҙы ҡушып та ҡуйған.* Әкиәттән. *Иҫәпһеҙҙең* ***ҡуйы*** *теүәл.* Мәҡәл. *Йылҡы — данлыҡ,* ***ҡуй*** *— байлыҡ.* Мәҡәл.

**ҡуй II** *ымл.* Күберәк ҡылымдың юҡлыҡ формаһы менән йәнәш килеп, кире ҡағыуҙы, ҡаршы төшоүҙе, тыйыуҙы белдерә. [*Үмәр*:] *Утҡа һалды бит йөҙө ҡара, биткә ҡара яҡты бит суҫҡа бала. Ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙғын ҡыҙ!* [*Тимерғәле*:] ***Ҡуй****, ҡорҙаш,* ***ҡуй****. Әйтмәгәнең булһын! Ул ни эш: күҙ йәше түгеп, үҙ баланды ҡарғайһың!* Һ. Дәүләтшина.

**ҡуй III** *киҫ. диал.* Бит. [*Үмәр*:] *Алыҫ, тип ни, ат етмәҫлек ер түгел* ***ҡуй****.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡуй IV** *ҡ.* 1. Нимәнелер текә, вертикаль торған хәлдә беркетеү, урынлаштырыу. *Китаптарҙы кәштәгә* ***ҡуйыу****.* ▬ *Беҙҙең генә урам телеграмм, бағанаһын уның кем* ***ҡуйған****.* Халыҡ йырынан.

2. Берәй төрлө эшкә, урынға, вазифаға тәғәйенләү. *Уҡытыусы итеп* ***ҡуйыу****.* ▬ *Яуыз кантондарҙы* ***ҡуя*** *икән Рәсәй генә тигән батшалыҡ.* Халыҡ йырынан.

3. *һөйл.* Берәй ергә, берәйһенә тороу өсөн урынлаштырыу, йәйлаштырыу. *Аҡтарҙың һалдаттары ишле генә ине. Шунлыҡтан уларҙы өй беренсә таратып, йорт һайын фатирға* ***ҡуйҙылар****.* В. Исхаҡов.

4. Билдәле бер торошҡа килтереү, берәй төрлө итеп яйлаштырыу. *Үксәләрҙе бергә ҡуйыу.* — *Ғәйшә бойоғоп, Ҡадир күкрәгенә башын ҡуйҙы.* Ғ. Амантай.

5. Эш-хәрәкәт өсөн беркетеү, урынлаштырыу. *Звонок ҡуйыу. Телефон ҡуйыу.*

6. Яҙып-һыҙып күрһәтеү, күсермәһен яһау. *Билдә ҡуйыу. Нөктә ҡуйыу. Хәреф ҡуйыу.* — *Ахырына ҡуйған хоҙай үҙ тамғаһын.* Ш. Бабич.

7. Нимәгәлер хаҡ, баһа билдәләү. *Баһа ҡуйыу. Хаҡ ҡуйыу.*

8. Ниндәйҙер бер мәсьәләне ҡуҙғатыу, хәл итергә тәҡдим итеү. *Маҡсат ҡуйыу. Мәсьәләне уртаға ҡуйыу. Тауышҡа ҡуйыу. Һорау ҡуйыу. Шарт ҡуйыу.*

9. Берәйһе өсөн берәй төрлө хәл, шарт тыуҙырыу, берәй төрлө хәлгә, торошҡа килтереү. *Ирек ҡуйыу. Рөхсәт ҡуйыу. Ыңғай ҡуйыу. Яй ҡуйыу.* — *Мин, ысынлап та, был урында үҙемде түбән ҡуйҙым.* С. Агиш.

10. Берәй төрлө ашамлыҡ, эсемлек әҙерләү процесының бер өлөшөн башҡарыу. *Аш ҡуйыу. Ҡамыр ҡуйыу. Сәй ҡуйыу.* — *Тайба самауыр ҡуйып йөрөй.* С. Агиш.

11. Ниндәйҙер эш-хәлде дауам иттереү, туҡтатыу, аҙағына еткерергә тырышыу. *Алдына алғанын ҡуймай. Үҙ һүҙен ҡуя белмәй.*

12. Берәй төрлө тамашаны сәхнәгә сығарып күрһәтеү. *Концерт ҡуйыу. Спектакль ҡуйыу.* — *Был йылдарҙа ул* [*Арслан Мөбәрәков*] *Назар Нәжмиҙең «Яҙғы йыр» исемле пьесаһын ҙур уңыш менән сәхнәгә ҡуйҙы.* Ғ. Әхмәтшин.

13. *һөйл.* Мәйетте күмеү, ерләү. *Егет ата-инәһен тәрбиәләп ҡуйғас, тормош хәстәрлектәре күрә башлай.* Әкиәттән.

ҡул I *и.* 1. Кеше кәүҙәһендә яурын башынан бармаҡ остарына тиклемге ике ағза. *Аяғы бар, ҡулы бар, бара торған юлы бар.* Әйтем.

2. Шул ағзаның беләҙектән түбәнге өлөшө, суғы. *Аҡсалының ҡулы уйнар, аҡсаһыҙҙың күҙе уйнар.* Әйтем. *Буйына ҡарама, ҡулына ҡара, буй эшләмәй, ҡул эшләй.* Әйтем. *Ир ҡулынан ҡош туймаç.* Мәҡәл. *Ике ҡулың ни эшләһә, ике иңең шуны күтәрер.* Әйтем. *Күҙ — ҡурҡаҡ,*

*ҡул — батыр.* Әйтем. ***Ҡул*** *һелтәй, балта саба.* Әйтем. ***Ҡулың*** *пак булһа, йөҙөң аҡ булыр.* Әйтем. ***Ҡул ҡулды,*** ***ҡул*** *битте йыуа.* Мәҡәл. ***Ҡулы*** *һыуыҡтың йөрәге ҡыҙыу.* Әйтем. *Сибәрҙең — йөҙө, оҫтаның* ***ҡулы*** *уртаҡ.* Әйтем.

3. Яҡ, тараф, йүнәлеш («уң» йәки «һул» һүҙҙәре менән ҡулланыла). *Тыштан ингәс, уң* ***ҡулда*** *бәләкәс кенә мейес.* Ғ. Дәүләтшин.

4. Кеше хеҙмәтенең символы, шулай уҡ хеҙмәт, кеше эшмәкәрлегә үҙе символ булараҡ ҡулланыла. *Оҫта* ***ҡул.*** ▬ *Ир* ***ҡулы*** *теймәгәнгә, йорт ҡаралтыһы туҙҙы. Ауыл ҡотһоҙланды.* Ә. Моратов.

5. *күсм.* Айырым кешегә хас яҙыу рәүеше, почерк. [*Тимеркәй*:] *Мә, уҡып сыҡ, Димка, ...* ***ҡулын*** *танырһыңмы? Заһиҙа* ***ҡулы*** *бит.* Д. Исламов. [*Хаттың*] *Әбделисламахун остаздан булыуы бик ихтимал. Тик уның* ***ҡулы*** *түгел, ят* ***ҡул.*** «Батыршаның хаты».

6. Кемдеңдер ихтыярында, ҡарамағында булғанды белдереү өсөн ҡулланыла. *Кеше* ***ҡулына*** *ҡалыу. Ят* ***ҡулында*** *булыу.* ▬ *Беҙҙең* ***ҡулда*** *хәҙер ҡеүәтле тракторҙар, комбайндар, автомашиналар бар.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 22 март.

**ҡул II** *и.* Ҡалҡыу ерҙән, тауҙан төшкән һөҙәк ярлы соҡор; үҙәк. *Әхмәҙи ... шул тауҙарҙың уялары,* ***ҡулдары*** *эсенән йыла тартҡаны, унда утын һөйәгәне һәм әрҙәнә ҡырҡҡаны бар.* Ж. Кейекбаев.

**ҡул III** *с.* Яраҡлы, йәтешле, ҡулай. — *Һеҙ Килдебай ҡустының күп хеҙмәтен белмәйһегеҙ әле ... Бик* ***ҡул,*** *бик мәслихәт кеше.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҡун I** *ҡ.* Ҡайҙалыр туҡтап, йоҡлап төн үткәреү; йоҡлап сығыу. ***Ҡуна*** *ҡалыу.* ***Ҡунырға*** *туҡтау.* ▬ *Көн кис булғанға юлсылар бәләкәй генә бер өйҙә туҡтап* ***ҡундылар,*** *ти.* Әкиәттән. *Илгә барған — ике* ***ҡунған.*** Әйтем. *Илгә сыҡҡан — иллене* ***ҡунған.*** Әйтем. *Күсһә —* ***ҡуна*** *белмәгән,* ***ҡунһа*** *— күсә белмәгән йорт ҡәҙерен белмәҫ.* Мәҡәл.

**ҡун II** *ҡ.* 1. Осоп килеп ултырыу. *Ағасҡа* ***ҡуныу.*** ▬ *Сәүкәләр электр сыбығына* ***ҡуныв*** *ял итә лә, йәнә оса.*

«Совет Башҡортостаны», 1959, 5 октябрь. *Ҡоро ҡулға ҡош* ***ҡунмаҫ***. Әйтем. *Яңғыҙ ҡайынға ҡош* ***ҡунмаҫ***. Әйтем.

2. *күсм.* Аҫҡа табан түбәнәйеү, төшөү. *Ҡояш* ***ҡуна*** *тауға ... Кис була.* Ғ. Амантай. *Йылғалар төнөн һөйләшә, болот тауҙарға* ***ҡунғас***. М. Кәрим.

3. Төшөп өҫтөн ҡаплау; ултырыу. *Бәҫ* ***ҡуна***. *Ҡар* ***ҡуна***. *Ҡырау* ***ҡуна***. *Саң* ***ҡуныу***. ▬ *Ҡот ҡойҙороу менән ҡот* ***ҡунмаҫ***. Әйтем.

4. *күсм.* Барып тейеү; һуғылыу, һуғыу. *Иоҙроҡ менән* ***ҡуныу***. ▬ *Ул арала атҡандың береһе лампаға* ***ҡуна***. Ш. Бабич.

**ҡунаҡла I** *ҡ.* Һый-хөрмәт күреү, ҡунаҡ булыу. ***Ҡунаҡлап*** *ятыу.*

**ҡунаҡла II** *ҡ.* 1. Төнәргә менеп ултырыу. ***Ҡунаҡлар*** *өсөн тауыҡтарға арҡыры ҡыуал ҡуйылған, йомортҡа һалыр өсөн оя әҙерләнгән.* Әкиәттән.

2. Тон йоҡлау, ҡуныу. *Мин йылығараҡ, мейес эргәһендәге һәндерәгә менеп* ***ҡунаҡланым***. Д. Исламов.

**ҡуп I** *ҡ.* 1. Йәбешкән йәки урынлашҡан, тоташҡан ерҙән ысҡынып, айырылыу. *Стеналар һыуланған, балсыҡ менән һыланған урындары* ***ҡубып*** *төшкән.* Я. Хамматов. *Ерәнсәкәй атым елә алмай — тояҡтары* ***ҡупҡан***, *әллә ни.* Халыҡ йырынан.

2. Ҡуҙғалып ҡалҡыу, урындан ҡуҙғалыу; тороу. *Австриизар күп булһа ла, беҙ урындан* ***ҡупманыҡ***. Бәйеттән.

3. *күсм.* Дәррәү күтәрелеп, хәрәкәткә килеү; ҡуҙғалыу. *Халыҡ* ***ҡуба***. ▬ *Класс дәррәү урынынан* ***ҡупты***... Ғ. Байбурин.

4. *күсм.* Ҡапыл башланыу. *Ғауға* ***ҡупты***. *Дауыл* ***ҡупты***. *Талаш* ***ҡупты***. *Шау-шыу* ***ҡупты***. ▬ *Китәм, дуҫтым, һуғышҡа, сиктә дауҙар* ***ҡупҡан***, *ти.* Б. Бикбай.

**ҡуп II** *оҡш.* Тышы ҡаты, эсе йомшаҡ нәмәгә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Ҡуп*** *итеп ҡалыу.* ***Ҡуп*** *итеү.*

**ҡур I** *и.* Ҡымыҙ, бал әсеткеһе. *Көбө эргәһенә ҡуйылған ҡатын, бешкәге менән көбө төбөн болғап,* ***ҡурын***

*ҡатыштыра.* Я. Хамматов. *Ҡымыҙ* ***ҡурын*** *ондан яһау ҙа ауыр түгел.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ҡур II** *и.* Ниндәйҙер эш-хәлдән ҡалған әҙемтә; шауҡым. *Ҡыйшыҡ уҡ атҡан менән тура китмәҫ, күңелдән яман һүҙҙең* ***ҡуры*** *китмәҫ.* Аҡмулла. *Мөбәрәк ҡарт йәш-елкенсәк менән гәпләшергә ярата. Шунын* ***ҡуры*** *менән ике-өс көн буйы ҡартлығын онотоп, дөбөрләтеп йөрөп ҡала.* Р. Ғабдрахманов.

**ҡур III** *и.* Яҙғы буръяҡ йылғаның кире яғына ҡуйып балыҡ аулай торған оҙон тотҡалы сүмес ау. ***Ҡур*** *ҡуйыу.* ***Ҡур*** *менән балыҡ тотоу.*

**ҡур IV** *и. иҫк.* Һалым, яһаҡ. ***Ҡур*** *түләү.* ***Ҡур*** *һалыу.*

**ҡур V** *ҡ.* 1. Ҡоролай йәки майға ҡыҙҙырыу. *Борсаҡ* ***ҡурыу.*** *Ит* ***ҡурыу.*** *Картуф* ***ҡурыу.*** *Ҡурҙаҡ* ***ҡурыу.*** *Ҡурмас* ***ҡурыу.*** ▬ *Яңғыҙ кешегә күпме кәрәк? Картуф бешерә, ике-өс йомортҡа һытып* ***ҡура,*** *һөт йәки ҡатыҡ эсә.* Б. Бикбай.

2. *күсм.* Яндырыу, өтөү. *Эҫе ел ... ҡайын япраҡтарын* ***ҡура.*** Я. Хамматов. *Яман ҡатын ир* ***ҡурыр.*** Әйтем.

3. Бөрөштөрөп ҡыҫыу, киптереп бөрөштөрөү. *Тамаҡты* ***ҡурыу.*** ▬ *Аяҡҡа үткән ҡар һыуы бөтә тәнде* ***ҡурып*** *алды.* З. Ғәлимов.

**ҡура I** *и.* 1. Мал-тыуар ояһы; һарай. *Ат* ***ҡураһы.*** *Һыйыр* ***ҡураһы.*** ▬ *Малдар һинең һымаҡ өй эсендә ҡыуыш* ***ҡороп*** *ята алмайҙар, уларға ҡыйыҡлы йылы* ***ҡура*** *кәрәк.* Т. Йәнәби. *Яландарҙа ҡалмаҫ бер йән заты,* ***ҡураларға*** *ҡайтыр бар аттар.* Д. Юлтый.

2. Ишек алды, ихата. *Сыға ир бала* ***ҡураға,*** *имгәкләп тупһа аша.* М. Кәрим.

**ҡура II** *ҡ.* 1. Үтә ныҡ кибеү; ҡороу. *Улар [колхозсылар]* ***ҡурап*** *бөткән бесәнде ямғырға ҡалдырмаҫҡа, бер юлы күбәләп ҡуйырға булдылар.* «Ағиҙел», 1962, № 12.

2. Бик ныҡ кибеп, ҡаҡшау; ҡорғаҡһыу. *Ағас миҫкә* ***ҡурап,*** *таралып төшкән.*

**ҡурай I** *и.* Сатыр сәскәләр ғаиләһенә ҡараған ҡыуыш һабаҡлы эре үлән. *Ҡырлы* ***ҡурай.*** *Таҡыябаш* ***ҡурай.*** ▬ *Ялан ерҙә үҫкән ай бер* ***ҡурай,*** *сәскәләрен елдәр киптер-*

*гән.* Халыҡ йырынан. *Ел өрмәй тороп, **ҡурай** һелкенмәй.* Мәҡәл.

**ҡурай II** *и.* Башҡорт халҡының ҡурай үләненән йәки башҡа эсе көпшәле нәмәләрҙән тишектәр тишеп яһалған тынлы музыка ҡоралы. *Ағас **ҡурай**. Еҙ **ҡурай**. Үлән **ҡурай**.* ▬ *Язар **ҡурайын** алып, тештәрен теле менән еүешләп, еңел генә бер-ике өрөп ебәрҙе. Башты артҡараҡ һалып, күкрәкте киреп уйнай башланы.* Б. Ишемғолов. *Таштуғайҡай һинең ҡамышыңдан сор **ҡурайҙар** яһап тартайым.* Халыҡ йырынан. ***Ҡурай** өсөн тын кәрәк, егет өсөн һын кәрәк.* Әйтем. ***Ҡурай** тартһаң көй була, бүрәнә тартһаң өй була.* Әйтем.

**ҡурпы I** *и.* Сабылған ергә яңынан үҫкән йомшаҡ үлән йәки йәш иген. *Сабылған ерҙәр хәҙер күпереп үҫкән **ҡурпы** менән ҡапланған.* Н. Мусин. *Туры бурыл йөрөй **ҡурпы** утлап, еҙ ҡыңғырау ҡуя сыңғырлап.* Х. Назаров.

**ҡурпы II** *ҡ.* Ҡурпы утлау, ҡурпы ашау. *Март, апрель аҙаҡтарында бөтә сүл йәп-йәшелгә төрөнә. Тауҙарҙа ҡуйҙар **ҡурпып** йөрөй.* К. Кинйәбулатова.

**ҡурсаҡ I** *и.* 1. Кеше һынында яһалған балалар уйынсығы. *Баҙамша бабай Тәзкирәһе Оксанаға **ҡурсаҡ** килтерҙе. **Ҡурсағы** бик елле: күлдәк кейгән, яулыҡ бәйләгән, ысын **ҡурсаҡ**.* М. Кәрим.

2. *күсм.* Кейенеп-яһанып йөрөргә яратҡан еңел тәртипле ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. *Ул [Сания күүек] **ҡурсаҡтан** халыҡҡа ни файҙа? Ни аллаға, ни муллаға!* М. Тажи.

3. *күсм.* Кеше ыңғайына ғына йөрөгән кеше. — *Һин үҙең дә **ҡурсаҡ** инең: ебеңде тарттым — теләгәнсә бейеттем. Хәҙер кәрәгең бөттө.* Б. Бикбай.

**ҡурсаҡ II** *и.* Үҫеш осороноң бер мәлендә ашамай, ҡуҙғалмай көпкә төрөнөп ятҡан бөжәк, көплө ҡорт. *Күбәләк **ҡурсағы**. **Ҡурсаҡҡа** әйләнеү.*

**ҡуш I** *с.* Үҙ-ара береккән йәки берләшкән ике берәмектән торған. ***Ҡуш** ҡайын. **Ҡуш** үркәс.* ▬ *Һыуҙың ғына буйы ай **ҡуш** тирәк, башҡынайын суҡламаҡ кәрәк.* Халыҡ йырынан.

**ҡуш II** *ҡ.* 1. Бер нәмәне икенсеһенә килтереп беректереү; өҫтәү. *Сәиҙе кәнфит* ***ҡушып*** *эсеү.* ▬ *Рәхимә ... бер телем ҡаҙыға бер ҡырҡым ит* ***ҡушып,*** *Мәғфүрәгә бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

2. Бер һанды икенсе һанға өҫтәү. *18-гә 17-не* ***ҡушырға.***

3. Бергә килтереп, үҙ-ара берләштереү. ***Ҡушып*** *тегеү.* ▬ *Ошо төндә улар һүҙ ҡуйышты тормош юлын бергә* ***ҡушырға.*** Ғ. Сәләм.

4. Бергә берләштереп, аралаштырыу. *Сусҡа аҙығына витаминды* ***ҡушалар.***

5. Ашарға йәки имергә ҡуйыу (малды). *Быҙауҙы* ***ҡушыу.*** ▬ *Атты туғарып, саналағы бесәнгә* ***ҡуштыҡ.*** С. Кулибай.

6. Ирле-ҡатынлы итеү; кейәү йәки ҡыҙ ҡуйынына һалыу; ҡауыштырыу. ▬ *Хужа ҡатын таныш-белештәрен тиҙ генә саҡырып, һимеҙ ҡуй һуйып, егет менән ҡыҙҙы* ***ҡушып*** *та ҡуйған.* Әкиәттән.

7. Кемгәләр йәки нәмәгәләр берләштереү. *Атаһы айырымды яу* ***ҡуша,*** *ойөрө айырымды бау* ***ҡуша.*** Мәҡәл.

**ҡуш III** *ҡ.* 1. Ниҙер башҡарырға әмер биреү; бойороу. *Шул саҡта тирмән ишеген асырға* ***ҡуштым.*** Салауат Юлаев. *Эткә* ***ҡушһаң,*** *һөйәк килтерер.* Мәҡәл.

2. Ниҙер башҡарырға ылыҡтырыу. *Йомошҡа* ***ҡушыу.*** *Эшкә* ***ҡушыу.*** ▬ *Дүрт комбайнды арпаға* ***ҡуштылар.*** Ә. Атнабаев. *Мәскәй ... Килтәймәргәндең һеңлеһен баш ҡарарға* ***ҡушҡан.*** Әкиәттән. *Асыу — дошман, аҡыл — дуҫ, асыуыңа аҡыл* ***ҡуш.*** Әйтем.

**ҡыҙ I** *и.* 1. Ҡатын-ҡыҙ енесенән булған бала. *Еткән* ***ҡыҙ.*** *Һылыу* ***ҡыҙ.*** ▬ [*Исхаҡ —Айбулатҡа:*] — *Егет булып йөрөүең ҡороһон.* ***Ҡыҙ*** *ҡарап торғанда ҡул болғай алмағас, һин ниндәй егет инде? Гөлйөҙөм һәр бер күҙләүсегә кәртә аша ҡарап ҡалмай ул.* ***Ҡыҙҙың*** *ҡәҙерен белмәһәң, бик тиҙ эйә табылыр.* Һ. Дәүләтшина. *Атанан тыумай ул булмаҫ, инәнән тыумай* ***ҡыҙ*** *булмаҫ.* Мәҡәл. *Атаһына ҡарап улын ҡос, инәһенә ҡарап* ***ҡыҙын*** *ҡос.* Әйтем. *Боҙ башына боҙ етә,* ***ҡыҙ*** *башына* ***ҡыҙ*** *етә.* Мәҡәл. *Бохар даны менән бүҙ үтер, ата даны менән* ***ҡыҙ*** *үтер.* Мәҡәл. *Ебенә күрә буяуы,* ***ҡыҙына*** *күрә кейәүе.* Әйтем.

*Кейәүгә китәһе* ***ҡыҙҙан*** *бумала ла ҡурҡыр.* Әйтем. ***Ҡыҙ*** *буй етһә күҙгә сөйәл.* Мәҡәл. ***Ҡыҙҙың*** *күҙе ҡыҙылда.* Әйтем. ***Ҡыҙ*** *инәһе ҡырҡ булыр, ҡырҡ беренсеһе сыбыҡ булыр.* Әйтем. ***Ҡыҙлы*** *өйгә ҡырҡ ат бәйләнер.* Әйтем. ***Ҡыҙ*** *намыҫы ҡыл өҫтөндә, ҡулдан төшһә — ил өҫтөндә.* Мәҡәл. *Ун алтыла* ***ҡыҙ*** *— солтан, ун етелә — сулпан, егермелә — гөлбостан, егерме берҙә —суртан.* Мәҡәл.

2. Ата-әсәнең ҡыҙ енесенән булған балаһы. *Гәрәй ир етеп килгән саҡтарҙа, Мисбах ҡарттың өс* ***ҡыҙы*** *ла кейәүгә киткәйне инде. Ҡатыны* ***ҡыҙҙарының*** *башлы-күҙле булыуына шатланып бөтә алманы.* Б. Бикбай.

**ҡыҙ II** *ҡ.* 1. Бик юғары температуралы, эҫе хәлгә килеү. *Мейес* ***ҡыҙа.*** *Тимер* ***ҡыҙа.*** ▬ *Ата-ата уттай* ***ҡыҙа*** *мылтыҡтың көбәктәре.* Халыҡ йырынан.

2. Еүеш көйгә баҫтырылып, эҫеү; яныу.*Бесән* ***ҡыҙа.*** *Иген* ***ҡыҙа.*** ▬ *Күтәремдәрҙә, күбәләрҙә ятҡан ашлыҡ* ***ҡыҙа,*** *үрә башланы.* Б. Бикбай.

3. Хәрәкәттән йылыныу. *Варшаванан сыҡҡанда минең уң аяғым бик ауырта ине, әле* ***ҡыҙып*** *китте, буғай, ауыртмай башланы.* Д. Юлтый.

4. *күсм.* Шаңҡын, ярһыу төҫ алыу, йәнләнеү. *Бәхәс* ***ҡыҙа.*** *Мәжлес* ***ҡыҙа.*** *Уйын* ***ҡыҙа.*** *Ярыш* ***ҡыҙа.***

5. *күсм.* Асыуланып, нәфрәтләнеп ярһыу; ҡотороу, шашыныу. *Ҡәмәр ҡортҡа* ***ҡыҙып*** *китеп, мейес араһынан табағас алып, аҡырып-баҡырып, Ғәләүҙе ҡыуа башланы.* Т. Йәнәби. *Батыр үҙенең* ***ҡыҙа*** *башлауын тоиҙо.* ***Ҡыҙа*** *башлаһа, уның яңаҡ мускулдары һелкенә, ирендәре ҡымтыла һәм ҡулдар йоҙроҡлана башлай торғайны.* И. Ғиззәтуллин.

6. *күсм.* Нимәгәлер эйә булырға теләп йөрәкһенеү, ынтылыу; ымһыныу, ҡыҙышыу. *Ҡаҙаҡтар Исмәғил ҡарттың өйөр-өйөр малына, бисәһенә, килененә* ***ҡыҙған.*** Әкиәттән. *Ҡыҙҙың* ***ҡыҙғаны*** *ҡыҙыл сәкмән.* Мәҡәл.

**ҡыҙыҡ I** *с.* 1. Көлкө китергес, мәрәкә. ***Ҡыҙыҡ*** *ваҡиға.* ***Ҡыҙыҡ*** *хәбәр.* ***Ҡыҙыҡ*** *хәл.* ***Ҡыҙыҡ*** *һүҙ.*

2. Күңел күтәргес; ирмәк. ***Ҡыҙыҡ*** *китап.* ***Ҡыҙыҡ*** *тамаша.* ***Ҡыҙыҡ*** *эш.* ▬ [*Наилә*:] *Әлбиттә, барабыҙ, ул*

*турала һүҙ булғайны бит, ләкин баҡсаға түгел, ә футбол уйынына, бөгөн стадионда* ***ҡыҙыҡ*** *уйын.* Н. Нәжми.

4. Ғәҙәттән тыш, аптырарлыҡ; ғәжәп, ***Ҡыҙыҡ*** *кеше.* ▬ [*Дилә*:] *Әсәй, Ныязғол олатайым әллә ниндәй бер* ***ҡыҙыҡ*** *машина алып ҡайтып ултыртҡан.* Һ. Дәүләтшина. *Өс көн үткән, биш көн үткән, ете көн үткән, бай һаман бер ҙә эш ҡушмай, ти.* ***Ҡыҙыҡ*** *бай икән был, тип уйлаған, ти, Оморҙаҡ.* Экиәттән.

**ҡыҙыҡ II** *иш.* Һөйләүсенең ғәжәпләнеүен белдерә. — ***Ҡыҙыҡ,*** *ниңә һеҙ минең менән ҡыҙыҡһынаһығыҙ?* С. Ағиш.

**ҡыҙыҡ III** *ҡ.* 1. Күңел биреү, әүрәү; мауығыу. ***Ҡыҙығып*** *тыңлау.* ▬ *Үткер йәштәрҙең ҡайһы берҙәре бындай прокламацияларҙы тотош ятлап алып, уны* ***ҡыҙығып*** *тыңлаған иптәштәренә лә, ололарға ла һөйләйҙәр ине.* Һ. Дәүләтшина.

2. Күңел биреп, һоҡланып, йөрәкһеү. — *Тансыға бик* ***ҡыҙығып*** *ултырам да, мөмкин түгел бит әле.* Д. Юлтый. *Был ҡыҙ егеттең батырлығына, матурлығына бик* ***ҡыҙыға.*** Экиәттән.

3. Нимәнелер үҙеңдә булдырыу йәки нимәгәләр эйә булыу теләге уяныу. *Аҡсаға* ***ҡыҙығыу.*** *Түрәлеккә* ***ҡыҙығыу.*** ▬ *Донъя малдарына* ***ҡыҙыҡманым, ҡыҙыҡманым*** *еңел табышҡа.* А. Игебаев. *Иҫәр* ***ҡыҙығыр*** *матурға, аҡыллы — батырға.* Әйтем. *Ҡыҙ тип* ***ҡыҙыҡма,*** *ҡәйнә ҡыҙҙан ярала.* Әйтем.

**ҡый I** *и.* 1. Ниҙеңдер таҙалығын алған кәрәкһеҙ йәки ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә: сүп-сар. *Иҙән* ***ҡыйы.*** *Ярманың* ***ҡыйын*** *таҙартыу.* ▬ *Ҡыҙ китте —* ***ҡый*** *китте.* Мәҡәл.

2. Кәртә-һарайҙағы мал тиҙәге. ***Ҡый*** *түгеү.* ▬ *Мал* ***ҡыйы*** *менән, ҡунаҡ һыйы менән.* Әйтем.

3. Баҫыуҙағы, иген араһындағы төрлө кәрәкһеҙ үҫемлек, сүп. *Картуфты* ***ҡый*** *баҫҡан.* ▬ [*Ғәйшә*:] *Бойҙайҙың* ***ҡыйы*** *булһа, уташтырырбыҙ.* Т. Йәнәби.

**ҡый II** *киҫ. диал.* Бит. *Саҡырҙым* ***ҡый,*** *килмәнең* ***ҡый,*** *йәндәремде* ***ҡыйҙың ҡый.*** Халыҡ йырынан.

**ҡый III** *ҡ.* 1. Үткер нәмә менән уя ҡырҡыу, өҙә ҡырҡыу. ***Ҡыйып алыу. Ҡыйып төшөрөү.*** — *Бер мәләк күкте тишеп алды уйып, түп-түңәрәк дүңгәләк төҫлө* ***ҡыйып.*** Ш. Бабич. *Күк көмбәҙе күм-күк быяла, ниндәй оҫта уны* ***ҡыя*** *ала!* Р. Ғарипов. *Батша булһа ла Бүгәсәү ... баяр башын* ***ҡыя*** *икән, һанат башын* ***ҡыя*** *икән.* Салауат Юлаев.

2. *күсм.* Үлтереп, ҡырып, юҡ итеү. *Дошманды* ***ҡыйыу.*** — *Рәшит Аҙнабаев өс фашисты* ***ҡыйған.*** С. Әлибаев. *Булаттан үткер яу* ***ҡыйыр.*** Ҡобайырҙан.

3. Шыҡыйып килеп тотоу; тибеү. *Ыласын да оса, ҡошто* ***ҡыя,*** *ҡанаттары талғас, бер төшә.* Салауат Юлаев.

4. *күсм.* Арҡыры килеп, алдан үтеү; киҫеү, ҡырҡыу. *Берәү выжт итеп алдымды* ***ҡыйып*** *сыҡты.* В. Нафиҡов. *Юлды* ***ҡыйып*** *үткән ҡоралайға ауыҙ асып ҡалам.* М. Хәй.

5. *күсм.* Иҫәпкә алмау, кире ҡағыу. *Атаһы Фатиманың үтенесен* ***ҡыя*** *алмай, ел арба эшләтте, ти.* Әкиәттән.

**ҡый IV** *ҡ.* Батырсылыҡ, баҙнатсылыҡ итеү. ***Ҡыймай*** *йөрөү.* ***Ҡыя*** *алмай. Һорарға* ***ҡыймау.*** *Әйтергә* ***ҡыймау.*** — *Ос һин дә, минең йырым, бөркөт* ***ҡыйып*** *менмәҫ ергә.* Ғ. Әмири.

**ҡыйғыр I** *с.* 1. Ҡыйып, ҡырҡып барған, үткер. ***Ҡыйғыр*** *ҡылыс.* ***Ҡыйғыр*** *бәке.*

2. *күсм.* Етеҙ, сос. *Ыласындан да бейек оса торған ҡош батшаһы* ***ҡыйғыр*** *бөркөт бар.* Салауат Юлаев.

**ҡыйғыр II** *и.* Ыласын һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған түбәһе менән арҡаһы күкшел, тамаҡ аҫты менән муйыны аҡ, түше менән ҡорһағы арҡырылай һыҙыҡ-һыҙыҡ һор сыбар төҫлө булған түңәрәгерәк ҡыҫҡа ҡанатлы, оҙон күрәнһыу ҡойроҡло, күгәрсендән бәләкәйерәк йыртҡыс урман ҡошо. *Була ҡоштар араһында үткер, хәйләкәр* ***ҡыйғыр.*** *Ваҡ ҡош күрһә күҙ ҡырыйында, уға һис бирмәй тынғы.* С. Кулибай. *Сатаҡ мөгөҙ боланы, ыласын,* ***ҡыйғыр*** *бөркөтлө Урал тигән илем бар.* Ҡобайырҙан.

**ҡыйралыш I** *и.* Яу, һөжүм һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән һәләкәт. *Ошо тирәлә аҙна-ун көн элек кенә үлемесле* ***ҡыйралыштар*** *булған.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҡыйралыш II** *ҡ.* Пыр туҙыу, зыҡ ҡубыу. *Беҙҙең ... **ҡыйралышып** уйнап йөрөгән сағыбыҙ.* Х. Назаров.

**ҡыйыҡ I** *с.* 1. Ҡыя йүнәлешле. *Эре ҡайын араһында ... ҡояштың һуңғы **ҡыйыҡ** нурҙары күренде.* Я. Хамматов.

2. Ҡыя ҡырҡылған мөйөшлө. ***Ҡыйыҡ** һалма. **Ҡыйыҡ** яулыҡ.* ▬ *Өй түбәһе **ҡыйыҡ** таҡта, баҫа алмаиҙыр күгәрсен.* Халыҡ йырынан. ***Ҡыйыҡ** булһа ла өй булһын, ҡарт булһа ла ир булһын.* Әйтем.

3. Бер яҡҡа ҡырын; ҡыйыш. ***Ҡыйыҡ** ауыҙ.* ▬ *Урҙым ураҡ, ҡуиҙым ҙурат, ҙуратым **ҡыйығыраҡ**.* Халыҡ йырынан. *Уйы **ҡыйыҡтың** уғы **ҡыйыҡ**.* Әйтем.

**ҡыйыҡ II** *и.* Йорт-ҡаралтының ян-яҡҡа һарҡыулап эшләнгән түбә ябыуы. *Өй **ҡыйығы**.* ▬ ***Ҡыйыҡ** ситенән ағып төшә торған һыуҙарҙы ебәрмәҫ өсөн ҡалай ҡубағалар ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҡыйыҡса I** *с.* Дүрткел аҡлы ситсаға сәскә төшөрөп, ҡулдан эшләнгән яулыҡ. ***Ҡыйыҡса** ташлап, таҫтар бәйләр йәшкә етмәһә лә, бите нужа менән баҫылған күҙҙәре уны [Ғәззә әбеиҙе] ҡарт күрһәтә.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡыйыҡса II** *и. диал.* Ҡош теле. ***Ҡыйыҡса** бешереү.*

**ҡыйыш I** *с.* 1. Тура йүнәлешкә, төҙ рәүешкә ярашһыҙ; кәкре, салыш, ауыш. ***Ҡыйыш** мөрйә.* ▬ ***Ҡыйыш** ситән, уны көрттәр күмгән.* Р. Ниғмәти. *Ауыҙың **ҡыйыш** булһа, көҙгөгә үпкәләмә.* Әйтем. ***Ҡыйыш** ултырһаң да тура һөйлә.* Әйтем.

2. *күсм.* Дөрөҫлөккә ярашһыҙ; яңылыш. *Тормоштағы **ҡыйыш** юлдарҙы йүнәтеп, тура бер эҙгә һалып ебәрергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**ҡыйыш II** *ҡ.* 1. Үткер ҡорал менән ҡара-ҡаршы һуғышыу. *Бикбай менән Ҡуйсар ҡылыс менән **ҡыйышҡан**...* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

2. *күсм.* Үҙ-ара тартҡылашып, көрәшеп, еңешеү. *Янып ғауғалашып, кәрәк саҡта **ҡыйыштым**, талаштым.* Й. Солтанов.

3. *күсм.* Ниҙер эшләргә көсөргәнеп тырышыу; ныҡышыу. *Аҙыҡ етерлек ... әлегә төҙөлөш тип **ҡыйышабыҙ**?* Р. Низамов.

**ҡыл I** *и.* 1. Аттың ялы, ҡойрогондағы сәсе. *Ат **ҡылы**.* ▬ *Ана бер ерҙә тире бесеп, ат **ҡылы** менән тегеп ултыралар.* Ш. Шәһәр. [*Толпар*:] *Өс бөртөк **ҡылымды** ал да үҙемде ебәр. Кәрәк саҡта шуны өтөп, мине саҡырырһың.* Әкиәттән. ***Ҡылды** ҡырҡҡа ярыу.* Әйтем. *Ҡыҙ намыҫы **ҡыл** өҫтөндә, **ҡылдан** төшһә — юл өҫтөндә.* Мәҡәл.

2. Музыка ҡоралының сиртә торған ебе. *Думбыра **ҡылы**. Скрипка **ҡылы**.* ▬ *Бабич ... мандолинаның ҡайһылыр **ҡылдарын** көйләп алғас, тотош сыңғыратып бер нисә тапҡыр сиртеп ҡараны ла уйнарға кереште.* С. Ҡудаш.

**ҡыл II** *ҡ.* 1. Ниҙелер ғәмәлгә атҡарыу; эшләү. *Хыянат **ҡылыу**.* ▬ *Камил уның* [*Зинүрәнең*] *һылыулығына хайран ҡалып, ни генә әйтһәң дә килешмәҫ, ни генә **ҡылһаң** да оҡшамаҫ, тип ҡурҡып тик ултыра ине.* Ә. Вәли. *Ваҡыт еткәс кеше үҙе аңлар. **Ҡыл** яҡшылыҡ, әммә уға үкенмә һин!* Ф. Ғүмәров. *Яҡшылыҡ **ҡылған** аш ейгән, яманлыҡ **ҡылған** таш ейгән.* Әйтем.

2. Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында исемгә ҡушылып, шуның мәғәнәһенә ярашлы ҡылым яһай. *Һин дә инде һөнәргә ынтыл, хәрәкәт **ҡыл**, талпынып һөнәр өсөн бындай саҡта!* Аҡмулла. *Әҙәм балалары тоғролоҡто дәғүә **ҡыла**.* М. Ғафури. *Һеҙҙән бүтән был ерҙә рәхим **ҡылыр** кешем юҡ.* Бәйеттән.

**ҡылау I** *и.* Һыуыҡта ағасҡа һ. б. ҡунған ҡырау; бәҫ. *Кисә генә әле томан арҡаһында ҡылауланған ағастар буран сапҡынынан **ҡылауҙарын** һелкеп, ергә ауната.* Т. Хәйбуллин. *Ҡараңғы төн, ҡышҡы сасҡау һыуыҡ, ҡуйы урман **ҡылау** аҫтында.* Б. Вәлит.

**ҡылау II** *и.* Күҙзе ҡаплап һуҡырайтҡан шекәрә; аҡ. ***Ҡылау** төшөү.* ▬ *Ул* [*Серов*] *күҙҙең **ҡылауын** киҫеп ебәрҙе.* М. Хәйҙәров.

**ҡылау III** *и.* Йәш малдың теленә сығып, имергә ҡамасаулап, эсен китәргән сабыртҡы. ***Ҡылау** булыу.*

**ҡылыс I** *и.* Бик оҙон һоноҡ бысаҡ рәүешендәге үткер һуғыш ҡоралы. *Булат **ҡылыс**.* ▬ ***Ҡылыс** күтәрһәң, еңелеүҙе онот.* М. Хәй. *Ҡындан алып алмас **ҡылысымды***

*Урал ташҡайына ҡайраным.* Халыҡ йырынан. ***Ҡылыс** яраһы төҙәлер, тел яраһы төҙәлмәҫ.* Әйтем.

**ҡылыс II** *и. туҡ.* Буйлыҡҡа үткәрелгән арҡауҙы тартып тығыҙлай торған тешле-тешле ҡорал. *Етеле **ҡылыс**. Тугыҙлы **ҡылыс**.*

**ҡылыс III** *и.* Һауыт-һабаның ике яҡ ситенән эләктерелгән ярым дуға рәүешендәге тотҡа. [*Фатима*] *һыу килтергәс, күнәк **ҡылысын**, тауышы сыҡмаһын тип, әкрен генә ысҡындыра.* Ж. Кейекбаев.

**ҡылыс IV** *и.* Ҡаҙандың ситe. *Ҡаҙан **ҡылысына** бысаҡ яныу.* ▬ *Ҡаҙандың **ҡылысынан** итеп алҡындыра һалынған ит эргәһендә йәш бисә Зәлифә һалма һала.* Т. Хәйбуллин.

**ҡымыҙлыҡ I** *и.* Ҡымыҙ яһай торған урын. ***Ҡымыҙлыҡта** эшләү.*

**ҡымыҙлыҡ II** *и.* Ваҡ ҡына өлпө сәскәле, тал япраҡлы, быуынтыҡ-быуынтыҡ һабаҡлы әскелтем үлән. *Һөрөлгән йомшаҡ ер өҫтөндә быуынлы-быуынлы булып, йыуан **ҡымыҙлыҡтар** үҫә.* З. Ғәлимов.

**ҡын I** *и.* Йәрәхәтләнеүҙән, боҙолоуҙан һаҡлап йөрөтөү өсөн эшләнгән ҡорал һауыты; футляр. *Балта **ҡыны**. Бысаҡ **ҡыны**. Ҡылыс **ҡыны**. Хәнйәр **ҡыны**. **Ҡынға** һалыу.* ▬ *Абдулла ахун пистолетын **ҡындан** ала, атам, тип.* Халыҡ йырынан. *Талип алып **ҡындан** ҡурайын, ишеттерә уйнап уларға.* Б. Вәлит.

**ҡын II** *ҡ. иҫк.* Алдан хәстәрлек күрен әҙерләнеү. *Ир Бабсаҡ Йәмиләне алып ҡайтҡан, уйын-көлкө, тамашаға **ҡынып** ҡайтҡан.* «Бабсаҡ менән Күҫәк». *Ҡаты ҡышҡа **ҡыныу** кәрәк, буръяҡ һыуға тоноу кәрәк.* Мәҡәл.

**ҡына I** [*гәр.*] *и.* 1. Сит-сите саҡ ҡына киртләсләнеп торған оҙонсараҡ япраҡлы, быуынтыҡ-быуынтыҡ итләс ҡыҙыл һабаҡлы ҡыҙыл сәскәле бүлмә гөлө. *Ҡышлау **ҡынам** бер ни белмәй сәскәләнә көн һайын.* Ә. Вахитова.

2. Үҫемлектән алынған сәс, тырнаҡ буяуы. *Сәсте **ҡынаға** буяу.* ▬ *Туй үткәс, **ҡына** яҡмаиҙар.* Мәҡәл.

**ҡына II (кенә)** *киҫ.* 1. Һәр торлө һүҙҙең мәғәнәһен айырым алып сиклэй. *Орошҡас **ҡына** тыйылыу.* ▬ *Кеҫәлә көнбағыш **ҡына** ҡалды.* Т. Йәнәби.

2. Һүҙҙең мәғәнәһен сикләп, әҙһетеү, кәмһетеү төҫмөрө бирә. *Бер айлыҡ* ***ҡына*** *аҙыҡ. Бер минут* ***ҡына*** *ваҡыт.* ▬ *Ул һөйләшә лә белмәй. Ҡурсаҡ* ***ҡына*** *бит ул.* Ғ. Ғүмәр.

3. Һөйләм, хәбәр эсендә айырым һүҙгә баҫым яһау өсөн ҡулланыла. *Һөтө гел ҡаймаҡ* ***ҡына.***

4. Һүҙҙең мәғәнәһенә баҫым яһай. *Ваҡ* ***ҡына*** *ҡом. Ҡыҙыҡ* ***ҡына*** *китап. Юҡ* ***ҡына*** *йомош.* ▬ *Фәхри байтаҡ* ***ҡына*** *уйланып ултырҙы.* Б. Бикбай. *Йомшаҡ* ***ҡына*** *һөйөп, биттән һыйпап, аҡрын ғына иҫә яҙғы ел.* Х. Ҡунаҡбай.

5. Эмоциональ һөйләмдәге алмаш, рәүеш һүҙҙәрҙең мәғәнәһен көсәйтә. *Ашыҡ-бошоҡ* ***ҡына*** *эшләү. Барлыҡ* ***ҡына*** *аҡсамды бирҙем. Тулыр-тулмаҫ* ***ҡына*** *булды.*

6. Эш-хәрәкәттең процесын көсәйтә. *Барып* ***ҡына*** *ҡара.*

7. Зат, килеш ялғауҙары менән килгәндә иркәләү йәки кесерәйтеү, йылылыҡ мәғәнәһен бирә. *Ҡаш* ***ҡынаһы*** *ниндәй матур.* ▬ *Ат* ***ҡынайым*** *бара юл менән.* Халыҡ йырынан.

**ҡыңғыр I** *р. диал.* Ҡырын. *Ҙур ҡапҡасы* ***ҡыңғыр*** *ята, сәйнүк уны дыңғырлата.* Р. Басимов. *Ҡырыҫланған эт* ***ҡыңғыр*** *йүгерер.* Мәҡәл.

**ҡыңғыр II** *оҡш.* Ҡыуышланып торған ҡалын тимергә һ. б. һуғып алғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; дыңғыр. *Ҡыңғырау* ***ҡыңғыр*** *итә.*

**ҡыр I** *и.* 1. (Урмандан, ауыл һәм ҡала ултырған ерҙән айырмалы булараҡ) урманһыҙ тигеҙлек, ҙур тигеҙ асыҡ майҙан. *Асыҡ* ***ҡыр.*** ▬ *Төштәремдә һеҙҙе гел күрәм, минең тыуған* ***ҡырҙарым,*** *балдай татлы һыуҙарым.* Салауат Юлаев. *Сәғиҙә балаларҙы* ***ҡырға*** *алып сыҡты.* М. Тажи. *Ҡояш яҡтыһына тартылғандай, үтеп урман, тауҙар* ***ҡыр,*** *һыуҙар баш ҡалама ҡунаҡ булып килгән донъялағы бөтә ырыуҙар.* Ш. Бикҡол. *Илдә йөрөгән ил таныр,* ***ҡырҙа*** *йөрөгән ер таныр.* Әйтем. *Күлдә йөҙгән аҡ өйрәк* ***ҡыр*** *ҡәҙерен белмәҫ.* Әйтем. *Ҡулда ҡулдан ейгән ат* ***ҡырҙа*** *һинән тоттормаҫ.* Мәҡәл.

2. Иген игеү өсөн эшкәртелә торған ер майҙаны; ашлыҡ үҫтерелә торған майҙан; баҫыу. *Боиҙай* ***ҡыры.*** *Колхоз*

**ҡыры.** — *Мең-мең тракторҙар һөрөп йөрөй һинең **ҡырыңда.*** Ғ. Сәләм. *Эш өҫтө бына бөгөн дә, халыҡ **ҡырҙа** ураҡ ура.* Н. Нәжми.

**ҡыр II** *и.* Ниҙең дә булһа сите, ситке өлөшө. *Күл **ҡыры**. Өй **ҡыры**. Өҫтәл **ҡыры**. Урман **ҡыры**.*

**ҡыр III** *ҡ.* 1. Үткер нәмәнең йөҙө менән ышҡып, ниҙеңдер өҫкө ҡатламын алыу. *Иҙән һап-һары итеп ҡасар менән **ҡырып** йыуылған.* Я. Хамматов.

2. Тешле йәки үткер ҡорал менән ышҡып ваҡлау. *Алма **ҡырыу**. Кишер **ҡырыу**. Ҡорот **ҡырыу**.*

3. Үткер йәки ҡырлы нәмә менән ышҡып-ышҡып таҙартыу. *Бригадир һыртлы менән ҡағылған һыныҡ ураҡҡа табандарын тырышып **ҡырҙы**, өҫ-башын ҡаҡты.* Б. Бикбай. *Яҙыуҙы **ҡырып** торғанда ғына следователь барып ингән.* С. Агиш.

4. Үткер бәке менән сәс, һаҡалды алыу. *Сәсте **ҡырыу**.* — *Килдебай ... һаҡалын эйәк аҫтында ғына ҡалдырып **ҡырған**.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҡыр IV** *ҡ.* 1. Күпләп үлтереү, юҡ итеү; бөтөрөү. *Дошман яуын **ҡырыу**. Малды **ҡырыу**. **Ҡырып** һалыу.* — *Элек сәсәк ауырыуы кешене салғы менән сапҡан кеүек **ҡыра** торған булған.* Ш. Янбаев.

2. Бәреп ватыу, ватып киҫәктәргә әйләндереү. *Һауыт-һабаны **ҡырыу**.*

3. *күсм.* Боҙоу, насарландырыу (кәйефте). *Кәйефте **ҡырыу**.*

4. *күсм.* Ниндәй ҙә булһа бер эш башҡарыу, эш эшләү. *Тик тормаған эш **ҡырыр**, тик ултырған ҡотолор.* Әйтем.

**ҡыра I** *и.* 1. Тау һыртының өҫкө ҡыры; ҡырлас. ***Ҡыра** буйлап барыу. Тау **ҡыраһы**.*

2. Буйҙан-буй теҙеп өйөлгән бесән йәки һалам күтәремдәре. ***Ҡыра** яһау.*

**ҡыра II** *р. диал.* Шыпа, бөтөнләй. ***Ҡыра** эшкә ярамай.*

**ҡырғы I** *и.* Берәй нәмәне ҡыра торған ҡорал; ҡырғыс. *Ағас **ҡырғы**. Тимер **ҡырғы**.*

**ҡырғы II** *и.* Ҡырҙан килгән, сит, ят кеше. ▬ ***Ҡырғы** менән ҡолан аулама.* Мәҡәл. ***Ҡырғының** аты үҙғансы, күршенең тайы уҙһын.* Әйтем.

**ҡырҡ I** *төп h.* 1. Кем йәки нимәнеңдер 40-ҡа тиң иҫәбе. ***Ҡырҡ** кеше. **Ҡырҡ** көн. **Ҡырҡ** һум.* ▬ *Был байҙың **ҡырҡ** биш йылҡыһы булған.* Әкиәттән. *Ҡырын эш **ҡырҡ** йылдан һуң да беленер.* Мәҡәл.

2. Һан һәм күләмдең юғары дәрәжәһен белдереү өсөн ҡулланыла; бик күп. ***Ҡырҡ** төрлө һөйләү. **Ҡырҡ** һүҙгә етеү. **Ҡырҡ** ҡорау быяла.*

**ҡырҡ II** *ҡ.* 1. Ниҙе лә булһа киҫеү. *Ағас **ҡырҡыу**. Аяҡты **ҡырҡыу**. Бысаҡ менән **ҡырҡыу**. Туҡмас **ҡырҡыу**. Утын **ҡырҡыу**.* ▬ *Емеш шаҡмаҡ-шаҡмаҡ итеп һалма **ҡырҡырға** кереште.* З. Биишева. *Айбулат ҡарт ғүмер буйы ерек **ҡырҡҡан** да күмер үртәгән.* Әкиәттән. *Ағас **ҡырҡһаң**, оҙон **ҡырҡ**; **ҡырҡа-ҡырҡа** ҡыҫҡарыр; тимер **ҡырҡһаң**, ҡыҫҡа **ҡырҡ**; һуға-һуға оҙайыр.* Әйтем. *Иәтим бала үҙ кендеген үҙе **ҡырҡыр**.* Мәҡәл.

2. Һарыҡ, ҡуй һ. б. хайуандарҙың ҡайсы йәки машина менән йөнөн алыу. *Һарыҡ **ҡырҡыу**.*

3. *күсм.* Кимереп, йырып ашау. *Быйманы көйә **ҡырҡа**. Китапты сысҡан **ҡырҡҡан**.*

4. *күсм.* Әсеттереп, яндырып ауырттырыу. *Битте ел **ҡырҡа**.*

**ҡырла I** *ҡ.* Сит-ситтән юнып, ҡыр яһау. *Дүрт **ҡырлап** юныу.*

**ҡырла II** ҡ. 1. Ниҙеңдер ситенән, ҡырынан буйлау. *Тау **ҡырлап** ҡайтыу.* ▬ *Һәүбән яр **ҡырлап** ҡына шыуышып барып ҡараһа, бер ҡыҙ сәс тарап ултыра, ти.* «Аҡбуҙат».

2. *күсм.* Уранғылап һағалау; тирәләү. [*Сафуан:*] *Мин һиҙәм, Тайфур, һин дә Асияны **ҡырлайһың**. Ләкин һин Асия менән минең араға инмә инде.* Ҡ. Даян.

**ҡырлас I** *с.* Ҡырланып торған; ҡырлы. ***Ҡырлас** ҡая. **Ҡырлас** танау. **Ҡырлас** тау.* ▬ *Һәр ағасың, ташың ҡәрҙәш миңә, Уралҡайым, **ҡырлас** үргенәм.* М. Уразаев.

**ҡырлас II** *и.* Тауҙың ҡырлы һырт буйы. *Тау **ҡырласы**.* ▬ *Бынау **ҡырлас** буйлап үттеме икән урман **ҡырҡа** йөрөгән һуҡмаҡтар?* М.Тажи.

**ҡырлыҡ I** *и.* Игенде елгәргәндә төшкән ҡый. [*Әфтәх*:] *Беҙ ҙә байҙың һолоһон, көрпәһен, **ҡырлығын** урлап, шуны үҙ аттарына ашата торғайныҡ.* С. Агиш.

**ҡырлыҡ II** *и.* Баштарын уртаға, төйҙәләрен дүрт яҡ ситкә ҡуйып һалынған көлтә өйөмө. ***Ҡырлыҡҡа** һалыу.* ▬ *Хәлле халыҡ* [*ашлығын*] *урып өлгөргән, **ҡырлыҡ**, ҙурат һалған.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ҡырма I** *с.* Ҡырып яһалған. ***Ҡырма** табаҡ.*

**ҡырма II** *с.* Йәнлек тиреһе менән ситләнгән; ҡырпыулы. ***Ҡырма** кәпәс.* ▬ [*Муллаян*] *башына ҡырылып бөткән **ҡырма** бүрек, аяғына ситек-ҡата кейгән.* Б. Бикбай.

**ҡырма III** *с.* Өс ҡырлы (уҡ башағына ҡарата). *Ҡарабай ғәйрәтләнеп, **ҡырма** башаҡлы уғын янына ҡуя ла, керешен тарта.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҡырма IV** *и. һөйл.* Трахома. ***Ҡырма** менән ауырыу.*

**ҡырсын I** *и.* 1. Һыу буйындағы шымарып бөткән ваҡ таш. *Юлға **ҡырсын** түшәү.*

2. Шул таштар менән ҡапланған урын. ***Ҡырсында**, ҡомда хәлең бөткәнсә ҡыҙынаһың да йүгереп барып һыуға һикерәһең.* З. Биишева. *Ҡыҙыл ғына буйы ҡыҙыл **ҡырсын**, ҡыҙыл **ҡырсын** буйлап йүгерҙем.* Халыҡ йырынан.

**ҡырсын II** *ҡ.* Берәй эш ҡылырға ҡыҙышыу. *Китергә **ҡырсынып** тороу.* ▬ *Солтанғәле ҡапыл һикереп торҙо ла таш менән тегенең башына һуҡты. Уны туҡмарға **ҡырсынып** торған малайҙар ян-яҡҡа ҡасты.* Я. Хамматов.

**ҡырын I** *р.* 1. Бер яҡҡа ауыш, иңкеү итеп. ***Ҡырын** һалыу. **Ҡырын** ултырыу. Тәмәкене **ҡырын** тешләү.* ▬ *Булат* [*көҙгөнө*] *өйгә индереп, түр стенаға **ҡырын** һөйәп ҡуйған.* Б. Бикбай. *Иҙеү асыҡ. Ҡара бүркен һалып алған **ҡырыныраҡ**.* М. Кәрим. *Ҡуҙы яурын, ҡорос башаҡ, бәлдәгәндә тайшанып, **ҡырын** китһәң, һиңә хурлыҡ.* Ҡобайырҙан. ***Ҡырын** ятҡан — ашһыҙ ҡалыр, эшләгән — көрәп алыр.* Әйтем.

2. *күсм.* Дөрөҫ йүнәлештән, тейешле тәртиптән тайпылышлы итеп; яраҡһыҙ, насар итеп. ***Ҡырын** эшләү.* ▬

[*Фәтхиә — Һәжәргә*:] *Ғүмереӊ буйы* ***ҡырын*** *йәшәгәнһеӊ, улыӊдыӊ башын да шунда ҡайыраһыӊ.* Ш. Янбаев.

3. *күсм.* Кәрәкле яйға, тейешле ыӊғайға килешле түгел. *Донъя Зәйнәпкә гел* ***ҡырын*** *килеп, бер ҙәғасыҡ йөҙ күрһәтмәгәс, уныӊ күӊеле ҡайҙа булһа ла риза булырға ғына тора ине.* М. Ғафури.

**ҡырын II** *с.* 1. Бер яҡҡа ауыш, иӊкеү. ***Ҡырын*** *ер.* ▬ *Тау текә. Юл* ***ҡырын*** *... төрлө хәл була.* З. Биишева.

2. Төп йүнәлештән, оло юлдан тайпылышлы; сит. *Ауыл* ***ҡырын*** *яҡта, тауҙар, урмандар араһында ята.*

3. *күсм.* Дөрөҫ йүнәлештән, тейешле тәртиптән тайпылышлы; яраҡһыҙ, насар. ***Ҡырын*** *һүҙ.* ▬ ***Ҡырын*** *эш ҡырҡ йылдан һуӊ да беленә.* Әйтем.

4. *күсм.* Кәрәкле яйға, тейешле ыӊғайға килешһеҙ, кире. ***Ҡырын*** *кеше.*

**ҡырын III** *ҡ.* Һаҡал, мыйыҡты ҡырыу. *Ул* [*агроном*] *әле генә* ***ҡырынған*** *булырға тейеш: бите саф, одеколон еҫе аӊҡып тора.* Ә. Вәли. [*Камил*:] *Юл ыӊғайында һаҡалды ҡырҙырып булһа ла сығырбыҙ инде.* [*Айҙар*:] *Ә һин бында ғына* ***ҡырын.*** Н. Нәжми.

**ҡыҫыҡ I** *с.* Ябылыр-ябылмаҫ, асылыр-асылмаҫ булып ҡыҫылып торған. ***Ҡыҫыҡ*** *ишек.* ***Ҡыҫыҡ*** *күҙ.*

**ҡыҫыҡ II** *и.* Ике тау араһы. *Тау* ***ҡыҫығы.*** *Юл* ***ҡыҫыҡтан*** *үтә.* ▬ *Мөһабәт тауҙары, хәтәр* ***ҡыҫыҡтары,*** *серле мәмерйәләре менән тылсымлы әкиәт булып күӊелгә һеӊеп ҡалған ул ерҙәр. З. Биишева.*

**ҡыу I** *с.* Ултырған көйө ҡороған, кипкән. ***Ҡыу*** *ботаҡ.* ***Ҡыу*** *үлән.* ▬ *— Ҡуй, еӊгә, Айбикә еӊгәмдеӊ килеүенә һоҡланып, күҙ тейгеҙеп ҡуйырһыӊ,* ***ҡыу*** *сүп һындырып ҡына һөйләш, — тип көлдө* [*Алмаҡай*]. Һ. Дәүләтшина. *Тәбиғәттә шундай һайланыш бар: бүҙәнәгә тартай иш булмаҫ; ялҡау менән бергә эш уӊмаҫ;* ***ҡыу*** *ботаҡҡа, беләм, ҡош ҡунмаҫ.* В. Ишмурзин. *Кеше ... һарғайған* ***ҡыу*** *кесерткәнде ярып, туп-тура Сабира апай баҡсаһына ыӊғайланы.* Ф. Иҫәнғолов. ***Ҡыу*** *ағасҡа ҡош ҡунмаҫ.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Бер нәмәһеҙ буп-буш. *'Ҡуралы буйы* ***ҡыу*** *татыр, ҡурай булмаҫ тимәгеҙ.* Ҡобайырҙан.

**ҡыу II** *и.* Ҡайынға тояҡ һымаҡ булып, оролонып сыҡҡан бәшмәк; ҡыуау. *Ҡуҙый янын ҡапшап ҡараны.*

*Кеҫәһендә шаҡмаҡ таш менән **ҡыу** бар икән. Йәһәт кенә **ҡыуға** ут саҡтырып, осҡон төшөрөп ҡабыҙҙы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҡыу** III *ҡ.* 1. Бер ерҙән йәки яндан китергә талап итеү; ҡыуалау. [*Ҡарлуғас — балаһына:*] — *Әйҙә, атла, **ҡыу** быҙауҙы. Ана, сыбыҡты алып **ҡыу*** [, — *тине*]. Һ. Дәүләтшина. *Бай этте **ҡыуа**, эт китмәй, өрә лә өрә.* Әкиәттән. *Незнайка кәзә емтеге янынан ҡарғаларҙы **ҡыуып** тора.* Әкиәттән. *Атҡа ғына менеп, яуҙы **ҡыуған** үҙ илендә данлы ир булыр.* Халыҡ йырынан.

2. Ашыҡтырып, ҡыҫтап, тиҙләтеү; ҡыуалау. *Шәп **ҡыуыу**.* ▬ *Прогулкала йөрөгәндә, лас та лос тип **ҡыуалар**.* Бәйеттән. *Атты сыбыртҡы менән **ҡыума**, һоло менән **ҡыу**.* Әйтем. *Ҡурҡаҡты күп **ҡыуһаң**, батырға әйләнә.* Әйтем.

3. Кем йәки ниҙер артынан тиҙләтеп барыу. ***Ҡыуып** үтеү.* ▬ *Тояғы ергә теймәгән, ел дә **ҡыуып** етмәгән ... Аҡбуҙатың бар, һылыу.* «Аҡбуҙат». *Көткән көтөп ала алмаҫ, ҡалған **ҡыуып** етә алмаҫ.* Әйтем.

4. Кем йәки ниҙелер тотор өсөн артынан йәһәтләп барыу; баҫтырыу. *Бүре **ҡыуыу**.* ▬ [*Бәғиҙә:*] *Ҡасам тинем — ҡастым. Ата-ата **ҡыуҙылар** — тота алманылар.* И. Ғиззәтуллин.

5. Нимәгәлер ынтылыу. *Байлыҡ артынан **ҡыуыу**. Мал артынан **ҡыуыу**.* ▬ *Берәү йәшәй йәшен булып, берәү донъя **ҡыуа** ҡалтырап.* В. Әхмәҙиев. *Атанан бала тыуһа ине, ата юлын **ҡыуһа** ине.* Мәҡәл.

6. Әйләп алып барыу; ҡыуалау. *Малды көтөүгә **ҡыуыу**. Яланға **ҡыуыу**.* ▬ *Туғайҙа кемдер йырлай, һыҙғырып мал **ҡыуалар**. Улар йылҡы **ҡыуып** килә-килә арып та, йыбанып та, асығып та бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

7. Билдәле бер йүнәлештә күпләп күсереү. *Айбулат ҡарт ғүмер буйы ағас ҡырҡҡан да **ҡыуғын** **ҡыуған**.* Әкиәттән.

8. Ҡайҙалыр ирекһеҙҙән, көсләп оҙатыу. *Эшкә **ҡыуыу**.* ▬ *Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп, ситкә **ҡыуҙылар**.* Салауат Юлаев.

9. *күсм.* Нисәлер йәште йәшәй башлау. — *Етмеш туғыҙҙы ҡыуам инде, аллаға шөкөр.* Ж. Кейекбаев.

10. *күсм.* Ниҙелер башланғыс итеп, өҙмәй дауам итеү. *Ғәҙәтте ҡыуыу. Иҫке йоланы ҡыуыу.* ▬ *Уңмаған юлды ҡыума.* Мәҡәл.

**ҡыуан I** *с.* Ҡоп-ҡоро, яман эҫе. ***Ҡыуан** йыл.* ▬ *Эй ямғырҙар, ниңә шулай яумайһығыҙ элек һеҙ?.. Һыуһын көттөк, сарсап бөттөк, ялбарҙыҡ **ҡыуан** яҙҙа.* Р. Ғарипов. *Республиканың көньяҡ райондарында ҡайһы бер йылдарҙа үҫемлекте көйҙөрә торған **ҡыуан** елдәр иҫеп ҡуя.* М. Хисмәтов.

***ҡыуан* II** *ҡ.* 1. Күңел ҡәнәғәтлеге, күңел рәхәтлеге кисереү; шатланыу. ***Ҡыуанып** көлөү. **Ҡыуанып** ҡаршы алыу.* ▬ *Минең уҡыуыма атайымдар ҙа **ҡыуанып** бөтә алманы.* Т. Иәнәби. *Баланың тыуыуына **ҡыуанма**, торғанына **ҡыуан**.* Әйтем.

2. Сығанаҡ килештәге һүҙҙән һуң килеп, рәхмәт йөҙөнән әйтелгән теләкте белдерә. *Ҡулыңдан **ҡыуап**.* ▬ *Юлығыҙ уңһын, Баһау, Бикҡол. — Шулай булһын, Фатима, телеңдән **ҡыуан**.* А. Таһиров.

**ҡыуғын I** *и.* Ҡасҡан кешене тотор өсөн арттан төшкән сапҡын. ***Ҡыуғын** ебәреү. **Ҡыуғын** төшөрөү.* ▬ *— Карнай ағай, ҡасығыҙ! Һәләк булаһығыҙ бит! Йәйләүҙән **ҡыуғын** килә!* Н. Иҙелбай. *Теге батша Алпамышаның артынан **ҡыуғын** сығара.* «Алпамыша».

**ҡыуғын II** *и.* 1. Ағыҙып ҡыуыу өсөн һыуға төшөрөлгән ағас. *Үҙәште йылғаһынан яҙғы ташҡында **ҡыуғын** ҡыуалар, һал ағыҙалар.* Ж. Кейекбаев.

2. Ағас ағыҙыу эше. ***Ҡыуғынға** йөрөү.* ▬ *Йыһаннурҙың **ҡыуғында** һәм урман эшендә булғаны юҡ ине әле.* Ә. Вәли. *Иртәгә иртүк **ҡыуғынға**, ағастарҙы берәмләп ағыҙыу эшенә тотонорға кәрәк!* Ә. Бикчәнтәев.

**ҡыуғынсы I** *и.* Артынан баҫтырып ҡыуа төшкән кеше. ***Ҡыуғынсылар** Заятүләкте ... аяҡ-ҡулын бәйләп, атаһы Сәмәр ханға алып ҡайта.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҡыуғынсы II** *и.* Ағас ағыҙыу эшендәге кеше. ***Ҡыуғынсылар** үткер багор менән йыуан бүрәнәләргә батырғанса сүкейҙәр ҙә ике яҡлап алға табан һөйрәйҙәр.* М. Тажи.

**ҡыуыш I** *и.* 1. Ергә лыпын ултыртылған ҡыйыҡ рәүешендәге ваҡытлы торлаҡ. ***Ҡыуыш** ҡороу.* ▬ [*Шафиҡ*] *ҡаҙынға иҫке кәбән тағандарын терәне. Өҫтөн япраҡлы ботаҡ менән ҡаплап, **ҡыуыш** яһаны.* Я. Хамматов.

2. Ниҙеңдер эсендә өңөлөп торған тишек. *Кәбән **ҡыуышы**.* ▬ *Баҡсалағы бер ҡарт ағас **ҡыуышында** себен турғайы балалары сипылдаша.* Ф. Рәхимғолова. *Батырҙар ҡарт юғалған урынды барып ҡараһа, бер ҙур **ҡыуыш** барлығын күрә. Ләкин был **ҡыуыш** тауҙы тап-тура өңөп төшөп киткән.* Әкиәттән.

**ҡыуыш II** *ҡ.* Уҙып, үтеп китергә тырышып йүгерешеү; уҙышыу. *Кешеләр уҙамандан **ҡыуышып**, ут сыҡҡан яҡҡа йүгерешә башланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Ағиҙелдән пароход килә, **ҡыуышып** һалдар менән.* Халыҡ йырынан.

**ҡышлау I** *и.* Ҡыш йәшәй торған урын; ҡышҡы йорт. ***Ҡышлауға** ҡайтыу.* ▬ *Малай **ҡышлауға** килеп, индеккә атын бәйләне лә алтын ашығын алырға өйгә инде, ти.* Әкиәттән.

**ҡышлау II** *с.* Ҡыш сыҡҡан, ҡыш ҡышлаған. ***Ҡышлау** бал. **Ҡышлау** кәбән.*

**ҡәмәр I** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ай. ***Ҡәмәр** кеүек йөҙөгөҙҙө күҙем туя мин күрмәнем.* Бәйеттән.

**ҡәмәр II** [*фарс.*] *и.* Алтын-көмөш, уҡа-мәрйен менән биҙәлгән яҫы билбау. *Ҡуҙыйкүрпәс ... ҡама тунын кейеп, билен көмөш **ҡәмәр** менән быуҙы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҡәнәфер I** *и.* Нәҙек һабаҡлы, ҡыҙыл, аҡ, алһыу төҫтәге ваҡ сәскәле, ваҡ ҡына ҡыяҡ япраҡлы күп йыллыҡ үлән. *Баҡса **ҡәнәфере**. Тау **ҡәнәфере**.* ▬ *Әйтерһең дә ҡыҙыл бер **ҡәнәфер** сәскә атты ҡайын төбөндә.* С. Ҡудаш.

**ҡәнәфер II** [*ғәр.*] *и.* 1. Ҡара-ҡаршы оҙонса япраҡлы, ваҡ ҡына ал, аҡ төҫтәге суҡ сәскәле мәңге йәшел тропик ағас. *Баҙыян да менән **ҡәнәферҙең** күрһәң ине сәскә ярғанын.* Халыҡ йырынан.

2. Шул ағастың аш тәмләү һ. б. өсөн файҙаланылған киптерелгән сәскә бөрөһө. *Баҙыян менән **ҡәнәферҙән** сәйнәп кенә бөткәс тәм ҡала.* Халыҡ йырынан.

# Л

**ла (лә) I** *терк.* 1. Һөйләмдәге ике тиң киҫәктәрҙе һәм һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәй. *Утта ла янмаҫ, һыуҙа ла батмаҫ.*

2. Ҡабатланып йәки ҡушарлап килгән ике ҡылымды, исемде һ. б. теркәп, уларҙың мәғәнәләрен көсәйткән һүҙбәйләнештәр яһай. *Ала ла ҡала. Талаша ла тартыша. Һуҡты ла йыҡты.* ▬ *Ғәләү һаман ятмай, уңайһыҙланып тора ла тора.* Б. Бикбай.

3. Әҙмә-әҙлекле хәрәкәтте белдергән ике хәбәрҙе теркәй. *Яна ла һүнә.* ▬ *Сыҡты ла ул [ҡыҙ] ҡыуаҡтарға ҡулын һонdo.* М. Кәрим. *Ҡайҙа барһаң, бер ҡояш — таң ата ла кис була.* Мәҡәл. *Беләм тип эш башла ла кәңәш ит бабайыңа.* Мәҡәл.

4. Үҙ-ара һөҙөмтәлелек, сәбәп, ҡаршылыҡ мөнәсәбәттәрендә булган ике һөйләмде теркәй. *Шәһиҙә әбей ҡунаҡҡа саҡырҙы ла улар төнгә ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

**ла (лә) II** *киҫ.* 1. Бер төшөнсәне башҡа тиң төшөнсәләрҙән айырып, баҫым яһай. *Тауышы ла сыҡмай.* ▬ *Әллә ҡайҙарға китте, беҙҙең баштар, манара ла күренмәй.* Б. Бикбай.

2. Баҫым яһап, һүҙҙең лексик йәки грамматик мәғәнәһен көсәйтә. *Башына ла килтермәй. Саҡ ҡына ла китмәй. Уйларға ла иренә.* ▬ *Алтын ерҙә ятһа ла серемәҫ.* Мәҡәл. *Ашҡа ла бер сама.* Әйтем. *Аҡ эт, ҡара эт — барыһы ла эт.* Мәҡәл. *Батырға ла ял кәрәк.* Әйтем.

3. Ҡушма ҡылымдың ике компоненты араһында килеп, дөйөм мәғәнәне көсәйтә. *Һынды ла ҡуйҙы.*

4. Йырҙың һүҙҙәрен оҙон көйгә тап килтереү өсөн ҡулланыла. *Кәмәләкәй буйы ла, әй урман, йүгереп кенә булмай — ҡарама. Арыҫландай егет, әй, булһаң да, кәңәш итмәй эшләү ярамай.* Халыҡ йырынан.

**лава I** [*рус.* < *ит.*] *и.* Вулкандан урғылып сыҡҡан утлы шыйыҡ минераль матдә. *Янар тауҙар ҙа бит көслө була, лавалары янһа эсендә.* З. Биишева.

**лава II** [*рус.* < *польск.*] *и.* Күмер ҡатламын йәки башҡа файҙалы ҡаҙылмаларҙы ҡаҙып сығара торған оҙон забой теҙеме. *Күмер* ***лаваһы.***

**лава III** *и. хәрби.* [*рус.* < *польск*]. Атлы ғәскәрҙең дошманды ҡамау осон теҙелгән тәртибе һәм шул тәртиптә теҙелгән ғәскәр төркөмө. *Эскадрон* ***лаваһы.*** ▬ *Бесән эҫкерте артында ... йәшеренеп ятҡан егеттәр һикерешеп торҙолар ҙа юлбарыҫ ҡыйыулығы менән дошман* ***лаваһына*** *барып инделәр.* Ә. Ихсан.

**лак I** [*рус.* < *ит.*] *и.* Ыҫмаланың ағас, тимер һ. б. нәмәләрҙе ялтыратыу, боҙолоуҙан һаҡлау өсөн тыш яғынан буяла торған иретмәһе. *Майлы* ***лак.*** *Спиртлы* ***лак. Лак*** *ялатыу.*

**лак II** *и.* Дағстандың төп халыҡтарының береһе һәм шул халыҡтың бер кешеһе (Кавказ-Иберей телдәренең береһендә һөйләшә). ***Лак*** *менән һөйләшеү.*

**лаула I** *ҡ.* 1. Лау-лау итеү (эткә ҡарата). *Көн дә* ***лаулап*** *өргән Алабай ҙа ... бөгәрләнеп ята тын ғына.* Т. Йәнәби.

2. *күсм.* Ныҡ шаулау, шау-шыу итеү. *Ҡапҡанан* ***лаулап*** *Бәҙекәй әбей килеп инде.* С. Ағиш.

**лаула II** *ҡ.* Ныҡ ялҡынланып, геүләү; ләүкеү. *Фашист өңө* ***лаулап,*** *сайрап янһа, күк таҙарыр һөрөм, түбәндән.* М. Тажи.

**ложа I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Театр алдында стена буйлатып эшләнгән бер нисә кешелек айырым урын. *Йыр башланы ҡатын ... ҡапыл бөтә зал тына. Бына партер һәм* ***ложалар,*** *галёрка тына.* Ғ. Әмири.

**ложа II** [*рус.*] *и.* Мылтыҡ, автоматтың ағас өлөшө. *Автомат* ***ложаһы.*** *Мылтыҡ* ***ложаһы.***

**лом I** [*рус.*] *и.* Ҡаты нәмәне ватыу, аҡтарыу өсөн ҡулланылған осло башлы ауыр тимер таяҡ. *Әле беҙҙең эш эшме ни ул! Көрәк менән ер ҡаҙабыҙ,* ***лом,*** *кирка менән таш аҡтарабыҙ.* Ғ. Әхмәтшин. *Ҡайынйылға буйы эй ҡая таш, ватып та булмай* ***лом*** *менән.* Халыҡ йырынан.

**лом II** [*рус.*] *и.* Металлолом. *Машинаһы һуң ниндәй! Йәшәрен йәшәгән, эшләрен эшләгән, күптән инде* ***ломға*** *тапшырылырға тейеш.* Д. Исламов.

**ләпәк I** *с.* Төп яғы киң, өҫтө ялпаҡ; тәпәш. ***Ләпәк** өйҙәрҙең мөрйәләре генә күренә.* З. Биишева.

**ләпәк II** *и. диал.* Ләпәкәй. *Күгәүен, **ләпәк** була башлаған та малды елләүек аҡланда тотабыҙ.*

**ләпәш I** *с.* 1. Йәйелеп, йәлпәш ятҡан; ләпәк. *Өйҙәр самандан һалынған, күбеһенсә **ләпәш** түбәле.* К. Мәргән.

2. Тәбәнәк буйлы, тәпәш (кешегә ҡарата). ***Ләпәш** кеше.*

**ләпәш II** *ҡ.* Ерғә һеңешкән һымаҡ йәйенке һәм киң булыу. *Ерғә **ләпәшкән** һалам башлы йорттар юҡ тиерлек хәҙер ауылда.* Ф. Иҫәнғолов.

**люкс I** [*рус.* < *лат.*] *и. физ.* Яҡтыртыу күләмен үлсәү берәмеге. *1 $м^2$ йөҙҙөң 1 лм (люмен) яҡтылыҡ ағышы менән тигеҙ яҡтыртылыуы 1 **люкс** була.*

**люкс II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Юғары категориялы ғостиница номеры, каюта йәки башҡа нәмә. ***Люкста** урынлашыу.*

# М

**май I** *и.* 1. Ҡаймаҡты туҡып, айранынан айырып алынған туҡлыҡлы аҙыҡ. *Аҡ **май**. Иомғаҡлы **май**. **Май** тасҡау. **Майға** бешереү. Сейәле **май**. Тоҙло **май**.* ▬ *[Гөлбоҫтан], иремә генә ашатырмын тип, ике йоманан бирле балаларынан ҡурсып йыйған ҡаймағын бешә һалып, **май** яҙҙы.* Ғ. Дәүләтшин. ***Май** сүлмәге тышынан билдәле.* Мәҡәл. *Һыу яҙып, **май** сыҡмаҫ.* Әйтем.

2. Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең орлоғонан, сәскәһенән һәм емешенән һығып алынған, иремәй торған ҡуйы шыйыҡса. *Көнбағыш **майы**. Мамыҡ **майы**. Горчица **майы**. Зәйтүн **майы**.*

3. Хайуан тәнендәге май ҡатлам һәм шунан алынған продукт. *Ҡаҙ **майы**. Ҡарын **майы**. Суҫҡа **майы**. Эс **майы**.* ▬ *Һөйәк сәйнәп **май** сыҡмаҫ.* Әйтем.

4. Тере организм һәм үҫемлек туҡымаһында яһалған, һыуҙа иремәй торған матдә. *Балыҡ **майы**. Үҫемлек **майы**.*

5. Тәнгә һөртә торған шифалы ҡуйы матдә. *Бит **майы**. Ҡул **майы**.*

6. Ыштҡылмаһын йәки тутыҡмаһын өсөн төрлө ҡорал-ҡорамалға һөртә торған ҡуйы матдә. *Машина* ***майы.*** *Тәгәрмәс* ***майы.***

**манма I** *и.* Тире ебетеү өсөн әҙерләнгән иҙмә. ***Манмаға*** *һалыу.* ***Манмала*** *ебетеү.*

**манма II** *с.* Һығып алырлыҡ, манып алған кеүек булған; лысма. *Хатип менән Хәйҙәр, ҡарға буталып,* ***манма*** *һыу булып, киске сәғәт һигеҙҙә генә ҡайтып инде.* Ф. Исәнғолов.

**марка I** [*рус.* < *нем.*] *и.* 1. Хаҡы күрһәтелгән һүрәтле дүрт мөйөш рәүешендәге ҡағыҙҙан торған почта йәки башҡа йыйымдарҙың түләү билдәһе. *Герблы* ***марка. Марка*** *йәбештереү. Почта* ***маркаһы.***

2. Нәмәнең эшләнгән урынын, сифатын һ. б. күрһәткән тамға. *Завод* ***маркаһы. Марка*** *һуғыу.*

3. Нәмәнең төрө, сорты, сифаты. *Машинаның* ***маркаһы.*** *Ҡоростоң яңы* ***маркаһы.***

**марка II** [*рус.* < *нем.*] *и.* Германияла һәм Финляндияла аҡса берәмеге. ***Марка*** *менән түләү.*

**марш I** [*рус.* < *фр.*] *и.* 1. Сафта ритмлы аҙымдар менән атлап йөрөү ысулы. ***Марш*** *баҫыу.* ▬ *Ҡыҙыл ғәскәрҙең ҡылысы көнгә ҡаршы ялтырай,* ***марш*** *атлап беҙ үткәндә, бар дошмандар ҡалтырай.* Халыҡ йырынан.

2. Ғәскәрҙең бер урындан икенсе урынға йәйәүләп күскән хәрәкәте. *Ике көнлөк* ***марш.*** ▬ *Дивизия утыҙынсы августа 7-се гвардия кавалерия корпусы составында фронтҡа ҡарай* ***марш*** *башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 11 октябрь.

3. Сафта атлауға йәтешләнгән ритмлы музыкаль әҫәр. *Матәм* ***маршы.*** *Тантаналы* ***марш.*** — ***Музыка*** *өҙөп-өҙөп* ***марш*** *уйнай, меңләп аяҡ ергә баҫа бергә.* Б. Ишемғол.

**марш II** [*рус.* < *фр.*] *ымл.* 1. *һөйл.* Берәй ергә барырға йәки китергә бойорғанда ҡулланыла. ***Марш*** *эшеңә!* Һөйләү теленән.

2. *һөйл.* Берәй ергә тиҙ китергә кәрәклекте белдергәндә ҡулланыла. *Әле ҡояш яңы ғына арҡаны йылыта башланы. Ҡояш бөтә донъяны ҡыҙҙырып, ҡар ереп бөтөүгә ремонтты ла бөтөрәбеҙ, унан баҫыуға* ***марш.*** М. Тажи.

**масса I** [*рус.* < *лат.*] *и.* 1. *физ.* Есемдәге матдә миҡдарын үлсәй торган дәүмәл; материяның инерция һәм гравитаңия үҙенсәлектәрен билдәләй торган берәмек. *Есем **массаһы**.* ▬ *Есемдәге матдә ни тиклем ҙур булһа, уның **массаһы** ла шул тиклем ҙур була.*

2. Теге йәки был предметты тәшкил иткән матдәнең һаны, күләме һәм шул матдә үҙе. *Һыу **массаһы**.*

3. Ҡамыр һымаҡ формаһыҙ матдә; берәй нәмәнең ҡуйы йәки ярым шыйыҡ ҡатышмаһы. *Бал һымаҡ шыйыҡ **масса**. Магма **массаһы**. Утлы **масса**.*

**масса II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Киң ҡатлам хеҙмәт эйәләре, күмәк халыҡ. *Крәҫтиәндәр **массаһы**. Эшселәр **массаһы**.* ▬ *Ошо ваҡыт эсендә партия хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә етәкселек итеүҙең яңы тәжрибәһе менән байыны, эске партия мөнәсәбәттәре артабан үҫеш алды, партия ойошмаларының **массалар** менән бәйләнеше тағы ла нығынды.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 25 август.

**мат I** [*рус.* < *фарс.*] *и.* Шахмат уйынындағы королдең ҡаршы яҡ һөжүменән һаҡлана алмай отолоу хәле. ***Мат** алыу. **Мат** биреү. **Мат** ҡуйыу.*

**мат II** [*рус.* < *ингл.*] *и.* Гимнастик күнегеүҙәр ваҡытында иҙәнгә йәйә торган түшәк. ***Мат** йәйеү. **Матҡа** һикереү.*

**материя I** [*рус.* < *лат.*] *и.* 1. *филос.* Кеше аңынан тыш һәм уға бәйһеҙ рәүештә йәшәгән объектив булмыш. ***Материя** беренсел, аң икенсел.* ▬ ***Материя**, эйе мәңгелек ул, юҡтан бар һәм барҙан юҡ булмай.* Ш. Бикҡол.

2. Тәбигәттәге физик есемде тәшкил иткән матдә. ***Материяның** һаҡланыу законы.*

**материя II** *и. һөйл.* Туҡыма, тауар. *Роза апай ҡыҙыл **материянан** бәләкәй флагтар тегә.* Ә. Ихсан.

**мөстән I** *с.* Ҡыҙырынып, темеҫкенеп йөрөүсән. ***Мөстән** һыйыр.* ▬ *Йоҡламаған сағында,* [*килен*] ***мөстән** шикелле өиҙән өйгә йөрөгән, күршеләренә инеп ләстит һатып ултыра торған булған.* Әкиәттән.

**мөстән II** *и. диал.* Түләмә. ***Мөстән** тейеү. **Мөстәндән** үлеү.*

**мөсә I** *и.* 1. Өлөш, киҫәк. *Был ыҡсым әҫәр бәләкәй генә япраҡҡа дан йырлай. Бер япраҡ тигәс тә, ул бит йәйге ҙур йәшеллектең бер* ***мөсәһе*** *— өлөшө.* Й. Гәрәй.

2. Тәндең бер өлөшө; ағза. *Көслө беләк, киң күкрәк, мыҡты елкәләрҙең* ***мөсәләре*** *һәр береһе үҙенә башҡа өрөлөп тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**мөсә II** *и.* Буй-һын, кәүҙә. *Был кешенең көсө* ***мөсәһенән*** *үк күренеп тора.* М. Ҡулаев.

**мөшкәт I** [*рус.* мускат < *фр.*] *и.* 1. Йөҙөм емешенең бер төрө. *Аҡ* ***мөшкәт.*** *Ал* ***мөшкәт.***

2. Шул йөҙөмдән эшләнгән шарап. ***Мөшкәт*** *эсеү. Сәйгә* ***мөшкәт*** *һалыу.*

**мөшкәт II** *и.* Сайыр ағыҙыу өсөн ҡарағайға элеп ҡуйыла торған һауыт. *Сайырҙы* ***мөшкәткә*** *ағыҙыу.* ▬ *Әнүәр ... ҡарағаиҙың итләс тәненә мыйыҡ тарта, уртанан һыҙыҡ үткәрә лә аҫҡы осона* ***мөшкәт*** *ҡаҙап ҡуя. Алтын кеүек һут* ***мөшкәткә*** *ағып төшә.* З. Ураҡсин.

**мәйел I** [*ғәр.*] *и.* Күңел ятышы, күңел ынтылышы; ҡыҙыҡһыныу, теләк. *Һабантуй ваҡытында халыҡта уйынға, күңел асыуға* ***мәйел*** *ҙур була.* Ғ. Хөсәйенов. [*Әхсән:*] *Лавкаға ҡуйып ҡарайым ... «Бер ҙә* ***мәйелем*** *юҡ, атай, башҡа берәй хеҙмәткә ҡушһаң, гүзәл булыр ине» тигәс, ... Таулыға ебәрҙем.* Х. Ибраһимов.

**мәйел II** [*ғәр.*] *с.* Нимәгәлер әүәҫлек, теләге булған. *Һикерергә* ***мәйел*** *кеше.* ▬ [*Мөрит Рәмзи:*] *Насретдин ... һәр төрлө мәҙәкәләргә* ***мәйел*** *ине.* Ә. Харас.

**мәйел III** *и. диал.* Бәйел. ***Мәйел*** *аҙыу.*

**мәлле I** *с.* Тейешле ваҡытта, форсатҡа ярашлы булған; ваҡытлы. ***Мәлле*** *эш.*

**мәлле II** *с. диал.* Ниҙелер башҡарырлыҡ көсө, хәле булған. *Сәмле кеше —* ***мәлле*** *кеше.* Әйтем.

**мәлһеҙ I** *с.* Ваҡытҡа ярашһыҙ, ваҡытһыҙ. ***Мәлһеҙ*** *ҡунаҡ.* ***Мәлһеҙ*** *ямғыр.* ▬ *Иәшә, тормош! Беҙҙең илдә* ***мәлһеҙ*** *үлем тамыры киҫелә.* Б. Бикбай. *Һуғыш, һуғыш ... Беҙ үҫтергән гөлдәр тейешме ни* ***мәлһеҙ*** *һулырға?* Р. Бикбаев.

**мәлһеҙ II** *с. диал.* Ниҙер башҡарырлыҡ көсө, хәле булмаған. ***Мәлһеҙ*** *кеше.*

**мәртәбә I** [*ғәр.*] *и.* Тапҡыр, ҡат. *Бер **мәртәбә**. Ике **мәртәбә**.* ▬ *Һин йәшәгән өйҙө табырмын, ... өс **мәртәбә** тәҙрә шаҡырмын.* Б. Рафиҡов.

**мәртәбә II** [*ғәр.*] *и.* 1. Хеҙмәттәге урын, рәсми дәрәжә. *Ҡадирҙың **мәртәбәһе** билгеле үк — оло мансаб ғанҡаһы, үҙе кантон һәм майор.* «Башҡорт шәжәрәләре».

2. Дәрәжә, яҡшы исем, абруй. *Байғужалар үҙ **мәртәбәләрен** белеп, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуялар.* Я. Вәлиев. *Балалар әҙәбиәтенә **мәртәбә** өҫтәрҙәй ижад ҡеүәһе ... кәрәк.* «Ағиҙел», 1969, № 1. ***Мәртәбәң** бейек булһа, йортоң алыҫтан күренә.* Мәҡәл.

3. Өҫтөнлөк биргән маҡтаулы, яҡшы эш. *Өмәгә һайлап ҡына саҡыралар. Унда әләгеү **мәртәбәгә** һанала.* М. Кәрим. *Ашап-эсеүҙәре бер ни түгел, ошо ултырыуҙары **мәртәбә**.* Халыҡ йырынан.

**мәрәкә I** *и.* 1. Көлкө килтерерлек эш-хәл, ҡыҙыҡлы күренеш. *Мәрәкә табыу.* ▬ ***Мәрәкәгә** әүәҫ малайҙар ... түйғанса өймәкләшеп, танау ҡанатышып тарала.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Уйынсалап әйтелгән көлкө килтергес һүҙ, көлкөлө хәбәр. *Мин эшләшеп йөрөгән булып, төрлө **мәрәкәләр** тыңлайым.* А. Гирфанов.

**мәрәкә II** *с.* 1. Көлкө килтергес; ҡыҙыҡ. ***Мәрәкә** һүҙ.* ▬ *Эй, ҡалай **мәрәкә**! Ҡарағыҙ әле, уҡытыусы апаиға сабата ҡалай килешеп тора.* М. Тажи.

2. Ҡылығы, ҡыланышы үҙенә бер төрлө мәҙәк булған; ҡыҙыҡ. ***Мәрәкә** кеше.*

**мәскәү I** *и.* Сурағай, шамбы, бәрҙе кеүек, бер урында ҡуҙғалмай ята торған балыҡтарҙы тотоу өсөн ҡылдан йәки йомшаҡ тимерсыбыҡтан яһалған бәләкәс кенә ҡороҡ. ***Мәскәү** менән балыҡ тотоу.* ▬ *Түбәндә, яр аҫтында ята сурағай. **Мәскәүен** һуҙып яй ғына ынтылды ағай.* Ш. Биҡкол.

**мәскәү II** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың күлдәк итәгенә уратып баҫҡан тар буй; ҡатмар итәк. ***Мәскәү** тегеү.*

**мәскәүлә I** *ҡ.* Мәскәү менән тотоу. *Балыҡ **мәскәүләү**.* ▬ *Шаян шаршы бәрҙеләрен үҙем **мәскәүләп** алған Күксә йылғаһы ... иҫкә төштө.* Н. Мусин.

**мәскәүлә II** *ҡ.* Мәскәү һалыу, мәскәүле итеү. *Күлдәкте* ***мәскәүләп*** *тегеү.*

**мәслихәт I** [*ғәр.*] *с.* Эш-хәл файҙаһына ярашлы, ҡулай булған; урынлы. ***Мәслихәт*** *күреү.* ***Мәслихәт*** *эш.* ▬ *Мәүлит ҡорҙаштың Килдебаиҙы зилский яһарға кәрәк тигәне бик дөрөҫ. Ул ике ауылға билдәле кеше, эште уйлап эшләй торған кеше. Хәҙер унан да* ***мәслихәт*** *кеше табыу ҡыйын булыр.* Ғ. Дәүләтшин.

**мәслихәт II** [*ғәр.*] *и.* Уртаҡ бер уңай фекергә килеү өсөн һөйләшкән һүҙ; кәңәш. [*Ғилметдин*:] *Мансурҙы хата юлға индермәҫкә ни ҡәҙәр тырыштым. Ләкин уны үҙҙәренә ауҙарып алған кешеләр минең* ***мәслихәтемә*** *ихтыяр бирмәне.* Ғ. Ныязбаев.

# Н

**нар I** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ут, ялҡын. *Күҙҙәрең төпһөҙ, ғаләм, ер, күк, ҡояш, ай унда бар. Унда ғоҡба... Унда йәннәт ... Унда ялҡын ... Унда* ***нар!*** Б. Мирзанов.

**нар II** [*ғәр.*] *и.* Бер үркәсле дөйә. *Иөк ауырын* ***нар*** *күтәрер.* Мәҡәл.

**нефрит I** [*рус. < гр.*] *и.* Аҡ, йәшкелт йәки ҡара йәшел төҫтәге төрлө нәмәләр яһау, биҙәү өсөн ҡулланылған таш. ***Нефрит*** *табыу.*

**нефрит II** [*рус. < гр.*] *и. мед.* Бөйөр шешеүе. ***Нефрит****тан дауаланыу.*

**ни I** *һор. а.* 1. Эш-хәл йәки бер нәмә тураһындағы һорауҙы белдерә; нимә? — *Иә, иптәш Фәйзуллин, йомош* ***ниҙә?*** С. Агиш. [*Һылыу ҡортҡа*:] ***Ни*** *һөйләйһең, балаҡайым? Беҙ кешенән кәм торабыҙҙыр шул.* Т. Йәнәби. *Эскенәйем тулы ай ут яна, һүнһен тиһәм бүтән* ***ни*** *ҡала?* Халыҡ йырынан.

2. Эш-хәлгә йәки берәй нәмәгә ҡарата ниндәйҙер мөнәсәбәтте күрһәткән риторик һорауҙы белдерә; нимә! ***Ғәрлеге ни*** *тора.* ▬ *Бала кешенең кенәһе* ***ни*** *ҙә үҙе* ***ни!*** Һ. Дәүләтшина.

3. Тойғо менән хуплау йәки кире ҡаҡҡанды белдергән риторик һорауҙы аңлата; ниндәй. ... [*Солтанов*:] ***Ни***

*бөтмәгән ревизия ул! Күптән түгел генә тикшерҙек бит.* Б. Бикбай.

4. Ниҙеңдер күплегенә баҫым яһаганда ҡулланыла; күпме [*Мәгүзә*:] ***Ни*** *әйттем Харас еҙнәңә,* ***ни*** *әйттем. Тыңламаны!* Б. Бикбай.

5. Бер нәмә әйтергә уҡталып, әйтә алмай торганда, һүҙ араһына индерелә. [*Тимербулат*:] *Уҡытыусы агай әйтә,* ***ни*** *ти: «Эй, Ырыҫбай, ... тапҡыр гына баҫып өйрән», — ти.* Һ. Дәүләтшина.

6. Һөйләмдә атап күрһәтелмәгән билдәһеҙ эш-хәл йәки нәмәне белдереү өсөн ҡулланыла; нимә. ***Ни*** *бирергә теләһәм, шуны бирер иркем бар.* Р. Нигмәти. *Ҡыҙҙар* ***ни*** *әйтергә белмәй аптырап ҡалды.* Әкиәттән. *Тишек колаҡ* ***ни*** *ишетмәҫ.* Мәҡәл.

**ни II** *киҫ.* 1. Һорау һөйләменә икеләнеү, гәжәпләнеү төҫмөрө бирә. *Китергә яраймы* ***ни****?* ▬ [*Ҡарт*:] *Балалар, әле һеҙ бындамы* ***ни****?* М. Тажи.

2. Риторик һорау аша раҫлау мәгәнәһе бирә. *Иламайым инде һис тә, мин илаҡмы* ***ни****! Лётчик булаһы кешегә иларга яраймы* ***ни****!* Г. Әмири. *Ҡыҙҙар ожмах ҡыҙҙарымы* ***ни****!* Д. Юлтый.

3. Бер нәмәгә йәки эш-хәлгә еңел мөнәсәбәт белдергәндә ҡулланыла. *Мин* ***ни*** *ауыҙга һуҡмаҫ әле тинем дә, әйттем дә һалдым.* М. Тажи.

4. Шарт ҡылым менән билдәләнгән эш-хәлгә ыңгай мөнәсәбәтте белдергәндә ҡулланыла. [*Һылыу*:] *Яуын булһа* ***ни****, айына бер-ике рәт ҡыуыш ҡороп ятыу ҙур эшме* ***ни****?* Т. Йәнәби.

5. Хәл ҡылымдың *-гас* формаһы менән билдәләнгән шартты ныгытып, эш-хәлде шуның һөҙөмтәһе итеп билдәләй. [*Хәмдиә*:] *Ауырыгас* ***ни*** *бара алманым.* Һ. Дәүләтшина.

6. Алда әйтелгән эш-хәлдең урынлы йә урынһыҙ булыуын билдәләй. *Ултырмай* ***ни****, ҡыҫтагас. Юҡҡа тартынып* ***ни****.* Һөйләү теленән.

7. Ҡабатланып килгән саҡта, ниҙең дә булһа әһәмиәтһеҙ икәнен белдерә. — *Ҡайтһа* ***ни*** *ҙә, ҡайтмаһа* ***ни****, бары-*

*бер түгелме* ***ни?*** Р. Низамов. *Кеше менән уртаҡ йәрҙе һөйҙөң* ***ни*** *һөймәнең* ***ни.*** Халыҡ йырынан.

8. Барлыҡ менән юҡлыҡ формаһында ҡабатланған ҡылымдан һуң килеп, юҡлыҡ мәғәнәһен көсәйтә. *Бирер, бирмәй* ***ни*** [*мулла*], *көтөп тор.* Һ. Дәүләтшина.

**ни III** *терк.* Тиң киҫәктәр араһында ҡабатланып килеп, ниҙе лә булһа инҡар итеүҙе белдерә. *Ҡырҙар һеҙгә был килеүҙә юлым тейгәнлектән юлыҡтым, әле бит мин һеҙҙең өсөн* ***ни*** *агроном түгел,* ***ни*** *доктор.* Р. Ниғмәти. *Ә былай ни —* ***ни*** *ары,* ***ни*** *бире.* Һ. Дәүләтшина. *Декабрь айына тиклем ҡар яумай,* ***ни*** *арба,* ***ни*** *сана булып ятҡан саҡ ине был.* Н. Мусин. ***Ни*** *Аллаға,* ***ни*** *муллаға.* Мәҡәл. ***Ни*** *кешегә,* ***ни*** *күршегә.* Мәҡәл.

**ноҡот I** [*фарс.*] *и.* Оҙонса ҡыяҡ япраҡлы, аҡ, сыбар сәскәле, оҙонсараҡ эре орлоҡло, бейек һабаҡлы баҡса үҫемлеге һәм шул үҫемлектең орлоғо. ***Ноҡот*** *сәсеү.* ***Ноҡот*** *һалыу.*

**ноҡот II** *с.* Аҡыл һәләтлеге түбән. *Ағай һин ҡыҙыҡ инде. Нишләп инде, колхоз булғас ялсы булһын? Үҙең ҡайһы ваҡыт төптө бер* ***ноҡот*** *кеше һүҙен һөйләйһең дә ҡуяһың!* Һ. Дәүләтшина.

**нота I** [*рус.* < *лат.*] *и.* 1. Ниндәй ҙә булһа музыкаль тауыштың шартлы график билдәһе. *«До»* ***нотаһы.***

2. Музыка һәм йырҙағы тауыш. *Түбән* ***нота.*** *Юғары* ***нота.***

3. Музыкаль әҫәрҙең шартлы график билдәләр менән яҙылған тексы һәм шул текст яҙылған дәфтәр йәки китап. ***Нота*** *буйынса уҡыу.* ***Нотаға*** *һалыу.* ***Нотаны*** *уҡыу.* ▬ *Гүйә думбыра ҡылы — тимер юлы, пианино теле — шпалдар. Ә сымдарға ҡунған ҡарлуғастар* ***нота*** *— көйъяҙмаға оҡшайҙар.* С. Кулибай.

**нота II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Бер дәүләт хөкүмәтенең икенсе дәүләт хөкүмәтенә яҙма рәүештә ебәргән рәсми дипломатик мөрәжәғәте. ***Ноталар*** *алышыу. Протест* ***нотаһы.*** ▬ *СССР сит ил эштәре министрлығы шундай уҡ* ***нотаны*** *Великобританияның Мәскәүҙәге илсеһенә ебәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 14 июнь.

**нығыш I** *с.* Алдына алғанын һис нәмәгә ҡарамай атҡарырга тырышыусан; ныҡымыш. *Әйткән һүҙ — атҡан уҡ булһын, мин үҙем* ***нығыш*** *бәндә.* М. Кәрим.

**нығыш II** *ҡ.* 1. Үҙ теләгеңде тормошҡа ашырырға тырышыу, ныҡышмалыҡ күрһәтеү. *Йәмилә апайым институтты ситтән тороп тамамларға* ***ныҡыша.*** К. Кинйәбулатова. *Урман батыр* ***ныҡыша*** *торғас, бүрәнә ярығынан бармағын тартып алған.* Экиәттән.

2. Нимәнелер талап итеү, үҙһүҙләнеп ҡабат-ҡабат һорау. [*Өйрәнсек — Һөнәрсегә*:] *Һин ..., ҡорҙаш, миңә ярҙам итергә теләйем тинең! Ысын күңелдән әйткәнһеңдер бит инде һин был һүҙҙе?! — тип* ***ныҡыша.*** З. Биишева. [*Сауҙагәр*:] *Минең юғалтҡан аҡсам һигеҙ йөҙ һум ине, был крәҫтиән бер йөҙөн үҙенә алған, — тип* ***ныҡыша*** *башланы, ти.* Экиәттән.

3. Хәл ҡылымдың **-п** формаһында «бик тырышып, көс һалып» тигән мәғәнәне бирә. ***Ныҡышып*** *эшләү.* ▬ *Балтырындағы йәрәхәт урынының сәнсеп-сәнсеп һыҙлауын иҫәпкә алмаҫҡа тырышты Мансур,* ***ныҡышып а****ҙымын тиҙләтте.* Ә. Хәкимов.

# О

**объектив I** [*рус.* < *лат.*] *и.* Оптик приборҙарҙың тикшерелгән йәки фотога төшөрөлгән нәмәгә йүнәлтелгән линзалы өлөшө. *Микроскоп* ***объективы.*** *Телескоп* ***объективы.*** *Фотоаппарат* ***объективы.***

**объектив II** [*рус.* объективный] *с.* 1. Кеше аңынан тыш, уға бойондороҡһоҙ булған. ***Объектив*** *шарттар.* ***Объектив*** *ысынбарлыҡ.* ▬ *Социалистик реализм лирикаһында субъектив момент, тормош күренештәре,* ***объектив*** *донъя менән тығыҙ бәйләнгән.* Ә. Хәкимов.

2. Ғәҙел башҡарылған; дөрөҫ. ***Объектив*** *анализ.* ***Объектив*** *баһа.*

**оҙат I** *ҡ.* 1. Киткән кешене хушлашып, ойҙән ебәреү. *Бүлмәнән* ***оҙатыу. Оҙатып*** *ебәреү.* ▬ *Даутов ашыҡтырып, уларҙы кабинетынан* ***оҙатты.*** Б. Бикбай.

2. Айырылышҡанда, һаубуллашҡанда китеүсе менән бер аҙ ваҡыт бергә барыу. *Оҙатып барыу. Оҙатып ҡуйыу.*

3. Китеүсе кешене, кәрәкле нәмәләр менән тәьмин итеп булышып йәки был ваҡиғаны махсус билдәләп, юлға сығарыу. *Ҡалаға уҡырға* ***оҙатыу****. Һалдат хеҙмәтенә* ***оҙатыу****.* ▬ *Мәғфүрә уны* [*Айбулатты*] *үҙ балаһы кеүек күреп йәлләй, яҙ башы һайын ситкә көтөү эшенә* ***оҙата*** *ине.* Һ. Дәүләтшина. *Беҙҙең дивизияны икенсе фронтҡа* ***оҙаталар****, имеш, тигән хәбәр бар.* Д. Юлтый.

4. Берәр төрлө маҡсат менән ҡайҙа ла булһа ебәреү, барырға мәжбүр итеү. *Ҡарауыл менән* ***оҙатыу****. Һөргөнгә* ***оҙатыу****.* ▬ *Бүләк хан был сапҡынды ҡылған хыянаты өсөн зинданға* ***оҙатырға*** *була.* Әкиәттән.

5. *этн.* Ҡыҙҙы кейәү йортона ебәреү. *Ҡыҙ* ***оҙатыу****.* ▬ *Ир менән тороп ҡартайған әбейҙәр ...* [*киленде*] *һамаҡлап* ***оҙаттылар****.* Ш. Шәһәр.

6. Һатыр, тапшырыр өсөн ебәреү. *Ағас* ***оҙатыу****. Мал* ***оҙатыу****. Тауар* ***оҙатыу****.* ▬ *Колхоздар ҡыҙыл ылау менән иген* ***оҙата*** *башланы.* М. Тажи.

**оҙат II** *ҡ.* Киндер, тула һуғырға әҙерләнгәндә буйлыҡ епте һуҙыу. *Еп* ***оҙатыу****.*

**оҙат III** *ҡ. диал.* Оҙайтыу. *Һүҙҙе* ***оҙатыу****.* ▬ *Етәр инде, Тәүкә, һиңә! Һин шул Хәнә байҙың һүҙен һөйләйһең. Юҡҡа* ***оҙатмағыҙ****!* М. Буранғол.

**оҙон I** *с.* 1. Буй үлсәме ҙур; *киреһе* ҡыҫҡа. ***Оҙон*** *коридор.* ***Оҙон*** *күлдәк.* ***Оҙон*** *кәртә.* ***Оҙон*** *ҡойроҡ.* ***Оҙон*** *сыбыртҡы.* ***Оҙон*** *сәс.* ▬ *Шәүрә килен, кейгән еләненеңдең итәк осҡайынан еңе* ***оҙон****.* Халыҡ йырынан.

2. Бейеклек үлсәме ҙур, бейек. ***Оҙон*** *бағана.* ***Оҙон*** *мөрйә.* ▬ ***Оҙон*** *тирәктең күләгәһе төбөнә төшмәҫ.* Мәҡәл.

3. Ҙур араға һуҙымлы; алыҫ арала, алыҫ. ***Оҙон*** *итеп баҫыу.* ***Оҙон*** *юл.* — *Ул* [*Буранбай*] *... өндәшмәй-нитмәй,* ***оҙон*** *аҙымдар менән бер ыңғайға атлап бара.* Д. Юлтый.

4. Күп ваҡытҡа һуҙымлы; дауамлы, оҙаҡ. ***Оҙон*** *ғүмер.* ***Оҙон*** *көн.* ***Оҙон*** *телмәр.* ▬ ***Оҙон*** *төн буйына яуған ҡар,* ***оҙон*** *төн буйына өргән буран иртәнсәк тымған.* Ғ. Дәүләтшин. *Көндәшлегә төн* ***оҙон****.* Әйтем.

**оҙон II** *бәйл.* Төп килештәге ваҡыт һәм араны аңлатҡан һүҙҙәр менән эйәлек мөнәсәбәтендәге бәйләнешкә инеп, эш-хәлдең дауамын белдерә; буйы. *Көн* ***оҙон*** *эшләгән ҡулдар шәкәрҙәй аҡ простыня өҫтөндә ял итә.* Р. Низамов.

**ойҡаш I** *с.* 1. Тығыҙланып, бер ергә тупланған. ***Ойҡаш*** *ҡыуаҡтар.*

2. Бер уй, бер теләк менән берләшкән; ойошҡан. ***Ойҡаш*** *ауыл.* ***Ойҡаш*** *халыҡ.*

3. Ниндәй ҙә булһа бер яғы менән бер-береһенә яҡын, оҡшаш, аһәңдәш. ***Ойҡаш*** *исемдәр.* — *Бабай менән әбей ... улдарына Ҡамыр батыр менән Тамыр батыр тигән* ***ойҡаш*** *ҡына исем ҡушҡан.* Әкиәттән.

**ойҡаш II** *ҡ.* 1. Тығыҙланып, бергә тупланыу. ***Ойҡашып*** *ултырыу.*

2. Бер уй, бер теләк менән берләшеү; ойошоу. ***Ойҡашып*** *йәшәү.*

**ойо I** *ҡ.* 1. Эсеп, һөттән ҡатыҡҡа әүерелеү. *Төн йылы, үҙе аяҙ, ә һауынсылар бойоҡ, ни тиклем һөт иртәнгә ултыра инде* ***ойоп.*** «Ағиҙел», 1965, № 7.

2. *күсм.* Ҡуйы хәлгә килеү (ҡан, аҡһымға ҡарата). *Ҡан* ***ойоу.*** — *Тауыҡ йомортҡаһының бешергәндә* ***ойоған*** *аҡһымын яңынан шыйыҡ хәлгә ҡайтарып булмай.* Һөйләү теленән.

**ойо II** *ҡ.* 1. Йоҡоға иҙрәү; йоҡомһорау. [*Кәрим*:] *Әбүзәр ҡустым, ... йоҡоң килһә, ҡайын төбөндә әҙерәк серем итеп ал. ... Бар,* ***ойоп*** *ултыраһың* [*бит*]. Я. Хамматов. *Эсә, шәленә төрөнөп, аяҡтарын бөкләп, йомшаҡ диванға менеп ултырҙы ла бер аҙҙан* ***ойоп*** *та китте.* М. Кәрим. [*Бибикамал*:] *Гөлъямал! Айбикә! Әллә* ***ойоноғоҙмо?*** Н. Нәжми. *Тәҙрә төбөндә ултырып,* ***ойоном*** *да йылы һөт көрәк.* Сеңләүҙән.

2. *күсм.* Күңел иреп китеп, рәхәтләнеп, бөтә нәмәне онотоу. *Ҡамыр батырҙың сикһеҙ моңло йырынан бөтә ҡунаҡтар ҡайҙа икәндәрен онотоп,* ***ойоп*** *киткән.* Әкиәттән.

3. *күсм.* Килешле, йомшаҡ итеп, йәнде иретерлек итеп башҡарыу. *Бейегәндә,* ***ойоп*** *бейейҙәр ҙә, йырлап ебәрәләр кәрәкһә.* Х. Ғиләжев.

**ойо III** *ҡ.* Ҡан йөрөшө быуылыуҙан һиҙемлеген юғалтыу, хәрәкәтһеҙләнеү, иҫһеҙләнеү. *Рәхимә аяҡтарын ыуалап-ыуалай: — Ай, атаң бар булғыры. Бына оҙаҡ ултырып килеп, аяғым* ***ойоп*** *китһәнсе* [, — *тине*]. Һ. Дәүләтшина. *Бер аҙ ултырғас, аяҡтар* ***ойоп****, ауырта башланы.* Д. Юлтый. *Тайба әбей ... оҙаҡ ултырып* ***ойоған*** *аяҡтарын көс-хәл менән яҙып, иҙәнгә төштө.* Х. Мохтар.

**оҡшаш I** *с.* Ҡайһылыр бер яғы менән тап килгән; оҡшаған. *Тимергәле ҡартта ла Һыуһылыу әбейҙекенә* ***оҡшаш*** *бер хәл бар ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡарттың* ***оҡшаш*** *ҡына исемле өс улы булған.* Әкиәттән.

**оҡшаш II** *ҡ.* 1. Ни менән дә булһа үҙ-ара тап килеү, үҙ-ара оҡшау. *Ҡан ҡәрҙәш бит һин дә мин,* ***оҡшашҡанбыҙ*** *бигерәк беҙ.* Р. Баимов. [*Мәҙинә — Ямалға:*] *Ниңә, ...* ***оҡшашһығыҙ****, гөрләтеп туй яһарбыҙ.* Ф. Мансуров.

**оло I** *с.* 1. Кем менәндер сағыштырғанда йәш яғынан ҙур; өлкән. *Атаһы менән* ***оло*** *ағаһы ни тиклем һөйләшергә тырышып ҡараһа ла, Таҙ үҙенең тошөн һөйләмәгән.* Әкиәттән. *Йәш* ***оло*** *түгел, аш* ***оло****.* Әйтем.

2. Оҙаҡ, күп йәшәгән; ҡарт. ***Оло*** *кеше. — Ул* [*бала*] *күҙенә төшкән фуражкаһын күтәреп,* ***оло*** *кешеләр һымаҡ ... яуап бирә.* Д. Юлтый. ***Оло*** *ат менән уйнаған тайҙың аяғы аҫҡаған.* Мәҡәл.

3. Күләме, дәүмәле ҙур. *Беҙҙең өй алты мөйөшлө, ... бер яғын аш өйө, икенсе яғын* ***оло*** *өй тип йөрөтәбеҙ.* Ш. Насыров. ***Оло*** *юл буйлап теҙелгән телефон бағаналары туҡтауһыҙ геүләй.* Ш. Янбаев.

4. Абруйлы, дәрәжәле, ихтирамлы. *Һағынып барғандың хаҡы* ***оло****, саҡырып барғандың аты* ***оло****.* Әйтем.

5. Әһәмиәтле, файҙаһы ҙур булған, ҙур маҡтауға, ихтирамға лайыҡлы. ***Оло*** *ваҡиға.* ***Оло*** *маҡсат.* ***Оло*** *хеҙмәт.*

6. Көсө, интенсивлығы менән айырылып торған, тәрән, көслө, ҙур. ***Оло*** *тойғо.* ***Оло*** *шатлыҡ.* ***Оло*** *мөхәббәт.*

**оло II** *ҡ.* 1. Һуҙып-һуҙып көслө тауыш сығарыу (бүре менән эткә ҡарата). *Сусаҡ таш аҫтында бүреләр* ***олой****.* С. Кулибай. *Яҡты айлы төндәр ҡышҡы юлға, аҡ таҫмалар түшәп үткәндә, сүл бүреләр йыйылып* ***олой*** *ине төнгө юлсы уҙып киткәндә.* Б. Ишемғолов.

2. *кусм.* Нык ғеүләү. *Буран* ***олой.*** ▬ *[Ел] которона, ауыл өйҙәренең мөрйәләренә инеп ыжғыра,* ***олой.*** Б. Хәсән.

3. Туктауһыҙ кыскырыу. *Сафин ағай ... урамға, которонған,* ***олоған*** *халык яғына ташланды.* А. Карнай.

**оңкот I** *с.* 1. Туя белмәгән; мәскәй. *Бер катындың ...* ***оңкот*** *бесәйе булған. Ул бесәй тәмле-татлы ашарға ғына яраткан.* Экиәттән. ***Оңкот*** *завод хужалары [эшсе халыктың] асыуын кабарта ине.* Һ. Дәүләтшина.

**оңкот II** *с.* Уй-фекер йөрөтоүгә булдыкһыҙ, укыуға һәләтһеҙ; нокот, аңра. [*Аллакаев*:] *Әзмәүерҙәй бер малай, унынсыны бөттө лә, институтка дөмбөрө батманы ... кыҫкаһы,* ***оңкот*** *булып сыкты.* С. Кулибай.

**орден I** [*рус.* < *лат.*] *и.* Һуғышта йәки хеҙмәттә һ. б. күрһәткән батырлыктар өсөн бирелә торған төрло дәрәжәләге махсус бүләк билдәһе. ***Орден*** *алыу.* ***Орден*** *менән бүләкләнеү.*

**орден II** *и.* Урта быуаттарҙа монахтарҙың, руханиҙарҙың йәки рыцарҙарҙың билдәле бер устав ниғеҙендә төҙөлгән ойошмаһы. *Иезуиттар* ***ордены.*** *Ливон* ***ордены.***

**ос I** *и.* 1. Ниҙең дә булһа ослайыбырак барып бөткән ере. *Танау* ***осо.*** *Тел* ***осо.*** *Эйәк* ***осо.*** ▬ *Уның [Иркәнең] бит* ***остары*** *яна башланы.* Ә. Вәли.

2. Ниҙең дә булһа ослайып, нескәреп бөткән юғары өлөшө. *Беҙ* ***осо.*** *Бысак* ***осо.*** *Кәләм* ***осо.*** *Һөңгө* ***осо.*** *Энә* ***осо.***

3. Нәҙек оҙон йәки оҙонға һуҙылған нәмәнең барып бөткән аҙағы һәм шул аҙағына якын өлөшө. *Бармак* ***осо.*** *Дилбәгә* ***осо.*** *Керпек* ***осо.*** *Сыбыркы* ***осо.*** *Таяк* ***осо.*** ▬ *Аркандың бер* ***осон*** *иптәштәренә тоттороп, икенсе* ***осон*** *биленә бәйләп, Акъял батыр түбән төшөп киткән, ти.* Экиәттән.

4. Үргә карай нәҙегәйеп киткән нәмәнең юғары нөктәһе һәм шуға якын өлөшө. *Ағас* ***осо.*** *Манара* ***осо.*** ▬ *Был тирәк шул тиклем бейек,* ***осо*** *күккә олғашкан, ти.* Экиәттән.

5. Кейем-һалымдың мөйөшләнеп торған ере йәки барып бөткән аҫкы сите. *Шәл* ***осо.*** *Яулык* ***осо.*** ▬ *Шәүрә килен кейгән ай еләндең итәк* ***оскаиҙары*** *мунсаклы.*

Халыҡ йырынан. *Кейһәм күлдәк, еңе тар, ең* ***осонда*** *хаты бар.* Халыҡ йырынан.

6. Ниҙең дә булһа (ғәҙәттә ҡаланың, ауылдың, урамдың) үҙәктән алыҫланған яғы, сите, башы. *Ауыл* ***осо.*** *Түбәнге* ***ос.*** *Урам* ***осо.*** *Үрге* ***ос.*** ▬ *Аръяҡ* ***остоң*** *өйҙәре, аҡлы-күкле ҡыйҙары.* Халыҡ йырынан.

7. Эш-хәлдең йәки берәй нәмәнең һуңы, аҙағы. *Һүҙенең* ***осо*** *юҡ* ▬ [*Ҡарлуғас*:] *Бер ҙә яфаларҙың* ***осҡопаһы*** *күренерҙәй түгел.* Б. Бикбай.

**ос II** *ҡ.* 1. Һауала ҡанаттар ярҙамында хәрәкәт итеү. *Иәй көнө унда юҡ нәмә юҡ: ҡоштар һайрай, күбәләктәр* ***оса,*** *сәскәләр үҫә, бәшмәктәр бөртенә, еләктәр бешә.* М. Кәрим.

2. Һауала, бушлыҡта йөҙөп йөрөү, бер урындан икенсе урынға күсеү, хәрәкәт итеү (самолёт, дирижабль, космик корабль кеүек осҡос машиналар тураһында). *Самолётта* ***осоу.***

3. Ел йәки ырғытыу, атыу көсө менән һауала хәрәкәт итеү, бер урындан икенсе урынға күсеү. *Ҡар* ***осоу.*** *Снаряд* ***осоу.*** *Туҙан* ***осоу.*** ▬ *Выжлап* ***осҡан*** *туп ярсыҡтары гөпөлдәп ергә төшә башланы.* Д. Юлтый. *Көрпөлдәп ятҡан яңы кол елгә* ***осоп,*** *ауыҙға, танауға, күҙгә тула.* Ғ. Дәүләтшин.

4. Тирә-яҡҡа сәсрәү, таралыу. *Аҡ осҡондар күккә* ***осалар.*** Ғ. Амантай.

5. *күсм.* Бөтөү, юҡҡа сығыу (таланыу, урланыу, алданыу, әрәм-шәрәм ителеү һ. б. сәбәптәр арҡаһында). [*Бәҙри*:] *Беҙҙең ике кәбән бесән ҡайҙа* ***осто*** *икән?* Б. Бикбай.

6. *күсм.* Бик ҡыҙыу хәрәкәт итеү, сабыу, йүгереү; елеү. *Ҡасҡын ҡамсыһын һелтәп ебәргән. Бурыл уларҙы алып* ***осҡан.*** Н. Иҙелбай.

7. *күсм.* Бик тиҙ үтеү (ваҡыт тураһында). *Гөрләшеп дәртле минуттар* ***остолар*** *моңдар менән.* Ш. Бабич.

8. *һөйл.* Бейек ерҙән ҡолау; йығылыу. *Өй башынан* ***осоу.*** *Ярҙан* ***осоу.***

9. *күсм.* Эш урынынан ҡыуылыу, сығарылыу, төшөрөлөү. [*Тәүфиҡҡа*:] *Бының өсөн башыңдан һыйпамаҫтар!*

*Урыныңдан* ***осҡаныңды*** *белмәй ҙә ҡалырһың.* С. Кулибай.

**осоҡ I** *и.* Ашлыҡ елгәргәндә осҡан сүп, кәбәк. *Ашлыҡ елгәргәндә* ***осоҡ*** *шаян елгә китте осоп.* С. Иманғолов.

**осоҡ II** *с.* 1. Эсе буш, емһеҙ, ас; *киреһе* тос. ***Осоҡ*** *орлоҡ.*

2. *күсм.* Еңел холоҡло; остоҡай. ***Осоҡ*** *ҡыҙ.*

**осор I** *и.* 1. Ниҙер менән дә булһа (мәҫ., ижтимағи-политик шарттар менән) сикләнгән ваҡыт аралығы, бер процесс, ваҡиға барған ваҡыт. *Колхозлашыу* ***осоро.*** *Навигация* ***осоро.*** ▬ *Хәҙер төҙөлөш өсөн иң ҡулайлы* ***осор.*** *Ошо ваҡытты тулыһынса файҙаланып ҡалырға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 16 июнь.

2. Ниндәй зә булһа күренекле ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алған, үҙенә ниндәй зә булһа үҙенсәлектәргә хас булған ҙур ваҡыт араһы. *Империализм* ***осоро.*** *Капитализм* ***осоро.***

3. *һөйл.* Хәҙерге заман, хәҙерге ваҡыт. *Беҙҙең* ***осор.***

4. *геол.* Геологик система ҡатламдарының ултырмалары барлыҡҡа килгән ваҡыт аралығы, эраның бер өлөшө. *Палеозон эраһының ташкүмер* ***осоро.***

**осор II** *ҡ.* 1. Осоп китергә мөмкинлек биреү, мәжбүр итеү. [*Егет*] ... *күкәйҙе ватып, эсенән энәһен ала, йәнә йолҡолоп бөткән өйрәктең үҙен* ***осороп*** *ебәрә.* Әкиәттән. *Ҡошон* ***осорған*** *күккә ҡарар, ҡуйын юғалтҡан ергә ҡарар.* Әйтем. *Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы сыпсыҡты* ***осорма.*** Мәҡәл.

2. Һауаға күтәреп хәрәкәт иттереү (ел көсө менән). *Хәйерсенекен ел* ***осорған.*** Әйтем. ***Осорорға*** *ел көслө, осортмаҫҡа ир көслө.* Мәҡәл.

3. Ҡоштарҙың балаларын осорға өйрәтеүҙәре тураһында. *Сыйырсыҡтар бала* ***осора.***

4. Көс менән (тибеп, төртөп, һуғып, һелтәп) ситкә атылдырыу, мәтәлдереү, тәгәрәтеү. *Тибеп* ***осороу.*** *Төртөп* ***осороу.*** ▬ *Дейеү әбей менән бабайҙы* ***осора*** *тибеп ебәргән.* Әкиәттән.

5. *күсм. һөйл.* Эш урынынан ҡыуыу, ҡыуып сығарыу. — *Малсылар араһында ҡотҡо тарата, тигән һыл-*

*тау менән ферма мөдирлегенән мине* ***осорҙолар.*** Д. Исламов.

6. *күсм.* Һатып ебәреү, күҙҙән юғалтыу. [*Хәлфетдин:*] *Беҙҙә Урманов тигән лесник бар. Әҙәм түгел. Өй һала ла* ***осора.*** *Өй һала ла* ***осора.*** С. Кулибай.

**осорма I** *и.* 1. Келәт ишеге өҫтөндәге бүрәнәне тышҡа тартыбыраҡ бурап яһаған һикәлтә (төрлө нәмә һалыу өсөн). [*Бабайҙың*] *яҙ көнө ... алып ҡайтҡан сүкеше* ***осормала*** *ғына ята ине.* Р. Ғабдрахманов.

2. *диал.* Өйҙөң, мунсаның түшәме менән түбәһе араһындағы урыны; бүртлек. ***Осормаларға*** *менеп, мөрйә кирбестәрен һүтеп төштөк.* Ғ. Әмири.

**осорма II** *и.* Текә бейек ҡая-таш. ***Осормала*** *тороу.*

**осһоҙ I** *с.* 1. Осо ашалған, ҡалынайған, тупаҫ. ***Осһоҙ*** *беҙ.* ***Осһоҙ*** *ҡәләм.* ***Осһоҙ*** *энә.*

2. *күсм.* Сиге булмаған, сикһеҙ. ***Осһоҙ*** *бушлыҡ.* ***Осһоҙ*** *киңлек.* ***Осһоҙ*** *уйҙар.*

**осһоҙ II** *с. һөйл.* Арзан, ҡиммәт булмаған. ***Осһоҙ*** *тауарҙар.* ***Осһоҙ*** *хаҡ.*

**от I** *ҡ.* 1. Отошло уйында еңеп, һалынған аҡсаны, кассаны алыу. *Былар тағы ла кәрткә йәбешкән ... эфисәр ҡыҙҙың бөтә аҡсаһын* ***отоп алған.*** Әкиәттән.

2. Аҡсалы йәки әйберле отош сығыу, отош алыу (заём, лотерея, спортлото тираждары уйнағанда). *Лотереяға машина* ***отоу.***

3. Ниҙе лә булһа үҙ файҙаһына хәл итеү, еңеп сығыу (уйында, ярышта, бәхәстә, һуғышта һ. б.). *Ул* [*Әминбәк*] *сатрашты шул тиклем оҫта итеп уйнарға өйрәнгән, хатта өйрәткән кешенең үҙен дә* ***ота*** *ла ҡуя икән.* Әкиәттән.

4. Ниндәй зә булһа файҙа, өҫтөнлөк алыу. *Һыйырҙы тайға алмаштырып* ***оттом.***

**от II** *ҡ.* Бик тиҙ өйрәнеү, ятлау, хәтерҙә ҡалдырыу (күргәнде, ишеткәнде, өйрәткәнде һ. б.). *Яңы көй* ***отоу.*** ▬ *Һағынғанда бер йырларһың, был йырымды* ***отоп ал.*** Халыҡ йырынан.

# Ө

**өҙгөс I** *и.* Аҡса-мал өсөн намыҫын һатып, нисек тә файҙа сығарыуҙы ғына ҡарап торған кеше; йолҡҡос. [*Гәндәлип — Ләйсәнгә*:] *Илдус өс сумаҙан әйбер тейәп ҡайтҡан, ти, аҡҡошом ... Нәҫеле менән* ***өҙгөстәр*** *инде. Ҡәбереӊ яҡын булмаһын.* Ә. Мирзаһитов.

**өҙгөс II** *и. махс.* Электр сымындағы токты йәки торбалағы газ, шыйыҡлыҡ ағымын өҙә торған ҡулайлама. *Терегөмөшлө* ***өҙгөс.*** *Электрик* ***өҙгөс.***

**өҙөк I** *и.* 1. Нимәнеңдер өҙөлгән урыны. *Урмандар, үҙәндәр буйлап йүгерҙе егет, барып тапты: линияла булған бер* ***өҙөк.*** Б. Моҡамай.

2. *күсм. һөйл.* Ниндәйҙер эш-хәлдең бер урында туҡталышы. *Юлдыбикә әбей һис бер* ***өҙөк*** *ҡалдырмай, һүҙен береһе артынан икенсеһен теҙә бирә.* Т. Хәйбуллин.

3. Өҙолгән, айырылған киҫәк. *Бау* ***өҙөгө.*** ▬ *Йыртылған өлкән мамыҡ киҫәгендәй томан* ***өҙөктәре*** *тау башына табан үрмәләй.* Ғ. Дәүләтшин.

4. Ҡар ireү, һыу ташыу һ. б. сәбәпле юлдар насарланған мәл. *Яҙғы* ***өҙөккә*** *тиклем игенде ташып бөтөрөргә кәрәк.* З. Ураҡсин. *Яҙғы* ***өҙөктәрҙә,*** *батҡаҡта колхозымдың күпме ашлығын шул юлдарҙан күпме ташыным.* Ә. Атнабаев. *Биксән ағай ҡытлыҡ күрмәй, яҙғы* ***өҙөктә*** *лә ике-өс сана бесәне була.* Р. Солтангәрәев.

5. Төрло аҙыгк-түлек бөтөп, ҡыйынга ҡалып торған етешһеҙ саҡ. *Яҙғы* ***өҙөк.***

**өҙөк II** *и.* Ниндәй ҙә булһа әҫәр, китап тексынан алынған ҙур булмаған бер өлөш, текст киҫәге. *Шиғырҙың ... Гәлиә апай ҡушҡан* ***өҙөгөн*** *дәртләнеп-дәртләнеп һөйләп бирҙе.* К. Кинйәбулатова.

**өҙөк III** *с.* 1. Өҙөлгән, өҙөп алынған. ***Өҙөк*** *бау. Мандолинаның ҡылы* ***өҙөк.***

2. Ҡапыл ғына өҙөлгән; киҫкен. [*Айбулат*] ***өҙөк*** *эске бер тауыш менән: — Уны мин түләйемме ни? — тине.* Һ. Дәүләтшина.

3. *күсм.* Өлөштәргә бүлгеләнгән, төрло ерҙән өҙөп алынған, бәйләнешһеҙ. ***Өҙөк*** *фекерҙәр.* ***Өҙөк*** *хәбәрҙәр.* ***Өҙөк***

*һүҙҙәр.* — *Аяҡ аҫтындағы ҡар ҡорос кеүек сыңлап тора, ... күңелгә, әллә ниндәй* ***өҙөк*** *тоиғолар индерә.* Д. Юлтый.

**өй I** *и.* 1. Йәшәү-тороу өсөн һалынған бина, ҡоролма. *Ағас* ***өй.*** *Кирбес* ***өй. Өй*** *бурау.* — *Өмөтбаиҙың* ***өйө*** *кәкре-бөкрө ҡайындан һупалап ҡына һалынған.* Ғ. Дәүләтшин. ***Өйө*** *барҙың иле бар, иле барҙың көйө бар.* Мәҡәл. ***Өйөнә*** *килтермәгән иленә килтермәҫ.* Мәҡәл.

2. Тора торған урын, йәшәй торған урын. *Ҡамыр батырҙы туп-тура мәскәй* ***өйөнә*** *килтергәндәр.* Әкиәттән.

3. Берәр учреждение һ. б. урынлашҡан бина, ҡоролма. *Уҡыу* ***өйө.***

4. Айырым ихтыяждар өсөн, мәҫәлән, хужалыҡ маҡсаттары өсөн махсус һалынған ҡоролма йәки бина. *Ҡарауыл* ***өйө.***

5. *күсм. һөйл.* Бер өйҙә йәшәүсе ғаилә йәки бер өйҙә булған кешеләр. *Өс-дүрт* ***өй*** *бергәләшеп ... тапам эшенә тотоноп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**өй II** *ҡ.* 1. Бер төрлө предметтарҙы бергә йыйып, билдәле бер тәртип менән өҫтө-өҫтөнә һалып урынлаштырыу. *Бүрәнәләрҙе* ***өйөү.*** — *[Индрил] яныып бөтмәгән утындарҙы рәтләп* ***өйөп,*** *күмерҙәрен бер урынға йыйып, яндырып бөтөрөп ҡуя.* Д. Юлтый.

2. Бер урынға, бергә килтереп, береһе өҫтөнә икенсеһен күпләп һалыу, ҡуйыу. *Хисаметдин алдына ҡурылған балыҡтарҙы* ***өйөп*** *аша ла аша тип, өсәүләп ҡыҫтай башланыҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

3. *һөйл.* Һалыу, төҙөү (өйҙө). ***Өй өйөү.***

4. Бер ерpredictions йыйыу, билдәле бер тәртип менән һалым, өйөм яһау. *Ашлыҡ* ***өйөү.*** *Бесән* ***өйөү.*** *Һалам* ***өйөү.*** — *Ырҙынға* ***өйгән*** *эҫкерттәр һығалар ерҙең билен.* Р. Нигмәти. *Ҡалала эш һөймәҫ, ауылда кәбән* ***өймәҫ.*** Мәҡәл.

5. *күсм.* Береһенә береһен өҫтәү. *Зөләйханы күрергә йөрәк ашҡына. Уның тураһында уй өҫтөнә уй* ***өйә*** *башлайым.* Т. Йәнәби.

6. Үҫемлек төбөндәге тупраҡты йомшартып, уның һабағы тирәләй өйөм яһау. *Картуф төбөн* ***өйөү.***

7. *күсм.* Бер кешегә бик күп вазифа йөкмәү. *Эш өҫтөнә эш* ***өйөү.***

**өйөр I** *и.* 1. Ғәҙәттә бер айғыр тирәһендә тупланып йөрөгән йылҡы көтөүе, бер көтөү булып йөрөгән йылҡылар. *Йылҡы юшауҙа йөрөй, көтөүсе йоҡлай. Тик **өйөр** айғырҙары ғына ҡолондарын эт-ҡоштан ҡурсып, **өйөр** тирәһендә урангылап йөрөй.* М. Буранғолов. *Күл эйәһе ... йылҡы **өйөрөнән** иң яҡшы атты һайлап, Әбйәлилгә килтереп биргән.* Экиәттән.

2. Эттәр йәки бүреләр көтөүе. *Эт **өйөрө**.* ▬ *Элмәңләп йөрөгән ас сүл бүреләре килеп сыға. Тотош **өйөр** ерәндең боттарына йәбешә.* Б. Бикбай.

3. Йыйнаулашҡан кешеләр төркөмө. [*Әхмәҙи*:] *Эй, һеҙҙе! **Өйөрөгөҙҙө** бер епкә теҙеп, һыу эскеһеҙ итеп киҫергә!* Ж. Кейекбаев.

4. *күсм. һөйл.* Яуыз маҡсаттарҙан сығып ниндәй ҙә булһа төркөмгә ойопҡан кешеләр; банда, шайка. *Бандиттар **өйөрө**.* ▬ *Яна башлаған совет танкыһы бөтә көсө менән дошман **өйөрөнә** ташланды.* Ғ. Рамазанов. *Алдылар беҙҙең яҡшы еребеҙҙе, купис **өйөрө** килеп баҫты илебеҙҙе.* Бәйеттән.

**өйөр II** *ҡ.* 1. Тарҡау малды ҡыуып, бер ергә туплау. *Ырғыҙҙың ... Байсура тауы итәгенән әйләнгән бөгөлөшөндә көтөүселәр малдарҙың **өйөрөн**, төнгө яҡҡа әҙерләнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

2. Туҙҙырмай, бер ергә йыйыу. *Ат, меҫкенең, устағы икмәк һыныҡтарын ҡалын, йомшаҡ ирендәре менән һәрмәп, **өйөрөп** алып, ашыҡмай ғына сәйнәй.* Ғ. Ғүмәр.

3. *күсм.* Игтибарҙы, күңелде йәлеп итеү, тартыу. *Иәйге тәбиғәттең матурлығы, байлығы бөтә кешене үҙенә **өйөрһә** лә, ҡышлауҙан йәйләүгә күсеп йөрөгән башҡорт халҡына был оҡшамаған.* Т. Хәйбуллин.

**өйөр III** *ҡ.* 1. Бик көслө өрөп уралтып-уралтып осороу; өйөрөлдөрөү. *Һалҡын ел өрә, ҡарҙар йүгерә, ап-аҡ ҡарҙарҙы буран **өйөрә**.* Х. Ғәбитов.

2. *диал.* Өйөрөлтөү. *Ипләп кенә **өйөрөп** сап шулай, йөҙөн йәнсей күрмә салғыңдың.* Р. Ғарипов.

**өйөрмә I** *и.* 1. Ҡар, туҙанды өйөрөп иҫкән ел һәм ел өйөрөүҙән бағана рәүешенә килеп, күсеп йөрөгән саңтуҙан, ҡар һ. б. өйкөмө. ***Өйөрмә** сығыу.* ▬ *Бишенсе көн*

*инде буран ҡотора. Ҡарлы **өйөрмә** шул тиклем көслө, хатта күршеләге йорттар ҙа күренмәй.* З. Хисмәтуллин.

2. *диал.* Ҡойон. *Күк тирәләй ләйсән ямғыр килмәй, **өйөрмәләр** ҡупмай дауылһыҙ.* Ә. Таһирова.

3. *күсм.* Донъяны ҡуҙғытҡан, аҫты-өҫкә килтергән дәһшәтле, шаулы көс. *Һуғыш **өйөрмәһе**.* ▬ *Осраған юлында бөтә ҡара көстәрҙе юҡ итеп, революция **өйөрмәһе** килде. Тормоштоң аҫты-өҫкә әйләнде, илдә яңы көндәр тыуҙы.* А. Карнай.

**өйөрмә II** *и.* Һыуҙың бер урында өйөрөлөп ятҡан тәрән урыны; өйөрмәк. ***Өйөрмәгә** әләгеү.* ▬ [*Малайҙар*] *алмашлатып бейетеп ҡармаҡтарын, **өйөрмәнән** балыҡ аулайҙар.* Ғ. Амантай.

**өйөрмә III** *и. диал.* Өйкөмләнеп торған. ***Өйөрмә** тал уртаһынан күгәл өйрәк осто талпынып.* Ҡ. Даян.

**өйөрөл I** *ҡ.* Бер ергә йыйылыу; өйөрмә йыйылыу. *Мал кәртәгә **өйөрөлдө**.* ▬ *Мал **өйөрөлһә** — яуҙыҡы, айырылһа — елдеке.* Мәҡәл.

**өйөрөл II** *ҡ.* Өйөрмә рәүешендә күтәрелеү, хәрәкәт итеү (буран, ҡар, туҙан һ. б.). *Ҡар елдәре **өйөрөлөп** һуҡлығалар туң ярға.* Х. Назар. *Ел сыҡмай сүп **өйөрөлмәй**.* Мәҡәл.

**өлгө I** *и.* 1. Бер үк төрлө йәки оҡшаш нәмәләрҙең араһынан алынған дана; үрнәк. [*Кәбир*:] *Туңға һөрөүселәр янына барып, ... бөтә баҫыуҙарҙың тупраҡ **өлгөләрен** алам.* Я. Вәлиев.

2. Ниҙеңдер дөйөм һыҙатын күрһәтерлек бер өлөш. *Йыйынтыҡҡа Ғ. Амантайҙың әҙәби тәнҡит мәҡәләләренән ҡайһы бер **өлгөләр** индерелде.* Ғ. Зөлҡәрнәев.

3. Үҙеңә ҡабул итерлек, артынан эйәрерлек миҫал; үрнәк. ***Өлгө** булыу. **Өлгө** күрһәтеү.* ▬ [*Нәзирә — Ямаҡаевҡа*:] *Малайыңды ла боҙоп бөттөң. Бер хулиган булып үҫә лә ул. Ни өсөн? Сөнки үҙеңдән **өлгө** ала.* Я. Вәлиев.

4. Өҫ йәки аяҡ кейемдәренең айырым өлөштәрен киҫеп әҙерләү өсөн үрнәк; шаблон. *Ҡағыҙ **өлгө** һалып бүрек тышлығы киҫеү.* ▬ *Тегеү **өлгөләре** тәжрибә цехында әҙерләнә.* Ә. Таһирова.

**өлгө II** *и.* Тәҙрәнең бер өлөшөн тәшкил иткән айырым бер рамдағы быялаһы; күҙғәнәк, бүлкә. *Бәләкәй **өлгө**. Ҙур*

***өлгө.*** — *Тәҙрәләр туң, ә ватыҡ **өлгөләренә** сепрәк тығылған.* И. Кинйәбулатов.

**өлгөр I** *с.* Етеҙ, уңған, булдыҡлы. ***Өлгөр** кеше.* — [*Хәбәрселәр*] ***өлгөр** халыҡ бит. Ҡайҙан да эҙләп табалар.* З. Биишева. ***Өлгөр** киленсәктәр яҡҡан усаҡ, мейестәрҙән сығып, ауыл өҫтөнә шыйыҡ ҡына күкшел төтөн тарата.* Ҡ. Аралбаев.

**өлгөр II** *ҡ.* 1. Билдәле бер ваҡытҡа тиклем ниҙелер башҡарыуға өлгәшеү. *Яңы һалынған өй. Ҡапҡа бағаналары ултыртылған, ҡапҡа ҡуйып **өлгөргәндәр**.* Н. Мусин. [*Ҡобора*] *барыһына ла **өлгөрөргә** тырышты: ашын да бешерҙе, керен дә йыуҙы, һыуын да ташыны.* Б. Бикбай.

2. Тейешле ваҡыттан һуңламай ҡайҙалыр барып етеү. *Килеп **өлгөргән**.* — [*Баҡый:*] *Миңә сәғәт туғыҙға дәрескә **өлгөрөргә** бит.* Һ. Дәүләтшина.

3. Файҙаланыуға яраҡлы кимәлгә етеү; әҙер булыу. *Аш **өлгөргән**. Мунса **өлгөргән**. Сәй **өлгөргән**.* — *Колхоздың Аҡбаштағы клубы бынан бер өс ай самаһы элек **өлгөргән**.* Ә. Вәли.

4. Бешеп етеү (иген, орлоҡ, емеш-еләк, йәшелсәгә ҡарата). *Оҙонгол башында ашап та, ташып та бөтмәҫлек булып ҡарбуз-ҡауын **өлгөрҙө**.* З. Биишева. *Беҙҙең яҡ — ҡырыҫ яҡ, ашлыҡ һуң **өлгөрә**.* Р. Низамов.

5. *күсм. һөйл.* Үҫеп буйға етеү. ***Өлгөргән** егет.* — *Шиғыр өсөн орлоҡ **өлгөрә**, һутланып та емеш **өлгөрә**, **өлгөрә** ҡыҙ, ирлек **өлгөрә**.* Н. Нәжми.

6. Тулы сифатҡа эйә булып етешеү. ***Өлгөргән** мәсьәлә.* — *Ул* [*мөхәббәт*] ***өлгөрһә**, бер кемдән йәшереп булмай.* Б. Бикбай.

**өлгәш I** *и.* Уҡыусыларҙың дәресте үҙләштереү кимәле. *Кластың **өлгәше** түбән. Юғары **өлгәш** биреү.*

**өлгәш II** *ҡ.* 1. Көс, тырышлыҡ менән ниндәйҙер һөҙөмтәгә ирешеү, шуны тормошҡа ашырыу. *Маҡсатҡа **өлгәшеү**. Уңышҡа **өлгәшеү**.* — [*Ҡәри — халыҡҡа:*] *Беҙ ошо йылдарҙағы ихтилал арҡаһында **өлгәшкән** иректе һәм тиҙлекте үҙебеҙгә ҙур ғәнимәт белеп, талаш-тар-*

*тыштарҙы бөтөрөп, тыныс торорға тырышайыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

2. Дәресте тейешенсә үҙләштереү. *Уҡыуҙа* ***өлгәшеү.*** — [*Булат*:] *Элек рус теленән йомшағыраҡ инем, хәҙер унан да* ***өлгәшәм.*** К. Кинйәбулатова.

3. Оҙон юл үтеп, ҡайҙалыр барып етеү. *Каруан Ашҡаҙарҙы түбәнләп, Ағиҙелгә* ***өлгәшә*** *лә, үрләп барып, Эйек буйына килеп төшә.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 8 ғинуар.

**өлпө I** *и.* 1. Бер төптән сығып, өйкөм булып үҫкән ҡыуаҡ йәки үлән. *Селек* ***өлпөһө.*** *Әрем* ***өлпөһө*** — *Тимер юл канауынан сығып,* ***өлпөләр*** *араһына индек.* Д. Юлтый. *Өй артындағы ... әлморон* ***өлпөһөнөң*** *ҡороған ботаҡтарын ҡырҡып ташланыҡ.* Б. Бикбай.

2. Берәй нәмәнең ялбырап торған осо. *Сәс* ***өлпөһө.*** — *Суҡ ҡайын ...* ***өлпөләрен*** *ергә тиклем эйеп, тынысһыҙ шаулап, уны* [*Көнһылыуҙы*] *оҙатып ҡалды.* З. Биишева.

**өлпө II** *с.* Ялбырлап торған; ялбыр. ***Өлпө*** *сәс.* — ***Өлпө*** *ҡойроҡ, саптар һырт төлкө уйнаған Балҡантау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**өлтөк I** *и.* Ниҙеңдер ҡыҫҡа ғына булып тырпайып баҫып торған осо. [*Хәмит*] *түбәһендә ҡалдырылған сәс* ***өлтөгөн*** *тырышып-тырышып төкөрөкләп һыйпаны.* Ф. Иҫәнғолов.

**өлтөк II** *с.* Тырпайып баҫып торған, өлтөй (сәс йәки башҡа нәмәгә ҡарата). ***Өлтөк*** *ҡойроҡ.* ***Өлтөк*** *сәс.* — [*Аҡназар*:] *Сеү, сеү,* ***өлтөк*** *баш, ирҙәр эшенә тығылып торма.* М. Тажи.

**өн I** *и.* 1. Ниндәй зә булһа тауыш; ауаз. *Әсәкәйем, кемде уятаһың, күккә һуҙып моңло* ***өндәрең?*** Д. Юлтый. *Ниндәй тантаналы тынлыҡ бында. Бер* ***өн*** *сыҡмай.* Я. Вәлиев. *Алпамышаның көнө юҡ, ҡурайсының* ***өнө*** *юҡ.* «Алпамыша».

2. Әйтелгән һүҙ. *Туҡта, тик тор, эй, тәкәббер баш! Тыңла халҡың* ***өнөн.*** М. Ғафури. *Батырмын, тип кем әйтмәй — яу килгәндә йүнә юҡ; сәсәнмен, тип кем әйтмәй — дау килгәндә* ***өнө*** *юҡ.* Салауат Юлаев.

3. *лингв.* Әйтелгән һүҙҙең айырым бер мәғәнәгә эйә булған иң ваҡ киҫәге. *Тартынҡы **өн**.* ▬ *Хәйруллин һәр бер «р» **өнөн** асыҡ сығарып, аңлатып бирҙе.* С. Агиш.

**өн II** *и.* Ысынбарлыҡ, реаллек; төш түгел, хыял түгел, һаташыу түгел, ысын хәл; *киреһе* төш. *Белемлек — арыҫландан көслө батыр, шуға атланмай, һинең төшөң һис **өн** булмаҫ.* Аҡмулла. *Ишетелә ҡолдарҙың зар йыры, йәш түгә һылыуҙар зинданда. Яҡты көн, татлы **өн** юҡ унда, зың да зың бығауҙар сылбыры.* М. Кәрим. *Үтә ваҡыт, үтә ғүмер, төштә түгел, **өндә** үтә.* Н. Нәжми.

**өң I** *и.* 1. Соҡоп яһалған оя. *Бүре **өңө**. Йомран **өңө**. Йылан **өңө**.* ▬ *Ирләндәр йәшәй **өңдә**, игенде ташый шунда.* З. Биишева. *Был ҡыуыш тиғәнең айыу өңө икән. **Өңгә** инеү менән айыу әбейҙе ҡосаҡлап алған, ашатҡан-эсергән, ҡайтармаған.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Яуыз, хаин кешеләрҙең тупланған төйәге, төп йәшәгән урыны. *Дошман **өңө**.*

**өң II** *ҡ.* Ҡаҙып, соҡоп, йыуып, ашап ҡыуыш урын барлыҡҡа килтереү; өң яһау. *Кәбәнде **өңөү**. **Өңөп** инеү.* ▬ *Аяҡ аҫты быслраҡ, тайғаҡ. Мин тайып йығылып, тәгәрмәс **өңгән** ергә йыйылған батҡаҡҡа тәкмәсеп, барып яттым.* Ж. Кейекбаев. *Текә ярын **өңөп** Ағиҙелдең, оя яһай ҡара ҡарлуғас.* Ҡ. Даян.

**өр I** *ҡ.* 1. Билдәле йүнәлештә хәрәкәт итеү (елгә ҡарата); иҫеү. *Иртәнге ел әкрен генә **өрөп**, һыйпап үтә үлән баштарын.* Ғ. Сәләм. *Ел **өрмәй** ҡурай һелкенмәй.* Мәҡәл.

2. Йылытыу, һыуытыу, таҙартыу, һүндереү һ. б. маҡсаты менән тын сығарыу. ***Өрөп** һүндереү.* ▬ *Әхмәдулла бабай ҡурайына һыу бөркөп, зыңҡылдатып **өрөп** алды ла, аҡрын ғына уйнап ебәрҙе.* Ә. Вахитов. [*Яҡуп*] *ауыртҡан бармаҡтарын бер-ике тапҡыр **өрөп** алды ла яңынан үҙ эшенә тотонདо.* М. Кәрим. *Ауыҙы бешкән боҙҙо ла **өрөп** ҡапҡан.* Мәҡәл.

3. Ниндәйҙер маҡсат менән берәй нәмәнең эсенә тын, һауа ебәреү. ***Өрөп** тултырыу.* ▬ *Заводта ... 16—18 сәғәт буйына ҡайнар мейес эргәһендә тиргә батып, быяла **өргәндәр**.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 21 апрель.

4. Музыка ҡоралын тын менән ҡысҡыртыу. *Борғо **өрөү***. ▬ *Бер ҡараһаң — Исрафил илһам сурын **өргән** кеүек.* Ш. Бабич.

5. *күсм.* Күңелгә ниндәйҙер хис-тойғо һалыу. *Дәрт **өрөү**. Илһам **өрөү**. Рух **өрөү**.* ▬ *Шик солғаған йөрәктәргә мин ҡыйыулыҡ **өрәмен**.* М. Кәрим.

**өр II** *ҡ.* 1. Өҙөк-өҙөк итеп көслө тауыш биреү (эткә ҡарата). *Абалап **өрөү**.* ▬ *Эт, билгеле, **өрөп** ҡаршыланы, шығырланы ҡапҡа тауышы.* М. Хәй. *Эт **өрөр**, бүре йөрөр.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Асыу белдереп, тауыш күтәреү, шаулашыу; әрләшеү. [*Ҡолморҙа*:] *Бикмырҙа ҡарт, һиңә ғүмереңбуйына аҡыл инмәне. Ниндәй генә сход булмаһын, бер үҙең **өрөп** сығаһың.* Т. Хәйбуллин.

**өргөлә I** *ҡ.* Һирәк-һаяҡ өрөү (елгә, тынға ҡарата). *Ҡулдарҙы **өргөләп** алыу.* ▬ *Көҙгө көндөң арыу уҡ һалҡын елдәр **өргөләй** торған миҙгеле етте.* Һ. Дәүләтшина.

**өргөлә II** *ҡ.* Һирәк-һаяҡ өрөү (эткә ҡарата). *Ҡайһы бер ихаталарҙа ғына эттәр **өргөләп** ҡуя.* Р. Мансуров. *Саптым ҡуяндың артынан «вау ҙа вау» тип **өргөләп**.* Ш. Бабич.

**өҫтәл I** [*рус.* стол] *и.* 1. Өҫтөнә киң таҡта йәйеп яһалған йыһаз. *Аш **өҫтәле**. Эш **өҫтәле**. Түңәрәк **өҫтәл**.* ▬ ***Өҫтәл** тирәһенә йыйылып ултырҙылар ҙа, ашамлыҡтарын сығарып һалдылар.* С. Агиш.

2. Шул йыһаз өҫтөнә әҙерләп ултыртылған ашамлыҡ. *Лилифә сынаяҡ, сәнске, ҡалаҡтар алып килде лә, **өҫтәл** әҙерләй башланы.* Ғ. Ибраһимов.

3. Махсус бер эш менән шөғөлләнгән ойошма йәки уның бер бүлеге. *Адрестар **өҫтәле**. Паспорт **өҫтәле**.* ▬ *Кемдәрҙеңдер ғаилә башлауҙарын теркәр тағы загс **өҫтәле**.* Ғ. Сәләм.

**өҫтәл II** *ҡ.* Булған өҫтөнә, етмәгән ергә тағы ҡушылыу, арттырылыу. *Иҙәндең етешмәгән таҡталары **өҫтәлгән**, тәҙрәнең ватыҡ быялалары ҡуйылған ине.* Б. Бикбай. *Беҙҙең һарайға тағы кешеләр **өҫтәлде**.* Д. Юлтый. *Ашап туйғас, ҡыҙым, үҙе белеп, йыйыштырып ҡуйҙы өҫтәлде. Өй эсендә бөгөн әсәһенә уңған бер булышсы **өҫтәлде**.*

Ш. Бикҡол. *Ҡанды эсеп алдымы — уға [бабайға] шул йыртҡыстың көсө **өҫтәлер** булған.* «Урал батыр».

**өтәлә I** *ҡ.* 1. Йонсоп, йөнө ҡойолоу (ҡош-ҡортҡа ҡарата). — *Мин хәҙер Арсланбай түгел, **өтәләп** бөткән ... ҡуян.* Ә. Атнабаев. *Йәшлек дуҫым оҡшап ҡалған **өтәләгән** тауыҡҡа, нисек итеп оялмай ул күренергә халыҡҡа.* Т. Арслан.

2. Аламаға әйләнеү, туҙып йыртылыу. *Ул [Шәмси] мамығы сығып **өтәләп** бөткән юрғанды баш ашаһынан ябынһа ла, ауыр уйҙарынан ҡотола алманы.* Ғ. Хәйри. — *Ҡайтайыҡ, асыҡтырҙы, — тине Шәрифулла ямау һалыр ере ҡалмай **өтәләп** бөткән төҫһөҙ киндер күлдәкыштан кейгән иптәшкә йонсоу күҙҙәре менән ҡарап.* Ф. Иҫәнғолов.

**өтәлә II** *ҡ.* Тиҙерәк ҡуҙғалырға өндәү; ашыҡтырыу. [*Староста*:] *Ниңә **өтәләйһең**? Нимә булған?* Я. Хамматов.

**өтәлән I** *с.* 1. Ашығып, ҡабаланып барыусан; ҡабалан холоҡло. ***Өтәлән** кеше.*

2. Ашығыс, тиҙ башҡарылырға тейешле. ***Өтәлән** эш.*

**өтәлән II** *ҡ.* 1. Еңел ҡуҙғалып, тиҙ эшләргә тырышыу; ашығыу, ҡабаланыу. [*Әсәһе — Фәрзәнәгә*:] *Ҡайҙа **өтәләнәһең**? Әҙерәк ял итеп алғас та өлгөрөрһөң әле.* Н. Мусин. [*Йәнбирҙе*] *ҡайҙалыр **өтәләнә**. Ҡайһылай йылмаяҡ! Күҙ ҙә әйәрмәй ҡәһәреңә.* В. Нафиҡов.

**өтәлән III** *ҡ.* Ихлас күңел менән йүгереклəү; асыҡ йөҙ күрһәтеү; өҙәләнеү, өлтөрәү. ***Өтәләнеп** йөрөү. **Өтәләнеп** тороу.* ▬ *Йәйләүҙән ялтлап Сәлимә ҡайтып етте. Гөлйөҙөм уны **өтәләнеп** ҡаршы алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**өшән I** *ҡ.* 1. Сирҡанып, ҡалтырап өшөү. *Өҫтө нык һыулана башлағас, Луиза **өшәнеп**, яурындарын һикертеп ҡуйҙы.* Н. Мусин.

2. *күсм.* Ҡурҡыу. *Туҫтаҡтағы бойҙайҙы күргәс, ҡарсыҡ **өшәнеп** китте: «Ҡуй, балаҡайым, башың Себер китер», — тине.* Х. Ғиләжев.

**өшән II** *ҡ.* Йонсоу. *Аттар бик үк **өшәнмәгән** булып сыҡты: сыбыртҡы тейҙермәй, һалмаҡ ҡына юрталар.* С. Ағиш.

# П

**пар I** [*рус.*] *и.* 1. Юғары температура тәьҫирендә һыуҙан әүерелгән ғаз; боҫ. *Һыу **парҙары**. **Парға** әйләнеү.* ▬ *Өсөнсө ҡат ҡырҙар уяндылар **пар** күтәргән яҙғы һулыштан.* М. Кәрим. *Баҫыуҙарҙа, ҡалҡыу урындарҙа ирегән ҡарҙан **пар** күтәрелә.* А. Карнай.

2. Машина көсө йәки йылылыҡ сығанағы итеп файҙаланыла торған шундай газ. *Пароходым, йөрәк ашҡыныуын ҡушайымсы ҡайнар **парыңа**.* Н. Нәжми.

3. *һөйл.* Ныҡ эҫетелгән дымлы һауа. [*Ғәлимә*:] *Гәрәй ҡайнағама мунса килешкән! Беҙҙең мунсаның **пары** шулай йомшаҡ ул.* Б. Бикбай.

**пар II** [*рус.* пара < *нем.*] *и.* 1. Бер бөтөн тәшкил итә һәм бергә ҡулланыла торған ишле нәмә. *Бер **пар** итек. Ике **пар** ойоҡ.* ▬ *Әсәй икебеҙгә лә бер юлы берәр **пар** башмаҡ һуҙа, өр-яңы күн башмаҡтар.* М. Кәрим.

2. Комплект, бер-береһен тултырып тора һәм икеһе бергә ҡулланыла торған ике нәмә. *Алты **пар** сынаяҡ. Бер **пар** костюм.*

3. Шул ике иштең береһе (икенсеһенә ҡарата). *Сынаяҡтың **пары**.*

4. Ике дана, икәү. *Ҡәйүм, Ҡәйүм! Их дуҫҡайым. ... Ауылда бер егет ине: күҙҙәре сөм-ҡара ине, уларҙан нур тама ине, **пар** ҡайынлы өй эсендә ул берҙән-бер бала ине.* Н. Нәжми.

5. Яҡын мөнәсәбәт йәки тойғо менән бәйле ике зат. ***Пар** күгәрсен. Алты **пар** ҡунаҡ.* ▬ *Тәҙрәмдә **пар** ҡарлуғас, менеп ҡарар инем, баҫҡыс юҡ.* Халыҡ йырынан.

6. Шул икәүҙең береһе (икенсеһенә ҡарата). ***Парҙарын** эйәртеп Яҡуп, Фәхри, Харис, Ғамирҙар килеп инде.* Б. Бикбай.

**пар III** *и.* Һөрөлөп тә, ер ял итһен өсөн сәселмәй ҡалдырылған ер. *Ерҙе **парға** ҡалдырыу. Ҡара **пар**. **Парға** һөрөү.*

**парла I** *ҡ.* Ҡайнар һыуҙа (һуңынан пар сығып торорлоҡ итеп) бешекләп йомшартыу. ***Парлап** бирһәң, һаламды мал яратып ашай.*

**парла II** *ҡ.* 1. Икеһен бергә ҡуйыу; ҡушарлау. *Ултырғыстарҙы **парлап** ҡуйыу.* ▬ ***Парлап** та ғына **парлап** ат ектергән, түрәкәйгенәһе.* Халыҡ йырынан.

2. Ише менән бергә ҡушыу; ишен табып, берләштереү. *Сынаяҡты **парлап** ҡуйыу.* ▬ [*Егет — ҡыҙға:*] *Мә, икенсе һыңарын да алып килдем* [*ҡатаның*], ***парлап** кейерһең.* Әкиәттән.

3. Берғәләү, ҡушарлау. ***Парлап** ҡунаҡҡа саҡырыу. **Парлап** ултырыу. **Парлап** бейеү.* ▬ *Йәш килендәр шаршау ҡорғандар ҙа, **парлап**, талығып, төндә йоҡлайҙар.* Ғ. Амантай.

**парлы I** *с.* Эҫе, еүеш һауалы; эҫе ташлы. ***Парлы** мунса.*

**парлы II** *с.* 1. Икеһе ҡушарлы; ишле. ***Парлы** нәмә. **Парлы** сынаяҡ.*

2. Икеһе бергә бәйле; ҡушар. ***Парлы** ҡунаҡ.*

**парса I** [*фарс.*] *и.* 1. Алтын йәки көмөш еп ҡушып һуғылған ебәк туҡыма. *Биҙәкле **парса**.*

2. Тауарҙағы эре биҙәк. *Ал биҙәкле йәшел күлдәк — киҫһәм, китә **парсаһы**.* Бәйеттән.

**парса II** [*фарс.*] *и. кит.* 1. Бөтөндөң бер киҫәге, ярсыҡ. *Иәҙрә **парсаһы**. Таш **парсаһы**.*

2. Юғары оҫталыҡ менән яҙылған бәләкәй теҙмә йәки сәсмә әҫәр. *«Башҡортостан» гәзитендә уның* [*Ғ. Сәләмдең*] *«Йүгерек ҡәләм» исемле әҙәби **парсаһы** баҫылып сыҡты.* С. Сафуанов.

**пассив I** [*рус.* < *лат.*] *и.* Предприятиеның бөтә бурыс һәм йөкләмәләре; *киреһе* актив. *Банктың **пассивы**.*

**пассив II** [*рус.* пассивный] *с.* Эшмәкәрһеҙ, һүлпән, вайымһыҙ; *киреһе* актив. ***Пассив** ҡараш. **Пассив** протест. **Пассив** ял.*

**погон I** [*рус.*] *и.* Дүрткеллләп, ҡаймалап тегеп, формалы кейемдең яурынына баҫа торған айырыу билдәһе. *Офицер **погоны**. Уҡалы **погон**. Һалдат **погоны**.*

**погон II** [*рус.* погонный] *с.* Дөйөм оҙонлоҡҡа һалыулы (үлсәмгә ҡарата). ***Погон** метр.*

**прокат I** [*рус.*] *и. тех.* 1. Металдың әйләнеп торған ике вал араһынан үткәреп эшкәртелеше. ***Прокаттан** үткәреү.*

2. *йыйн.* Шул юл менән эшкәртеп яһалған металл нәмәләр. ***Прокат эшләп сығарыу.***

**прокат II** [*рус.*] *и.* Хаҡ түләп ваҡытлыса файҙаланылған нәмәләрҙең алыш-биреше. ***Прокатҡа алыу. Прокатҡа биреү.***

**пролетар I** [*рус.* пролетарий] *и.* Капиталистик йәмғиәттәге етештереү ҡоралына эйә булмаған ялланма эшсе; пролетарий. *Бөтә илдең эшсән **пролетары**, беҙҙән һеҙгә еңеү сәләме.* Х. Ҡунаҡбай. *Ленин бабай **пролетарҙарға** тура юлдарҙы асты.* Халыҡ йырынан.

**пролетар II** [*рус.* пролетарский] *с.* Пролетариатҡа мөнәсәбәтле, пролетариат принцибына нигеҙле. ***Пролетар** партия. **Пролетар** революция. **Пролетар** яҙыусы.*

**проспект I** [*рус.* < *лат.*] *и.* Ҡалалағы оло урам. *Октябрь **проспекты**. Салауат Юлаев **проспекты**.*

**проспект II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Баҫылырға тейеш хеҙмәттең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен, планын күрһәткән яҙма. *Журналдың **проспекты**. Китаптың **проспекты**.*

# Р

**развод I** [*рус.*] *и. хәрби.* Ҡарауыл хеҙмәтенә әҙерләнгән ғәскәри төркөмдө тикшереп, иҫке ҡарауылды алмаштырырға хоҡуҡ биреү өсөн үткәрелгән смотр. *Ҡарауыл **разводы**.* ▬ *Ун берҙә полк канцелярияһы эргәһендә **разводта** булырға кәрәк. Унда дежур офицер ҡарауылдарҙың ҡайныһын ҡаиҙа бүлгеләп ебәрә.* А. Таһиров.

**развод II** [*рус.*] *и.* Ике яҡҡа айырылған бысҡы тештәренең буй аралығы. *Бысҡының **разводы** бөткән. **Развод** һалыу.*

**разряд I** [*рус.*] *и.* Ниндәйҙер эш, спорт өлкәһендәге оҫталыҡ дәрәжәһе. *Беренсе **разряд**. **Разрядҡа** экзамен тапшырыу. Юғары **разряд**.* ▬ *Быйыл ғына һигеҙ кешегә беренсе, ике йөҙ ун алты кешегә икенсе спорт **разряды** бирелгән.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 24 декабрь.

**разряд II** [*рус.*] *и. физ.* Есемдең электр зарядын юғалтҡанда күҙәтелгән күренеш. *Электр **разряды**.*

**реактив I** [*рус.* < *лат.*] *и. хим.* Икенсе бер матдә менән үҙенсәлекле реакция биреп, уның нимәнелер барлығын йәки юҡлығын күрһәтә торған матдә. *Химик* ***реактив.***

**реактив II** [*рус.* реактивный] *с.* 1. Кире тибеү көсөнән хасил булған. ***Реактив*** *көс.* ***Реактив*** *хәрәкәт.*

2. Шул көстө файҙаланган. ***Реактив*** *артиллерия.* ***Реактив*** *двигатель.* ▬ *Тап шул саҡ баҫып торған тәңгәлдән генә зәңгәр бушлыҡҡа аҡ эҙ ҡалдырып,* ***реактив*** *самолёт китте.* И. Ғиззәтуллин. *Яҡындағы ҡалҡыулыҡ артынан бик ҙур тиҙлектә миномёт расчёты килеп сыҡты.* Ә. Ихсан.

3. Шул көстө файҙаланган двигателдәргә тәғәйенләнгән. ***Реактив*** *яғыулыҡ.*

**реакция I** [*рус.* < *лат.*] *и.* 1. Ниндәйҙер тәьҫиргә яуап рәүешендә барлыҡҡа килгән хәрәкәт йәки хәл. *Тамашасы* ***реакцияһы.***

2. *биол.* Организмдың эске йәки тышҡы тәьҫиргә булған яуабы. *Һыуыҡҡа* ***реакция.*** *Эсегә* ***реакция.*** *Әсегә* ***реакция.***

3. *хим.* Ике йәки бер нисә матдәнең яңы матдә барлыҡҡа килтергән үҙ-ара тәьҫирләшеүе. *Берләшеү* ***реакцияһы. Реакцияға*** *инеү. Тарҡалыу* ***реакцияһы.***

**реакция II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Еңелгән иҫке көстәрҙең, иҙеүсе синыфтарҙың революцион хәрәкәтте һәм төрлө ижтимаги прогресты үҙҙәренең хоҡуҡтарын һәм политик хакимлыгын һаҡлау, кире ҡайтарыу маҡсатында баҫыу, ҡыҫыу политикаһы. *Политик* ***реакция.***

**рейд I** [*рус.* < *гол.*] *и. диңг.* Караптарҙың портта йәки портҡа яҡын якорҙа торған урыны. ***Рейдта*** *тороу.*

**рейд II** [*рус.* < *ингл.*] *и.* 1. *хәрби.* Етеҙ хәрәкәтле ғәскәрҙең йәки партизан отрядының дошман тылына штаб, база юлдарын һ. б. ҡыйратыу өсөн үтеп инеүе. *Кавалеристар* ***рейды.*** *Партизандар* ***рейды.*** ▬ *Башҡорт кавалерия дивизияһы 1943 йыл Донбастағы ... тәрән* ***рейдта*** *тиңһеҙ батырлыҡ күрһәткәне өсөн гвардия исеме алды.* Ә. Ихсан. *Боецтар* ***рейдтан*** *төндә генә ҡайтып төшөүгә ҡарамаҫтан, ... ҡапҡыланы*[*лар*] *ҙа нығытма ҡорорға кереште.* С. Агиш.

2. Ижтимағи ойошмаларҙың йәки матбугат органдарының ҡушыуы буйынса активистар төркөмө үткәргән көтөлмәгән тикшереү эше. ***Рейд үткәреү. Рейдта ҡатнашыу.***

**релятивистик I** [*рус.* релятивистический < *лат.*] *с.* Релятивизмга һәм релятивистҡа мөнәсәбәтле. ***Релятивистик ҡараш.***

**релятивистик II** *с. махс.* Сағыштырмасалыҡ теорияһына нигеҙләнгән. ***Релятивистик механика.***

**рәт I** [*рус.*] *и.* 1. Береһе янында икенсеһе торған, бер-бер артлы теҙелеп торған нәмәләр йәки шундай уҡ тәртиптә баҫҡан кешеләр теҙеме. *Бер **рәт** ултырғыс.* ▬ *Ғариф ағай ... төшөп ҡалған һымаҡ арзан нәмә әләктерергә теләп, алам-һалам һатыусылар **рәтендә** темеҫкенеп йөрөмәй.* Б. Бикбай. ***Рәткә** теҙелгән һалдаттарҙы бер офицер сиратлап өҫтәл эргәһенә саҡырҙы.* Д. Юлтый.

2. Баҙарҙа һ. б. теҙелеп ултырган, бер төр тауар һата торған ларёктар йәки прилавкалар. *Ваҡ-төйәк тауар **рәте**.* ▬ *Баҙарҙа магазин алдын һепереп йөрөгән сторождар ғына* [*күренә*]. *Ит **рәте** тирәһенән бер нисә эт йүгереп сыҡты.* С. Агиш.

3. Һыҙат-һыҙат сәселгән йәшелсә һ. б. үҫемлектәр теҙеме; буй. ***Рәт** араһын тырматыу.*

4. Билдәле бер тәртип, нимәнеңдер үҙенең яйы, барышы; агышы. ***Рәтенә** төшөнөү.* ▬ ***Рәт** тә, сират та юҡ; кемдең нимәгә косө етә, шуны алып китә.* Б. Бикбай. *Кәзә һуйыуҙың да **рәте** бар.* Әйтем.

5. *күсм.* Кемдеңдер, нимәнеңдер башҡалар араһында тотҡан урыны, иҫәпкә алыныуы. [*Миңлебикә — әсәһенә*:] *Өйҙө ҡыйыҡлап ябып, кеше **рәтенә** индерәм тиһәң, һин һәр ваҡыт ҡаршы тораһың.* Т. Йәнәби.

6. *күсм.* Нимәнеңдер ыңғайы, уңайы, эшләнер ваҡыты. *Һүҙ **рәтендә** бер һүҙ әйтәм, туҡтағыҙ, ситкә сыҡты был йүләр тип һукмәгеҙ.* Ш. Бабич.

7. *күсм.* Нимәнеңдер йүнле, уңайлы, файзаһы тейерлек ягы. *Нигмәт, һин китәһең китеүен дә* [*эш әҙләп*], ***рәт** булырмы икән унда ла?* М. Ғафури. — *Һинән **рәт***

*сығасаҡ, — тип йыуатты уны* [*Яҡупты*] *Вәзир.* М. Кәрим.

**рәт II** *и.* Һан менән килеп, эш-хәлдең ҡабатланыуын белдерә; тапҡыр, ҡабат. *Надя бер нисә* ***рәт*** *тайып китте.* С. Ағиш.

# С

**сабаҡ I** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған күкһел һыртлы, аҡ ҡорһаҡлы, буҙ ҡойроҡло ваҡ йылға балығы. *Яр буйына йыйылған ваҡ* ***сабаҡтар****, һыуҙың өҫтөн зымбырлатып, тирә-яҡҡа һирпелде.* Н. Мусин.

**сабаҡ II** *и. диал.* Арата. *Ҡапҡа* ***сабағы.*** ▬ *Егеттәр тәгәрмәстәре һурып ташланған,* ***сабаҡтары*** *ҡойолоп бөткән арбаның үрәсәһенә барып ултырҙылар.* Һ. Дәүләтшина.

**сабар I** *и. тар.* Батша, хан һарайын ҡарауыллаған ҡоралды һыбай һаҡсы. *Әбделхәйер хандың тирмәһен ҡарауыллаған* ***сабарҙар*** *ҙа аттарын билбауҙарына бәйләп... йоҡлай.* Хикәйәттән.

**сабар II** *и.* Сабарман, сапҡын. *Арыҫландың* ***сабарҙары*** *ниндәй хәбәр килтерер бит әле.* Ғ. Ибраһимов. *Сәлим түрә уҫал юл һайлай, үҙенең* ***сабарҙарынан*** *... нөгөр туплап, оҫта рәүештә Иомаголдо үлтереү юлына күсә.* Хикәйәттән.

**сабын I** *и.* Бесән саба торған ер, сабынлыҡ. ***Сабын*** *бүлеү.* ▬ *Ҡырлас тауҙа... сабылмай ятҡан* ***сабын*** *бар. Шунда сығып, бесән саба тор.* И. Көҫәпҡол. *Әгәр дөрөҫ бирһә, беҙгә йә төпкөл* ***сабыны****, йә Ҡолаттың яртыһы кәрәлер.* М. Өмөтбаев. *Ике егет бесән саба туғай буйҡайҙарында* ***сабында****.* Халыҡ йырынан.

**сабын II** *ҡ.* Үҙ-үҙеңде мунсала миндек менән сабыу. *Кәйүм ҡарт көнгә биш мунса инергә лә ҡаршы түгел, бөгөн дә рәхәтләнеп* ***сабынды****.* С. Агиш.

**сағыл I** *и.* 1. Тауҙың көнгә ҡараған яланғас (ғәҙәттә текә, ташлы) битләүе. ***Сагылдарҙа*** *имән нисек үҫһә, мин был ерҙә шулай үҫкәнмен.* М. Кәрим. *Юлдың ике ягында ла бейек-бейек тауҙар, таш ҡаялар... Ә* ***сагылдарҙа*** *төп-*

*төҙ ҡарағайҙар үҫә.* И. Ғиззәтуллин. *Төшкәнемдә бейек* ***сағылдан,*** *ат биленләп, өркөп юлдан сығып, күсәрҙәрен ватты арбаның.* С. Кулибай.

2. *диал.* Сауыл. *[Мин] тип-тигеҙ яланда ниндәй яҙмыш менәндер япа-яңғыҙ [үҫеп] ултырған* ***сағыл*** *янына килеп туҡтаным.* Ә. Чаныш.

**сағыл II** *ҡ.* 1. Һуғылып кире ҡайтыу (яҡтылыҡ нурына йәки тауышҡа ҡарата). *Тыуып ҡына килгән ҡояш нуры үҙ салғымда уйнап* ***сағылды.*** Р. Ғарипов.

2. Көслө яҡтылыҡ төшөп, күрмәҫ булыу, сағылйыу (күҙгә ҡарата). *Һалҡын ҡояш нурҙарында уйнаған йәш ҡар сатҡылары шул тиклем сағыу йымылдай, хатта ҡар өҫтөнә ҡарап та булмай, күҙ* ***сағыла.*** Ҡ. Ибәтуллин. *Ҡайҙа баҡма — күҙ* ***сағыла,*** *шундай аҡлыҡ.* Ҡ. Даян.

3. Үҙенең һынын, һүрәтен шыма, йылтыр нәмәнең өҫтөндә күрһәтеү, барлыҡҡа килтереү. *Тоноҡ ҡына һыуҙа шәүлә* ***сағыла,*** *Байгүбәгем иҫән-һау микән?* Халыҡ йырынан.

4. Тышҡы яҡтан күренеү, тышҡа сығыу, беленеү (тойғоға, эске кисерешкә һ. б. ҡарата). *Һөнәрсенең гәжәп аҡыллы ҡарашлы уйсан күҙҙәрендә лә инде элекке ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар* ***сағылған.*** З. Биишева. *Хан күҙендә хәйлә* ***сағылды,*** *өндәште ул тыныс, ягымлы.* М. Кәрим.

**сағыр I** *и.* Араҡы ҡушылған буҙа. *Заман ахыры булды иһә, ... муллалар ҙа* ***сағыр*** *эсеп, зина ҡылғый.* Мөнәжәттән.

**сағыр II** *и. диал.* Күкһәүел. *Хәмдиә усаҡта сытырлап янған* ***сағыр*** *төбөрҙәрен төҙәтте.* Һ. Дәүләтшина.

**сағыр III** *с. диал.* Шағыр. ***Сағыр*** *күҙ.*

**сай I** *и.* Ике тау араһы, тәрән соҡор; уй. *Сылтыр-сылтыр йүгерә ҡар һыуҙары уйһыу ергә, оҙон* ***сайҙарға.*** Т. Йәнәби. *Һәр ваҡыт һыу тулы булыр тәрән* ***сайҙа.*** М. Ғафури. *Ҡараһаҡал сапҡан юл ҡайҙа? Әллә уның үткер ҡылысы ла һынды микән һуғышып был* ***сайҙа?*** Халыҡ йырынан. *Яман* ***сайға*** *һыу төшһә, кисеү бирмәҫ үтергә.* Мәҡәл.

**сай II** *и.* Һыуҙың һай ерендә үҫкән оҙон һыу үҫемлеге; ылымыҡ. *Күлдең көмөш һыуын **сайҙар** баҫҡан, һайыҡ-ҡан.* Ғ. Әмири.

**сай III** *и. диал.* Ләм. *Ҡорт ҡуҙғытып ел иҫер; күлең саҡ-саҡ сайҡалыр, саң туҙғытып **сай** ҡалыр.* Р. Ғарипов.

**сайҡа I** *ҡ.* 1. Ниндәйҙер көс тәьҫир итеп, төрлө яҡҡа һелкендереү, ҡуҙғатыу; бәүелтеү; сайҡалдырыу. *Ел ағас баштарын **сайҡай**. Тулҡын кешене **сайҡай**.* ▬ *Нурлы юлы машинаны ... һелкетә, уңға-һулға **сайҡай** башланы.* Я. Вәлиев. *Килке-килке ойоҡһотоп сапҡан ел ҡайын-дарҙы **сайҡай**.* Т. Хәйбуллин.

2. Тегеләй-былай йөрөтөү, ян-яҡҡа һелтәү; болғау. *Ҡулды **сайҡау*** ▬ *Ат морононa элгән тоҡсайҙы **сайҡай-сайҡай**, сөйә-сөйә ашай.* Ғ. Ғүмәр. *Ер тетрәтеп, үткер ҡылыс **сайҡап**, батыр менде Урал башына.* Х. Ғәбитов.

**сайҡа II** *ҡ.* 1. Һыуға тығып бер тегеләй, бер былай йөрөтөп йыуыу, йыуҙырыу; сайҡатыу, сайыу. *Һауыт-һабаны **сайҡау**.* ▬ *Ашап бөтөп, һауыттарҙы **сайҡап** йыйыштырғас,* [*Индрил*] *тәмәкеһен тоҡандырып ала.* Д. Юлтый. *Йәмиләләр теҙелеп төшөп бара боҙ өҫтөндә керҙәр **сайҡарға**.* Ғ. Мәсғүт.

2. Өҫтән һыу йүгертеп йыуыу. *Ҡулды **сайҡау**.* ▬ *Ҡомғандағы һыу менән ҡулын **сайҡап**, урҙалағы таҫта-малға һөртә лә Сәйҙеямал табаҡҡа үрелде.* Я. Хамматов. *Тораһы, башты һалҡын һыу менән **сайҡайһы**, тирләп-тереп ҡаты сәй эсәһе ине, юҡ, торғо килмәй.* Б. Бикбай.

**саҡ I** *и.* 1. Ғүмерҙең бер өҙөгөнә тура килгән ваҡыт. *Бала **саҡ**. Егет **саҡ**.* ▬ *Беҙ бәләкәй **саҡтарҙа** «ҡыҙ әүрәтә» торған әллә ниндәй доғалыҡтар була торғайны.* Т. Йәнәби.

2. Ниндәйҙер эш-хәл башҡарылған, нимәләрҙер барған ваҡыт, мәл. *Емеш бешкән **саҡ**. Таң атҡан **саҡ**.* ▬ *Тимер лектең көн-төн гөрләп торған **сағы**.* М. Тажи.

**саҡ II** *р.* 1. Әле генә, яңы ғына. *Беҙ килгәндә **саҡ** әңер төшкән ине.* Д. Юлтый.

2. Көс-хәл менән, көскә-көскә; ҡыйынлыҡ менән. ***Саҡ** атлап килеү. **Саҡ** күтәреү.* ▬ *Быйыл Булат ауырып, ...*

*беренсе класты* ***саҡ*** *тамамланы.* З. Биишева. *Беҙҙең арала талаш китте. Әсәйем икебеҙҙе* ***саҡ*** *айырып ебәрҙе.* Ғ. Минһажев. *Алыҫтағы саф булыр, бара-бара* ***саҡ*** *булыр.* Әйтем.

3. (*йәки* ***саҡ ҡына***). Хәбәре юҡлыҡ формаһы менән килгән һөйләмдә эш-хәрәкәттең була яҙыуын, көскә булмай ҡалыуын белдерә. — *Эй, ... иҫең ҡорогор!* ***Саҡ ҡына*** *онотмағанмын, йә: беҙҙең шәшке-сәйгүндәр ҙә юҡ бит әле.* Ғ. Дәүләтшин. *Музыка уҡытыусыһының* [*ҡыҙыҡ холҡо*] *иҫемә килеп төштө лә ...* ***саҡ*** *көлөп ебәрмәнем.* М. Тажи.

4. *Ҡына* киҫәксәһе менән килеп, «бик әҙ, әҙ генә» мәғәнәһен бирә. ***Саҡ*** *ҡына асыҡ.* ***Саҡ*** *ҡына шыуҙырыу.* ***Саҡ*** *ҡына ятып тороу.* ▬ ***Саҡ*** *ҡына аулаҡ ҡалһа, ... йылманлап, үҙе килеп бөйөргә төртә.* Һ. Дәүләтшина. *Ғәйзулла бабай* ***саҡ*** *ҡына туҡтап торҙо.* Н. Мусин.

5. Таман. [*Гөлсәсәк:*] *«Беҙҙе һанға һуҡмай торғайның —* ***саҡ*** *булған!» — тип битәрләп, ҡыйырһытырҙар, тип ҡурҡҡайным.* Д. Исламов.

**саҡ III** *с.* Эшкә яраҡһыҙ, ярты-йорто. *Эскән кеше —* ***саҡ*** *кеше.* Әйтем.

**саҡ IV** *ҡ.* 1. Саҡма, ҡорос һ. б. шуның кеүек ҡаты нәмәне бер-береһенә һыҙа һуғып, осҡон сығарыу. *Шатморат ... саҡма* ***сағып****, тәмәке тоҡандырып ебәрҙе.* З. Биишева.

2. Атыр өсөн сирттереү. *Тауышҡа өйҙән ... бабай килеп сыға, мылтығын* ***сағып*** *ебәрә.* А. Ғирфанов.

3. *диал.* Ярыу (көнбағышты). *Маръя ҡыҙҙары ап-аҡ ҡулъяулыҡҡа көнбағыш һалып,* ***сағып*** *йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**саҡ V** *ҡ.* 1. Теш йәки ҡаяу батырып, ағыу ебәреү (йылан-саянға, ҡортҡа ҡарата). *Кил, йылан, кил, миндә үс юҡ, һис ҡурҡма һин, кил дә* ***саҡ.*** Ш. Бабич. *Бал ҡорттары айыуҙың еҫен һиҙеп һырып алалар,* ***сағырға*** *тотоналар.* Әкиәттән.

2. Тешләү. *Һағыҙаҡ* ***сағыу.***

3. Оронған, ҡағылған саҡта ағыулап әсеттереү, әрнетеү. *Тар һуҡмаҡ ситендәге кесерткәндәр аяғын* ***саҡҡан*** *һайын, Хәтирәнең асыуы ҡабара барҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

4. *кусм.* Һүҙ әйтеп, рәнйетеү. *Һинең телең бал ҡортондай **саға** ҡәһәр.* Ҡ. Даян.

5. *кусм.* Ауыр кисереш тыуҙырыу, әсендереү; көйҙөрөү. *Тыңлайым мин ... ишетергә теләп әсәйем тауышын. Бер өн дә юҡ. Тып-тын. Йөрәгемде **сағып** алды әсә һағышы.* К. Кинйәбулатова.

**саҡыр I** *ҡ.* 1. Тауыш биреп йәки ымлап үҙ янына килергә тәҡдим яһау, ҡушыу. *Хәйруллин мине бик йәтеш кенә итеп, һуҡ бармағы менән **саҡырып** ала.* С. Агиш.

2. Берәй эш йәки маҡсат менән ҡайҙалыр килергә тәҡдим итеү, килергә ҡушыу. *Йыйылышҡа **саҡырыу**. Концертҡа **саҡырыу**.* ▬ [*Тәнзилә әбей:*] *Мейестәргә утын тығып ҡайтырға ғына йыйынғайным, Зыя мине үҙенең бүлмәһенә **саҡырып** алды.* М. Тажи.

3. Һый-хөрмәт өсөн килергә өндәшеү, һый-хөрмәт күрһәтеү өсөн килтереү. *Ашҡа **саҡырыу**. Ҡунаҡ **саҡырыу**. Ҡунаҡҡа **саҡырыу**.* ▬ *Заһира апай Сараны әсәһе менән сәйгә **саҡырып** алды.* Н. Мусин. *Һағынып барғандың хаҡы оло, **саҡырып** барғандың аты оло.* Әйтем.

4. Ниндәйҙер эшкә, маҡсатҡа ирешергә өндәү. *Көрәшкә **саҡырыу**. Яуға **саҡырыу**.* ▬ *Салауат батыр үҙенең ғәскәрен һуғышҡа **саҡырған** саҡта ошо борғоно ҡысҡырттыра торған булған.* З. Биишева. [*Гармун*] *күңелдәрҙе сиртеп, алғы көнгә, киҫкен көрәштәргә **саҡыра**.* Ғ. Мәсғүт.

5. Ниндәйҙер эш-хәл булыуҙы теләү, һорау. *Айға ҡарап аҡырма, илгә бәлә **саҡырма**.* Мәҡәл.

6. Кемдеңдер үҙен билдәле тәртип рамкаһында тотоуын талап итеү. *Тәртипкә **саҡырыу**. Тыныслыҡҡа **саҡырыу**. Уяулыҡҡа **саҡырыу**.*

**саҡыр II** *ҡ.* Тауыш биреү (кәкүккә ҡарата). *Иртә **саҡырған** кәкүктең башы ауырта.* Мәҡәл.

**сал I** *и.* Сәс, һаҡалға төшкән аҡ төҫ. ***Сал** ҡунған. **Сал** төшкән.* ▬ *Йөрөй торғас ул* [*Ғәндәлип*] *башына **сал** йүгергән ҡартҡа әйләнә.* Т. Килмөхәмәтов. *Байтал бейә булғансы, башыңа **сал** инә.* Әйтем.

**сал II** *ҡ.* Бысаҡ менән боғаҙҙан ҡырҡыу. *Мал* ***салыу.*** ▬ [*Ҡәйнәһе — Айбулатҡа:*] — *Кейәү, хәҙер үк шул һарыҡты* ***салып*** *ташласы* [, — *тине*]. Һ. Дәүләтшина.

**сал III** *ҡ.* 1. Осон аша һалып, эләктереп алыу (бәйләгәндә). *Бер ҡыҙ ... яулығын эйәк аҫтынан* ***салып*** *бәйләгән.* Ф. Иҫәнголов.

2. Өҫтө-өҫтөнә һалыу (аяҡ-ҡулды). *Ҡулдарын артҡа* ***салып*** *һала ла, тағы урам тирәһен ҡараштырып, аҡрын ғына атлап килә.* Ә. Вахитов. *Ғәлим ағай һикенең түренә үк менеп, тәҙрә яңағына һөйәлә биреп, аяҡтарын* ***салып*** *ултырҙы.* Н. Ҡәрип.

3. Ситтән уратып, аша киҫеү (юлды). *Һыуһар ағаслағайны, икенсе яҡтан юлын* ***салып*** *алдым.* М. Тажи. [*Янбай*] *һыбайҙарҙың алдын* ***салып*** *ҡараһа, ҡойроғон күпертеп, бер уңға, бер һулға һелтәп ... ҡасып барған бер йәнлекте күрә.* Әкиәттән.

**салт I** *с.* 1. Сит нәмә ҡатышмаған; саф, таҙа. ***Салт*** *алтын йөҙөк.* ***Салт*** *көмөш тәңкә.*

2. *күсм.* Эскерһеҙ, саф; асыҡ. *Мәүлиха инәиҙе күреп, уның зирәклегенә,* ***салт*** *күңеленә ... һоҡланмаған кеше юҡтыр.* Ш. Янбаев.

3. *күсм.* Асыҡ, зирәк. *Быуаттарҙың* ***салт*** *аҡылы һеңгән был ябайҙан-ябай ҡоралға.* Р. Ғарипов.

**салт II** *с.* Үтә ныҡ, бик ныҡ. ***Салт*** *аҡ.* ▬ *Иртә менән генә* ***салт*** *аяҙ ине әле, кискә табан тиреҫ яҡтан ел сыҡты, ... ҡара болоттар күтәрелде.* Б. Бикбай.

**салт III** *с. диал.* Етеҙ, йылдам. ***Салт*** *кеше.* ▬ *Иәмилдең атаһын ... колхоздың иң* ***салт*** *атын егеп ... район больницаһына илтеп һалдылар.* З. Биишева.

**салт IV** *оҡш.* Ус менән сикәгә йәки асыҡ тәнгә һуҡҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ротный ... көтмәгәндә, ҡыҙып китепме,* ***салт*** *иттереп Әхтәмдең яңағына сабып ебәрҙе.* В. Исхаҡов. *Донъя мине ҡаҡҡан-һуҡҡан саҡта, йә битемә сапһа* ***салт*** *итеп, мин бит, ялбыр-йолбор ҡара малай, килеп етә инем ялт итеп.* Т. Йосопов.

**салын I** *ҡ.* 1. Осо эләгеп тартылыу, эләгеп уралыу (арҡан, бау һ. б. ҡарата). *Арҡан бейәнең муйынына **салына** төшкәс, тулап ҡараһа ла, ысҡына алманы.* Әкиәттән.

2. Нимәгәлер эләгеп уралыу, сырмалыу. *Алдағы кешенен аяғы тимер сыбыҡҡа **салыныпмы**, кирбес өйөмөнә абыныпмы, гөрһөлдәп йығылды.* Ғ. Ильяс.

**салын II** *ҡ.* Күреү йәки ишетеү ағзаларына еңелсә генә, өҙөк кенә булып һиҙелеү, эләгеү; сағылыу. [*Фәнис*:] — *Эй, малайҙар, Бәйтулла бабайҙар нисек кенә йәшәй? Ни эшләп ҡарт бер ҙә күҙгә **салынмай**.* Р. Низамов. *Башҡорт һүҙе, башҡортомдоң моңо ҡолағыңа тик бер **салыныр**. ... Сәхәр ваҡытында шул моңдарҙы күңел һағыныр.* М. Кәрим.

**сандыр I** *и.* Бот төбө менән ҡорһаҡ аҫтының араһы; сат. *Аҙыраҡ ял иткәндән һуң торайым тиһә, биле ҡатҡан, **сандырҙары** ауырта.* Н. Мусин.

**сандыр II** *с.* Ит ҡупмаған; ҡаҡса. *Тәҙрә алдында **сандыр** буйлы һуҡыр ҡарт пәйҙә булды.* Д. Юлтый. *Бәләкәй кәүҙәле, **сандыр** тәнле был үҫмер* [*Муса Йәлил*] *тирәһендә кеше өҙөлмәй.* С. Агиш.

**санитар I** [*рус.*] *и.* Дауалау йорттарындағы ауырыуҙарҙы ҡарап тора торған кесе медицина персоналына ҡараған кеше. *Больница **санитары**. **Санитар** булып эшләү.*

2. Яралыларға тәүге ярҙам күрһәтә, яу ҡырынан алып сыға торған кесе медицина хеҙмәткәре. *Ҡыҙыл тәреле сумка аҫҡан **санитарҙар** үлгән һәм яраланған кешеләрҙе йыйыштыра.* С. Ханов.

**санитар II** [*рус.* санитарный] *с.* Армияла медицина хеҙмәтенә ҡараған, медицинаны хеҙмәтләндергән. ***Санитар** поезд. **Санитар** самолёт.* ▬ *Эпидемияға ҡаршы көрәшеү өсөн ... **санитар** бюро ойоштороло.* «Ағиҙел», 1967, № 8.

**саң I** *и.* Ҡаты есемдәрҙең онтаҡ рәүешендәге бик ваҡ өлөшсәләре; туҙан. ***Саң** борҡотоу. **Саң** ҡаплау. **Саң** ҡуныу.* ▬ *Көтөүлектәрҙә үлән йүнләп үҫмәй, **саң** борҡоп*

*ята.* Ғ. Вәлиев. *Бер ваҡыт ер һелкетеп,* ***саң*** *туҙҙырып, дейеү ҡайтып килә, ти.* Әкиәттән.

**саң II** *и.* Тимер һуғып сығарған тауыш (ғәҙәттә сигнал хеҙмәтен үтәй). ***Саң*** *ҡағыу.* ▬ *Беҙ иртән* ***саң*** *тауышын ишетеп кенә йоҡонан уяндыҡ.* С. Кулибай.

**саң III** *оҡш.* Ҡаты нәмә менән тимергә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүз. ***Саң*** *итеү.*

**саңырт I** *и.* 1. Һибәләп, томанлап яуған ваҡ ҡына күҙле көҙгө ямғыр йәки ҡар. *Анау ғына тауҙа бер* ***саңырт*** *бар, әллә ямғыр, әллә ҡар микән.* Халыҡ йырынан.

2. *диал.* Монар. *Алыҫта-алыҫта зәңгәр* ***саңыртҡа*** *уранған ... Тора тау күренә.* Ж. Кейекбаев.

**саңырт II** *с.* Саң кеүек ваҡ өлөштәрҙән торған. ***Саңырт*** *буран.* ▬ *Төн елдәре иҫә әкрен генә,* ***саңырт*** *ҡарҙар күсә юл аша.* Д. Юлтый.

**сап I** *и. иҫк.* Дан, таныҡлыҡ. ***Сап*** *ҡаҙаныу.*

**сап II** *оҡш.* Яҫы нәмә менән йомшағыраҡ икенсе бер нәмәгә һуҡҡанда, ауыҙ-иренде йомоп асҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Сап*** *итеү.*

**сапҡын I** *с.* Бик шәп сабыусан, етеҙ (атҡа ҡарата); сапҡыр. *Атланырбыҙ ҙа китербеҙ* ***сапҡын*** *туры аттарҙа.* Халыҡ йырынан.

**сапҡын II** *и.* Ашығыс хәбәр килтергән кеше; сапҡынсы. ***Сапҡын*** *ебәреү.* ▬ *Волостан Фатима уҡытҡан ауылға* ***сапҡын*** *килде — ул күрше волостарҙы аҡтар баҫып алыуы тураһында хәбәр килтерҙе.* С. Ханов. *Ат аяғы тауҙа саң борҡотто,* ***сапҡын*** *килде бер көн таң менән.* Р. Ниғмәти.

**сапҡын III** *и.* Көтмәгәндә яһалған киҫкен һөжүм. *Яйыҡҡа бармаҫҡа, ошо тирәләге станцияларҙа ятҡан аҡтарға әленән-әле* ***сапҡын*** *яһап торорға* [*кәрәк*]. Б. Хәсән. [*Сурағол:*] *Түш киреп, беләк һыҙғанып, бер табандан* ***сапҡын*** *яһап та ҡараныҡ, түрәләрҙе еңә алманыҡ.* Т. Хәйбуллин.

**сапҡынсы I** *и.* Сапҡын. (II). [*Тоҡан:*] *Ярай, әҙерләйем бер һыбай ат, хәҙер барып ҡайтһын* ***сапҡынсы.*** Х. Ғәбитов.

**сапҡынсы** II *и.* Сапҡында ҡатнашҡан һуғышсы. *Башҡорт иленең... **сапҡынсылары**, уҡсылары көс йыя, намыҫ туплана.* Ш. Шәһәр.

**сапсан** I *с.* 1. Етеҙ, тиҙ хәрәкәтле; йылдам, йылғыр. ***Сапсан** ат. **Сапсан** кеше. **Сапсан** ҡош.* ▬ *Маруся үҙенең **сапсан** ҡуҙғалышы, етеҙ ҡулдары менән машина кеүек йәһәт эшләй ине.* Һ. Дәүләтшина. *Ауыҙлыҡлап **сапсан** толпарҙарын өҙәңгегә баҫты егеттәр.* Р. Бикбаев.

2. Эштә, тормошта өлгөр, сос. [*Яҡуп:*] ***Сапсан**, эштә тынғы белмәҫ, йәш, матур тол ҡатын ул* [*Фатима*]. Б. Бикбай. *Илсебикә йомош-юлға **сапсан** ҡыҙыҡай — йоданы тиҙ килтереп тотторҙо.* К. Кинйәбулатова.

**сапсан** II *и.* Ыласындар ғаиләһенә ҡараған оҙон осло ҡанатлы, тар ҡыҫҡа ҡойроҡло, ҡыҙғылт һары йәки аҡ ҡорһаҡлы, күрәнһыу һыртлы йыртҡыс ҡош. *Сәмәр хандың алты улы **сапсан** ҡоштарын ҡаҙ туйына сөйөп ебәрә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**сар** I *и.* Әйләндереп, балта, бысаҡ үткерләй торған түңәрәк ҡайраҡ. ***Сар** әйләндереү.* ▬ *Сабир шунда уҡ тимерлек аласығынан **сар** беркетелгән станокты күтәреп алып сыҡты һәм әйләндереп торорға әҙерләнде.* Ф. Исәнғолов. *Егеттәр ... ике балтаны яҡшылап **сарға** тотто.* Ф. Исәнғолов.

**сар** II *и.* Ҡуян, төлкө һ. б. һуҡмағы. *Ҡуян **сары**.* ▬ *Аҡ ҡуянҡай, меҫкен, **сар** һала яңы яуған ап-аҡ ҡар менән.* Халыҡ йырынан.

**сар** III *оҡш.* Әсе итеп ҡаты ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Бала **сар** итеп ҡалды.*

**сарла** I *ҡ.* 1. Сарға тотоп үткерләү. ***Сарланыҡ** булат ҡылысты, яндырҙыҡ дошман яуын.* Ғ. Әмири. *Былар* [*дейеүҙәр*] *бик үткер итеп балта **сарлай**.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Күп тәжрибә биреп, күп ныҡып нимәгәлер әҙерләү, оҫтартыу; шымартыу. *Эшкә ҡулды **сарлау**.* ▬ *Алдан **сарлап** ҡуйылған бисәләр ... күтәрелде лә китте.* Б. Бикбай. *Илебеҙҙең шаулы йөрәгендә белем менән **сарлап** аҡылың, уҡы, тырышып уҡы, тиҙерәк инженер бул инде, аҡыллым.* Х. Ҡунаҡбай.

**сарла II** *ҡ.* Сар һалыу; күп йөрөп һуҡмаҡлау (ҡуян, төлкө һ. б. ҡарата). *Ҡуян* ***сарлап*** *бөткән.*

**сарла III** *ҡ. диал.* Сарылдау. ***Сарлап*** *илау.* ***Сарлап*** *ҡысҡырыу.*

**сарлаҡ I** [*фарс.*] *и.* 1. Түбә менән ҡыйыҡ араһына өйҙән бәләкәйерәк итеп эшләнгән өҫкө ҡат. ***Сарлаҡтарға*** *менгән шаян ҡыҙҙай,* [*Ай*] *һаман урләй куктең түренә.* Д. Юлтый. *Өфөләге ябай ағас йорттоң* ***сарлағында****, урге ҡатында, куп уйланы Ильич ил яҙмышы, зарлы башҡорт йыры хаҡында.* Ғ. Рамазанов.

2. Өйҙөң өҫкө ҡаттарынан тышҡа сығарып эшләнгән тирәсле баҫма; балкон. *Егетте кейендерәләр, ҡыҙ менән икеһен* ***сарлаҡҡа*** *алып сығалар. Батша халыҡҡа әйтә: «Бына мин ҡыҙымды ошо егеткә бирәм», — ти.* Әкиәттән.

**сарлаҡ II** *и.* Балыҡ тибеп, сарылдап осоп йөрөй торған һыу ҡошо. *Аҡ* ***сарлаҡ****. Ҡара* ***сарлаҡ****. Ҡарабаш* ***сарлаҡ****.*

**сарпы I** *ҡ.* Ваҡ-ваҡ итеп сыралап ярыу. *Ҡот осҡос уй, йәшен кеүек, уның мейеһен* ***сарпып*** *уткәндәй булды.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡарағастарҙы* ***сарпып****, ярғыслап, сатынсатҡа айырып, арҡыс та торҡос йығып бөттө.* «Ҡуңыр буға».

**сарпы II** *ҡ.* Һирпеп, ситкә ҡағыу (шыйыҡлыҡты); сайпыу. *Ишкәк менән һыуҙы* ***сарпыу****.*

2. *күсм.* Килеп тейеү, яралау. *Нисә ярсыҡ тәнең йыртманы, нисә пуля* ***сарпып*** *йыҡманы.* С. Кулибай.

**сат** *и.* **I** *и.* 1. Бот төбө менән ҡорһаҡ аҫтының араһы. ***Сат*** *ауыртыу.*

2. Буй-буй килеп ике йәки бер нисә нәмә тоташҡан урын. *Урам* ***саты****. Юл* ***саты****.* ▬ ***Саттан*** *боролғанса артыма ҡарап барҙым.* М. Ғафури.

3. Бер төптән айырылған тармаҡ; сата. *Ағас* ***саты****. Сәнске* ***саты****.* ▬ *Һәнәктең* ***саты*** *айырылды.* Р. Низамов.

**сат II** *р.* Бик ныҡ итеп. ***Сат*** *йәбешеп уҡыу.* ▬ *Ғилман ҡаяға* ***сат*** *йәбешеп тора.* З. Биишева.

**сат III** *оҡш.* Ус менән сикәгә йәки асыҡ тәнгә һуҡҡанда, телде аңҡауҙан ҡапыл айырғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Хөмәйрә ... башына* ***сат*** *иттереп сәпәне.* Ф. Иҫәнғолов.

**сат IV** *киҫ. диал.* Тас. ***Сат** атаһы инде.* ***Сат** бүре төҫлө эт.*

**сатаҡ I** *с.* 1. Сataланып торған, саталы. *Тауҙан аҫҡа сабып килә **сатаҡ** мөгөҙ ҡоралай.* Ш. Бикҡол.

2. *күсм.* Кәмселекле, етешмәгән. *«Эйәле башымды» тигән шиғырым идея-художество йөкмәткеһе яғынан **сатаҡ** әҫәр булып сыҡты.* Н. Нәжми.

**сатаҡ II** *и.* Кәмселекле яҡ, етешһеҙлек. *Тормошомдоң булған **сатаҡтарын** шағирлыҡтан ғына күрҙең һин.* Н. Нәжми.

**сатраш I** *с.* Арҡыры-буй һыҙыҡтарҙан торған; шаҡмаҡлы. ***Сатраш** тауар.* ▬ *Башына ҡыҙыл яулыҡ бәйләгән, **сатраш** күлдәк кейгән ҡатын: — Баҙар сумкаһы юҡмы һеҙҙә? — тип өндәшә.* А. Игебаев.

**сатраш II** *и.* Арҡыры-буй һыҙған шаҡмаҡлы таҡтала уйнай торған уйын; шахмат, шашка. *Толстой ғаиләһе* [*Мөхәмәтша ҡартты*] *үҙ иткән, уның менән бергә шаярған, ҡымыҙ эскән, аҡ кейеҙгә йәйелеп ултырып **сатраш** уйнаған.* К. Мәргән. *Әминбәк ... батшаға **сатраш** уйнарға киткән.* Әкиәттән.

**сатыр I** [*ғәр.*] *и.* 1. Һыу үткәрмәй торған беше туҡыманан йәки кейеҙҙән, тиренән ҡаҙыҡтарга тарттырып киреп, елдән, ямғырҙан ышыҡланыу, ваҡытлыса тороу өсөн эшләнгән еңел ҡоролма. *Сиғандар Үҙәште буйында туҡталып, ... кискә табан дүрт **сатыр** ҡороп, уның әргәһенә ут яҡтылар.* Ж. Кейекбаев.

2. Ямғыр, ҡояштан һаҡланып, баш осонда тотоу өсон эшләнгән еңел көмбәҙ. *Комбайн **сатыры**.* ▬ *Бисәләре баш өҫтөндә **сатыр** тотоп йөрөгән була. Йәнәһе, беҙҙең ҡояш уларға килешеп бөтмәй.* М. Кәрим.

**сатыр II** *оҡш.* Йәшен йәшнәгәндә, ағас һынып ауғанда һ. б. сыҡҡан дауамлы тауышты белдергән һүҙ. ***Сатыр** итеп ҡалыу.* ***Сатыр** итеп һыныу.*

**сауыл I** *и.* 1. Яңғыҙ үҫкән ҙур ҡайын ағасы. *Бай **сауыл**.* *Суҡ **сауыл**.* ▬ *Бейек кенә **сауыл** башында аҡ ҡарсыға микән ҡағынған.* Халыҡ йырынан.

2. Эре ҡайын ағаслығы. [*Ғәрифә — Бикмырҙаға:*] *Һиңә әйтәм, утын бөттө. **Сауылдан** сыбыҡ-сабыҡ булһа*

*ла алып ҡайтһаңсы?* Н. Ҡәрип. *Бер аҙ ел дә сыҡҡан, **сауылдар** сайҡалыша.* К. Кинйәбулатова. *Алагүлкәй буйы **сауылға** ҡыҙ балаҡай сыға уйынға.* Халыҡ йырынан.

**сауыл II** *ҡ.* Бер ерғә тупланыу; өйкөлөү (малға ҡарата). [*Бай:*] *Малдар тарпан булып **сауылып** баçһа, Аҡһаҡ ҡоланы атып үлтереп, ҡалғандарын алып ҡайтығыҙ.* «Аҡһаҡ ҡола».

**саф I** [*ғәр.*] *и.* 1. Үҙ составынан ғына торған, башҡа нәмә ҡушылмаған (төрлө элемент, матдәләргә ҡарата). ***Саф** көмөш.* ▬ [*Тимер — Фатимаға:*] *Аçыл таштар! **Саф** алтындан бит! Ҡайҙан алдың?* Б. Бикбай.

2. Тәбиғи төçөндә булған, болғанмаған, үтә күренмәле таҙа (һыуға һ. б. ҡарата). *Баҡса артында көмөштәй сылтырап **саф** һыу аға.* Д. Юлтый.

3. Туҙаны булмаған, таҙа; бөркөү, тынсыу түгел (һауаға ҡарата). *Һарыға һабышҡан Зөлхизә ҡайһы саҡтарҙа, **саф** һауала бер аҙ күңелен асҡыһы килеп, ҡырға, тәбиғәт киңлегенә сығыр булған.* Н. Иҙелбай.

4. Асыҡ яңғырашлы, яҡшы ишетелгән (тауышҡа, өнгә ҡарата). *Матур йыр, **саф** тауыш Аҡселән буйҙарын яңғыратып, әллә ҡайҙа алыçтарға китә, күңелдә рәхәтлек уята.* Б. Бикбай. *Эй, ҡасан һуң сәхнәбеҙҙә шыңғырар моң, **саф** ауаз.* Ш. Бабич.

5. Ял иткән, арымаған. ***Саф** баш менән.*

6. *күсм.* Бөтә күңелен биргән, ихлас (көс, дәрт һ. б. ҡарата). *Беҙҙең тормош һөйә намыç менән **саф** көс һалған таҙа хеҙмәтте.* Д. Юлтый.

7. Тейешле нормаға, ҡағиҙәгә тап килгән, дөрөç (тел, стилгә һ. б. ҡарата). ***Саф** башҡорт телендә һөйләү.*

8. Әхлаҡ яғынан боҙолмаған, тотанаҡлы; бер ниндәй бысраҡ уйһыҙ, эскерһеҙ; хәйләһеҙ, тоғро һәм намыçлы. ***Саф** тойғо.* ▬ [*Айбулаттың*] *йөрәге әллә ниндәй бер юғары, таҙа, **саф** дуçлыҡ, мәңгелек ышаныс менән тулҡынланып тибә ине.* Һ. Дәүләтшина.

9. Бер ниндәй гонаһы булмаған; ғәйепһеҙ. ***Саф** бала. **Саф** ҡыҙ.* ▬ *Күкрәгемдең михрабында ултыра шәфҡәт*

*яндырып, нурлы шәфҡәттән яралған бер мәләктәй саф ҡатын.* Ш. Бабич.

10. Ниндәйҙер юл менән ҡулға инған, табылған. [*Бәҙрихаят*:] *Бына, Хәтмулла, бөгөн дә илле ете һум туҡһан тин* **саф** *аҡса эшләнек.* Д. Исламов. *Колхоз һуңғы өс йылда йыл һайын уртаса 416 мең һум* **саф** *табыш алды.* Ғ. Ишбулатов.

**саф II** [*ғәр.*] *и.* 1. Бер һыҙыҡҡа теҙелеп баҫҡан йәки барған кешеләр һәм башҡа нәмәләрҙең билдәле тәртиптәге рәте һәм шул рәтте төҙөгән төркөм. *Ғәскәр* **сафы.** *Караптар* **сафы.** **Сафҡа** *теҙелеү.* **Сафҡа** *тороу.* ▬ *Бер төркөм эшсе һалдаттар* **сафы** *булып артҡа сыҡты. Һалдаттар менән эшселәр бутала башланы.* Д. Юлтый. *Дошман* **сафын** *тар-мар итергә изге яуға уҡтай атылдым.* Салауат Юлаев.

2. Бер эш, маҡсат менән берләшкән төркөм, даирә, коллектив. *Партия* **сафы.** ▬ *Етенсе класта, ун дүрт йәштә, мин комсомол* **сафына** *индем.* З. Биишева. [*Талха*] *бесән сапты туғайлыҡта, ярышып алғы* **сафта.** С. Кулибай.

**себешке I** *и.* Ҡайындың ороланып, сырмалып торған беше тамыр төбө һәм шул тамыр төбөнән яһалған һауыт. *Ул* [*ҡатын*] *ҙур бер* **себешке** *ашлау менән һурпа килтереп ултыртты.* Ж. Кейекбаев.

**себешке II** *и.* Боҙолоп, тотош ҡанап торған ваҡ-ваҡ йәрәхәт (күберәк яҙлы-көҙлө һыуыҡ һыу, бысраҡ кисеп, ялан аяҡ йөрөгән балаларҙа була). **Себешке** *сығып бөткән тәпәйҙәргә келәм булды бәпкә үләне.* М. Басыров.

**себешкелә I** *ҡ.* Сырмалып, беше булып, ороланыу (ҡайынға ҡарата). [*Яҡуп*] **себешкеләп** *үҫкән ҡайын төбөнән яһалған туҫтаҡтарға һалып, табында ултырыусыларға таратып бирҙе.* Т. Хәйбуллин.

**себешкелә II** *ҡ.* Боҙолоп, ҡанап торған ваҡ-ваҡ йәрәхәт менән ҡапланыу. *Аяғы* **себешкеләгән.**

**сей I** *с.* 1. Утта бешерелмәгән йәки һыуҙа ҡайнатылмаған. **Сей** *ит.* ▬ *Бер егет* [*йырсыға*:] *«***Сей** *йомортҡа эсеп килергә кәрәк ине», —тип көлдө.* М. Тажи. [*Зимфи-*

*ра — Азаматҡа:*] *Күгәргән ереңә сей картуф ябайыҡмы?* Ә. Бикчәнтәев.

2. Бешеп етмәгән, тейешле дәрәжәлә бешереп еткерелмәгән. ***Сей икмәк.***

2. Өлгөрөп етмәгән, бешеп өлгөрмәгән. ***Сей алма. Сей еләк. Сей ҡарағат.***

4. Һыуы кипмәгән, еүеш, ҡоро түгел. ***Сей ағас.*** ▬ *Түрбаш яҡта килене Бибеш боҫрап, бышылдап ятҡан* ***сей*** *уҫаҡ ярҡаларын тоҡандыра алмай ... өрөп маташа.* З. Биишева. *Ирҙе иртә ҡартайтҡан — насар ҡатын, ҡатынды иртә ҡартайтҡан —* ***сей*** *утын.* Әйтем.

5. Тейешенсә эшкәртеп еткерелмәгән, эшкә индерелмәгән (материалға ҡарата). ***Сей тире.***

6. *күсм.* Еренә еткереп эшләнмәгән (әҙәби әҫәргә, телгә ҡарата). *Йыйынтыҡта күбеһенсә йөкмәткеһе яғынан шыйыҡ, эшләнеше яғынан* ***сейерәк*** *лирик характерҙағы шиғырҙар урын* [*алған*]. С. Кулибай.

7. Тотош бер нәмәнән торған; шау, шыр. *Селтәрҙәрем минең* ***сей*** *мәрйен.* Сеңләүҙән.

**сей II** *киҫ.* Сифат алдынан килеп, уның мәгәнәһен көсәйтә. ***Сей ахмаҡ. Сей ялған.*** ▬ [*Рая:*] *Был йыуаны* ***сей*** *наҙан, ахыры. Ҡыҙҙар менән һөйләшә лә белмәй.* И. Абдуллин.

**сей III** *и.* 1. Эшләре эшләнмәй, теймәй ҡалдырылған урын. ***Сей ҡалдырып тырматыу. Сей ҡалдырып һөрөү.*** ▬ *Аттарҙың төрлөсә тартыуы арҡаһында һабан бураҙнанан сығып китә лә* ***сей*** *ҡала.* М. Ғафури. [*Бригадир*] *ерҙә* ***сей*** *күрһә, борсола ине шуға.* Н. Иҙелбай.

2. *күсм.* Эштәге, тормоштағы етешһеҙ, кәмселекле ер. *Тикшеренеүселәр Нурый бригадаһында бәйләнерлек* ***сей*** *таба алманы.* Б. Бикбай.

**секрет I** [*рус.* < *фр.*] *и. хәрби.* Дошман яғынан күренмәҫлек итеп ҡуйылған өҫтәмә йәшерен һаҡ. ***Секретта*** *ултырыу.* ▬ *Ҡараңғы төшкәс кенә* ***секреттар*** *ҡуйыла.* Д. Юлтый. [*Ғаян:*] *Үҙегеҙ беләһегеҙ,* ***секретҡа*** *йөрөү йәки поста тороу театр ҡарарға барыу түгел.* Б. Дим.

**секрет II** [*рус.* < *лат.*] *и. физиол.* Кеше һәм хайуандарҙа биҙ эшләп һәм бүлеп сығарған төрло матдә (төкөрөк, тире

майы, гормондар, һөт). *Ашҡаҙан аҫты биҙе* ***секреты.*** ***Секрет*** *сығарыу.*

**сеңлә I** *ҡ.* 1. Кейәүгә биргәндәренә әсенеп, үҙенә бер төрлө көй менән йырлай-йырлай зарланыу, сең йырлау (ҡыҙҙарға ҡарата). [*Ҡыҙҙар кейәү*] *егеттең насарлығын йәки ҡартлығын аңлатып* ***сеңләй.*** М. Буранғолов.

2. Зарлы тауыш менән һыҡтау. ***Сеңләп*** *илау.* ▬ [*Гәрәй:*] *Әсемде бошороп, бисәләр һымаҡ* ***сеңләп*** *ултырма әле.* Б. Бикбай.

**сеңлә II** *ҡ.* 1. Сең итеү, сең-сең килеү. *Кемдер килә. Аттары аҡ күбеккә төшкән. Ҡыңғырауҙары* ***сеңләп*** *... һуға.* Т. Хәйбуллин. *Капитандың ... ордендары ... миҙалдары бер-береһенә бәрелеп ...* ***сеңләп*** *ҡуйҙы.* Ә. Байрамов.

2. Сең иткәндәй тауыш ишетелеү (ҡолаҡҡа ҡарата). *Бәҙерниса әбей сәй эскәндә ҡапыл* ***сеңләп*** *китте ҡолағы.* Ғ. Дәүләтов.

**сигә I** *и.* Ике тимерҙе ҡуша беркетә торған сой. ***Сигә*** *менән беркетеү.*

**сигә II** *и.* Ашыҡтың һул яҡ ҡабырғаһы. *Хан алсы уйнағанда ашыҡтарҙы бүлеп алалар. Һуңынан бергә ҡушып һибеп ебәрәләр ҙә, ашыҡтарҙың ятышына ҡарап, алсыһын алсы менән, бөгәһен бөгә менән,* ***сигәһен сигә*** *менән, дауаһын дауа менән парлап алалар.* Хикәйәттән.

**сик I** *и.* 1. Эргәләш дәүләттәрҙең, өлкәләрҙең, биләмәләрҙең, участкаларҙың территорияларын йәки һыуҙарын айырып торған шартлы һыҙыҡ. *Өлкә* ***сиге.*** *Район* ***сиге.*** ▬ *Бирелгән ерҙең* ***сиге*** *ошолай: Аллағол тауынан ҡарағаслы ҡыр аша... Дәүләт баҙлауына тиклем.* Т. Хәйбуллин. *Ҡарсығалай үткер ялан егетен ил* ***сигенә*** *һаҡсы иттеләр.* Ҡ. Даян.

2. Нимәнеңдер сите, барып бөткән өлөшө. ***Сиге*** *күренмәгән йәйелеп ятҡан киң, тигеҙ яланды ҡырҡып үткән оҙон, һай, йәйпе йылға буйына Ялпаҡйылға ауылы урынлашҡан.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Дөйөм ҡабул ителгән норма, сама. ***Сикте*** *белмәү.* ***Сиктән*** *артыҡ.* ▬ *Ҡадир менән уның араһы дуҫлыҡ* ***сигенән*** *сыҡманы.* Б. Бикбай. *Диңгеҙҙең ҡотороуы хәҙер*

*сиктән ашты. Ләкин Зөлхизәне был ҡурҡытмай.* З. Бишева.

**сик II** *ҡ.* 1. Торған ерҙән артҡа хәрәкәт итеү; сигенеү. *Мин ҡапыл туҡта[п], бер-ике аҙым артҡа* ***сиктем.*** Д. Юлтый. *Түрәбай аҡрын ғына ҡапҡаға барғанда, урамда йоҡлап ятҡан алабай абалап өрә башлағас, кире* ***сикте.*** Т. Хәйбуллин.

2. Ҡыҫымға сыҙамай, биләгән ерҙе ташлап, киреғә хәрәкәт итеү; сигенеү. *Улым, ныҡ бул, батыр булып көрәш! Бер аҙым да* ***сикмә*** *артыңа.* Я. Ҡолмой.

3. *күсм.* Кире йүнәлештә хәрәкәт итеү; кире ҡайтыу. *Менгән һаиын офоҡ артҡа* ***сикте,*** *яҡыная барҙым ҡояшҡа.* М. Кәрим.

**сик III** *ҡ.* Берәй эш-хәлде баштан үткәреү; кисереү. *Ғәм* ***сигеү.*** *Михнәт* ***сигеү.*** *Рәхәт* ***сигеү.*** *Хәсрәт* ***сигеү.*** *Яфа* ***сигеү.*** ▬ [*Рәхим:*] *'Ҡарт башым менән бөкрәйеп, аҙап* ***сигеп,*** *һаҙлыҡҡа бата-бата бесән саптым.* Ш. Шәһәр. *Ата менән әсә ыҙа* ***сиккән,*** *күрмәйенсә тормош яҡтыһын.* С. Кулибай.

**сик IV** *ҡ.* Кизе менән биҙәк төшөрөп тегеү. *Йүрмәп* ***сигеү.*** *Күпертеп* ***сигеү.*** *Ҡулъяулыҡ* ***сигеү.*** *Салып* ***сигеү.*** ***Сиккән*** *күлдәк.* ▬ [*Мәһира:*] *Кемгә шулай сүпләп-сүпләп ҡулъяулыҡ* ***сигәһең?*** Х. Ғиләжев. *Кис ултырып ҡыҙҙар* ***сигеү*** *сигә, биҙәктәргә ялғап биҙәкте.* М. Кәрим.

**синыф I** [*ғәр.*] *и.* Билдәле бер тарихи-ижтимағи эшмәкәрлек системаһында тотҡан урыны, етештереү ҡоралына ҡарата булған монәсәбәте, ижтимағи хеҙмәт ойоштороршондағы роле, дөйөм байлыҡтағы өлөшө буйынса айырылған ҙур халыҡ төркөмө. *Капиталистар* ***синыфы.*** *Эшселәр* ***синыфы.*** ▬ *Бөтә донъя халҡы ...* ***синыфтарға*** *бүленгән һымаҡ, Россия мосолмандары ла төрлө* ***синыфтарға*** *бүленә.* Һ. Дәүләтшина.

**синыф II** *и.* Мәктәп курсындағы бер баҫҡыс; класс. *Алтынсы* ***синыф.*** *Беренсе* ***синыф.***

**сираҡ I** *и.* Аяҡтың бәкәлдән тубыҡҡа тиклемге өлөшө. ***Сираҡ*** *ауыртыу.* ***Сираҡ*** *шешеү.*

**сираҡ II** *с.* Ныҡ, тығыҙ ишелгән, ҡаты боролған (бау, епкә ҡарата). ***Сираҡ*** *арҡан.*

**сират I** [*рус.* черёд] *и.* 1. Эҙмә-эҙ бер-бер артлы ниҙер йомошлау өсөн тәртип менән теҙелгән төркөм. ***Сираттка** баҫыу. **Сираттка** теҙелеү. **Сиратта** тороу.* ▬ *Магазиндар әле асылмаған. Бер магазин алдында **сират** теҙелгән.* С. Агиш.

2. Айырым кешенең шул төркөмдәге урыны. ***Сират** алыу. **Сират** көтөү.* ▬ *Башҡорттар төбәге расчёт алған саҡта, Сафаның, Әхмәҙи менән Ҡотлоярҙың **сираты** бергә тура килде.* Һ. Дәүләтшина.

3. Нимәләр үҙ тәртибендә эшләнер ваҡыт. *Шамай кулактың малайы, һыныҡҡа һылтау табып, һуғышҡа бармаҫ өсөн больницаға китте. Нисауа, уға ла **сират** килеп етер әле.* М. Тажи.

4. Эш-хәл барышындағы эҙмә-эҙ тәртип. *Ғәйшә инде. Бөтәбеҙгә лә градусник ҡуйып, температураны үлсәне. **Сират** миңә етте.* С. Агиш. *Берәм-берәм һөйләнеләр, йырланылар, көлдөләр. Миңә **сират** килеп етте. Ҡарышманым.* Д. Юлтый.

5. Шул тәртиптең ниндәйҙер өлөшө. *Төҙөлөштөң беренсе **сираты**.*

**сират II** *ҡ.* Иләгән епте, йөндө ике ҡатлап ишеү. *Еп **сиратыу**.* ▬ *Тайба әбей **сиратып** ултырған йөнөн бер ситкә алып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**сит I** *и.* 1. Нимәнеңдер барып бөткән ере, сите. *Ауыл **сите**. Ашъяулыҡ **сите**. Йылға **сите**. Өҫтәл **сите**. Урындыҡ **сите**. Һыу **сите**. Юл **сите**. Яр **сите**.* ▬ *Ауыл осондағы быуа **ситендә** ҡаҙ бәпкәләре менән бергә бала-саға супырлашып һыу инә.* Ш. Янбаев. *Ҡала буйлап йөрөй торғас, мин уның төньяҡ **ситенә** килеп сыҡтым.* Ғ. Әмири. *Анау бер көнө суҡынған Хәмдиә еңгәм ... табамдың бер ... **ситен** китеп алып килеп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Торған ерҙән, урындан бер аҙ ҡырҙа булған яҡын урын. ***Ситкә** һалыу. **Ситкә** ултырыу. **Ситтә** тороу.* ▬ *Ямал Йомағолдо beләгенән тартҡылап, бер яҡ **ситкә** алып сыҡты.* М. Тажи.

3. Төп тарафҡа, йүнәлешкә ҡырын яҡ; ҡыр. *Ҡыҙ минән ерәнгән һымаҡ итеп битен **ситкә** бора биреп,*

*сырайын һытып, миңә күҙенең ағы менән ҡарап ҡуйҙы.* Т. Йәнәби.

4. Тыуған, торған төйәктән ҡырҙа булған урын; ят ер. ***Ситкә** ебәреү.* ***Ситкә** китереү.* ***Ситтә** йәшәү.* — *Байтаҡ йылдар **ситтә** йөрөп ҡайтһа ла йәш ваҡытында йыш үтергә тура килгәнлектән, йәйләү юлы яҡшы таныш ине Карамға.* Н. Мусин. *Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп **ситкә** ҡыуҙылар.* Салауат Юлаев.

5. Тыуған-ырыуҙан булмаған кеше; ят. *Күп тә үтмәй, беҙҙең ергә **ситтәр** ҡул һуҙа.* Ә. Вахитов. *Илашыуға үҙ яҡшы, һыйлашыуға **сит** яҡшы.* Мәҡәл.

**сит II** *с.* 1. Яҡынлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйләнмәгән. ***Сит** кеше.* ***Сит** халыҡ.*

2. Кемдең дә булһа тыуған йәки һәр ваҡыт йәшәгән ере булып һаналмаған. ***Сит** ил.* — [*Ҡатын:*] ***Сит** ергә китеп үлгәнсе, үҙ йортомда үләм.* Д. Юлтый.

3. Башҡа дәүләткә, илгә йәки бүтән халыҡҡа ҡараған. ***Сит** йолалар.* ***Сит** тел.* — *Үҙемде әллә ниндәй бөтөнләй бер **сит** донъяға килеп сыҡҡан кеүек һиҙҙем, ... бер төрлө рәхәтләнеп һөйләшер кеше булмаҫ кеүек тойолдо.* С. Агиш.

**сорла I** *ҡ.* 1. Сор итеп ҡысҡырыу; сор итеү, соролдау. *Тәлмәрйен **сорлай.*** — *Иркен баҫыу. ... Матур йәй иртәһе. Тирә-яҡта ҡоштар **сорлайҙар.*** Ғ. Мәсғүт. *Ялан еркәйенең буҙ турғайы һауаларға сыҡмай **сорламай.*** Халыҡ йырынан.

2. Сор иткән тауыш сығарыу; соролдау. *Тамаҡ **соролдай.*** *Эсе **сорлай,** ашарға һорай.*

**сорла II** *ҡ.* Нәҙек кенә булып, туҡтауһыҙ ағыу (ҡан, йәш һ. б. нәмәгә ҡарата). *Танауҙан **сорлап** ҡан аға.* *Шишмә **сорлап** аға.* — *Салих уны ҡосаҡлап алды: — Васька, илама! Илама! ... Ә үҙенең күҙенән **сорлап** йәш аға ине.* Х. Мохтар. *Офицерҙың башынан **сорлап** ҡан китте.* Һ. Дәүләтшина.

**сөй I** *и.* 1. Тишеп ҡағып, нимәнелер ҡуша торған нәҙек ағас. *Рамды **сөй** менән ҡағып йыйыу.*

2. Бер башы ялпаҡ эшләпәле, икенсе башы осло нәҙек тимер; ҡаҙау. *Даға **сөйө.*** *Итек **сөйө.*** *Мебель **сөйө.*** —

*Мыҡты кәүҙәле Яҡуп Мырҙабаев* ***сөйҙәре*** *сыҡҡан ҡалтырлаҡ иҙән таҡталарын һығылдыра баҫып, тышҡа атланы.* Б. Бикбай. *Ҡулға алып таҡта,* ***сөй,*** *һиңә яһап ҡуйҙым өй.* А. Игебаев.

3. Кейем-һалым һ. б. элергә ҡағылған ағас йәки тимер ҡаҙаҡ. ***Сөй ҡағыу. Сөйгә элеү. Сөйҙән алыу.*** ▬ *Ҡарасәс ...* ***сөйҙә*** *элеүле торған еләнен алып бөркәнде.* Ғ. Дәүләтшин. *Алан-йолан ҡаранды Сәлим.* ***Сөиҙә*** *атаһының кейемдәре күренмәй. Ҡайтмаған икән әле.* Я. Вәлиев.

**сөй II** *ҡ.* 1. Көс менән ырғытып ебәреү. *Беҙ ул саҡта таҡыр башҡа түбәтәй кейҙек. Бер ергә йыйылып, уны күктәргә* ***сөйҙөк.*** Н. Нәжми.

2. Һунар ҡошон йәнлек, ҡош тибергә осороу, сөйҙөрөү, сөйөлтөү. *Күк ыласын* ***сөйҙөм*** *ҡаҙҙарға, алып төштө һаҙҙарға.* Халыҡ йырынан. *Ҡарсығаа ла* ***сөйҙөм*** ***өйрәккә,*** *тибә алмай ҡунды тирәккә.* Халыҡ йырынан.

3. Көс менән һикертеү, өҫкә ырғытыу. *Дүғалай бөгөлгән ҡайын һиртмә тәпеһенән ысҡынып, ... мине әллә ҡайҙа һауаға* ***сөйөп*** *ебәрҙе.* Н. Мусин. *Иптәштәр «ура» ҡысҡырҙы, шаулашып көлөшә башланы, ә мине күтәреп ҡулдарында* ***сөйҙөләр.*** Д. Юлтый.

4. Шәлдең, яулыҡтың ике осон артҡа шаҡарып бәйләү. *Ҡафия яулығын* ***сөйөп*** *бәйләне лә, бөйөрөнә таянып, бейеп китте.* Ш. Шәһәр. *Бибисара инәй инәлтеп торманы, артҡа яҙып* ***сөйгән*** *ҙур яулығын рәтләй-рәтләй, һикегә һәр кемгә мендәрҙәр ташлай башланы.* Ә. Вахитов.

5. Текә, бейек итеп күтәреү. *Ғәлиәкбәров артҡа ҡайҡая биреп, башын юғары* ***сөйөп,*** *тамағын ҡыра-ҡыра папирос [тоҡандырҙы].* Х. Зарипов.

**сөм I** *с.* Тирәсе бейек, төбө тәрән булған. ***Сөм*** *һауыт.*

**сөм II** *киҫ.* Сифаттың дәрәжәһен көсәйтә. ***Сөм*** *йәшел.* ***Сөм*** *күк.* ▬ *Егет* ***сөм*** *ҡара күҙҙәре менән матур итеп йылмайҙы.* К. Ибәтуллин. *Күҙҙәрең* ***сөм*** *ҡара, хас күмер, бер ҡарауы үҙе бер ғүмер.* Н. Нәжми. *Тупраҡ* ***сөм*** *ҡара бында.* М. Кәрим.

**сөрөш I** *с.* Бит, ҡулдағы ваҡ ҡына булып йыйырылған һырҙар; йыйырсыҡ, сырыш. ***Сөрөш*** *бит.* ***Сөрөш*** *тире.* ▬ *Йәш сағында мыйығы ҡуйы ла, матур ҙа булғандыр*

*бәлки, ә хәҙер ул* ***сөрөш*** *йөҙөндә, әйтерһең, йәбештереп ҡуйылған — тырпайып тора.* Ш. Янбаев.

**сөрөш II** *ҡ.* Сөрөшлөгә әйләнеү, йыйырсыҡланыу; сырышыу. *Бите* ***сөрөшөп*** *бөткән.* ▬ [*Әсәйем*] ***сөрөшөп*** *бөткән тарамыш ҡулын саҡ ҡалҡытып, мине битемдән, башымдан һыйпаны.* Й. Солтанов.

**спираль I** [*рус.* < *фр.*] *и.* 1. Яҫылыҡта ятҡан нөктә йәки күсәр тирәләй тотошлай әйләнгән кәкре һыҙыҡ. ***Спираль*** *һыҙыу.*

2. Шул һыҙыҡ рәүешендәге махсус тимерсыбыҡ йәки сым. *Плитка* ***спирале.*** *Үтек* ***спирале.***

**спираль II** [*рус.* спиральный] *с.* Яҫылыҡта ятҡан нөктә йәки күсәр тирәләй тоташмай әйләнгән кәкре һыҙыҡ рәүешендәге. ***Спираль*** *пружина.* ***Спираль*** *һыҙыҡ.*

**стан I** [*рус.*] *и.* Баҫыу, балыҡсылыҡ һ. б. бригадаларының сезонлы эш осоронда ваҡытлыса торған урыны, торлағы. *Баҫыу* ***станы.*** *Бригада* ***станы.*** ▬ *Барлыҡ трактористар, прицепщиктар, сәсеүселәр — бөтәһе лә иртән иртүк* ***станға*** *йыйылды.* Ә. Вәли.

**стан II** [*рус.*] *и.* 1. Терәк, таяу хеҙмәтен үтәгән ҡоролма. *Тирмән* ***станы.*** *Утын бысыу* ***станы.***

2. Металды баҫым, ҡыҫым менән эшкәрткән машина йәки машиналар системаһы. *Прокат* ***станы.*** *Сым һуҙыу* ***станы.*** ▬ *Был цехта мин үҙем эшләнем. Ҡайнар ... ҡорос киҫәктәрен ҙур ҡыпсыуыр менән әләктереп алып* ***стандарға*** *ташлап йөрөнөм.* М. Хәйҙәров.

**стереотип I** [*рус.* < *гр.*] *и.* Металдан (резинанан йәки пластмассанан) ҡойолған баҫма ҡалыбы, типография наборының йәки клишеның күсермәһе (ишәйтеп йәки ҡабаттан баҫыр өсөн ҡулланыла). ***Стереотип*** *ҡойоу.* ***Стереотип*** *баҫыу.*

**стереотип II** [*рус.* стереотипный] *с.* 1. Баҫма ҡалыбынан, күсермәнән алынған. ***Стереотип*** *баҫма.*

2. *күсм. кит.* Үҙгәрешһеҙ ҡабатланған, ҡалыплашҡан. ***Стереотип*** *фраза.* ***Стереотип*** *яуап.*

**стиль I** [*рус.*] *и.* 1. Идея йөкмәткеһе, художество формаһы ягынан билдәле осор һәм йүнәлеш сәнғәтен йәки сәнғәт оҫталарының индивидуаль алымын асҡан билдәләр

йыйымы. *Ренессанс* ***стиле.*** *Рус опера* ***стиле.*** *Эллин* ***стиле.*** ▬ *Иҙәндә — шәреҡ* ***стилендә*** *туҡылған келәм.* Ғ. Хәйри.

2. Нимәғәлер хас, нимәнелер айырып торған билдәләр, үҙенсәлектәр йыйымы. *Бюрократик* ***стиль.*** *Канцелярия* ***стиле.***

3. Тел сараларын айырым яҙыусыға йәки әҙәби әҫәргә, йүнәлешкә, жанрға хас ҡулланыу алымдары. *Индивидуаль* ***стиль.*** *Роман* ***стиле.*** *Художестволы* ***стиль.*** *Әҙәби* ***стиль.*** ▬ *«Үлмәҫбай» поэмаһының поэтик* ***стиле*** *бик тәбиғи ағыштағы ябай әңгәмә* ***стиленә*** *тартым.* Ғ. Хөсәйенов.

4. Әҙәби телдең функциональ төрө. *Ғилми* ***стиль.*** *Ижтимағи-политик* ***стиль.*** *Публицистик* ***стиль.*** *Һөйләү теле* ***стиле.*** *Эш ҡағыҙҙары* ***стиле.*** ▬ *Ирекле* ***стиль*** *гәзәттә һөйләү теленә хас.* Ж. Кейекбаев.

5. Нимәнелер үҙенсәлекле алымдар менән башҡарыу ысулы. *Етәкселек* ***стиле.*** *Тәрбиә* ***стиле.***

**суҡ I** *и.* 1. Бер осон ҡуша төйөп, икенсеһен һалындырып ҡуйған биҙәүес. *Билбау* ***суғы.*** *Иүгән* ***суғы.*** *Ышлыя* ***суғы.*** ▬ *Бәһәүкәй ҡыҙыл таҡыяны,* ***суғын*** *ҡолаҡ яғына һалындырып, ҡырынырак кейгән.* Т. Хәйбуллин.

2. Ҡуйы булып ялбырап торған ағас йәки ботаҡ осо. *Талғын иҫкән дымлы ел иркенә көрән* ***суғын*** *болғай сирендәр.* Ә. Вәли.

3. Алҡа, беләҙеккә сылтыратып таҡкан ваҡ-ваҡ тәңкә. *Беләҙек* ***суғы.*** *Йөҙөк* ***суғы.*** *Ҡаптырма* ***суғы.*** *Сулпы* ***суғы.*** ▬ *Зөлхизәнең ... сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыһының* ***суҡтарын*** *еләҫ ел сыңлатып уйнай.* З. Биишева.

4. *диал.* Сәсәк. *Ашъяулыҡ* ***суғы.*** ▬ *Разия шәл* ***суғын*** *борғоларға, бармағына урарға тотондо.* Н. Мусин.

**суҡ II** *с.* 1. Күп булып өйкәлөп торған емешле. ***Суҡ*** *ҡарағат.* ***Суҡ*** *муйыл.* ▬ *Бер* ***суғыраҡ*** *муйылды эйелтәм тип, ҡайын киҫкәһенә менеп баҫҡайным, ул серек булған икән, ... йығылдым.* Н. Мусин. ***Суҡ*** *еләктәр өҙгәнбеҙ, тәгәстәргә тиргәнбеҙ.* Б. Бикбай.

2. Ҡуйы ялбыр ботаҡлы. ***Суҡ** ҡайын. **Суҡ** тирәк.* ▬ *Бара ғына бара мин ултырҙым **суҡ** сыуалҡай төбө һалҡынға.* Халыҡ йырынан.

**сулпы I** *и.* Ҡаҙандан һалма, ит, бауырһаҡ кеүек нәмәне һөҙөп ала торған тишекле йәки үргән сүмес; һалмалғыс. *Фариза һалманы **сулпы** менән һоҫоп, ... ҡәйнәләре эргәһенә урындыҡ өҫтөнә килтереп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**сулпы II** *и.* 1. Ҡатын-ҡыҙҙың уртаға таш ҡуйып, ос буй тәңкә тояҡ төшөрөп яһалған биҙәүесе (сәсүрмескә, ҡашмауға тағыла). *Көйәнтәле **сулпы**. Ҡуш **сулпы**.* ▬ *Ике оҙон ҡалын толомо ике яу(ы)рыны аша алға әйләнеп төшкән, остарындағы **сулпылар** һәлмәк кенә сайҡала.* Һ. Дәүләтшина.

**сур I** [*гәр.*] *и. иҫк.* Һорнай, борғо. ***Сур** өрөү.* — [*Илсе*] *нәгрә орҙо, **сур** кеүек бер торбанан ен-бәреиҙәр сыҡты һикереп мөрйәнән.* Ш. Бабич.

**сур II** *и.* Ҡаты булып, ороланып торған, төпләнеп сыҡҡан шеш. ***Сурға** сей ҡамыр ябалар.*

**сур III** *и. иҫк.* Башҡа төшкән ауыр ҡайғы, хәсрәт; бәлә. *Һылап-һыйпап үҫкән зифа буйым бәхетһеҙлек менән хур булды, ата-бабам дәрәжәһе ғәзиз башҡайыма **сур** булды.* Бәйеттән.

**сутла I** *ҡ.* Бура бүрәнәһен эс яҡтан тигеҙләп сабыу. *Өй һалыуҙың ... әллә ни хикмәте лә юҡ һымаҡ, бер ҡараһаң. Бура бурайһың да мүкләп өйәһең, **сутлап** шымартаһың.* Я. Вәлиев. *Өй һалыуҙың ние бар: мүкләйһе лә **сутлайһы**.* Әйтем.

**сутла II** *ҡ. һөйл.* Һанау, иҫәпләү. *Ошо ерҙә утау утаған, көнөн билсән йыйып, төндәрендә ярыша-ярыша йондоҙ **сутлаған*** [*малаиҙар беҙ*]. С. Ғәбиҙуллин.

**сутла III** *ҡ. һөйл.* Ниҙелер әҙләп-әҙләп кенә йәшереп алып, ныҡ кәметеү. *Балалар кәнфитте **сутлап** бөткән.*

**сүбәк I** *и.* Етенде, киндерҙе талҡып тарағандан һуң ҡалған ҡыҫҡа сүс; ҡаба төбө. *Етен **сүбәге**. Киндер **сүбәге**. **Сүбәк** иләү.* ▬ *Майлы ҡулын **сүбәккә** һөртә-һөртә Камил килде, ... Азаматов менән ҡул биреп иҫәнләште.* Ә. Вәли. *Ауырға торған ҡапҡаларҙан **сүбәктәре** сыҡҡан бүрек кейгән бер нисә кеше... күренде.* М. Ғафури. *Вәли **сүбәк***

*һалып һырығған ҡырҡ ямаулы иҫке юрғаны аҫтынан башын ҡалҡытып ҡараны.* С. Ханов. ***Сүбәк** сәйнәп май сыҡмай.* Әйтем.

**сүбәк II** *и.* Үксәһеҙ еңел аяҡ кейеме. *Ҡатын йомшаҡ **сүбәге** менән тауышһыҙ ғына атлап, урынына кире килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**сүк I** *и.* Ҡыҙҙырып, килелә төйгән тары ҡурмасы (һөт йәки ҡаймаҡ ҡушып ашайҙар). *Иртә менән ашалған бер каса тары **сүге** [Арғынбайҙың] көсөн оҙаҡ һаҡлай алманы.* С. Агиш.

**сүк II** *ҡ.* 1. Аяҡ быуындарын бөгөп, буйҙы түбәнәйтеү, сүкәйеү. *Ергә **сүгеү**. **Сүгеп** ултырыу.* ▬ *Байназар, ҡурҡыуҙан бигерәк, быҙауҙарҙы ҡыҙғанып, үкереп илап ебәрҙе һәм башын баҫып ергә **сүкте**.* Б. Бикбай. *Минең улым да ҡом өҫтөнә **сүгеп**, ... шаҡмаҡтан өй яһарға тотондо.* Р. Низамов.

2. Бейеклеккә, буйға кәмеү; түбәнәйеү. *Зөлфиә берсә бәләкәс кенә булып, **сүгеп** киткән, берсә ... күтәрелеп киткәндәй була.* Һ. Дәүләтшина.

**сүллек I** *и.* Сүл булган ер. *Тормош ҡалҡа **сүллек**, ҡомда ла.* М. Тажи.

**сүллек II** *и. диал.* Сикүшкә. [*Ғибаҙулла:*] *Аш алдынан ғына төшөрөрмөн, тип бер **сүллекте** лә алып ҡайтып ҡуйҙым.* Д. Исламов.

**сүп I** *и.* 1. Ниҙеңдер күркен ебәргән кәрәкһеҙ йәки ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә. ***Сүп** йыйыу.* ▬ *Беҙ өсәүләп ҡураны һеперҙек. Унда хәҙер бер генә **сүп** тә юҡ.* М. Кәрим. [*Өйҙөң*] *стеналары бысраҡ, иҙәндәре **сүп**.* Д. Юлтый.

2. Осоп, туҙып йөрөгән ваҡ ҡына бер киҫәк, остоҡ. *Малайҙар яр буйында ут тоҡандырып ... ашарға ултырғанда, береһенең күҙенә **сүп** төштө.* Я. Хамматов.

3. *һөйл.* Бәләкәй генә нәҙек сыбыҡ. [*Әбей*] *ҡыҙыл алдырҙың ситен бармағы менән һыпырып, өҫтөнә бисмилла итеп арҡыры **сүп** һалды.* Һ. Дәүләтшина.

4. *күсм.* Бер кемгә кәрәкмәгән, иҫәпкә алынмаган, һанга һуғылмаган кеше йәки нәмә. [*Аҡыл һатыусылар араһына*] *барып ҡыҫылһаң һин, һинең һүҙең улар осөн **сүп** кенә.* С. Агиш.

5. Бер ниндәй ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған, еңел башҡарыла торған нәмә. ▬ [*Ҡолҡай — Зөлхизәгә*:] *Була ул, апай,* [*ҡурай тарта*] *белгән кешегә* ***суп*** *тә түгел ул. Уйнайбыҙ уны.* Н. Иҙелбай.

**сүп II** *и.* Баҫыуҙа иген һ. б. араһында үҫкән төрлө үлән; ҡый. *Игенде* ***суп*** *алған. Июнь айында суп үләне бик шәп үҫә. Картуф баҡсаһын* ***суп*** *баҫҡан, суп-сарын утарға кәрәк.* Ж. Кейекбаев.

**сүплә I** *ҡ.* 1. Сүп төшөрөп, сүп ташлап, сүпле итеү. Иҙәнде **сүпләү.** *Ишек алдын* ***супләү.***

2. Кәрәкмәгән башҡа сит нәмә ҡатнаштырыу. *Телде* ***супләү.***

**сүплә II** *ҡ.* Сүп үҫтереп, сүпле итеү. *Баҡса* ***супләү.*** *Баҫыуҙы* ***супләү.***

**сүплә III** *ҡ.* 1. Берәм-берәм алыу, берәмләп йыйыу. *Башаҡ* ***супләү.*** *Ем* ***супләү.*** *Емеш* ***супләү.*** *Картуф* ***супләү.*** ▬ *Сейәбикә кисә көндөң буйына тигәндәй Сейәле ҡыр буйында ҡыр емешен* ***супләп*** *арманһыҙ булып арып ҡайтты.* Т. Хәйбуллин.

2. Киндер һуҡҡанда, биҙәк һалыу өсөн буйлыҡ ептәрҙе һанап айырыу; суптарлау. ***Супләп һуғыу.***

3. *күсм.* Аранан һайлап алыу. *Иәш телселәребеҙҙән мәрхүм Мисбах Моратов «Башҡорт һүҙлеге» өҫтөндә эшләгәндә, журналдарҙа баҫылған башҡорт фольклоры материалдарынан* ***супләп*** *меңгә яҡын яңы* ***һүҙ*** *яҙып алды.* Ғ. Амантай.

4. *күсм.* Берәм-берәм тотоу, берәмләп һайлау, алыу. [*Сағанбай*:] *Пугачёвтың яуы баҫтырылғас, уның яҡындарын* ***супләй*** *башланылар.* Ҡ. Даян. *Боецтар дошманды* ***супләп*** *атыу буйынса үҙҙәренең иҫәбен астылар.* Ә. Ихсан.

**сүп-сар I** *и. йыйн.* Теләһә ниндәй сүп. ***Суп-сарҙан*** *таҙартыу.* ▬ *Сәғиҙә ... ҡойма буйындағы* ***суп-сарҙы*** *һеперергә тотондо.* М. Тажи. *Кино ҡарағанда ... көнбағыш ярып, бөтә аяҡ аҫтын малай* ***суп-сар*** *менән тултырған.* Т. Арслан.

2. *күсм.* Теләһә ниндәй файҙаһыҙ ваҡ-төйәк, буш нәмә. *Һөймәйем мин, ниндәй күркәм булһа ла, үҙ шиғырым,*

*сөнки һөймәçкә хаҡым бар — һәммәһе лә үҙ* ***сүп-сарым.*** Ш. Бабич.

**сүп-сар II** *и. йыйн.* Баҡса, баçыуҙы баçып алған төрлө сүп. *Картуф баҡсаһын сүп баçҡан,* ***сүп-сарын*** *утарға кәрәк.* Ж. Кейекбаев.

**сүрәкә I** *и. этн.* Керәшен татар ҡатындарының яулыҡ өçтөнән текә итеп маңлайға ҡуя торған уҡа биҙәкле йәки сиғеүле, оҙон киң ҡойроҡло баш кейеме. [*Маҡтымһылыу*:] *Тупый ҡашмау киймәç наҙ инем дә,* ***сүрәкәңде*** *кейҙерҙең дә, ғәүер.* «Маҡтымһылыу».

**сүрәкә II** *и.* Балалар уйыны. *Малай-шалай* ***сүрәкә*** *һуға.* Р. Солтанғәрәев.

**счёт I** [*рус.*] *и. бухг.* Финанс операцияһы, шулай уҡ айырым учреждение, предприятие йәки кешеләр алып барған финанс операцияларын иçәптә тотоу өсөн хеҙмәт иткән документ. *Вкладтар* ***счёты.*** *Иçәп* ***счёты. Счёт*** *асыу.* ***Счётҡа*** *аҡса күсереү.* ***Счётты*** *ябыу.*

**счёт II** [*рус.* счёты] *и.* Арҡыры тимерсыбыҡтарға күсереп йөрөтмәле унар-унар төймә теҙеп, дүрт мөйөшлө рамға ҡуйып яһалған ябай иçәп ҡоралы. ***Счётҡа*** *һалыу.* ▬ *Приказчик ... сөйҙәге* ***счётты*** *алып, бармаҡтарын төймәләр өçтөндә күҙ эйәрмәçлек ашығыс уйнатып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**сығым I** *и.* Тотонолған йәки тотоноласаҡ аҡса, мал. *Материаль* ***сығым.*** *Төҙөлөш* ***сығымы.*** *Туй* ***сығымы.*** ▬ *Халыҡ депутаттары советтарына һайлауҙар үткәреү менән бәйләнгән* ***сығымдар*** *дәүләт иçәбенә тотола.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

2. Бухғалтерия кенәгәһендә тотонолған аҡса-мал иçәбен теркәй торған графа йәки бүлек. ***Сығымға*** *теркәү.*

3. Ниндәйҙер шыйыҡ нәмәнең билдәле ваҡыт эсендә сығыу күләме. *Йылғаның һыу* ***сығымы.***

**сығым II** *с.* Ярһыу булыу сәбәпле тиҙ арыусан (атҡа ҡарата). ***Сығым*** *йүгеректең тын-ҡарыуы дүрт-биш саҡрымға ғына етә.* С. Кулибай.

**сыңрау I** *ҡ.* Иңрәгән һымаҡ яңғырауыҡлы нәҙек тауыш сығарыу (ҡолон, торна һ. б. ҡарата). *Сыңғыр-сыңғыр* ***сыңраған*** *йылҡыһы күп Уралтау.* Ҡобайырҙан.

**сыңрау II** *с.* Тауышы моңло, һағышлы (торнаға ҡарата). *Сыңрай-сыңрай осоп килде* ***сыңрау*** *торнаҡай.* Р. Ғарипов.

**сырма I** *ҡ.* 1. Тирә-яҡтан уратып алыу, уратып үҫеү. *Ҡурай еләге һабаҡтары, шомбоя* ***сырмап*** *ташлағанлыҡтан, ... бына-бына һәләк булабыҙ тигәндәй, һерәйешеп ултыралар.* Р. Ғабдрахманов. *Алма ағасын* ***сырмаған*** *дегәнәктән ике ҡарға сығып, теге ике ҡоштоң ояһын туҙҙыра башланы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

2. Еп йәки банҡа берәй нәмә менән ян-яҡтан ҡат-ҡат уратыу, уратып-уратып бәйләү. **Сырмап бөтөрөү.** ▬ *Ҡулактар уны [Морат ағайҙы] урманда аңдып тороп үлтергәндәр ҙә, дилбегәһе менән* ***сырмап,*** *бер ҡарағай ботағына аҫып ҡуйғандар.* М. Тажи. *Мөғәллимәнең аяғында бау менән* ***сырмап*** *бәйләнгән оҙон ҡунысլы, бейек күтәрмәле ҡара ботинка.* З. Биишева.

**сырма II** *ҡ.* Солғау. *Гөлъямалдың йөрәген ҡурҡыу* ***сырмап*** *алды, ҡапыл ағарынды.* Я. Хамматов. ***Сырмап*** *алған ер йөҙөн бер эс бошорғос гәмле көй.* Ш. Бабич.

**сырмал I** *ҡ.* Нимәнеңдер араһына инеп буталыу, нимәгәлер уралыу (ғәҙәттә үҫемлектәргә ҡарата әйтелә). *Бынан бер нисә тиҫтә миллион йыл элек хәҙерге Башҡортостан ерендә тропик климат булған, ... ҡотороп, бер-береһенә* ***сырмалып,*** *тропик ағастар үҫкән.* Д. Бураҡаев. *Был дегәнәк күл аша сығып, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә үҫкән алма ағасына* ***сырмалды,*** *ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**сырмал II** *ҡ.* Солғаныу. *Ҡырҙар нурланған, бөтә ер күге нурға* ***сырмалған.*** Ш. Бабич.

**сырмалсыҡ I** *и.* Сырмалып, үрмәләп үҫкән оҙон һабаҡлы сүп үлән. *Урман* ***сырмалсығы.*** ▬ ***Сырмалсыҡ*** *менән бик ныҡ аралашҡан булһа ла, арыш уңған ине.* Х. Ғиләжев.

**сырмалсыҡ II** *с.* Ныҡ буталып, аңлауы ҡыйынлашҡан (эш-хәлгә ҡарата). **Сырмалсыҡ эш.** ▬ *Уйҙар, уйҙар... Юламановтың* ***сырмалсыҡ*** *уйҙары.* Я. Вәлиев.

**сырт I** *р.* Нытҡ итеп ҡыҫып (күҙҙе йомоуға ҡарата). [*Ҡатын*] *күҙҙәрен* ***сырт*** *йомоп кәмәнең ситенә тотондо. Ел ҡотороғандан ҡоторондо.* И. Абдуллин.

**сырт II** *оҡш.* Теш аша төкөргәндә, тимер тимергә тейгәндә, эләккән ерҙән ысҡынғанда һ. б. шартлап сыҡҡан нәҙек тауышты белдергән һүҙ. ***Сырт*** *итеп һыныу.* ***Сырт*** *итеү.* ***Сырт*** *иттереп төкөрөү.* ▬ *Ғариф ағай ... үҙенең ҡайыш-майыш тегенгәндә ҡуллана торған ҡоралдарын эшкә ҡушҡас ҡына, портфель* ***сырт*** *итеп асылып китте.* Б. Бикбай.

**сырыш I** *и.* 1. Бит, ҡулдағы нытҡ ҡына булып йыйырылған һырҙар; йыйырсыҡ. *Биттәге* ***сырыш.*** ▬ *Муйылбикәнең ... күҙ тирәләрендә яҡшы уҡ беленә башлаған* ***сырыштары*** *йәш сағындағы матур ғына булғанын әйтеп тора.* Һ. Дәүләтшина. [*Әминә*:] *Ҡайтып ҡайһылай арыу иттең әле, улым, — тине* ***сырыш*** *баҫҡан ҡаҡса битендәге тирҙе һөртөп.* Н. Мусин.

2. *һөйл.* Ойпаланыуҙан, йомарланғандан барлыҡҡа килгән һыр. *Итәктең* ***сырышын*** *һыпырып төҙәтеү.*

**сырыш II** *ҡ.* 1. Сырышлыға әйләнеү, сырыш менән ҡапланыу; йыйырсыҡланыу. *Хөббөниса абыстайҙың сикәләре* ***сырышып,*** *... сәстәренә сал ингән.* Т. Хәйбуллин. *Йәш ваҡытта һәр кем матур була, ә ҡартайғас йөҙө* ***сырыша.*** Б. Вәлит.

2. *һөйл.* Ойпаланып бөтөү: йомарланыу, таушалыу. ***Сырышҡан*** *күлдәк.* ▬ *Ҡыш һаҡларға һалып ҡуйылған кейемдәрҙе* ***сырышҡан,*** *йыртылған йәки төймәләре төшкән килеш ҡалдырырға ярамай.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 2 декабрь.

**сыт I** *и.* Ел һуҡҡан яҡтан ышыҡ булһын өсөн талдан, ҡабыҡтан, йәки һаламды ҡыҫып эшләнгән ҡойма. ***Сыт*** *тотоу.*

**сыт II** *и. диал.* Ҡабыҡтан йәки талдан үргән ҡорот һауыты; мәрке. [*Ҡатын*] ***сыттан*** *ун биш башлап ҡорот... индерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**сыт-сыт I** *оҡш.* Күҙҙе ҡапыл-ҡапыл йомоп асҡанды белдергән һүҙ. *Күҙҙе* ***сыт-сыт*** *йомоу.*

**сыт-сыт II** *оҡш.* Шыҡылдап йәки сылтырап сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. ***Сыт-сыт** килеү. **Сыт-сыт** счёт төймәһен тартыу.*

**сытыр I** *и.* Ваҡ ҡыу ағас; ағас ботаҡтары. ***Сытыр** йыйыу. **Сытыр** яғыу.* ▬ *Ағас төптәрендәге ҡоро **сытыр** уның* [*Азаматтың*] *ҡалын табанлы итеге аҫтында сыртлап һына.* Ҡ. Даян. *Быҫҡып янған утты осраттым да ҡорорағын һалдым **сытырҙың**.* Я. Ҡолмой.

**сытыр II** *оҡш.* Ҡоро ваҡ ағас һынғанда, йоҡа беше әйбер йыртылғанда сыҡҡан йәки шуға оҡшаш бүтән төрлө сағыу тауышты белдергән һүҙ. ***Сытыр** итеп йәшен атты. **Сытыр** итеү.*

**сыуал I** *и.* Утынды һөйәп яға торған ҙур ауыҙлы, тура мөрйәле элекке мейес. ***Сыуалға** яғыу.* ▬ [*Килене*:] *Ҡәйнәм, ... өйгә мейес тә сығартайыҡ, гел генә **сыуал** менән ҡыйын бит, бер нәмә бешереп булмай.* Т. Йәнәби.

**сыуал II** *ҡ.* 1. Тәртипһеҙ аралашып буталыу; сырмалыу. *Улар* [*ҡыр ҡаҙҙары*] *талған ҡанаттарын. **сыуалған** йөндәрен суҡыштары менән рәтләйҙәр, ҡағыналар.* М. Ғафури. [*Сәғиҙәнең*] *сәсе ҡалай оҙон, ятҡан саҡта муйынынан **сыуалмай** микән?* М. Тажи.

2. Кем йәки нимәлер тирәһендә уралып йөрөү; уранғылау. [*Ҡушай — Ишәгә*:] *Һин бит кухня тирәһендә йышыраҡ **сыуалаһың**...* [, *— тине*]. С. Кулибай. *Ошо көндән һуң ул* [*Таһир*] *ат тирәһендә **сыуала** башланы.* К. Мәргән.

3. *күсм.* Ниндәйҙер эш-шөғол менән ныҡ мәшғүл булыу, мәшәҡәтләнеү. *Баҡса эше менән **сыуалыу**.* ▬ *Тормош мәшәҡәте менән **сыуалып**, сәсемде ҡар, ямғыр һыуы менән йыуып торорға ла ваҡытым юҡ.* М. Садыҡова.

4. Кем менәндер аралашыу, бәйләнештә, мөнәсәбәттә булыу. *Колчаксылар менән **сыуалыу**.* ▬ [*Хәлити — Сафияға*:] *Уның* [*Шоңҡарҙың*] *янында **сыуалырға** тырышыусылар күп булыр. Береһен яҡын ебәрмә.* Ә. Атнабаев.

5. *күсм.* Ғишҡи мөнәсәбәттә булыу, йөрөү. [*Тимерйән*:] *Сөйөмбикәгә ни булған?* [*Ғиндулла*:] *Ни булһын! Һине көтөп ултыраһы килмәгән, кем менәндер **сыуалған**.*

Ш. Янбаев. [*Хәкимов*] *уңманы малайҙарҙан, эскегә һабыштылар, бисә-сәсә менән* ***сыуалдылар.*** Б. Бикбай.

6. Эҙмә-эҙлекле тәртипте юғалтыу, буталсыҡ хәлгә килеү; буталыу (фекергә һ. б. ҡарата). *Баш* ***сыуала.*** *Фекер* ***сыуала.*** ▬ [*Тимеркәйҙең*] *уйҙары* ***сыуалды,*** *башы эшләмәй башланы.* Д. Юлтый. *Ҡомсомолкам иҫемә төшһә, бөтә зиһенем* ***сыуала.*** Халыҡ йырынан.

**сыуалыш I** *и.* 1. Шау-шыулы, ығы-зығылы ваҡиға; бола. *Автоматтар үҙ эшенә тотондо. Сидоренконың пулемёты ярһып татылдай башланы. Аҡланда* ***сыуалыш*** *китте.* «Ағиҙел», 1969, № 8.

2. Хакимлыҡҡа ризаһыҙлыҡ белдергән күмәк актив хәрәкәт; бола. *Эстонияла крәҫтиәндәр* ***сыуалышы*** *башланғас, урындағы властар тотҡондарҙы* [*Салауат менән Юлайҙы*] *Себергә ебәрергә уйлай, ләкин сенаттың генерал-прокуроры быны тыя.* Р. Солтангәрәев.

**сыуалыш II** *ҡ.* 1. Ығы-зығы, сыр-сыу килеү; боларыу. *Байтаҡ* ***сыуалышҡас,*** *ҡыҙҙар ултырышып бөттө.* М. Кәрим.

2. Ризаһыҙлыҡ белдереп, күтәрелеп сығыу, хәрәкәткә килеү. *Яйыҡ буйында казактар* ***сыуалыша*** *башланы.* Салауат Юлаев.

**сәғәт I** [*ғәр.*] *и.* 1. Тәүлектең егерме дүрттән бер өлөшөнә (алтмыш минутҡа) тигеҙ булған ваҡыт берәмеге. *Һигеҙ* ***сәғәт*** *эшләү. Ярты* ***сәғәт*** *ял итеү.* ▬ ***Сәғәттәр*** *ҙә оҙон тойолдолар, һағынһындар әйҙә, тигәндәй.* М. Хәй. ***Сәғәтенә*** *алтмыш минут — минут һайын һағынам.* Халыҡ йырынан.

2. Тәүлек башынан йәки көн уртаһынан иҫәпләп кителә торған алтмыш минутлыҡ ваҡыт үлсәме. *Иртәнге* ***сәғәт*** *биш.* ▬ *Һеҙ, иптәш Янһаров,* ***сәғәт*** *өстә минең янға инеп сығығыҙ.* Б. Бикбай.

3. Дәрес, лекция өсөн билдәләнгән ваҡыт араһы (ғәҙәттә ҡырҡ биш минут). *Тәнзилә лекцияның һуңғы* ***сәғәтен*** *тыңламаны.* Р. Низамов.

**сәғәт II** [*ғәр.*] *и.* Тәүлек эсендәге ваҡыт берәмлеген иҫәпләй торған прибор. *Ҡул* ***сәғәте.*** ▬ *Гөлсөм* ***сәғәтенә*** *ҡараны: иртәнге биш ине.* Я. Вәлиев. *Өй эсен ауыр тынлыҡ*

*баҫты. Теле тутығып бөткән стена **сәғәте** иренеп кенә йөрөй.* Ә. Зәйнуллин.

**сәғәтлек I** *и.* Сәғәттең сәғәт һанын күрһәткән ҡыҫҡа теле; бәләкәй стрелка. *Сәғәттең **сәғәтлеге**.*

**сәғәтлек II** *с.* Күпмелер сәғәт һаны менән сикләнгән, күпмелер сәғәткә тиң. *Ике **сәғәтлек** юл. Ярты **сәғәтлек** эш.*

**сәп I** *и.* 1. Тоҫҡап атыр өсөн ҡуйылған билдә; мәрәй. ***Сәпкә** атыу. **Сәпкә** төҙәү.* ▬ *Беренсе рубежда уҡ биш пуляның дүртеһе **сәпкә** теиҙе.* Р. Низамов. *Атылған уҡ, тылсымлы уҡ тейә тора **сәпкә** туҡ-туҡ.* Р. Назаров.

2. Атыр, утҡа тотор өсөн ҡорал йүнәлтелгән нәмә йәки урын. *Әнүәр... ашыҡмаҫҡа, бомбаларҙы тик **сәпкә** ташларға тырышты.* Ш. Бикҡол.

3. *күсм.* Тәнҡитләү йәки ғәйепләү объекты булған кеше йәки нәмә. *Һүҙ уйнатыу ярҙамында бик оҫта бирелгән был сарказм үҙ көсөнә ныҡ ышанған тыныслыҡ яҡлыларҙың һуғыш суҡмарҙарынан мәсхәрәле көлөүе булып **сәпкә** бәрә.* Ғ. Хөсәйенов. *Эшләнгән эш — мәңгелеккә киткән, әйткән һәр һүҙ **сәпкә** тейгән саҡ!* Ә. Вахитов.

**сәп II** *оҡш.* Тәнгә, һыулы нәмәгә ус йәки бүтән яҫы нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Сәп** иттереп сикәгә һуғыу.*

**сәс I** *и.* Кешенең башында үҫә торған мөғөҙ матдәнән ғибәрәт нәҙек кенә еп һымаҡ төк. *Бөҙрә **сәс**. Ҡара **сәс**. **Сәс** алдырыу. **Сәс** тарау.* ▬ *Нығ, ҡаты тәбиғәтле кешеләрҙең **сәсе** бик ағарып бармай. Был бәхәсһеҙ.* Х. Зарипов. *Уҙған төндә күл ситендә **сәс** тараным, нур сәсеп, ошо егет тотоп алды, китә алманым мин ҡасып.* «Аҡбуҙат».

**сәс II** *ҡ.* 1. Үҫтереү өсөн орлоҡто алдан эшкәртелгән тупраҡҡа һибеү, ултыртыу. *Арыш **сәсеү**. Бойҙай **сәсеү**. Оялап **сәсеү**.* ▬ *Ҡарттар иген **сәсергә** килә. Улар тарыны күнәккә тултырып ала ла ергә һибә.* Ж. Кейекбаев. *Сәлмән ... һәйбәтләп картуф **сәсеп** ебәреү тураһында юлдың буйынан-буйына уйлап ҡайтты, ти.* Әкиәттән. *Арпа ғына **сәсһәң**, **сәс** сиҙәмгә, яҙғы ла ғына монар алмаһын.* Халыҡ йырынан. *Барыҫ йылды барын **сәс**, һис бул-*

*маһа тары **сәс**.* Мәҡәл. *Ҡасып китһәң дә **сәсеп** кит.* Мәҡәл. *Ни **сәсһәң**, шуны урырһың.* Мәҡәл.

2. Түгеп, һибеп төрлө ергә төшөрөү, тәртипһеҙ рәүештә тырым-тырағай таратыу. *Һаламды ян яҡҡа **сәсеп** таратып ташлау.* ▬ *Тоҡтоң ауыҙын асайыҡ, йыуасаһын **сәсәйек**.* Туй йырынан.

3. Туҙҙырып, тирә-яҡҡа осороу, ситкә сәсрәтеү; бөркоү, һирпеү (төкөрөктө һ. б.). *Полковник Зенченко ... һөйләгәндә ауыҙынан күбектәр **сәсте**.* Д. Юлтый. [*Иблис*] *ҡотора, дулай, зыҡ ҡуба гифрит кеүек, үкерә, ауыҙынан **сәсеп** ҡайнар күбек.* Ш. Бабич.

4. *күсм.* Төрлө яҡҡа һибеү, таратыу (яҡтылыҡҡа, нурға, еҫкә һ. б. ҡарата). *Ун минут ҡына элек көлөп, нур **сәсеп** торған ҡояш төтөн артында ҡалды.* И. Насыри. *Ялҡын һибеп, ҡыҙыл күмер **сәсеп**, ут ямғыры яуа, бөркөлә.* Ш. Бабич.

5. Халыҡҡа билдәле итеү, таратыу. *Дандар **сәсеп** илгә, күпте илатып, ошомо һуң данлы егетең.* Сеңләүҙән.

6. Үҙенә башҡа бер хис менән ҡарау (күҙгә ҡарата). [*Ғибаҙулла*:] *Минең бисә булғас, ҡулына алған эше йырлап торһон, ире йәйләүҙән һағынып ҡайтҡанда, башы-күҙе дәрт **сәсеп** торһон*! Д. Исламов.

7. *күсм.* Кеше араһына таратыу, кешегә еткереү (белемгә һ. б. ҡарата). *Ғилем **сәсеү**.* ▬ *Минең табыла шатлыҡ сәғәттәрем илгә белем **сәскән** көномдә.* Ғ. Амантай.

8. *күсм.* Халыҡ араһына таратыу, кешегә һөйләү (һүҙ, хәбәргә ҡарата). *Ғәйбәт **сәсеү**.* ▬ [*Ғаббас*:] *Ҡара, Тәнзилә еңгә, һинең ауыҙыңда һүҙ тормай торған. Был хаҡта теләһә кемгә **сәсеп** йөрөмә.* М. Тажи.

9. Ыуылдырыҡ һалыу, таратыу (балыҡҡа ҡарата). *Суртан ыуылдырыҡты яҙғы ташҡында **сәсә**.*

**сәсә I** *и.* Аттың бәкәлендәге оҙон йөн. [*Ерәнсәй*] *нуҡта теҙгене аша баҫҡан да, алғы аяғының **сәсәһенән** әләктереп алған.* С. Агиш. *Матур **сәсә** — тайҙыҡы, матур бисә — байҙыҡы.* Әйтем.

**сәсә II** *и.* Һунар иткәндә, айыу тиҙ генә өңөнән килеп сыға алмаһын өсөн өң ауыҙына тыға торған ботаҡлы-ботаҡлы ағас. «Айыу бында!» — тинем мин. «*Хәҙер **сәсә***

*ҡырҡып алам да, **сәсә** һалырбыҙ. Айыу ҙур бит, бәлки, бер атыуҙа үлтереп тә булмаҫ».* М. Сәғитов.

**сәсә III** *и.* Ҡушар-ҡушар итеп ҡыуыушлап, береһенең өҫтөнә береһен ҡыйыҡлап ултыртылған көлтә өйөмө. *Әсәйем минән тиң эшләйем тип, беҙ Йәмилә менән 800-әр көлтә бәйләп ташлағанбыҙ. **Сәсәгә** лә үҙебеҙ ултырта барабыҙ.* К. Кинйәбулатова.

**сәсә IV** *ҡ.* 1. Тын юлына нимәлер тәьҫир иткәндән, тын ала алмай быуылып-быуылып йүткереү. *Сәйгә **сәсәү**.* ▬ *Трофимовтың төҫө үҙгәрҙе, тын алышы ҡыҫылды, **сәсәй** башланы.* Я. Хамматов.

2. Тын етмәгән йәки тын юлы тығылғандан быуылыу. ***Сәсәгән** ат. **Сәсәп** ауыу.* ▬ [*Әсәһе — Нурыяға*:] *Һин тағы шәп йүгерәм тип, **сәсәп** ҡуй.* С. Агиш. *Бер йәш һылыу ҡанға **сәсәп** ауҙы.* М. Кәрим. *Әлеүкәй менән атаһының аты бер-бер артлы **сәсәп** йығылып тора, үҙҙәре икенселәренә, өсөнсөләренә алмашлап менеп, һаман сабалар ҙа сабалар икән, ти.* Әкиәттән.

3. *күсм.* Көүәтһеҙләнеп хәрәкәттән туҡтау. *Тик һөжүмдәр бөтәһе лә **сәсәне**.* Ғ. Әмири.

4. *күсм.* Ни эшләргә белмәй туҙыныу, сәбәләнеү. [*Юлдыбикә*:] *«Ул Сурағолдоң ырыуы — тамыры менән йолҡош булыуына минең ни шойҡаным бар», — тип **сәсәп** ултыра, ти* [*Ҡолморҙа*]. Т. Хәйбуллин.

**сәсәк I** *и.* Температураны күтәреп, яндырып йә өшөтөп ауыртҡандан һуң тәнгә эренле сабыртҡы сығара, шаҙра итә торған бик ҡаты йоғошло ауырыу. *Ырыҫбикә инәй атайымдың нисек **сәсәк** менән ауырығанын, нисек үлә-үлә тип төңөлөп бөткән ерҙән иҫән ҡалғанын әкиәт һымаҡ итеп һөйләй.* Ш. Янбаев.

**сәсәк II** *и.* Кейем, ҡаралтының ситә буйлатып эшләнгән суҡ. *Алтын еп менән тегәбеҙ ал байраҡтың **сәсәген**.* Халыҡ йырынан.

**сәсәк III** *и. диал.* Сәскә. ***Сәсәк** өҙөү.* ▬ *Шәлкем-шәлкем аҡ **сәсәк**, уртаһында гол **сәсәк**.* Халыҡ йырынан.

**сәсән I** *и.* Шигри һәләткә эйә булып, фәһемле оҫта һүҙе һәм ижады менән танылыҡ алған кеше. *Шәп кешеләр булған **сәсәндәр**. Улар халыҡтың ҡайғы-шатлыҡтарын*

*көйгә һалып, илгә сәскәндәр.* Б. Вәлит. *Үҙе лә һөйләй, үҙе көйләй, Ихсан* **сәсән** *кеүек ир ҡайҙа.* Халыҡ йырынан. ***Сәсән*** *барҙа телең тый, оҫта барҙа ҡулың тый.* Әйтем.

**сәсән II** *с. диал.* Ярһыу. ***Сәсән*** *ат.* ***Сәсән*** *кеше.*

# Т

**таба I** *и.* 1. Аҙыҡты утта ҡурыу, мейескә ултыртып бешереү өсөн ҡулланылған түңәрәк яҫы һауыт. *Сөм* ***таба.*** *Суйын* ***таба.*** ***Табала*** *ҡурыу. Тотҡалы* ***таба.*** ▬ *Был еҫ Хәмдиәнең, иртәнсәк кешегә ут алырға йүгермәҫ өсөн тип, бер киҫәк тиҙәкте ҡуҙға һалып, өҫтөн ығытып көл менән күмеп,* ***таба*** *ҡаплап ҡуйған уты киҫәгенән сыҡҡан.* Һ. Дәүләтшина. — *Ә һин, Вәзир, йүгереп кенә Йәмлегөл инәйҙәрҙән* ***таба*** *алып ҡайт. Ике* ***таба*** *менән сыжлатып ҡына бешереп алырмын* [, — *тине әсәһе*]. М. Кәрим. *Ҡоймаҡ тәмле тип,* ***табаны*** *ялап булмай.* Әйтем.

2. Шул һауыт менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Бер* ***таба*** *ҡурмас. Ике* ***таба*** *ҡоймаҡ.* ▬ *Айбулат ... бер* ***таба*** *сөсө икмәк алып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**таба II** *бәйл. диал.* Табан. *Ана бер ауыл кешеһе, сана-һына нимәлер тейәгән дә маяҡлы юл буйлап тауға* ***таба*** *үрелә.* Д. Юлтый. *Беҙҙең таныштар ҙа сыҡҡан ҡайтырға* ***таба.*** Н. Нәжми. *Ғәрләнеп, Гөлкәй йүгерҙе ауыл яғына* ***таба.*** Ш. Бикҡол.

**табаҡ I** *и.* 1. Аш-һыу өсөн ҡулланылған киң ауыҙлы ҙур сөм һауыт. *Ағас* ***табаҡ.*** *Тимер* ***табаҡ.*** ▬ *Залимдың золомо күп, күп һимертһәң,* ***табаҡтан*** *эттең башы һөрһөп төшәр.* Аҡмулла. *Салбар өҫтөнә алъяпҡыс бәйләгән, һул ҡулына ҙур ҡалай* ***табаҡ*** *тотҡан Александр Иванович инә.* Н. Нәжми. *Алтын да* ***табаҡ,*** *көмөш ҡалаҡ ашаһана, атай, ашымды.* Сеңләүҙән.

2. Шул һауыт менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Ташйөрәк бер ашағанда бер* ***табаҡ*** *бал, бер* ***табаҡ*** *май, бер мейес икмәк ашап бөтә, ти.* Әкиәттән. *Мин, бай ағай, күп алмайым, — тигән Ерәнсә сәсән, — хаҡ арым хаҡ бу-*

*лыр, бер **табаҡ** борсаҡ булыр. Миңә шул еткән.* «Ерәнсә сәсән».

**табаҡ II** *и.* 1. Ҡағыҙ, ҡалай кеүек йоҡа нәмәнең дүрткел итеп ҡырҡылған ҙур бер киҫәге. *Ҡағыҙ **табағы.*** ▬ ***Табаҡ** та ғына **табаҡ** ай аҡ ҡағыҙ Буранбайҙың яҙған хаттары.* Халыҡ йырынан.

2. *полигр.* Баҫма әйберҙе, китапты үлсәү берәмеге. *Баҫма **табаҡ**. Китаптың күләме — ун **табаҡ**.*

**табан I** *и.* 1. Аяҡтың баҫа торған аҫҡы яғы. *Итек ҡыҫа, ауыр. Ялан аяҡ ҡына баҫыр ине, юлға түшәлгән ваҡ ҡырсын **табанды** телә.* Б. Бикбай. *Айыу ҙа әллә ҡасан ҡышҡы йоҡоға талған, **табанының** майын һурып ... ята.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Аяҡ кейеменең аҫҡы өлөшө. *Быйма **табаны**. Итек **табаны**. **Табан** һалыу.* ▬ *Башҡаса мин **табан** туҙҙырып, мәғәнәһеҙгә йөрөйәсәк түгелмен.* Х. Ғиләжев.

3. Сана йәки бүтән нәмәнең шыуып бара торған аҫҡы шыма өлөшө. *Сана **табаны**.* ▬ *Немецтарҙың санаһы, бөгөлмәгән **табаны**.* Бәйеттән.

**табан II** *и.* Сазандар ғаиләһенә ҡараған һары тәңкәле, ҡыҙғылт ҡанатлы күл балығы. *Ҡара **табан**. Һары **табан**.* ▬ [*Пиккио*:] *Һеҙҙең менән шулай яҡын танышыуыма шатмын, сеньор, дуҫтар булырбыҙ* (*Ричардтың ҡулындағы балыҡты күреп ҡала*). *Тере балыҡ! Исеме нисек?* [*Ричард*:] ***Табан***. [*Пиккио*:] ***Табан**? Кем **табаны**?* [*Ричард*:] *Күл **табаны**. Мүкле күлдеке.* М. Кәрим. *Мурҙала балыҡ тағы ла арта төшкән. Етмәһә, арала һары **табан** да бар.* М. Кәрим.

**табан III** *бәйл.* (*төбәү килеш менән*) 1. Эш-хәрәкәттең йүнәлешен белдерә; ҡарай. *Аҫҡа **табан**. Тауға **табан**.* ▬ *Арслан Хафиза еңгәнең ҡурҡынған шөбһәле йөҙөнә ҡараны ла етеҙ генә ҡапҡаға **табан** атланы.* Д. Юлтый. *Бабай атлай алға **табан**, ел артҡа ҡыуа.* Н. Нәжми. *Көн дә кис менән мин баҡсаға **табан** үтәмен.* Ғ. Хәйри. *Ҡанат үҫһә ҡоштоң балаһына, урын ҡыҫыҡ булып күренә; яҡтылыҡҡа сығып, ояһынан бейеклеккә **табан** үрелә.* Ә. Ғайсин. *Күлдән ҡаптырып табан, ырғыттым ярға **табан**.* С. Муллабаев.

2. Эш-хәрәкәттең билдәле бер ваҡытҡа яҡын булғанын белдерә; ҡарай. *Иртәнгә* ***табан****. Кискә* ***табан****. Яҙға* ***табан****.* ▬ *Таңға* ***табан*** *немецтар атыуҙан туҡтаны.* Д. Юлтый.

**табын I** *и.* 1. Күмәк кешегә әҙерләп ҡуйылған ашамлыҡ һәм шул ашамлыҡ ҡуйылған ашау-эсеү урыны. *Аш* ***табыны****. Сәй* ***табыны****.* ***Табын*** *әҙерләү.* ***Табынға*** *саҡырыу.* ▬ *Ашҡа ултырҙылар. Ғәҙәтсә,* ***табынға*** *тәүҙә ҡаҙы-ял, ит ҡуйылды.* Б. Бикбай. *Сәхнәлә Дәүләтхан менән Ханиә* ***табын*** *әҙерләй.* Н. Нәжми. ***Табын*** *тулы, күңелдәр көр, илебеҙ икмәккә туҡ.* Н. Иҙелбай. *Балаҫтар түшәп,* ***табын*** *ҡороп ебәрҙеләр.* «Совет Башҡортостаны», 1984, 10 июнь.

2. Аш тирәләп ултырған төркөм. *Ҙур* ***табын****.* ▬ *Беҙ бер* ***табын*** *булып, тамаҡ ялғап алған арала, салғыларын күтәреп, ... [бесәнселәр] йыйыла башланы.* С. Кулибай.

3. Ҡунаҡ-һыйға йыйылған кешеләр төркөмө; мәжлес. *Ирҙәр* ***табыны****. Ҡатындар* ***табыны****.* ▬ ***Табын*** *гөрләй, һайрашалар ҡоҙасалар, ҡоҙалар.* Т. Арслан.

**табын II** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Кесе* ***табын****. Ҡара* ***табын****.* ▬ *Яландың ҡап уртаһынан сик һыҙығы үткән, бер яҡта ҡатайҙар, икенсе яҡта* ***табындар*** *көн күргән.* Ә. Вахитов.

**табын III** *ҡ.* 1. Кем йәки нимәнелер кеше аңынан һәм тәбиғәт көсөнән өҫтөн күреп, уға баш эйеү, һыйыныу. *Аллаға* ***табыныу****.* ▬ *Йәш килендәр тәүге осрашыу ваҡытында ҡайныға, ҡайнағаларға, хөрмәтле ҡарттарға, тауҙарға, йылғаларға һәм, гөмүмән, һоҡландырғыс әйберҙәргә* ***табынғандар****.* М. Өмөтбаев. *Ул ваҡытта йәшәгән кешеләр... быуаттар буйы һүнмәй янған уттың серенә төшөнә алмаған. Уттан улар бик ҡурҡҡан, утҡа* ***табынған****.* Д. Бураҡаев.

2. *күсм.* Кем йәки нимәгәлер бөтә күңелде биреү, уға баш эйеү. *Йөҙҙәренә генә түгел, әҙҙәренә* ***табынамын****.* М. Кәрим.

**табыш I** *и.* Түгелгән көс йәки аҡсанан килгән өҫтәмә файҙа, төшөм. *Саф* ***табыш****.* ***Табыш*** *алыу.* ▬ *Яҡшының сауҙаһында һағыш булмаҫ, сауҙаһында яманның* ***табыш***

*булмаҫ.* Аҡмулла. *Дәүләттең аҡса тупланмаларын булдырыуҙа* ***табыштың*** *роле һиҙелерлек үҫәсәк.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь. *Ир* ***табышы*** *менән мырҙа.* Мәҡәл.

2. Эшләп, көс түгеп тапҡан нәмә. *Балалар тыуып, ғаилә ишәйеп киткән, балтасының* ***табышы*** *ла етмәй башла[ған].* Х. Мохтар.

3. Эҙләп-юллап тапҡан нәмә. *Бабай улдары менән һәр көн иртәнсәк һунарға китә, кисен ҙур* ***табыш*** *менән ҡайта торған булған.* Әкиәттән.

4. *күсм.* Ҡулға төшкән, ҡулға эләккән нәмә. *Разведчик өсөн «тел» иң ҙур* ***табыш*** *инде ул.* Ә. Вәли. *Ит турауы —* ***табыштыр****, ара-тирә ҡабыштыр.* Әйтем.

5. Осрап, табып алған нәмә; табылдыҡ. *«Байназар хазина тапҡан!..» тигән хәбәрҙәр тотош ауылға таралды. Йәштәр ҡыҙыҡһынып, ул* ***табыштарҙы*** *тиҙерәк үҙ күҙҙәре менән күрергә ашҡындылар.* Б. Бикбай.

**табыш II** *ҡ.* Эҙләп йәки тап килеп осрашыу. *Беребеҙ алтын, беребеҙ көмөш — ҡайҙан килеп* ***табыштыҡ****.* Халыҡ йырынан.

**тағараҡ I** *и.* 1. Оҙонса йәйпәк һауыт; ялғаш. *Кер* ***тағарағы****.* ▬ *Һыуҙан ҡурҡҡан* ***тағараҡҡа*** *төшөп үлгән.* Мәҡәл.

2. Малға ашлы һыу йәки бүтән аҙыҡ һалып бирә торған һауыт. *Эт* ***тағарағы****.*

3. Ҡош-ҡортҡа ем һала торған аҫмалы таҡта. [*Вил*] ***тағараҡ*** *элеп ағасҡа, емдәр һипте.* Ф. Рәхимғолова.

**тағараҡ II** *и. диал.* Сағараҡ. *Бүҙекәй кантон ята аҡ тирмәлә,* ***тағарағын*** *асып, таң атҡас.* Халыҡ йырынан.

**тай I** *и.* Бер йәше тулып, икенсе йәшкә киткән йылҡы малы. *Ҡырҡмыш* ***тай****. Ябаға* ***тай****.* ▬ *Талдан тал үҫә,* ***тайҙан*** *матур байтал үҫә.* Ш. Бабич. *Ябаға* ***тайҙы*** *хурлама, яҙға сыҡһа ат булыр.* Мәҡәл.

**тай II** *ҡ.* 1. Баҫҡан, таянған ер шыма булып тотмау, шыуыу; шыйғалау. *Надя бер нисә ҡат* ***тайып*** *китте, ләкин йығылманы.* С. Ағиш. *Тота алманым* ***тайҙы****, аяғым боҙға* ***тайҙы****.* С. Муллабаев.

2. *күсм.* Дөрөҫ юлдан сығыу; яңылышыу. *Уйың тура, юлың урау булды, аҙмы **тайҙың**, аҙмы абындың.* М. Кәрим.

3. Төп урындан йәки йүнәлештән ситләшеү; тайпылыу. *Төн булғас, егет икенсе урынға **тайып**, ҡасып ята, ти.* Әкиәттән. *Күгәл генә өйрәк күлгә төшә, күлдән **тайып** күрәнгә төшә.* Халыҡ йырынан.

4. *күсм.* Йәһәт кенә китеү; ысҡыныу. [*Вәлидов*] *Урта Азияға ... **тайыу** планын ҡора башланы.* А. Таһиров. *Баш иҫән саҡта **тайып** ҡалырға кәрәк бынан, егеттәр.* М. Хәйҙәров. *«Беҙҙе һанға һуҡмай **тайғайның** — саҡ булған!» — тип битәрләп, ҡыйырһытырҙар, тип ҡурҡҡайным.* Д. Исламов.

5. Үҙ урынынан ҡуҙғалыу (быуынға ҡарата), кимәлйеү. *Быуын **тайыу**.*

6. *күсм.* Сығанаҡ килештәге исемдәр менән килеп, физик йәки рухи көс һәләтен юғалтыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Хәлдән **тайыу**. Һуштан **тайыу**.* ▬ [*Әбей*:] *Ҡарыуҙан **тайып** ятҡан юҡ әле, әбейҙәр тигәс тә, бигерәк тағы!* Һ. Дәүләтшина.

**таҡ I** *и. иҫк. кит.* 1. Көмбәҙ. *Хоҙаның яҙғанына сара бармы? Яҙылмыш ләүх әл-мәхфүз тигән **таҡҡа**.* Аҡмулла.

2. Тәхет. *Шүлгән һарайға ингәс, батша урын күрһәткән, ... **таҡ** янына ултыртҡан.* «Урал батыр».

**таҡ II** [*гәр.*] *с.* 1. Икегә тигеҙ бүленгән (һанға ҡарата), киреһе йоп. [*Аҡъял батыр*:] *Һанаған саҡта йондоҙҙар **таҡ** булһа, мин ауырыу булырмын, ә йоп булһа, иҫән булырмын.* Әкиәттән.

2. Яңғыҙ, ишһеҙ. *Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләмә — **таҡ** ҡалырһың.* Мәҡәл. *Алма сыбар ат булмаҫ, ир-егет **таҡ** булмаҫ.* Мәҡәл.

**таҡ III** *оҡш.* Ҡаты нәмә менән ҡатыға һуҡҡанда сыҡҡан һаңғырау тауышты белдергән һүҙ. ***Таҡ** итеп ҡалыу.*

**таҡ IV** *ҡ.* 1. Эйәртеп алып китеү өсөн нимәгәлер эләктереү, бәйләү, беркетеү. *Бауға **тағыу**.* ▬ *Фәсхи менән Кәмәр тәртәгә ике үгеҙ, арба артына бер ат **тағып***

*юлға сыҡты.* Т. Йәнәби. *Биш вагонды **тағып** паровозға, көрәш юлын ярып барабыҙ.* Ғ. Амантай. *Аҡъял батыр ... ер аҫты хазинаһын күнәге-күнәге менән арҡан осона **тағып** торған, өҫтән тартып алып торғандар.* Әкиәттән.

2. Нимәгәлер ҡуша беркетеү. *Ҡармаҡҡа еп **тағыу**.* ▬ *Рәхимә сәс үрмәһенә **таҡҡан** ... аҫҡыстарын шылтыратып ... алдына һалды.* Һ. Дәүләтшина.

3. *күсм.* Кешегә ниҙелер көсләп ҡушыу, ирекһеҙләп мәжбүр итеү. *Эш **тағыу**.* ▬ [*Ғәлиә*] *үҙ фекерен ... кешегә көсләп **таҡмай**, кәңәшләшә, килешә, шунан эшләй.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 2.

4. *күсм.* Ҡушамат биреү, исем атау. *Миңә лә бер заман шулай ҡыҙыҡ ҡына исем **таҡтылар** ҙа ҡуйҙылар.* Х. Түләкәев.

5. *күсм.* Берәйһенең өҫтөнә ғәйеп ташлау, яғыу. *Үҙ гонаһын кешегә **тағыу**.* ▬ *Яңы Советҡа ... туҙға яҙмаған ғәйептәр **таҡмаҡсы** булып, әллә ниндәй ялған хәбәрҙәр тараталар.* Ғ. Дәүләтшин.

6. Кәүҙәгә, кейемгә беркетеү, ҡаҙау, эләктереү. *Алҡа **тағыу**. Значок **тағыу**. Орден **тағыу**.* ▬ [*Фатима:*] *Был алҡаны Саҡай ағайҙың ҡатыны ла **таҡманы**.* Б. Бикбай. *Ысын мәрйен муйынсаңды **таҡма** муйының талдырып.* Халыҡ йырынан.

7. Кәүҙәгә аҫыу, билгә беркетеп бәйләү (ҡорал, ҡорамалдарға ҡарата). *Ҡылыс **тағыу**. Наган **тағыу**.* ▬ *Билгә **таҡҡан** көрәк, фляжка, сумка ҡайышты баҫып, билде ауырттыра.* Д. Юлтый. *Беҙҙең хужа ... һары сумка **тағып** йөрөй.* Т. Арслан.

8. Кәүҙәгә, тәнгә ҡуша бәйләп беркетеү; кейеү. *Коньки **тағыу**.* ▬ *Мин тәү тапҡыр быйыл саңғы **таҡтым** — ҡалын ҡарҙар аша юл ярам.* Ғ. Рамазанов. *Ҡылыс аҫып, шпор **тағып** атланды һалдаттар атҡа.* Бәйеттән.

9. *диал.* Тегеү, баҫыу. *Ҡалпаҡҡа тәңкә **тағыу**. Һәҙәп **тағыу**.*

**тал I** *и.* Һыу буйында үҫә торған тар оҙон япраҡлы, көсөк сәскәле ҡыуаҡ ағас. *Йәш **тал**.* ▬ *Юҡҡа көсөн әрәм итеп арып-талды. Аҙаҡ килеп бөгә алманы хатта тал-*

***ды.*** Н. Иҙелбай. *Бөгөлөп кенә һығылып үҫә икән һыу буйҡаиҙарының **талдары**.* Халыҡ йырынан.

**тал II** *ҡ.* 1. Дауамлы эш-хәрәкәттән хәлһеҙләнеү (айырым ағзаға ҡарата). ***Беләк тала. Күҙ тала. Кул тала.*** ▬ *Йомшаҡ, йылы, иркә май һауаһы — **талған** йөрәктәрҙең дауаһы.* Ғ. Амантай. *Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем **аяҡтарым талһа**, имгәкләп.* Халыҡ йырынан.

2. Хәл бөтөү, арыу (бөтә тәнгә ҡарата). *Көнө буйы эшләп **талғандар** ҙа, өңдәрендә йоҡлай ҡондоҙҙар.* М. Уразаев.

**тал III** *ҡ.* Нимәнеңдер тәьҫирендә булып үҙ-үҙеңде онотоу, ниндәйҙер хәлгә бирелеү, сумыу. *Йоҡоға **талыу**. Моңға **талыу**. Серемгә **талыу**.* ▬ *Тып-тын, моңһоу йәйге таңда хиссиәттән уйға **талдым** мин.* Ғ. Амантай. *Өс көн буйына керпек тә ҡаҡмай ... йонсоған һалдаттар төнгө ялға **талғандар**.* Ф. Рәхимғолова.

**талаҡ I** *и.* Умыртҡалы йән эйәләренең ҡан эшләүҙә, матдә алмашыныуында ҡатнашҡан эске ағзаһы. ***Талаҡ шешеү.***

**талаҡ II** [*ғәр.*] *и.* 1. Шәриғәт буйынса, ирҙәрҙең ҡатын айырыуы. *Миңә, наҙан кешегә, **талаҡ** нисек вә хәлег нисек икәнен мулла баян итмәне.* М. Өмөтбаев.

2. Шәриғәт буйынса, ҡатын айырғанда ирҙең әйтә торған һүҙе (шаһит алдында өс ҡат «талаҡ» тип ҡысҡырһа, ҡатын айырылған була). ***Талаҡ әйтеү.*** ▬ [*Зиннәт — Фатимаға*:] *Вон! Бөтә нәмәләреңде ҡалдыр ҙа күҙемдән юғал. **Талаҡ!** Һин минән **талаҡ**.* Х. Ибраһимов.

**талаш I** *и.* 1. Үҙ-ара ниҙер дәғүәләшкән ғауға, тартыш. ***Талаш сығыу.*** ▬ *Беҙҙең арала **талаш** китте. Әсәйем икебеҙҙе саҡ айырып ебәрҙе.* Ғ. Минһажев. *Барыһы ла* [*башлыҡ*] *мин булам да мин булам, ти икән. Киткән шаушыу, **талаш**.* Экиәттән.

2. Үҙ-ара әйтешеү, әрләшеү; ыҙғыш. [*Ҡаһымбай — Буранбайға*:] *Бындағы кеүек бисәләрҙең **талашын** тыңлап, уларҙың ошағы арҡаһында бригадирҙан таланып ... йөрөмәйһең.* И. Ғиззәтуллин.

**талаш II** *ҡ.* 1. Үҙ-ара нимәгәлер дәғүәләшеү; тартышыу. *Ер өсөн **талашыу**. Урын өсөн **талашыу**.* ▬ [*Әбей —*

*егеткә:*] *Унда бер ҡыптыр тунға **талашып** ятҡан әбей менән бабай булыр.* Әкиәттән.

2. Үҙ-ара әрләшеп, ҡысҡырышыу; ыҙғышыу. *Зыҡ ҡубып **талашыу**. **Талашып** йәшәү.* — [*Новиков:*] *Беҙ Индрил менән **талашып** киттек. Бик ауыр һүҙҙәр әйтештек.* Д. Юлтый. *Ағай-эне **талашыр**, атҡа менһә, ярашыр.* Мәҡәл.

3. Үҙ-ара һуғышыу (ҡош-ҡорт, йәнлеккә ҡарата). *Айғырҙар **талашҡанын** күргәнегеҙ бармы? ... Өйөр эсендә **талашмай** улар. Баҫтырышып бер ситкә — аулаҡ-ҡараҡ сығалар.* Н. Мусин. *Йыуынды һыу түккән ерҙә ... эттәр **талаша**.* Ғ. Ғүмәр. *Ике ҡарға **талашһа**, уҡсыға — йөн.* Мәҡәл.

**талҡы I** *и.* Кипкән етен, киндерҙе иҙеп, сүсен айыра торған ҡорал. ***Талҡы** ... онтаҡлай киндерҙең талҡышын.* С. Ҡудаш. ***Талҡы** менән етен талҡып, талалыр беләктәрем.* Халыҡ йырынан.

**талҡы II** *ҡ.* Сүсен айырыу өсөн етен, киндерҙе талҡыға ҡыҫып иҙеү. *Етен **талҡыу**.* ▬ *Көҙ көндәре ҡыҙҙар һыу буйына киндер **талҡырға** йыйыла торғайны.* С. Ағиш.

**талыҡ I** *и.* 1. Таҡта йәки бүрәнәне ярыу өсөн ҡаҡҡан ағас; шына. ***Талыҡ** ҡағыу.*

2. Һынған аяҡ-ҡулды ҡоршап бәйләгән нәмә. ***Талыҡ** һалыу.*

**талыҡ II** *ҡ.*1. Берәй дауамлы эш-хәрәкәттән арыу, йонсоу. *Ауыр эштән **талығыу**. Көтә-көтә **талығыу**.* ▬ *Дәүләтбай ағай ... күп ер үтеп арыған, аты ла **талыҡҡан**.* Ә. Вахитов. [*Заятүләк:*] *Шоңҡар ҡошом **талыҡҡан**, оса алмайса яланға.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

2. Арыу-талыу (берәй ағзаға ҡарата). *Оҙаҡ баҫып тороп аяҡтар **талыҡты**.* ▬ ***Талыҡҡансы** күҙҙәрем, шыршы урман гүзәллеген, ауылдарҙы күҙләнем.* Х. Кәрим.

3. *күсм.* Рухи ғазаи кисереү, ғазапланыу. [*Егет*] *юҡһына, күңеле яңғыҙлыҡтан **талыға**.* Н. Мусин. [*Таyыҡ:*] *Ни ерем кәм ыласындан? Шуны уйлап **талыҡтым**.* Ҡ. Даян. *Һүнгән өмөт, ...* [*кеше*] *төн үткәрә **талығып**, интегеп.* М. Сөндөклө.

**талыҡ III** *ҡ.* 1. Рәхәтлеккә талып иҙрәү. ***Талығып** ултырыу.* ▬ *Ил-йорт һабантуйҙан арынып, тәрән йоҡлай ине **талығып**.* С. Кулибай.

2. Нәмә менәндер ныҡ әҫәрләнеп, онотолоу. *Көйгә **талығып** бейеү.* ▬ *Бабайҙың баҡсаһына көн дә иртән бер алтын ҡош килеп, **талығып-талығып** һайрай ... торған булған.* Әкиәттән.

**там I** *и. иҫк.* 1. Ҡойма. *Өйөнән алтын-көмөш ҡулына алып, ярына **там** торғоҙоу уйын алды.* «Буҙйегет».

2. Өй түбәһе, өй башы. *Төндә берәү **тамда** йөрөй. Батша уны күреп: «Һин нишләп йөрөйһөң өй башында?» — ти.* Әкиәттән.

3. Ил ситен ҡарауылларға һаҡсы ҡуйыу өсөн эшләнгән бейек ҡоролма. *Улар ... хәүеф-хәтәр хаҡында хәбәр биреп торорға тау баштарына **тамдар** ҡуйып йәшәгән.* Ғ. Ибраһимов.

**там II** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тулы, теүәл. ***Там** азатлыҡ.* ▬ *Һин үҫерһең иркәлектә, **там** һигеҙгә йәш тулыр.* Ш. Тульвинский.

**там III** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ау, тоҙаҡ. *Хөкүмәттең истибдады арҡаһында истибдад беҙҙәргә лә булды бер **там**.* М. Ғафури.

**там IV** *ҡ.* 1. Тамсы-тамсы булып төшөү. *Йәш **тама**. Ҡан **тама**. Тамсы **тама**.* ▬ *Түбәләрҙән һарҡып **тамалар**, яҙҙың һуңғы тамсы һыуҙары.* Ғ. Амантай. *Ҡарағаш ҡулындағы ҡурай осонан һөт **тамды**, ти.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Тулышып бөркөлөү; балҡыу. *Йөҙөнән нур **тама**.* ▬ *Керпегенән гөлдәр **тама**, күрһәм йөрәгем яна.* Халыҡ йырынан.

3. *күсм.* Төшөм төшөү, файҙа килеү. [*Хәбир*:] *Бынынан да биш һум **тамһа**, эсте тишмәҫ ул.* Ғ. Байбурин.

**тамбур I** [*рус.* < *фр.*] *и.* Тимер юл вагонының баш-баштарындағы ишек араһындағы ҙур булмаған майҙансыҡ. ***Тамбурға** сығыу.* ▬ *Мин **тамбурҙа** баҫып ҡарап барҙым Туймазыны үтеп киткәндә.* М. Тажи.

**тамбур II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Элмәкләп сәнсеп сигеү төрө. ***Тамбур** менән сигеү.*

**таныш I** *с.* 1. Күреп, ишетеп белгән, билдәле. ***Таныш** исем. **Таныш** йыр. **Таныш** кеше. **Таныш** ҡала. **Таныш** юл.*

**таныш II** *и.* Күргән-белгән кеше. *Уның **таныштары** күп. **Танышты** осратыу.* ▬ *Бер күргән белеш, ике күргән — **таныш**.* Мәҡәл.

**таныш III** *ҡ.* 1. Үҙ-ара танышлыҡ булдырыу. *Яҡындан **танышыу**.* ▬ *Борон башҡорт яҡындан **танышырға** теләһә: — Ағасың нимә? ... Тамғаң нимә? ... Ҡошоң нимә? ... тип һораған.* Ш. Шәһәр. *Ғафури менән шәхсән **танышып**, серләшеп, ҡайғы һәм шатлыҡтарҙы уртаҡлашып китмәксе булам.* С. Ҡудаш. *Ат кешәнләшеп табышыр, әҙәм һөйләшеп **танышыр**.* Мәҡәл.

2. Ниҙер тураһында мәғлүмәт алыу; күреп, ишетеп белеү. *Китап менән **танышыу**. Ҡала менән **танышыу**.* ▬ *Батша Өйрәнсекте үҙ һарайына саҡыртып алған. Уның тормошо, эше менән ентекләп **танышҡан**.* З. Биишева.

**таң I** *и.* 1. Тәүлектең ҡояш сығыр алдынан яҡтыра башлаған ваҡыты һәм шул саҡтағы көнсығыш тараф. *Иртә **таңдан**. Йәйге **таң**.* ▬ *Һыҙылып ҡына ал **таң** атты, иренеп кенә аҡ ай батты.* Д. Юлтый.

2. *күсм.* Ниҙеңдер башланғыс ваҡыты. *Бына бөгөн, йәшлек **таңында**, сәскә атты бер гөл тағы ла.* Ғ. Амантай.

**таң II** *и.* *Иҫ* киткес нәмә, ғәжәп хәл. *Күҙәтселәр хәбәр birҙе, саң күрҙек, тип, саң эсендә... **таң** күрҙек, тип.* «Бабсаҡ менән Күҫәк». *Күргәнгә һаҡал **таң**, күрмәгәнгә күҫә **таң**.* Мәҡәл.

**тап I** *и.* 1. Ниҙер тейеүҙән, буялыуҙан ҡалған эҙ. *Бурау **табы**. Дегет **табы**. Май **табы**. **Тап** тейеү.* ▬ *Үлән өҫтө ҡан **таптары** менән сыланған.* С. Кулибай.

2. Ай һәм Ҡояш йөҙөндә күренгән тимгелдәр. *Айҙағы **тап**.* ▬ *Ер үҙе лә булмай соҡорһоҙ. Ҡояштың да бар бит ҙур **табы**.* М. Хәй.

3. *күсм.* Оят килтерерҙәй, хур итерҙәй нәмә; кер. *Һөйләгән дә кеше һөйләй бирһен, **тап** төшөрмәм нурлы йөҙөңә.* Халыҡ йырынан.

**тап II** *и.* Үткер нәмә менән сапҡанда йәки юнғанда төшкән ағас киҫәге. *Ҡоро* ***тап.*** ***Тап*** *йыйыу.* ***Тап*** *яғыу.* ▬ *Ҡарағай* ***таптары*** *... ялпылдап ергә оса.* Й. Солтанов.

**тап III** *и. иҫк.* Халыҡ төркөмө. *Кире аҙамат йорт көтһә,* ***таптың*** *йөҙөнә төкөрөр.* Ҡобайырҙан.

**тап IV** *киҫ.* 1. Һөйләгәндә ниндәйҙер бер һүҙгә, фекергә баҫым яһап, уның мәғәнәһен көсәйтә; нәҡ. ***Тап*** *ошо кеше.* ***Тап*** *төш уртаһында.* ***Тап*** *үҙе.* ***Тап*** *шул мәлдә.* ▬ *Төн уртаһы еткәндә, Сәйет батырҙары* ***тап*** *Аҡмәмбәт йылҡыһы ятҡан ергә барып сыға.* Легенданан.

2. Сағыштырыу, оҡшатыуҙы көсәйтеп килә; тас, нәҡ. ***Тап*** *боронғоса.* ***Тап*** *арыҫлан кеүек.* ▬ *Ирйегет тә* ***тап*** *ошо ... Аҙнағол кеүек һөйкөмлө, мөләйем кеше ине бит.* З. Биишева.

**тап V** *оҡш.* Артыҡ ауыр булмаған нәмә ҡаты урынға төшкәндә йәки һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Тап*** *итеп ҡалыу.*

**тап VI** *ҡ.* 1. Кемделер йәки нимәнелер эҙләп, ҡарап алыу. *Атты* ***табып*** *алып ҡайтыу.* ***Таба*** *алмай эҙләү.* ▬ *Төйөнсөктәр араһынан таҙа күлдәкте эҙләп* ***таптым.*** С. Ағиш.

2. Эҙләп, йөрөп кәрәк нәмәне булдырыу. *Йоҡларға урын* ***табыу.*** *Эш* ***табыу.*** *Юлға аҡса* ***табыу.***

3. Нимәлер уйлап сығарып, бар итеп күрһәтеү. *Сәбәп* ***табыу.*** *Һылтау* ***табыу.***

4. Тикшеренеү, эҙләнеү юлы менән алыу, булдырыу; асыу. *Алтын* ***табыу.*** *Күмер ятҡылығы* ***табыу.*** *Нефть* ***табыу.*** *Яңы химик элемент* ***табыу.***

5. Уйлап, иҫәпләп билдәләү, асыу. *Билдәһеҙ һанды* ***табыу.*** *Мәсьәләнең яуабын* ***табыу.***

6. Эйәһеҙ йәки файҙаланылмай ятҡан нәмәгә осрау, юлығыу, уны күреп алыу. *Ҡулъяулыҡ* ***таптым.*** *Юлдан аҡса* ***таптыҡ.*** ▬ *Ана бер ҡыҙыл әтәс әллә нәмә* ***тапҡан*** *да көрт-көрт тип тауыҡтар саҡыра.* Ғ. Дәүләтшин.

7. Осратыу, тап килтереү. *Дуҫ* ***табыу.*** *Юлдаш* ***табыу.*** ▬ *Күп илдәрҙә йөрөнөм, үҙ илемдәй илдәр* ***тапманым.*** Халыҡ йырынан.

8. Эшләп, көс түгеп алыу, материаль байлыҡ булдырыу. *Мал табыу.*

9. Кем йәки нимәләлер ниндәйҙер бер үҙенсәлек күреү, уны таныу. *Урмандың йәмен табыу. Уйындың ҡыҙығын табыу. Эштә үҙеңдең бәхетеңде табыу. Әҫәрҙә реаль тормош сағылышын табыу.*

10. Төп килештәге исемдәргә эйәреп, ошо исемдән аңлашылған төшөнсәне күңелдә кисергәндә, күңел менән ҡабул иткәндә белдерә. *Йырҙан ләззәт табыу. Йәм табыу.* — *Өйҙөң һис кенә лә ҡото юҡ, табырмын тимә толҡа.* А. Игебаев. *Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк.* Әйтем. *Күңел тапмаҡ — бер һүҙ.* Әйтем.

11. Төшөм килештәге эйәлек ялғаулы исемдәргә эйәреп, нимәнелер ғәмәлдә бар итеү, булдырыу тигән төшөнсәле һүҙбәйләнеш яһай. *Баланың көйөн табыу. Кешенең күңелен табыу. Эштең яйын табыу.*

12. Сифат йәки рәүеш мәғәнәһендәге һүҙҙәргә эйәреп, ниндәйҙер эш-хәл, һүҙгә һ. б. ҡарата тыуған фекерҙе белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Кәрәк(ле) тип табыу. Тейеш(ле) тип табыу. Урынһыҙ тип табыу. Яраҡһыҙ тип табыу.* — *Айбулат врачтың орошоуын урынлы тип тапты.* Һ. Дәүләтшина.

13. Донъяға килтереү (баланы), тыуҙырыу. *Бала табыу. Ҡыҙ табыу.* — *Яңғыҙ егеткә бала тапмаҫ ҡатын тап булыр.* Мәҡәл.

**тапҡыр I** *и.* Кем йәки нимәгәлер ҡаршы ятҡан урын, кем йәки нәмәнеңдер тураһы; тәңгәл. *Ауыл тапҡыры. Өй тапҡыры.*

**тапҡыр II** *с.* 1. Ситкә тайпылышһыҙ; тура. *Тапҡыр юл.*

2. Мәғәнәһе менән тура килеп торған үткер эстәлекле. *Тапҡыр мәҡәл. Тапҡыр яуап.* — [*Йәнтимер*] *миңә бик тапҡыр ... әсе һүҙ әҙләй кеүек күренә.* С. Агиш.

3. Зирәк, аҡыллы, йор һүҙле, сос. *Тапҡыр егет.* — *Сәлмән эшкә өлгөр, йомошҡа тилбер, һүҙгә тапҡыр, уйға отҡор булған.* Экиәттән.

**тапҡыр III** *и.* Һан, рәүеш, сифат һәм һорау алмаштары менән килеп, эш-хәлдең ҡабатланыу иҫәбен белдерә; ҡабат. *Беренсе тапҡыр. Һуңғы тапҡыр. Күп тапҡыр.*

*Нисә тапҡыр. Тәү* ***тапҡыр.*** — [*Солтан*] *ике ботло гер ташын һыңар ҡулы менән генә утыҙ* ***тапҡыр*** *ҡуҡҡә сөйә.* В. Исхаҡов.

**тапҡырла I** *ҡ.* 1. Йүнәлеште билдәле бер нәмәгә туралау; тәңгәлләү. *Ауылға* ***тапҡырлап*** *барыу.*

2. Хәрәкәт йүнәлешен билдәләү. *Фронттың ҡайһы яҡҡа киткәнен* ***тапҡырлау*** *ҡыйын.* А. Таһиров.

**тапҡырла II** *ҡ. мат.* Билдәле бер һанға ҡабатлау; арттырыу. *Өскә* ***тапҡырлау.***

**тарҡа I** *ҡ.* Ян-яҡҡа китеү, таралыу. *Елле-ямғырлы ҡара төндәрҙә мал* ***тарҡап*** *китеп, төрлө һәләкәткә осрамаһын өсөн айғыр өйөрҙө ... ышығыраҡ ергә алып китә.* М. Ғөбәйҙуллин.

**тарҡа II** *ҡ. иҫк.* Таратыу. — *Алтын сәсем* ***тарҡаһам,*** *нурға илде ҡумамен.* «Урал батыр».

**тарҡау I** *и.* Тарҡаулыҡ. [Батшаның] тағы килде фарманы. *Бына ошо фармандар* ***тарҡау*** *һалды араға.* «Ҡараһаҡал».

**тарҡау II** *с.* 1. Бер урынға тупланмаған, аралары алыҫ булған. ***Тарҡау*** *бригадалар урынына ... комплекслы бригадалар ойошторолдо.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 26 май.

2. *күсм.* Бер йүнәлеш, уртаҡ фекер менән берләшмәгән, берҙәмлек булмаған. ***Тарҡау*** *коллектив.*

3. *күсм.* Тәртип менән алып барылмаған, тәртипһеҙ. ***Тарҡау*** *эш.* — *Ялҡауҙың эше* ***тарҡау.*** Мәҡәл.

4. *күсм.* Билдәле бер йүнәлеш алмаған, тупланмаған (уй-фекергә ҡарата). *Уиҙарым* ***тарҡау.***

**тарт I** *ҡ.* 1. Кемде, ниҙелер тотоп, эләктереп, үҙеңә йәки бер тарафҡа табан кос менән килтереү. ***Тартып*** *бәйләү.* ***Тартып*** *төшөрөү.* — *Эт хужаһының ... салғыйынан ситкә* ***тартты.*** Я. Хамматов. *Эрҙәнә* ***тарттым,*** *уҡ аттым беләккәйемә таянып.* Салауат Юлаев.

2. Эләктереп үҙ артынан алып барыу, һөйрәү. *Сананы* ***тартыу.***

3. Йөктө һөйрәү, һөйрәй алыу (транспорт сараларына, йөк малына ҡарата). *Күмәк ат ... тигеҙ* ***тартмай*** *ул.*

Б. Бикбай. *Тәртәгә кергәс, тарта алмайым тип торма.* Мәҡәл.

4. Тәбиғи көс менән үҙенә яҡынайтыу, үҙенә табан килтереү. *Магнит тимерҙе тарта.*

5. Үҙенә һурыу, үҙенә хәрәкәт итеү. *Упҡын төпкә тарта.*

6. Нимәлер йәлеп итеү, ылыҡтырыу. *Эшкә тартыу.* — *Һуғышҡа ҡаршы восстаниеға ... фронт буйындағы крәҫтиәндәрҙе тартырға кәрәк.* Д. Юлтый.

7. Эшләгән, ҡылған эш өсөн суд, хөкөм алдына килтереү, *яуап алыу. Хөкөмгә тартыу. Яуапҡа тартыу.*

8. Яҡын итеү, үҙ күреү. *Ярлыларҙы ситкә ҡағып, баиҙы тартыу унда юҡ.* М. Ғафури. [*Йылан:*] *Батша ҡыҙын бирмәне. Һин йылан тип, ҡыҙы ла мине тартып килмәне.* «Урал батыр».

9. Кем йәки нәмәгәлер саҡырыу, өндәү. *Күңелем һиңә тарта.* — *Ҡалала мин тынғы тапмайым. Ҡыҫҡа төнлө йәйге айҙарҙа ... аяҡтарым тарта тауҙарға.* С. Кулибай.

10. Йылы тойғо уятып үҙенә саҡырыу, өндәп тороу. *Нисә әйтһәң дә тыуған ер тарта бит, тарта дуҫтар, тарта иптәштәр.* Ә. Вахитов. *Ил тигәнең илле йылдан да үҙенә тарта.* С. Ағиш. *Йән тартмаһа, ҡан тарта.* Әйтем. *Нәҫел — нәҫелгә, тамыр — тамырға тарта.* Мәҡәл.

11. Үҙенә йәлеп итеү, ҡыҙыҡһыныу уятыу. *Иғтибарҙы тартыу.* — *Уйҙарымды тарта ҡышҡы уйҙар.* Ә. Ғайсин. *Сәнғәт, хас диңгеҙ кеүек, кешеләрҙең күңелен үҙенә тарта.* М. Садыҡова.

12. Эскә алыу. *Эсте тартыу.*

13. Бау, еп кеүек нәмәне ниндәйҙер араға һуҙыу, һуҙып остарын нығытыу. *Кер әлергә бау тартыу. Янға кереш тартыу.*

14. Нәҙек итеп буйға һуҙыу. *Ҡашҡа ҡара тартыу.* — *Ҡашың ҡаралығы еткән, һөрмә тартаһың тағын.* Халыҡ йырынан.

15. Һыҙыра ышҡыу (үткерләү өсөн). *Бысаҡты ҡаҙан ситенә тартыу.*

16. Аралап, берәмләп күсереү, шылдырыу. *Счёт төймәһен **тартыу**.* ▬ *Абдулла ... тиҫбеһен шыҡылдатып **тарта** башла*[*ны*]. Һ. Дәүләтшина.

17. Билдәле бер яҡҡа ыңғайлау. *Тураға **тартыу**. Урманға **тартыу**.*

18. Үҫештә ниндәйҙер йүнәлеш алыу, ыңғайлау; әйләнеү. *Көн йылыға **тарта**.* ▬ *Ҡойола япраҡ, ҡуйыра болот. Көндәр шулай көҙгә **тарта**.* Ғ. Рамазанов.

19. *күсм.* Кемгәлер оҡшаш булыу. *Фәтхи һалдат төҫкә атаһына **тартһа**, телгә — әсәһе яғына оҡшаш ..., сәсән ине.* С. Агиш.

20. Ирекһеҙҙән ваҡыт-ваҡыт тертләү, леберләү (мускулға ҡарата). *Күҙ ҡабағы **тарта**.*

21. Күпмелер ауырлыҡта булыу. *Алтын балдаҡ ауыр **тарта**, алты мыҫҡалдан арта.* Халыҡ йырынан.

22. *һөйл.* Һан, күләм яғынан ҡыҫыу, самалы итеү. *Ашауҙы **тартыу**.*

**тарт II** *ҡ.* Тәмәке, махорка төтөнөн эскә, үпкәгә һурыу. *Папирос **тартыу**. Тәмәке **тартыу**.* ▬ *Егет әленән-әле йыуан, оҙон итеп махорка төрөп **тарта**.* А. Таһиров. [*Разия*:] *Иптәш Ғәбделминов, һеҙ **тартмай** инегеҙ түгелме һуң?* [*Ғәбделминов — Миләүшәнән күҙен алмай*:] *Элек **тартмай** инем дә, хәҙер **тартам** шул.* Н. Нәжми.

**тарт III** *ҡ.* 1. Игенде тирмәнгә һалып әйләндереү, онтау, онға әйләндереү. *Арыш **тартыу**. Бойҙай **тартыу**. Ҡул тирмәнендә **тартыу**.*

2. Ниҙе лә булһа төрлө механизмдар ярҙамы менән ваҡлап, он, порошок хәленә килтереү. *Цемент **тартыу**.* ▬ *Тирмән бына ваҡ-ваҡ тоҙ **тарта**.* Б. Бикбай.

**тарт IV** *ҡ.* Музыка ҡоралында уйнау. *Ҡумыҙ **тартыу**.* [*Егет*] *ҡындан һурып алып, моңландырып **тартты** ҡурайын.* Х. Ғәбитов. *Кемдер вагонға инеп гармун уйнай башларға өлгөргән, «Урал» көйөн **тарта**.* А. Таһиров. *Сафа ҡурай **тарта**, ә Искәндәр «Ҡарабай»ға баҫып бейей, ти.* Т. Йәнәби. *Ҡашҡаиҙарын ҡарайтмаған һөрмә тартып, шул һылыуҙы бейетһәңсе, ҡурай **тартып**. Үҙе һиңә килгән икән күңеле тартып, йөрәгеңдән бер кем ала*

*алмаҫ тартып.* Н. Иҙелбай. *Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды еҙ ҡурайҙай итеп **тартайым**.* Халыҡ йырынан.

**тартым I** *и.* 1. Тартыу хәрәкәте, тартыуға һалынған көс. ***Тартымға** килеү.*

2. Һөйрәп, тартып алып китерлек күләм. *Китаптары уның күп була. Барыһын бергә йыйып алып китһәң, ат **тартымы** тулы йөк була.* Т. Йәнәби.

**тартым II** *с.* Ниндәйҙер бер сифаты, ҡайһылыр яғы менән кем йәки нәмәгәлер оҡшаған, яҡын торған. *Балаға **тартым** кеше. Мәтегә **тартым** балсыҡ. Күккә **тартым** төҫ.* ▬ *Һауала ... бал еҫенә **тартым** әскелтем еҫ бар ине.* Ә. Вахитов.

**тартым III** *бәйл. төб. клш. менән.* 1. Хәрәкәттең йүнәлешен белдерә. *Стәрле юлы уларҙы* [*егеттәрҙе*] *яланға **тартым** алып китте.* Ж. Кейекбаев.

2. Билдәле бер ваҡытҡа, мәлгә яҡынлаша барыуҙы белдерә. *Көн көҙгә **тартым**.* ▬ *Таңға **тартым** усаҡта ут һүрелде.* М. Тажи.

3. Кемгә йәки нимәгәлер ыңғайлағанды, тартылғанды белдерә. *Ҡолағыма ... ҡыҙҙың йөрәге Фәтхи һалдатҡа **тартым** тигән һүҙҙәр инеп ҡалғайны.* С. Ағиш.

**тартыш I** *и.* 1. Үҙ-ара тартҡылашҡан алым, көрәш. *Ҡулдарына эләккән бер нәмә менән* [*полицейскийҙарға*] *бәрергә тотонғандар. Киткән **тартыш**, шау-шыу.* М. Тажи.

2. *күсм.* Ике аралағы бәхәсле, ғауғалы алыш. *Ә апрелдә ер бүлгәндәге мәхшәр! Ауылдарҙа ғауға, **тартыш**, хатта һуғыш!* Ф. Иҫәнғолов.

**тартыш II** *ҡ.* 1. Бер нәмәне кем еңәрҙән икәү-ара тартыу. *Арҡан **тартышыу**.* ▬ *Әбей менән бабайҙың ... ҡыптыр тун өсөн **тартышмай**, һуғышмай йоҡлаған саҡтары булмай икән.* Экиәттән.

2. Эткән, тартҡанға бирешмәҫкә тырышыу, ҡарышыу. *Айбулат* [*арҡаһына һуҡҡанға*] *бөтә кәүҙәһе менән ҡайҡайып китә, ләкин һаман **тартыша**.* Һ. Дәүләтшина.

3. *кусм.* Бәхәс йәки ғауға ҡуҙғатып алышыу; талашыу. *Гелән* ***тартышып*** *ҡына тормош булмай ул... Юл ҡуйырға тура килә иргә.* Я. Вәлиев.

4. *кусм.* Риза булмай талашыу; ҡаршылашыу. *Бына, ҡоҙа, аҙаҡ һүҙ: беләбеҙ аҡсаң барын, бүләк бирмәй* ***тартышһаң****, кейҙерәбеҙ таҙ ҡарын.* Туй йырынан.

5. Ирекһеҙҙән тартылып-тартылып йыйырылыу (тән ағзаларына ҡарата). *Аяҡ* ***тартыша****. Ҡул* ***тартыша****. Муйын* ***тартыша****.*

**тары I** *и.* 1. Ваҡ ҡына йомро орлоҡло, киң ҡыяҡ япраҡлы, ялбыр башаҡлы ашлыҡ. *Ҡыҙыл* ***тары****.* ***Тары*** *урыу. Һары* ***тары****.*

2. Шул ашлыҡтың орлоғо. ***Тары*** *онлау.* ▬ *Бибеш ... киске тамаҡҡа өйрә бешерер өсөн* ***тары*** *төйә.* З. Биишева. *Барыҫ йылы барын сәс, һис булмаһа* ***тары*** *сәс.* Мәҡәл. *Бер* ***тарынан*** *бутҡа булмай.* Мәҡәл. *Тауыҡ төшөнә* ***тары*** *ингән.* Мәҡәл.

**тары II** *ҡ.* 1. Осрау, тап булыу; юлығыу. *Яҡшы юлдашҡа* ***тарығыу****.* ▬ *Ғәжәп бер нәмәгә* ***тарыным****.* М. Ғафури. *Ураҡ урһа, тиҙ үк арый, эштән башы тиҙ үк ҡарый — бәхетһеҙ ирҙәргә* ***тарый*** *ундай килен тидия.* Бәйеттән. *Яманға* ***тарыма, тарыһаң*** *— арыма.* Мәҡәл.

2. Ниндәйҙер хәлгә дусар булыу, юлығыу. *Ауыр хәлгә* ***тарыу****. Бәләгә* ***тарыу****. Ҡайғыға* ***тарыу****.* ▬ *Совет ҡояшы балҡыны, мәңге ирекҡә* ***тарыныҡ****.* К. Кинйәбулатова. *Хөрлөккә сыҙамаған, хурлыҡҡа* ***тарыған****.* Мәҡәл.

**тары III** *ҡ. һөйл.* Торошло булыу, тиң булыу. *Иәйәүлегә бер остоҡ нәмә бер ботҡа* ***тарый****.*

**тары IV** *ҡ. иҫк.* Сәсеү, игеү. *Арпа* ***тарып****, боиҙай үҫмәҫ.* Мәҡәл.

**тарыҡ I** *ҡ.* 1. Ниндәйҙер шарттарҙан ялҡыу, тарлыҡ тойоу. *Ул да [Һибәт ағай], яҙ булғас, подвал һауаһынан* ***тарығып****, тышҡа сыҡҡандыр.* Д. Юлтый. *Ана, кешнәй, тибенеп күк алаша, аҙбарында ятып* ***тарыҡҡан****.* С. Ҡудаш.

2. Кем йәки нимәнеңдер булыуынан тарлыҡ тойоу, үҙ итмәй тарһыныу. *Батырҙан ил* ***тарыҡмаҫ****.* «Урал батыр». *Тамыр тартҡан* ***тарыҡмаҫ****.* Мәҡәл.

**тарыҡ II** *ҡ. диал.* Тарыу. *Яҡшы кешегә **тарығыу**.* ▬ *Иөрөй ҙә генә торғас уйҙар уйлап бөтмәҫ ҡайғыларға **тарыҡтым**.* Халыҡ йырынан.

**тас I** [*рус.* таз] *и.* Йәйенке һай һауыт (кер йыуыу һ. б. өсөн тотола). ***Таста** кер йыуыу.* ▬ *Яурынына ... һөлгө һалып, йышып ағартылған еҙ **тас**, еҙ ҡомған тотоп, Байрас ... ҡунаҡтарҙың ҡулын йыуҙырып сыҡты.* З. Бишева. *Һеперелмәгән иҙән уртаһында йыуынды һыу тулған **тас** тора.* Д. Юлтый.

**тас II** *р. һөйл.* Барлығы менән, шау, гел, тик. *Ите **тас** май ғына.* ▬ *Елен төбөндәге һөт — иң ҡуйы һөт, **тас** ҡаймаҡ ҡына.* Я. Хамматов.

**тас III** *р.* Сат. *Мәғәфүр уларға* [*Сәлимдәргә*] ***тас** йәбеште.* Ж. Кейекбаев.

**тас IV** *киҫ.* 1. Сағыштырыу, оҡшатыуҙы көсәйтеп килә; хас, нәҡ. ***Тас** атаһы.* ▬ *Замандашым, Таҡташ, аҙ йәшәнең, **тас** һандуғас булып йырланың.* Б. Вәлит. ***Тас** йәшен һуңынан яуын яуған кеүек, йәш диңгеҙе баҫты миллион күҙҙе, ҡалды йәш эсендә ер йөҙө.* Д. Юлтый.

2. Һүҙгә, фекергә баҫым яһап көсәйтеп килә; нәҡ, тап. ***Тас** уйлағанса эшләү. **Тас** уртаға төшөү. **Тас** үҙ урынына ултырыу.* ▬ *Ғүмерем **тас** алтмыштың яғаһына менеп ултырҙы.* Р. Ниғмәти.

**тас V** *оҡш.* Яҫы нәмә менән еүеш нәмәгә йәки тәнгә сәпәгәндә, еүеш нәмәгә баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Тас** итеп ҡалыу. Еүеш балсыҡҡа **тас** итеп төшөү.*

**таты I** *ҡ.* 1. Ауыҙға ҡабып тәмен ҡарау, тәмләү. *Аштың тоҙон **татыу**. Сәйҙең шәкәрен **татыу**.*

2. Ауыҙ итеү; ашау. [*Хәкимйән:*] *Сабира апайҙа ай буйы торҙоҡ. Күпме яҡты йөҙөн күрҙек, ... татлы һыйҙарын **татыныҡ**.* Ф. Иҫәнғолов.

3. *күсм.* Башыңдан үткәреү; күреп белеү, кисереү. *Рәхәтлек **татыу**. Үҙ елкәңдә **татыу**.* ▬ *Илле йәш — ул ирҙең тормош **татып**, ныҡ сынығып еткән бер сағы.* Б. Вәлит. *Бар ҡайғыһын, бар шатлығын **татып** китәм был ерҙең.* Р. Ғарипов.

**таты** II *ҡ.* Тәм өсөн асы, татлы нәмә ҡушыу. *Шәкәр булмағанда* [*әсәйем*] *ҡорот, йөҙөм кеүек нәмә* ***татып*** *ҡына сәй эсә.* Ғ. Дәүләтшин.

**таты** III *ҡ.* Ниндәйҙер бер тәм булыу, нимәнеңдер тәме килеү. *Балтырған төбө бал* ***татыр****, көпшә генә төбө көл* ***татыр****.* Халыҡ йырынан.

**таш** I *и.* 1. Тотош масса йәки айырым киҫәк рәүешендәге сүкелмәй, иремәй торған тау тоҡомо. *Аҡбур* ***ташы****. Ҡайраҡ* ***ташы****. Ҡая* ***таш****. Ҡырсын* ***ташы****. Эзбиз* ***ташы****.* ▬ *Таштуғай йылғаһы буйында ... тап-таҡыр таулы, яланғас* ***таштан*** *ғына бөткән бейек урындар ҙа күренеп ҡала.* Ғ. Дәүләтшин. *Һөнәрсе эҙләнеүен дауам иткән. Һаман шулай тауҙар, далалар гиҙгән. Ер ҡаҙған,* ***таш*** *аҡтарған.* З. Биишева.

2. Шул тау тоҡомоноң айырым киҫәге. *Матур* ***таш****. Мунса* ***ташы****.* ▬ *Аҫыл* ***таш****, ерҙә ятып, әрәм булмаҫ ...* Аҡмулла. *Сәғәттең тышы көмөш, өҫтө алтын һәм төрлө* ***таш*** *менән биҙәкләнгән.* Д. Юлтый. *Степан ҡулына бик ҙур аҡ* ***таш*** *тотоп, ... һелтәп ебәргәйне, ул Мөлөк ағайҙың башына саҡ ҡына теймәй, сыжлап уҙып китте.* Т. Хәйбуллин. *Тура һүҙ* ***таш*** *ярыр.* Мәҡәл. *Тырышҡан* ***ташҡа*** *ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.* Мәҡәл.

3. Эске ағзаларҙа барлыҡҡа килгән ҡаты матдә. *Бауыр* ***ташы****. Бөйөр* ***ташы****. Ҡыуыҡ* ***ташы****.*

4. Мәғдән ҡатнашып ҡатҡан тау тоҡомо; руда. *Баҡыр* ***ташы****. Көмөш* ***ташы****. Тимер* ***ташы****.*

**таш** II *ҡ.* 1. Тәүге кимәлдән артып, ярҙан сығыу (һыуға ҡарата). *Ҡотлояр Ырғыҙ* ***ташҡан*** *саҡта дүрт ауылдың волосҡа бара торған юлын* ***ташҡын*** *өҙәсәге тураһында һөйлә*[*не*]. Һ. Дәүләтшина. *Йылғалар атылып* ***таша****.* К. Мәрғән.

2. Һауыт ситенән артып сығыу. *Эркет* ***таша****.* ▬ *Һуң, ҡара, ҡара, һөтөң* ***таша*** *бит, һыпыр тиҙерәк!* Т. Хәйбуллин. *Һабаларҙан* ***ташты*** *ҡымыҙ, бал бөкөләрҙе атты.* Б. Бикбай.

3. Тулышып, тығыҙ булып, ҡапайыу (эскә ҡарата). *Эс* ***ташыу****.*

4. *күсм.* Ҙур күләм алыу (көскә, тойғоға һ. б. ҡарата). *Дәрт **таша**. Тойғо **таша**.* ▬ *Бер минутта **ташты** күңелем, бер минутта булды ут.* Ш. Бабич. *Моңайтмасы, һары һандуғасым, **ташып** бара минең һағышым.* Халыҡ йырынан.

**ташын I** *и.* Малдың эс ташыу ауырыуы. *Һыйырҙы **ташын** һуҡҡан.*

**ташын II** *ҡ.* Үҙ нәмәңде күтәреп-күтәреп ташыу. *Яңы өйгә **ташыныу**.*

**теҙ I** *и.* Аяҡтың (малда алғы аяҡтың) бот һөйәге менән балтыр һөйәген тоташтырған быуыны; тубыҡ. *Тиңдәш ҡылһаң, уның өсөн бирегеҙ **теҙ**, танымаған әҙәмгә алтын да — еҙ.* Аҡмулла. ***Теҙ** ҡаҡшаны. Ҡырҡҡан ҡайын кеүек һалҡын ергә ауҙы Иомағол.* Б. Бикбай. *Дошманымды **теҙ** сүктереп, мин ҡалдым тере.* Н. Нәжми.

**теҙ II** *ҡ.* 1. Еп, бауға, шешкә бер-бер артлы үткәреү. *Мәрйен **теҙеү**.* ▬ *Ул [Зыя] шешкә **теҙгән** балыҡтарын тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндереп һанап ҡараны ла, үлән өҫтөнә һалды.* М. Тажи.

2. Бер буйға урынлаштырыу. ***Теҙеп** һалыу.* ▬ *Усаҡ алдындағы бәләкәй кәштәгә һауыт-һаба **теҙеп** ҡуйылған.* Б. Бикбай.

3. Бер рәткә урынлаштырыу. ***Теҙеп** ултыртыу.* ▬ *Беҙҙең батальонды ... сафҡа **теҙеп**, ҡала ситенә алып сыҡтылар.* Д. Юлтый.

4. Бер-бер артлы өҙмәй ялғау (һүҙ, хәбәрҙе). ***Теҙеп** һөйләү. **Теҙеп** әйтеү.* ▬ *Һүҙҙәрҙе ... уйламай, тик телгә килгәнде генә **теҙә** инем.* С. Ағиш. *Шуны башлап яҙып киттем, **теҙеп** киттем, **теҙеп**.* Ш. Бабич.

**тек I** *ҡ.* 1. Беселгән тауарҙы сит-ситенән энәле еп менән беркетеп, кейем-һалымды әҙерләү. *Итек **тегеү**.* ▬ *Француз күлдәк **теккәнһең**, итәге ергә тейһен, тип.* Халыҡ йырынан. *Берәү мал таба, берәү тоҡсай **тегә**.* Әйтем.

2. Бер нәмәнең сит-ситен йәки өлөш-өлөшөн еп, бау үткәреп беркетеү. *Яраны **тегеү**.* ▬ *Ҡарһаҡсылар күптән инде аттарын ашатып, әйәрҙәрен нығытып, айыл баштарын **тегеп**, ... ошо көндәрҙе көтә ине.* Һ. Дәүләтшина.

**тек II** *окш.* Ҡаты бәләкәй нәмә ҡатыға ҡапыл тейгәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Тек итеү.*** ▬ *Ғәйзулла бабайҙың һалдауы* ***тек итеп*** *кенә ҡала.* Н. Мусин.

**тексәйт I** *ҡ.* Оҙаҡ итеп төбәү (күҙҙе). ***Күҙҙе тексәйтеп ҡарау.*** ▬ *Шаһи ҡарт, урынынан ҡалҡынып, күҙҙәрен барса көсөнә* ***тексәйтеп***, *... урамға ҡараны.* А. Ғирфанов.

**тексәйт II** *ҡ.* Текә итеү. *Тимербулат маңлайын* ***тексәйтеп***, *ҡаштарын йыйырып ... ҡарап торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**текә I** *с.* 1. Киҫкен үргә күтәрелгән; *киреһе* һөҙәк. ***Текә ҡая. Текә яр.*** ▬ *Ҡояш ҡат-ҡат урмандар,* ***текә*** *тауҙар артына төшөп юғалды.* Т. Тажи.

2. Тураға баҫып тырпайып торған (ял, сәс, һ. б. ҡара-та). *Өлкән кәүҙәле, киң яурынлы,* ***текә*** *ҡара сәсле, ялпағыраҡ йөҙлө идара ағзаһы Ғәлләм бүрәнәнән торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

3. *күсм.* Ҡырыҫ, тәкәббер. ***Текә кеше.***

**текә II** *ҡ.* Туп-тура йүнәлтеү (күҙ, ҡарашты); төбәү. *Ҡалҡыуғараҡ менеп, ҡаулан яланына, ваҡ сауҡалыҡҡа күҙ* ***текәнем.*** *Ҡараһам, ... үҙәктән ете бүре ҡола яланға сыҡты.* С. Кулибай. *Ҡыҙ зәңгәр күҙҙәрен ... күккә* ***текәгән.*** Н. Мусин.

**тел I** *и.* 1. *анат.* Умыртҡалы йән эйәләренең һәм кешенең ауыҙы эсендәге мускул үҫендеһе рәүешендә булған, аҙыҡ сәйнәүгә, йотоуга булышлыҡ итә һәм уның тәмен билдәләй торған хәрәкәтсән оҙонса ағза. ***Керешле тел. Тел күберсеү. Тел осоноу. Телде сығарыу.*** ▬ *Ауыҙ эсендә* ***тел*** *йөрөй,* ***тел*** *осонда һүҙ йөрөй.* Салауат Юлаев. ***Телеңде*** *теш артында тот.* М. Өмөтбаев. *Ләйлә бик һөйләшеүсән шул.* ***Теле*** *лә талмай...* Н. Нәжми.

2. Фекер йөрөтөп, үҙ-ара аралашыу хеҙмәтен үтәгән өндәр һәм лексик-грамматик саралар системаһы. ***Башҡорт теле. Төрки телдәр.*** ▬ *Ул [Истебей] ... үҙ* ***телен,*** *ҡаҙаҡсаны, ғына белә.* Һ. Дәүләтшина. *Был бөйөк* ***тел*** *миңә осорға ҡанат, бөтә бейеклектәргә күтәрелә алырлыҡ көс һәм иң йәшерен серҙәрҙе асып бирә торған алтын асҡыс ине.* Ә. Вәли.

3. Үҙенә хас билгеләре булған телмәр төрө. *Гәзит теле. Әҙәби тел.*

4. Уй-тойғоно белдереп, аралашыуға мөмкинлек биргән сара. *Музыка теле. Математика теле.* ▬ *Ҡурай теле нәҙек илау менән тапҡырына саҡыра тарихты.* Ғ. Хәйри.

5. Кешелә телмәр өндәре барлыҡҡа килтереүҙә һәм шул йәһәттән фекерҙе һүҙҙәр аша биреүҙә ҡатнашҡан шул ағза; телмәр ағзаһы. *Ҙур тәҙрәнең рәшәткәһен ҡуя алмағанда Иәләлетдин: — Ул еренән түгел, был ҡырынан тотоғоҙ, ахмаҡтар! — тип тел менән ярҙам итте.* С. Агиш. *Татлы тел йыланды өңөнән сығарыр.* Әйтем.

**тел II** *и.* Һорау алып, кәрәкле мәғлүмәттәр белә торған һуғыш әсире. *Комиссар менән Сорокин тотоп килтергән телдәрҙе блиндажға алып инделәр. Подполковник уларҙан һорау ала башланы.* Б. Дим. *Разведчик өсөн тел иң ҙур табыш инде ул.* Ә. Вәли.

**тел III** *и.* Төрлө нәмәлә, механизмда, музыкаль ҡоралда бер осо беркетелгән пластинка, стержень. *Барометр теле. Ботинка теле. Гармун теле. Йоҙаҡ теле. Компас теле. Ҡумыҙ теле. Ҡыңғырау теле. Сәғәт теле.* ▬ *Кәмә сыҡты. Күмәк йыр башланды. Кемдер баҫты тальян телдәрен.* Ғ. Сәләм.

**тел IV** *ҡ.* 1. Оҙон йоҡа итеп буйға ҡырҡыу; ярыу. *Ҡайыш телеү.* ▬ *Барый ... мейес алдында талпына-талпына сыра телеп аҙаплана ине.* Р. Ғабдрахманов. *Икмәктәй итеп тупраҡты ҡайырып телә төрән.* Р. Назаров.

2. Йоҡа яҫы итеп ҡырҡыу. *Алма телеү. Ҡарбуз телеү. Ҡауын телеү. 'Ҡыяр телеү.* ▬ *[Гөлйөҙөм] ашъяулыҡ уратып Айбулаттың юлдан ҡайтҡан икмәген телеп һалды.* Һ. Дәүләтшина.

3. Ниҙеңдер өҫтөндә һыҙат-һыҙат рәүешендә буй эҙ ҡалдырыу, һыҙат булып үтеү, ятыу. *Күкте телеп йәшен атһа, тертләп китә ҡайын ҡурҡҡандай.* Я. Ҡолмой. *Уттар яна; телеп төн ҡараһын, күккә үрелә усаҡ ялҡыны.* Р. Сафин.

4. *күсм.* Һауала киҫкен яңғырау, һауаға киҫкен таралыу. *Тик ҡаиҙалыр аҡрын ғына йыр тауышы **телә** таң тынын.* Р. Ниғмәти. *Гудок һауа **телде**... Гудок менән: — Гөлнур! — Әхмәт! — тигән он тулҡынды Иҙел өҫтөндә.* Ғ. Сәләм.

5. *күсм.* Күңел ғазабы килтереү, рухи ғазап сиктереү, бик ныҡ әрнетеү, әсендереү. — *Һуғыш! Бына был һүҙ айҡап сыҡты бөтә аҡланды. Көләс йөҙҙө һөрөмләндерҙе ул, шат йөрәкте **телде**.* З. Биишева.

**теш I** *и.* Ауыҙ ҡыуышлығында ҡаты ашамлыҡты киҫеү, кимереү-сәйнәү йәки ватыу өсөн хеҙмәт итә торған һәм аҫҡы-өҫкө яңаҡтар буйлап ике параллель рәт яһап теҙелгән үҫенделәрҙең береһе. *Алғы **теш**. Аҫҡы **теш**. Өҫкө **теш**. **Теш** сыға. **Теш** төшөү. **Теште** дауалау. Яңаҡ **теш**.*

**теш II** *и.* Төрлө эш ҡоралдарында, машиналарҙа һ. б. нәмәне лә булһа эшкәртеү, таратыу йәки эләктереп тартыу, эләктереп өҙөү өсөн яһалған осло сығынды. *Бысҡы **теше**. Тараҡ **теше**. Тирмән **теше**. Тырма **теше**. Ураҡ **теше**.* ▬ *Экскаватор сүмесенең ҡорос **теш**тәре туң ерҙе кимерә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 14 март.

**тешә I** *ҡ.* Ҡорал-ҡорамалдың тешен яңыртып йүнәтеү. Йәки үткерләү. *Бысҡыны **тешәү**. Тирмән ташын **тешәү**.* ▬ [*Гатаулла*:] *Килтер әле, ҡыҙый, улайһа урағыңды, иөҙөн **тешәп** бирәйем.* Й. Солтанов.

**тешә II** *ҡ.* Теш алмаштырыу (балаларға, йәш малға ҡарата). *Рөстәм **тешәй**. Иҫке теш**тәр** **төшә** лә үҫә.* Й. Гәрәй. *Етеҙ бала етегә еткәнсе **тешәй**.* Әйтем.

**тибен I** *и.* Йылҡының ҡыш көнө ҡарҙы тибеп утлаған ере. ***Тибенгә** сығарыу. **Тибендә** йөрөү.* ▬ *Үткән ҡыш ҡарҙың ҡалын булыуы сәбәпле йылҡы **тибендән** һөлдәһен генә алып сыҡты.* Ғ. Дәүләтшин. *Арҡа ғына ерҙә **тибен** тибә ҡыҙыл туры айғыр өйөрө.* Халыҡ йырынан.

**тибен II** *ҡ.* 1. Ҡабат-ҡабат тибеү, тибеп-тибеп алыу. *Зөлҡәрнәиҙең ... һиҙгер аты **тибенеп**, бышҡырып ҡуйған.* Н. Иҙелбай. *Күк бейә ... тирәһенә һырлыҡҡан тай-тулаҡтың ҡайныһын тешләп, ҡайныһын **тибенеп** өркөттө лә урманға ҡарай елеп китте.* Й. Мостафин.

2. Тибеп-тибеп аяҡ аҫтын соҡоу; сапсыныу. *Бында үлән шәп. Турысай **тибенеп-тибенеп** ашай.* Б. Бикбай. *Баҡса артында бер әтәс менән бер тауыҡ **тибенеп,** ем сүпләп йөрөй, ти.* Әкиәттән.

3. *иҫк.* Һөжүм яһау. *Бабсаҡтың ... йәнә бер улы бар ине. Шыҡманай атлы.* [*Ҡарағөлөмбәт*] *уға **тибенде,** ул ҡасты.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**тибеш I** *и.* Йөрәк, тамырҙың тибеүе. *Тамыр **тибеше.*** ▬ *Йөрәгемдең һәр бер **тибешендә** ишетәм мин Урал тауышын.* А. Игебаев.

**тибеш II** *с.* Ыңғайлы, көйлө; шәп. ***Тибеш** егеттәр. **Тибеш** салғы.* ▬ *Нихәл, Дәүли! Эш **тибешме,** шәбәйәһеңме?* Д. Юлтый.

**тик I** *кире терк.* Ҡаршы ҡуйылған һүҙ йәки һөйләмде теркәй. *Ул* [*Сәғиҙә*] *ауыр яҙмышы хаҡында Гөлнурға ла яҙҙы, **тик** унан яуап булманы.* М. Тажи. *Кеше бик борон-борондан алға ынтылған һаман, **тик** алғы көндәрҙе ул саҡ томалап торған заман.* Р. Ниғмәти.

**тик II** *киҫ.* Үҙенән һуң килгән һүҙҙе айырып сикләү өсөн ҡулланыла. *Мин ... ҡаланың матурлығы **тик** ҙур таш биналар, магазин тәҙрәләрендәге биҙәктәр менән генәлер тип уйлай инем.* С. Агиш. *Ә мин һандуғасты түгел, **тик** һине көтәм.* К. Кинйәбулатова.

**тик III** *р.* 1. Бер ни эшләмәй, эш-хәрәкәтһеҙ. *Зөләйха башын эйгән, бер ни өндәшмәй, **тик** ултыра.* Т. Йәнәби. *Уларға* [*һалдаттарға*] ***тик** кенә тороп үлем көтөү ҡыйын ине.* И. Насыри.

2. Бер рәүешсә, бер ҡиәфәтсә, бер ыңғайға. *Ҡарап **тик** тороу. Һөйләшеп **тик** ултырыу. Эшләп **тик** йөрөү.* ▬ *Беҙ шул эҙҙән **тик** барабыҙ, таймайбыҙ бармаҡ ҡәҙәр.* Ғ. Ғүмәр.

**тир I** *и.* Тире аҫтындағы махсус биҙҙәрҙән сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк һыу. ***Тир** аға. Һалҡын **тир.** Шыбыр **тир.** Әсе **тир.*** ▬ *Маңлай **тирен** һөртөп еңемә, үркәс-үркәс тауҙар артылдым.* С. Ғәбиҙуллин. *Ләғнәт төшһөн миңә, әгәр ерем, әпәйеңә **тир** түкмәгән ҡоро ҡул һуҙһам.* Н. Нәжми. [*Мәргән:*] *Атыңа һыу бөркһәң дә **тире** ҡатмау — яу көтөү ул һылыуҡай.* «Мәргән менән Маян».

*Маңлайҙан аҡҡан эсе* ***тир*** *табанға төшһә, тоҙ булыр.* Әйтем.

**тир II** *ҡ.* 1. Үҫеп ултырған емеш-еләкте сүпләп йыйыу. *Бөрлөгән* ***тиреү.*** ▬ *Был балалар урманға күнегә башлаған, төрлө емеш* ***тиреп*** *ашаған, ҡош атҡан.* Әкиәттән. *Алма* ***тирһәң, тир*** *алдыңа, алма* ***тиргән*** *ҡулҡайың буялһын.* Халыҡ йырынан.

2. Тәртип менән бер-берейенә тоташҡан нәмәләрҙе тарҡатыу, таратыу. *Һалдаттар килеп, өйҙө* ***тиреп*** *тә ташлаған.* Хикәйәттән.

**тире I** *и.* 1. Кеше һәм йәнлек, ҡош тәнен көп булып тыштан ҡаплаған ҡатлам. *Бит* ***тиреһе.*** *Маңлай* ***тиреһе.*** ▬ *Урман батыр тырыша торғас, бүрәнә араһынан бармағын тартып алған, ә бармаҡ* ***тиреһе*** *һыҙырылып ҡалған.* Әкиәттән.

2. Йәнлек, хайуандың тунап алған тышҡы көбө. *Айыу* ***тиреһе.*** *Бәрәс* ***тиреһе.*** *Ҡуян* ***тиреһе. Тире*** *иләү. Төлкө* ***тиреһе.*** *Һарыҡ* ***тиреһе.*** ▬ *Ҡуяндың* ***тиреһе*** *эт өргән һайын йыртыла.* Әйтем.

**тире II** *бәйл. диал.* Тиклем. *Тауға* ***тире.***

**тиреҫ I** *и.* Тиҙәк менән һандыҡ бесән һәм һалам ҡатнашмаһы. *Серегән* ***тиреҫ. Тиреҫ*** *сығарыу.* ***Тиреҫ*** *өйөү.* ***Тиреҫ*** *таратыу.* ***Тиреҫ*** *түгеү.* ▬ *«Октябрь» совхозында* ***тиреҫ*** *ташыу өсөн маханизацияланған өс отряд ойошторолғайны.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 ғинуар.

**тиреҫ II** *и.* Көньяҡҡа ҡаршы тараф; төньяҡ. ***Тиреҫтән*** *көслө һалҡын ел иҫә, быҫҡаҡлап ямғыр яуа.* Ж. Кейекбаев.

**титан I** [*рус.* < *гр.*] *и.* 1. Боронғо грек мифологияһында: Олимп аллаларына ҡаршы һуғыш алып барған ғәйәт көслө йән эйәләренең береһе, дейеү. *Аллалар менән* ***титандар*** *көрәше.*

2. *күсм.* Берәй өлкәлә ғәйәт ҙур эш күрһәткән, аҡыл көсө, таланты, эшмәкәрлегенең киң ҡоласлылығы менән үҙенә башҡа айырылып торған кеше. *Ленин тиңдәше юҡ бөйөк даһи, даһиҙарға даһи, ул —* ***титан.*** Х. Ҡунаҡбай.

**титан II** *и.* Ҡорос төҫөндәге бик ҡаты металл, химик элемент. ***Титан*** *ҡулланыу.* ***Титан*** *табыу.*

**титан III** *и.* Эсәр өсөн һыу ҡайнатыу яйланмаһы. ***Ти-танда** һыу ҡайнатыу.*

**тойғон I** *и.* Ыласындар ғаиләһенә ҡараған аҡ сыбар төҫтәге эре йыртҡыс ҡош. ***Тойғон** өйрәтеү. **Тойғон** менән һунар итеү.*

**тойғон II** *с. иҫк.* Нескә тойғоло, һиҙгер. ***Тойғон** кеше.*

**тойоҡ I** *и.* Йылғаның яй ғына ағып, төбө тәрән батҡаҡ булып кисеү бирмәй ятҡан ере. ***Тойоҡҡа** төшөү.*

**тойоҡ II** *и. иҫк. лингв.* Килеш. *Төп **тойоҡ**. Урын-ваҡыт **тойоҡ**.*

**тоҡан I** *и.* 1. Еп, бауҙың әйләндереп килтереп эләктергән дүңгәләкле осо; элмәк. ***Тоҡан** яһау.*

2. *диал.* Боғал. *Әсир итеп, муйыныңа һалмаһындар тиһәң, **тоҡан**, илең һаҡлап, яуызлыҡты яндырырлыҡ уттай **тоҡан**.* Н. Иҙелбай.

**тоҡан II** *ҡ.* 1. Ут тейеп, ут сағылып яныу. *Утын **тоҡана**.* ▬ *Фәхри ... бер сыйыуҙа **тоҡанмаған** шырпыны һүгеп алды.* Б. Бикбай. *Ут инде һүнә төшкәндә генә ҡабаттан ... **тоҡанып** китте.* Я. Хамматов. [*Мәҙинә*:] *Үкенһәк тә һүнгән усаҡ **тоҡанмаҫ** ҡабат.* М. Кәрим.

2. *күсм.* Хасил булып, дәррәү ҡеүәт алыу. *Һуғыш **тоҡана**. Ярыш **тоҡана**.*

3. *күсм.* Утлы һымаҡ баҙлау; яныу. *Зөлхизәнең әле генә моңайып мөлдөрәгән күҙҙәре инде Зөһрә йондоҙҙай **тоҡанып** китте.* З. Биишева.

4. *күсм.* Тойғо көсөнән ярһыу; яныу. *Теләк **тоҡана**. Хыял менән **тоҡаныу**.* ▬ *Кешеләр ысын хеҙмәт дәрте менән **тоҡанып** киткән дәрт беҙҙе байтаҡ оҙатып барҙы.* Й. Солтанов.

5. *күсм.* Асыуланып, ҡапыл ярһыу; ҡыҙыу. «*Юҡ, юҡ! — тип **тоҡанып** китте Мазһар. — Можаһар беҙгә һис кенә лә зарар итмәй!*» Ш. Насыров.

**тон I** *с. диал.* Йыш, ҡуйы. ***Тон** ҡамыш.*

**тон II** *ҡ.* Буръяҡлап торған нәмәләре төпкә ултырып, таҙарыу. *Һыу **тона**.* ▬ *Көн эҫе ине. Кисә яуып үткән ҡойма ямғырҙан һуң юлда ҙур-ҙур күләүектәр **тоноп** ҡалған.* Р. Ғабдрахманов. *Таштуғайҡай, һинең йылғаҡайың **тоноп** ҡына аҡҡан һыу икән.* Халыҡ йырынан.

**тон III** *к.* Томанһыу, һүрәнкегә әйләнеү; томанһыу, һүрәнке булыу. *Бабай йоҡонан **тонған,** йәшкәҙәп торған йәшкелт күҙҙәрен асты.* Ғ. Дәүләтшин. *Тик йондоҙҙар бейеклектә берсә янып, берсә **тона**.* М. Кәрим.

2. Көпләнгән, тығылған һымаҡ булыу. *Танау **тона**.* — *Сусҡаларҙың сыйылдауына, күҙ алдынан үткән имәнес картинаға менән иҫ китте, ҡолаҡтар **тондо**.* Д. Юлтый. *Машина урамдан үткәндә, тәҙрәләр дер һелкенеп, ҡолаҡ **тоноп** ҡала.* М. Хисмәтов.

**тоноҡ I** *с.* 1. Тоноп таҙарған; бурьяҡ түгел; таҙа. ***Тоноҡ** һыу.* — *Күл **тоноҡ,** ... көҙгө кеүек булып ята ине.* М. Ғафури.

2. Асыҡ күренмәгән, ялтыр түгел; томанлы һымаҡ. ***Тоноҡ** быяла. **Тоноҡ** көҙгө.*

3. Баҙыҡ, сағыу түгел; төҫһөҙ. ***Тоноҡ** буяу. **Тоноҡ** төҫ.* — *Тышта ... ҙур тәҙрәне **тоноҡ** биҙәктәргә буяп, таң ата.* М. Хәйҙәров.

4. Асыҡ, баҙыҡ түгел; һүрәнке, бөләңгерт. ***Тоноҡ** ай. **Тоноҡ** күҙ. **Тоноҡ** нур. **Тоноҡ** яҡтылыҡ.* — *Ҡала ҡараңғы, бер нисә урында **тоноҡ** ҡына электр фонарҙары күренә.* Д. Юлтый. *Шофёр ... мәғәнәһеҙ, **тоноҡ** ҡараш ташланы.* С. Агиш.

5. Асыҡ, яңғырауыҡлы түгел; һаңғырау. ***Тоноҡ** тауыш.*

**тоноҡ II** *и.* Ниҙер һалып тондоролған шыйыҡлыҡ. *Көл **тоного**. Ҡайын **тоного**.*

**тороҡ I** *с.* 1. Йығылмаған, ығып ятмаған, төп-төҙ ултырған (иген, үҫемлек һ. б. ҡарата). ***Тороҡ** игенде урыуы еңел.*

2. Ел ҡаҡмаған, хәрәкәтһеҙ тороп тынсыу булған. *Барактағы **тороҡ** һауа тын алырға бирмәй.* Ш. Бикҡол.

**торок II** *и.* Төҙөлош, ҡоролманың ике бағана араһындағы буйы. ***Тороҡҡа** һуҙыу.* — [*Ғариф*:] *Әхтәри ҡарттың өйө тирәһен кәртәләп ҡуйыу кәрәк. Биш-алты **тороҡ** кәртә етә.* Ж. Кейекбаев. *Күперҙең дүрт **торого** емерелде.* А. Таһиров.

**торон I** *и. иҫк.* Ҡыҙҙың йәки улдың улы; ейән. *Ҡәҙерле нәмә үҙенең шаян **торондарының** уҡ, ян менән уйнаға-*

*нын рәхәтләнеп ҡарап тора.* «Ек Мәргән». ***Торонһоҙ*** *кеше — тамырһыҙ ағас.* Мәҡәл.

**торон II** *и.* 1. Тыштан янып ҡуҙғалган, күмерләнгән агас киҫәге; торонбаш. *Һәр көн **торондарға** әүереләә шаулап торған нәфис урмандар.* Х. Ҡунаҡбай.

2. Игендең башағын ҡап-ҡара саңға әйләндерә, орлоғон ҡарайтып ҡатыра торған ауырыу. ***Торон һуға.*** ▬ *Байтаҡ арыш, бойҙай сәсеүлеген **торон** баҫты.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 26 август.

**торош I** *и.*1. Баҫып торған хәл. *Хәким бабай ... көрәгенә таянып, башын эйеп, хәстәрле уйҙарға батып тора ине. Уның шул **торошо** хәтеремдә ныҡ һаҡланған.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Ниҙеңдер ошо мәлдә булган хәле. *Сәсеүгә әҙерлек **торошо**. Эштең **торошона** тәрән анализ аһау.* ▬ *Бөтә Республика буйынса һауа бассейнының радиоактив **торошона** даими контроль урынлаштырылған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 27 май.

3. Кон күреп торган, йәшәгән хәл; тормош. [*Башҡортостан*], *һөйлә олатайҙар хәлдәрен, йөрөш, **торош**, заңын, йолаһын.* Ш. Бабич.

**торош II** *с.* Сифаты, әһәмиәте, кимәле менән кемгә йәки нимәгәлер бәрәбәр булырлыҡ; тиң, торошло. [*Заҙа:*] *Зифаның төҫө лә, эше лә ун ҡыҙға **торош**.* С. Кулибай.

**тотош I** *и.* Билдәле бер холоҡ, рәүеше, үҙ-үҙеңде тотоу рәүеше. [*Мәҙинә менән Ямалдың*] *донъяға ҡараштары; үҙ-үҙен **тотоштары** үҙгә булһа ла көн һайын тиерлек бергә, шатлыҡ, ҡайғылары бөткәнсә уртаҡ ине.* Ф. Мансуров.

**тотош II** *р.* Бөтә булган өлөш, берәмектәр күләмендә; тулыһынса. ***Тотош*** *йыуыу.* ***Тотош*** *ҡуҙғалыу.* ***Тотош*** *ҡырҡыу.* ▬ *Күмер **тотош** һүрелеп, буш көл генә булып ҡала.* Б. Бикбай. ***Тотош*** *колхозлашыу нигеҙендә һуңғы синыф бөтөрөлә.* Ғ. Амантай.

2. Бүленмәгән тулы күләмдә; тулыһынса. ***Тотош*** *аҡтарыу.* ***Тотош*** *биләү.* ***Тотош*** *йәйелеү.* ***Тотош*** *ҡалтырау.* ***Тотош*** *ятлау.* ▬ [*Яланбикә:*] *Ике итәк тотоп, туғыҙ төрлө төрлөк баҫып, буйын ҡыҫҡаса **тотош** итеп*

*тегәйек.* Һ. Дәүләтшина. *Йәшел үләнле тау битләүҙәрен* ***тотош*** *ҡаплап ятҡан мал-тыуарҙың иҫәбе-хисабы булмаған.* Н. Иҙелбай.

3. Бөтә булмыш күләмендә, тулыһынса. ***Тотош*** *яҡ.* ***Тотош*** *быяла.* ▬ [*Ҡыҙрас*:] *Мин бит* ***тотош*** *насар уҡымайым.* З. Биишева. *Һарайҙың тирә-яғы* ***тотош*** *ҡара ер.* М. Кәрим.

**тотош III** *билд. а.* 1. Ниҙеңдер өлөш һәм бергәлектәрен тулыһынса эсенә алғанды белдерә; бөтә. ***Тотош*** *ауыл.* ***Тотош*** *халыҡ.* ▬ ***Тотош*** *завод бергә йыйылған.* В. Нафиҡов.

2. Ниҙелер бүлмәй, тулы күләмдә эсенә алғанды белдерә; бөтә. ***Тотош*** *бер сәғәт ваҡыт.* ***Тотош*** *кәүҙә.* ▬ ***Тотош*** *офоҡ алһыуланып яҡтыра башланы.* Б. Бикбай. [*Хәмәй*:] *Дошмандар* ***тотош*** *яу булып беҙҙең өҫкә таба ябырылды.* М.Тажи.

**төҙ I** *с.* 1. Тегеләй-былай бөгөлмәгән тигеҙ йүнәлешле; кәкре йәки ҡыйыш түгел; тура. ***Тоҙ*** *ағас.* ***Төҙ*** *бармаҡ.* ***Төҙ*** *кәүҙә.* ***Төҙ*** *юл.* ▬ *Ҡарағай ишек,* ***төҙ*** *яңаҡ, төшөрә килдем, атаҡайым.* Сеңләүҙән.

2. *кусм.* Дороҫлоҡ, тоғролоҡ менән һуғарылған. *Һиндә юҡ ысын һүҙ менән ап-асыҡ йөҙ,* ***төҙ*** *күңел.* Ш. Бабич.

**төҙ II** *и. диал.* Ялан, ҡыр. *Шунан хан һүҙ һөйләргә керешә бер саҡ: «Тыңлағыҙ ҡолаҡ һалып, яҡындарым. Сығыңдар дүртегеҙ ҙә яфан* ***тоҙға,*** *ҡылыңдар өлкән хеҙмәт инде беҙгә...»* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

**той I** *ҡ.* 1. Бер үк урынға нығ-нығ итеп, ҡабат-ҡабат һуғыу. *Өҫтәл* ***төйөп*** *ҡысҡырыу.* ▬ *Ҡыуғандар Колчак ғәскәрен елкәһен* ***төйөп.*** Р. Ниғмәти. *«Нисек сабындырайым?» — тигән Миңлебикә. «Нисек булһа ла ярар. Миндектең төйтәһе менән* ***төй*** *ҙә* ***той***», *— тигән әбей.* Экиәттән.

2. Ниҙеңдер осо менән нығ-нығ төртөп тығыҙлау. ***Төйөп*** *тултырыу.* ▬ *Әмир бағана төбөн төйә башланы.* Х. Ғиләжев.

3. Ваҡлау, йомшартыу йәки көбөнән һурҙырыу өсөн махсус ҡорал осо менән нығ-нығ һуғып иҙеү. *Тары*

***төйөү**. Тоҙ **төйөү**.* ▬ *[Килен] ҡулына **төйгөс** алды, тары **төйә** башланы.* Ш. Насыров.

4. *кусм.* Ихласлап, ныҡ итеп ашау. *Икмәк менән майҙы **төйөү**.*

**төй II** *к.* 1. Бауҙы салып алып, ныҡ итеп тартыу, төйөн яһау, төйнәү. *Арҡанды **төйөү**. Епте **төйөү**.*

2. Киң сепрәккә һалып, остарын ҡаушарып бәйләү; төйнәү. *Нәсимәнең балаһы бәләкәс булғас, ... сәңгелдәккә һала ла, ауыҙына икмәк сәйнәп **төйгән** сепрәк имеҙлекте ҡаптыра ла китә.* Һ. Дәүләтшина.

**төк I** *и.* Ҙур итеп уралган төргәк. *Бесән **төгө**.* ▬ *Янғындан һуң Әхмәҙи keләттең ҡутарып ташланған ҡабыҡ, ҡыҫырыҡтары араһынан сит-сите көйгән ике генә **төк** тауар тапты.* Ж. Кейекбаев.

**төк II** *и.* 1. Кеше, йәнлек, хайуан тәнендәге ваҡ йөн. *Ул [Фәхри] ... **төк** баҫҡан итләс ҡулын һелтәп ҡуйҙы.* Б. Бикбай. *[Дәүләтов] ҡырыныуға айырата иғтибар бирә, һаҡал, мыйыҡтарының **төгөн** дә күрһәтмәй.* С. Агиш. *Ҡуйы ҡара керпегең, бирсе миңә бер **төгөн**.* Халыҡ йырынан.

2. Үҫемлек һабагындагы еп кеүек үҫенте. *Кесерткән **төктәре**.*

**төклө I** *с.* Төгө бар, йөнлө. ***Төклө** ҡул.*

**төклө II** *с.* 1. Мал-мөлкәтле, етешле. *Ҡараҡтар үҙ-ара: «Бөгөн ҡайһы байға барабыҙ, ҡайныһы **төклө**?» — тип һөйләшә башланы.* Әкиәттән.

2. Муллыҡҡа, етеш хәлгә килтерә торган, файҙалы. *Ошо **төклө** хеҙмәтегеҙ османы һис бушҡа, елгә, үҙ емешен биреп һеҙгә, килтерҙе ул ҙур еңеүгә.* Н. Иҙелбай.

**төкө I** *и.* Ат муйынының ҡамыт һуғып шешкән ере. ***Төкө** булыу.*

**төкө II** *к.* 1. Ҡаты бер нәмәгә ныҡ итеп алып барып төртөү. *Башты **төкөү**. Терһәкте **төкөү**. Тубыҡты **төкөү**.*

2. Мөгөҙ, маңлай менән ныҡ итеп төртә һуғыу (һарыҡ, кәзәгә ҡарата). *Ҡапыл әйләнеп улар [кәзәләр] **төкөмәксе** булдылар.* Ғ. Амантай.

**төнә I** *р*. Бер нисә көн элек, анау бер көнө. [*Гөлшәкәр*:] ***Төнә** бер көн әлеге Хәлисә ҡыҙы осраны.* И. Ғиззәтуллин.

**төнә II** *ҡ*. 1. Төнгө йоҡоға китеү (ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Төндә тауыҡтар ҙа **төнәй, төнәй** кәкүк, турғаиҙар.* А. Иғебаев.

2. *күсм*. Йоҡлау. *Нигмәтйән ... өҫтәл ситенә башын **төртөп, төнәй** башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

3. Тон уҙғарыу. *Моңкилмәҫтең **төнәр** ере бер әбейгә тура килде, ти.* Әкиәттән.

**төнәт I** *ҡ*. Төнгө йоҡоға китергә ирек биреү. *Тауыҡтарҙы **төнәтеү**.*

**төнәт II** *ҡ*. Дауа өсөн үҫемлектең сәскә, һабаҡ йәки тамырын шыйыҡлыҡҡа һалып ултыртыу. *Әремде **төнәтеү**.*

**төп I** *и*. 1. Соҡор-саҡыр, һауыт-һабаның һ. б. аҫҡы яғы. *Бураҙна **төбө**. Иәшник **төбө**. Кәмә **төбө**. Соҡор **төбө**.* ▬ [*Үмәр*:] *Иә, ҡыҙым, ... көрәк-тырмаларҙы арба **төбөнә** һал да, әиҙә, ҡайтайыҡ инде.* Һ. Дәүләтшина.

2. Эсе соҡор нәмәнең, һауыт-һабаның аҫтан ҡаплап торған өлөшө. *Быймаға **төп** һалыу. Мискәгә **төп** ҡуйыу.*

3. Һыу аҫтындағы ер. *Йылға **төбө**.*

4. *күсм*. Ниҙеңдер тәрәндәге, эске нигеҙе. *Йөрәк **төбө**. Күңел **төбө**.* ▬ *Уйлаһаң барын **төптән** алып, иҫең китә бөйөк еңеүгә.* Ғ. Амантай. *Сабыр **төбө** һары алтын.* Мәҡәл.

5. Ниҙеңдер алдынан ҡарағанда иң эстәге, алыҫтағы өлөшө. *Мәмерйә **төбө**. Урман **төбө**.*

6. Осҡо аттың артындағы егеү урыны. [*Хәйрулла*:] *Көслө атты **төпкә** егәләр. Ат йөк тартыуға шул тиклем өйрәнә, аҙаҡтан осҡа ектеңме — тарта белмәй.* С. Агиш.

7. Ултырған оҙон нәмәнең аҫҡы өлөшө; *киреһе* ос. *Бағананың **төбө**. Ағастың **төбө**.*

8. Үҫемлектең иҫәп берәмеге. *Бер **төп** алма. Йөҙ **төп** еләк.* ▬ *Һәр **төп** йәшелсә балалар ҡарамағында үҫә.* Ғ. Ғүмәр.

9. Ағзаның кәүҙә менән тоташҡан урыны. *Бот **төбө**. Ҡолаҡ **төбө**.*

10. Кейем өлөштәренең тоташкан урыны. *Ең* ***төбө****. Салбар* ***төбө****.*

11. Үҫемлектәрҙең тамыр тирәһе. [*Ағас*] *үҫһен ... өсөн тәрбиәләргә,* ***төбөн*** *йомшартырға, һыу һибеп торорға кәрәк.* М. Тажи.

12. Китап, дәфтәрҙең тегелгән яҡ сите. *Китаптарҙың ... ҡатырға* ***төптәре*** *матур итеп биҙәлгән.* Ғ. Ғүмәр.

13. Ниҙеңдер аҙаҡкы ҡалдығы. *Аҙаҡ үҙе тарта* ***төбөн*** *генә, тәүҙә һиңә бик мул һурҙырып махоркаһын.* Ф. Бикбов.

**төп II** *с.* 1. Алдан ҡарағанда иң эстәге; төптәге, төпкө. ***Төп*** *яҡта ятыу. Урындың* ***төп*** *яғы.*

2. Башланғыс, нигеҙ сифатындағы; тәүге. ***Төп*** *ер.* ***Төп*** *йорт.* ***Төп*** *халыҡ.* ▬ *Бара-тора ауылдаштары ғына түгел, хатта улар үҙҙәре лә мулла ҡушҡан* ***төп*** *исемдәрен онотҡан.* З. Биишева.

3. Урын, дәрәжә буйынса беренсе кимәлдәге. ***Төп*** *ҡоҙа.* ***Төп*** *ҡунаҡ.* ***Төп*** *хужа.* ▬ *Үҙеңде ҡыҙҙың* ***төп*** *ағаһы итеп, минең эшкә аяҡ салмаһаң, ... ҡалынға алып барырмын.* Һ. Дәүләтшина.

4. Әһәмиәт буйынса беренсе урындағы, мөһим булған. ***Төп*** *бурыс.* ***Төп*** *көс.* ***Төп*** *мәсьәлә.* ***Төп*** *сәбәп.* ***Төп*** *талап.* ***Төп*** *тема.* ***Төп*** *шарт.* ▬ *Минең атайымдың* ***төп*** *һөнәре— тауҙан сажинлап таш сығарыу, таш нигеҙҙәр, таш келәттәр һалыу ине.* Т. Йәнәби.

**төп III** *оҡш.* Бәләкәй тос нәмә ҡатҡыл ергә һ. б. ҡапыл һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Төп*** *итеп йығылып төшөү.*

**төр I** *и.* 1. Дөйөм бер нәмәнең үҙенсәлекле айырым берәмеге. *Аш* ***төрө****. Буяҡ* ***төрҙәре****. Ғәскәр* ***төрҙәре****. Ҡорал* ***төрҙәре****. Сәскә* ***төрҙәре****. Эш* ***төрө****.* ▬ [*Талипов*] *һабан, сәскес һәм башҡа* ***төр*** *ауыл хужалығы инвентарҙарын ҡар аҫтынан ҡаҙып сығартты.* М. Тажи. *Бәйет һәм йыр — һуғыш фольклорының иң таралған* ***төрө****.* К. Мәргән.

2. *биол.* Бер төрлө билгеләргә эйә булған заттар йыйылмаһы, иң юғары берәмек иҫәпләнгән төркөмгә буйһонған

йәнлек һәм үҫемлектәрҙе квалификациялау бирәмеге. *Үҫемлектәрҙең төрҙәре.*

**төр II** *ҡ.* 1. Сепрәк, ҡағыҙ кеүек нәмәгә һалып, осон, башын ян-яҡлап ҡайтарыу; урау. *Баланы юрғанға **төрөү**. Китапты ҡағыҙға **төрөү**.* ▬ *Батшаның оло килендәре сепрәккә таш **төрөп** алып, ҡайныларына алып барған.* Әкиәттән.

2. Ситен эскә ҡайтарып, оҙонға урау. *Балаҫты **төрөү**.* ▬ *Ул [Сәғиҙә] стена гәзитен **төрөп**, шкафҡа һалды.* М. Тажи.

3. Осөнан, ситенән бөкләп-бөкләп, үргә ҡайтарыу (ең, балаҡ һ. б. нәмәне). *Балаҡты **төрөү**. Еңде **төрөү**.* ▬ *Шунда уҡ батыр Бабсаҡ йөрөп китте, ике итәген биленә **төрөп** китте.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

**төҫлө I** *с.* 1. Төрлө төҫтәге, төрлө төҫкә буяулы. ***Төҫлө** ҡәләмдәр.* ▬ *Гөлдөң һауыты бәләкәс биҙрә, уны Сабира **төҫлө** ҡағыҙҙар менән ҡоршатып ҡуйған.* Ғ. Хәйри.

2. Ниндәй ҙә булһа бер рәүешле. *Бүтән **төҫлө**. Икенсе **төҫлө**.* ▬ *Район үҙәге ... гел бер **төҫлө** ваҡ ҡына ағас йорттарҙан тора.* М. Тажи. *Юҡ, мин Әмирхановты был **төҫлө** булыр тип һис уйыма килтермәгәйнем.* С. Агиш.

**төҫлө II** *бәйл.* 1. Төп килештәге исем, сифат, эйәлек килештәге алмаш менән килеп, сифат оҡшашлығын белдерә; кеүек, һымаҡ, шикелле. *Арыҫлан **төҫлө** ҡыйыу. Күгәрсен **төҫлө** гөрләү.* ▬ *Тимашев бик йәш, ҡыҙҙар **төҫлө** бер малай.* Д. Юлтый.

2. Айырымланған оҡшатыу һәм сағыштырыу бәйләнештәрендә ҡулланыла; кеүек, һымаҡ, шикелле. *Семафорҙарҙың йәшел, ҡыҙыл уттары, таң ябалағының күҙе **төҫлө**, селт-селт килеп, бер асылып, бер йомолоп тора.* М. Тажи.

3. Оҡшатыу һәм сағыштырыу һөйләмдәрендә хәбәр функцияһын үтәй; кеүек, һымаҡ. *Күҙҙе асам. Әлеге аҡ түңәрәк әйләнә лә, киңәйә. Үҙе матур **төҫлө**.* С. Агиш. *Сәриә һис кенә лә ауылдан киткән **төҫлө** түгел.* Я. Хамматов.

4. Шартлы фараз төшөнсәһе биреү өсөн ҡулланыла; кеүек, һымаҡ. *Барып булмаҫ **төҫлө**. Уйлағанса булыр*

***төçлө.*** — *Һәр шартлаған бомба ... беҙҙең блиндажға төшөр* ***төçлө.*** Д. Юлтый. *Хистәрем дә бүлмәләргә һыймай, күкрәк тә тар* ***төçлө*** *йөрәккә.* М. Хәй.

**төш I** *и.* Йоҡола күргән төрлө күренеш. ***Төш*** *күреү.* ***Төштө*** *юрау.* — [*Рәхимә — Булатҡа:*] *Бөгөн һине* ***төшөмдә*** *күрҙемсе, ...* ***төш*** *булғас,* ***төш****: һин егет булып еткәнһең, имеш, тим.* К. Кинйәбулатова. *Гөлсөм, ниндәйҙер яман* ***төш*** *күреп, ҡысҡырып уянды: һикереп тороп яҡ-яғына ҡаранып алды.* Я. Вәлиев. *Тауыҡ* ***төшөнә*** *тары инә.* Мәҡәл. *Үткән эштән* ***төш*** *яҡшы.* Әйтем.

**төш II** *и.* Ҡояштың туп-тура көнлөктә булған ваҡыты, көн үҙәге. ***Төшкә*** *тиклем.* ***Төштән*** *һуң.* — *Иртәнән буранлап, һыуытыбыраҡ торған көн* ***төшкә*** *табан ҡапыл йылытты.* Я. Хамматов.

**төш III** *и. диал.* Тош. *Һөйөр өсөн ҡара ҡаштары бар, теҙгән ынйыы төçлө аҡ теше. Түшкәйҙәре ҡалҡыу, бите алма, Мадоннанан кәм һуң ҡай* ***төшө!*** Д. Юлтый.

**төш IV** *и. диал.* Ҡайһы бер үçемлектәрҙең емештәрендә ҡаты ҡабыҡлы орлоҡ. *Сейә* ***төшө.***

**төш V** *и. диал.* Сәтләүек һәм ҡайһы бер емештәрҙең ҡаты ҡатламы эсендәге йомшаҡ өлөшө. *Кейем бит ул кеше өсөн ҡабыҡ ҡына, сәтләүектең тышы түгел, ҡиммәт* ***төшө.*** Ф. Ғүмәров.

**төш VI** *ҡ.* 1. Юғарынан йәки ниҙеңдер өçтөнән аçҡа, түбәнгә күсеп, урын алмаштырыу. *Арбанан* ***төшөү.*** *Аттан* ***төшөү.*** — *Йорт хужаһы күтәрмәнән* ***төшөп,*** *уларға ҡаршы сыҡты.* М. Тажи.

2. Аçҡараҡ күсеү, түбәнерәк торош алыу. *Яурынға тиклем* ***төшкән*** *сәс.* — *Ул [малай] күҙенә* ***төшкән*** *ҙур фуражкаһын күтәреп, ... әшлекле генә яуап бирә.* Д. Юлтый.

3. Аçҡа табан йүнәлеп, берәй ергә ултырыу, яйлашыу. *Самолёт аэродромға* ***төшә.*** — *Күгәл дә осор, күлгә* ***төшөр,*** *күлдән осоп,* ***төшөр*** *күрәнгә.* Халыҡ йырынан.

4. Ер өçтөн биләп, солғап алыу. *Ҡараңғы* ***төшә.*** *Томан* ***төшә.*** *Эңер* ***төшә.*** — *Эçе* ***төшкәс,*** *һыйырҙар сәнскәкләп, урман яғына инеп китә.* Әкиәттән.

5. Һауанан ерғә ултырыу; яуыу, ҡуныу. *Ҡар **төшә**. Ямғыр күҙе **төшә**.* ▬ *Таңға ҡаршы ысыҡ күберәк **төшкән**.*

6. Һыу ағымы ыңғайына йәки тау юлы менән түбәнгә табан барыу. [*Яҙ*] *тирә-яҡ ауылдарҙың ярлылары ҡыуғынға китә. Улар һал менән Эйек буйлап Һаҡмарға, унан Уралға **төшөп**, Ырымбурға тиклем бара.* Ә. Вәли.

7. Ниндәйҙер юлға, йүнәлешкә, урынға аяҡ баҫыу. *Алға **төшөп** атлау.* ▬ *Беҙ байтаҡ урман ситләберәк барҙыҡ та бер иҫке юлға **төштөк**.* Ш. Насыров. *Тыуған ерҙән **төшкән** ер яҡын.* Әйтем.

8. Үҙ ауырлығы менән аҫҡа, түбәнгә китеү. *Ҡулдан **төшөп** китеү.* ▬ *Талондар **төшә** лә ҡала. ... Береһен ерҙән алдым тигәндә икенсеһе **төшә**.* С. Агиш.

9. Һауанан һ. б. сағылып, нимәгәләр ятыу. *Күләгә **төшә**.* ▬ *Мине ҡаршыларға пристандең уты ғына **төштө** Иҙелгә.* Ғ. Сәләм.

10. Ҡайһы урынғалыр тура килеү, ҡайҙалыр булыу (һүҙҙәге баҫымға ҡарата). *Баҫым икенсе ижекгә **төшә**.*

11. Ниҙең дә булһа көсө, күләме һ. б. әҙәйеү. *Ҡандың баҫымы **төшә**. Һыуҙың кимәле **төшә**.*

12. *күсм*. Бошонҡо, төшөнкө хәлгә килеү. *Кәйеф **төшә**.* ▬ *Тағы күңелем һүнеп, рухым **төшә**, һыҙлай йөрәк, ҡанды киптереп.* Х. Ғәбитов.

13. Ниҙәндер барлыҡҡа килеү, алыныу. *Көбөлә май яҙа Әсмә. Бына хәҙер май ҙа **төштө**.* Н. Нәжми.

14. Ваҡытлыса тороу йәки ҡунып сығыу өсөн урынлашыу, инеү. *Азаматовҡа Имәнтауҙа йыш буларға тура килә һәм ул гел Йомағужа ҡартҡа **төшә** ине.* Ә. Вәли.

15. Ашап боҙор һ. б. өсөн эйәләшеү (көйә, ҡорт кеүектәргә ҡарата). *Кейемгә көйә **төшкән**.*

16. Ниндәйҙер хәлгә ҡалыу. *Ҡайғыға **төшөү**. Ҡара тиргә **төшөү**.* ▬ *Йөрәк инде бер ҙә харап, сығып килә. Ниңә генә килдем икән, тигән көнгә **төштөм** бит.* Т. Йәнәби.

17. Ниндәйҙер эшкә, ниҙер эшләргә тәүләп тотоноу, башлау. *Бейергә **төшөү**. Бесәнгә **төшөү**. Сәсеүгә **төшөү**. Уҡырға **төшөү**.*

18. Тотҡон хәленә ҡалыу. *Ҡулға* ***төшөү****. Пленға* ***төшөү****.*

19. Берәй төрлө юл менән табылыу, ҡулға килеп эләгеү. [*Ҡудрәш*:] *Их, ҡапыл ғына ҡулға мең һум аҡса* ***төшһә****!* С. Мифтахов.

20. Тотҡан урын, дәрәжәнән яҙып, түбәнгә ҡалыу. *Директорлыҡтан* ***төшөү****.* ▬ *— Батша* ***төшкән****, инәй. Хөрриәт!* Һ. Дәүләтшина.

21. *күсм.* Кемдең йәки ниҙеңдер өҫтөнән алыныу. *Өҫтән йөк* ***төштө****.* ▬ [*Мансур*:] *Таптыҡ, алып ҡайттыҡ. Беҙҙән бурыс* ***төштө****.* И. Насыров.

22. *күсм.* Нindәйҙер хаҡ, баһаға килеү. *Арзанға* ***төшөү****. Ҡиммәткә* ***төшөү****.* ▬ *Был ҡалала беҙгә фатир табыуы ла еңелгә* ***төшмәне****.* Т. Йәнәби.

23. *күсм.* Ниҙәндер аша йәшерен үтеп, ҡайҙа ла булһа инеү. *Өйгә* ***төшөү****.* ▬ [*Булат*:] *Кит, һантыиҙар, кеше баҡсаһына* ***төшөргә*** *итә. — Үҙ баҡсаңда бер ни булмағас, кеше баҡсаһына ла* ***төшәһең*** *инде.* К. Кинйәбулатова.

24. *күсм.* Башта билдәләнгән хаҡты кәметеү. *Яҙға табан ит ҡиммәтләнгәс, ул* [*ир*] *туşкәләрен тейәй ҙә китә ҡала баҙарына. Кире алып ҡайтһа ҡайта, һорағанынан* ***төшмәй****.* Р. Солтангәрәев.

25. Кемдән йәки ниҙәндер башлау. *Баштан* ***төшөп*** *һанау.* ▬ *Эйе, иң баштан, тормошомдоң әлифбаһынан* ***төшөп*** *яҙырға тура килә миңә.* З. Биишева.

26. Һәр саҡ ҡайҙалыр булыу, тороу, дауам итеү (ғәҙәттә юҡлыҡ формаһында). *Бүрке башынан* ***төшмәй****. Ойого аяғынан* ***төшмәй****. Самауыры өҫтәлдән* ***төшмәй****.* ▬ *Был фильмдың әле булһа экрандан* ***төшкәне*** *юҡ.* Х. Ғиләжев.

27. ***-п*** формалы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең ҡапыл киҫкен рәүештә бөтөүен, тамам булыуын белдерә. *Алып* ***төшөү****. Ауып* ***төшөү****. Барып* ***төшөү****.* Килеп ***төшөү****. Ҡолап* ***төшөү****.*

28. ***-а*** формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең сикле булыуын белдерә. *Арта* ***төшөү****. Тыныслана* ***төшөү****.*

**тубал I** *и.* Ҡабыҡтан киң һәм түңәрәк йәки оҙонса итеп яһалған һауыт. *Әхмәҙиҙең ҡатыны бер* ***тубал*** *йомортҡа күтәреп келәткә инде.* А. Таһиров. *Ағас баштарына һарыған күстәрҙе* ***тубалға*** *тултырыуҙа атайға ярҙам итеүҙәр тағы ла күңелле ине.* М. Ғафури. *Сәмит бер* ***тубал*** *бойҙайын ... бер дисәтинә ергә сәскән.* Ә. Харисов.

**тубал II** *и.* Аталыҡ биҙендә була торған шешек. ***Тубал*** *булыу.*

**туҙ I** *и.* Ҡайындың иң тышҡы ҡабығы. *Айбулат ҡарт ғүмер буйы ....* ***туҙ*** *һыҙырған да дегет ҡайнатҡан, ерек ҡырҡҡан да күмер үртәгән.* Әкиәттән. *Ҡайын йәме* ***туҙ*** *менән, икмәк йәме тоҙ менән.* Мәҡәл.

**туҙ II** *ҡ.* 1. Тотоноу, ваҡыт үтеү арҡаһында алама, иҫке, яраҡһыҙ хәлгә килеү; иҫкереү. *Кейем* ***туҙа.*** *Өй* ***туҙа.*** ▬ *Яңы тауар алмағас ни, яҫтыҡ, мендәр тыштары ла* ***туҙып,*** *ҡарайып, йыртылып бөттө.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡамсат ҡына бүрек* ***туҙмай*** *тиҙәр, ҡырылып үҡ ситенән* ***туҙа*** *икән.* Халыҡ йырынан.

2. *күсм.* Көс-хәл, һаулыҡ бөтөп, таушалыу, ҡаҡшау. *Колхоздың элекке председателе — шаҡтай тәжрибәле кеше, ҡаты ҡуллы, ләкин ҡартлыҡ менән* ***туҙа*** *төшкән.* С. Агиш.

3. Тарау, йыйнаҡһыҙ хәлгә килеү; болартыу. *Сәс* ***туҙған.*** ▬ *Сәғиҙә көлтәне бауынан ғына тотоп күтәргәйне, бау өҙөлөп, көлтә* ***туҙып*** *китте.* М. Тажи.

4. Тирә-яҡҡа сәсрәп осоу; борҡоу. *Йөн* ***туҙа.*** *Саң* ***туҙа.*** ▬ *Хәби бай ... танауынан ҡан* ***туҙып,*** *аунап ятыуын күргәс, сарбайлап ҡысҡыра башланы.* Т. Хәйбуллин.

5. *күсм.* Әрәмгә, бушҡа китеп, юҡ булыу; тәләф булыу. *Ҡулдағы аҙ-маҙ аҡса* ***туҙмаҫ*** *борон Гөлйөҙөмдө һоратып, яусы ебәрергә булдылар.* Һ. Дәүләтшина.

6. *күсм.* Асыуҙан ныҡ ярһып әрләшеү. *Аҡназар ... хәлде бисәһенә һөйләп биргән. Бына бисәһе* ***туҙып*** *киткән бының, ... тауыш ҡуптарған.* Әкиәттән.

**туҙғаҡ I** *с.* Туҙып, ялбырап тороусан. ***Туҙғаҡ*** *сәс.*

**туҙғаҡ II** *и.* Үҫемлектең туҙып, осоп торған мамығы. *Бөгәрләнде бәпембәләр, йәйге елгә осто* ***туҙғаҡ.*** Р. Бикбаев.

**туй I** *и.* 1. Шатлыҡлы ваҡиға хөрмәтенә ойошторолған тантана; байрам. *Бәпес* ***туйы.*** *Еңеү* ***туйы.*** *Исем* ***туйы.*** ▬ *Онотолдо һабантуйҙар — булғаны юҡ өс йыл буйы. Ләкин Әсмә ҡарсыҡтарҙа бөгөн байрам— күлдәк* ***туйы.*** *Күлдәк* ***туйы!...*** *Ҡай берәүгә былдай* ***туйҙар*** *ғәжәптер ҙә. Бер ҡарауға, ил белмәгән нәмә кеүек, мәҙәктер ҙә.* Н. Нәжми. *Әйләр хандың бер ир балаһы тыуа. Ул шатлыҡтан бөтә тирә-яҡты саҡырып,* ***туй*** *үткәреп ебәрә.* «Алпамыша».

2. Никахлашыу уңайы менән ойошторолған мәжлес. ***Туй*** *яһау.* ***Туйға*** *барыу.* ▬ *Фатима менән Ҡадирҙың* ***туйын*** *үткәрҙеләр. Ике йәш кеше тормош юлына аяҡ баҫты.* Б. Бикбай. *Тормош матур бөгөнгө* ***туй*** *һымаҡ, ләкин тормош һис тә* ***туй*** *түгел.* Н. Нәжми. ***Туй*** *үткәс — һүҙ, яу үткәс батыр күбәйер.* Мәҡәл. ***Туй*** *үткәс дөмбөр һуҡмайҙар.* Мәҡәл.

**туй II** *ҡ.* 1. Туҡ хәлгә килеү, туҡ булыу. *Ашап* ***туйыу.*** *Ныҡ* ***туйыу.*** ▬ *Бөтәһе лә сәй әсеп* ***туйҙы.*** *... Емеш самауырҙы күтәреп, аш өйөнә алып сығып китте.* З. Биишева. *Ашап туймаған ялап* ***туймаҫ.*** Мәҡәл.

2. Нимәгәлер мулығыу, кинәнеү. *Икмәккә* ***туйыу.*** *Кейемгә* ***туйыу.*** *Һаулыҡҡа* ***туймау.*** ▬ *Бына ерҙең күбеһен бишнәккә һатҡаны бире, тамаҡ иткә түгел, һөткә лә* ***туймай*** *башланы.* Һ. Дәүләтшина. *Яҡшы менән бергә булһаң, малға* ***туйырһың.*** Әйтем.

3. Танһыҡ ҡаныу, ҡәнәғәт булыу. *Ҡарап* ***туйыу.*** ▬ *Бына [Хөмәйрә] илап* ***туйҙы.*** *Күңеле бушап, тынысланып ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов. *Байтаҡ ваҡыт уҙҙы. Һылыу менән килене утҡа ҡыҙынып* ***туйҙы.*** Т. Йәнәби.

4. *күсм.* Күңел биҙеү, ялҡыу. *Фәлсәфәнән* ***туйҙыҡ*** *инде, һатма, ташла фәлсәфәң.* Ш. Бабич. *Хыялға бай ине үҙе, донъяһы бай булмаһа ла. Күп нәмәнән* ***туйҙы*** *мәрхүм, донъянан һис* ***туймаһа*** *ла...* Н. Нәжми. *Сит илдәргә китеп йөрөү менән тыуған, үҫкән илдән кем* ***туйған.*** Халыҡ йырынан.

**туҡ I** *[рус.]* *и.* Минераль ашлама. *Азот* ***туғы.*** *Калий* ***туғы.*** *Фосфор* ***туғы.***

**туҡ II** *с.* 1. Ашап, эсеп алған, ас түғел. ***Туҡ** бала.* ***Туҡ** мал.* ▬ [*Кейеҙбай — сауҙагәрҙәргә*:] *Ашап, бик яҡшы иткәнһегеҙ. Аждаһа **туҡ** кешеләрҙе бигерәк тә ярата ул.* Әкиәттән.

2. Аҙыҡ-түлек етерлек булған. ***Туҡ** тормош.*

3. Эсе буш түгел, орлоҡ менән тулы. ***Туҡ** башаҡ.* ***Туҡ** бойҙай.* ▬ *Күптән арыш ем алған, башаҡтар ярған, **туҡ** емдәрен күтәрә алмай, башаҡтарын түбән һалған.* Д. Юлтый.

4. Тулыһынса ҡәнәғәт. *Уның* [*мулланың*] *күңеле **туҡ**, кәйефе яҡшы икәнлеге күренеп тора. Көлөмһөп, һаулыҡ-иҫәнлек һораша, һүҙ һөйләй ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**туҡал I** *с.* Мөғөҙө булмаған, мөгөҙһөҙ (һыйыр, кәзәгә ҡарата). ***Туҡал** кәзә.* ***Туҡал** һыйыр.*

**туҡал II** *и.* Көндәш ҡатындарҙың иң йәше. *Тубылғынан өй булмаҫ, **туҡалдан** тыуған бей булмаҫ.* Әйтем.

**туҡмаҡ I** *и.* Ниҙелер һуғып ҡаға, йомшата, иҙә торған һәлмәк ҡорал. *Кер **туҡмағы**. Киндер **туҡмағы**. Шыбағас **туҡмағы**.* ▬ *Бүрәнә өҫтөндәге киндерҙе ике ҡыҙ ике **туҡмаҡ** менән алмаш-тилмәш* [*һуға*]. К. Мәргән.

**туҡмаҡ II** *и. һөйл.* Еңелсә туҡмауға ҡарата әйтелә. ***Туҡмаҡ** төшөү. **Туҡмаҡ** эләкте.* ▬ *Илшаттың, ... бысранып ҡайтҡас, атаһынан **туҡмаҡ** алған мәлдәре лә булғылай.* А. Ғирфанов.

**туҡы I** *ҡ.* Арҡау менән буйлыҡты аралаш үткәреп, тауар йәки бүтән нәмә эшләү; һуғыу. *Ҡаҙаҡ ҡатын-ҡыҙы ... төрлө төҫтәге йөндән кирәгә баштары, ҡурйындар **туҡый**.* Ғ. Ғүмәр.

**туҡы II** *ҡ.* 1. Төйөр ҡалдырмай шыйыҡлау өсөн ҡалаҡ менән ҡағып болғатыу. *Ҡаймаҡ **туҡыу**.* ▬ [*Әбей*] *Арыҫлангәлегә тип әҙерләп ҡуйған ҡатығын әллә нисә ҡабат ҡулына алып **туҡыны**.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Нимәгәлер аралаштырып болғатыу. [*Зөбәржәт*] *һөт менән йомортҡаға ғына **туҡып** ҡуйған ... сөсө ҡоймаҡты маиҙа йөҙҙөрөп, тәрилкә менән ашъяулыҡҡа ҡуйҙы.* З. Биишева.

3. *күсм.* Ҡабатлап-ҡабатлап әйтеү. ***Туҡып** тороу.* ▬ *Ә ҡыҙ хәлде аңламай, һаман үҙенекен **туҡый**.* Н. Мусин.

4. *күсм.* Белеү өсөн ҡайта-ҡайта ҡабатлау. *Шиғырыңды уҡыным мин, уҡығанды* ***туҡыным.*** М. Илбаев.

**тула I** *и.* Йөндән һуғып, кейеҙләп баҫҡан туҡыма. ***Тула*** *баҫыу.* ▬ *Шәйхи бабай ... аҡ* ***тula**нан* *тегелгән еләнен ... кейҙе.* Ғ. Хәйри. *Һарыҡ көтһәң, йөнө була, йөнөнән* ***тула*** *була.* Таҡмаҡтан.

**тула II** *ҡ.* 1. Үрле-ҡырлы һикереп, төрлө яҡҡа ташланыу. *Ат* ***тулай.*** ▬ *Бер ҙур суртан һыу ситендә* ***тулап*** *ята, ти.* Әкиәттән. *Һыйыр* ***тулаһа,*** *аттан яман.* Мәҡәл. *Һыйыр* ***тулап,*** *ат булмаҫ, ҡатын* ***тулап,*** *баш булмаҫ.* Әйтем.

2. *күсм.* Нығ шашып тибеү (йөрәккә ҡарата). *Уны [Гөлсирәне] күреү менән йөрәгем* ***тулай*** *башланы.* Р. Солтангәрәев.

3. Тегеләй-былай аунау. ***Тулап*** *йоҡлау.*

**тулҡын I** *и.* 1. Һыу өҫтөндәге сайҡалыш. *Диңгеҙ* ***тулҡыны.*** ▬ *Пароходтар Иҙел буйлап бара бөҙрә* ***тулҡындарҙа*** *тирбәлеп.* Ғ. Сәләм.

2. *күсм.* Нимәнеңдер көслө һәм сағыу сағылышына ҡарата; ташҡын. *Көрәш* ***тулҡыны.*** *Революция* ***тулҡыны.*** ▬ *Ул да [Тимерғәле ҡарт та] шундай уҡ һөйөү, шундай уҡ тойғолар* ***тулҡыны*** *эсендә һүҙһеҙ ҡалған.* Ғ. Дәүләтшин.

3. *физ.* Физик хәрәкәттәге тирбәлеү хәрәкәте. *Радио* ***тулҡыны.*** *Тауыш* ***тулҡыны.*** *Электромагнит* ***тулҡыны.***

**тулҡын II** *ҡ.* 1. Тулҡын-тулҡын булып тирбәлеү, сайҡалыу, тулҡынланыу. *Диңгеҙ ҙә бит өҙлөкһөҙ* ***тулҡына,*** *ярһый, ажарланып, ҡаялар һыртына ынтыла.* З. Биишева. *Иҙел өҫтө сылбырланып* ***тулҡынды*** *ла тағы тынды.* М. Кәрим.

2. Тулҡын кеүек булыу, тулҡын рәүешендә булыу; тирбәлеү, тулҡынланыу. *Кремль өҫтөндә ал байраҡ* ***тулҡынып*** *янып тора.* Р. Ниғмәти.

3. *күсм.* Тойғоло, тыныслыҡ хәлдә булыу; болоҡһоу, йөрәкһеү. ***Тулҡынган*** *күңел.*

**туң I** *с.* 1. Һыуыҡҡа ҡатҡан. ***Туң** батҡаҡ.* ***Туң** ер.* ***Туң** һөт.* ▬ *Ат тояҡтары ғына **туң** ерҙә таҡылдап, тынлыҡты боҙа.* Б. Бикбай.

2. Өҫтө йоҡа боҙ менән ҡапланған. — *Тәҙрә **туң**, бер нәмә лә күренмәй.* Һ. Дәүләтшина.

3. *күсм.* Йылы хис, тойғоһоҙ; яғымһыҙ, ҡаты. ***Туң** күңелле кеше.* ▬ *Әмир уның ауылда ҡалыуын Маһира шулай **туң** күңел менән ҡабул итер тип уйламағайны.* Ғ. Ғиләжев. *Ҡараған һайын Тәҡбировтың **туң** сырайына йылмайыу йәйелә барҙы.* Н. Мусин.

4. *күсм.* Аңлау, төшөнөү һәләте самалы. ***Туң** кеше.* ▬ [*Ҡунаҡбаев*:] *Минең баш һинекенә ҡарағанда аңлыраҡ та, белемлерәк тә. Һин бына, **туң** баш, бер нәмә лә белмәй ҡысҡыраһың.* Б. Ишемғол.

**туң II** *ҡ.* 1. Һыуыҡҡа ҡатыу. *Ер **туңа**. Май **туңа**. Һыу **туңа**.* ▬ *Көн бик һыуыҡ ... Төкөргән төкөрөк тә ергә төшкәнсе **туңып** өлгөрә.* Т. Хәйбуллин.

2. Өҫтән йоҡа боҙ менән ҡапланыу. *Ҡырҡ ҡораулы тәҙрәләр, көслө елдең өрөүенә, көйөҫ-көйөҫ сылтырап китә. ... **Туңмай** ҡалған урындарҙан ... ел уйнап тора.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Ныҡ өшөү. *Тышта һыуыҡ бурандарҙа таң аттырҙым **туңған** көйөмә.* Ғ. Амантай.

4. *күсм.* Хис, тойғоһоҙ булып ҡатыу; хисһеҙләнеү. *Күңел **туңа**.* ▬ *Йөрәгең **туңғандыр** ул һинең, Ғәбитхан ҡустым, шулай булмаһа, бынау балаларға ул тиклем һалҡын ҡарамаҫ инең!* К. Мәрғән.

**туп I** *и.* Берәй материалдан эсе бөтәш йәки ҡыуыш итеп яһалып, ҡаты нәмәгә бәргәндә ғәҙәттә һикерә торған шар. *Ағас **туп**. Йөн **туп**. Резина **туп**. Футбол **тубы**.* ▬ *Ял көндө мәктәп балалары Ямал тауы итәгендә **туп** уйнаны.* Ә. Вәли. *Айыуғолаҡ имән ороһонан **туп**, ботағынан сәкән яһап, урамға **туп** һуғырға сыҡҡан.* Әкиәттән.

**туп II** *и иҫк.* 1. Төрлө калибр һәм төҙөлөштәге оҙон көбәкле артиллерия ҡоралы; пушка. *Ауыр **туп**. **Тупҡа** тотоу. **Туптан** атыу.* ▬ *Беҙҙең пулемёттар эшкә башланы. **Туптар** немец окобына ут асты.* Д. Юлтый.

2. Шул ҡоралдан ата торған шартлагыс нәмә; снаряд. *Шартлай ине дошман **тубы**, үтә алмай ҡоросто.* Ә. Вәли.

**туп III** *и.* Күмәк булып бергә йыйылған кеше йәки банҡа нәмә; төркөм. *Бүре **тубы**. Ҡош **тубы**. **Тупҡа** йыйылыу.* ▬ *Сәмәр хандың алты улы сапсан ҡоштарын ҡаҙ **тубына** сөйөп ебәрә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**туп IV** *оҡш.* Тос нәмә ҡатҡыл ергә тошкәндә һ. б. сыгкҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Туп** итеү.* ▬ [*Булат*:] *Еңгәм түбән ҡараған арала ғына алдына **туп** итеп һикереп төштөм.* К. Кинйәбулатова.

**тур I** *и.* Ҡош, йәнлек тота торган ау. *Ҡуян **туры**.* ▬ *Ир яңылышып, ҡулға төшөр, ҡош яңылышып, **турға** төшөр.* Әйтем.

**тур II** [*рус.* < *фр.* < *лат.*] *и.* 1. Вальс бейегәндә бүлмә урата бер әйләнеш. *Вальс **туры**.*

2. Эштәге бер этап. *Конференцияның беренсе **туры**.*

3. Күп баҫҡыслы һайлау системаһының айырым этабы. *Президент һайлауҙың икенсе **туры**.*

4. Ярыштың, конкурстың һ. б. унда ҡатнашыусылар бер генә сығыш яһай ала торған бер өлөшө. *Спорт олимпиадаһының һуңғы **туры**. Чайковский исемендәге конкурстың беренсе **туры**.*

**тура I** *с.* 1. Берәй йүнәлешкә бер тигеҙ тартылған; кәкре түгел; тоҙ. ***Тура** һыҙыҡ.* ▬ *Ҡыл тартҡан кеүек **тура** юл көньяҡҡа ҡарап китте лә китте.* Ж. Кейекбаев.

2. Ситтән урамаган, тапҡыр йүнәлешле. ***Тура** һуҡмаҡтан ҡайтыу.*

3. Көмрө түгел, көмрәймәгән; төҙ. *Теүәлбай үҫкән, атаһы кеүек төҙ кәүҙәле, ҡара **туры** тулы йөҙлө, үткер күҙле, төҙ танаулы, **тура** яурынлы.* Ғ. Дәүләтшин.

4. Фекерҙе, тойғоно һ. б. асыҡтан-асыҡ белдергән. ***Тура** һүҙле кеше. **Тура** яуап.* ▬ *Хәйбулла ағай **тура** һүҙле, — тиеште колхозсылар, — кемдең кем булыуына ҡарамаҫтан әйтә.* К. Мәргән.

5. Дөрөҫ, ысын, тогро булған. ***Тура** юлға төшөрөү.* ▬ *Беҙҙә һәр кем алға атлай **тура**, яҡты юл менән.* Н. Иҙелбай. [*Ишмырҙа*:] *Ҡулдан килгән хеҙмәтте батша*

*хәҙрәттәренән аямайбыҙ инде уны! Нисек кенә булһа ла, тура хеҙмәт итергә тырышабыҙ инде!* Д. Юлтый. ***Тура** һүҙгә яуап юҡ.* Әйтем.

**тура II** *и.* Кем йәки нимәгәлер ҡаршы ятҡан урын; тәңгәл, тапҡыр. *«Волга» беҙҙең **туранан** уҙыбыраҡ туҡтаны.* Н. Нәжми.

**тура III** *ҡ.* 1. Киҫәк-киҫәк итеп ҡырҡҡылау, бүлгеләү, сапҡылау. *Бәрәңге **турау**. Икмәк **турау**. Һалам **турау**.* ▬ *Емеш ҡаҙандан табаҡҡа алып һалынған итте ... **турарға** кереште.* З. Биишева. *Аттарға бесәнде **турап**, болғатып бирә башланылар.* Б. Бикбай.

2. *кусм.* Сапҡылап үлтереү. [*Мамай*:] *Ҡара әле, ҡалай **тураиҙар** тегеләрҙе* [*аҡтарҙы*] ... *Бөтә тау буйы үлек менән тулған.* Р. Нигмәти.

**турала I** *бәйл.* Эйәлек килештәге I, II зат алмаштары, төп килештәге күрһәтеү алмаштары менән уй, һүҙ объекты булған кеше йәки нәмәне билдәләү өсөн ҡулланыла; хаҡта. *Был **турала**. Минең **турала**. Һеҙҙең **турала**.* ▬ *Хәҙер шул **турала** һөйләшеп барабыҙ.* Д. Юлтый. *Сәғиҙә уны Зыя хаҡында ла һорашырмы икән, тип көтөп ултырғайны, ләкин Рәшиҙә ул **турала** ләм-мим һүҙ әйтмәне.* М. Тажи.

**турала II** *ҡ.* 1. Тура, төҙ итеү. *Балта оҫталары шифер аҫтына таҡта сөйләй башлаған, ләкин таҡталары **туралап** сабылмаған, араларына йоҙроҡ һыйырлыҡ ярыҡтар ҡалған.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 30 июль.

2. Тура йүнәлтеү; төбәү. ***Туралап** барыу. **Туралап** бәреү.* ▬ *Бөтә ҡояш нурын ҡоя кеүек ошо ҡартҡа ғына **туралап**. «Һаумы, аҡһаҡал!» — тип иҫәнләшә барса халыҡ уны ололап.* Т. Арслан.

3. Тура йүнәлеш алыу; төбәлеү. *Дилми ағай ҡапҡанан сыҡҡас та Сафаларға **туралаңы**.* Р. Ғабдрахманов.

**тут I** *и.* 1. Нәмәне сафландыра, ағарта торған һалҡын, еләҫ һауа. *Керҙе **тутҡа** элеү. Тирене ебеткәс, тышҡа сығарып, **тутҡа** ҡуялар. **Тут** алған кер.*

2. Елле, һалҡын һауаның тәьҫиренән барлыҡҡа килгән сифат. *Ҡар **туты**.* ▬ *Үҫемлектәрҙе быуып торған ҡышҡы **тутты** йыуа май ямғыры.* Я. Вәлиев.

**тут II** *и.* 1. Дым, дымлы һауа тәьҫиренән тимерҙә барлыҡҡа килгән ҡыҙғылт көрән матдә. ***Тут** ала. **Тут** ашай. **Тут** төшә.*

2. Биттә барлыҡҡа килә торған көңгөрт тап. *Ҡыйынһынма, иркәм, **тут** баҫҡанға маңлайыңды, алһыу йөҙөңдө.* Ш. Бикҡол.

3. Үҫемлеккә ҡунган бәшмәк саңы. *Ашлыҡ **туты**. Ҡарағат **туты**. **Тут** бәшмәге.*

4. *күсм.* Иҫкелек, һөрһөгәнлек билдәһе. *Эй, йыйылғандар ҡалаға сәләле күп сәүкәләр, иҫкереп, **туттар** баҫып бөткән ерәнес кәүҙәләр.* Д. Юлтый.

**тут III** *оҡш.* Машинаның ҡысҡыртҡан тауышын белдергән һүҙ. ***Тут** итеү.*

**түгел I** *мөн.* 1. Алдынан килгән һүҙҙе, фекерҙе инҡар итеү, кире ҡағыу һәм кире ҡуйыуҙы белдерә. *Урман дөм ҡараңғы. Ҡайҙа ғына ҡарама, бер ни күренерлек **түгел**.* Я. Хамматов. *Иҙән аҫтынан, әҙәм тиһәң әҙәм **түгел**, ҡотһоҙ бер ғифрит килеп сыға.* Әкиәттән.

2. Һорау киҫәксәһе менән килеп, фараз рәүешендәге һорауҙы белдерә. — *Беҙҙең эш ауылдаштарҙы һөйөндөрөргә тейеш. Ә беҙ көйөндөрәбеҙ **түгелме**?* З. Биишева.— *Айбулат улым, анауы килгән ҡарасҡы бер һыбайлы **түгелме**?* Һ. Дәүләтшина. *Һай, эйелмәй-бөгөлмәй, матур баҫа **түгелме**?* Халыҡ йырынан.

**түгел II** *ҡ.* Күп булып ағыу (ҡан, тир, йәшкә ҡарата). *Күҙ йәше **түгелә**. Ҡан **түгелә**.* ▬ [*Байғужа*:] *Беҙҙең бында күп тир **түгелде** инде.* Д. Юлтый.

**түҙ I** *и. диал.* Үҫемлектең киҫеп, сабып йәки ҡырҡып алғас, ерҙән сығып ҡалған олөшо; төп, түҙлек. *Ағас **түҙе**.* ▬ *Ҡарттар һүҙе — кәбеҫтә **түҙе**.* Әйтем.

**түҙ II** *ҡ.* 1. Ниндәйҙер хәл, тәьҫир, ҡыйынлыҡ кеүек нәмәгә бирешмәй, ныҡлыҡ, сабырлыҡ һаҡлау; сыҙау. *Ауырлыҡҡа **түҙеү**. Һыуыҡҡа **түҙеү**.* ▬ *Сәғиҙә башының сатнап ауырыуына **түҙә** алмай, урынынан тороп, ишекле-түрле йөрөштөрҙө.* М. Тажи. *Эшсене күп иҙҙеләр, улар һаман **түҙҙеләр**.* Ш. Бабич. *Ауыҙы онға тейгән эт тирмән яламай **түҙә** алмай.* Әйтем.

2. Тышҡы тәьҫиргә бирешмәй, тәүге хәл, рәүеште һаҡлау. *Батыр булһа, тос булыр, ... ул баҫҡанда таш **тү̧ҙмәҫ**, ул атҡанда ян **тү̧ҙмәҫ**.* «Алпамыша».

**түтә I** *с.* Ситтән урамаған, тапҡыр йүнәлештә булған, тура. ***Түтә** юл.* ▬ *Күсәрхан **түтә** юлдан, Ҡуҙыйкүрпәс урау юлдан китте, тип.*«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**түтә II** *и. диал.* Төйҙә. *Мылтыҡ **түтәһе**.*

**түш I** *и.* 1. Кәүҙәнең муйындан ҡорһаҡҡа тиклемгә алғы өлөшө; күкрәк. ***Түшкә** ҡыҫыу.* ▬ ***Түш** менән шыуышып ҡороға сыҡтым.* Д. Юлтый. *Түҙгәнгә **түш** тейә.* М. Өмөтбаев. *Түҙгән **түш** сөйгән.* Мәҡәл.

2. Ҡатын-ҡыҙҙың имсәге, күкрәк. *Ҡалҡыу **түш**.* ▬ *[Емештең] бөрлөгән хәтле генә булып **түш** кенәһе лә ҡалҡып килгән була.* З. Биишева.

3. Кейемдең алғы яҡтағы өҫкө өлөшө. ***Түшкә** сәскә тағыу.*

4. *күсм.* Битләү. *Тау **түшкәйҙәрендә** һары үлән, һары үләндең төбө бөрлөгән.* Халыҡ йырынан.

**түш II** *и.* Салғы һалып сүкей торған өҫтө тигеҙ дүрткел суйын бүкән; бәләкәй һандал. *Салғыны **түштә** тапау. **Түшкә** һалып сүкеү.*

**тығын I** *и.* 1. Тар ауыҙлы һауытты яба торған нәмә. *Ағас **тығын**. Быяла **тығын**. Шешә **тығыны**.*

2. *һөйл.* Төтөн юлын япҡан нәмә. *Мөрйә **тығыны**. Сыуал **тығыны**.*

3. Һыу менән ағып килгән нәмәләрҙән барлыҡҡа килгән тотҡарлыҡ. ***Тығынды** йырыу. **Тығынды** таҙартыу.* ▬ *Үкереп ҡайнай ташҡын, боҙ **тығыны** ҡыҫа күперҙе.* М. Тажи.

**тығын II** *с.* 1. Буш урыны аҙ; иркен түгел; тар, тығыҙ. ***Тығын** булмә.* ▬ *Автобус **тығын**, бәндәләр тотоноп, баҫып бара.* Т. Арслан.

2. Өлгөрөү мөмкинлеге әҙ: ашығыс, ҡыҫтау. ***Тығын** саҡ. Эштең **тығын** ваҡыты.*

**тын I** *и.* 1. Тере йән эйәләренең эскә кислород, тышҡа углекислый газ сығарыуы; үпкә аша һауа йөрөшө; һулыш. ***Тын** туҡтау. **Тынды** тотоу.* ▬ *Шахтёрҙар*

*алға шыуған һайын **тындары** ҡыҫыла, һауа етмәй.* Я. Хамматов. *Тауышы саф, **тыны** оҙон уның: күпме **тыңлаһаң** да ялҡытмай.* Н. Мусин.

2. Үпкәлә йөрөгән, үпкәгә инеп сыҡҡан һауа. ***Тын** менән йылытыу.* ▬ *Дейеү **тыны** менән илселәрҙе бер ары, бер бире өрөп йөрөткән.* Әкиәттән.

3. *күсм.* Эске ниәт, йәшерен уй. *Кешенең **тынын** белеү.* ▬ *Рәхимә ҡартының **тынын** яҡшы һиҙә. Шуға күрә уның ыңғайына һыпыра.* Һ. Дәүләтшина.

**тын II** *с.* 1. Шау-шыу, тауыш булмаған, тынлыҡ урынлашҡан. ***Тын** иртә. **Тын** урман.* ▬ [*Аттар ҡыңғырауҙарының*] *көмөш тауышы менән **тын** ауыл урамын ярҙырып тоҡойоп сығып киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Бик яй хәрәкәтле йәки хәрәкәтһеҙ; тыныс. ***Тын** диңгеҙ. **Тын** күл.*

3. Елһеҙ, тыныс булған; тымыҡ. *Эҫе һүрелгән, һауа бик **тын**.* Б. Бикбай.

**тын III** *с.* 1. Бурандан һуң тапалып таҡырланмаған, көртлө (юлға ҡарата) [*Директор — Рамазанға:*] *Әшең ҡабалан булғас, китерһең инде. Тик бына юл бик **тындыр** бит әле.* Н. Мусин.

2. Һөрөлмәгән, һөрөлмәй ҡалған (ергә ҡарата). ***Тын** ер.*

3. Эшләп йәки йөрөп йонсомаған (малға ҡарата). *Буш йөрөгән **тын** мал.* ▬ *Болғауҙа торған **тын** ат шул тиклем сабыуға түҙәме ни? Ат аяғын һуҙған.* Б. Бикбай.

**тын IV** *с.* 1. Тартылмаған, ваҡланмаған, бөтәү (ашлыҡҡа ҡарата). ***Тын** арыш. **Тын** бойҙай.*

2. *һөйл.* Ярмаһы бешеп иҙелмәгән (ашҡа ҡарата). ***Тын** бутҡа.*

**тын V** *и.* Ишкән, сиратҡан бау кеүек нәмәнең бер ҡаты. *Өс **тындан** ишелгән арҡан.*

**тын VI** *ҡ.* 1. Һөйләү, ҡысҡырыу, һайрау, илауҙан һ. б. туҡтау, шым булыу. *Беҙҙең арала һүҙ бөттө. Барыбыҙ ҙа **тындыҡ**.* Д. Юлтый. *Ике-өс әтәс бер-бер артлы ҡысҡырыштылар ҙа тағы **тындылар**.* Я. Хамматов.

2. Ниндәй ҙә булһа ғеүләгән, шаулаған, яңғыраған тауыш бөтөү, туҡтау, ишетелмәү. *Алҡыштар **тынды**.*

*Аяҡ тауышы* ***тынды.*** — *Тотош боҙ ҡапланы Иҙелде,* ***тынды*** *унда аҡҡош тауыштары.* К. Бакиров.

3. Төрлө хәрәкәт, шау-шыу бөтөп тын ҡалыу. *Урам* ***тынды.*** *Дала* ***тынды.*** — *Ҡала бөтөнләй* ***тынды***... *Аяҡ тауыштары ишетелмәй, баҫылды.* С. Агиш.

4. Хәрәкәт итеүҙән, эшләүҙән, йөрөүҙән туҡтау. *Сәғәт* ***тынды.*** — *Тимерҙең радиоприёмнигы ... [көсө бөтөп], нисәмә көн инде* ***тынып*** *ултыра.* Б. Бикбай. *Йөрәк* ***тынды,*** *башҡа типмәне.* М. Кәрим.

5. Хәрәкәте көсһөҙләнеп, тыныс хәлгә килеү. *Күл* ***тынды.*** — *Диңгеҙ* ***тына.*** *Тау-тау тулҡындар, ҡанаты һынған ҡарағош шикелле хәлһеҙләнеп, һуҙылып ята.* З. Биишева. *Һыуҙың ҡайнап аҡмаҫтай, тулҡынын да ҡаҡмаҫтай,* ***тынған*** *сағы бар булыр.* Ҡобайырҙан.

6. Көсө кәмеп, ғәмәлдә булыуҙан туҡтау, баҫылыу, тымыу (ел-ямғырға ҡарата). *Ел* ***тынды.*** *Ямғыр* ***тынды.*** — *Буран ҡайһы берҙә көсәйә, ә ҡайһы берҙә бөтөнләй* ***тынып*** ... *ҡала.* Ғ. Ғүмәр.

7. Һуғыш, алыш, дау кеүек күренештәргә бәйле эш-хәрәкәттәр баҫылыу йәки ваҡытлыса туҡтап тороу. *Атыш* ***тынды.*** *Һуғыш* ***тынды.***

*8.* Тынғы табыу, тынысланыу. *Йән* ***тынмай.*** — *Ирмен тигән ир егет ат уйнатмай* ***тынырмы?*** Ҡобайырҙан.

9. Эштән туҡтау, ял итеү. *Йәй буйы эшләгәндән һуң бәләкәс* ***тынып*** *алғанда ла булыр ине.* Ғ. Дәүләтшин.

10. Кемдән йәки нимәнәндер ҡотолоп, арынып, тынысланыу. *Тауыштан ҡолаҡ* ***тынмай.*** — *Бабай менән әбей малаиҙан* ***тынып,*** *бер рәхәтләнеп сәй эсәйек, тип ултырған, ти.* Әкиәттән.

**тынсы I** *ҡ. һөйл.* Тынысланыу. *Ойоп ятҡан Хисмәтулла, йәрәхәте һыҙлауҙан* ***тынсып,*** *тәүге тапҡыр күҙҙәрен йомдо.* Я. Хамматов.

**тынсы II** *ҡ.* 1. Ел теймәй тынысланып тороуҙан һауаһы насарланыу; тонсоу. ***Тынсыған*** *булмә.* — *Өй эсе ҡаҙандан сыҡҡан быу, тәмәке төтөнө, кеше тыны менән эҫеп,* ***тынсып*** *китте.* Һ. Дәүләтшина.

2. Томаланыуҙан еҫлегә әйләнеү, һаҫыу; тонсоу. *Күлде ҡамыш баҫты,* ***тынсыны. Тынсыған*** *еҫ.*

**тыныш I** *и.* Эштең, һүҙҙең һ. б. барышында аҙ ғына ваҡытҡа яһалған туҡталыш; пауза. ***Тыныш** яһау.* ▬ [*Офицер*] *«да», тип әҙерәк **тыныш** яһаны ла, миңә тура ҡарап, һүҙ башланы.* Д. Юлтый.

**тыныш II** *ҡ.* Үҙ-ара талаш-тартышһыҙ, тыныс мөнәсәбәттә булыу. ***Тынышып** йәшәү.* ▬ *Бер район үҙәгендә ике хужа **тыныша** алманы.* Р. Низамов.

**тыңҡыш I** *с.* Йыуан ҡыҫҡа муйынлы. *Ике кеше ултыра. Береһе — нәҙек оҙон буйлы, ас яңаҡлы, ә икенсеһе — тәпәшәк кенә кәүҙәле **тыңҡыш** әҙәм.* Ҡ. Ибәтуллин.

**тыңҡыш II** *с.* 1. Танау аша һөйләшкән; һиңрәү. [*Әҙһәм*] ***тыңҡыш** ..., һүҙҙә «к» өнөн башта килгәндә «н» тип, «б» өнө килгәндә «м» тип әйтә ине.* С. Агиш.

2. Ошондай кешеғә хас. *Хәҙрәт **тыңҡыш** тауыш менән тәҡбир әйтә башланы.* Ғ. Хәйри.

**тырма I** *и.* 1. Һөргән ерҙе йомшарта торған ауыл хужалығы ҡоралы. *Ат **тырмаһы. Тырма** менән тырматыу.* ▬ *Һабан, **тырма**, бесән сапҡыстар... тырым-тырағай ташлап ҡалдырылған.* М. Тажи.

2. Шул ҡорал менән ер эшкәртеү эше. ***Тырмаға** сығыу.* ▬ *Тау битләүҙәрендәге ер иртәрәк һурыҡты, **тырмаға** иртәрәк төштөләр.* Б. Бикбай.

3. Бесән йыя, түтәл йомшарта торған оҙон һаплы тешле-тешле ҡорал. *Сүмәләгә теше һынған **тырма**, суҡ сауылға салғы һөйәлгән.* М. Хәй. *Ҡаҙылған ерҙе ... ҡул **тырмаһы** менән тырматып сыҡтылар, ти.* Әкиәттән.

**тырма II** *и. туҡ.* 1. Ике яҡ башы тешле, ике метр самаһындағы еп оҙатыу ҡоралы. *Епте **тырмаға** һалыу.*

2. Шул ҡорал оҙонлоғонда итеп, буйлыҡ епте иҫәпләү берәмеғе. *Ике **тырма** йөн оҙаттым.*

**тырыз I** *и.* Ҡапҡаслап, бау тағып, туҙҙан яһаған күнәсек һымаҡ һауыт. ***Тырыз** яһау.* ▬ *Һылыу ҡыҙҙар еләк йыя **тырыздарын** элеп беләккә.* Халыҡ йырынан.

**тырыз II** *с. диал.* Үҙ һүҙле; еңмеш. ***Тырыз*** бала.

**тырыш I** *с.*1. Һәр эште лә бөтә күңелен биреп ихлас эшләй торған. *Донъя көтөүгә **тырыш** кеше. Уҡыуға **тырыш** бала.*

2. Бөтә ихласлыҡты, мөмкинлекте биреп башҡарылған. **Тырыш** *хеҙмәт.* ▬ *Фәхри күп саҡтарҙа Яҡупҡа ярҙам итә, айырыуса һуңғы ваҡыттарҙа* ***тырыш*** *хәстәрлек күрһәтә башланы.* Б. Бикбай.

**тырыш II** *ҡ.* 1. Тырышлыҡ күрһәтеү. ***Тырышып*** *уҡыу.* ***Тырышып*** *эшләү.* ▬ *Эй, Ғәли, Рафиҡ, өмөт бар һиндә, яҙ, эшлә,* ***тырыш.*** *Эшләһәң, күгең аяҙ, алдыңда яҙ.* Ш. Бабич. *Аҫыл ирҙәр* ***тырышып*** *йөрөр, эшләйем тип аҡыл ҡушҡанын.* Халыҡ йырынан.

2. Ҡылымдың -***ырға*** формаһына эйәреп, ниндәйҙер ынтылышты белдерә. *Барырға* ***тырышыу.*** *Белергә* ***тырышыу.*** *Китмәҫкә* ***тырышыу.*** ▬ *Сәйҙел шат булырға* ***тырышты,*** *уйнаны, көлдө, шаярҙы.* Ғ. Сәләм.

**тыу I** *и. кит.* Байраҡ. *Ҡыҙыл* ***тыу.*** ***Тыу*** *элеү.*

2. *күсм.* Төп идея билдәһе. *Еңеү* ***тыуын*** *яулап алыу еңелдән булмаҫ.* М. Кәрим. *Ерем, гүйә, ирек* ***тыуын*** *сөйҙө — йыһандарҙан тора күренеп.* Ҡ. Аралбаев.

**тыу II** *и.* Кем йәки нимәнеңдер бер бөтөндө тәшкил иткән төркөмө; туп. *Йылҡы* ***тыуы.*** ▬ *Сыйырсыҡтың* ***тыуына*** *ағылбаиҙы сөйөгөҙ.* «Урал батыр».

**тыу III** *с.* 1. Тоҡом килтермәгән, үрсем бирмәгән. ***Тыу*** *бейә.* ***Тыу*** *мал.* ▬ *«Ҡуҙыйкүрпәс туғыҙ йыл йөрөгән* ***тыу*** *бейәне һә тигәнсе тотоп ала.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

2. Орлоҡһоҙ, ҡыҫыр. ***Тыу*** *башаҡ.* ***Тыу*** *сәскә.* ▬ [*Һомай:*] *Ҡош көйөмә ҡалырмын,* ***тыу*** *йомортҡа һалырмын .* «Урал батыр».

3. Сәсмәй үҫкән. ***Тыу*** *ашлыҡ.* ***Тыу*** *бойҙай.* ***Тыу*** *көнбағыш.*

**тыу IV** *ҡ.* 1. Донъяға килеү; донъялыҡта йәшәй башлау. *Бала* ***тыуғас,*** *ҡаты ҡысҡырып ала, тиҙәр, тәүге һулышты, — бәлки һәр саҡ шулай ауырҙыр башлап китеү яңы тормошто.* Н. Нәжми. *Салауат китеп,* ***тыумаҫ*** *тимәң арыҫландай ирҙең башҡаһы.* Халыҡ йырынан.

2. *күсм.* Барлыҡҡа килеү, формалашыу. ***Тыуҙы*** *Башҡортостан, Уралында илһам уятып.* Ғ. Рамазанов.

3. *кусм.* Ижад һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеү. *Шиғыр* ***тыуҙы.*** *Яңы әҫәр* ***тыуҙы.*** ▬ *Мең томдарҙа бөтмәҫ роман* ***тыуа,*** *ноталарға һыймаҫ тауыштар.* Ғ. Сәләм.

4. *кусм.* Тормошта барлыҡҡа килеү, килеп сығыу (төрлө эш-хәлгә ҡарата). *Бәлә* ***тыуҙы.*** *Китергә мөмкинлек* ***тыуҙы.*** *Тауыш-ғауға* ***тыуҙы.*** *Эштә еңеллек* ***тыуҙы.***

5. *кусм.* Күңелдә барлыҡҡа килеү; уяныу (хис-тойғоға ҡарата). *Ихтирам* ***тыуҙы.*** *Уй* ***тыуҙы.*** *Һорау* ***тыуҙы.*** *Шатлыҡ хисе* ***тыуҙы.***

6. Күк йөҙөнә күтәрелеү, ҡалҡыу (күк есемдәренә, таңға ҡарата). *Ай* ***тыуҙы.*** *Ҡояш* ***тыуҙы.*** ▬ *Ай таң ине, таң ине, ҡыҙарып* ***тыуған*** *таң ине.* Р. Ниғмәти.

7. Ваҡыты етеү, башланыу (ай, көн, йыл миҙгелдәренә ҡарата). *Сентябрь* ***тыуҙы.*** *Яҙ* ***тыуҙы.*** *Яңы көн* ***тыуҙы.*** *Яңы йыл* ***тыуҙы.***

**тәкә I** *и.* Һарыҡ-кәзәнең иркәһе. *Көйҙөргән* ***тәкә.*** *Тоҡом* ***тәкәһе.*** ▬ *Аҡыллы* ***тәкә*** *һуйғанда, ахмаҡ йүкә һуйыр.* Мәҡәл. *Төкөшә торған* ***тәкәгә*** *хоҙай мөгөҙ бирмәгән.* Мәҡәл.

**тәкә II** *и.* Һыу арҡырыһына һалынған ҡоролмаға таяу рәүешендә ултыртылған атлама йәки бағана. *Күпер* ***тәкәһе.***

**тәкә III** *и.* Арҡан ишә торған ҡорамал (саталы ағас менән бәләкәй сананан ғибәрәт). *Уны* [*арҡанды*] *сығыр менән ишкән саҡта* ***тәкәне*** *әкрен генә йөрөтәм, сираҡ ишелһен, ... тим.* Н. Мусин.

**тәлгәш I** *и.* 1. Бер һуҡталағы емеш суғы. *Балан* ***тәлгәше.*** *Миләш* ***тәлгәше.*** ▬ *Суғылйыым суҡ ҡарағат* ***тәлгәшен*** *түбән әйгән.* А. Иғебаев.

2. Бер һабаҡтағы суҡ япраҡ йәки сәскә. *Сәскә* ***тәлгәше.*** ▬ ***Тәлгәшен*** *әйеп, талдай бөгөлөп, зифа ҡайын ҡосорға теләй* [*ыршы*] *дуҫҡайын.* Я. Ҡолмой.

**тәлгәш II** *с.* Суҡланып торған емешле йәки япраҡлы; суҡ. ***Тәлгәш*** *ҡайын.* ***Тәлгәш*** *муйыл.*

**тәңгәл I** *с.* Кем йәки нимәгәлер ҡаршы ятҡан урын, кем йәки нимәнеңдер турыһы; тапҡыр. *Һәр өй* ***тәңгәлендә*** *бәпкәләре етеп бөткән ҡаҙ көтөүҙәре ята.* З. Биишева. *Аҡназаров клуб* ***тәңгәленә*** *еткәс туҡтаны.* Ә. Вәли.

2. Һүҙ ағышындағы билдәле бер урын. *Хәбәрҙең ошо* ***тәңгәленә*** *еткәс, Бәхреямал әбей ... ҡалҡына биреп ҡуйҙы.* Ш. Янбаев.

**тәңгәл II** *с.* 1. Ниҙеңдер тапҡырына ҡарай тура йүнәлешле; тура. ***Тәңгәл*** *юл.*

**тәре I** *и.* 1. Христиандарҙың арҡысаҡ рәүешендәге табыныу әйбере, дин символы. *Алтын* ***тәре.*** *Муйынға* ***тәре*** *тағыу.*

2. Христиандар табынған изгеләр һүрәте. ***Тәрегә*** *ҡарап суҡыныу.* ▬ *Уҡына уҡына ҡарап төртөнәләр алтынланған* ***тәреләргә.*** М. Ғафури.

**тәре II** *бәйл. диал.* Тиклем, саҡлы. *Өйгә* ***тәре.***

**тәте I** *и.* Атыу ҡоралының сирткесте ысҡындыра торған ырғаҡ рәүешендәге өлөшө. *Мылтыҡ* ***тәтеһе.*** ***Тәтегә*** *баҫыу.* ▬ *Әкрәм наган* ***тәтеһен*** *баш бармағы менән тартып ҡараны.* А. Таһиров.

**тәте II** *ҡ.* Кемдеңдер өлөшөнә тейеү, эләгеү. *Һуғыш арҡаһында рәтле уҡыу* ***тәтемәне.*** Д. Исламов.

# У

**удар I** [*рус.*] *и.* 1. Ҡапыл яһалған атака; һөжүм. *Партизандар ...дошманға аҙаҡҡы, хәл иткес ҡаты* ***ударҙы*** *бирергә әҙерләнә.* Һ. Дәүләтшина.

2. *күсм.* Көтмәгәндә башҡа төшкән ауыр кисереш. *Беҙҙең был эш иптәштәр өсөн ҙур* ***удар*** *булды. Байғужа йөҙ түбән бик оҙаҡ уйланып ятты.* Д. Юлтый.

**удар II** [*рус.* ударный] *с.* 1. Ҡапыл һөжүм итә торған. ***Удар*** *батальон.* ***Удар*** *төркөм.*

2. Хеҙмәт һәм тәртип күрһәткестәре буйынса алдынғы, өлгөлө. ***Удар*** *бригада.* ***Удар*** *эш.*

3. Иң мөһим, кисектергеһеҙ, ашығыс. ***Удар*** *төҙөлөш.*

**уй I** *и.* Бөтә тормош хәленең кеше аңындағы сағылышы. *Ауыр* ***уй.*** *Татлы* ***уй.*** *Тәрән* ***уй.*** ▬ *Бөгөн башымдан төрлө* ***уйҙар*** *үтте.* С. Агиш. *Хәсрәт кенә тотоп, ялҡын йотоп,* ***уй*** *уйлаған ирҙә йоҡо юҡ.* Халыҡ йырынан.

2. Аңды биләп алып торған нәмә; хыял. ***Уйға*** *батыу.* ***Уйға*** *ҡалыу.* ▬ *Булат башҡа һүҙ өндәшмәне, ... нindәй-*

*ҙер **уйға** сумды. Яҡуп та хыялға бирелде. Уның **уиҙары** бөгөн булып үткән хәлдәр тирәһендә уралды.* Б. Бикбай.

3. Нимәгәлер булған баһалы ҡараш; фекер. [*Нәзирә*:] *Сәиҙел иптәш, **уйығыҙ** хата кеше тураһында.* Ғ. Сәләм.

4. Берәй нәмә тураһында барлыҡҡа килгән ниәт, план. *Башҡа килгән **уй**. Башта йөрөткән **уй**. **Уй** ҡороу.* ▬ [*Үмәр*:] *Әллә, әсәһе, урын-яйы тура килһә, баланы урынлаштырып ҡуябыҙмы, тием. Һин был турала **уй** йөрөткәнең бармы?* Һ. Дәүләтшина. *Сынтимер ... үҙ иленә ҡайтмаҡсы булды, ти. Был **уйын** ҡыҙ менән батшаға ла белдерҙе, ти.* Әкиәттән. *Өйҙәге **уй** юлға ярамай.* Мәҡәл.

уй II *и*. Һуҙылып киткән түбән ер; уйһыу, уяҙ. *Аҡты һыуҙар, ҡаиҙа **уй** бар — шунда һыуҙар тулдылар.* Ш. Бабич. *Яҙ миҙгелкәйҙәре етте ниһә, **уиҙан уйға** аға ҡар һыуы.* Халыҡ йырынан.

уй III *ымл*. 1. Ҡапыл ҡурҡҡанда, һиҫкәнгәндә әйтелә. *[Булат:] **Уй**, битемә эре ямғыр тамсыһы тып итеп ҡалды.* К. Кинйәбулатова.

2. Көйөнгәндә, һыҙланғанда, йәлләгәндә әйтелә. ***Уй**, баламды! Ҡулы ауыртҡан бит! **Уй**, башым! Ярылып ҡына килә.*

3. Ҡыуанғанда, һоҡланғанда, кинәнгәндә әйтелә. [*Батыр*:] ***Уй**, ир икәнһең, Ҡорманбай!* Т. Хәйбуллин.

4. Аптырап, ҡаушап ҡалғанда әйтелә. ***Уй**, апай, нимә генә уйлайым икән!* С. Агиш.

5. Асыуланғанда, әрләгәндә әйтелә. [*Алламорат*:] ***Уй**, арҙа ҡаҙаҡ, аңышайма, эшеңде ҡара.* Һ. Дәүләтшина.

уй IV *ҡ*. 1. Уратып ҡырҡып, тишек яһау. *Ишек урыны **уйыу**. Мәке **уйыу**.* ▬ *Шунда уҡ лом, балта, көрәктәр йүгертеп килтереп, эшкә башланылар. Боҙ **уйыу** оҙаҡҡа һуҙылманы.* Б. Бикбай. *Егет балта алып, өиҙөң ҡояш төшә торған яғына тәҙрә **уйған**, ти.* Әкиәттән.

2. Соҡор рәүешенә килтереү, соҡор итеү. *Сталинград ... Волганың бомбалар **уйған** яр сите.* Ш. Янбаев.

3. Ни менәндер эҙ ҡалдырыу, соҡоу, ярыу. *Мәрмәргә **уйып** яҙылған Зояның һуңғы һүҙҙәре.* Р. Ғарипов. *Ул [Зирәк] бысаҡ менән ҡулын **уя**.* Ш. Бикҡол.

4. Кейем теккәндә яға, еҙ һ. б. уйымы яһау. *Еҙ төбө* ***уйыу****. Кеҫә урыны* ***уйыу****. — Аҡлы ситса күлдәгенең яғаларын ҙур* ***уйма****.* Халыҡ йырынан.

**уҡ I** *и.* 1. Ян менән ата торған төҙ нәҙек таяҡ. *Алмас башаҡлы* ***уҡ****. Мөгөҙ башаҡлы* ***уҡ****. — Алпамыша килеп* ***уҡ****, янды ала ла ағасҡа күҙәп атып ебәрә.* ***Уғы*** *ағасты яра тишеп үтә.* «Алпамыша».

2. Күтәргес крандың әйләнеп торған оҙон өлөшө, шулай уҡ ауыр нәмәләрҙе күтәреү өсөн махсус яйланма. *Крандың оҙон* ***уғы*** *иҙмәне ташсылар янына килтереп ҡуйҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 февраль.

**уҡ II** *киҫ.* 1. Күрһәтеү алмаштары һәм «һымаҡ», «кеүек» бәйләүестәре менән килеп, тиңләштергәндә, берләштергәндә ҡулланыла. *Ошо* ***уҡ****. — Шул* ***уҡ*** *йылда тәбиғәтте маҡтап бер-ике шиғыр ҙа яҙҙым.* Т. Йәнәби.

2. Эш-хәрәкәттең ваҡытын, урынын билдәләп, баҫым яһай. *Бала саҡта* ***уҡ****. Таңдан* ***уҡ****. — Төлкө кешенең еҫен әллә ҡайҙан* ***уҡ*** *һиҙеп килә.* М. Тажи. *Уның* [*байҙың*] *артынса* ***уҡ*** *теге эт тә һикереп тора.* Әкиәттән.

3. Алдындағы һүҙҙең мәғәнәһен йомшартып килә. *Шаҡтай* ***уҡ****. Яҡшы* ***уҡ****. — Пароход әле килгәнсе тип, беҙ һөйләшеп йөрөнөк оҙаҡ* ***уҡ****.* Ғ. Сәләм.

4. Башҡорт халыҡ йырҙарында һүҙҙе көсәйтеү, көйҙө килештереү өсөн ҡулланыла. *Ҡайтып* ***уҡ*** *ятыр өсөн йортом юҡ, яурын киреп атыр уғым юҡ.* Халыҡ йырынан.

**уҡмаш I** *с.* Киҫәк-киҫәк йәбешеп, бергә ойошҡан. ***Уҡмаш*** *ҡар.* ***Уҡмаш*** *тупраҡ.*

**уҡмаш II** *ҡ* 1. Киҫәк-киҫәк булып, бергә йәбешеү, бергә ойошоу. *Йәш ағастарҙың иң ҡуйы ерендә яныып* ***уҡмашҡан*** *ниндәйҙер металл киҫәктәре табылды.* Ф. Лоҡманов. *Болоттар таралырға теләмәй, тағы* ***уҡмаша****.* З. Әхмәтов.

2. Киҫәк-киҫәк булып нимәгәлер йәбешеү. [*Ҡарт*] *арба тәгәрмәстәренә* ***уҡмашҡан*** *бысраҡты ҡырғылап төшөрҙө.* М. Тажи. *Камилдың ... күкрәгенә ҡан* ***уҡмашҡан****.* Р. Ниғмәти.

3. Бергә аралашып, ныҡ берегеү; ойошоу (сәскә, йөнгә ҡарата). *«Насип, ни эшләп шулай оҙаҡлайһың?» — тине*

*Шәһиҙә уның бүрек кейеп йөрөп* ***уҡмашҡан*** *сәсен бармаҡтары менән тарап.* И. Абдуллин.

4. Бергә йыйылыу; тупланыу. ***Уҡмашып*** *йәшәү.* ***Уҡмашып*** *ултырыу.* ▬ *Ун бишләп һыбайлы таралышмай, бергә* ***уҡмашып****, яй ғына килә.* Ф. Иҫәнголов.

**ул I** *и.* 1. Ир бала (ата-әсәһенә ҡарата). *Кинйә* ***ул.*** *Уртансы* ***ул.*** ▬ *Ҡвартира хужаһы — бер пенсионерка, беҙҙең йәштәрҙәге бер ҡыҙы, унан кесерәк бер* ***улы*** *бар.* С. Агиш. — *Үҙегеҙ беләһегеҙ, минең ике* ***ул*** *бар ине [, — тине Нурый бабай].* Н. Ҡәрип. *Ата байлығы* ***улға*** *йоҡмаҫ.* Әйтем.

2. Билдәле бер ҡатламдың ир затынан булған бер вәкиле. *Һөйә-һөйә ҡосағыма алып меңәрләгән юҡһыл* ***улдарың****, арымай-талмай йәштән өйрәтәмен ирек өсөн көрәш юлдарын!* Ғ. Амантай. ***Ул*** *ант итә һеҙҙең арағыҙҙа, эй, ҡалдыҡ нәпман улдары!* С. Агиш.

3. Ил, халыҡтың ир затынан булған бер вәкиле. *Башҡорт* ***улы.*** *Заманалар булған элгәре, булған илдең батыр* ***улдары.*** Салауат Юлаев. *Һин хәҙер ватандың хөр* ***улы****, бынан һуң асыҡ тот үҙеңде.* Ш. Бабич.

**ул II** *зат. а.* 1. Быға тиклем йәки һуңынан булған хикәйәләүҙә исеме әйтелгән телмәр предметын күрһәтә. *Бер көндә Байғужа минән хат яҙҙыра.* ***Ул*** *һөйләй, мин яҙам.* Д. Юлтый. *Сынбулатов ҡыҙарынды, бөртенде. Уның Ямалға ҡаршы һүҙ әйтер урыны ҡалманы.* ***Ул*** *бынан тиҙерәк сығып китеү яғын ҡараны.* М. Тажи.

2. Билдәле бер затҡа, булып үткән эш-хәлгә, урын-ваҡытҡа кире ҡайтарып тоҫҡай. — *Ҡуй инде, үткән яҙ булмаҫ яңынан.* ***Ул*** *саҡта председатель Саҡай Солтанов ине шул.* Б. Бикбай.

**ултыраҡ I** *с.* Бер урында даими йәшәгән. ***Ултыраҡ*** *халыҡтар.*

2. Бер урында даими йәшәүгә ҡоролған. ***Ултыраҡ*** *тормош.*

**ултыраҡ II** *и.* Өй йәки ауыл ултырған урын; урынлашҡан, йәшәгән урын. *Ауылдың өйләнмәгән йәш егеттәре, үткерерәк килендәре, ... йәш ҡыҙҙары... Ғариф* ***ултырағы*** *артындағы яланға йыйылды.* Ғ. Хәйри.

**ултырма I** *и*. Элекке һыу яҡтылыҡтары, төбөнә төрлө ҡаты есем ултыртыуҙан барлыҡҡа килгән тау тоҡомо. *Диңгеҙ **ултырмалары**.*

**ултырма II** *и*. Ҡатын-ҡыҙҙың бер өйгә йыйылып, ҡул эше эшләп, һөйләшеп, уйнап-көлөп ултырған йыйыны. ***Ултырмаға** барыу.*

**уң I** *с*. 1. Һул яҡтың ҡаршы яғындағы, шул яҡҡа урынлашҡан. ***Уң** күҙ. **Уң** ҡолаҡ.* ▬ *Ятҡас та* [*Яҡуптың*] ***уң** ботона ниндәйҙер ҡаты нәмә теиҙе.* М. Кәрим.

2. Тышҡы, өҫкө, алғы. *Күлдәктең **уң** яғы.*

3. Партияның төп массаһына йәки политик, философик йүнәлеш вәкилдәренә ҡарағанда реакционыраҡ, консервативыраҡ ҡараштар яғындағы. ***Уң** лейбористар. **Уң** социалистар.*

4. Партияның үҙ эсендә коммунистик партия политикаһына ҡаршы булған, капитулянт. ***Уң** оппортунизм.*

**уң II** *и*. Эш, тормоштағы яҡшы, теләккә ярашлы һөҙөмтә. [*Тимергәле*:] *Һай-һай, ауыр хәл килеп сыҡты. Көтөлмәгән нужа. Алла **уңын** бирһен инде.* Һ. Дәүләтшина. *Яуға үҙе бармаһа, барғанға **уң** бирмәһә ... ил батыры булырмы?* «Ҡараһаҡал».

**уң III** *ҡ*. 1. Теләк, талапҡа яраған яҡшы һөҙөмтәгә килеү. *Эш **уңа**.* ▬ [*Ғәйзулла бабайҙың*] *тәүге осраған балыҡҡа яҙа төрткән саҡтарында: — Эләкмәне, юл **уңмаҫ**, ахыры, хәйерсе, — тип һөйләнеп, ... кире әйләнеп ҡайтып киткән саҡтарын да беләм.* Н. Мусин. ***Уңмаған** юлды ҡыума.* Әйтем.

2. Кемдән йәки нәмәнәндер изгелек, яҡшылыҡ күрергә ирешеү; йәлсеү. *Ҡатындан **уңыу**. Эштән **уңыу**.* ▬ *Был киленебеҙҙән **уңырбыҙ**, ахыры. Өлкән килен кеүек, белдекһеҙ, йыбытҡы булмаҫҡа оҡшай, — тине* [*Йомай әбей*]. Һ. Дәүләтшина. *Атың ашамһаҡ булһа — **уңдың**, ҡатының ашамһаҡ булһа — бөлдөң.* Әйтем.

3. Мул булып үҫеү. *Еләк **уңа**. Емеш **уңа**. Иген **уңа**.* ▬ *Бойҙай **уңманы**. Ул башаҡланып, һутлана ғына башлағанда көн урталарында аяуһыҙ ҡыҙҙырған ҡояш эҫеһенә сыҙамай бөрөштө.* Я. Хамматов.

4. Яҡшы сифатлы булып өлгөрөү. *Ҡамыр* ***уңа.*** — *Кинйә улының кәләше бешергән икмәк ашап туйғыһыҙ булып* ***уңған,*** *ә ҡалған ике килененең икмәге, таш кеүек, ватып алғыһыҙ ҡаты булған, ти.* Әкиәттән.

**уң IV** *ҡ.* Тәүге асыҡ төҫтө юғалтыу. *Кешеләр араһынан ... өҫтөнә көнгә* ***уңып,*** *ағара башлаған ҡоро буҫтау гимнастёрка кейгән сандыр буйлы бер йәш кеше күтәрелде.* М. Тажи. [*Һөнәрсегә*] *тиклем быңдай көршәкте эшләй белгән дә, ундай мәңге* ***уңмаҫ*** *буяуҙарҙы ҡулланған да кеше булмаған.* З. Биишева.

**уңай I** *и.* 1. Йәтешле, ярашлы хәл йәки мәл. ***Уңайы*** *сығыу.* ***Уңайын*** *табыу.* — *Бер нисә һалдат ҡасыу уңайын ҡарап, вокзалға ла барып килде.* Д. Юлтый. [*Һалдаттар:*] *Инде бер* ***уңайы*** *килгәндә, былай ғына ҡалдырмабыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

2. Ниндәйҙер эш-хәлгә мөнәсәбәтле шарт. *Байрам* ***уңайы*** *менән. Туй* ***уңайынан.*** — *Иҫке армияла әрәм үткән ғүмерҙәренә ҡайғырып алдылар. Көтөм ағай ошо* ***уңай*** *менән... көмөш миҙалы тураһында тағы бер һөйләп алды.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Эш-хәлдең теләккә ярашлы яҡшы йүнәлеше. *Иҫән генә йөрөп, һауҙар ҡайтһам, эштәр китер ине* ***уңайға.*** Халыҡ йырынан.

**уңай II** *с.* Эш, хәрәкәт өсөн ярашлы; яйлы, йәтеш, уңайлы. ***Уңай*** *ваҡыт.* — *Сиражи менән Лоҡман* ***уңай*** *бер көн табып, тәҙрә арҡыры сығып ҡасты.* И. Насыри.

**упай I** *с.* Тупайып торған (күҙгә ҡарата). ***Упай*** *күҙ.*

**упай II** *и. диал.* Ашыҡ, бәкәлсәй. ***Упай*** *уйнау.* ***Упай*** *һуғыу.*

**ур I** *и.* 1. Тәрән итеп ҡаҙылған тар, оҙон соҡор. ***Ур*** *ҡаҙыу.*

2. Тупрағын алдына өйөп, тәрән, тар итеп ҡаҙылған хәрби ныҡытма. *Урам һайын төрлө ерҙәрҙә* ***урҙар,*** *блиндаждар ҡаҙыла.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ. *Һаҡлаиҙыр зарарҙан ҡаланы* ***ур.*** М. Ғафури.

**ур II** *ҡ.* Ураҡ менән ҡырҡып йыйыу. *Ашлыҡ* ***урыу.*** *Ураҡ* ***урыу.*** — *Ҡатын-ҡыҙҙар бесән саба, ураҡ* ***ура,*** *күбә*

*һәм кәбән һала.* М. Өмөтбаев. *Эш өҫтө быna бөгөн дә, халыҡ ҡырҙа ураҡ* ***ура.*** Н. Нәжми.

**урҙа I** *и.* Нәмә элеү өсөн түбә таҡтаһы аҫтына стена буйлатып аҫҡан таяҡ. *Сәкинә... шәлен* ***урҙаға*** *элде, ҡыйыу атлап, түрбаш яҡҡа үтте.* Н. Мусин.

**урҙа II** *и. тар.* 1. Ғәскәре менән хан торған урын. ***Урҙаға*** *ингәс, Мәсем хан туй ҡыла, ти, батырҙарға бик ҙур һый ҡыла, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

2. Бер хан ҡул аҫтындағы дәүләт. *Бөтә башҡорт Мөйтәнгә* ***урҙа*** *булды.* «Мөйтән бей».

**ут I** *и.* 1. Янған нәмәнән сыҡҡан эҫе яҡты ғаҙ. *Ҡыҙыу* ***ут.*** ***Ут*** *яғыу.* ***Утҡа*** *ҡыҙыныу.* ***Утҡа*** *яныу. Һүрән* ***ут.*** ▬ [*Гөлйөҙөм*] *усағына* ***ут*** *яғып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

2. Йылыныу, бешеренеү өсөн ҡырҙа, ерҙә яндырылған ағас ойөмо. *Быжырмәргән юл өҫтөндә янып ятҡан* ***утҡа*** *тап була.* Әкиәттән.

3. Йорт, ҡаралдыны ялмап алған ялҡын. ***Ут*** *сыға.* ***Ут*** *төртөү.* ***Ут*** *һалыу.* ▬ *Ул арала өйҙөң түбәһен* ***ут*** *ялмап алды.* Д. Юлтый.

4. Шәм, сыраҡ яҡтыһы. *Өйгә* ***ут*** *үткәреү. Шәмгә* ***ут*** *алыу. Электр* ***уты.*** ▬ *Кис, больницала* ***ут*** *ҡабынғас, балконға сыҡтым.* С. Агиш.

5. *күсм.* Кешенең берәй төрлө эске кисерештәренең күҙендә ялтырап сағылышы. [*Хыялбай*] *уйлана ла һөйләнә үҙ-үҙенән, йәшел шатлыҡ* ***уты*** *сәсрәй күҙенән.* Ш. Бабич.

6. Атыш. *Артиллерия* ***уты.*** ***Ут*** *асыу. Иҫкәрмәҫтән туп атылды, Порт-Артурҙы* ***ут*** *алды.* Бәйеттән.

7. Пуля, снаряд һ. б. яуып торған урын; һуғыш. *Кешеләр* ***ут*** *эсендә, туп йәҙрәләре аҫтында үлем көтә.* Д. Юлтый.

**ут II** *и. иҫк.* Үлән. *Күк* ***ут.*** ▬ *Арҡауылдың* ***утынан*** *ат утлатҡан каруансы.* Ҡобайырҙан.

**утлыҡ I** *и.* Самауырҙың төбөндәге ҡуҙ ятҡан ере. *Ул ҡатын самауырҙын ҡапҡасын асты: «Быna бында һыу һалаһың, бында күмер», — тине* ***утлыҡты*** *төртөп күрһәтеп.* Ғ. Ғүмәр.

**утлыҡ II** *и.* 1. Йорт эсендәге бесән һаҡлай торған ер; бесәнлек. *Осоп ҡына һыбай килеп төшә, атын ҡуя* ***утлыҡ*** *эсенә.* Б. Вәлит.

2. *Малға бесән һала торған урын; утлыҡса. Атты* ***утлыҡҡа*** *бәйләү.*

# Ү

**үпкә I** *и.* 1. Умыртҡалы йән эйәләренең күкрәк ҡыуышлығында урынлашҡан тын алыу ағзаһы. *Уң яҡ* ***үпкә.*** ***Үпкәгә*** *һыуыҡ тейеү.* ***Үпкә*** *шешеү. Һул яҡ* ***үпкә.*** ▬ *Киң йылға яғынан танауға саф һалҡынса һауа инеп,* ***үпкәләрҙе*** *таҙартып сыға.* Ғ. Дәүләтшин. — *Ошо сәй менән көн буйына ултырып,* ***үпкә*** *йыуҙырмаһам, ашаған-дай ҙа булмайым.* Д. Бүләков.

**үпкә II** *и.* Ғәҙел булмаған бер нәмәгә йәберһенеү, рәнйеү тойғоһо. ***Үпкә*** *белдереү.* ***Үпкә*** *тотоу.* ▬ *Башҡа ырыуға оҙатылған ҡыҙ ата-әсәһенә, ағаларына, еңгәләренә, ҡайны-ҡәйнәләренә, кейәүенә үҙенең бөтә* ***үпкәһен,*** *зарын йола буйынса сеңләү менән әйтер булған.* Ж. Кейекбаев. *Вәлимәнең* ***үпкәһе*** *төҫөнә сығып, бите ҡыҙарҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Һуғыш алдынан алған шаршауыбыҙ ҙа ҡырҡ ҡорау булып туҙып бөткән. Хәйер, уға ни* ***үпкә*** *инде.* Ғ. Дәүләтшин.

**үр I** *и.* 1. Юғарылағы урын, бейек урын. ***Үргә*** *менеү.* ***Үрҙән*** *ҡолап төшөү.* ▬ *Теләһә ҡалай яһалған ауыр һәнәк менән уңған игендең төшөмлө көлтәләрен* ***үргә,*** *эҫкерт башына ырғытҡанда, тәндең һыҙланыуы тағы ла көсәйә, тағы ла арта.* Ғ. Дәүләтшин. *Беҙ, уттай янып, күнәктәр менән фургонға һоло тултырабыҙ. Хәким ағай* ***үрҙә*** *көрәк менән таратып, тигеҙләп тора.* Й. Солтанов.

2. Юғары тараф, өҫ. *Ҡулды* ***үргә*** *һоноу.* ***Үргә*** *ҡарау.* ▬ *Ҡаҙ себештәре сотор-сотор итеп, ... эркелгән һыуҙы суҡыштары менән һөҙөп эсеп, баштарын* ***үргә*** *күтәреп йоталар.* Һ. Дәүләтшина. *Мөлөк ағай ... Турысаиҙы һыуытыу өсөн туғарып, тәртәһен* ***үргә*** *күтәреп бәйләп ҡуйҙы.* Т. Хәйбуллин. *Маһайған тауҙың түбәһе* ***үрҙәргә*** *үрелеп тора.* Р. Ниғмәти.

3. Ер өҫтөнөң бейегәйә барған урыны, ҡалҡыуға киткән ер. *Тау үренә менеү. Текә үр. **Үрҙе** сығыу.* — *Ирәндек **үрен** артылыуға күҙ бәйләнә төштө.* С. Кулибай. *Әй оҙон тойола торғайны ла ошо **үр**! Менәһең-менәһең, осо күренмәй. Менеп еттем тигәндә, тағы бер **үр** күренә.* Р. Солтангәрәев.

4. Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлгән ягына ҡаршы яҡ. ... *Ел **үре**. Йылға **үре**.* — *Еҙем һыуҡайының **үрендә** шул ҡарағас та урман күренә.* Халыҡ йырынан.

5. *күсм.* Эш, тормоштағы югары ҡаҙаныш. ***Үр** артынан **үрҙәр** яулай кеше, ул ынтыла һаман югары.* Ш. Бикҡол.

**үр II** *ҡ.* 1. Сәсмәгән көйө моронлап үҫеү. ***Үргән** бәрәңге.* — *Хәҙер күтәремдәрҙә, күбәләрҙә ятҡан ашлыҡтар ҡыҙа, **үрә** башланы.* Б. Бикбай.

2. Үҫеп оҙонайыу. *Буйға **үреү**.* — *Яҙғы һөрөм менән сәскән һабан ашлыҡтары ... яңыраҡ һабаҡҡа **үреп**, ҡамылдарын ҡатырырға тырышып ята.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Яңынан яралып үҫеү. *Яраға ит **үрә** башланы.* — *Ошо тулҡында сайҡалып, ошо сапҡында айҡалып, тәненә ит **үрмәй**, йөрәгенә май ҡунмай, бауыр һөйрәп, ыҙа сиккән Күсәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* Т. Хәйбуллин.

**үр III** *ҡ.* 1. Бер нисә тындан төрлөсә аралаштырып, салыштырып бер нәмә яһау. *Ау **үреү**. Кәрзин **үреү**. Өҫтән **үреү**. Һигеҙҙән **үреү**.* — *Атайым бик матур һәм ныҡ итеп сабата **үрә** белә ине.* Т. Йәнәби. [*Исмәгил бабай:*] *Ошо яҡлап ситән тәпәшәйгән, сыбыҡты өҫтәп тә **үрергә** тура килер.* К. Кинйәбулатова. *Ебәк кенә ҡушып **үрә** алманым ерәнсәкәй атым ялына.* Халыҡ йырынан.

2. *күсм.* Ҡушып аралаштырыу, бергә бәйләү. [*Батырша*] *үҙенең башынан кискән ваҡиғалар ағышын замананың тарихи хәлдәре ... менән **үреп** алып бара.* Ғ. Хөсәйенов.

**үртән I** *и.* Үрт һалып яндырылган урын. ***Үртәндә** үлән бик шәп үҫкән.* М. Тажи. *Ялан да ерҙең **үртәне**, тотоп булмай күк тә бүртәне.* Халыҡ йырынан.

**үртән II** *ҡ.* Күңелгә ауыр булған берәй нәмәгә әсенеү; үртәлеү. *Магазинда алыусы юҡ, тауар үтмәй. Приказчиктар тик тора. Хәйбулла бай **үртәнә**, сауҙа юҡлыҡты приказчиктарҙан күрә.* М. Ғафури. *Үҙем булдыҡһыҙмындыр инде, тип **үртәнәм** ... Солтан ағайҙың малдары ана бер епкә бәйләнгән кеүек йөрөй.* Я. Вәлиев. *Һаранбай үҙенең отолғанын һиҙеп, бик **үртәнде**, ти.* Әкиәттән.

**үт I** *и.* Бауырҙа эшләп сығарылып, әсәккә барган йәшкелт һары төҫтәге әсе шыйыҡлыҡ. ***Үт** менән һыу — телһеҙ яу.* Мәҡәл.

**үт II** *ҡ.* 1. Кем йәки нимәнеңдер эргәһенән юл алыу, ҡайҙалыр барыу, китеү; уҙыу. *Өй эргәһенән **үтеү**. Яр буйынан **үтеү**.* ▬ *Урамда ни тиклем кеше! Артҡа ла **үтәләр**, алға ла **үтәләр**. Ҡыҙыу ҙа **үтәләр**, аҡрын да **үтәләр**.* С. Агиш.

2. Етеҙерәк хәрәкәт менән артҡа ҡалдырыу, алға сығыу; уҙыу. *Дуҫым аты мине **үтһә**, теҙгененән алмам һис.* М. Илбаев.

3. Хәрәкәт итеп, ары юл алыу (транспортҡа ҡарата йәки шуларҙың береһендә). *Хәиҙәр поездан төштө. Тап ошо минутта пароход та Ағиҙелдең текә яры буйлап **үтеп** китте.* М. Тажи.

4. Билдәле бер сик, һыҙыҡ һ. б. аша алға барыу йәки китеү, сығыу. *Сиктән **үтеү**.* ▬ *Ошонда кесе йәштән үҫеп тә был өйҙөң коридорынан ары **үтә** алмаған Вася.* Һ. Дәүләтшина.

5. Һеңеп, һарҡып һ. б. аша сығыу. *Ямғыр **үтә** икән. Ҡыйыҡты яңыртырға кәрәк булыр, тип уйланы [Кәрим].* Я. Хамматов. *Дошман пуляһы Фатиманың уң яҡ беленән **үтеп**, бөйөрөнән өҫтәрәк ултырған.* Б. Бикбай.

6. Берәй йүнәлештә һыҙылыу (юлға, туннелгә һ. б. ҡарата). *Ер аҫтынан торба **үтә**. Тау битләп һуҡмаҡ **үтә**.* ▬ *Киң, тигеҙ яланды ҡырҡып **үткән** оҙон, һай, йәйпе йылға буйына Ялпаҡйылға ауылы ултырған.* Ғ. Дәүләтшин.

7. *һөйл.* Тауыш биреү, һайлап алыу һ. б. һөҙөмтәһендә ҡабул ителеү, алыныу, һайланыу. *Комиссиянан **үтеү**. Тәҡдим бер тауыштан **үтте**. Штатҡа **үтеү**.* ▬

*Маһира ...пединститутҡа экзамен тапшыра барғайны, конкурстан үтә алмай ҡайтты.* Ф. Иҫәнғолов.

8. Ниməғəлер дусар ителеү, ниҙер кисереү, татыу. *Юламан ҡарт, ни өсөндөр, Ирйегетте артыҡ ярата, хөрмәт итә. Бығаса уның менән бергәләп ауыр һынау **үтеп** ҡарамаһа ла уға үҙенә ышанған һымаҡ ышана.* З. Биишева.

9. Иҫәпкә, ҡаралыуға, тикшереүгә дусар булыу. *Аттестация комиссияһын **үтеү**.* ▬ *Некруттар ҙа йөрөмәй бөгөн. Улар кисә, Тимер үҙе лә күреп ҡалды, район үҙәгендә комиссиянан **үтте**.* Б. Бикбай.

10. Дауам итеп, артта ҡалыу (ваҡытҡа, ваҡиғаға һ. б. ҡарата); уҙыу. *Ғүмер **үтә**. Йыл **үтә**. Ҡыш **үтә**.* ▬ *Күп тә **үтмәй**, ҡыуаҡлыҡ аръяғынан тыны бөтөп көтөүсе Ҡалҡай йүгереп килеп еткән.* Н. Иҙелбай. *Һыҙғырт, ҡурай, **үткән** ҡайғыларҙы!* Ш. Бабич. *Һинән йәшлек **үтте**, минән дә ул **үтер** әле һуңлап булһа ла.* Н. Нәжми. ***Үткән** эштән төш яҡшы.* Мәҡәл.

11. Берәй төрлө курсты, срокты бөтөрөү, тамам итеү. *Практика **үтеү**. Хәрби хеҙмәтте **үтеү**.* ▬ [*Зыя:*] *Бәлки туранан-тура фронтҡа оҙатмаҫтар әле, бер нисә ай лагерҙа булырға, әҙерлек **үтергә** лә тура килер.* М. Тажи.

12. *һөйл.* Уҡып өйрәнеү өсөн дәрес рәүешендә башҡарылыу, ниҙелер уҡып өйрәнеү. *Мәктәп программаһын **үтеү**.* ▬ *— Әсәй, зверинецҡа барырға аҡса бир әле. Беҙ бит зоология **үтәбеҙ**, беҙгә уны уҡытыусы ла ҡарарға ҡушты, — тине Ғүмәр.* С. Агиш.

13. Булып тамамланыу, туҡтау. *Ямғыр тиҙ **үтте**.*

14. Билдәле бер үлсәү, сик, саманан ашыу, уҙыу. *Буйы атаһынан **үткән**.* ▬ *Урта йәштәрҙән **үтеп**, башына сал инә башлаған Әпләс, йәһәт атлап, муллаға китте.* Һ. Дәүләтшина.

15. *кусм.* Йән биреү. *Таң алдынан **үтеү**.* ▬ *Олатайым уның* [*әсәйемдең*] *һалынып төшкән ҡулын күкрәгенә күтәреп һалды, әйелеп йөрәген тыңлап ҡараны ла: «**Үтте**», — тине.* Ғ. Ғүмәр.

**үт III** *ҡ.* Саузалы булыу; һатылыу. *Магазинда алыусы юҡ, тауар **үтмәй**.* М. Ғафури. [*Биксән*] *түшкәләрен*

*тейәй ҙә китә ҡала баҙарына. Кире алып ҡайтһа ҡайта, һорағанынан төшмәй. Был юлы **үтмәһә**, киләһендә **үтә** ул барыбер.* Р. Солтангәрәев.

**үт IV** *ҡ.* Яҡшы ҡырҡыу. *Балта **үтә**. Бысҡы **үтә**. Ҡайсы **үтә**. Салғы **үтә**.* ▬ *Мәғфүрә бысаҡты ҡаҙан ситендә шыйылдатып бер нисә тартып яныны ла Рәхимәгә кире һуҙҙы: — **Үтә** шикелле.* Һ. Дәүләтшина. *Үҫмәгән бойҙайға **үтмәгән** ураҡ.* Мәҡәл.

**үтә I** *р.* 1. Бер яғынан икенсе яғына сыҡҡансы, аша-нан-аша. ***Үтә** ағып төшөү. **Үтә** күренеү. **Үтә** төшөү.* ▬ *Яңғыҙ йорттоң ни, ел ҡайһы яҡтан килһә лә, **үтә** һуға.* Р. Солтангәрәев. — *Ярлылар хәҙер һеҙҙең ысын йөҙөгөҙҙө күрҙе. Әсегеҙҙе лә **үтә** белеп торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Сиктән тыш, бик, ифрат. ***Үтә** матур. **Үтә** яҡшы.* ▬ — *Туҡта, Ямал. **Үтә** шаштырып ебәрҙең түгелме?* М. Тажи. — *Ел-дауыл ҡуҙғалып китмәгәйе. **Үтә** ныҡ ҡыҙҙыра бит, балам!* З. Биишева. ***Үтә** иҫәр буйға үҫәр.* Әйтем. ***Үтә** ҡыҙыл тиҙ уңыр.* Мәҡәл.

**үтә II** *ҡ.* Ғәмәлгә ашырыу. *Вәғәҙәне **үтәү**. Йомошто **үтәү**. Ҡушҡанды **үтәү**.* ▬ *Кабинеттан кешеләр, йомоштарын **үтәп**, сығып бөткәс, Сыртланов ... йомшаҡ креслоһына килеп ултырҙы.* С. Агиш. *Кем хеҙмәтен намыҫ менән **үтәй**, ҡаиҙа эшләмәһен, хур түгел.* Ғ. Сәләм.

# Ф

**фазыл I** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Белемгә эйә; белемле. *Кем наҙан — шул нәмәнең асылын белмәй, бер уға **фазыл**, наҙан — унда айырма тапмай ул.* М. Ғафури.

**фазыл II** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҡшылыҡ, изгелек. *Эй Фазыл Туйкин, хоҙаиҙың **фазылы** менән туй яһа.* Ш. Бабич.

**ферма I** [*рус.* < *фр.*] *и.* 1. Колхоз-совхоздың йәки ауыл хужалығы уҡыу йортоноң малсылыҡ менән шөғөлләнгән махсус хужалығы. *Йылҡысылыҡ **фермаһы**. Ҡошсолоҡ **фермаһы**. Сусҡасылыҡ **фермаһы**.*

2. Шул хужалыҡ урынлашҡан йорт-ҡаралты. ***Ферма** кирбестән һалынған, түбәләре шифер менән ябылған ҙур-*

*ҙур ике һараиҙан тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 7 ғинуар.

**ферма II** [*рус.* < *фр.* < *лат.*] *и. тех.* Ҡорос терәктәрҙең остарын бер-беренә беркетеп яһаған инженерлыҡ ҡоролмаһы. *Һыуға сумып ятҡан* ***фермаларын*** *өҫкә күтәрәләр күперҙәр.* Ә. Вәли.

**фракция I** [*рус.* < *фр.* < *лат.*] *и.* 1. Парламент йәки һайланма учреждениеларҙа ниндәйҙер партия ағзаларының берләшкән айырым төркөмө. *Думалағы* ***фракция.***

2. Политик партияның, дөйөм йүнәлеше менән риза булмай үҙенә башҡа айырылып, партия эсендә көрәш алып барған төркөм. ***Фракцияла*** *тороу.*

**фракция II** [*рус.* < *фр.*] *и. махс.* Бортөклө йәки ҡаты есемдәрҙең (ҡом, ваҡлаған тау тоҡомо һ. б.), шыйыҡ ҡушылманың (мәҫ., нефттең) ниндәйҙер билдәһе (бөртөксәләрҙең ҙурлығы, тығыҙлығы, ҡайнау температураһы) буйынса айырылған өлөшө. *Нефть* ***фракцияһы.*** *Орлоҡ* ***фракцияһы. Фракцияға*** *айырыу.*

# Х

**хаҡ I** [*ғәр.*] *с.* 1. Ысынға тап килгән; дөроҫ, ысын. *Хаҡ һүҙ.* ▬ [*Салауат:*] *Унын аҡылы саф, вәғәҙәһе* ***хаҡ,*** *баяр, түрәләргә аяуһыҙ.* Б. Бикбай. *Хаҡ шелтәгә яуап һүҙ таба алмай өҙгөләнде ... йөрәк.* К. Кинйәбулатова.

2. Дөрөҫлөк, тоғролоҡ төшөнсәһенә ярашлы; ғәҙел. *Хаҡ эш.*

3. *Ысын мәғәнәһендәге; шикһеҙ.* ***Хаҡ*** *мосолман.* ▬ ***Хаҡ*** *дошмандар сығып торған икән минең барған юлыма.* Халыҡ йырынан.

**хаҡ II** [*ғәр.*] *и.* Нимәлер ҡылырға йәки эшләргә ирек; хоҡуҡ. *Китергә* ***хаҡы*** *юҡ. Ҡарарға* ***хаҡы*** *юҡ.* ▬ *Һин илама, әсәй, ... хур булыр, тип мине донъяла, минең дә бит кешелек* ***хаҡым*** *бар.* Ғ. Амантай. ***Хаҡыңды*** *ал хөр саҡта, берләшеп ҡал форсатта.* Ш. Бабич.

**хаҡ III** [*ғәр.*] *и.* 1. Нәмәнең һатыу-алыуҙа аҡсалата билдәләнгән ҡиммәте; баһа. *Арзан* ***хаҡ.*** *Иген* ***хаҡы.*** *Ҡыйбат* ***хаҡ. Хаҡ*** *белешеү.* ***Хаҡ*** *ҡуйыу.* ▬ *Баҙарҙың һәр уры-*

*нында халыҡ мыжғып, алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, ҡул һуғыша, **хаҡ** бесә, сауҙалаша, алдай, алдана.* Ғ. Дәүләтшин. *Бынау ҡатын-ҡыҙҙар күлдәге ни **хаҡ** тора?* Б. Бикбай.

2. Эшләгән эшкә, түккән көскә аҡсалата ҡуйылған баһа. *Хеҙмәт **хаҡы**. Эшләгән **хаҡты** алыу.* ▬ *Улар* [*ҡатын-ҡыҙ*] *ярты **хаҡҡа** ас эшләй.* Д. Юлтый. [*Көтөүсе*] *был баиҙың малын яҙ көтә, йәй көтә, көҙ еткәс, эш **хаҡын** алырға тип байға килә.* Әкиәттән.

3. Сит кеше нәмәһе, кеше өлөшө. *Кеше **хаҡын** ашау. Кеше **хаҡына** теймәү.* ▬ [*Әхмәтшәриф бабай:*] ***Халыҡ** һүҙен ташламаһаң, кеше **хаҡын** ашамаһаң, күңелең аҡ, йөҙөң шат булыр.* А. Игебаев. *Йәтим-йәтим тимәгеҙ, йәтим **хаҡын** еймәгеҙ.* Ҡобайырҙан.

4. *күсм.* Тотҡан әһәмиәтенән сығып бирелгән баһа; хөрмәт, ҡәҙер. *Күрше **хаҡы**. Оло кеше **хаҡы**. Сабый **хаҡы**.* ▬ *Фронтовиктар ҡайтты. Ул юҡ ине. Аңлашылды һүҙһеҙ был хәбәр. Бәхет **хаҡы** күп ғүмерҙәр тора, ҡәҙерле ул ирек шул ҡәҙәр.* М. Хәй.

**хаҡ IV** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дини ҡараш буйынса: бөтә донъяны яратҡан, уның менән идара иткән юғары зат; хоҙай, алла. ***Хаҡҡа** тапшырыу.* ▬ *Ғүмереңде үткәрмә һин юҡты теләп, **хаҡ** ҡаршында ҡабул булмаҫ бындай теләк.* М. Ғафури.

**хаҡла I** *ҡ.* Дөрөҫ тип табыу; хуплау. [*Баҡсасы:*] *Мин дә быны **хаҡлайым**. Үҫегеҙ, сәскәләнегеҙ, матурланығыҙ.* М. Фәйзи.

**хаҡла II** *ҡ.* Ихтирам йөҙөнән сығып баһалау, хөрмәт күрһәтеү. *Аш хаҡын **хаҡлау**.* ▬ *Иптәш хаҡын **хаҡлап**, барыһын ташлап, йыраҡ юлдарға ла мин сығам.* Ғ. Рамазанов.

**хаҡлы I** *с.* 1. Уй-фекере, һүҙе, ҡылған эше ысын хәлгә, дөрөҫлөккә ярашлы; дөрөҫ булған. *Ғәләү уны* [*йылы*] *кейендереү хәстәренә кереште. Башта Ниғмәт бик риза булып бөтмәне, ләкин көндәр ағышы дуҫының **хаҡлы** икәнлегенә тиҙ ышандырҙы.* Б. Бикбай.

2. Урынлы, тейешле. ***Хаҡлы** һорау.*

**хаҡлы II** *с.* Хаҡы, хоҡуғы булған; хоҡуҡлы. ▬ *Унда кешеләр эшкә, ялға* ***хаҡлы****, унда кешеләр йырға* ***хаҡлылар.*** Ғ. Сәләм.

**хаҡлы III** *с.* Хаҡы ҙур булған; ҡиммәтле. ***Хаҡлы*** *тауар.* ▬ *Ай яҡтылары яҡты ла, көмөш кенә эйәр* ***хаҡлы*** *ла.* Халыҡ йырынан. ***Хаҡлы*** *нәмә — затлы нәмә.* Әйтем.

**хаҡһыҙ I** *с.* 1. Уй-фекере, һүҙе, эше ысынға тура килмәгән, дөрөҫ булмаған. [*Айбикә:*] *Ҡотҡар, бейем, беҙгә асыу тотма,* ***хаҡһыҙ*** *хөкөмөңдө йөрөтмә!* Х. Ғәбитов. *Мансуров эшкә тотонғас, үҙенең* ***хаҡһыҙ*** *икәнлеген тиҙ төшөндө.* Б. Бикбай.

2. Урынһыҙ, тейешһеҙ. ***Хаҡһыҙ*** *дәғүә.*

**хаҡһыҙ II** *с.* Түләүһеҙ-ниһеҙ; буш. ***Хаҡһыҙ*** *хеҙмәтсе.*

**хана I** [*фарс.*] *и. иҫк.* Кеше йәшәй торған урын; йорт, бина. *Эшсән* ***ханаһы*** *туп-тулы, ялҡау* ***ханаһы*** *буп-буш.* Әйтем.

**хана II** [*рус.*] *с.* Хөрт, мөшкөл; харап. *Эштәр* ***хана.*** ▬ *Кашапов борсолоу менән дауам итте: —* ***Хана,*** *туған! Игенселек культураһы тураһында институтта беҙгә күп тылҡынылар. Ә бында ул — ташҡа үлсәйем.* Я. Вәлиев.

**хас I** *с.* Үҙенә бер төрлө, үҙенсәлекле, характерлы. *Йәштәргә* ***хас*** *сифат. Өлкәндәргә* ***хас*** *олпатлыҡ.* ▬ *Мин хәҙергә әле ҡала ҡыҙы, ... ауылдың да* ***хас*** *бер гүзәллеген иң беренсе тапҡыр күреүсе.* С. Кулибай. [*Сәғиҙә*] *ауылдың үҙенә генә* ***хас*** *йолаһы, йыр-моңо менән зауыҡланды.* М. Тажи.

**хас II** *киҫ.* Сағыштырыу, оҡшатыуҙы көсәйтеп килә; нәҡ, тап. ***Хас*** *та атаһы.* ▬ *Улар* [*ҡарғалар*] ***хас*** *аяҡтары ысҡынып, йығылып, төшөрҙәр кеүек ине.* Р. Солтанғәрәев. *Күҙҙәрең сөм ҡара,* ***хас*** *күмер, бер ҡарауы үҙе бер ғүмер.* Н. Нәжми. *Үрге яҡтан берәү килә,* ***хас*** *та яныйым атлауы.* Халыҡ йырынан.

**хас III** [*фарс.*] *с.* Кемгәлер ҡаныҡҡан; ҡонло, үсле. **Хас** *кеше.* ▬ *Батыр ғына егет ай шул булыр —* ***хас*** *дошмандың етер башына.* Халыҡ йырынан. *Ике ас бер-береһенә* ***хас.*** Әйтем.

**хасла I** *к.* Кем йәки нимәгәлер хас үҙенсәлектәрҙе иҫләп эшләү, йәтешләү; махсус тәғәйенләү. *Ау бәйләүгә* ***хаслап*** *эшләнгән энә.* ▬ *«Белем» журналы уҡытыусыларға ғына* ***хаслап*** *сығарылмай ..., дөйөм бер журнал булып сығып килде.* Т. Йәнәби.

**хасла II** *к.* Нимәгәлер ҡомарланып, хасланып тотоноу. *Гәүһәр тартҡылашты, бирешмәҫкә тырышты. Ләкин* ***хаслап*** *алған ҡатын-ҡыҙ төркөмөнән дә яманыраҡ нәмә бармы ни был донъяла.* И. Ғиззәтуллин.

**хат I** *и.* 1. Хәбәр алышыу йәки хәл белешеү өсөн кемгәлер тәғәйенләп яҙылған ҡағыҙ. *Рәсми* ***хат.*** *Һалдат* ***хаты.*** *Яуап* ***хаты.*** ▬ ***Хаттар*** *яҙһаң, йышыраҡ яҙ,* ***хаттар*** *ярты күрешеү.* А. Игебаев. *Табаҡ та ғына табаҡ ай аҡ ҡағыз Буранбаиҙың яҙған* ***хаттары.*** *Буранбаиҙың яҙған* ***хатын*** *уҡып зар илаиҙыр ауыл ҡарттары.* Халыҡ йырынан.

2. *иҫк.* Ниҙер яҙған рәсми ҡағыҙ. *Талаҡ* ***хаты.*** ▬ *Хан тәхетенән төшкән һуң менгәне яйҙаҡ ат булыр, өҫтөнән күп* ***хат*** *булыр.* Ҡобайырҙан.

**хат II** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сик һыҙығы. *Хохлов ҡалған ғәскәрҙәре илә башҡорттарҙың мохасара* ***хаттарына*** *һөжүм итте.* М. Һаҙыев.

**хозур I** [*ғәр.*] *с.* 1. Күңелгә йәм, ләззәт биргән, һоҡланғыс. ***Хозур*** *мәл.* ***Хозур*** *сәхрә.* ***Хозур*** *тәбиғәт.* ▬ *Кешеләр ултырған еңел аҡ кәмәләр. Димдең* ***хозур*** *урындарына табан үрмәләй.* Л. Ғадилов. *Нindәй матур яҙғы туғай, ҡырҙар! Ниндәй* ***хозур*** *тауҙар үҙәне.* Ҡ. Даян.

2. Ләззәтләнеү тойғоһо уятҡан, рәхәт. *Яҙ ғәләмәте көн һайын арта бара, ҡайһы ваҡытта шундай* ***хозур*** *йылы ел иҫеп китте, хатта ҡарт сәпсектең дә йөрәге елпенеп китә ине.* Ғ. Богданов.

**хозур II** [*ғәр.*] *и.* Төбәү, урын-ваҡыт, сығанаҡ килеш формаһында бәйләүес функцияһын үтәп, кемдеңдер алды, ҡаршыһы тигән мәғәнәне белдерә. *Мулла* ***хозурында*** *ҡатын шул һүҙҙәрҙе тәкрар ҡылды.* М. Өмөтбаев. *Сапҡындар теге баиҙы береһе башынан, береһе аяғынан тотоп, батша* ***хозурына*** *алып килделәр.* Экиәттән.

**хуш I** [*фарс.*] *с.* 1. Йәнгә-тәнгә ләззәт бирерлек; яҡшы, тәмле (еҫкә ҡарата). *Хуш еҫ.* ▬ *Сәселде **хуш** һауа, хөр һауа.* Ш. Бабич. *Баш аҫтындағы бесәндең иҫерткес **хуш** еҫе беҙҙе иҙрәтеп алып китте.* А. Ғирфанов.

2. Күңелгә ятышлы; матур, йәмле. [*Ҡоштарҙың*] ***хуш** ауаздары ... нисә мәғзүн күңелдәрҙе йыуатыр, шөйлә шат итер.* С. Яҡшығолов. [*Ҡыш*] *һис бер йәм ҡалмаҫ был **хуш** туғаиҙа.* Д. Юлтый. *Ҡарғаның үҙ тауышы үҙенә **хуш**.* Әйтем.

3. Ҡәнәғәт булған; күтәренке, яҡшы (күңелгә ҡарата). *Хуш кәйеф.* ▬ *Китап ҡарау ғәҙәтебеҙ буш ваҡытта. Беҙҙән дә белем ишеге бикләнгән юҡ, аңлайбыҙ кәйеф килгән **хуш** ваҡытта.* Ш. Бабич. *Төштәремдә күрһәм, күңелем **хуш**, уянып та китһәм, ҡуйыным буш.* Халыҡ йырынан.

**хуш II** [*фарс.*] *и.* Хушлашҡанда, һаубуллашҡанда әйтелгән әҙәп һүҙе. *Хуш, иҫән бул.* ▬ *Йә, Сәйҙел, **хуш**. Осрашырбыҙ ҡалам — Өфөлә.* Ғ. Сәләм. [*Этҡол бай:*] *Әле **хуш** юҡ. Ҡайтанан рәтләп ултырышығыҙ. Хөрмәт бөтмәгән.* Т. Хәйбуллин.

**хәйер I** [*ғәр.*] *и.* 1. Яҡшылыҡ, изгелек, файҙа. *Малдың **хәйерен** күреү.* ▬ *Билал ... ғәжәпкә ҡалды, эсенән генә: «Былдай кешеләрҙән төҙөлгән дружинаның ниндәй **хәйе-ре** булыр, ниндәй фаиҙаһы тейер икән?» — тип һөйләнде.* А. Таһиров. *Хәйләле эштә **хәйер** юҡ.* Мәҡәл.

2. *дини.* Алланың ярлыҡауын һорап, доға ҡылдырып биргән нәмә. *Хәйер алыу. Хәйер өләшеү. Хәйер таратыу.* ▬ [*Һалдатҡа*] *китеүселәр ... мулла янына инеп **хәйер** биреп, доға ҡылдылар.* Һ. Дәүләтшина.

**хәйер II** [*фарс.*] *инш.* Тәүге фекерҙе ҡапыл үҙгәртеп, икенсе йүнәлеш биргәнде белдерә. *Тәүге көндәрҙәге кеүек шаян һүҙҙәр ҙә ишетелмәй, **хәйер**, уға ваҡыт та юҡ инде.* М. Ғәли. *Дейеү егеттән иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан: «Нихәл, ҡәйнеш! Ни йомош? **Хәйер**, ниңә килгәнеңде үҙем дә беләм», — тигән.* Әкиәттән.

# һ

**һабаҡ I** *и.* 1. Үҫемлектең япрағы, сәскәһе, емеше урынлашҡан тупраҡтан өҫкө өлөшө. *Картуф **һабағы.*** ▬ *Тармаҡ-тармаҡ булып **һабаҡтары,** үҫеп ултыра бер гөл янымда.* Ш. Бикҡол.

2. Билдәле бер оҙонлоҡтағы тегәр еп, һаплам. *Бер **һабаҡ** еп.*

**һабаҡ II** *иҫк.* 1. Уҡыу-уҡытыу эше, шөғөлө. ***Һабаҡҡа** барыу. **Һабаҡҡа** төшөү.* ▬ *Матур яҙҙар етте, **һабаҡ** бөттө, **һабаҡ** бөткәс бигерәк күңелһеҙ.* Х. Ғәбитов. *Ҡыҙҙар тороп бик иртә, бары **һабаҡҡа** китә.* М. Ғафури.

2. Дәрес. ***Һабаҡ** алыу. **Һабаҡ** биреү. **Һабаҡ** уҡыу.* ▬ *Исмәғил һигеҙ йәшенә етеп үҙҙәренең ауыл муллаһына **һабаҡҡа** йөрөй башланы.* Ғ. Дәүләтшин.

3. *күсм.* Эш, ҡылыҡ өсөн тормош тәжрибәһенән алынған ғибрәтле өлгө, аҡыл; фәһем. *Тарих **һабағы.** **Һабаҡ** алыу. **Һабаҡ** булыу.* ▬ *Юҡ, юҡ. Бирешмәҫтәр. — Октябрҙең батыр улдары. Юлдар айҡап, көрәш **һабаҡтарын** тылҡый-тылҡый үҫкән батырҙар еңелмәҫтәр мәңге!* Ғ. Амантай. *«Ярар, — тине Ҡәмәр, — киләсәктә **һабаҡ** булһын бына үҙеңә. Бер нәмәне алға алған булһаң, аҡ-ҡара күренмәй күҙеңә».* Т. Йәнәби. *Айыуға аҡыл өйрәткән — таяҡ, йүнһеҙгә аҡыл өйрәткән — **һабаҡ.*** Мәҡәл.

**һағаҡ I** *и.* 1. Балта оңғоһоноң артындағы сөй. *Ҡара балта... **һағаһынан** төиҙәһенәсә ... сирәмгә гөрһөлдәп батты.* Й. Солтанов.

2. Балта йөҙөнөң арҡы өлөшө. *Балтаның **һағағы** менән сабыу.*

**һағаҡ II** *с.* Ағастың иң аҫҡы өлөшөндә аҫылынып торған. ***Һағаҡ** ботаҡ.*

**һай I** *с.* 1. Өҫкө кимәлдән аҫҡы кимәлгә тиклемге араһы бәләкәй, тәрән түгел (һыуға, соҡорға ҡарата). ***Һай** соҡор. Һыуҙың **һай** урыны.* ▬ *Тәрән йылға аға тауышһыҙ, **һай** йылғалар аға шылтырап.* Д. Юлтый. ***Һай** йылғаның балығы ваҡ булыр.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Нигеҙе йомшаҡ; әҙ, төпһөҙ. *Уның белеме **һай.***

**һай II** *ымл.* 1. Нимәгәлер һоҡланғанда әйтелә. ***Һай,** күңелле, дуҫтар, был аиҙа, күҙ сағылтып ята туғай ҙа!* Ғ. Амантай.

2. Нимәгәлер үкенгәндә әйтелә. ***Һай,** бар ине беҙҙең ерҙәрҙә һунарҙың шәп саҡтары.* М. Тажи. ***Һай,** ғүмерҙәр үтте китте, ҡаиҙа китте ул заман?* Ш. Бабич.

3. Ҡыҙғанып әсенгәндә әйтелә. ***Һай,** Зөлхизә ... Бер ни ҙә аңламайһың, бер ни ҙә күрмәйһең, балаҡай.* З. Биишева.

4. Ризаһыҙлыҡты белдереп шелтәләгәндә әйтелә. [*Әмирханов*:] ***Һай,** ахмаҡ, был ниндәй оятһыҙлыҡ!* С. Агиш.

5. Йырҙарҙа тойгоно көсәйтеү, көй күтәреү өсөн әйтелә. ***Һай!** ... Саң-саң итә Ирәндек бөркөтө.* Хальгк йырынан. ***Һай,** эйелмәй, бөгөлмәй, матур баҫа түгелме.* Халыҡ йырынан.

**һайланмыш I** *с.* Ниндәйҙер талап менән һайлап алынған. *Бер ваҡыт Сидор Аристов сапҡындар ебәреп, бүтән **һайланмыш** башҡорттарҙы саҡыртты.* И. Аҡманов.

**һайланмыш II** *и.* Урынға, етәкселеккә рәсми һайлап ҡуйылған кеше. [*Ҡазыйҙар*] ***һайланмыштар** менән һүҙ беркетеп, ... ауыл халҡын төрлө яҡлап талай торған булған.* Хикәйәттән.

**һаҡ I** *с.* Ҡурҡыныс һ.б. хәлгә иғтибары көслө, һиҙгер, сос. ***Һаҡ** ҡолаҡ.* ▬ *Беҙҙең постар — иң **һаҡ** күҙәтселәр.* Ғ. Сәләм.

2. Абайлап, ҡарап һаҡлыҡ менән эш итеүсән; абай. ***Һаҡ** кеше.*

3. Йомшаҡ ҡыланышлы; ипле. ***Һаҡ** хәрәкәт.*

4. Ҙур иғтибар менән ҡайғыртыусан, аяулы, ҡурсыулы. ***Һаҡ** мөнәсәбәт.*

**һаҡ II** *и.* 1. Кем йәки нәмәнелер һаҡлау, ҡарауыллау, күҙәтеү өсөн ҡуйылған ҡораллы көс йәки кеше, ҡарауыл. ***Һаҡ** ҡуйыу. **Һаҡ** менән йөрөү. **Һаҡ** менән оҙатыу.* ▬ *Атаһы барҙың **hағы** бар.* Әйтем.

2. Нимәнелер ҡарауыллау, һаҡлау хеҙмәте. *Ил сигендә **һаҡта** тороу. **Һаҡта** тороу.* ▬ *Күҙҙе һаҡлаған күҙ ҡабағындай беҙ торабыҙ, ил, һинең **һағыңда**.* М. Хәй.

**һаҡ III** *и.* Бик кәрәк саҡта тотонор өсөн йыйып ҡуйылған нәмә. *Һаҡлының **һағы** ятыр, һаҡһыҙҙың башы ҡатыр.* Әйтем.

**һаҡ IV** *и.* Сайыр ағыҙыу өсөн ҡарағайҙы һыҙа торған ҡорал; сайыр бысағы. ***Һаҡ** тигән эш ҡоралы оҙон йәй буйы уның* [*сайырсының*] *ҡулынан төшмәй. ... Һәр карағай һайын **һаҡ** менән сайыр ағыҙыу улағы һыҙа.* Н. Шәйхулов.

**һаҡ V** *ҡ.* 1.Ҡайҙандыр ҡолап, төшөп йәки ағып барған ерҙән эләгеп, төколөп туҡтау. *Ҡырсынға **һаҡҡан** бүрәнә.*

2. Өҫтән һалынып төшөп тороу. *Армыт-армыт **һағып** тора ҡарт ҡайындың суҡтары.* С. Кулибай.

**һаҡал I** *и.* Ирҙәрҙең эйәге менән сикәһенә үҫкән йөн. ***Һаҡал** еткереү.* ▬ *Ололоҡ **һаҡалда** түгел, аҡылда.* М. Өмөтбаев. *Эйәк күрке — **һаҡал**, һүҙ күрке — мәҡәл.* Әйтем.

**һаҡал II** *и. этн.* Ҡатын-ҡыҙҙың аҫтан түңәрәк итеп, уртаһын шау тәңкә, ситенә буй-буй мәрйен баҫып яһалған күкрәк биҙәүесе. ***Һаҡал** тағыу.* ▬ *Ҡыҙҙар бейегәндә **һаҡалдары**, сулпыларының сылтырағаны ишетелеп ҡала.* Ж. Кейекбаев. — *Өлкән әсәй, мин дә **һаҡал** һалайым әле, ҡаиҙа минең **һаҡалым**? — тип кире йүгерҙе. Рәхимә уға тағы ла: — Уй, ҡыҙ йораты! **Һаҡал** ниңә кәрәк бынау эҫелә, – тип орошһа ла, өс йоҙаҡлы, дүрт тотҡалы, эсен аҫыл кейемдәр менән нышып тултырған һандыҡты сәғәт һуҡҡан һымаҡ дуңғылдатып асып, Хаяттың ынйы, мәрйен, көмөш, тәңкә, аҫыл суҡтарҙан яһалған **һаҡалын** сығарып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**һаҡау I** *с.* Телдәге ҡайһы бер өндәрҙе дөрөҫ, асыҡ әйтә алмаған йәки боҙоп һөйләгән. ***Һаҡау** бала.* ▬ *Малай йыр тауышын ишеткәс, үҙенең бәләкәс тауышы, **һаҡау** теле менән йырға ҡушыла.* Һ. Дәүләтшина. *Аҡһаҡ ултырмаҫ, **һаҡау** тик тормаҫ.* Әйтем.

**һаҡау II** *и.* Тамаҡ аҫты шешеп, танауынан ҡан килтерә торған йоғошло йылҡы ауырыуы. ***Һаҡау** сыҡҡан.* ▬ [*Гөлбикә*:] *Күрән бейәнең ҡолағына **һаҡау** булған.* Д. Юлтый.

**һал I** *и.* Һыуҙан ағыҙыу өсөн буй-буй теҙеп, бер нисә быуын итеп бәйләнгән бүрәнәләр. *Ике быуынлы **һал**. **Һал** ағыҙыу. **Һал** төшөрөү.* ▬ *Йылғаның тар урындарын, ағын, шарлауыҡлы, сүгермәкле ерҙәрен үтәһең. **Һал** бөгөлөп китә. Ана шунда **һалды** һаҡларға, ҡойроҡто оҫта тоторға* кәрәк. С. Агиш.

**һал II** *ҡ.* 1. Берәр нәмәне билдәле бер урынға ятҡырып ҡуйыу. *Китапты өҫтәлгә **һалыу**.* ▬ *Әйләр хандың шымсылары Алпамышаның аяҡ-ҡулын сынйырҙар менән сырмап, оҙон кукрәк арбаға **һалып**, атын етәкләп алып киткәндәр, ти.* Әкиәттән.

2. Нимәнеңдер эсенә урынлаштырыу. *Аҡсаны кеҫәгә **һалыу**.* ▬ *Хасбулат олатай ... ҡомартҡыларын һандыҡҡа кире **һала** башланы.* З. Биишева.

3. Һаҡлау өсөн тапшырыу (банкыға һ. б.). *Һаҡлыҡ банкыһына **һалыу**.*

4. Билдәле бер маҡсатта ниндәйҙер бер урынға урынлаштырыу. *Больницаға **һалыу**.* ▬ *Шешеү, гангренаға әйләнеүҙән шикләнеп, врач мине госпиталгә **һалды**.* Ғ. Әмири.

5. Өҫкә, яурынға һ. б. ҡуйыу (кейем-һалымды). *Хәйҙәр үҙенең пинжәген дә минең яурыныма **һалды**.* М. Тажи.

6. Кейемгә нимәлер өҫтәү, беркетеү, ҡуша тегеү. *Итәккә таҫма **һалыу**.*

7. Төҙөү, ҡороу, эшләү (йорт-ҡаралтыларҙы, хужалыҡ ҡоролмаларын һ. б.). *Күпер **һалыу**. Өй **һалыу**.* ▬ *Сәиҙел **һала** завод нигеҙен, техник булып корпус төҙөшә.* Ғ. Сәләм.

8. Ниндәйҙер бер билдә, тамға һ. б. ҡуйыу, яһау. *Билге **һалыу**. Инәү **һалыу**. Тамға **һалыу**.*

9. Әҙерләп, бешерергә ҡуйыу (аш-һыуҙы). *Аш **һалыу**. Ит **һалыу**.*

10. Һауытҡа бүлеп ҡойоу (аш-һыуҙы). *Тарелкаға аш **һалыу**.*

11. Аш-һыуға нимәнелер өҫтәп ҡушыу, ҡатнаштырыу. *Ашҡа тоҙ **һалыу**. Сәйгә шәкәр **һалыу**.*

12. Ашамлыҡты алдына ҡуйып биреү, һибеү, ташлау (мал, ҡош-ҡорттарға ҡарата). *Малға бесән **һалыу**. Тауыҡҡа ем **һалыу**.*

13. Аулау, тотоу, эләктереү өсөн ҡороп ҡуйыу (ау, ҡапҡан, ҡармаҡты). *Бүрегә ҡапҡан һалыу.* ▬ *Ҡапҡан ғына һалдым ай күк боҙға ҡама йәнлек менән ҡондоҙға.* Халыҡ йырынан.

14. Билдәле бер маҡсатта берәй ойошмаға, халыҡҡа хөкүмәт йәһәтенән һалым, яһаҡ һ. б. билдәләү һәм шуға мәжбүр итеү. *Һалым һалыу. Штраф һалыу.*

15. Ситкә нимәнелер почта аша ебәреү. *А́кса һалыу. Посылка һалыу. Хат һалыу.* ▬ *Хаттар ғына һалһаң, һал заказной, заказной ҙа хаттар тиҙ урай.* Халыҡ йырынан.

16. Өҫ-башҡа, аяҡ-ҡулға кейгән кейемде, таҡҡан нәмәне сисеү. *Итекте һалыу. Кейемде һалыу. Кәпәсте һалыу. Сәғәтте һалыу.*

17. Ваҡытынан алда үле көйө тыуҙырыу (хайуандарға ҡарата). *Быҙау һалыу. Ҡолон һалыу.*

18. Балалағандан һуң бала ятҡылығын төшөрөү. *Сыуын һалыу.*

19. Иғтибар менән ҡабул итеү, үҙеңдә һаҡлау (һүҙ, кәңәш һ. б. ҡарата). *Был һүҙҙәрҙе онотма, күңелеңә һал.* М. Ғафури.

20. Кешелә ниндәйҙер тойғо уятыу (дәрт, илһам, мөхәббәт һ. б. ҡарата). *Йөрәккә дәрт һалыу. Күңелгә шом һалыу.*

21. Билдәле бер тәртипкә, ыңғайға килтереү (эш-хәл, торошто). *Донъяны йайға һалыу. Тормошто рәткә һалыу.*

22. Көйгә яраҡлаштырыу, кой менән башҡарырлыҡ итеү (йырҙы, шиғырҙы). *Шиғырҙы көйгә һалыу.*

23. Күрәҙәлек итеү маҡсатында кәрт, ноҡот һ.б. нәмәләрҙе билдәле тәртипкә теҙеү. *Кәрт һалыу. Ноҡот һалыу.*

24. Хәл ҡылымдарҙың ***-а, -й*** формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәттең тиҙ башҡарылыуын белдерә. *Ашай һалыу. Китә һалыу. Ҡайта һалыу.* ▬ *Гөлйөҙөм инәй тиҙ генә һыу йылыта һалды.* Ғ. Шәрипов.

25. Хәл ҡылымдың ***-п*** формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәттең ҡапыл, киҫкен башҡарылғанын белдерә. *Һүтеп һалыу. Әйтеп һалыу.* ▬ *Башҡа эшселәр ҙә сығып,*

*администрацияны, профсоюзды тетеп **һалды**.* Х. Мохтар.

**һалым I** *и.* Берәр ойошманан, халыҡтан һ. б. алыу өсөн хөкүмәт тарафынан билдәләнгән түләм аҡса йәки башҡа нәмә; яһаҡ. ***Һалым** түләү.* ▬ *Абдулла ахун ил аралап, **һалым** һалған һәр йортҡа.* Халыҡ йырынан.

**һалым II** *бәйл. диал.* Табан, тартым. *Киҫкә **һалым**. Таңға **һалым**. Яҙға **һалым**.*

**һан I** *и.* 1. Кемдеңдер йәки нимәнеңдер берәмек иҫәбе. *Халыҡ **һаны**.* ▬ *Куктә йондоҙҙар **һаны** күбәйҙе.* С. Агиш.

2. *мат.* Берәмекле иҫәп миҡдарын белдергән төшөнсә. *Аралаш **һандар**. Иоп **һан**. Таҡ **һан**.*

3. Шул төшөнсәне аңлатҡан билдә. *Хаят йөҙгә тиклем булған **һандарҙы** яңылышып-яңылышып уҡып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

4. *грам.* Нәмәне иҫәп яғынан аныҡлаған һүҙ төркөмө. *Ҡушма **һандар**. Төп **һандар**. Ябай **һандар**.*

5. *лингв.* Йәнле һәм йәнһеҙ нәмәләрҙең берлеген һәм күплеген морфологик юл менән белдергән ғрамматик категория. *Берлек **һаны**. Күплек **һаны**.*

**һан II** *и.* Тейешле баһа, ихтирам, иғтибар. [*Рәхимә:*] *Күҙгә ҡарап тороп миңә һүҙ әйтәһең, башҡаһына ни **һан**.* Һ. Дәүләтшина. ***Һан**тыйға **һан** юҡ.* Мәҡәл.

**һан III** *и.* Кеше һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең кәүҙәһенең бер өлөшө. *Ал **һан**. Арт **һан**.* ▬ *Эт арт **һанын** күтәрә алмай ине.* Р. Низамов.

**һандал I** [*фарс.*] *с.* Үтә ныҡ сағыу ал төҫтәге. ***Һандал** күлдәк. **Һандал** таҫма. **Һандал** яулыҡ.*

**һандал II** *и.* Тимерлектә тимер сүкеү өсөн ҡулланылған ҙур түш. ***Һандалға** һалыу. **Һандалда** сүкеү.* ▬ *Хужа землянканың алыҫ мөйөшөндәге **һандалда** ҡыҙған тимерҙе йән асыуы менән сүкей ине.* Ә. Вәли.

**һандыҡ I** [*ғәр.*] *и.* Кейем-һалым һ. б. кәрәкле нәмәләрҙе һаҡлай торған ҡапҡаслы ҙур ҡумта. *Тимер **һандыҡ**. Семәрле **һандыҡ**.* ▬ *Түрҙә — ҡалайлы иҫке **һандыҡ**, уның өҫтөндә бер-ике башҡорт балаһы, туҙып бөткән ҡораҡлы юрған.* Ғ. Дәүләтшин.

**һандыҡ II** *и.* Мал ашағандан ҡалған эре-торо бесән йәки һалам. *Әбделхаҡ аҙбарҙағы бесән **һандығын**, тиҙәктәрҙе утынлыҡҡа көрәп сығарып, ут төрттө.* Ж. Кейекбаев.

**һанһыҙ I** *с.* Һанап бөтөргөһөҙ; иҫәпһеҙ, күп. ***Һанһыҙ** мал.* ▬ *Булған илдең батыр улдары. ... Ғүмер буйы йөрөп яуҙарҙа, йыйған улар **һанһыҙ** дуҫтарҙы.* Салауат Юлаев.

**һанһыҙ II** *с.* Иҫәпкә, һанға алырлыҡ түгел; баһаһы юҡ, ҡәҙерһеҙ. *Унһыҙ донъя **һанһыҙ**.* Әйтем.

**һап I** *и.* Эш ҡоралдарының тотоу өсөн ҡулайлаштырылған өлөшө. *Балта **һабы**. Бысаҡ **һабы**. **Һап** ҡуйыу.* ▬ *Ҡарт арбаға менеп ултырҙы ла сыбыртҡы **һабы** менән бер ослоҡай тауға төртөп күрһәтте. — Анау тауҙы күрәһеңме, ҡыҙым?* М. Тажи. *Көмөш кенә ҡашыҡ, **һабы** нәҙек, тотмаһаңа — ҡулың бешерер.* Халыҡ йырынан. *Балта **һабы** беләктән башлана, уткерлеге — йөрәктән.* Әйтем. *Ҡатыным улде — ҡамсымдың **һабы** һынды.* Әйтем. ***Һабы** тура килһә — йәбе килмәй, йәбе килһә — **һабы** килмәй.* Әйтем.

**һап II** *ымл.* Нимәнелер күтәргән йәки тартҡанда көс биреү өсөн әйтелә. — *Шәмсиҙе төшөрөгөҙ, бейеһен! — тине нәҙек тауыш менән Һажәр. — **Һап, һап!** — тип ярҙамлаша башҡалар.* Ғ. Хәйри.

**һап III** *ҡ.* Яңы баш ялғау (аяҡ кейеменә). *Итеккә баш **һабыу**. **Һапҡан** итек.* ▬ *Мин китер ваҡыт еткәс, Ғәлимә әбей ойоҡҡа баш **һабып** бирҙе.* М. Ғафури.

2. Эләгеү, йәбешеү. ***Һабып** барыу.*

**һар I** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған ҡарғанан ҙурыраҡ, ҡорһаҡ аҫты ҡара менән һор аралаш буй һыҙатлы, ҡыҫҡа, түңәрәк ҡойроҡло йыртҡыс ҡош (урманда, ағас башында оялай). *Һауаларҙан осҡан әй **һар** микән, аяҡҡаиҙарын күргән бар микән.* Халыҡ йырынан.

**һар II** *и.* Һамаҡ рәүешендә еңел көй менән әйтелгән йыр. ***Һар** һарнау.*

**һарай I** [*фарс.*] *и.* 1. Батшалар, хандар, дәүләт башлыҡтары тора торған йорт. *Батша **һарайы**.* ▬ *Хан ҡыҙҙары ҡайта торһон, Алпамыша ята торһон, беҙ Барсын-*

*һылыуға киләйек, Бүләр хан **һарайына** инәйек.* «Алпамыша».

2. Махсус йәмәгәт ойошмаһы урынлашҡан ҙур бина. *Культура **һарайы**. Пионерҙар **һарайы**. Спорт **һарайы**.*

**һарай II** [*фарс.*] *и.* Мал-тыуар тора торған йорт ҡаралтыһы; кәртә, ҡура. *Ат **һарайы**. Мал **һарайы**.* ▬ *Егет ... айғырҙы **һарайына** алып ҡайтып, ябып ҡуйған.* Әкиәттән.

**һарҡ I** *ҡ.* Әҙләп кенә йыйылып сығып ағып тороу. *Үҙе* [*Әлемғолов*] *бик ябай кейенгән, ауыр кирза итектәренән иҙәнгә һыу **һарҡа**.* Р. Низамов. *Түбәләрҙән **һарҡып** тамалар яҙҙың һуңғы тамсы һыуҙары.* Ғ. Амантай.

**һарҡ II** *ҡ.* 1. Түбәнгә ауышыу; түбәнләү (ҡояш, ай тураһында). *Ҡояш тауға **һарҡҡанда** бөтә ялан буш ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

2. Йыл, кон, тәүлек билдәле бер ваҡытҡа, миҙгелгә табан йүнәлеш алыу, үҙгәреү. *Кон кискә **һарҡты**. Көҙгә **һарҡҡан** мәл. Яҙға **һарҡыу**.* ▬ *Ҡояш кискә **һарҡҡан**, ә көн һаман томра ине.* Я. Хамматов.

**һармаҡ I** *и.* Еңел, етеҙ көйгә йырланған йыр, таҡмаҡ. ***Һармаҡ** әйтеү.* ▬ *Башҡорт фольклорында әйтем төркөмөндә ... 13–14 жанр бар. Улар: ... әйтемсәк, һамаҡ, **һармаҡ**, уйынлы йыр, таҡмаҡ.* Ғ. Амантай.

**һармаҡ II** *и.* Алйот, йүләр. [*Даһи:*] ***Һармаҡ** һин, апай, кыуанырға кәрәк, ә һин бәлшәйәһәң.* Ш. Насыров.

**һары I** *с.* 1. Ҡыҙыл менән йәшел араһындағы, көҙгө ҡайын япрағы, алтын төҫөндәге төҫ спектрында иң төп төҫтәрҙең береһе. *Аҡһыл **һары**. Ҡыҙыл **һары**. Сей **һары**. **Һары** буяу. **Һары** күлдәк.* ▬ *Сәғиҙә, санала ятҡан ҙур яғалы **һары** тунды кеиҙе лә Гөлнур менән хушлашты.* М. Тажи. *Сабыр төбө **һары** алтын.* Мәҡәл.

2. Аҡһыл асыҡ төҫтәге (кешенең тәненә, сәсенә ҡарата). ***Һары** мыйыҡ.* ▬ *Бында* [*залда*] *бөтөнләй минең өсөн ят донъя. Әллә ниндәй күк күҙле, **һары** сәсле егеттәр, ҡыҙҙар теҙелешеп ултырғандар.* Т. Йәнәби. *'Кара кешенең тире сыҡҡансы, **һары** кешенең йәне сығыр.* Мәҡәл.

3. Йәнлек, ҡош-ҡорт, үҫемлектең төҫө буйынса төрөн билдәләгәндә ҡулланыла. ***Һары** ерек. **Һары** ҡамыш. **Һары***

*лилиә.* ***Һары*** *шәшке.* ▬ *Ҡолас йыуанлыҡ ҡара ерек менән бер рәттән һирәкләп* ***һары*** *ерек ... ултыра.* Ә. Вахитов.

**һары II** *и.* 1. Тәнде һаргайта торған бауыр ауырыуы. ***Һары*** *менән ауырыу.*

2. *күсм.* Йөҙгә моңһоу төҫ биргән ауыр кисереш, һағыш, моң-зар. *Хәсрәт* ***һарыһы. Һарыға*** *һабышыу.* ▬ *Нурлы йөҙөң* ***һары*** *баҫҡан, Барсынһылыу.* «Алпамыша». *Илкәйемде һағыныптүйлай-уйлай, йөрәккәйем башын* ***һары*** *алған.* Халыҡ йырынан.

**һары III** *ҡ.* 1. Бер ергә йыйылып ҡуныу. *Ағас баштарына* ***һарыған*** *күстәрҙе тубалға тултырыуҙа атайға ярҙам итеүҙәр тағы ла күңелле ине.* М. Ғафури. *Умартанан сыҡҡан күс баҡса уртаһындағы оҙон ҡарамаға* ***һарый*** *башланы.* Ж. Кейекбаев. *Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, күсе шунда* ***һарыр.*** Әйтем.

2. Күңел менән тартылып, яҡын ылығыу; һарылыу. *«Ниңә ҡайттың?» — тиһә,* ***һарып*** *әсәй, «һағындырҙы һине», — тиермен.* Ғ. Амантай.

**һары IV** *ҡ.* Кесе ярау итеп, билге һалыу (эт, бүре һ. б. ҡарата). *Бүре мискәгә* ***һарымаҡ*** *итте, ти. Егет мискә тишегенән ҡулын тыҡҡан да, тотҡан да алған тегенең ҡойроғонан.* Әкиәттән.

**һарыса I** *и.* Көҙ миҙгеленең япраҡтар һаргая башлаған мәле. *Күптән йәйге селлә аиҙары үтеп киткән һәм тышта емеш-еләк вәғәҙә итеүсе* ***һарыса*** *айы ла бөтөп бара ине.* К. Мәргән.

**һарыса II** *с.* Һары төҫтәге. ***Һарыса*** *уҡ атымды бәйләп ҡуйҙым һаҙ буиҙары һары ла ҡамышҡа.* Халыҡ йырынан.

**һау I** *с.* Ауырыуы юҡ, сырхауһыҙ; сәләмәт, сирле түгел. ***Һау*** *кеше.* ▬ *Ҡыҙыҡ. Кеше шулай* ***һау*** *сағында ғына үҙен ғәжәп көслө, бөтә донъяның хужаһы кеүек тоялыр инде.* Р. Солтангәрәев.

**һау II** *ҡ.* 1. Имсәкте ҡыҫып елендәге һөттө ағыҙып сығарыу. *Бейә* ***һауыу.*** *Ҡул менән* ***һауыу.*** *Һыйыр* ***һауыу.*** ▬ *Әсәйем минең эшләй фермала, ун биш һыйырҙы бер үҙе* ***һауа.*** К. Кинйәбулатова. *Йәйләүҙәргә барҙым, бейәләр* ***һауҙым,*** *башкүнәккәйҙәрҙе ҡулға алып.* Халыҡ йырынан.

2. *күсм. һөйл.* Кешене йәки берәр ойошманы һ. б. табыш сығанағы итеп файҙаланыу. *Муллағәле баярҙың уйнаштан тыуған малайы менән дуҫлашып алған икән дә, уныһы сепелдек күҙле әшнәһен **һауырға** тотонған.* Ф. Иҫәнғолов.

**һауа I** [*ғәр.*] *и.* 1. Кеше, хайуандар һәм үҫемлектәрҙең тереклегә өсөн кәрәк булған, күбеһенсә азот менән кислородтан торған ерҙең атмосфераһындағы газдар ҡатышмаһы. *Саф **һауа**. Тонсоу **һауа**.* ▬ *Йәшел урман **һауаһы** тәндең яҡшы дауаһы.* Ҡ. Даян. *Саф **һауа** тәнгә дауа.* Әйтем.

2. Ер өҫтөндәге иркен бушлыҡ, арауыҡ, күк; күк йөҙө. ***Һауаға** осоу.* ▬ ***Һауаға** атҡан уҡҡайым тау-урмандар аша уҙһасы.* Салауат Юлаев. *Ҡош **һауала**, ат **тауҙа**, егет **яуҙа** һынала.* Мәҡәл.

3. Билдәле бер ваҡыттағы көн торошо (йылы, һыуыҡ, ҡар, ямғыр һ. б.) *Шушенскийҙа ай ҙа, йондоҙ ҙа юҡ, **һауа** китте ҡырҡа боҙолоп.* Р. Ниғмәти. *Шунан **һауа** томраланып киткән, ти.* Әкиәттән.

**һауа II** *и.* Ғорурлыҡ, эрелек, маһайыу, маҡтаныу тойғоһо. *Йәшлек **һауаһы**.* ▬ *Йөрөйөм әллә кем булып ... бригадир, значит, мин түрә кеше! Тфү! Йәшлек **һауаһы** шулай икән ул ана.* И. Ғиззәтуллин.

**һең I** *и. диал.* Йылым. *Атаҡайымдың аттары **һең** алғанда сыҡҡан балыҡтай.* Сеңләүҙән.

**һең II** *ҡ.* 1. Берәй нәмәнең эсенә үтәнән-үтә тартылыу, үтеп инеү, һурылыу (шыйыҡлыҡ йәки газ хәлендәге нәмәгә ҡарата). *Еҫ **һеңә**. Төтөн **һеңә**.* ▬ *Бер гөл булып ҡалҡты таңда ергә кисә **һеңгән** тамсы.* Р. Назаров. *Баҫыуҙарға **һеңә** ҡар һыуы.* Н. Иҙелбай.

2. Ашаған, эскән аҙыҡ үҙләштерелеү. *Көнөнә бер елдереп, әҙерәк тирләтеп алмаһаң, ашағаны тәненә **һеңмәй**.* Б. Бикбай.

3. *күсм.* Күңелдә ныҡлап урынлашыу, иҫтә ныҡ ҡалыу. *Йөрәккә **һеңеү**. Хәтергә **һеңеү**.* ▬ *Бала саҡтан күңеленә **һеңеп** ҡалған.* Ғ. Вәлиев.

4. *күсм.* һөйл. Урланып үҙләштерелеү. *Мәсет-мәҙрәсә килемдәре, хәйер-саҙаҡа уның* [*Әптелғәлимдең*] *кеҫәһенә инеп, ...* ***һеңә*** *бара.* Ф. Иҫәнголов.

5. *күсм. һөйл.* Лапашып, аҫҡа батыу. *Ғаббас мулланың бер мөйөшө сереп, ергә* ***һеңгән*** *мәҙрәсәһе мәктәп өсөн яраҡһыҙ булып сыҡты.* З. Биишева. *Урал уны ҡапыл элеп алып, йән асыуы менән шул хәтле атып бәрҙе, ти, дейеү ергә* ***һеңде*** *лә ҡуйҙы, ти.* «Урал батыр».

**һеркә I** *и.* 1. Әсе, ҡырҡыу еҫле, төҫһеҙ шыйыҡлыҡ (ашһыуҙа ҡулланыла). *Беҙҙең күрше Сәлимә яңылыш* ***һеркә*** *эсеп ағыуланып, өс көн ятты.* Ғ. Ғүмәр.

2. *һөйл.* Шыттырылған арпаны ҡайнатып, бал менән әсетелеп, дауа итеп ҡулланылған шыйыҡлыҡ. ***Һеркәне*** *сиҡан, шешек сыҡҡанда эсәләр.*

**һеркә II** *и.* Сәскәле үҫемлектәрҙең саң кеүек ваҡ ҡына аталыҡ орлоғо. *Юлыбыҙға* ***һеркә*** *осора ҡалды арыштарҙың оҙон керпеге.* М. Кәрим. *Арыштар* ***һеркәлә*** *ултыра, һабан ашлыҡтар ҙа күптән ер ябып, быуынға һикерә башланы.* Ғ. Шәрипов.

**һип I** *и.* Өҫтәлгән өлөш, өҫтәмә. ***Һип*** *өсөн бүрәнә әҙерләү.*

**һип II** *ҡ.* 1. Өҫтән сәсрәтеп һирпеү (ваҡ, бөр төрлө нәмәне). *Ем* ***һибеү.*** *Ҡом* ***һибеү.*** *Тоҙ* ***һибеү.*** ▬ *Был ҡатын көлдө яулығына төрөп ала ла тирә-яғына* ***һибеп*** *ебәрә.* Әкиәттән.

2. Төрлө яҡҡа таратыу, бөркөү (нур, яҡтылыҡ һ. б. нәмәне). *Иртә таңда* ***һипкән*** *нуры менән ҡояш сайҡай тағы ер-күген.* Ғ. Амантай.

3. Сәсрәтеп, өҫтән түгеү, ҡойоу (шыйыҡ нәмәне). *Утҡа кәрәсин* ***һибеү.*** ▬ *Һыу тултырып алып сыҡтым, иҙәнгә* ***һиптем*** *дә, щётка менән һәйбәтләп кенә һеперел алдым.* С. Агиш.

**һөҙ I** *ҡ.* Мөгөҙ менән төртөү, төкөү (ғәҙәттә һыйыр малына ҡарата). *Йәтим ҡалған быҙау килеп, баҡырып һөт һораһа, һыйыр ҙа уны ҡабул итмәй,* ***һөҙөп*** *ебәрә.* М. Ғафури.

**һөҙ II** *ҡ.* 1. Шыйыҡ нәмәне таҙартыу өсөн ниҙер аша үткәреү. *Ҡымыҙҙы* ***һөҙөү.*** *Һурпаны* ***һөҙөү.*** ▬ *Гөлниса инәй яңынан һөт* ***һөҙөргә*** *тотондо.* Ә. Зәйнуллин.

2. Йылым йәки башҡа бер нәмәне һыуҙан тартып ниҙер тотоу. *Балыҡ* ***һөҙөү.*** *Һөҙгө менән* ***һөҙөү.*** ▬ *Малайҙар йыйнаулашып ҡылыла ыштан менән балыҡ* ***һөҙәләр.*** Ғ. Амантай.

3. Ниҙер эҙләп, бер ерҙе ҡалдырмай тотош ҡыҙырып ҡарау (гәҙәттә урманға ҡарата). *Байҙар, батша һалдаттары был урманды нисәмә тапҡыр* ***һөҙөп*** *сыҡҡандар, әммә Хәбир батырҙы таба алмағандар.* З. Биишева.

4. Тотош рәттән ныҡ ҡарау; тирә-яҡты байҡау. *Әхмүш асыулы күҙҙәре менән бөтә йортто* ***һөҙөп*** *сыҡты.* Д. Юлтый.

**һөйкәлеш I** *и. грам.* Эш-хәлдең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен белдергән ҡылым категорияһы. *Хәбәр* ***һөйкәлеше.***

**һөйкәлеш II** *ҡ.* Бер-береһенә терәлеү, һөйкәлеү. [*Ун биш-егермеләп кеше*] *сисенмәй, иҙәндә бер-береһенә* ***һөйкәлешеп*** *ултыралар. Улар үҙ-ара ниҙер лыбырлашып... алалар.* Һ. Дәүләтшина.

**һөйләш I** *и. лингв.* Территориаль диалекттың үҙенә генә хас үҙенсәлектәре менән билдәләнгән айырым бер төрө. *Көнсығыш диалекттың арғаяш* ***һөйләше.*** *Көньяҡ диалекттың дим* ***һөйләше.*** ▬ *Кулдәргә һәм улар тирәһендә тупланған тормошҡа... бәйле тыуған һүҙ байлығы халыҡтың* ***һөйләш*** *телендә һәм ижадында бик ныҡ сағыла.* К. Мәргән.

**һөйләш II** *ҡ.* 1. Тел ярҙамында уй-фекерҙе әйтеп аралашыу. *Йыйылып* ***һөйләшеү.*** *Дуҫтарса* ***һөйләшеү. Һөйләшеп*** *ултырыу.*

2. Һүҙҙәр әйтә белеү, тел менән аңлатыу (балаға ҡарата). ***Һөйләшә*** *башлау.* ***Һөйләшә*** *белеү.* ▬ ***Һөйләшкән*** *бер йәшендә Күҫәк бала, әсәһенән яңы тыуған имсәк бала.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

3. Ниндәйҙер бер телде белеү, шул телдә аңлашыу. *Башҡортса* ***һөйләшеү.*** ▬ *Ғәмле ҡыҙ Ғәлимә, күҙ ҡараш-ҡайҙарың әҙәпсә,* ***һөйләшеүкәйҙәрең*** *гәрәпсә.* Халыҡ йырынан.

4. Ике яҡҡа ҡағылышлы мәсьәлә буйынса уртаҡ фекергә килер өсөн һүҙ алып барыу. ***Һөйләшеп килешеү. Һөйләшеп эшләү.*** ▬ [*Мәғфирә иренә:*] *Булған аҡсаң* ***һөйләшкәс***, *әллә мәһәренә етер ҙә һуң, туйына кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**һөйһөн I** *и. этн.* Туй мәһәренән тыш, ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә һыйлау өсөн кейәү килтергән мал. ***Һөйһөнгә*** *һарыҡ биреү.*

**һөйһөн II** *ҡ.* Күңелгә хуш күреү, яҡшы күреү, яратыу, хушһыныу. *Жандармдар итте бик* ***һөйһөнөп*** *ашаны, баллап сәй эсте.* Ж. Кейекбаев. *Рәсимә һуңғы көндәрҙә телһеҙ ҡыҙҙы* ***һөйһөнмәй*** *башланы.* Ғ. Вәлиев. *Был һаҙамыҡ, тонсоу урынды ҡоштар ҙа бик* ***һөйһөнөп*** *етмәй.* Ә. Вахитов.

**һөйәк I** *и.* 1. Умыртҡалы хайуандарҙың һәм кешенең һөлдәһен тәшкил иткән ҡаты өлөшө. *Арҡа* ***һөйәге.*** *Бот* ***һөйәге.*** *Кеше* ***һөйәге.*** *Ҡоймос* ***һөйәге.*** *Мал* ***һөйәге.*** *Янбаш* ***һөйәге.*** ▬ *Биттәр соҡорайып эскә батты, яңаҡ* ***һөйәктәре*** *беленде.* М. Ғафури. *Кешеләр ҡояшҡа янып ҡарайып, ябыҡлыҡтан сикә* ***һөйәктәре*** *сурайып сыҡҡан биттәрен алға һуҙып, үҙҙәренең сираттарын көтәләр.* Һ. Дәүләтшина.

2. Ит түшкәһенең бер киҫәге. ***Һөйәк*** *мөнйөү.* ▬ *Дуңғыҙҙан бер ҡыл, байҙан бер* ***һөйәк.*** Әйтем. ***Һөйәк*** *сәйнәп май сыҡмай.* Әйтем. *Эткә* ***һөйәк*** *ташлаһаң, шыңшымаҫ.* Әйтем.

3. Кеше тәненең һәм уның төрлө өлөштәренең төҙөлөшө; буй-һын, кәүҙә. *Аҫыл* ***һөйәк.*** *Таһыл* ***һөйәк.*** ▬ [*Ҡотлобай:*] *«Был кем кәләше икән? Һай, һай аҫыл* ***һөйәк,*** *һылыу ҡатын», тип һоҡланды* [*Гөлйөҙөмгә*]. Һ. Дәүләтшина. [*Ҡыҙ — атаһына:*] *Алтмыш йәшлек ҡартҡа бирҙең* ***һөйәгем*** *хурланһын тейеп.* Сеңләүҙән. *Аҫыл* ***һөйәк*** *ҙур булмаҫ.* Мәҡәл. *Ата-әсә алтын* ***һөйәк.*** Мәҡәл. *Иылы* ***һөйәк*** *һындырмай.* Әйтем. *Үз* ***һөйәгең*** *үҙеңә ауыр түгел.* Әйтем. *Үз* ***һөйәгем*** *үҙемә яҡын.* Әйтем.

4. Үлгән кешенең кәүҙәһе; мәйет. *Ябырылып яу килгәндең* ***һөйәге*** *ҡалған Урал тау, айбарлаған батырҙарҙың* ***төйәге*** *булған Урал тау.* Ҡобайырҙан. *Ерен-һыуын*

*һаҡлап ҡорбан булған, шунда* [*Урал тауында*] *ята батырҙар* ***һөйәге***. Халыҡ йырынан.

**һөйәк II** *и*. Емештең эсендәге ҡаты көплө орлоҡ. *Муйыл* ***һөйәге***. *Өрөк* ***һөйәге***. *Сейә* ***һөйәге***.

**һөйән I** *и*. Ҡабығы һыҙырылған йыуан йүкә ағасы. ***Һөйәндән*** *яһау*.

**һөйән II** *ҡ*. Аушая, ҡыйшая биреп, нимәгәлер терәлеү; һөйкәлеү (кәүҙә, ағас һымаҡ баҫып торған нәмәләргә ҡарата). *Ағасҡа* ***һөйәнеү***. ***Һөйәнеп*** *тороу*. ***Һөйәнеп*** *ултырыу*. ▬ *Ҡуш ҡарағаиҙың береһе йәҙрә ярылыуҙан шарт һына, ләкин ул ергә аумай, һау ҡарағайға* ***һөйәнеп*** *баҫҡан килеш ҡала*. К. Әхмәтйәнов. *Йәш ағасҡа* ***һөйәнеп***, *ҡыу ағас ҡырҡ йыл ғүмер иткән*. Мәҡәл.

**һөр I** *ҡ*. Һуҡа-һабан менән ер өҫтөн аҡтарып йомшартыу. *Ер* ***һөрөү***. *Пар* ***һөрөү***. *Туңға* ***һөрөү***. *Тәрән итеп* ***һөрөү***. *Һабан* ***һөрөү***. ***Һөргән*** *ер*. ▬ *Мең-мең тракторҙар* ***һөрөп*** *йөрөй һинең ҡырыңды*. Ғ. Сәләм.

**һөр II** *ҡ*. 1. Дөрләтеп, ҡыҙыулатып ҡыуыу. *«Телевизор ҡарай торған ваҡыт түгел, ана тышта уйнағыҙ!»* — *тип, Йәмиләнең әсәһе баҫҡыстан* ***һөрә*** *лә төшөрә*. Р. Низамов.

2. Яза рәүешендә алыҫ төпкөлгә оҙатыу; һөргөнгә ебәреү. *Хаҡлыҡ әҙләгәне, кешеләргә бәхет теләгәне өсөн уны* [*кешене*] *иленән* ***һөргәндәр***. Ә. Чаныш.

**һуғыш I** *и*. 1. Ил-дәүләт йәки ижтимағи синыфтар араһындағы ойошҡан ҡоралды көрәш. *Бөйөк Ватан* ***һуғышы***. *Донъя* ***һуғышы***. *Империалистик* ***һуғыш***. ***Һуғыш*** *асыу*. ***Һуғышҡа*** *китеү*.

2. Талаш-тартыштан сыҡҡан үҙ-ара туҡмаш. ***Һуғышып*** *йөрөү*. ▬ *Бәкер... шаҡмандырҙы аҡларға керешә. Китә* ***һуғыш***. Б. Бикбай.

**һуғыш II** *ҡ*. 1. Берәй ил, халыҡ менән һуғыш алып барыу. [*Һалдат:*] *Ана япон һуғышы булып алды. Унан башҡа ла беҙҙең Рәсәй ғүмер буйы* ***һуғышҡан***. Д. Юлтый.

2. Үҙ-ара туҡмашыу. *Ҡанға туҙып* ***һуғышыу***. ***Һуғышып*** *китеү*. ▬ *Ағай-эне* ***һуғышыр***, *атҡа менһә, ярашыр*. Мәҡәл. *Ике ҡарға* ***һуғышһа***, *өсөнсөгә ем була*. Мәҡәл.

**һуйыл I** *и.* Оҙон һығылмалы таяҡ. *Һәр икебеҙ ҡулға оҙон* ***һуйыл*** *алып, бүреләрҙе ҡубырғытырға йыйындыҡ.* Й. Солтанов. *Һуҡмаҫ* ***һуйыл*** *күтәрер.* Мәҡәл.

**һуйыл II** *ҡ.* Ҡубып һыҙырылыу. *Йорт ҡырындағы ҡарт ҡайындың шаҙра һабаҡтары* ***һуйылған.*** Ғ. Хәйри. *Таштан йүкә* ***һуйылмай.*** Әйтем.

**һуйыш I** *и.* Аяуһыҙ ҡан ҡойош, үлтереш. *Көслө* ***һуйыш*** *булған.* ▬ *Ерҙә* ***һуйыш,*** *һуғыш кәрәк түгел, беҙ тыныслыҡ талап итәбеҙ!* А. Иғебаев.

**һуйыш II** *ҡ.* Үҙ-ара сәнсешеү. ***Һуйышып*** *бөтөү.* ▬ *Шул тиклем ярһып* ***һуйышҡан*** *Дәүләтбай ағай — офицерҙы уртаға ярып төшөргән.* Ә. Вахитов.

**һуҡ I** *ҡ.* 1. Ҡул менән йәки башҡа берәр нәмә менән ныҡ ҡағыу; бәреү. *Арҡаға* ***һуғыу.*** *Йыға* ***һуғыу.*** *Ҡул менән* ***һуғыу.*** *Ныҡ* ***һуғыу.*** *Өҙә* ***һуғыу.*** ▬ *Ул [Янһары] айыуҙарҙы шарт та шорт* ***һуғып,*** *ҡыуып алып киткән.* Әкиәттән.

2. Ерғә йәки башҡа бер нәмәгә ҡуша бәреү. *Айыуғолаҡ шунда уҡ Имән батырҙы күтәреп* ***һуҡҡан.*** Әкиәттән.

3. Тауыш сығарыу өсөн нимәгәлер йыш-йыш ҡағыу, бәреү. *Барабан* ***һуғыу.*** *Ҡыңғырау* ***һуғыу.*** *Саң* ***һуғыу.*** ▬ *[Ҡарт], ҡайтып йоҡларға ваҡыттыр инде тип, шаҡылдағын* ***һуға-һуға,*** *кире китеп барҙы.* М. Тажи.

4. Ваҡыт иҫәбенсә дыңлатып ҡағыу, тауыш сығарып бәрелеү (сәғәткә ҡарата). *Ҡала сәғәте бөтә ҡаланы яңғыратып, унды* ***һуҡты.*** И.Насыри.

5. Һулҡ-һулҡ итеп ҡағыу, тибеү (йөрәк, тамырға ҡарата). *Минең тәндәр эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Йөрәк тә бер аҙға тиклем дөпөлдәтеп* ***һуғып*** *торҙо.* Т. Йәнәби.

6. Һыбай баҫтырып барып суҡмар менән йәнлек аулау. *Төлкө* ***һуғыу.*** ▬ *Буранбай үҙ ғүмерендә етмешләп кенә айыу алған, бүре* ***һуҡҡан.*** Ж. Кейекбаев.

7. Ҡалыпҡа һалып ниҙер яһау. *Кирбес* ***һуғыу.*** *Тиҙәк* ***һуғыу.***

8. *күсм.* Таныҡлыҡ өсөн ниндәйҙер билдә һалыу; баҫыу. *Мисәт* ***һуғыу.*** ▬ *[Өйҙөң] өрлөгөнә атай ҡулы буйҙан-буйға тамға* ***һуҡҡан.*** М.Кәрим.

9. Бәреп йәки төртөп уйнау. *Бура туп **һугыу**. Сәкән **һугыу**. Туп **һугыу**.* ▬ *Малай-шалай сүрәкә **һуга**, йәш-елкенсәк өҙгөс, таҡта яргыс, сәпәмә туп уйнай.* Р. Солтангәрәев.

10. *һөйл.* Уйнау (домино һәм кәрткә ҡарата). *Домино **һугыу**.* ▬ *Өҫтәл тирәһендә ултырган малайҙар кәрт **һуга**.* Х. Мохтар.

11. Ҡагып, тапап игендең орлогон тошороү. *Ашлыҡ **һугыу**. Көнбагыш **һугыу**.* ▬ *Был ҡышты мин ауыл байҙарына көнлөкләп утын, бесән ташып, әүен **һугып** үткәрҙем.* Ғ. Минһажев.

12. *күсм. һөйл.* Эсеү (араҡы һ. б.). *Бөгөн Ямай... бер стакан араҡыны **һугып** та сыҡҡан ине.* Д. Юлтый.

13. Электр, йәшен тейеп зарарлау. *Кешене ток **һуга**.* ▬ *Балтаны... йәшен **һугып** йыҡҡан бер ялбыр ҡарагайҙың сытыры аҫтына тыгып ҡалдыргандар.* М. Тажи.

14. *күсм.* Һауа, тәбигәт тәьҫир көсө тейеп боҙоу, зарарлау. *Монар **һуга**.* ▬ *Бисәнең еләнен һатып, бер әсминлек тары сәскәйнем, ҡырау **һуҡты**.* С. Агиш.

15. *күсм. һөйл.* Нимәнеңдер зәхмәте тейеү, һаулыҡты зыянлау, имгәтеү. *Ҡаза аяҡ аҫтынан сыҡты... Фәрихте паралич **һуҡты**.* Ғ. Ильясов.

16. *күсм.* Ыштҡыу, өйкәү (тәнде). *Аяҡты итек **һуҡты**. Ат муйынын ҡамыт **һуҡҡан**.*

17. Ҡорал менән йәнсетеп ниҙер яһау; сүкеү. *Балдаҡ **һугыу**. Беләҙек **һугыу**.* ▬ *Тимерҙе ҡыҙыуында **һуҡ**.* Мәҡәл.

**һуҡ II** *ҡ.* Арҡыры-буй ептәр һалып ишеп туҡыма яһау. *Балаҫ **һугыу**. Киндер **һугыу**. Таҫтамал **һугыу**.* ▬ *Бабай һалабаш батырган, йүкә ишкән, септә **һуҡҡан**, әбей йөн теткән, еп иләгән.* Экиәттән.

**һуң I** *р.* Тейешле ваҡытынан аҙаҡ, артҡа ҡалып эшләү, хәрәкәт итеү һ. б. ҡарата. *Һ**уң** ҡайтыу. **Һуң** тороу. Яҙ **һуң** килде.* ▬ *Беҙҙең яҡ — ҡырыҫ яҡ, ашлыҡ **һуң** өлгөрә.* Р. Низамов. *Көндөҙ икәүһе лә эштә, ә кис Рәшит гәҙәттә бик **һуң** ҡайта.* Д. Исламов. *Иртә килһәң, ит бешә; **һуң** килһәң, бит бешә.* Мәҡәл.

**һуң II** *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, билдәле бер хәл, ваҡыттың аҙағын белдерә. *Бер аҙҙан* **һуң**. *Төштән* **һуң**. *Ямғырҙан* **һуң**. ▬ *Сәиҙән* **һуң** *Заһит Гөлйөҙөм еңгәһе янына килде.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡунаҡтың көнө өс, унан* **һуң** *йорт эйәһенә көс.* Әйтем. *Уҡ баһаһы атылғандан* **һуң**, *һүҙ баһаһы әйтелгәндән* **һуң**. Әйтем.

**һуң III** *киҫ.* Телмәргә көсәйтеү мәғәнәһе эмоциональ төҫ биреп, баҫым яһай. **Һуң** *нисек ҡасмаҡ та, нисек ҡотолмаҡ кәрәк!* И. Насыри. *Һин* **һуң** *үҙең уны: «Хәйерсе ҡыҙы, асҡаҡ!» — тип әрләһәң ни була!* Һ. Дәүләтшина. — *Олатайың аҙаҡтан әрләмәҫме* **һуң**? — *тип Аиҙар арт яҡты ҡайғыртып ҡуиҙы.* М. Кәрим. *Кем ҡушмай* **һуң** *беҙгә шулай бергә яңы быуатҡаса йәшәргә!* Н. Нәжми.

**һурғыс I** *и. һөйл.* Ниҙелер һура, һурҙыра торған ҡорамал. *Саң* **һурғыс**. *Ярма* **һурғыс**.

**һурғыс II** [*рус.* сургуч] *и.* Тиҙ иреп, тиҙ ҡата торған ҡыҙғылт ыҫмала (мисәт һуғыу, шешә көпләү һ. б. кәрәк өсөн ҡулланыла). **Һурғыс** *менән мисәтләү.*

**һыҙма I** *и.* Һүрәттең төп һыҙаттарын билдәләп ҡуйған өлгө. *Ул* [*художник*] *буласаҡ картинаның тәүге* **һыҙмаһын**... *сәнғәт институтының икенсе курсында уҡыған сағында уҡ эшләне.* «Ағиҙел», 1969, № 6.

**һыҙма II** *с.* 1. Һыҙылып киткән, һыҙылып торған. *Әхмәҙи... ике яҡлап теҙелеп, алыҫҡа һуҙылған* **һыҙма** *тауҙарға күҙ ташланы.* Ж. Кейекбаев. *Мин хәҙер һинең* **һыҙма** *ҡара ҡаштарыңа ғына ҡарап торорға ризамын.* Б. Хәсән.

2. Төрлө һыҙыҡ ырылған биҙәүле; һыҙыҡлы. **Һыҙма** *балдаҡ.* ▬ *Йәшел генә сана* **һыҙма** *тимер — һыҙҙырайыҡ урам буйына.* Халыҡ йырынан.

3. Әкрен ғенә һыҙып иҫеп торған; һыҙғаҡ. *Яландарҙан иҫкән* **һыҙма** *елгә шау-шыу итте Бағаҙаҡ ҡамышы.* Халыҡ йырынан.

**һыҙыл I** *ҡ.* 1. Һыҙған һымаҡ буй, нәҙек булып һуҙылыу. **Һыҙылып** *торған ҡаш.* ▬ *Әхмәт нәҙек кенә кәүҙәле, яңы ғына* **һыҙылып** *сығып килгән ҡара мыйыҡ-*

*лы егет.* С. Агиш. *Ай уймаҡай кеүек **һыҙылып** аға Ашҡаҙарҡай һыуының ағышы.* Халыҡ йырынан.

2. Оҙон буй булып яҡтырып тороу, беленеү. ***Һыҙылып** ҡына ятҡан тау буйынан китерме икән, әсәй, юлдарым.* Сеңләүҙән. *Бына бер ваҡыт **һыҙылып** ҡына өҫтән яҡтылыҡ төшә башлаған.* Әкиәттән.

**һыҙыл II** *ҡ.* 1. Эҫенән иреү (туң майға ҡарата). *Табала май **һыҙыла**.*

2. *күсм.* Оҙон-оҙаҡҡа һуҙылыу. ***Һыҙыла** көндәр, ... **һыҙыла** бер туҡтамай.* Халыҡ йырынан.

3. *күсм.* Бик нескә, тәьҫирле булып яңғырау. ***Һыҙылып** сыҡҡан моң.* ▬ *Атым ысыҡ кисеп ҡайтҡанда **һыҙылып** ҡына сыҡты ҡурай моңо.* Р. Бикбаев. *Таштуғайҡай буйы ай шау ҡамыш, **һыҙылып** ҡына сыға бер тауыш.* Халыҡ йырынан.

**һыҙ I** *ҡ.* 1. Нимәгәләр бик тар итеп буй төшөрөү; сыйыу. *Ҡағыҙға **һыҙыу**. Ҡәләм менән **һыҙыу**.* ▬ *Өй эсендә берәү аҡ ҡағыҙҙың өҫтәренә ниҙер **һыҙғылай**.* Ғ. Мәсғүт.

2. Тар ғына буйҙар төшөрөп, ниҙеңдер шартлы һүрәтен йәки һүрәттең тәүге өлгөһөн яһау. *Эскиз **һыҙыу**.* ▬ *Архитектор өҫтәл эргәһендә күп саҡ чертеж **һыҙып** ултыра.* Ғ. Сәләм.

3. Хәреф төшөрөү, яҙыу. *Уҫҡа йомоп йөрәк — ҡуҙҙы, был һүҙҙәрҙе кем **һыҙҙы**.* Р. Бикбаев.

4. Оҙон буй итеп ниндәйҙер эҙ үткәреү. *Бураҙна **һыҙыу**.* ▬ *Таш китә асманда атылып, ут **һуҙып**.* Ш. Бабич. *Бай барҙа ыҙан **һыҙма**, түрә барҙа түргә уҙма.* Мәҡәл.

5. Ут сығарыу өсөн ышҡыу (шырпыны). ▬ [*Мозафар*] ... *һаламға шырпы **һыҙып** маташа.* Ф. Иҫәнғолов.

6. *күсм. һөйл.* Яҙма рәүештә ниндәйҙер эш-маҡсат билдәләү. *План **һыҙыу**.* ▬ *Ленин бабай үҙе үлһә лә, уның **һыҙған** юлы бар.* Халыҡ йырынан.

7. *күсм. һөйл.* Тиҙ генә ҡасыу. *Мылтыҡ юҡ ине ҡулымда, урманға **һыҙҙы** бүре.* Ҡ. Хәбиб. *Бесәй уны йәһәт кенә ауыҙына ҡаба ла, тәҙрәнән сығып **һыҙа**.* Әкиәттән.

**һыҙ II** *ҡ.* 1. Әҙ генә беленеп яй ғына хәрәкәт итеү. *Аҫтан **һыҙып** ятҡан йылға өҫтөнә ҡуйы күкһел өйрә булып, шыя ҡалҡа.* Ф. Иҫәнғолов. *Уйпат ерҙә ҡалған ҡар төркөмөн әкрен-әкрен **һыҙып** ел тарай.* Д. Юлтый.

2. *күсм.* Ауыр ҡайғынан, ауырыуҙан, кисерештән һ. б. өнһөҙ генә өҙөлөп ҡайғырыу йәки уйланыу. *Ошо хыялым менән эстән генә **һыҙып** йөрөнөм.* Ф. Иҫәнғолов. [*Әбей*] *көн-төн ҡайғыра башланы, ти. Шул ҡайғынан **һыҙып**, Умысҡа бары өс йәш тигәндә, үлеп ҡалды, ти.* Әкиәттән. *Айырылыу ауыр күңелгә, эстәр **һыҙа** ғүмергә.* Халыҡ йырынан.

3. *күсм.* Бик саф, нескә, тәьҫирле итеп яңғыратыу. ***Һыҙып** сыҡҡан йыр.* ▬ *Думбыраһы үлем көйөн **һыҙҙы**, аһ-зар, һыҡрау сыҡты моңонда.* Т. Морат. *Ҡурай! Ни көйләйһең, моң ғына **һыҙып**.* Д. Юлтый.

**һый I** *и.* 1. Кешене хөрмәт итеү өсөн әҙерләнгән аҙыҡ. ***Һый** ултыртыу. **Һый** әҙерләү.* ▬ *Ҡунаҡ алдына ҡуялар **һыйҙарҙың** иң татлыһын.* М. Кәрим. *Һәр өйҙә байрам **һыйы** бешә, ығы-зығы килә килендәр.* М. Морат. *Һыйыры барҙың **һыйы** бар.* Мәҡәл.

2. Ашап-эсеү, күңел асыу мәжлесе; табын, ҡунаҡ. ***Һый** ҡороу.* ▬ *Иртәнән ҡара кискә тиклем барған **һый** һүрәнләнде.* Т. Хәйбуллин. *Майҙан йыйып, **һый** ҡорҙолар ир Бабсаҡҡа.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

**һый II** *ҡ.* 1. Дәүмәле тап килеп, тишек-ярыҡҡа үтеү. *Энә **һыйған** ергә еп тә **һыя**.* Әйтем.

2. Күләме тап килеп, ниҙеңдер эсенә урынлашыу. *Ҡумтаға **һыйыу**. Мейескә **һыйыу**.* ▬ *Һыуы ярына **һыймаған** йылғаһы күп Урал тау.* Ҡобайырҙан. *Шунан* [*ат*] *һарай эсенә **һыймай** сапсынып һикерә, үрәпсей башланы, ти.* Әкиәттән.

3. *күсм.* Ниҙер билдәләгән сик-самаға тап килеү. *Йолаға **һыймаған** эш.* ▬ [*Ҡормой:*] *Бер ауылдың күҙ терәп торған урманын һатып ашайһың бит. Был ниндәй законға **һыя**.* Б. Бикбай.

4. *күсм.* Ярап, артыҡ күренмәй йәшәү. [*Бай бисәһе:*] *Бала-сураһы менән **һыйып** тороуҙары етмәй, бай балаһын ҡағалар.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡыҙыл телем тыйманым,*

*ҡыҙым өйөнә **һыйманым***. Мәҡәл. *Ике дәрүиш бер балаҫҡа **һыйыр**, ике батша ер йөҙөнә лә **һыймаҫ***. Мәҡәл.

**һыҡ I** *ҡ*. Көс менән түбән эйеп кәкре хәлгә килтереү; бөгөү. *Таҡтаны **һыға** баҫыу.* ▬ *Ырҙынға өйгән эҫкерттәр **һығалар** ерҙең билен.* Р. Ниғмәти.

**һыҡ II** *ҡ*. 1. Уратып, ҡыҫа тартыу; быуыу. *Муйынды **һығыу**. **Һығып** ҡосаҡлау.* ▬ *Биленән **һыға** бәйләп, батшаны ҡотоҡ эсенә төшөрә лә, егет ҡайтып китә, ти.* Әкиәттән.

2. Ҡыҫып һарҡытыу. ***Һығып** сығарыу.* ▬ *Сәскәләр ойоп ултыра татлы бал **һығып***. Р. Назаров.

3. Бороп, ҡыҫып һыуын һарҡытыу. *Керҙе **һығыу**.* ▬ *Зөлҡәрнәй оҙон ҡамыллы, тулы башаҡлы бойҙайҙарҙы көсәнеп тарта-тарта манма һыуға батты. Уның күлдәктәре **һығып** алмалы булды.* Ғ. Дәүләтшин.

4. *күсм. һөйл.* Көс-хәйлә менән йолоу. *Аҡсаһын **һығып** алыу.* ▬ *Өйрәнсек һәр көршәктән биш хаҡ **һығып** сығарыуға өлгәшә.* З. Биишева.

**һыҡы I** *с*. 1. Ҡышҡы ҡаты һыуыҡта сана табанын тотоп ятҡан бик ныҡ туң. ***Һыҡы** юл.*

**һыҡы II** *ҡ*. 1. Шылмай, шыуып үтмәй, тотҡарланыу. *Бер урында сана тамам **һыҡып** ултырҙы бит.* Н. Мусин.

2. Ҡоро аҙыҡ һ. б. тамаҡтан үткәндә шылмау, тотҡарланыу. *Картуф ҡоро тамаҡҡа **һыҡыны**.* ▬ *Тоҙло эҫе пар, һауаға күтәрелеп, тамаҡҡа **һыҡый***. З. Биишева. *Наҡышевтың эсе бошто. ... Ашағаны тамағына **һыҡыны**, эскәне — төйөн булып эсен өйкәне.* Я. Хамматов.

**һыла I** *и*. Алабуталар ғаиләһенә инғән эре ҡиммәтле йыртҡыс балыҡ. ***Һыланың** майы шифалы.* ▬ [*Мәрфуға:*] *Беҙ һинең менән ниндәй балыҡ алғайныҡ әле?* [*Гөлгөл:*] ***Һыла**, Мәрфуға апай.* И. Абдуллин.

**һыла II** *ҡ*. 1. Нимәгәлер йомшаҡ, һыулы нәмә йәбештереү. *Балсыҡ **һылау**. Мейес **һылау**. Нигеҙ **һылау**. Өй **һылау**.* ▬ [*Бәҙигә*] *өс бүлмәле бәрәс ояһын **һылап**, ағартып бирҙе.* И. Ғиззәтуллин. *Аҡ ҡарҙарҙы елдәр тәҙрәгә килтереп **һылай***. Ғ. Хәйри.

2. Дауалау маҡсатында тәнде ыуыу. *Билде* ***һылау****.* *Эсте* ***һылау****.* ▬ *Елен шешә башлаһа, ҡыҙыл балсыҡҡа һеркә ҡатнаштырып* ***һалырға*** *кәрәк.* Ф. Төхфәтуллин.

3. *күсм.* Яратып һөйөү, ҡәҙерләү. [*Ҡарасәс:*] *Салҡар күлдә йөҙгән аҡҡош кеүек, Ынйыҡаиҙы* ***һылап*** *үҫтерҙек.* Х. Ғәбитов.

**һылыу I** *с.* 1. Тышҡы ҡиәфәте, төҫө-буйы камил; матур, сибәр. ***Һылыу*** *буй.* ***Һылыу*** *егет.* ***Һылыу*** *ҡыҙ.* ▬ *Бер ҡыҙ килеп сыға. Яулығын асып ебәрһә: ай шикелле* ***һылыу****, ти, был ҡыҙ.* Әкиәттән.

2. Тышкы булмышы төҙөк, күңелгә ятышлы; матур. ***Һылыу*** *ҡайын.* ▬ *Ай, Уралым, Уралым,* ***һылыу*** *ҙа* ***һылыу*** *Уралым! Һүҙем бөтһә лә телемдә, йырым бөтмәҫ, Уралым!* Салауат Юлаев.

**һылыу II** *и.* 1. Үҙеңдән кесе ҡыҙ туған; һеңле. *Һыуға барғанда, кейәүҙең үҙ* ***һылыуы*** *йә яҡын берәүе иң тәү башлап ҡоро көйәнтәне күтәреп бара.* М. Буранғолов.

2. Үҙеңдән кесе ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. [*Рәзимйән — Орҡояға:*] *Юлда ирҙәрҙең иркен сикләргә ярамаҫ ине,* ***һылыу****.* Н. Иҙелбай. [*Алпамыша:*] *Барсынһылыу, күҙең миңә һалсы,* ***һылыу****.* «Алпамыша».

**һын I** *и.* 1. Тышҡы тән төҙөлөшө; кәүҙә, буй. *Һылыу* ***һын****.* ***Һыны*** *матур.* ▬ *Ер хуры һин йәки ожмах шәүләһе,* ***һындарың****, гүйә, фәрештә кәүҙәһе.* Салауат Юлаев. *Яуға һыйынма —* ***һының*** *ҡатыр.* Әйтем. *Әҙәм тиһәң* ***һыны*** *юҡ, күркә тиһәң йөнө юҡ.* Әйтем.

2. Кемдең йәки нимәнеңдер тышҡы күренеше, килбәте, төҫ-ҡиәфәте. *Ҡатын* ***һынына*** *инеү.* ▬ *Мәтәм Хажый ҙа йәп-йәш, хатта сабый* ***һыны*** *ла китмәгән ... Иосопйән исемле йәтим малай батрак булып торҙо.* Н. Ҡәрип. [*Бай:*] *Ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп тора. Шул* ***һыны*** *менән... һайлау ваҡытында япа-яңғыҙ үҙе миңә ҡаршы ҡул күтәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Иҫтәлек өсөн таш, гранит һ. б. нәмәнән ҡойоп яһап ҡуйылған нимәнеңдер кәүҙәһе. *Арыҫлан* ***һынын*** *яһау.* ▬ *Бәләкәй генә баҡсаға боролабыҙ. Беҙҙе таш һалдат* ***һыны*** *ҡаршы ала.* Ә. Ихсан.

**һын II** *и.* Күҙәтеүҙән барлыҡҡа килгән бер фекер; һынамыш. *Ғәмиләнең: «Эскән кешенең теле лә, аҡса янсығы ла тиҙерәк сиселә»,— тигән, үҙенең күп һыналған яҡшы **һыны** бар.* Б. Бикбай.

**һын III** *ҡ.* 1. Бөгөлөү, шаҡарылыу, һуғылыу арҡаһында өлөшкә айырылыу (ҡаты нәмәгә ҡарата). *Көрәктең һабы **һынған**.* ▬ *Ботағы **һынған** алмағастар, башы мөнтәлгән сейәләр нигәлер бойоғоп ҡалған һымаҡ.* З. Биишева. *Ҡулыңдағы ҡылысың эй **һынмаһын**, алдарыңдан дошман уҙмаһын.* Халыҡ йырынан. *Ҡатыным үлде — ҡылысымдың һабы **һынды**.* Әйтем.

2. Сатнау, биртенеү (һөйәккә ҡарата). *Ҡанаты **һынған** ҡош. **Һынған** ҡул.* ▬ *Быса-быса ҡул ҡабарып бөттө, бил **һына** яҙҙы.* Экиәттән. *Һыртың **һынһа** ла сер бирмә.* Әйтем.

3. *күсм.* Рухи йәһәттән ҡаҡшау, имгәнеү. *Үҙемдең **һынды** күңелем, ыуалды селпәрәмә.* С. Кулибай.

4. *күсм.* Ныҡ ҡаты һыуыҡ йомшарыу. *Ғинуар һыуығы **һынды**.* ▬ ***Һынды** һыуыҡ. Яҙ һулышы ергә нисек бөркөлә!* Ғ. Дәүләтов.

**һынаш I** *и.* Кемдең кем, ниҙең ни икәнен билдәләгән һынау. *Ер шарында бөйөк **һынаш** тора, алда әле бик ҙур дауҙар бар.* Ғ. Сәләм.

**һынаш II** *ҡ.* Үҙ-ара бер-береңде нимәгәлер һынау. *Кос **һынашыу**.*

**һыптағай I** *с.* 1. Ботаҡһыҙ нәҙек оҙон; һырғый. ***Һыптағай** ағас.*

2. *күсм. һөйл.* Тотош итеп тегелгән, билһеҙ (күлдәккә ҡарата). *Өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙ **һыптағай** күлдәк кейә.*

**һыптағай II** *р.* 1. Эшһеҙ, буштан-буш. ***Һыптағай** йөрөү.*

2. Бер нәмәһеҙ, буш. *Йәштән күкрәгемә һеңешкән асыуым, тик шул байҙарға сапҡан намыҫым — ул бәрелешһеҙ, **һыптағай** ғына ҡалмаҫ.* Т. Хәйбуллин.

**һыр I** *и.* Терегөмөш әсемәһе. [*Сейәбикә:*]. *Теше тәкәт таптырмай һыҙлай, шуға ҡара ҡытат яһатып, **һыр** төтөнөнә тотайым тигәйнем.* Т. Хәйбуллин.

**һыр II** *и.* 1. Ағас һ.б. ҡаты нәмәләргә уйып, соҡоп яһаған биҙәк. ***Һыр** һалыу. **Һыр** яһау.* ▬ *Йорттоң матур **һырҙар** менән эшләгән балкондарын үрмәле гөлдәр сарнаған.* Ф. Исәнғолов. *Беҙ төрлө **һырҙар** яһап эшләнгән тимер баҫҡыстан өҫкә менеп киттек.* С. Агиш.

2. Буяп йәки сигеп төшөрөлгән биҙәк. ***Һыр** һалыу.* ▬ *Ҡалпаҡайымдың ай **һырҙары**, ваҡ **һыр** менән уны һырлаиҙар.* Халыҡ йырынан.

3. Бер буйы соҡорланып, бер буйы һырланып торған буй-буй һыҙат. *Һыйырҙың йәше мөгөҙ **һырынан** билдәле.*

4. Кешенең битендәге буй-буй һыҙыҡ; йыйырсыҡ. *Маңлай **һырҙары**.* ▬ *Күкрәп уҙған йылдар эҙе булып, маңлаиҙарҙа һыҙылып **һыр** ҡала.* А. Игебаев.

**һырғаҡ I** *и.* Тотош һабағы менән бергә йәбешеп һырый торған оҙонса ваҡ ялпаҡ орлоҡло үлән; һырлан. *Күк **һырғаҡ**. Кейемгә **һырғаҡ** һырыған.*

**һырғаҡ II** *с.* 1. Һырып, йәбешеп тороусан. ***Һырғаҡ** ҡар.* ▬ *Уйнай-уйнай килеп **һырғаҡ** буран өй түренә килеп һырлыға.* Т. Йәнәби.

2. Тәнгә үтерлек көслө, эсе. *Яланда **һырғаҡ** ел тәнде үтәнән-үтә һуҡты.* М. Тажи. *Эсе генә буран, ай **һырғаҡ** ел, әйләндереп булмай йылҡымды.* Халыҡ йырынан.

**һырлан I** *и.* Тотош һабағы менән йәбешеп һырый торған ваҡ сәскәле үлән. ***Ҡара һырлан.*** ▬ ***Һырлан** һырып алыр, бөрлән бөрөп алыр.* Әйтем.

**һырлан II** *ҡ.* 1. Һырлыға әйләнеү, һырлы булыу. *Маңлайы хәҙер әллә ни тиклем тәрән йыйырсаҡ менән **һырланды**.* Һ. Дәүләтшина.

2. *күсм.* Һыйланып, наҙланып ҡыланыу. *Мин нисек шул тиклем зиннәтле бүләктәрҙән баш тарта алайым ти, **һырланып** торманым.* Х. Зарипов. *Бесәй асҡа һыҙланыр, аш һалдыңмы — **һырланыр**.* Мәҡәл.

**һырма I** *с.* Һырып тегелгән. ***Һырма** бишмәт. **Һырма** салбар.* ▬ *Кәбир өҫтөнә күпмә бишмәт, **һырма** салбар кейеп йөрөй.* Ф. Исәнғолов.

**һырма II** *и.* Һырып тегелгән ҡыҫҡа өҫ кейеме. *Ғәзимә ҡупшылап тегелгән **һырмаһының** кеҫәһенә ҡулдарын тыҡҡан да, тәҙрәгә боролоп ҡатҡан.* З. Ғәлимов.

**һыртлан I** *и.* Кеше йәшәмәгән бушлыҡтарҙа көньяҡ далалары һәм сүллектәрендә емтек ашап йәшәгән һөтимәр йыртҡыс йәнлек; сүл бүреһе. *Ялан ғына ерҙең эй бүреһе, күк **һыртлан** да булыр күбеһе.* Халыҡ йырынан.

**һыртлан II** *с.* Һырт буйы һыҙатлы. ***Һыртлан** ат. **Һыртлан** сысҡан. **Һыртлан** турғай.*

**һыры I** *ҡ.* 1. Күп булып йәбешеү. *Йөн **һырый**. Кейемгә дегәнәк **һырыған**.* ▬ *Дегәнәк аттарҙың ялына, ҡойрогона **һырый**.* Ж. Кейекбаев. *Өҫ-башына ҡар **һырыған** бер ҡыҙ килеп инде.* Н. Мусин.

2. Күмәк булып уратыу. *Кешене **һырып** алыу.* ▬ *Иптәштәр мине **һырып** алды. Бөтә хәлде һөйләп бирҙем.* Д. Юлтый. *Бал ҡорттары айыуҙы **һырып** ала ла сағырға маташа.* Әкиәттән.

**һыры II** *ҡ.* 1. Эсенә йөн, мамыҡ һымаҡ нәмә һалып үтә сәнсеп тегеү. *Көпө **һырыу**. Салбар **һырыу**.* ▬ *Береһе юрған **һырый**, береһе сигә — эш өҫтөндә былар барыһы ла.* Т. Йәнәби.

2. Кирегә аша сәнсеп тегеү. *Ҡул менән ике-өс ҡат **һырып**, ҡыҙыл күлдәкте тектеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**һыуһын I** *и.* 1. Ныҡ һыуһап эске килеү теләге. ***Һыуһынға** айран эсеү. **Һыуһынды** ҡандырыу.* ▬ *Алыҫ юлдан сарсап килгәнһеңдер, ҡымыҙ эсеп ебәр **һыуһынға**.* Б. Вәлит.

2. Һыуһаганда эсеү өсөн әҙерләнгән эсемлек. ***Һыуһын** эсереү. **Һыуһын** әҙерләү.* ▬ [*Ҡыразбикә:*] *Ҡарағол, һин арығанһыңдыр, инеп **һыуһын** эс.* Д. Юлтый. [*Нәркәс — Һәүбәнгә:*] *Атам **һыуһын** биргәндә һул ҡул менән алырһың.* «Аҡбуҙат».

**һыуһын II** *и.* 1. Бесән, иген һ.б. эштәрҙә бер арыганса эшләп алган ваҡыт араһы. *Иртәнге **һыуһын**. Бер **һыуһын** эшләп алыу.* ▬ *Эш ырай. ... Башҡа көндәрҙә **һыуһынына** ун йөктән арттырып булмай торғайны, бөгөн ун бишкә еткерҙек.* Н. Мусин.

2. Билдәле бер ваҡыт эшләгәс, туҡтап ял иткән ваҡыт. *Көндөҙгө **һыуһынға** туҡтагас, һыуға бешерелгән тары өйрәһе, ... тары бутҡаһы, баяғы ҡара икмәк ашалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**һәзар I** [*фарс.*] *һ. иҫк. кит.* Меҥ. *Мин был ҡарыиҙың зирәклегенә* ***һәзар*** *афариндар уҡыным.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**һәзар II** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һандугас. *Ҡарға ҡоҙғон ташлаһалар йыртҡыслыҡты шатлыҡ менән һайрар ине* ***һәзар*** *дастан.* С. Яҡшыголов.

**һәләт I** [*ғәр.*] *и.* Ниҙер эшләү, кешегә тыумыштан бирелгән нимәнелер эшләй, булдыра алыу, ижад итеү, булдырыу ҡеүәһе, сифаты. *Бейеү* ***һәләте.*** ***Һәләтте*** *үҫтереү. Яҙыу* ***һәләте.*** ▬ *Импровизаторлыҡ* ***һәләте,*** *күрәһең, Рәхимә еңгәгә әсәһенән бирелгәндер. Ул беҙгә лә бик күп һәм әһәмиәтле әҫәрҙәр яҙҙырҙы.* К. Мәргән.

**һәләт II** *р.* Бик тиҙ; йәһәт. ***Һәләт*** *булыу.* ***Һәләт*** *кенә ашау.* ▬ [*Батырҙың*] *... бөтә тәндәре ауырта, тораһы килмәй ине. Ләкин чекист алдында һүҙ биреүе иҫенә төшөп торҙо,* ***һәләт*** *кенә кейенде һәм вахтаға сыҡты.* Н. Иҙелбай. [*Ҡәләнфер, Нәҙкәй:*] *Йәгеҙ* ***һәләт*** *булығыҙ, туланы тиҙерәк ебәрәйек.* «Ынйыҡай менән Юлдыҡай».

# Ш

**шағыр I** *с.* 1. Ерлегендә аҡ төҫ күп булған. ***Шағыр*** *күлдәк.* ***Шағыр*** *ситса.* ***Шағыр*** *яулыҡ.*

2. Ағы ҙур (күҙгә ҡарата). *Халыҡ үҙ өмөтөн өс йүгереккә бәйләне. Шуларҙың береһе ...* ***шағыр*** *күҙле ала бейә ине.* С. Агиш.

3. *диал.* Шаҙра, быжырмаҡлы. ***Шағыр*** *бит.*

**шағыр II** *оҡш.* Ҡаты нәмәләр ышҡылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Шағыр*** *итеп ҡапҡа асылды.* ***Шағыр*** *итеү.*

**шаҡ I** *оҡш.* Ҡаҡ нәмәгә ҡаты әйбер менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Шаҡ*** *итеү.* ***Шаҡ*** *иттереп һуғыу.*

**шаҡ II** *и. диал.* Сар. Бүре **шағы.** Ҡуян **шағы.**

**шаңда** *ҡ.* 1. Шаң итеп яңғырау, яңғырап кире ҡайтыу; шаңлау (тауышҡа ҡарата). *Яратам! — тип һөрән һалдым яҡын-тирәгә. ... Яратам тип* ***шаңдап*** *ҡайтты йөрәк тауышым.* У. Кинйәбулатов.

2. Яңғырап тауышты кире ҡайтарыу, шаңлау (тирәяҡҡа ҡарата). ***Шаңдап*** *тороу.* ▬ *Йылҡылары кешнәп ҡуйһа, тауҙар ҙа* ***шаңдап*** *китә.* С. Әлибаев.

**шарт** [*ғәр.*] *и.* 1. Ниҙелер башҡарыуҙан алда тормошҡа атҡарылырға тейешле талап. ***Шарт*** *ҡуйыу.* ***Шартты*** *боҙоу.* ***Шартты*** *үтәү.* ▬ *«Миңә кейәү булырға теләгән кеше көрәштә еңеп сығырға тейеш. Икенсе* ***шартым*** *шул», — ти батша.* Әкиәттән.

2. Үҙ-ара һөйләшеү буйынса үтәлергә тейешле хәл, талап. *Түбәндәге* ***шарттарға*** *күнешеп, ошо договорҙы төҙҙөк.* Т. Хәйбуллин.

3. Ниҙеңдер үтәлеүен, бойомға ашыуын тәьмин иткән, уның өсөн мотлаҡ булған хәл. *Тейешле* ***шарттар.*** ▬ *Алыр булһаң бер остан ғилем донъя, уның да* ***шартылыр*** *— тәүфиҡ, бик аңла.* М. Өмөтбаев. *Беҙ поездың береһен дә һайлап тормайбыҙ ... беҙгә эләгеү генә* ***шарт.*** Д. Юлтый. *Тейеүе* ***шарт*** *түгел, шартлауы* ***шарт.*** Мәҡәл.

4. Ниҙеңдер булмышын, тормошон билдәләгән хәл. *Ауыр* ***шарт.*** *Больница* ***шарттары.*** *Ҡышҡы* ***шарт.*** *Тарихи* ***шарт.*** *Тәбиғи* ***шарт.*** *Эш* ***шарты.*** ▬ *Яңы тормош* ***шарттары,*** *яңы социаль мөнәсәбәттәр, яңы мәсьәләләрҙе тыуҙыра.* Ғ. Амантай.

5. Ниҙеңдер нигеҙен билдәләгән мәғлүмәт. *Мәсьәләнең* ***шарты.*** *Теореманың* ***шарты.***

**шарт II** *оҡш.* Ҡаты нәмә ныҡ һуғылғанда, һынғанда йәки мылтыҡ атҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ишекте* ***шарт*** *ябыу.* ***Шарт*** *итеп һыныу.* ▬ [*Хаммат*] *атына* ***шарт*** *һуғып, туғай эсенә боролоп инеп китте.* З. Биишева.

**шау I** *и.* 1. Күмәк, дауамлы тауыш. *Баҙар* ***шауы.*** *Тулҡын* ***шауы.*** *Урман* ***шауы.*** ▬ *Зәңгәр күк йөҙөнә олғашалар ... мотор* ***шауҙары.*** М. Тажи.

2. Эш-хәрәкәттән килгән йәнлелек. *Хеҙмәт* ***шауы.*** ▬ *Ҡала үҙенең мөһабәт ғорур* ***шауы*** *менән йәшәй.* З. Биишева.

3. *күсм.* Күңелдә уянған бошоноу, ҡурҡыу тойғоһо; шом. *Йөрәккә* ***шау*** *һалыу.* ▬ *Яңғыҙ толпар тояғы дошманына* ***шау*** *булмаҫ.* «Ҡараһаҡал».

**шау II** *р.* 1. Һәр ваҡыт, гел. **Шау** бергә йөрөү. ▬ [*Таңсулпан:*] *Эй, кешеләр! Ғүмер баҡый шулай теш ҡыҫып, зар иларғамы ни* ***шау*** *ғына.* М. Тажи.

2. Бөтөнләйе менән, тоташ. ***Шау*** *алтын.* ***Шау*** *биҙәк.* ***Шау*** *ебәк.* ▬ *Уралымды байҡа буйҙан-буйға: һәр аҡланы уның* ***шау*** *сәскә.* М. Уразаев.

**шеш I** *и.* 1. Төрлө кәрәккә ҡулланылған осло йәпле саталы ағас. [*Солтанғәле*] ***шешкә*** *аҫылған баҡырсалағы сәй ҡайнап сығыуын көтмәне.* Я. Хамматов. *Малайҙар балыҡты ҡырсынға түгеп, бүлештеләр. Күп күренгән балыҡ, һәр кем үҙенә тейгән өлөштө* ***шешкә*** *теҙеп алғас, әҙәиҙе лә китте.* Ш. Янбаев.

2. Ут өҫтөндә ит ҡыҙҙырыу өсөн ҡулланылған осло нәҙек ағас йәки тимер. [*Ҡуҙыйкүрпәс*] *ҡуяндың тиреһен тунап ботарлай ҙа, ...* ***шешкә*** *ҡаҙап ҡура.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Бөгөн төндә төш күрҙем, ут ҡашында* ***шеш*** *күрҙем,* ***шеш*** *осонда ит күрҙем.* «Аҡһаҡ ҡола». *Ит өсөн* ***шеш*** *көйә, ил өсөн ир көйә.* Мәҡәл.

3. Еүеш бесәнле кәбән аҫтына һауа йөрөргә юл ҡалдырып эшләнгән тағаН. *Кәбәнде* ***шешкә*** *һалыу.*

4. Инәһен иммәһен өсөн быҙау моронона кейҙерелгән, саталы ағастарҙан эшләнгән морондоҡ. *Быҙауға* ***шеш*** *кейҙереү.*

**шеш II** *и.* 1. Елһенеп, ҡыҙара биреп торған һыҙлаулы урын. *Быуын* ***шеше.*** *Ҡулдың* ***шеше*** *бөтмәгән.* ***Шеш*** *ҡайтыу.*

2. Эске йәки тышҡы ағза туҡымаһының аҙып үҫеүенән һәм тарҡалыуынан килгән сир. ***Шеш*** *сығыу.* ***Шеш*** *һытылыу. Эренле* ***шеш.***

3. *күсм.* Ҡамасау яһаған зыянлы хәл, күренеш. *Кешелек тарихында бөгөн капитализм тигән* ***шеш*** *йәшәй.* Ш. Бикҡол.

**шеш III** *ҡ.* Сир йәки башка сәбәптән ҡыҙарып тулышыу, ҡабарыу; шеш барлыҡҡа килеү. *Аяҡ быуыны* ***шешеү.*** *Бәрелгән урын* ***шешеү.*** *Ҡара янып* ***шешеү.*** *Эренләп* ***шешеү.*** ▬ *Бармаҡтар сейләнә, хатта иртәгеһенә* ***шешеп*** *китәләр.* Д. Юлтый.

**шешәк I** *с.* Ике йәшлек (инә ҡаҙ һәм инә малға ҡарата). ***Шешәк** ҡаҙ. **Шешәк** кәзә. **Шешәк** мал. **Шешәк** һарыҡ.*

**шешәк II** *и. диал.* Эйәләшкән, эҫенгән урын. *Эт **шешәгендә** ҡартайыр.* Мәҡәл.

**штат I** [*рус.* < *нем.*] *и.* Ҡайһы бер буржуаз илдәрҙәге федерация составына инғән территориаль берәмек. *Америка Ҡушма **Штаттары**. Мадрас **штаты**.*

**штат II** [*рус.* < *лат.*] *и.* Ойошмалағы хеҙмәткәрҙәрҙең даими составы. ***Штаттан** тыш хеҙмәткәр. **Штатты** ҡыҫҡартыу.*

**шылғаяҡ I** *с.* 1. Шыуып, шыйғалап торған, шыйғаҡ, тайғаҡ. ***Шылғаяҡ** боҙ. **Шылғаяҡ** юл.*

2. *күсм. һөйл.* Эш һөймәҫ, елғыуар. ***Шылғаяҡ** кеше.* — *[Әлмисаҡ] дин битлеге аҫтында кеше алдап йөрөгән бер **шылғаяҡ**.* Б. Бикбай.

**шылғаяҡ II** *и. һөйл.* Конькиҙа йөрөү өсөн туңдырылған боҙ; каток. ***Шылғаяҡ** яһау. **Шылғаяҡта** шыуыу.*

**шым I** *р.* Тауыш-тынһыҙ, өндәшмәй тып-тын. ***Шым** ултырыу.*

**шым II** *с.* Уй-ниәтен кешегә белгертмәгән, аҫтыртын. ***Шым** кеше.*

**шым III** *и. һөйл.* Йәшерен уй, сер. ***Шымын** сисеү.* — ***Шымда** ни була? Урты тулы ҡом була.* Әйтем. *Шымсы **шымын** әйтер, һынсы сәмен әйтер.* Әйтем.

**шым IV** *ҡ.* 1. Өнһөҙ-һүҙһеҙ булыу; тыныу. ***Шымып** йөрөү.* — *Яҡынлашып килгән Юлдашты күргәс, улар **шымып** ҡалды.* Ю. Әхмәҙиев.

2. Тымып ҡалыу, тыныу, баҫылыу. *Дауыл **шымды**. Ел **шымды**.* — *Нәфисәнең хис-тойғоларын һиҙгәндәй, тәбиғәт тә һағайҙы. Урмандағы бөтә нәмә **шымды**. Хатта ҡайын япраҡтары ла һелкенеүҙән туҡтаны.* Я. Хамматов.

**шып I** [*рус.* шип] *и.* Мылтыҡ көбәген таҙарта торған нәҙек оҙон тимерсыбыҡ. ***Шып** менән таҙартыу.*

**шып II** *р.* Эш-хәрәкәттең ҡапыл, киҫә өҙөлгәнен белдерә. ***Шып** туҡтау.* — *Аҫау малдарҙы ҡороҡлап тотҡанда, Тимеркәй бер аҙым атламай **шып** туҡтата.*

Д. Юлтый. ***Шып** баҫылды ҡом-дауыллы ел-буран.* Ш. Бабич.

**шып III** *оҡш.* Ҡаты нәмә йомшаҡҡа һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ***Шып** итеп ҡалыу.* ***Шып** итеү.* ▬ *Ҡасҡын... иҙәнгә итеге менән **шып** иттереп баҫа, ләкин береһе лә уянмай.* Әкиәттән.

**шып IV** [*рус.* шип] *и. диал.* Епһә. *Иҙән **шыбы**. Һоҫа **шыбы**.*

**шыр I** *с.* Үтә алмаҫлыҡ ҡуйы. *Өсөнсө көн инде **шыр** урманда юл таба алмай йөрөп интектем.* Б. Вәлит.

**шыр II** *с.* Тотош бер нәмәнән торған; шау. ***Шыр** һөйәк. **Шыр** һыу.*

**шыр III** *р.* Бөтөнләй, тотош, тулыһынса. ***Шыр** яланғасланыу.* ▬ *Яҙмаған ул бер ниндәй ғариза, **шыр** тана был хаҡта Нурулла.* С. Ҡудаш.

**шыр IV** *киҫ.* Сифат алдынан килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә. ▬ ***Шыр** алйот. **Шыр** наҙан. **Шыр** яланғас.*

**шырау I** *и.* Тәнгә ҡаҙалған ярсыҡ; сүп. ***Шырау** инеү.* ▬ *Тимерҙең аяҡтарына **шырау** ҡаҙалып бөттө.* Б. Бикбай.

**шырау II** *с.* 1. Шырт, ҡаты. ***Шырау** сәс. **Шырау** һаҡал.* ▬ *Ул [Ризуанов] уң ҡулының усы менән үҙенең тырпайып торған ҡыҫҡа **шырау** сәстәрен һыйпап ала ла тыныс ҡына һөйләшә.* Ә. Вәли.

2. Ярылып, ҡытыршыланып бөткән; ҡаты. ***Шырау** ҡул.* ▬ *— Бына,— тигән Мулдаҡай, **шырау** устарын бер-береһенә ыуып,— беҙ ҙә атлы булдыҡ.* Б. Бикбай.

**шырпы I** *и.* Ут тоҡандыра торған көкөрт башлы ағас таяҡса; сыйғыс. ***Шырпы** һыҙыу.* ▬ ***Шырпы** өсөн һәр төрлө ағас ярамай. Уға шыма,ботаҡһыҙ, таҙа уҫаҡ, ҡайын талап ителә.* Ә. Ихсан.

**шырпы II** *и. диал.* Шырау. *Ә һеҙ теше араһына **шырпы** ҡыҫылған кеше кеүек, һыҡтап ултыраһығыҙ,— тине* [*Ҡолмөхәммәт*]. А. Таһиров.

**шырт I** *и.* Ҡайһы бер хайуандарҙың йыуан, ҡаты йөнө. *Сусҡа **шырты**.*

**шырт II** *и.* Төрәндең алдынан ҡырҡып бара торған бысаҡ; алтөрән. [*Иәноҙаҡ:*] *Анау көндө ... теге ҡырға убаһы*

*янында бер һабан күреп ҡалдым. Ҡараһам — беҙҙең һабан* ***шыртты,*** *төрәне — бөтәһе лә үҙ эшем.* Р. Ниғмәти.

**шырт III** *и.* Етен, киндер сүсен иләү хәленә еткергәнсә таҙарта, йомшарта торған тимер тешле яҫы тараҡ. ***Шырт*** *аша үткәреү.* ***Шырт*** *менән таҙартыу.*

**шырт IV** *оҡш.* Мурт нәмә һынғанда сыҡҡан ҡаты өҙөк тауышты белдергән һүҙ. ***Шарт*** *итеп ҡалыу.* ***Шарт*** *итеү.* ▬ *Бер ауыл мәктәбендә ватылды тәҙрә* ***шырт*** *итеп.* ***Шырт*** *ҡына түгел шул, ул бит ҡыйрай сылтырт итеп.* Ш. Бабич.

**шыу I** *оҡш.* Етеҙ хәрәкәт, көслө ел тауышын белдергән һүҙ; жыу. *Аҡъял менән Тау батыр ҡара урман эсенән барғанда* ***шыу*** *иткән, шатыр-шотор килгән тауыш ишетеп ҡалды, ти.* Экиәттән.

**шыу II** *р. диал.* Шау. ***Шыу*** *төҙ.* ▬ *Таштуғайҡай буйы эй* ***шыу*** *ҡамыш, һыҙылып ҡына сыға бер тауыш.* Халыҡ йырынан.

**шыу III** *ҡ.* 1. Шыма, тайғаҡ булыу сәбәпле тотолоп тормау, тотҡарлыҡһыҙ хәрәкәт итеү. ***Шыуып*** *сығыу.* ***Шыуып*** *тороу.*

2. Сана, саңғы кеүек нәмә менән тауҙан төшөү. *Санала* ***шыуыу.*** *Саңғыла* ***шыуыу.*** ▬ *Малай саңғыһына ултырған да, тау түбәненә* ***шыуып*** *төшөп киткән.* Н. Мусин.

3. Ятҡан килеш ҡул-аяҡтар ярҙамында хәрәкәт итеү; шылышыу. *Түш менән* ***шыуыу.*** ***Шыуып*** *барыу.* ▬ *Тауыш-тынһыҙ ғына йылға ярына* ***шыуып*** *төштөм.* С. Кулибай. *Окоптарҙан сыҡҡандан һуң* ***шыуып*** *йөрөнөк түш менән.* Бәйеттән.

4. Үҙенән-үҙе хәрәкәткә килеп урындан күсеү. *Мәғфүрә башынан* ***шыуып,*** *сиселеп барған яулығын төҙәтеп бәйләне.* Һ. Дәүләтшина.

5. Ултырған хәлдә ҡалҡына биреп, урындан урынға күсеү; шылыу. *Көтөп тороусылар ... ишек янынараҡ* ***шыуып*** *ултырҙы.* С. Агиш.

6. *күсм.* Бер ыңғай менән яй ғына хәрәкәт итеү; күсеү. *Оло ҡара болот һымаҡ, ер ябып, бер нисә мең баш ҡуй көтөүе* ***шыуҙы.*** Һ. Дәүләтшина. *Томан* ***шыуа*** *туғай арҡыры.* Ғ. Ибраһимов.

7. *кусм.* Тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ҡулдан китеү; олағыу. *Миңьян килгән. Тағы ла: «Сәй-шәкәрлек ...» Алмашына **шыуған** баса тун.* Ғ. Сәләм.

**шәре I** *и.* 1. Боҙ өҫтөнә сыҡҡан һыу. *Шәре сыҡҡан.* ▬ *[Ат] боҙ өҫтөндәге **шәрене** сәсрәтеп сыҡҡанда ла туҡтап торманы.* Я. Хамматов.

2. Ер өҫтөнә күләүекләнеп йыйылған ямғыр йәки ҡар һыуы. *Быҫҡаҡ ямғыр һибә. Сиҙәм ергә **шәре** булып һыуҙар түшәлә.* З. Биишева.

3. Ағастан һарҡҡан һары һыу. *Имгәнеп бөткән уҫаҡ олондарынан тутлы **шәре** аға.*

**шәре II** *ҡ.* 1. Һыу булыу, һыуланып иҙелеү (ер өҫтөнә ҡарата). *Аяҡ аҫты **шәреп** ята.*

2. Боҙолоп, сереп һыулыға әйләнеү. *Туңған картуф **шәрене**.*

3. *кусм.* Көсһөҙләнеү; ҡарыу бөтөү. *Дәрте һүнгән, ашмай ғәмәлгә, рух **шәрегән**, кәйеф төшөнкө.* Й. Гәрәй.

**шәшке I** *и.* Һуҫарҙар ғаиләһенә ҡараған затлы тиреле, йылтыр көрән йөнлө, ҡыҫҡа аяҡлы йыртҡыс йәнлек (һыу буйында, өңдә йәшәй). *Америка **шәшкеһе**.* ▬ *Йәнкәй-йәнеш китте ай һунарға Ашҡаҙарҡай буйына **шәшкегә**.* Халыҡ йырынан.

**шәшке II** [*рус.* чашка] *и. диал.* Сынаяҡ. *Бисәләр, тәүҙә бер-береһенән тартынған һымаҡ бәләкәс кенә тешләп ашаһалар ҙа, берәр **шәшке** сәй эскәндән һуң, ирәбеләнеп киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**шәшке III** [*рус.* шашка] *и. һөйл.* Ҡылыс. *Ҡулда ғына мылтыҡ, билдә **шәшке**, өҙөлөп-өҙөлөп бара билгенәм.* Бәйеттән.

# Ы

**ығыш I** *ҡ.* 1. Бер яҡҡа ауышыу, ығыу. *Мөйөштәре ҡыйшайып, **ығышып** бөткән ... ташландыҡ балаған күренде.* Я. Хамматов.

2. Тотош бер яҡҡа ауыу, ығыу (игенгә, үләнгә ҡарата). *Совхоз баҫыуҙары ... игендәре **ығышып** ултыра.* Б. Бикбай.

3. Ел ыңғайына һарҡыу түбәненә хәрәкәт итеү; ығыу. [*Күл уртаһындағы утрауҙа*] *бер ҡайын үҫеп ултыра ине. ... Ул утрау шул ҡайын менән бер яҡтан икенсе яҡҡа* ***ығышыр****, күсеп йөрөр ине. Шуға уны Ығышмакүл тиҙәр.* Легенданан.

**ығыш II** *ҡ.* Ҡабаланмай, яй ҡуҙғалыу. ***Ығышып*** *ҡына атлап, эңерләтеп ауылға ҡайтып еттек.* Н. Мусин.

**ығыш III** *с.* Ҡабаланмай, яй ҡуҙғалыусан, әкрен хәрәкәтле; мыштыр. ***Ығыш*** *кеше.*

**ығыштыр I** *ҡ.* Бер яҡҡа ауыштырыу. [*Ауылдың*] *көрт һырып* ***ығыштырған*** *ситәндәренә тиклем миңә яҡын һымаҡ. Яратам ауылды.* Б. Бикбай.

**ығыштыр II** *ҡ.* Ҡабаландырмай, яй ғына хәрәкәт иттереү. *Атты* ***ығыштырып*** *ҡына барыу.*

**ыҙғыш I** *и.* Кешеләр араһындағы янъял; талаш. ***Ыҙғыш*** *күтәреү.* ***Ыҙғыш*** *сығарыу.* ▬ *Аҫабалыҡ өсөн булған был* ***ыҙғыш*** *тора-бара асыҡ дошманлыҡҡа илтеп еткергән.* Б. Бикбай.

**ыҙғыш II** *ҡ.* Үҙ-ара асыуланышып, ныҡ әйтешеү; талашыу. ***Ыҙғышып*** *китеү. Юҡтан* ***ыҙғышыу.*** ▬ *Юлай ...* ***ыҙғышырға*** *көн дә бер янъял ҡарай.* Ш. Бабич. *Татыу ғына йәшәмәнек, бугай,* ***ыҙғышҡан*** *да саҡтар күп булды.* Ә. Атнабаев. *Күршем менән* ***ыҙғышһам****, өйгә инермен; өйөм менән* ***ыҙғышһам****, ҡаиҙа инермен?* Мәҡәл.

**ыҡ I** *и.* 1. Хәрәкәт йүнәлеше; ыңғай. *Ел* ***ығына*** *әйелеү.* ▬ [*Малдар*] *баштарын буран* ***ығына*** *һалып, юшап торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Кемдеңдер яйы, ыңғайы. *Кеше* ***ығына*** *йөрөү.*

**ыҡ II** *и.* Ел һуҡмаған урын; ышыҡ. *Малды* ***ыҡҡа*** *ҡуйыу.* ***Ыҡта*** *тороу.*

**ыҡ III** *ҡ.* 1. Бер яҡҡа ауышыу; ҡыйшайыу. *Кәбән һулға табан* ***ыҡҡан.*** ▬ [*Гөлъямалдың*] *өйө иҫкереүе етеп, бер яҡҡа* ***ыҡҡан.*** *Терәтеп ҡуйылған.* Б. Дим. *Ағас бысҡы ҡуйған яҡҡа* ***ыҡты*** *ла, уны нық итеп ҡыҫты.* Н. Мусин.

2. Һығылып тотош бер яҡҡа ауыу (игенгә, үләнгә ҡарата). ***Ыҡҡан*** *арыш.*

3. Ел ыңғайына, һарҡыу түбәненә хәрәкәт итеү. *Көтөү буран менән **ығып** барҙы.* ▬ *Төнөн ел ыңғайына **ығып**, туғайға таралды.* М. Тажи.

**ыҡла I** *ҡ.* 1. Бер тарафҡа йүнәлеш алыу; ыңғайлау. [*Урал — Шүлгәнгә:*] *Атам һүҙен тотманың, яуызлыҡҡа **ыҡланың**.* «Урал батыр». *Егет бара торғас, ҡурай тауышы ишетеп, шаңлаған да шул яҡҡа табан **ыҡлаған**.* «Аҡбуҙат».

2. Ел, буран ыңғайына йүнәлеү (малға ҡарата). [*Кәләмбай*] *Ҡара һыуға ҡарай әйләп ҡараһа ла, буранға **ыҡлаған** мал уға баш бирмәй.* Т. Хәйбуллин.

**ыҡла II** *ҡ.* Ышыҡ урынға инеү; ышыҡланыу. ***Ыҡлап** тороу.* ▬ *Ямантауҙың буйына бөтә йәнлек **ыҡлаған**.* «Ҡараһаҡал».

**ыҡтыр I** *ҡ.* Ауыш хәлгә килтереү. *Ағасты **ыҡтырыу**.*

**ыҡтыр II** *ҡ. диал.* Ығыштырыу. *Ярай, Сәлмән Ҡыҙыл һыуындай оҙон-оҙон уйҙар уйлап, үгеҙен **ыҡтырып** ҡайта торһон, беҙ уның белешенә киләйек.* Әкиәттән.

**ырғаҡ I** *и.* 1. Эләктереү өсөн махсус эшләнгән кәкре башлы ҡулайлама. *Сана **ырғағы**. Тимер **ырғаҡ**. **Ырғаҡ**ҡа эләктереү.* ▬ *Таҙ арҡан башына ағас ботағынан эшләнгән **ырғаҡ** тағып, шул **ырғаҡты** һыуға ырғытып, нимәләр тартып сығарырға теләгән кеүек ултыра, ти.* Әкиәттән.

2. Бәйләм бәйләү өсөн ҡулланылған башы киртекле энә. *Ағас **ырғаҡ**. Селтәр **ырғағы**. **Ырғаҡ** менән бәйләү.*

**ырғаҡ II** *и.* Ауыҙ эсенең өҫкө тешкә яҡын ҡаты өлөшө. ***Ырғаҡ** боҙолоу.* ▬ *Ҡыҙырас ... телен **ырғағына** тейҙереп, шартлатып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**ыу I** *и.* 1. Зәһәрле матдә; ағыу. *Йылан **ыуы**. Ҡорт **ыуы**.* ▬ *Араларында береһе үтә яһил булған. Шуныһы ... ҡара йыландың ағыуын ҡушып **ыу** яһаған.* Ғ. Хөсәйенов. *Белгән әҙәм һыу эсер, белмәгәне **ыу** эсер.* Мәҡәл.

**ыу II** *с.* Ныҡ әсе; зәһәр. ***Ыу** тоҙ. Ҡорошторҙо үтеп тәнебеҙгә **ыу** һыуығы февраль айының.* Ә. Моратов.

**ыу III** *ҡ.* 1. Нимәнелер усҡа һалып ышҡып, киҫәктәргә таратыу. *Радик бер ус башаҡ өҙөп алды. Уларҙы ипләп*

*кенә* ***ыуҙы***. Ә. Вахитов. *Ҡап-ҡара тиреҫте ҡулға тотоп,* ***ыуып*** *ҡарайбыҙ*. Р. Низамов.

2. Ҡул йөрөтөп ышҡыу. *Билде* ***ыуыу***. *Күҙҙе* ***ыуыу***. *Ҡолаҡты* ***ыуыу***. *Спирт менән* ***ыуыу***. *Эсте* ***ыуыу***.

# Э

**эй I** *ҡ.* **1.** Бөгөп, аҫҡа табан төшөрөү, ауыштырыу. *Ағасты* ***әйеү***. ▬ *Зөләйха башын* ***әйгән***, *бер нәмә лә өндәшмәй тик ултыра*. Т. Иәнәби.

2. Билдән бөгөп кәүҙәне алға ауыштырыу. *Шәрифйән ағай көрһөнөп, оҙон кәүҙәһен алға* ***әйеберәк***, *... ҡайтыу яғына ыңғайланы*. Р. Низамов.

**эй II** *ҡ.* Елен төбөндәге һөттө биреү, һөтөн төшөрөү (һауын малға ҡарата). *Быҙау ауыҙын тейҙереп, әҙерәк тылҡытып алмаһас, һыйыр* ***әймәй*** *икән*. **Ф.** Иҫәнғолов.

**эй III** *ҡ.* Һарҡыу йәки тайғаҡ урындан шыуыу. *Тауҙан* ***әйеү***. ***Әйеп*** *төшөү*. ▬ *Һырғалаҡ юлдан шәп* ***әйә*** *санам*. А. Игебаев.

**эй IV** *ымл.* **1.** Кемгәлер өндәшкәндә, мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. [*Егет:*] *«****Эй*** *кешекәй, һин кем? Нишләп һаң борҡотоп йөрөйһөң бында?» — тип һораған, ти*. Экиәттән.

2. Риза булмағанда, борсолоу, үкенеүҙе һ. б. белдерә. ***Эй***, *бынауы Ямал иләк ауыҙ ҙа инде*. М. Тажи. ***Эй***, *был ғүмер! Аҡҡан һыуҙай, иҫкән елдәй үтә лә китә икән!* Р. Ғарипов.

3. Аптырау, ғәжәпләнеүҙе һ. б. белдерә. ***Эй*** *күңелле!* ***Эй*** *көн эҫе!* ▬ ***Эй*** *саба ул, мин ҡыуамын,* ***эй*** *саба ул, мин ҡыуам*. Ш. Бабич.

**эйәр I** *и.* Һыбай йөрөү өсөн менге малдың һыртына һала торған ҡулайлама. ***Эйәр*** *һалыу*. ▬ ***Эйәренә*** *ырғып менде командир башлап, ҡолаҡтарын текә сәнсеп бышҡырҙы аттар*. М. Тажи. Яман **эйәрҙән** яйҙағым яҡшы. Мәҡәл.

**эйәр II** *ҡ.* **1.** Кем йәки ниҙеңдер артынан хәрәкәт итеү. ***Эйәреп*** *барыу*. ***Эйәреп*** *йөрөү*. ▬ *Ренаттың артынан ... бәләкәй генә ҡыҙ* ***эйәргән***. Ф. Иҫәнғолов. *Ат аҙғыны тайға* ***эйәрер***. Мәҡәл.

2. *күсм.* Эштә, тормошта кемгәлер ҡарап эш итеү. *Яҡуп Мырҙабаев колхозға иң беренселәрҙән булып керҙе. Уның артынан башҡалар ҙа **эйәрҙе**.* Б. Бикбай.

3. Йыр йәки көйҙө башлап ебәреүсегә ҡушылыу. *Кешегә **эйәреп** йырлау.*

**экипаж I** [*рус.*< *фр.*] *и.* Кеше ултырып йөрөү өсөн хеҙмәт иткән рессорлы еңел арбаларҙың дөйөм исеме. *Гостиница алдына ялтырап торған матур **экипажға** егелгән ... алма сыбар юртаҡ килеп туҡтаны.* Х. Мохтар.

**экипаж II** [*рус.* < *фр.*] *и.* Карап, самолёт, танк һ. б. шундай машиналарҙы хеҙмәтләндергән төркөм. *Карап **экипажы**.* ▬ *Беҙ **экипажда** дүртәүбеҙ. Иң олобоҙ — танк командиры Иван Васильевич.* Ғ. Аллаяров.

**эре I** *с.* 1. Күләм-дәүмәле ҙур берәмектәрҙән торған; *киреһе* ваҡ. ***Эре** бойҙай. **Эре** ҡом. **Эре** тоҙ.* ▬ *Һуңыраҡ ул* [*Яҡуп*] ***эре** таштар ятҡан яҡҡа күсте.* М. Кәрим. *Көҙ көнө Сәлмән баҡсанан быйма башындай **эре** картуф йыйып, тауҙай итеп өйөп ҡуйҙы, ти.* Экиәттән.

2. Ҙур аралы. ***Эре** аҙым.*

3. Буй-һыны ҙур булған; *киреһе* ваҡ. ***Эре** ағас. **Эре** балыҡ. **Эре** себен.* ▬ *Көтөү эше еңел түгел ине. Баярҙың береһенән-береһе уҫал, йөҙләгән **эре** һыйырын ... таң ҡараңғыһынан тороп, яланға ҡыуырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

4. Милке, мөлкәте, составы ҙур булған. ***Эре** колхоз. **Эре** хужалыҡ.*

5. Ҡиммәте, баһаһы ҙур (аҡсаға ҡарата). ***Эре** аҡса.*

6. *күсм.* Үҙен башҡаларҙан өҫтөн һанаған, һауалы. ***Эре** кеше.*

**эре II** *ҡ.* 1. Ҡайнаған сағында ҡатыҡ һалғандан йәки әсегән көйө ҡайнатҡандан эремсеккә әйләнеү (һөткә ҡарата). *Һөт **эреү**.*

2. Бөрсөк-бөрсөк булып төйөрләнеү (дебеткә ҡарата). *Дебет **эрегән**.*

**эркет I** *и.* Йыйылған әсе ҡатыҡ (ғәҙәттә унан ҡорот ҡайнаталар). ***Эркет** йыйыу. **Эркет** ҡайнатыу.* ▬ [*Фати-*

*ма*] *һыйыр һауыуҙан, ойотҡан ойотоуҙан һәм* ***эркет*** *ҡайнатып ҡорот яһауҙан ... бушаманы.* Ж. Кейекбаев.

**эркет II** *ҡ. диал.* Эркелдереү. *Дейеүҙәрҙе өҫкөттөң, ер өҫтөндә* ***эркеттең***. *«Урал батыр».*

**эс I** *и.* 1. Кәүҙәнең күкрәктән түбәнге өлөшө; ҡорһаҡ. *Ҙур* ***эс***. ***Эсте*** *кәпәйтеү.* ***Эсте*** *һыйпау.* ▬ *Ҡулды* ***эскә*** *килтерәм. Ул нимә менәндер тығыҙ итеп бәйләнгән.* С. Агиш. *Ул урындыҡта аунарға,* ***эсен*** *ыуырға кереште.* М. Ғафури.

2. Тәндең тыштан күренмәгән эске ағзалар урынлашҡан өлөшө. *Тынды* ***эскә*** *тартыу.* ▬ *Ҡымыҙ аҡрынлап* ***эсте*** *йылытып, бөтә тамырҙарға йүгерә.* Ғ. Дәүләтшин.

3. *күсм.* Хис-тойғо тупланған фарази урын; күңел. *Бибикамал еңгә асыулы һүҙҙәрен әйтмәне. Ваҡыты килеп еткәс, әйтермен әле, тип,* ***эсендә*** *һаҡлап ҡалдырҙы.* А. Карнай. ***Эскенәйем*** *тулы ҡайғы-хәсрәт, бер йырламай, йөрәгем баҫылмай.* Халыҡ йырынан.

4. Ниҙеңдер уртаһындағы ҡыуыш урын һәм унының уратылышы. *Ауыҙ* ***эсе***. *Кәртә* ***эсе***. *Торба* ***эсе***. *Һарай* ***эсе***. *Һауыт* ***эсе***.

5. Уратып алған нәмәнең араһы йәки урталығы. *Болот* ***эсе***. *Урман* ***эсе***. *Һыу* ***эсе***.

**эс II** *ҡ.* 1. Шыйыҡ нәмәне йотоу. *Һыу* ***эсеү***. ***Эсеп*** *ебәреү.* ▬ [*Ғарифуллин*] *һыуынған сәйен күтәреп* ***эсте*** *лә, сынаяғын шаҡ иттереп өҫтәлгә ултыртты.* С. Агиш. *Ауыҙы бешкән һыуыҡ һыуҙы ла өрөп* ***эскән***. Мәҡәл.

2. Иҫерткес эсемлек ҡабул итеү. *Араҡы* ***эсеү***. ***Эсеп*** *иҫереү.*

**эт I** *и.* 1. Йорт һаҡлау, һунар итеү һ. б. кәрәк өсөн ҡулға эйәләштерелгән йәнлек. *Бәйле* ***эт***. *Йорт* ***эте***. *Көтөү* ***эте***. *Сәүек* ***эт***. *Һунар* ***эте***. ▬ *Аҫтыртын* ***эт*** *өрмәй тешләй.* Мәҡәл. *Тай ат булғансы, эйәһе* ***эт*** *булыр.* Мәҡәл. ***Эт*** *үҙ ояһында көслө.* Мәҡәл. ***Этте*** *таларға* ***этк***ә *ҡуш.* Мәҡәл.

2. *һөйл.* Яуыз кешегә ҡарата әйтелә. *Батша ҡулын һуҙҙы инде, илдән эттең барын үҙ янына йыйҙы инде, арабыҙҙан,* ***эт*** *табып, уны бергә ҡуйҙы инде.* Бәйеттән. [*Баяр:*] *Һимереп ҡоторонаһығыҙмы әллә һеҙ,* ***эттәр***! М. Тажи.

3. *һөйл.* Кешенең эш-ҡылығына һоҡланып, аптырағанда әйтелә. ***Эт** икәнһең.* — *[Кәбир:] Колхоз йыйылышында бөтәһен ярҙым да һалдым. Ҡайһы берәүҙәр: «Ну үҙең дә **эт** кеше инде»,— ти. **Эт** тигәндәренә лә риза булдым. Ни өсөн тиһәң, был урында ул маҡтау ... ине.* С. Ағиш.

4. *һөйл.* Көсәйтеү киҫәксәһе менән «бер кем дә, бер йән эйәһе лә» тиғән мәғәнәне бирә. ***Эт** тә аңларлыҡ түгел. **Эт** тә юҡ урамда. **Этем** дә белмәй.*

**эт II** *ҡ.* 1. Кос һалып билдәле бер йүнәлештә хәрәкәт иттереү, күсерғә, ҡуҙғалырға мәжбүр итеү; этәреү. *Алға **этеү**. Арбаны **этеү**. Арттан **этеү**. Ишекте **этеп** асыу. **Этеп** алып барыу. **Этеп** йығыу. **Этеп** төшөрөү.* — *Һыуға таҡтаның бер башын төшөрҙөм, ... **этеп** ебәрҙем. Таҡта мин **этеп** ебәргән көс менән Сергеев алдына барып төкәлде.* Д. Юлтый.

2. *күсм.* Кешене ниндәйҙер бер эшкә ыңғайлатыу, уның эшенә сәбәпсе булыу. *Енәйәткә **этеү**.* — *Бөйөк тойғо **этә** ине беҙҙе алға.* Х. Ғиләжев.

# Ә

**әле I** *р.* 1. Һүҙ барған мәлде, ошо ваҡытты белдерә; хәҙер. *Варшаванан сыҡҡанда минең уң аяғым бик нык ауырта ине, **әле** бер аҙ ҡыҙып китте буғай, ауыртмай башланы.* Д. Юлтый.

2. Ошо мәлдән алда ғына, яңы ғына. ***Әле** һөйләшкәндәрҙе иҫкә алһаң, ҡыҙыҡ бит.* С. Ағиш.

3. Ошоға тиклем, ошо көнгәсә; хәҙерғәсә. ***Әле** беҙҙең тормош ... сыға алмаған һаҙҙан, соҡорҙан. **Әле** беҙҙең юлдар әрселмәгән, япраҡ ярмай торған сытырҙан.* Ғ. Хәйри.

**әле II** *терк.* Теҙмә ҡушма һөйләм йәки тиң киҫәктәр алдынан килеп, ундағы бер-бер артлы килгән ваҡиға-күренештәрҙе һанап сыҡҡанда ҡулланыла. *Хаят ... **әле** атаһы, **әле** әсәһе янына барып һырлыға.* Һ. Дәүләтшина. *Сәмреғош үҙе оса, үҙе һаман башын **әле** уңға бора, **әле** һулға бора икән.* Әкиәттән.

**әле III** *киҫ.* 1. Бойороҡ, теләк ҡылымдары йәки өндәү һүҙҙәре менән бергә килеп, уларҙың мәғәнәләренә үтенес, кәңәш биреү, теләк төҫмөрө өҫтәй. ***Бир әле. Күрәйем әле. Ҡуй әле. Ултырайыҡ әле. Әйҙә әле.*** ▬ [*Хафиз:*] ***Ҡана, кил әле, нисә ботҡа арттың икән?*** М. Тажи.

2. Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр ҡылымдары менән бергә килеп, эштең әлегә тамамланмауын, дауам итеүен йәки киләсәктә үтәлерен белдерә. ***Йөрөйөм әле.*** ▬ ***Мин былай гел кешегә эшләп йөрөмәм әле.*** Т. Йәнәби.

3. Киләсәк заман хәбәр ҡылым менән килеп, нимәгәлер артыҡ бошонмағанды, иҫ китмәгәнде белдерә. [*Зөләйха:*] ***Мин ярлы ҡыҙы шул. Һин мине һанға һуҡманың, ... күрергә гәрләндең. Мин дә ирһеҙ ҡалмам әле.*** Т. Йәнәби.

4. Үткән заман хәбәр ҡылым һәм *һуң* киҫәксәһе менән килеп, нимәгәлер аптырағанды, борсолғанды белдерә. ***Туҡта, был ниндәй тауыш булды һуң әле? Ишеткәнем юҡ бит был тауышты.*** С. Агиш.

5. Ваҡыт төшөнсәле рәүеш менән килеп, шул һүҙҙең мәғәнәһен көсәйтә, һүҙ баҫым менән әйтелә. ***Бөгөн әле бригадир Яҡуп ҡыҙыл обоз ойоштороу тураһында һөйләп торҙо.*** Б. Бикбай.

6. Ниндәйҙер бер билдәгә, фактҡа баҫым яһап, фекерҙең тәьҫир көсөн арттыра. ***Вәт, ҡандай оҫталар булған борон заманда ла! Эй... аптырар сағың алда әле.*** З. Биишева.

7. ***Бит*** киҫәксәһе менән бергә эш-хәлдең булыуын билдәләп һәм раҫлап, уға икеләнеберәк, аптырап торғанды белдерә. ***Китәм ти бит әле. Эштең осона сығырлыҡ түгел бит әле. Ямғыр яуа ла яуа бит әле.*** ▬ ***Никах, туй сығымдарына аҙ китмәҫ бит әле.*** Һ. Дәүләтшина.

8. ***Бар, юҡ, түгел*** модаль һүҙҙәре йәки рәүештәр менән бергә килеп, ваҡыт яғынан сикләү йәки, киреһенсә, дауамлылыҡ төҫмөрөн бирә. ***Ваҡыт бар әле. Иртәрәк әле.*** ▬ ***Ә миңә эш табылыр төҫлө түгел әле.*** С. Агиш. [*Ғариф — Тимергә:*] ***Һинең туй һыйыңды һаман күргән юҡ әле.*** Б. Бикбай.

**әллә I** *киҫ.* 1. Бирелгән һорауҙы икеләнгән кеүек итеп, ҡәтғилеген йомшартыу өсөн ҡулланыла. ***Мин оҙаҡлап***

*киттем, әллә миңә асыуландығыҙмы?* Д. Юлтый. *Ә һуң мин больницаламы әллә?* С. Агиш.

2. Риторик һораулы һөйләмдәрҙә һорау төшөнсәһен көсәйтә. *Әллә был ҡыҙ мине яратмай инде?* Т. Йәнәби. *Әллә һиҙмәйме икән [командир] беләгенә йәше тамғанды?* Р. Нигмәти.

3. Ни уйларға белмәй, икеләнгәнде аңлата. *Әллә таныманы Бәғиҙә [Ғәмбәровты], әллә икенсе кеше тип уйланы, һирпелеп кенә ҡараны ла, аҙымын йәһәтләп, һараиға инде лә китте.* Ш. Янбаев.

4. Һорау алмашы менән килеп, билдәһеҙлек алмашы яһай. *Әллә кем. Әллә ҡайҙа. Әллә ҡайһы.* ▬ [*Зыя:*] *Тәнзилә инәй, һин әллә нимә һөйләй башланың, ул һүҙҙе кемдән ишеттең?* М. Тажи. *Бара-бара әллә ниндәй урмандар үтеп, ... Таҙ бер ҡалаға килеп сыҡты, ти.* Әкиәттән.

5. Эш-хәл тураһында тойғо менән әйткәндә ҡулланыла. *Әйтмәй әллә, колхоз һауын һыйыр түгел бит.* М. Тажи. *Әллә русса белмәй тигәс тә.* С. Агиш.

**әллә II** *инш.* Нимәләр хаҡында асыҡ белмәй, икеләнеп әйткәндә ҡулланыла. *Әллә, беҙгә уның тураһында бер ниндәй насар хәбәр килгәне юҡ.* Б. Бикбай [*Ҡыҙ:*] *Әллә, сәс бәйләнгән булһа, ҡаиҙа китер тип беләһең.* Т. Йәнәби.

**әллә III** *мөн.* Уйҙың, фекерҙең бик үк ышаныс менән әйтелмәгәнен белдерә. *Исхаҡ бер егәрле генә кәләш алып ебәрһә, әллә был ҡарт та бер түргә менеп, рәхәтләнеп ултырыр ине.* Һ. Дәүләтшина.

**әләм I** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Байраҡ. *Ҡыҙыл әләм.* ▬ *Беҙ еңәбеҙ. Беҙ еңергә тейеш. Төшөрмәгеҙ Ленин әләмен.* Х. Ҡунаҡбай. *Беҙ ҡаҙарбыҙ ал әләмде ныҡ, батыр йәш ҡул менән.* Ғ. Амантай.

**әләм II** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡайғы. *Төрлө яҡтан баҫмаһа ғәм, һис бер кеше сикмәҫ әләм!* М. Ғафури.

**әр I** [*ғәр.*] *и.* Ғәр. **Әргә** тейеү. ▬ *Әгәр әрнемәһә, әгәр әр белмәһә, ул йөрәк кемгә кәрәк?!* Н. Нәжми.

**әр II** *и.* Асыуланып, әрләп әйткән һүҙ. *Әр ишетеү.* ▬ *Ашағаның — ҡаты-ҡото икмәк, түшәгең — кеше түпһаһы, йән аҙығың — әр ҙә ҡарғыш.* Ш. Насыров. *Мең ға-*

*заплы, әрнеүле был яҙмышыма әр, ҡарғыш, ләғнәт уҡып ваҡһынмаймын.* Б. Мирзанов.

**әсе I** *с.* 1. Лимон, мүк еләге, һеркәгә хас тәм булған. *Әсе алма. Әсе балан. Әсе ҡатыҡ.* ▬ *Мәғфүрә Дилғә ... бер туҫтаҡ әсе эркет ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

2. Махсус әсетелгән. *Әсе ҡамыр.* ▬ *Эсер ҙә инем әсе бал булһа.* Халыҡ йырынан.

3. Һиҙеү ағзаларына киҫкен, зәһәрле тәьҫир иткән, ҡырҡыу. *Әсе төтөн.* ▬ *[Крәҫтиән] әсе еҫле тәмәке тарта.* С. Агиш.

4. Ныҡ һалҡын, киҫкен; үҙәккә үтерлек ҡаты. *Әсе һыуыҡ.* ▬ *Әсе ел мине уятты төн уртаһында.* Н. Нәжми. *Әсе генә буран ай һырғаҡ ел, әйләндереп булмай йылҡымды.* Халыҡ йырынан.

5. Ҡолаҡ ярырлыҡ нәҙек, үҙәк өҙгөс (тауышҡа ҡарата). *Әсе тауыш.*

6. Булыу кимәле көслө булған, ҡаты (ауыртыу, һыҙлауға ҡарата). *Күҙгә ут күренерлек итеп алған әсе тулғаҡтан уның маңлайына шыбыр тирҙәр сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

7. *күсм.* Бик көслө, ауыр, ҡаты. *Әсе ҡайғы. Әсе михнәт. Әсе хәсрәт.* ▬ *Сәғиҙә ҡасандыр өҙөлөп һөйөп, һуңғы ваҡытта шул тиклем әсе хурлыҡ килтереп рәнйеткән балаһын был сәғәттәрҙә йөрәге өҙөлөп йәлләне.* Һ. Дәүләтшина.

8. *күсм.* Физик һәм рухи яҡтан ҙур түҙемлек талап иткән, ауыр. *Әсе тормош. Әсе һынауҙарҙы үтеү.* ▬ *Көнө төнө талашыу, тартҡылашыу бик әсе нәмә.* М. Ғафури.

9. *күсм.* Намыҫҡа тейерлек итеп әйтелгән, уҫал, ағыулы. *Әсе һүҙ.* ▬ *Йәнтимер ... миңә бик тапҡыр, бер әйткәндә биш ҡат тир сығарырлыҡ әсе һүҙ әҙләй кеүек күренә.* С. Агиш. *Әсе һүҙгә түҙгән бей булыр, әсе көнгә түҙгән бай булыр.* Мәҡәл.

**әсе II** *ҡ.* 1. Әсе тәм алыу; әсегә әйләнеү, әсе булыу. *Ас көйө һыуһап йөрөгәнсе, әсегән ҡатыҡ айраны эсеп, эсте күптереп йөрөрмөн.* С. Агиш. *Көршәк эсендә әсегән һөт бар.* Д. Юлтый.

2. Ҡур тәьҫирендә органик матдәләр тарҡалыу, әсе тәме инеү. ***Әсегән*** буҙа. ***Әсеткән*** бал. ▬ *Ҡур тейешле норма менән һалынған да, ҡымыҙҙың бөтә төрләһе туғыҙ сәғәт эсендә* ***әсеп*** *өлгөрҙө.* М. Ғөбәйҙуллин. [*Ҡарт — Зыяға:*] *Зыя ҡусты, ... балыңды әйтәм, бик шәп* ***әсегән.*** Б. Бикбай.

3. Ейеп еҫләнеү (эшкәртеү осөн ейгә һалынған тирегә ҡарата). *Тонсоҡторғос* ***әсегән*** *тире еҫе һиҙелде.* И. Насыри.

**әҫәр I** [*ғәр.*] *и.* 1. Тел өлкәһенә, әҙәбиәткә, әҙәбиәт ғилеменә ҡараған ижади эш. *Сәсмә* ***әҫәр.*** *Теҙмә* ***әҫәр.*** *Фольклор* ***әҫәре.*** ▬ *Юғары художестволы* ***әҫәр*** *— ул күп ҡырлы аҫыл таш кеүек. Уның ҡайһы яғына яҡтылыҡ төшөрһәң, шул ҡыры нур балҡытып уйнап китә.* М. Минһажетдинов.

2. Төрлө сәнғәт өлкәһенә ҡараған ижади эш. *Музыкаль* ***әҫәр.*** *Сәхнә* ***әҫәре.*** ▬ *Салауат Юлаев һәйкәле — Сосланбек ағаның иң ҙур, иң гүзәл* ***әҫәре.*** «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 1.

**әҫәр II** [*ғәр.*] *и.* 1. Нимәгәлер хас һыҙат, уның күрһәткесе, сағылышы; эҙ, билдә. *Йән* ***әҫәре*** *күренмәй.* ▬ [*Сәғиҙә*] *шунда уҡ төшәгенә ауып, юрғанын башынан аша ҡапланы, ләкин күҙенә йоҡо* ***әҫәре*** *килмәне.* М.Тажи.

2. *һөйл.* Тәьҫир, йоғонто. *Көн буйы юғалып йөрөгән өсөн атай ҙа, әсәй ҙә ороша торған булһалар ҙа, был орошоуҙар зәһәрле, йөрәк әрнетә торған* ***әҫәр*** *ҡалдырмай торғайны.* М. Ғафури.

**әүәл I** [*ғәр.*] *р.* 1. Тәү башлап; тәүҙә, башта. *Кем күтәрер ҡалын пәрҙәләрҙе үҙем* ***әүәл*** *барып тотмаһам?* М. Ғафури.

2. Нимәнәндер алда, элек. *Мин хат яҙам, барып етһен тимен, ғәйбәттәрҙән* ***әүәл*** *намыҫым.* Х. Ғиләжев.

3. Үткән заманда; элек, борон. — ***Әүәл,*** — *тибеҙ, булһа әгәр дәүер йыраҡ.* М. Уразаев. ***Әүәл*** *заманда ауылда бер ҡарт менән ҡарсыҡ йәшәгән, ти.* Экиәттән.

**әүәл II** [*ғәр.*] *и.* Нимәнеңдер тәүге, баш өлөшө; баш. *Бисмилла тип башланым һәр бер эштең* ***әүәлен.*** Бәйеттән.

**әхирәт I** [*гәр.*] *и. дини.* Үлгән кешенең йәне бара торған донъя; теге донъя. [*Мулла:*] *Донъя мәшәҡәте бөтмәҫ инде ул, Ырыҫҡол.* ***Әхирәтте*** *онотмаҫҡа кәрәк. Беҙ* ***әхирәт*** *өсөн йәшәйбеҙ.* Б. Бикбай. *Уйнар ҙа инем, көлөр инем,* ***әхирәттә*** *ҡаты һорау бар.* Халыҡ йырынан. *Донъя эшен* ***әхирәткә*** *ҡалдырма.* Әйтем.

**әхирәт II** [*гәр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың мәңгелеккә вәғәҙәләшеп, бүләк бирешкән дуҫы. ***Әхирәт*** *булышыу.* ▬ *Гөлйөҙөм* ***әхирәтен*** *ныҡытып ҡосаҡлай.* Һ. Дәүләтшина. *Уларҙың* [*Ирйегет менән Буранşаның*] *ҡатындары* ***әхирәт*** *ине. Байрам да, кәсеп тә бергә ине уларҙың.* З. Бишева.

# Ю

**юллыҡ I** *и.* Мейестең төтөн юлы. ***Юллыҡты*** *асыу.*

**юллыҡ II** *с.* 1. Юл өсөн кәрәк булған. ***Юллыҡ*** *аҙыҡ.* ***Юллыҡ*** *аҡса.* ▬ *— Миңә* ***юллыҡ*** *аҡса бир, Ырымбурға барып, донъя күреп ҡайтайым.* Б. Бикбай.

2. Күпмелер юлдан торған (яҙыуға ҡарата). *Дүрт* ***юллыҡ*** *шиғыр.*

# Я

**ябаға I** *и.* Алты ай менән бер йәш араһындағы йылҡы малы. ***Ябағаны*** *хурлама, яҙға сыҡһа, тай булыр.* Әйтем.

**ябаға II** *и.* Йылҡы малының яҙ ҡойолған йөнө. *Ҡолон йәше тулып килгәндә* ***ябағаһын*** *ҡоя башлай.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ябыҡ I** *с.* Ябып ҡуйылған, ябылған (асмалы нәмәләргә ҡарата); *киреһе* асыҡ. ***Ябыҡ*** *ҡапҡа.* ***Ябыҡ*** *тәҙрә.* ▬ *Күтәрмәң бейек, менә алмам, ишегең* ***ябыҡ****, керә алмам.* Сеңләүҙән.

2. Бикле, йоҙаҡлы; эшләмәгән. ***Ябыҡ*** *касса.* ▬ [*Әмирханов*] *ишектәге ҡатырғаның «Магазин* ***ябыҡ****» тигән яғын ... әйләндереп ҡуйҙы.* С. Агиш.

3. Эш ваҡыты бөткәндә, эш тамамланғанды белдерә. [*Саттар:*] *Бар, бар сығығыҙ инде, сығығыҙ! Сход бөттө, сход* ***ябыҡ****.* Һ. Дәүләтшина.

4. Нимә менәндер ҡапланған, ябылған; көбө, ябыуы булған. ***Ябыҡ*** *машина.* ***Ябыҡ*** *орлоҡло үҫемлектәр.* ▬ *Оҫта һунарсылар, яланға сыҡҡанда, һунар эттәрен* ***ябыҡ*** *нәмәгә тейәп алып сығалар.* Д. Юлтый.

5. Айырым кешеләр өсөн генә тәғәйенле булған, айырым кешеләргә генә ҡатнашырға, танышырға рөхсәт ителгән. ***Ябыҡ*** *йыйылыш.* ***Ябыҡ*** *суд.*

**ябыҡ II** *с.* Май ҡатламы булмаған, йоҡа тәнле; *киреһе* һимеҙ. ***Ябыҡ*** *кеше.* ***Ябыҡ*** *мал.* *Һары еләнле, һары йөҙлө* ***ябыҡ*** *кешенең башын һалҡын ташҡа ҡуйып моңланыуына, туҡтауһыҙ күҙенән йәш ағыҙыуына Шәрәфи ағай аптырап оҙаҡ ваҡыттар ҡарап торҙо.* И. Насыри.

**ябыу I** *и.* 1. Ниҙеңдер өҫтөнә ябып, ҡаплап ҡуйыла торған нәмә; япма. *Ат* ***ябыуы****.* *Ебәк* ***ябыу****.* *Көрәгә* ***ябыуы****.* *Өҫтәл* ***ябыуы****.* *Түшәк* ***ябыуы****.*

2. Ҡоролма башы, ҡыйыҡ. *Аласыҡтың* ***ябыуын*** *ел осорҙо.*

**ябыу II** *и.* Һаҡ аҫты, төрмә. ***Ябыуға*** *ләгеү.* ▬ *Муллайән хәҙер* ***ябыуҙа*** *ултыра.* Ф. Иҫәнғолов.

**яға I** *и.* Кейемдең муйын тирәләй уратып торған өлөшө. *Алынмалы* ***яға****.* *Ҡайтармалы* ***яға****.* *Селтәр* ***яға****.* ***Яға*** *ултыртыу.* ▬ [*Һыбайлының*] *асыҡ иҙеүенән гимнастёрҡаһының ултыртма* ***яғаһы*** *күренеп тора.* Д. Исламов. *Ямандан бурыс алһаң, йорт алдында* ***яғаңдан*** *алыр.* Мәҡәл.

**яға II** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың түшенә кейә торған шау тәңкә, мәрйендән ғибәрәт биҙәнеү әйбере; һаҡал. *Мәрйен* ***яға****.* *Тәңкә* ***яға****.* ▬ *Алтын ғына алҡа, мәрйен* ***яға*** *тағып сығыр инем муйыныма.* Халыҡ йырынан.

**яҙ I** *и.* Йылдың ҡыш менән йәй араһындағы йылы миҙгеле. *Иртә* ***яҙ****.* ***Яҙға*** *сығыу.* ▬ *Ҡыҫмаҡ үтеп, ҡыш үткән һуң, килде* ***яҙ****, ҡыйҡыулашып, килде осоп өйрәкҡаҙ.* Аҡмулла. ***Яҙ*** *килгәйне, сана ялға китте, юл асылды йүгерек арбаға.* Р. Ниғмәти. *Бер ҡаҙ килеү менән* ***яҙ*** *булмаҫ.* Мәҡәл.

**яҙ II** *ҡ.* 1. Ҡағыҙ йәки башҡа нәмәгә һан, хәреф, һүҙ һ. б. төрлө график тамғалар төшөрөү. *Ҡара менән* ***яҙыу.*** *Нота* ***яҙыу.*** *Ташҡа* ***яҙыу.*** ▬ *Хәлиулла справкаларҙы әйләндереп-әйләндереп ҡараны: «Боронго гөбөрнатор писере кеүек нисек һырландырып* ***яҙған».*** И. Ғиззәтуллин. *Алмас тимер менән* ***яҙалар*** *икән көмөш йөҙөктәрҙең ҡашына.* Халыҡ йырынан.

2. Ҡулдан йәки баҫма, һыҙма юл менән график тамғаларҙы тезеп теркәү. *Дәфтәргә* ***яҙып*** *ҡуйыу. Һөйләгәндә* ***яҙып*** *барыу.* ▬ [*Оҫтабикә:*] *Ике фәрештә ... һәр кемдең ни эшләгәнен* ***яҙып*** *торор.* Б. Ишемғол.

3. Яҙма әйбер төҙөү, уй-фекерҙе ҡағыҙға төшөрөү. *Доклад* ***яҙыу.*** *Көндәлек* ***яҙыу.*** ▬ *Табаҡ та ғына табаҡ ай аҡ ҡағыҙ Буранбайҙың* ***яҙған*** *хаттары.* Халыҡ йырынан.

4. Нимәнеңдер иҫәбенә индереп исемлеккә теркәү, алыу. *Үҙешмәкәр түңәрәккә* ***яҙыу.*** *Эшкә* ***яҙыу.*** ▬ *Командир ағай, мине лә отрядҡа* ***яҙ.*** Һ. Дәүләтшина.

5. Нимәнелер алыу, биреү йәки берәйһенең исеменә күсереү һ. б. тураһында документ төҙөү. *Малды балаға* ***яҙыу.*** *Эш хаҡы* ***яҙыу.*** ▬ *Идараға барҙыҡ. Беҙгә ике килограмм отход* ***яҙып*** *бирҙеләр.* К. Кинйәбулатова.

6. Ниндәй ҙә булһа әҫәр төҙөү, ижад итеү. *Хикәйә* ***яҙыу.*** ▬ *Быны бәйет итеп* ***яҙҙым*** *йөрәктәрем янғанға.* Бәйеттән.

7. Махсус аппарат ярҙамында тауышты пластинкаға, плёнкаға төшөрөү. *Концертты* ***яҙыу.*** *Магнитофонға* ***яҙыу.***

**яҙ III** *ҡ.* 1. Бөкләнгән, йомолған, йыйырылған хәлдән төҙ, тигеҙ хәлгә ҡайтарыу, турайтыу. *Аяҡты* ***яҙыу.*** *Бармаҡтарҙы* ***яҙыу.*** *Билде* ***яҙыу.*** ▬ *Футболсылар уйын алдынан аяҡ-ҡулды* ***яҙыр*** *өсөн йәшел яланға йүгереп сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Төйөрөлгән, ойошҡан хәлдән аралап таратыу; тетеү. *Йөн* ***яҙыу.*** ▬ *Әсегән ҡымыҙҙың әрпеһен* ***яҙыу*** *ауыр була.* М. Ғөбәйҙуллин.

3. Бешеп, туҡып айран, май яһау. *Яңы* ***яҙған*** *май туҡлыҡлы ла, үҙе тәмле лә.* Ғ. Амантай. *Көбөлә май* ***яҙа*** *Әсмә. Бына май ҙа төштө.* Н. Нәжми. *Беҙ ... инештең көмөштәй таҙа, һалҡын һыуына айран* ***яҙып*** *эсә торғайныҡ.* С. Кулибай.

**яҙ IV** *ҡ.* 1. Нимәнәндер буш ҡалыу, мәхрүм булыу. *Малдан* ***яҙыу.*** *Ризыҡтан* ***яҙыу.*** ▬ *Ҡәләм алһам, төшөп китә ҡулдарымдан, илайым мин* ***яҙырмын*** *тип моңдарымдан.* Н. Нәжми. *Ул* [*Ҡолморҙа*] *аттан* ***яҙып*** *ҡалғас, йәйәүләп ҡайта.* Т. Хәйбуллин.

2. Ниндәйҙер рухи йәки физик сифатты, һәләтте юғалтыу. *Аҡылдан* ***яҙыу.*** *Иҫтән* ***яҙыу.*** *Күҙҙән* ***яҙыу.*** *Тамаҡтан* ***яҙыу.*** *Телдән* ***яҙыу.*** ▬ [*Яуынбай ҡайғыһынан*] *әсәһе аяғынан йығылды. Ашау-эсеүҙән* ***яҙҙы.*** Ш. Шәһәр. *Унан һис белмәйем ни булғанын, һуштан* ***яҙып*** *ятып ҡалғанмын.* С. Кулибай.

3. Нимәнеңдер тейешле тәртибенән сығыу; яңылышыу. [*Ныяҙғол*] *бая уҡ иҫәбенән* ***яҙған*** *тиҫбеһенең дә ... осона сыға алманы.* Һ. Дәүләтшина.

**яҙ V** *ярҙ. ҡ* ***-а, -й*** формаһындағы хәл ҡылымға эйәреп эш-хәлдең саҡ ҡына булмай ҡалыуын белдерә. *Илай* ***яҙыу.*** *Йығыла* ***яҙыу.*** ▬ *Эй баралар былар, эй баралар, ти, диңгеҙҙең аръяғына сығып етә* ***яҙалар,*** *ти.* Әкиәттән.

**яҙыҡ I** *и.* Ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған, ярамаған эш-ҡылыҡ; гонаһ. ***Яҙыҡ*** *булыу.* ▬ *Мөхәббәт* ***яҙыҡ*** *түгел, мөхәббәтһеҙ уйнаш* ***яҙыҡ.*** М. Кәрим.

**яҙыҡ II** *с.* Баш-башы киреңке бөгөлгән (кәкре нәмәләргә ҡарата); һоноҡ. ***Яҙыҡ*** *дуға.* ***Яҙыҡ*** *салғы.*

**яҙыл I** *ҡ.* 1. Нимәнеңдер иҫәбенә, һанына инеү, ҡайҙалыр үҙеңде яҙҙырыу. *Кооперативҡа* ***яҙылыу.*** *Эшкә* ***яҙылыу.*** [*Зилский*] *гүмерендә һабан артынан йөрөп, һабан башы тотмаһа ла, ... крәҫтиән булып* ***яҙылды.*** Ғ. Дәүләтшин.

2. Ваҡытлы матбуғатты йәки берәй баҫма әҫәрҙе билдәле бер ваҡытта килтереү шарты менән алдан уҡ хаҡ түләү. *Гәзиткә* ***яҙылыу.*** *Журналға* ***яҙылыу.*** *Пушкин әҫәрҙәре йыйынтығына* ***яҙылыу.***

**яҙыл II** *ҡ.* 1. Бөкләнгән, бөгәрләнгән, йыйырылған хәлдән тигеҙ, төҙ хәлгә килеү. *Маңлай* ***яҙылды.*** ▬ *Һулаҡай терһәк мылтыҡ күтәреп кәкрәйгән,* ***яҙылмай.***



12 – 1.0066.06

А. Таһиров. *Ҡолсобай ҡапыл хәлһеҙләнде, ... йоҙроҡтары үҙенән-үҙе* ***яҙылды****.* Я. Хамматов.

**яҙыл III** *ҡ.* Ауырыуҙан арынып, әҙерәк шәбәйеү. [*Ҡарт*] ***яҙылып*** *бер аҙ йөрөһә лә, мандыманы, яҙға таба үлеп тә ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**яҙылыш I** *и.* Нимәнеңдер яҙылыу рәүеше, яҙыуҙағы бирелеше. *Ялғауҙарҙың дөрөҫ* ***яҙылышы.***

**яҙылыш II** *ҡ.* Никахты теркәү, загсҡа инеү. [*Харис:*] *Минең ҡатыным Мәҙинә ошо була инде. Беҙ әле генә* ***яҙылышып*** *ҡайттыҡ.* Ш. Янбаев.

**яҙым I** *и.* Башҡа килгән бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек. [*Ҡарас батыр:*] *Миңә бер-бер* ***яҙым*** *булһа, кәүҙәмде дошман ҡулына бирергә тырышмағыҙ.* Әкиәттән.

**яҙым II** *с.* Һан менән килеп, майҙың бер самалағы күләмен белдерә. *Бер* ***яҙым*** *май.*

**яҙын I** *р.* Яҙ көнө, яҙ ваҡытында. ***Яҙын*** *ғына муйыл сәскә ата, һандуғасҡай килеп ҡунһын, тип.* Халыҡ йырынан.

**яҙын II** *с. диал.* Яңылыш, хата. ***Яҙын*** *юл менән барыу.*

**яҙын III** *ҡ.* Үҙ алдыңа ниҙер яҙыу. ***Яҙынып*** *ултырыу.* ▬ [*Юлдаш әбей:*] *Бик күп* ***яҙынаһың****, балам. Күҙ нурыңды ашап бөтә инде был аҡҡа текләп ултырыуҙарың.* Һ. Дәүләтшина.

**яй I** *и.* 1. Нимәлер башҡарыуға тейеш мәл; уңай. ***Яйы*** *сыҡҡанда.* ▬ [*Ниғмәттең*] *ике күҙе һаман ҡыҙҙа,* ***яй*** *килгән һайын өҙөк-өҙөк һүҙ ҡушҡылай.* Б. Бикбай. ***Яйын*** *тура килтереп, батша ҡыҙы Көмөшбайҙың балдағын урлап алған.* Әкиәттән. *Игендең* ***яйын*** *иккән белер, арбаның* ***яйын*** *еккән белер.* Мәҡәл.

2. Нимәнелер эшләү, тормошҡа ашырыу юлы; әмәл. ***Яйын*** *эҙләү.* ▬ *Һиҙеп торам,* [*Вәсиләнең*] *ниҙер әйткеһе килә лә, тик* ***яйын*** *таба алмай.* Р. Солтанғәрәев.

3. Кешенең нимәгәлер булған ихтыяры, теләге (гәҙәттә уға ирек ҡуйғанда, уны сикләмәгәндә әйтелә). *Кешене үҙ* ***яйына*** *ҡуйыу. Үҙ* ***яйыңды*** *ҡарау.* ▬ [*Урал — Шүлгәнгә:*] *Ат һайланың —* ***яй*** *ҡуйҙым, дан эҙләргә теләнең — теләгеңә юл ҡуйҙым.* «Урал батыр».

4. Кемдеңдер күңел торошо, кәйефе. [*Хан*] *иҫәнләшеп бары менән күрешеп сыҡты, һәр береһенең хәлен,* ***яйын*** *белешеп сыҡты.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

5. Нимәнеңдер тейешле тәртибе, көйө. *Эште* ***яйға*** *һалыу. Эштең* ***яйын*** *табыу.* ▬ *Хайран ғына егет вайран була донъяларҙың* ***яйы*** *юҡ өсөн.* Халыҡ йырынан.

**яй II** *и.* Урын, ер. *Урман, туғай, ҡырыңды баяр тигән дошмандың заводына* ***яй*** *иттең.* «Мәргән менән Маян».

**яй III** *с.* Ғәҙәттәгенән әкрен. ***Яй*** *ағышлы йылға.* ***Яй*** *хәрәкәт.*

**яйла I** *ҡ.* 1. Уңайлы, яйлы итеү; йәтешләү. *«Һөйлә!» — тине миңә Сыртланов. Үҙе тыңлар өсөн* ***яйлабыраҡ,*** *трибунаға боролоп ултырҙы.* С. Агиш.

2. Билдәле бер ҡулайға, яйға килтереү; йәтешләү, ипләү. [*Тимерғотло*] *йөҙ һикһән аҙаматын һайлап алды, яу ҡоралын барын да* ***яйлап*** *алды.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

3. Яйға, юлға һалыу, йүнгә килтереү; көйләү, йүнләү. *Тормошто* ***яйлап*** *ебәреү. Эште* ***яйлау.*** ▬ [*Ҡотлояр*:] *Һин ҡыҙҙы алып китеүеңде бел. Ҡалғанын беҙ үҙебеҙ бында* ***яйларбыҙ.*** Һ. Дәүләтшина.

**яйла II** *ҡ.* Ашыҡмай, ғәҙәттәгенән әкрен ҡуҙғалыу. ***Яйлап*** *йөрөү.* ***Яйлап*** *ҡайтыу.* ▬ *Закир айранды ...* ***яйлап,*** *йотомлап ҡына эсеп бөттө.* З. Биишева. *Ашыҡҡан үҙен бөтөрөр,* ***яйлаған*** *эшен бөтөрөр.* Мәҡәл.

**яҡ I** *и.* 1. Билдәле бер йүнәлеш, тараф һәм шул тарафтағы урын. *Алғы* ***яҡ.*** *Күл* ***яғы.*** *Тауыш килгән* ***яҡ.*** ▬ [*Сәғиҙә*:] *Инәй, ... яңылыш* ***яҡҡа*** *китеп бармайбыҙмы икән?* М. Тажи. *Ҡарт өс* ***яҡҡа*** *ҡарап өс уҡ атҡан.* Әкиәттән.

2. Билдәле бер ерлектәге урын; өлкә, ил. *Белмәгән* ***яҡ.*** *Тыуған* ***яҡ.*** *Ялан* ***яғы.*** ▬ *Беҙҙең* ***яҡ*** *— ҡырыҫ* ***яҡ,*** *ашлыҡ һуң өлгөрә.* Р. Низамов. [*Егет*:] *Уҙаман, ... өҫ-башыңа ҡарағанда беҙҙең ырыу кешеһе түгелһең, ҡайһы* ***яҡ*** *һин? — тип һораны.* Әкиәттән.

3. Урта төштән ситтәге йәки нимәнеңдер ян буйындағы тараф һәм шул тарафтағы урын. *Ике* ***яҡтан*** *баҫыу. Уң* ***яҡтан*** *ултырыу.* ▬ *Урамдың бер* ***яғы*** *— ҙур ҙур йорт-*

*тар, ҡаршы* ***яҡта*** *— ҡала баҡсаһы.* Ғ. Сәләм. *Арғы* ***яҡҡа*** *баҫма һалдым, бирге* ***яҡта*** *шәүләһе.* Халыҡ йырынан.

4. Нимәнеңдер бер өлөшө, бүлеге. *Күлдәктең итәк* ***яғы.*** *Ҡашаяҡ* ***яҡ.*** *Түр* ***яҡ.*** ▬ *Мансаф йоҡлай алманы. Таҡта менән генә бүленгән икенсе* ***яҡта*** *ятҡан әсәһе лә ... бик оҙаҡ йоҡламай ятты.* Ә. Вәли.

5. Нәмәнең ҡайһылыр тарафтағы өҫтө, йөҙө. *Ағастың мүк баҫҡан* ***яғы.*** *Ҡулдың һырт* ***яғы.*** *Тауҙарҙың тиҫкәре* ***яғы.*** *Япраҡтың аҫҡы* ***яғы.*** ▬ [*Батша*:] *Мейестең тыш* ***яғынан*** *уратып ... ут* ***яғығыҙ.*** Экиәттән.

6. Берәй кеше йәки нәмәләге айырым бер сифатты, үҙенсәлекте күрһәткән һыҙат, билдә. *Докладтың йомшаҡ* ***яғы.*** *Эштең теоретик* ***яғы.*** *Холоҡтоң насар* ***яҡтары.*** ▬ *Кешене бергә тора башлағас ҡына ныҡлап беләһең бит ул. Мансаф та Рәүфәнең күп* ***яҡтарын*** *әле генә күрҙе.* Ә. Вәли.

7. Берәй эш-хәлгә бәйле мәсьәләгә ҡарата әйтелә. *Ашау* ***яғы*** *яҡшы. Кеҫә* ***яғы*** *таҡыр. Китеү* ***яғын*** *уйлау.* ▬ *Был урында һыу* ***яғы*** *насар тиҙәр. Был тирәлә аҡҡан йылға ла, күл дә юҡ.* Д. Юлтый.

8. Бер-береһенә кире мөнәсәбәттәге кешеләр, төркөм, ойошма һ. б. *Аҡтар* ***яғы.*** *Ҡыҙылдар* ***яғына*** *сығыу.* ▬ *Тиҙ генә ғәскәр туплап, ҡаршы барып ҡарай был, әммә теге* ***яҡ*** *бик көслө булып сыға.* Экиәттән.

9. Туғанлыҡ, нәҫел нигеҙендә бүлеүгә ҡарата әйтелә. *Ата* ***яғынан*** *тыуған кеше. Егет* ***яғы.*** *Ҡыҙ* ***яғы.***

10. *мат.* Геометрик фигураның бер ҡырын тәшкил иткән тура һыҙыҡ. *Дүртмөйөштөң ҡаршы* ***яҡтары.*** *Өсмөйөштөң* ***яҡтары.***

**яҡ II** *и.* Яңаҡ. *Ишек* ***яғы.***

**яҡ III** *ҡ.* 1. Усаҡҡа, мейескә һ. б. ягыулыҡ һалып ут тоҡандырыу. *Ҡаҙан аҫтына* ***яғыу.*** *Мейескә* ***яғыу.***

2. Яҡтылыҡ өсөн ут ҡабыҙыу, тоҡандырыу. *Сыра* ***яғыу.*** ▬ *Берәү һикереп тороп ишек асты, берәүһе шәм* ***яҡты.*** М. Кәрим.

3. Ут ярҙамында өй, бүлмәне йылытыу. *Бөгөн* [*Тимер*] *өйөнә лә рәтләп* ***яҡмаған.*** Б. Бикбай.

4. Йыуыныу өсөн әҙерләү, йылытыу (мунсаны). *Өшөп ҡайтһаң тип, мунса ла* ***яҡҡайныҡ****. Әсәй мунса уҙҙырып йөрөй, йыуынып сығырһың.* Ф. Әсәнов.

5. Яғыулыҡ итеп файҙаланыу, утта яндырыу. *Газ* ***яғыу****. Күмер* ***яғыу****. Утын* ***яғыу****.* — *Уларҙың* [*әбей менән бабайҙың*] ***яғыр*** *утындары бөткән.* Әкиәттән.

6. Утҡа ташлап яндырыу. *Бүләгеңде утҡа* ***яғам****, үҙең миңә булмағас.* Халыҡ йырынан. *Яңы ҡолаҡсынға ышанып, иҫке ҡолаҡсынды утҡа* ***яҡма****.* Мәҡәл.

7. Утҡа яндырып эшкәртеү; үрләү. *Күмер* ***яғыу****.* — *Аҡбулат ҡарт ғүмер буйы ... туҙ һыҙырған да дегет* ***яҡҡан****.* Әкиәттән.

8. *күсм.* Ниндәйҙер хис-тойғоно барлыҡҡа килтереү; уятыу. *Шатлығым артты, хистәрем ташты, йәшлек дәртен* ***яҡты*** *дуҫтарым.* Я. Ҡолмой.

**яҡ IV** *ҡ.* 1. Өҫтөн буяп һылау; һөртөү. *Биткә кершән* ***яғыу****. Икмәккә бал* ***яғыу****.* — [*Ғази*] *сүлмәктән май ҡайырып алып, икмәк телеменә* ***яҡты****.* Ф. Иҫәнғолов.

2. *күсм.* Кемғәлер ғәйеп ташлау; яла йәбештереү, тағыу. *Бәлә* ***яғыу****.* — *Уның* [*Абдулланың*] *бөтә эше кешегә яла* ***яғыу****, нахаҡтан кеше рәнйетеү.* Я. Хамматов.

3. Яҡын килеп терәлеү, төкөлөп туҡтау; һағыу (ғәҙәттә ағым менән хәрәкәт иткән нәмәгә ҡарата). *Һал ярға* ***яҡҡас****, ҡырсынға иң тәүҙә бер ҡатын һикереп төштө.* Ж. Кейекбаев.

4. *күсм. һөйл.* Күңелдә урын алыу, оҡшау (һүҙ, хәбәргә ҡарата); ятыу. *Күңелгә* ***яҡмаҫ*** *хәбәр.*

**ял I** *и.* 1. Көс йыйыу, хәл алыу өсөн эш-хәрәкәт араһында яһалған өҙөк. ***Ял*** *биреү.* ***Ялға*** *туҡтау.* — *Эшләп арығас, үлән өҫтөндә ултырып* ***ял*** *алам.* Б. Ишемғол.

2. Эш, хеҙмәт кешеләренә көс йыйыу, дауаланыу өсөн бирелгән ваҡыт. *Йәйге* ***ял****.* ***Ялда*** *булыу.* — *Унда* [*минең илемдә*] *кешеләр эшкә,* ***ялға*** *хаҡлы.* Ғ. Сәләм.

3. *күсм.* Күңел тыныслығы, ҡәнәғәтлек тойғоһо. *Йөрәккә* ***ял*** *алыу. Күңелгә* ***ял*** *булыу.* — *Күбәләктәй күңелем бер ҡуҙғалғас, ҡауышмай ҙа тороп* ***ял*** *алмаҫ.* Халыҡ йырынан. *Алда булһа ҙур теләк, эштән* ***ял*** *таба йөрәк.* Әйтем.

**ял II** *и.* 1. Ҡайһы бер хайуандарҙың елкә буйына оҙон булып үҫкән ҡыл. *Арыҫлан* ***ялы.*** *Ат* ***ялы.*** *Ҡуйы* ***ял.*** ▬ *Сал* ***ялдарын*** *туҙғытып, бер-береһен ҡурҡытып, аттар тулаған һымаҡ.* М. Ғәли. *Атты екһәң ек ерәнен,* ***ялы*** *ергә тейгәнен.* Халыҡ йырынан.

2. Йылҡы малының елкә буйындағы май ҡатламы. *Ҡаҡлаған* ***ял.***

**ял III** *и.* Кемдер файҙаһына эшләгән эш һәм шул эш өсөн бирелгән түләү. *Тамаҡ* ***ялына*** *эшләү. Эш* ***ялы.*** ▬ *Ҡасим Әхмәҙиҙән көн* ***ялын*** *һорарға барҙы. Өс көн көнләкләп ағас төбө таҙартҡайны.* А. Таһиров.

**яла I** *и.* Кемгәлер ягылған ялған ғәйеп. ***Яла*** *ягыу.* ▬ [*Абдулланың*] *бөтә булған эше — кешегә* ***яла*** *ягыу, нахаҡтан кешене рәнйетеү.* Я. Хамматов.

**яла II** *ҡ.* 1. Нәмәнеңдер өҫтөнән тел менән һыпырыу. *Иренде* ***ялау.*** *Ҡалаҡ* ***ялау.*** ▬ *Бүребай шыңшый-шыңшый Айрас янына килде, уның ҡулдарын, битен* ***ялаңы.*** Ш. Насыров.

2. Тел йәки бармаҡ менән һыпырып ашау, эсеү. *Бал* ***ялау.*** ▬ *Аҡназар майҙан һарҡып сыҡҡан һөҙлөктө үҙенең усынан ...* ***ялап*** *ултырҙы.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡола ат тоҙҙо туйғансы* ***ялап*** *китте лә барҙы, ти.* Әкиәттән. *Ашап туймағанды* ***ялап*** *туймаҫһың.* Мәҡәл. *Ауыҙы онға тейгән эт тирмән* ***яламай*** *түҙә алмай.* Мәҡәл.

3. *күсм.* Нимәнелер тотош һаҡлап, уратып алыу (ут, тулҡын һ. б. ҡарата). *Ут* ***яланы*** *урман биттәрен.* Б. Вәлит. *Тулҡын һикерә, ... тулҡын* ***ялай*** *Иҙел ярҙарын.* М. Кәрим.

**ялағай I** *и.* Бик алыҫта, офоҡта күк күкрәмәй генә ялтлаған йәшен уты. *Күк йөҙө аяҙ, ҡибла яҡта* ***ялағай*** *уйнай.* А. Таһиров.

**ялағай II** *с.* Яҡшы күренергә, кемгәлер ярарға тырышҡан; ярамһаҡ. ***Ялағай*** *кеше.*

**ялағайлан I** *ҡ.* Ҡуштанланып яҡшы күренергә, кемгәлер ярарға тырышыу; ярамһаҡланыу. *Ҡалам, һин ни күрһәң, шуны күрермен, — тигән ул* [*егет*], *Абдрахманға* ***ялағайланып.*** Ә. Вахитов. *Эт* ***ялағайланып,*** *ҡойроғон болғап, һунарсы янына килә башлай.* Әкиәттән.

**ялағайлан II** *ҡ. диал.* Ялҡауланыу. [*Юлай*:] *Был Биктимер ошо осорҙа бик* ***ялағайланып*** *китте әле ... Малды йүнләп, йәйрәтеп ашата белмәй.* С. Мирасов.

**ялан I** *и.* Асыҡ, тигеҙ урын. *Киң* ***ялан.*** *Ҡола* ***ялан.*** ▬ *Сиге күренмәй йәйелеп ятҡан киң, тигеҙ* ***яланды*** *ҡырҡып үткән оҙон, һай йәйпе йылға буйына Ялпаҡйылға ауылы ултырған.* Ғ. Дәүләтшин.

2. Баҫыу, ҡыр. [*Ғәйни*:] ***Ялаңға*** *барып, ашлыҡтарҙы ҡарап ҡайтырға уйлап торам әле.* Т. Йәнәби.

**ялан II** *с.* Өҫтән кейем, көп менән ҡапланмаған. ***Ялан*** *аяҡ.* ***Ялан*** *баш.* ***Ялан*** *ҡул.* ***Ялан*** *өҫ.* ▬ [*Хәйретдин менән Күккүҙ*] ***ялан*** *ҡылыс ялтыратып, көс һынашҡан.* Н. Иҙелбай.

**ялан III** *с.* Буйлыҡ ебе бер генә ҡат булған. ***Ялан*** *киндер.*

**ялан IV** *р. диал.* Һәр ваҡыт, гел. ***Ялан*** *әрләшеү.*

**ялан V** *ҡ.* 1. Үҙ алдыңа низер ялау. ***Яланып*** *ултырыу.*

2. Иренде ялау. [*Бабай*] ***яланып*** *алды һәм иренен ҡыбырлатып ҡуйҙы.* К. Мәргән.

**ялған I** *с.* 1. Ысынға тап килмәгән, ысын булмаған, алдыҡ. ***Ялған*** *хәбәр.* ▬ *Һүҙҙәрҙең барыһы* ***ялған,*** *береһе ысын һүҙ түгел.* Ш. Бабич. *Нәфсе аҙғынлыҡҡа,* ***ялған*** *боҙоҡлоҡҡа өндәй, намыҫ онотола. Ә иң аяныслыһы — кеше аҙмыштары тапала.* Ә. Хәкимов.

2. Ысынға оҡшатып яһалған, алдау маҡсатында эшләнгән. ***Ялған*** *аҡса.* ***Ялған*** *документ.* ▬ [*Ҡыҙрас*] ***ялған*** *һаҡал-мыйығын алып ырғыта. Бөтә халыҡ Ҡыҙрасты танып, таң ҡала.* Әкиәттән.

3. Ике йөҙлө, яһалма. ***Ялған*** *мөнәсәбәт.* ▬ ***Ялған*** *дуҫың оҡшаш күләгәгә: ҡояш булһа — ҡалмаҫ артыңдан, әгәр инде көнөң болот булһа — юғалыр ул өнһөҙ алдыңдан.* Р. Ғарипов.

**ялған II** *ҡ.* 1. Алда булған эш-хәл, күренеш менән бәйләнеп, ҡушылып дауам итеү. *Сәғәт туғыҙынсы китә, ал таң көнгә* ***ялғана.*** Т. Арслан.

2. Фекер, һүҙҙәр үҙ-ара бәйләнеп, ҡушылып дауам итеү. *Һүҙ һаман* ***ялғанып*** *китә алмай торҙо.* Ә. Харисов.

*Кинәт кенә көлкө башлана, береһе башлай, икенсеһе ҡушлай, әкиәттәргә әкиәт* ***ялгана.*** Ғ. Мәсғүт.

3. Туҡталып торған хәлдән яңынан ғәмәлгә килеү, дауам итеү. *Дөрөҫлөк еңде яманды, өҙөлгән дуҫлыҡ* ***ялганды.*** Н. Нәжми.

4. Бер-бер артлы килеү, үҙ-ара тоташыу. *Өйҙөң һул яғында ... — кирбес келәт, уға текәлеп,* ***ялганып*** *киткән ҡура, бәләкәй генә һарай.* Һ. Дәүләтшина.

**яллан I** *ҡ.* Билдәле бер хаҡҡа йәки ниндәйҙер шартҡа күнеп эш башҡарыу. *Көтөү көтөргә* ***ялланыу.*** *Эшкә* ***ялланыу. Ялланып*** *эшләү.* ▬ *Атайым ҡартайһа ла һаман кешегә* ***ялланып*** *бесән саба, ураҡ ура.* Т. Йәнәби.

**яллан II** *ҡ.* 1. Ит ултырып, ҡалынайыу (елкәгә ҡарата). [*Мырҙабаевтың*] ***ялланып*** *ҡуша үҫкән елкәһе, йомро яурын баштары көс аңҡытып тора.* Б. Бикбай.

2. Һуҡҡандан, бәрелгәндән ҡыҙара бүртеп тәндә юлаҡ барлыҡҡа килеү. ***Ялланып*** *сығыу.* ***Ялланып*** *тороу.* ▬ *Ҡамсы эҙҙәре* [*көтөүсенең*] *арҡаһында* ***ялланып,*** *ярылып тора.* А. Таһиров. *Шайтан ашығымдың эргәһе ҡара ҡыҙыл булып* ***ялланып*** *сыҡҡан.* Н. Мусин.

**ялман I** *и.* Кимереүселәр отрядына ҡараған, оҙон артҡы аяҡтары менән һикереп йөрөй торған, нәҙек оҙон ҡойроҡло дала йәнлеге. *Яр ҡабырғаһындағы юлдың саңын борҡотоп* ***ялман*** *сабып китте.* И. Көҫәпҡол.

**ялман II** *ҡ.* 1. Аш-һыуға ымһынып иренде ялау. ***Ялманып*** *ҡуйыу.*

2. *күсм.* Ниндәйҙер хис менән ымһыныу. [*Баттал*] *Ғәлимәнең беләктәренә ... тулы күкрәктәренә* ***ялманып*** *ҡарай башланы.* А. Таһиров.

**ялпы I** *и.* Киң ҡатлам халыҡ; күмәк төркөм. *Эшсән* ***ялпы.*** *Ярлы-****ялпы.*** ▬ *Һалдат* ***ялпыһы*** *эшселәр яғында булып, батшаларына, байҙарына ҡаршы мылтыҡ йүнәлдермәйенсә, бер нәмә лә сыҡмаҫ.* А. Таһиров.

**ялпы II** *с.* Йыш ағаслы; ҡуйы. ***Ялпы*** *урман.*

**ялпы III** *с.* Ялпылдап торған; һалбыр. ***Ялпы*** *ҡолаҡ.* ▬ ***Ялпы*** *ҡойроҡ етеҙ тейен, оя яһай ботаҡҡа.* Ғ. Ибраһимов.

**ян I** *и.* 1. Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тартҡан боронғо уҡ атыу ҡоралы; йәйә. *Мөгөҙ* ***ян.*** — *Һунарсы тиҙ генә* ***яны*** *менән уғын алып, эткә күҙәй.* Әкиәттән. ***Япдар*** *ҙа тарттым, уҡ аттым, беләк(к)әйем ергә таяныпl* Халыҡ йырынан.

2. Ағастан бөгөп, тарамыштан кереш тартып яһалған йөн теткес. ***Ян*** *менән йөн тетеү.* ***Янды*** *муйыл ағасынан яһайҙар.*

**ян II** *и.* 1. Кемдеңдер, нимәнеңдер яҡын тирә-яғы, эргәһе. *Өй* ***яны.*** *Урман* ***яны.*** — *Йәнтимер урынынан ҡуҙғалды һәм бик әшлекле ҡиәфәт менән беҙҙең* ***янға*** *килде.* С. Агиш.

2. Кем йәки нимәнеңдер уң һәм һул яҡ эргәһе, йәнәш яҡ (ал һәм арт яҡҡа ҡаршы). ***Янға*** *ултыртыу.* ***Янда*** *ятыу.* — *Ятҡа ялынғансы, ят та* ***яныңды*** *һәрмә.* Әйтем.

**ян III** *ҡ.* 1. Ут тәьҫиренә бирелеп юҡҡа сығыу; утта көйрәү. ***Яна*** *башлау.* ***Янып*** *бөтөү.* — *Ҡайын түмәрҙәре төтәп ятты-ятты ла ҡапыл ялҡынланып* ***янып*** *китте.* Я. Хамматов. *Бер ағас мейестә лә* ***янмаҫ,*** *ике ағас далала ла һүнмәҫ.* Мәҡәл. *Кемдең итәгенә ут төшһә, шул* ***яна.*** Мәҡәл.

2. Уты булып, көйрәп тороу. *Күмер* ***янып*** *ята, һүнмәгән. Мейес* ***янып*** ята.

3. Етлекмәгән йәки дымлы көйө баҫылып ятыуҙан ныҡ ҡыҙып сереү, боҙолоу. *Иген* ***яныу.*** *Кәбәндә бесән* ***янған.*** — *Миңә рәхәт: күктән ҡояш йылыта, ә аҫтан* ***яна*** *башлаған тиреҫ йылыпы бәрә.* Ғ. Ғүмәр.

4. Шәп, ҡыҙыу сабып ныҡ тирләп ҡапыл һыу эсеүҙән зыянланыу, ныҡ ауырыу (йылҡы малына ҡарата). *Александр саптырып Өфөгә ... бик шәп килгәнлектән күк ат арып, сәсәп,* ***янып*** *үлде.* «Батыршаның хаты». *Ат* ***янһа,*** *бер биҙрә һөттө һалҡын боҙға ҡуйып һыуытып шуны эсерәләр, һуңынан андыҙ тамыры ҡайнатып эсерәләр.* Хикәйәттән.

5. Ауырыу һ.б. сәбәптән эҫе, ҡайнар булып тороу (тәнгә ҡарата). *Тәне ут һымаҡ* ***яна. Янып*** *ауырыу.* — *Шулай бер мәл* ***янып,*** *башым ауыртып, кәйефһеҙләнеп киттем.* Х. Түләкәев.

6. Ҡан төшөүҙән һ. б. ҡыҙарыу йәки эҫе булып тороу. *Битем* ***яна.*** — *Беҙ өйгә ҡайтырға сыҡҡанда минең аяҡ табандарым ут кеүек* ***яна*** *ине.* З. Хисмәтуллин.

7. Оҙаҡ ҡулланыуҙан, ныҡ ҡыҙыуҙан боҙолоу. *Лампочка* ***янған.*** *Үтек* ***янған,*** *эшләмәй.*

8. *күсм.* Ҡояш нурынан ҡыҙарыу, ҡарайыу (тәнгә ҡарата). *Ҡояшта* ***яныу.*** *Ҡояшта* ***янып*** *ҡарайыу.*

9. *күсм.* Нур сәсеп яҡтыртып тороу, яҡтылыҡ таратыу. *Урам мөйөшөндә тоноҡ ҡына булып электр лампаһы* ***яна.*** С. Агиш. *Күктә тиһәң мең-мең йондоҙ ем-ем* ***яна.*** Н. Нәжми.

10. *күсм.* Күңелдә тойғо, хис кисереү. *Һөйөү менән* ***яныу.*** *Халыҡ өсөн* ***яныу.*** *Нәфрәт менән* ***яныу.*** — *Ул* ***яна,*** *тик ҡайғырып* ***янмай, яна*** *шатлыҡ менән.* Ш. Бабич.

11. Нимәгәлер ныҡ бирелеп, күңелдә дәрт, ҙур теләк менән башҡарыу. ***Янып*** *йәшәү.* ***Янып*** *эшләү.* — *Ил ҡарттары ни тиҙәр?* ***Янып*** *эшлә һин тиҙәр.* А. Игебаев.

**яңаҡ I** *и.* Биттең ике сикәнән түбәнге тештәр урынлашҡан өлөшө; яҡ. ***Яңаҡҡа*** *таяныу.* — *Нәғим ас* ***яңаҡтарын*** *тағы ла эскәрәк һурып, кепка аҫтынан ғына ҡарап ултыра.* Һ. Дәүләтшина. *Сәғиҙә көндәлеген япты ла, ҡулын* ***яңағына*** *ҡуйып уйланып ултырҙы.* М. Тажи. *Яманға ялынһаң,* ***яңағың*** *һыныр.* Мәҡәл.

**яңаҡ II.** *и.* Ишек, тәҙрә уйымдарының ян ағасы; яҡ. *Ишек* ***яңағы.*** *Тәҙрә* ***яңағы.*** — *Тәҙрәләрҙең* ***яңаҡтары,*** *ҡашағалары, төптәре майлы аҡ буяу менән буятылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡарағай ишек, төҙ* ***яңаҡ,*** *төшөрә килдем, атаҡайым.* Сеңләүҙән.

**яңылыш I** *с.* 1. Дөрөҫкә, ысынға тура килмәгән, дөрөҫ түгел. ***Яңылыш*** *тәржемә.* ***Яңылыш*** *һүҙ.* ***Яңылыш*** *фекер.* ***Яңылыш*** *һығымта.*

2. Йүнәлеше дөрөҫ булмаған; хата. ***Яңылыш*** *юл.* — [*Сәғиҙә:*] *Инәй, килгән саҡта беҙ был шишмәне үтмәгәйнек бит,* ***яңылыш*** *яҡҡа китеп бармайбыҙмы икән?* М. Тажи.

3. Тейешле тәртиптән, ҡағиҙәнән ситләшкән; хата. ***Яңылыш*** *юлға баҫыу.* — *Әгәр бер* ***яңылыш*** *эш эшләһәм,*

*полевой судҡа бирерҙәр, атырҙар ... тигән береһенән-береһе ҡурҡыныс уйҙар башҡа килә.* Д. Юлтый.

**яңылыш** II *ҡ. 1.* Яңылышлыҡ ебәреү; хаталаныу. *Күҙ **яңылыша**. Фекер **яңылыша**.* ▬ *Башта дөрөҫ атлап сыҡҡайныҡ, ҡыҙҙар тапҡырынан үткәндә беҙҙең аяҡтар **яңылышты**.* Д. Юлтый. *Мәсеттә Ҡөрьән уҡыған саҡта **яңылышһаң**, бөтә мәсет ... әйләнгән кеүек була торғайны.* Т. Йәнәби.

2. Тейешле тарафтан, йүнәлештән тайпылыу. *Юлдан **яңылышыу**.* ▬ *Ир **яңылышып** ҡулға төшөр, ҡош **яңылышып** турға төшөр.* Әйтем.

**яп** I *ҡ.* 1. Асыҡ торған ишек, тәҙрә кеүек нәмәне кире ҡаплау. *Ҡапҡаны **ябыу**. Тәҙрәне **ябыу**. Һандыҡты **ябыу**. Шкафты **ябыу**.* ▬ *Ҡорбанов ишекте шартлатҡансы **ябып** сығып китте.* Б. Бикбай.

2. Ҡапҡас, япҡыс менән ҡаплау. *Банканы **ябыу**. Кәстрүлде **ябыу**. Мейес ауыҙын **ябыу**.*

3. Асылған нәмәне кире ҡаплау, ҡаушарыу. *Китапты **ябыу**.* ▬ *Сәгиҙә көндәлеген **япты** ла, ҡулын яңағына ҡуйып уйланып ултырҙы.* М. Тажи.

4. Нәмәнеңдер эшен туҡтатыу йәки ғәмәлдә булыуын бөтөрөү (предприятие, учреждение, ойошма һ. б. ҡарата). *Институтты **ябыу**. Кассаны **ябыу**.* ▬ *Магазинды **ябып** йоҙаҡланылар ҙа пломба һуҡтылар.* С. Ағиш.

5. Барышын туҡтатыу, тамамлау. *Бюро ултырышын **ябыу**. Йыйылышты **ябыу**. Конференцияны **ябыу**.*

6. Индереп бикләү, ҡайҙалыр урынлаштырыу. *Күсте умартаға **ябыу**. Ситлеккә **ябыу**.* ▬ *Өйөрҙө ... байҙың ялан кәртәһенә **яптылар**...* Н. Мусин.

7. Һаҡ аҫтына алыу, ултыртыу. *Төрмәгә **ябыу**.* ▬ *Буләрхан ... Ҡолтубәне хөкөм итеп, зинданға **япты**, ти.* Әкиәттән.

8. Өҫтән көпләү, бөркәү. Башҡа шәл *ябыу. Өҫкә юрған ябыу.*

9. Ҡоролмаға ҡыйыҡ ҡуйыу, ҡоролманы өҫтән ҡаплау. *Аҙбар башын **ябыу**. Ҡалай менән **ябыу**. Шифер менән **ябыу**.* ▬ *Ҡабаланған булып ... ҡыйыҡ **япмағанмын** икән был өйгә.* А. Игебаев.

**яп II** *киҫ.* «Я» өнө менән башланған төп сифаттарға йәки рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. ***Яп-яҡты.***

**япраҡ I** *и.* Үҫемлектең ҡояш нуры ярҙамында углекислота һәм һыуҙы шәкәр матдәһенә әйләндереп туҡланыу өсөн хеҙмәт иткән төрлө формалағы йәшел йоҡа өлөшө. *Ағас* ***япрағы.*** *Йәшел* ***япраҡ.*** *Үлән* ***япрағы.*** *Һары* ***япраҡ. Япраҡ*** *ҡойолоу.* ***Япраҡ*** *ярыу.* ▬ *Муйыл, сирень еҫтәре аңҡып торған, ҡайын, йүкәләр шаулап* ***япраҡ*** *ярған ... иң күркәм бер миҙгел ине.* М. Тажи.

**япраҡ II** *и.* Мунсала сабыныу өсөн һепертке итеп бәйләгән йәшел япраҡлы ҡайын бөтаҡтары; миндек. ***Япраҡ*** *бәйләү.* ***Япраҡ*** *менән сабыныу.*

**яр I** *и.* Һыуға килеп терәлгән ҡоро ер сите. *Диңгеҙ* ***яры.*** *Йылға* ***яры.*** *Текә* ***яр.*** ▬ *Иҙел* ***ярҙарынан*** *һырттар киткән, сағыл таштар ята тауында.* Ғ. Сәләм. *Ярһып ташҡан яҙғы ташҡын һыуҙар тулҡын-тулҡын* ***ярҙы*** *ҡағалар.* Ғ. Амантай.

**яр II** *и.* Күмәк халыҡҡа ҡысҡырып белдергән иғлан; оран. *Арыҫлан тик ятманы, сығарҙы* ***яр:*** *«Килһендәр бында, — тине, — барса януар».* М. Ғафури. [*Көнәфейә*] *ике ярсыны саҡырып алды ла бейҙең әмерен йәүкәләү өсөн урам һайын* ***яр*** *ҡысҡырырға ҡушты.* «Бикйән мәргән».

**яр III** *ҡ.* 1. Ҡулдан төшөрөп йәки сатната һуғып, бөтөнлөк сифатын юҡ итеү; ватыу. *Сынаяҡты* ***ярыу.*** *Тәҙрәне* ***ярыу.*** ▬ *Мәҙинә сәскәне ултыртам тигәндә төшөрөп ебәреп, банканы* ***ярған.*** Ш. Янбаев. [*Ҡаһым түрә*] *яуға сапҡан мәлдәрендә тау-таш* ***ярыр*** *йылдам ир ине.* Халыҡ йырынан.

2. Ҡабығын боҙоп, емен ашау. *Көнбағыш* ***ярыу.*** ▬ *Зөләйха сәтләүекте артыҡ тауышын сығармай, аҡрын ғына* ***яра.*** Т. Йәнәби.

3. *күсм.* Ныҡ тыныс һыҙлау; шаңғытыу. *Ер* ***ярып*** *үкереү. Ҡолаҡ* ***ярып*** *ҡысҡырыу. Тынлыҡты* ***ярыу.*** ▬ *Һауа* ***ярып*** *мылтыҡ шартланы.* Р. Ниғмәти.

4. Буй-буй өлөшкә бүлеү. *Сыра* ***ярыу.*** *Таҡта* ***ярыу.*** *Утын* ***ярыу.*** ▬ *Аҡбулат ҡарт ғүмер буйы ҡолға ҡырҡҡан да ҡыуғын ҡыуған, ҡарағай йыҡҡан да тыранса* ***ярған.*** Экиәттән.

5. Оҙон буй итеп йыртыу йәки йәрәхәтләү. *Күлдәк итәген* **ярып** *ебәреү. Ҡолап тубыҡты* **ярыу**. — *Һаҙаҡ Аҡһаҡ ҡоланың һыртын* **ярып**, *бер ҡолағының осон йырып барып сыға.* «Аҡһаҡ ҡола».

6. Оҙон буй итеп ике яҡҡа айырыу. *Сәсте* **ярып** *тарау.* — *Утарҙы уртаға* **ярып**, *һалҡын шишмә шылтырап ағып ята.* Һ. Дәүләтшина. *Дошмандың сафын* **ярып** *сыҡҡан ир Салауат Юлай балаһы.* Х. Ғәбитов.

7. Нимәнелер үтәнән-үтә йырыу. *Батҡаҡ* **ярып** *сығыу. Ҡар* **ярып** *атлау.* — *Төндә* **ярып** *йүнәлдем мин завод яғына.* Ғ. Сәләм. *Күл шаулатып, һыу* **ярып**, *ерҙә дауыл ҡуптарып, Аҡбуҙ сығыр — мал ҡото.* «Аҡбуҙат».

8. *күсм.* Ныҡ итеп туҡмау; һыҙырыу. *Сыбыртҡы менән* **ярыу**. — *Ул [Өлкаман] Айрасты кинәнеп* **яра** *башланы.* Ш. Насыров.

**яра I** *и.* 1. Тәндәге йәки эске бер ағзалағы ҡырҡылып, тишелеп һ. б. зыянлаған урын; йәрәхәт. *Асыҡ* **яра**. *Ауыр* **яра**. *Мылтыҡ* **яраһы**. *Тән* **яраһы**. **Яра** *боҙолоу.* **Яраны** *бәйләү.* — *Аттың уң аяғы тубығынан түбән ҡамсы кеүек һалынып төшкән, асыҡ* **яраһынан** *соролдап ҡан ағып тора.* Б. Бикбай. *Сәмреғош телен сығарып Айыугөлаҡтың киҫелгән ерен бер генә ялағайны,* **яраһы** *уңалды ла ҡуйҙы, ти.* Әкиәттән.

2. *күсм.* Ауыр кисереш, рухи талап. *Мөхәббәттән булған* **яралар** *ҙа, һуғыштарҙан ҡалған яралар ҙа бер үк улар, беҙҙең йөрәктәргә бер үк ут һәм әрнеү һалалар.* Н. Нәжми. *Ҡул яраһы бөтөр, тел* **яраһы** *бөтмәҫ.* Әйтем.

**яра II** *ҡ.* 1. Ниндәйҙер маҡсатҡа, эшкә файҙаланыу өсөн яраҡлы булыу, билдәле бер талапҡа яуап биреү. *Эшкә* **ярау**. — [*Мулла*:] *Гөлйөҙөм һинең улыңа хәләл ефетлеккә* **ярамай**, *сөнки ул сит егет ҡулында.* Һ. Дәүләтшина. *Мин матрос булырға бик теләнем, ләкин алманылар,* **ярамайһың**, *тинеләр.* Д. Юлтый. *Бөгөнгө аҡыл иртәгегә* **ярамай**. Мәҡәл. *Йорттағы уй юлға* **ярамай**. Әйтем.

2. Таман булыу, тап килеү. *Итек аяҡҡа* **ярау**. — *Гәрәйҙең алмаш күлдәк-ыштаны юҡ ине. Үҙ баҙарын төшөрмәҫ өсөн был турала ул хужаға әйтмәне ...*

*Шәүәлиҙең күлдәк-ыштаны барыбер уға **ярамаҫ** ине.* Б. Бикбай.

3. Әҙәпкә, тәртипкә, гөрөф-гәҙәткә һ. б. ярашлы булыу, мөмкин булыу. *Тәмәке тартырға **ярамай**.* ▬ [*Ғәтиә — Самсонға*:] *Зөләйханы ниңә үпкәләттең, улай яңы ғына танышып, хәҙерҙән үк үпкәләшеү **ярамаҫ**, күңелен тап.* Т. Йәнәби. *Арыҫландай егет ай булһаң да, кәңәш итмәй эшләү **ярамай**.* Халыҡ йырынан.

4. Эшең, ҡылығың менән кемгәлер хуш килеү; оҡшау. *Бисәгә **ярау**. Иргә **ярау**. [Ҡәйнәгә **ярау**. Түрәгә **ярау**.* ▬ *Һылыулыҡ та менән **ярамайҙар**, ҡуштан булыу менән **ярайҙар**.* Халыҡ йырынан. *Биргән бейгә **яраған**, бирмәгән кемгә **яраған**.* Әйтем. *Иргә **яраған** миргә ярар.* Әйтем. *Көйһөҙ кейәүгә ай ҙа **ярамай**, көн дә **ярамай**.* Әйтем. *Тура әйткән туғанына **ярамаған**.* Әйтем.

**яран I** [*фарс.*] *и.* **1.** Халыҡ араһында етәксе, башлыҡ булған кешенең эшендә, көрәшендә һ. б. иң яҡын ярҙамсыһы, иптәше. *Батшаның **арандары**. **Яран** булыу.* ▬ *Комдив ... һәр бер полктың хәрәкәт итеү йүнәлешен билдәләне. — Айбарҙар, алға! — тине ул **арандарын** изге юлға оҙатып.* Ә. Ихсан.

2. Ярҙамсы, иптәш. [*Иәмгәле*:] *Батырмын тип ялан-да яңғыҙ булма, үҙеңә тиң **арандар** эҙлә.* С. Агиш.

**яран II** [*рус.* герань < *гр.*] *и.* Бесәй табаны һымаҡ түңәрәк, еҫле япраҡлы, төрлө төҫтәге өйкөм сәскәле үҫемлек. *Ҡыҙыл **яран**. Туғай **яраны**.*

**ярат I** *ҡ.* **1.** Кемде йәки нимәлер үҙ итеп, ныҡ яҡын күреү. *Баланы **яратыу**. Кешене **яратыу**. Тыуған илде **яратыу**.* ▬ *Ҡарттар улдарын бик **яратҡан**, ул ни теләһә, шуны үтәргә әҙер торған, ти.* Экиәттән.

2. Икенсе енестәге кешегә мөнәсәбәт тойғоһо кисереү; һөйөү. ***Яратҡан** егет. **Яратҡан** ҡыҙ. Аҙнагол сабырһыҙлана, мин Зөлхизәне **яратам**, унһыҙ йәшәй алмайым, тип ныҡыша.* З. Биишева.

3. Нимә менәндер мауыгыу, үҙ теләгең менән шөгөлләнеү. *Китап **яратыу**. Эш **яратыу**.* ▬ *Дивизион командиры Макеров һунарсылыҡты үлеп **ярата** торған кеше ине.* С. Кулибай.

4. Нимәгәлер әүәҫ булыу. ***Йоҡларға яратыу. Уйнарға яратыу.*** — *Мин һыуҙың урғылып аҡҡан урындарын ҡарап ултырырға* ***яратам.*** Д. Юлтый.

5. Ниндәйҙер шартҡа ҡулайлашҡан булыу (хайуандар, үҫемлектәр һ. б. тураһында). *Сейә эзбизле тупраҡты* ***ярата.***

**ярат II** *ҡ.* Барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу, тормошта бар итеү. — *Алла шулай* ***яратҡас,*** *бер нәмә лә эшләп булмай.* И. Насыри. *Был донъя бер нәмәне лә яңғыҙ итеп* ***яратмаған*** *шул.* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡатайҙы дауға* ***яратҡан,*** *бөрйәнде яуға* ***яратҡан.*** Әйтем.

**ярат III** *ҡ.* Туҡлыҡлы аҙыҡ ашатып, махсус рәүештә тәрбиәләп кәүҙәһен еңеләйтеп атты ярышҡа, бәйгегә әҙерләү. *Һабантуйға ат* ***яратыу.*** — *Ырымбурға барғас, йүгертеү алдынан Аласабырҙы* ***яратҡандар.*** Ж. Кейекбаев. *Шул көндән һуң атайым Ҡола ҡашҡаны бәйгегә* ***ярата*** *башланы.* С. Кулибай.

**ярат IV** *ҡ.* Ярарлыҡ итеп килештереү, тап килтереү. *Йоҙаҡҡа асҡыс* ***яратыу.*** *Аяҡҡа туфли* ***яратып*** *булмай.*

**ярау I** *и.* 1. Сара, хәстәр. *Юл* ***ярауы*** *күреү.* — *Туйҙы тиҙ булдырыу өсөн туй* ***ярауын*** *күрә башланылар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

2. *күсм.* Тәбиғи йомош; хәжәт. *Кесе* ***ярау.*** *Оло* ***ярау. Ярау*** *итеү.* — *Хәби ... Сурағолға әйләнде: «Атаһын, әсәһен, әйтерһең, Хәби бай үлтергән. Уларҙың ҡәбере өҫтөнә барып* ***ярау*** *итергә гәрләнәм мин, әгәр белгең килһә».* Т. Хәйбуллин.

**ярау II** *с.* Яуға, бәйгегә һ. б. ярарлыҡ итеп махсус рәүештә әҙерләнгән, тәрбиәләнгән; яратылған. ***Ярау*** *ат.* ***Ярау*** *юрға.* — *Кинйәләрҙең эргәһенән генә* ***ярау*** *аттарға атланған яугир башҡорттар үтеп китте.* Ғ. Ибраһимов.

**яраш I** *и.* Ниндәйҙер шарттар менән үҙ-ара килешеп, ярашҡан хәл һәм шуны нығытҡан ҡағыҙ; килешеү. [*Батша*] *япон менән, бөтә һорағандарына риза булып, хурлыҡлы* ***яраш*** *яһай һалды ла, үҙенең Рәсәй халҡы менән һуғышырға кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**яраш II** *ҡ.* 1. Боҙолған араны төҙәтеү, татыулашыу; килешеү. [*Рәхимә*:] *Улар* [*балалар*] *ни, көсөк кеүек: хәҙер талаша, хәҙер* ***яраша.*** Һ. Дәүләтшина. *Ағай-эне талашыр, атҡа менһә* ***ярашыр.*** Мәҡәл.

2. Ни менәндер риза булыу; килешеү. *Малай ҡараштары һис* ***ярашмаҫ,*** *күпме ялған менән* ***ярраштым.*** Р. Бикбаев.

**ярштыр I** *ҡ.* Боҙолошҡан кешеләрҙе килештереү. *Ә бына Иомағол менән* [*Ямалдың*] *икеһенең араһын* ***ярштырыр*** *кәрәк.* М. Тажи. *Ике асыулы бергә килһә,* ***ярштырған*** *һары бал, ике сәсән бергә килһә, һайраштырған һары бал.* Ҡобайырҙан. *Бар* ***ярштырыр,*** *юҡ талаштырыр.* Әйтем.

**ярштыр II** *ҡ.* Тәрбиәләп, бешереп әҙерләү (аш-һыуға ҡарата). *Аш* ***ярштырыу.*** *Тамаҡҡа* ***ярштырыу.*** ▬ *Бибисара сулпыларын сылтырата-сылтырата аш* ***ярштырырға*** *тотондо.* Я. Хамматов. *Ҡыҙҙар үҙҙәренә ит, май, ҡорот алып килеп, ашарға* ***ярштыра.*** Әкиәттән.

**ярғы I** *и.* 1. Үҫемлек йәки тереклек тәнендәге йоҡа туҡыма йәки тире ҡатламы. *Ит* ***ярыһы.*** *Эсәк* ***ярыһы.*** ▬ *Күҙ килгән ҡунаҡҡа йылҡы ҡаҙыһы, яҙ килгән ҡунаҡҡа ҡарта* ***ярыһы.*** Әйтем.

2. Эшкәртелмәгән тире. ***Ярынан*** *бейәләй тегеү.*

3. *диал.* Шекәрә. ***Һөт ярыһы.***

**яры II** *и.* Һан менән килеп, асыҡ билдәләнмәгән урын йәки йүнәлеште белдерә; башҡа, бүтән. [*Сәхибә*:] *Ғариф хәҙрәт бер* ***яры*** *китеп барыр, һуңға ҡалырға ярамай.* Ғ. Хәйри. [*Тимерйән — Сөйөмбикәгә*:] *Әйҙә ошонан туптура өйөбөҙгә ҡайтабыҙ. ... Етәр, икебеҙ ике* ***яры*** *күп йәшәнек!* Ш. Янбаев. *Ҡырҡ кеше бер* ***яры,*** *ҡырын кеше бер* ***яры.*** Әйтем.

**яры III** *ҡ. иҫк.* Яҡтырыу. *Баталы ҡол арымаҫ, батаһыҙ ҡол* ***ярымаҫ.*** Мәҡәл.

**ярыш I** *и.* Уйындағы йәки эштәге кемуҙарзан алып барылған көрәш. *Саңғы* ***ярышы.*** *Спорт* ***ярышы.*** ***Һүҙ ярышы.*** ***Ярыш*** *башлау.* ***Ярыш*** *үткәреү.* ***Ярышҡа*** *сығыу.* ▬ *Иөҙөү* ***ярышында*** *беренселекте һис бирмәйбеҙ.* Ғ. Сәләм.

**ярыш II** *р.* Үҙ-ара ҡабырғалаш; яҡын, бергә, эргәләш. ***Ярыш** атлау.* ***Ярыш** ултырыу.* ▬ ***Ярыш** үҫкән ике йыуан ғына ботаҡ араһына нәҙегерәк ботаҡтарҙы һындырып һалып, йәтешләнеп ултырҙыҡ.* Н. Мусин.

**ярыш III** *ҡ.* 1. Уйында йәки эштә кемуҙарҙан көрәшеү, алышыу; ярышта ҡатнашыу. *Өмәселәр шулай, эшләйҙәр ҙә **ярышып** бер тына, унан туҡтап, йырлап, шаярып алалар.* Ғ. Амантай.

2. Уйында йәки эштә алға сығырға тырышып, кем йәки ни менәндер узышыу. *Ырымбур ерәне ҡазаҡ тупыһы менән тиңләшеп **ярыша** башланы.* Д. Юлтый.

**ят I** *с.* Иптәшлек, ҡәрҙәшлек мөнәсәбәте менән бәйлән-мәгән; сит. ***Ят** кеше.* ▬ *Егет булһаң, булһын һинең үҙ усағың, ә ҡыҙынма **ят** кешеләр яҡҡан утта.* Ф. Ғүмәров. *Үҙ кешең менән даулашма, **ят** кешене яҡлашма.* Мәҡәл.

2. Тыуған йәки торған ереӊ булмаған; таныш түгел; сит. ***Ят** ер.* ***Ят** ҡала.* ▬ *Аҡты йылға яңы юлдар һалып, үҙенә **ят** ерҙәр арҡыры.* Н. Нәжми. ***Ят** яҡтар, күҙ өйрәнмәгән юлдар. Аҙым һайын тиерлек яңы донъя асыла.* Р. Низамов.

3. Әлегәсә билдәһеҙ булған; сит. ***Ят** йыр.* ***Ят** тауыш.* ▬ *Өйҙә шау-шыу, яман, **ят** тауыштар, аҡ бүреләр ологан шикелле.* Н. Нәжми. *Был бутҡа ҡыҙға бик оҡшаған. Һалдаттан: — Ағаҡайым, шул **ят** ашамлығың бөтмәгән булһа, берәй киҫәген генә биреп китсе, — тип ялынған.* Көләмәстән.

**ят II** *ҡ.* 1. Тотош кәүҙә менән горизонталь хәлдә урынлашыу. *Ергә **ятыу**. Ҡырын **ятыу**. Салҡан **ятыу**.* ▬ ***Ятып** ҡалғанса, атып ҡал.* Әйтем.

2. Йоҡлар өсөн урынлашыу. *Иртә **ятыу**. Һуң **ятыу**.* ▬ *Ҡарттар көндөҙгө эште бөтөрөп, **ятырға** әҙерләнгән. Хәҙер иртә **ятмаһаң**, яҙғы ҡыҫҡа төндә йоҡо туймай.* Ғ. Дәүләтшин.

3. Ауырып, түшәктә булыу. *Больницала **ятыу**.*

4. Һалған, урынлаштырған хәлдә булыу. *Аҫҡыс өҫтәлдә **ята**. Бесән ҡырҙа **ята**. Кейем һандыҡта **ята**.* ▬ *Егетлек ерҙә **ятмаҫ**.* Мәҡәл.

5. Ғәҙәттәге булмышта, ғәмәлдә булыу. *Инде әҙәм аяғынан тапалмай, тыныс **ятҡан** ерҙәр аҡтарыла.* Т. Хәйбуллин.

6. Ғәҙәттәге тормошта йөрөү, йәшәү. *Буш **ятыу**. Өйҙә **ятыу**.* ▬ *Аҙна үткәс, бай янына килеп Оморҙаҡ: «Тик **ятыу** бик екһетте бит әле. ... Бер төрлө эш булмаҫмы?» — тип һораған.* Әкиәттән.

7. Ниндәйҙер урында йәки эштә булыу. *Ауылда **ятыу**. Бесәндә **ятыу**. Ҡунаҡта **ятыу**. Ятаҡта **ятыу**.*

8. *күсм.* Ыҡсым, килешле булыу. *Төхвәт аҡ яғалы күлдәк өҫтөнән яҡшы костюм кейгән, костюмы кәүҙәһенә **ятып** тора.* Ғ. Хәйри.

9. **-а, -п** формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, төп ҡылымға дауамлы хәҙерге заман төшөнсәһе биргән ҡушма ҡылым яһай. *Ағып **ятыу**. Бара **ятыу**. Йөрөп **ятыу**. Килә **ятыу**.* ▬ *Бер ваҡыт Кинйә малай күл буйында йөрөп **ятһа**, һыу ситендә ултырған бер ҡыҙға тап була.* Әкиәттән.

10. **-ырға** формаһындағы ҡылымға ҡушылып, киләсәк эш-хәрәкәтте белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Барырға **ятыу**. Килергә **ятыу**. Ҡайтырға **ятыу**. Үлергә **ятыу**.*

**ятыш I** *и.* 1. Ятыу, урынлашыу рәүеше. *Нәмәнең **ятышы**.* ▬ [*Әбүзәр*:] *Яҡтыла тамаҡ ялғап алмайбыҙмы? Ҡайыш **ятышы** бушаны.* Я. Хамматов.

2. Ятҡылыҡ. *Алтын **ятышы**.* ▬ *Газ күп булмаған **ятыштарҙа** иһә иң өҫтә нефть, ә уның аҫтында һыу була.* Д. Бураҡаев.

**ятыш II** *ҡ.* Йоҡоға китешеү. [*Ике һыбайлы*] *килеп еткән саҡта ауылда күптән **ятышҡандар** ине инде.* Б. Бикбай.

**яу I** *и.* 1. Берәр ил, дәүләткә ҡаршы ойошторолған һуғыш хәрәкәте. *Дошман **яуы**. **Яу** ҡайтарыу. **Яу** сабыу.* ▬ ***Яуға** ҡаршы **яу** сабыр батыр-батыр ирҙәр бар.* Ҡобайырҙан. ***Яу** серен **яу** белмәҫ.* Мәҡәл. *Ут менән һыу телһеҙ **яу**.* Әйтем. ***Яу** ҡайтһа батыр күп.* Әйтем.

2. Ғәскәр менән ғәскәр араһындағы ҡораллы алыш; һуғыш. *Изге **яу**. **Яу** асыу. **Яуға** барыу. **Яуҙан** ҡайтыу.* ▬ *Яҡшы атаның балаһы шәһит үлә **яу** йөрөп.* Салауат Юлаев.

3. Ҡоралллы ғәскәр. *Француз, француз килә, ти. Наполеоны түрә, ти, **яуы** еткән Мәскәүгә лә буҫағала тора, ти.* Халыҡ йырынан.

4. Ғәскәрҙәге ҡоралллы кеше; яугир, һалдат. *Иртуған үҙенең егерме **яуы** менән һалдаттарға ҡаршы ... һуғыша ине.* А. Таһиров. *Ул [Сәрмәсән] йырсы ла, ҡурҡыу белмәҫ **яу** ҙа булды.* «Һуңғы һартай».

5. Яман кеше, дошман. [*Тимерғотло — ханға:*] *Халҡың менән үҙең аман йөрөң, теләһәң **яу**, теләһәң дуҫ бул үҙең.* «Бабсаҡ менән Күҫәк».

6. *күсм.* Ниҙелер күпләп бөтөрөүсе, нимәнелер күп тотоноусы. *Аҡса **яуы**. Икмәккә **яу**. Утынға **яу**.* ▬ *Ураҡ еткәс, иртә-кис тә орлоҡҡа **яу** ул ҡарға.* С. Кулибай. *Үҙеңдеке үҙеңә **яу**.* Әйтем.

**яу II** *ҡ.* 1. Һауанан һибелеп төшоү (ҡар, ямғыр һ. б. күренешкә ҡарата). *Быҫҡаҡлап **яуыу**. Күк күкрәп **яуыу**. Ҡойоп **яуыу**. Һибәләп **яуыу**.* ▬ *Хайуандарҙы көрләндер, үләндәрҙе төрләндер, донъя йөҙөн нурландыр, **яу**, **яу**, ямғыр, **яу**, ямғыр!* Ш. Бабич. *Болот, болот! Ямғыр булып **яу**, **яу** ергә күнәкләп. Иген үҫһен дала тулып, беҙ йыйыйрбыҙ күмәкләп.* С. Муллабаев.

2. *күсм. һөйл.* Бер-бер артлы күпләп осоу. *Бомба **яуыу**.* ▬ *Иртән торһам, пуля **яуа** шул ҡайғылы башыма.* Бәйеттән.

3. *күсм.* Бер-бер артлы күпләп килеү. *Рәхмәт **яуа**. Сәләм **яуа**. Хат **яуа**.* ▬ *Таһиров урынына ултырырға өлгөрмәне, уға комсокомитет ағзаларынан һорау **яуа** башланы.* Н. Мусин.

**яусы I** *и.* Боронғо туй йолаһы буйынса, егеткә кәләш әйттереү өсөн ҡыҙ һоратып, ҡоҙалап барған кеше. ***Яусы** булып барыу. **Яусы** ебәреү.* ▬ *Был йәш батша күрше батшаның ҡыҙына әллә нисә тапҡыр **яусы** ебәреп ҡараһа ла, ҡыҙ риза булмаған, ти.* Әкиәттән. *Яҡшы атҡа ҡамсы, уңған ҡыҙға **яусы** кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**яусы II** *и.* Яугир. [*Таңдыса:*] *Был ерҙә Урал батырҙың **яусылары** ҡойма яуында ышыҡланған булыр.* «Ҡуңыр буға».

**яһа I** *ҡ.* 1. Тейешле маҡсатҡа, сифатҡа килтереп нимәлер эшләү; эшләп бар итеү. *Кәмә **яһау**. Уйынсыҡ*

**яһау**. *Умарта* **яһау**. — *Ҡайтып етте сыйырсыҡ, тиҙерәк йүгереп сыҡ! Ҡыйыҡ ҡыйып ҡыйғыслап,* **яһап** *ҡуйҙым оясыҡ.* Ғ. Амантай. *Егет ... имән ағасы ҡырҡып, йәйә* **яһап** *алған. Өс айыуҙың тарамыштарынан кереш* **яһап** *тарттырған.* Әкиәттән.

2. Үҙенә бер төрлө ярараштырып, әҙерләү (аш-һыуға ҡарата). *Айран* **яһау**. *Ҡәһүә* **яһау**. *Сүпрә* **яһау**. — [*Сыртланов*:] *Буҙа* **яһау** *өсөн уҡыу кәрәкме ни? Буҙаны уны, ҡустым, һоло йәки арпа ярмаһынан әсетеп эшләйҙәр.* С. Агиш.

3. Ниндәй ҙә булһа эште, сараны ойоштороу; үткәреү. *Байрам* **яһау**. *Туй* **яһау**. — *Беҙҙең яҡта өмә* **яһау** *йолаһы бар: берәү өмәләп өйөн күтәреп ала, берәү йорт ҡаралтыһын өмә* **яһап** *төҙәтеп ҡуя.* С. Кулибай.

4. Исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған эште, сараны үтәгәнде, башҡарғанды белдерә. *Гимнастика* **яһау**. *Доклад* **яһау**. *Иомғаҡ* **яһау**. *Күнекмә* **яһау**. *Ҡамасаулыҡ* **яһау**. *Операция* **яһау**. *Тәьҫир* **яһау**. *Һығымта* **яһау**. *Шелтә* **яһау**.

**яһа II** *ҡ*. Атыр өсөн әҙерләп, яһаҡ ҡуйыу; ҡороу. *Шафиҡ мылтығын* **яһарға** *маташып ҡараны. Булдыра алманы.* Я. Хамматов.

**яһаҡ I** *и*. Батша Россияһында Волга буйы һәм Себер халыҡтарынан Рус дәүләте файҙаһына йыйылған һалым. **Яһаҡ** *түләү.* **Яһаҡ** *һалыу.* — *Башҡорттар ул ваҡыт ат егеп йөрөү һәм ҡышҡы юлдар булмағанлыҡтан* **яһаҡты** *ҡыш көнө саңғылар менән Ҡазан ҡалаһына илтеп тапшыра ине.* Ғ. Фәхретдинов. *Билдәле булыуынса, 1754 йылдан һуң башҡорттар һәм мишәрҙәр [батшаға] рәсми рәүештә* **яһаҡ** *түләгәндәр.* Ә. Әсфәндиәров.

**яһаҡ II** *и*. Атыр өсөн әҙерләп тултырылған дары менән дороп йәки йәҙрә. *Ҡуян* **яһағы**. **Яһаҡ** *яһау.*

**яһаҡлы I** *с*. Яһаҡ түләргә тейешле, яһаҡ һалыулы. **Яһаҡлы** *халыҡ.*

**яһаҡлы II** *с*. Яһаҡ ҡуйылған; ҡороулы. **Яһаҡлы** *мылтыҡ.*

# ҠУШЫМТАЛАР

*ҠУШЫМТА 1*

## Исем ҡылымдарҙың исемләшеүе һеҙемтәһендә яһалған омонимдар

*ағыу — ағыу*
*арҡау — арҡау*
*асыу — асыу*
*аҫрау — аҫрау*
*ауырыу — ауырыу*
*ашлау — ашлау*
*баҫыу — баҫыу*
*бейеү — бейеү*
*белдереү — белдереү*
*биләү — биләү*
*битләү — битләү*
*болғау — болғау*
*борсоу — борсоу*
*бууу — бууу*
*бүгәү — бүгәү*
*бәйләү — бәйләү*
*екләү — екләү*
*игәү — игәү*
*йөкмәү — йөкмәү*
*йылыу — йылыу*
*йәйләү —йәйләү*
*көтөү — көтөү*
*күҙәү — күҙәү*
*ҡайыу — ҡайыу*
*ҡашлау — ҡашлау*
*ҡоршау — ҡоршау*
*ҡотлау — ҡотлау*
*ҡурҡыу — ҡурҡыу*
*ҡыңғырау — ҡыңғырау*
*ҡысыу — ҡысыу*
*ҡыҫыу — ҡыҫыу*
*ҡышлау — ҡышлау*
*мисәү — мисәү*
*өзләү — өзләү*
*өҫтәү — өҫтәү*
*рәнйеү — рәнйеү*
*сабыу — сабыу*
*саиҙау — саиҙау*
*салыу — салыу*
*сеңләү — сеңләү*
*сығыу —сығыу*
*сырхау — сырхау*
*сәнсеү — сәнсеү*
*талау — талау*
*тапшырыу —тапшырыу*
*тарҡау — тарҡау*
*татыу — татыу*
*таяу — таяу*
*тегеү — тегеү*
*теләү — теләү*
*тентеү — тентеү*
*теркәү — теркәү*
*терәү — терәү*

*тикшеренеү — тикшеренеү*
*тикшереү— тикшереү*
*туплау — туплау*
*түләү — түләү*
*тыныу — тыныу*
*тышау — тышау*
*уҡыу — уҡыу*
*утау — утау*
*утлау — утлау*
*үлсәү — үлсәү*
*һабыу — һабыу*
*һайлау — һайлау*
*һаҡлау — һаҡлау*
*һалыу — һалыу*
*һарҡыу — һарҡыу*
*һорау — һорау*
*һөйләшеү — һөйләшеү*
*һөйөү — һөйөү*
*һылтау — һылтау*
*һынау — һынау*
*һыртлау — һыртлау*
*һыулау — һыулау*
*шаңдау — шаңдау*
*шаңлау —шаңлау*
*ырмау — ырмау*
*ырыу — ырыу*
*эркеү — эркеү*
*әйтеү — әйтеү*
*әүрәү — әүрәү*
*ябыу — ябыу*
*яҙыу —яҙыу*
*ялғау — ялғау*
*ямау — ямау*
*ярау — ярау*
*ярыу — ярыу*
*ятыу — ятыу*

*ҠУШЫМТА 2*

## Исем ҡылымдарҙың сиратлашыуы һеҙөмтәһендә яһалған омонимдар

*аҙау — аҙау*
*арыу — арыу*
*аҫрау — аҫрау*
*ауырһыу — ауырһыу*
*баҙау — баҙау*
*биҙәү — биҙәү*
*болоҡһоу — болоҡһоу*
*бөркөү — бөркөү*
*епшеү —епшеү*
*йонсоу — йонсоу*
*йөҙәү — йөҙәү*
*кипсәү —кипсәү*
*ҡаҡһыу — ҡаҡһыу*
*ҡалҡыу —ҡалҡыу*
*ҡурау — ҡурау*
*ҡыҙыу — ҡыҙыу*
*ҡырҡыу — ҡырҡыу*
*ҡыҫтау — ҡыҫтау*
*моңһоу — моңһоу*
*мәреү — мәреү*
*өбәү — өбәү*
*сәсеү — сәсеү*
*тарау — тарау*
*тарҡау — тарҡау*
*татыу — татыу*
*тешәү — тешәү*
*томанһыу — томанһыу*
*тонсоу — тонсоу*
*төҙөү —төҙөү*
*тынсыу —тынсыу*
*урау — урау*
*һылыу — һылыу*
*шаурау — шаурау*
*ярһыу — ярһыу*

## Һүҙ формаларының осраҡлы тап килеүе һөҙемтәһендә яһалған омонимдар

| | |
|---|---|
| *ейеү (ей)—ейеү (ейе)* | *таныу (тан)—таныу (таны)* |
| *күбеү (күп)—күбеү (күбе)* | *ташыу (таш)—ташыу (ташы)* |
| *ҡороу (ҡор)—ҡороу (ҡоро)* | *яныу (ян)—яныу (яны)* |

ҠУШЫМТА 4

## Омографтар һүҙлеге

**барлыҡ** *и.* Бар булған хәл; тәбиғәт, булмыш. *Гөлйөҙөм бөтә **барлығы** менән шиғри тәбиғәтле, тәрән тойғоло ине.* Һ. Дәүләтшина.

**барлыҡ** *билд. а.* Бөтә булған; һәммә. *Күбәләктең бар йәме, **барлыҡ** хаяты гөл менән.* Ш. Бабич. [*Бибинур:*] *Ҡара әле — **барлыҡ** машина уның ҡулында лабаһа.* Н. Нәжми. ***Барлыҡ** трактористар, прицепщиктар, сәсеүселәр — бөтәһе лә иртән иртүк станға йыйылды.* Ә. Вәли.

**барса** [*фарс.*] *и.* Уҡалы ебәк туҡыма. *Аҡлы ситса, алма **барса** иң яратып кейгәнем.* Халыҡ йырынан.

**барса** *билд. а.* Бөтә булған; тотош, һәммә. ***Барса** республика. **Барса** халыҡ.* ▬ *Эй даһиҙың һәйкәле, һин **барса** һәйкәлдән бөйөк.* Х. Ғәбитов.

**бит** [биᵒт], [*рус.* < *ингл.*] *и.* Информация күләмен (һанын) үлсәү берәмеғе. *Бер байт һигеҙ **битҡа** тигеҙ була.*

**бит** [бит] *и.* 1. Кеше башының алғы яғы; йөҙ. *Киң **бит**. Оҙонса **бит**. Түңәрәк **бит**.* ▬ *Сәғиҙә усы менән **битен** ҡаплап илап тора ине.* М. Тажи.

2. Йөҙҙөң яңаҡ өлөшө, яңаҡ. *Пар алма уның **биттәре**, ирендәре ер еләге, күҙҙәре — яҡты йондоҙҙар, леп-леп тибә йөрәге.* Р. Ниғмәти.

3. Тау, ҡалҡыулыҡтың һ. б. һарҡыу өлөшө. ***Биттәрендә**, Урал тау, ҡамыштай ҡарағай урманың; итәгеңдә, Урал тау, балаҫтай болон, ҡырҙарың.* Салауат Юлаев.

4. Ниҙеңдер йәйелеп күренеп ятҡан майҙаны; йөҙ. *Ер **бите**. Күл **бите**. Ҡар **бите**.* ▬ *Эре һарғылт ҡара болоттар бер-береһенә ҡушылып күк **битен** ҡаплап алды.* М. Ғафури.

**бор** [бор], [*рус.* < *лат.*] *и.* Төрлө минерал составына инғән химик элемент. *Тупраҡта **бор** етешмәй.*

**бор** [бо°р] *ҡ.* 1. Бер урында өйрөлтөү; әйләндереү. *Аҫҡысты* ***бороу.*** ***Бороп*** *индереү.* ***Бороп*** *сығарыу. Самауырҙың моронон* ***бороу.*** ▬ *Сынбулат таш келәттең ишегендәге ҙур бығау йоҙаҡты шатыр-шотор* ***бора*** *башла*[*ны*]. М. Тажи.

2. Бер урында әйләндереп икенсе тарафҡа ҡаратыу. *Кәүҙәне* ***бороу.*** *Өҫтәлде* ***бороп*** *ултыртыу.* ▬ *Сәмрегош башын уңға* ***борһа,*** *Аҡъял батыр уға барҡылдаҡ һогондора, һулға* ***борһа*** *— турғай һогондора, ти.* Әкиәттән.

3. Өйрөлтөп ауырттырыу. *Ҡолаҡты* ***бороу.*** *Ҡулды* ***бороу.***

4. Әләктереп бер урында өйрөлтөп, тарттырыу. *Иөктөң арҡанын* ***бороу.*** *Сәғәтте* ***бороу.*** *Уйынсыҡ машинаны* ***бороу.***

5. Оҙон, тарау нәмәне уралтыу; сиралтыу. *Арҡан* ***бороу.*** *Мыйыҡ* ***бороу.*** ▬ *Ошо ҡыҫҡа арҡандарға егелгән аттар һығышта ҙур-ҙур пушкаларҙы һөйрәп йөрөй икән, тигән хәбәр ишеткәнем бар. Шуға күрә бик тәпейләп өс тынын да тигеҙ итеп* ***борорға*** *тырышам.* Н. Мусин.

**замок** [*рус.*] *и.* Феодал һарайы һәм уны уратып алған ҡәлғә. *Урта быуат* ***замогы.*** ▬ *Егерме бер йәшлек лейтенант дошманды күҙәтеп* ***замок*** *башняһында ултырған.* Ғ. Сәләм.

**замо́к** [*рус.*] *и.* Туп көбәгенә йәҙрәне бикләп ата торған механизм. ***Замо́кты*** *ябыу.*

**ирис** [*рус.* < *гр.*] *и.* Ҡамыш һымаҡ ҡыяҡ япраҡлы, һары, күк төҫтәге еҫһеҙ эре сәскәле күп йыллыҡ баҡса гөлө. ***Ирис*** *ултыртыу.*

**ири́с** [*рус*] *и.* Һөт, шәкәр ҡушып эшләнгән һор төҫтәге кубик формаһындағы кәнфит төрө. ***Ири́с*** *һурыу.*

**кит** [ки$^{ы}$т] [*рус.* < *гр.*] *и.* Һыны менән балыҡҡа оҡшаған иң ҙур имеҙеүсе диңгеҙ хайуаны. ***Кит*** *аулау.*

**кит** [кит] *ҡ.* Торған урынды ҡалдырыу, кем йәки нимәнеңдер янына ситкә хәрәкәт итеү, ҡайҙалыр йүнәлеү. *Кире* ***китеү.*** *Һыу буйлап* ***китеү.*** ▬ *Шәрәфи ҡойма буйында бер аҙ ҡарап торҙо ла, шәп кенә атлап Ғарифтарға табан* ***китте.*** И. Насыри.

**кре́дит** [*рус.* < *лат.*] *и. бухг.* Керем-сығым кенәгәһенен бөтә сығым һәм бурыстар яҙыла торған уң яҡ бите; *киреһе* дебет. ***Кре́дитҡа*** *яҙыу.*

**креди́т** [*рус.* < *лат.*] *и.* 1. Аҡса йәки тауарҙы көтәһегә биреүгә нигеҙләнгән алыш-биреш. ***Креди́т*** *алыу.* ***Креди́т*** *асыу.* ***Креди́тҡа*** *биреү. Ҡыҫҡа сроклы* ***креди́т.***

2. *фин.* Ниндәйҙер кәрәк өсөн бюджетта ҡаралған, бирелгән аҡса. *Төҙөлөш* ***кредиты.***

**орган** [*рус.* < *гр.*] *ҡ.* 1. Теге йәки был өлкәлә билдәле бер эш башҡара торған ойошма. *Милиция* ***органдары.*** *Мәғариф* ***органдары.*** *Прокуратура* ***органдары.*** *Суд* ***органдары.*** *Урындағы* ***органдар.*** *Финанс* ***органдары.*** *Һайлау* ***органдары.*** *Хужалыҡ* ***органдары.***

2. Берәр партия, берекмә, ойошма ҡулындағы газета-журнал. *«Ленин юлы» журналы ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты* ***органы*** *булып 1928 йылдың апрелендә сыға башланы.* Т. Йәнәби.

**орган** [*рус.* < *гр.*] *и.* Күректән төрлө көпшәләр үтә тын өрҙөрөп уйнай торған баҫмаҡлы бик ҙур музыка ҡоралы. ***Органда*** *уйнау.*

**сыр** [сы$^{и}$р], [*рус.*] *и.* Махсус әсеткән һөттөң һыуын һарҡытып эшкәртелгән ашамлыҡ. *Голландия* ***сыры.***

**сыр** [*сыр*] *и.* Ябыҡ итте йәки балыҡты бешергәндә һурпа өҫтөнә ҡалҡҡан ваҡ-ваҡ ҡына түңәрәктәрҙән ғибәрәт өрө. *Ашаған ашыңда суртан* ***сыры*** *ла юҡ бит.* С. Ҡудаш. *Туйға килгән туйлыҡтың, бешерәйем тиһәм,* ***сыры*** *юҡ.* Туй йырынан.

**тамбур** [*рус.* < *фр.*] *и.* Тимер юл вағонының баш-баштарындағы, ике ишек араһындағы ҙур булмаған майҙансыҡ. ***Тамбурға*** *сығыу.* ▬ *Мин* ***тамбурҙа*** *баҫып ҡарап барҙым Туймазыны үтеп киткәндә.* М. Тажи.

**тамбур** [*рус.* < *фр.* < *гәр.*] *и.* Көнсығыштағы ҡайһы бер илдәрҙә сиртеп уйнай торған музыка ҡоралдарының бер төрө. ***Тамбур*** *сиртеү.*

**тик** [ти$^{ы}$к], [*рус.* < *ингл.*] *и.* Һиндостанда, Индонезияла үҫкән эре сәскәле тығыҙ ҡаты ағас (карап, йорт һ. б.төҙөүҙә ҡулланыла). *Томбойоҡтар япрайып,* ***тик*** *ағастай сәскә атҡан.* «Урал батыр».

**тик** [тик] I *кире терк.* Ҡаршы ҡуйылған һүҙ йәки һөйләмде теркәй. *Ул [Сәғиҙә] ауыр яҙмышы хаҡында Гөлнурға ла яҙҙы,* ***тик*** *унан яуап булманы.* М. Тажи. *Кеше бик борон-борондан алға ынтылған һаман,* ***тик*** *алғы көндәрҙе ул саҡ томалап торған заман.* Р. Ниғмәти.

**тик** [тик] II *киҫ.* Үҙенән һуң килгән һүҙҙе айырып сикләү өсөн ҡулланыла. *Мин ... ҡаланың матурлығы* ***тик*** *ҙур таш биналар, магазин тәҙрәләрендәге биҙәктәр менән генәлер*

*тип уйлай инем.* С. Агиш. *Ә мин һандуғасты түгел, **тик** һине көтәм.* К. Кинйәбулатова.

**тик** [тик] III *р.* 1. Бер ни эшләмәй, эш-хәрәкәтһеҙ. *Зөләйхә, башын эйгән, бер ни өндәшмәй, **тик** ултыра.* Т. Йәнәби. *Уларға [һалдаттарға] **тик** кенә тороп үлем көтөү ҡыйын ине.* И. Насыри.

2. Бер рәүешсә, бер ҡиәфәтсә, бер ыңғайға. *Ҡарап **тик** тороу. **Тик** йөрөү.* ▬ *Беҙ шул эҙҙән **тик** барырбыҙ, таймабыҙ бармаҡ ҡәҙәр.* Ғ. Ғүмәр.

**тип** [ти$^{ы}$п], [*рус.* < *гр.*] *и.* 1. Билдәле бер төркөмгә тура килгән өлгө, төр. *Самолёт **тибы**. Яңы **типтағы** партия.* ▬ *Тарихта социаль революцияның өс **тибы** билдәле.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 февраль.

2. *биол.* Тереклек системаһындағы ҡәрҙәш кластарҙы берләштергән иң юғары төркөм. *Быуынтыҡ аяҡлылар **тибы**. Сәскәле үҫемлектәр **тибы**.*

3. Үҙенсәлекле һыҙаттар буйынса берләшкән кешеләр төркөмө. *Бар шундай ҙа **типтар**: ҡарайһың да: «Вот коммунист, — тиһең, — хас ялҡын!»* Р. Сафин.

4. *әҙ.* Айырым кеше төркөмөнөң уртаҡ һыҙаттарын дөйөмләштергән әҙәби шәхес. *Әҫәрҙәге төрлө **типтар**.*

**тип** [тип] *ҡ.* 1. Аяҡ менән ҡапыл һелтәп һуғыу. *Ишекте **тибеп** асыу. Тибенге менән **тибеү**. **Тибеп** йығыу. **Тибеп** осороу.* ▬ *Бай асыу менән теге этте **тибеп** ебәрә, эт шыңшып өрә башлай.* Әкиәттән. *Бейә ҡолонон **типһә** лә биртә **типмәҫ**.* Әйтем.

2. Аяҡ менән тырнап ҡаҙыу; сапсыу. *Ем **тибеү**.* ▬ *Тауыҡтар йүгерешеп йөрөп, ҡышҡы көлдәрҙе **тибеп** аунай.* Ғ. Дәүләтшин. *Елмерҙәкәй тауҙың көн битендә тибен генә **тибә** ҡара айғыр.* Халыҡ йырынан.

3. Шыҡыйып килеп тотоу (йыртҡыс ҡошҡа ҡарата). *Байбисә барып етергә лә өлгөрмәй, кәртә буйында ҡорҡолдап йөрөгән тауығының себешен төйлөгән **тибә** лә ҡайҡалап һауаға күтәрелә.* Я. Хамматов. *Ҡарсыға ла сойҙөм өйрәккә, **тибә** алмай төштө тирәккә.* Халыҡ йырынан.

4. Көс менән этеү. *Күнәктең төбөн боҙ **тибә**. Мылтыҡ **тибә**. Тулҡын **тибә**.* ▬ *Мөгөҙ йәйә **типкән** һыҙма уҡтар һыҙғырып, көйләп, шыйлап уҙғандар.* Б. Вәлит.

5. Һулҡ-һулҡ итеп ҡағыу (йөрәккә, тамырға ҡарата). *Дөпөлдәп **тибеү**. Йыш-йыш **тибеү**. Ҡан тамыры **тибә**.* ▬ *Таңатарҙың йөрәге сығырҙай булып **типкән**.* Ә. Вахитов.

6. Ниҙеңдер эсенән тышҡа бәреү. *Тир **тибеп** сыға. Яранан ҡан **тибеп** сыға.* ▬ *Ҡарар күҙгә әммә күренмәйҙер ер ҡуйынынан шишмә **типкәне**.* Ә. Таһирова.

7. Өҫкә ҡалҡыу, ҡалҡып сығыу. *Биткә миң **тибә**. Мыйыҡ **тибә**.* ▬ *Бешеп килгән алмаларға алһыу **типкән** төҫлө йөҙҙәрең.* «Юлай менән Салауат».

8. *күсм.* Үҙ итмәй, ҡағытыу; ҡағыу. *Мин дә кеше, ҡаҡма һәм **типмә**, ҡотто алма, йәме, Иәнбикә!* С. Кулибай. *Көтөү **типкән** мал булһа, уны сайҙа бүре алыр.* Ҡобайырҙан.

9. *күсм.* Сәлдереү, урлау. [Рәхимйән:] *Ул бер ваҡыт баҙарҙа минең ҡарсыҡтың быймаһын **тибеп** тайған.* Н. Иҙелбай.

**тир** [ти$^{ы}$р], [*рус.* < *фр.*] *и.* Сәп ҡуйып, атырға өйрәнә торған урын. ***Тирҙа** атыу. Ябыҡ **тир**.*

**тир** [тир] *и.* Тире аҫтындағы махсус биҙҙәрҙән сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк һыу. ***Тир** аға. **Тир** сыға. **Тиргә** батыу. Һалҡын **тир**. Шыбыр **тир**. Әсе **тир**.* ▬ *Маңлай **тирен** һөртөп еңемә, үркәс-үркәс тауҙар артылдым.* С. Ғәбиҙуллин. [*Мәргән*:] *Атыңа һыу бөркһәң дә **тире** ҡатмау — яу көтөү ул, һылыуҡай.* «Мәргән менән Маян». *Маңлайҙан сыҡҡан әсе **тир** табанға төшһә, тоҙ булыр.* Әйтем.

**тире** [ти$^{ы}$рә], [*рус.* < *фр.*] *и. грам.* Оҙон горизонталь һыҙыҡ рәүешендәге тыныш билдәһе [—]; һыҙыҡ. ***Тире** ҡуйыу.*

**тире** [тире] *и.* 1. Кеше һәм йәнлек, ҡош тәнен көп булып тыштан ҡаплаған ҡатлам. *Бит **тиреһе**. Маңлай **тиреһе**.* ▬ *Урман батыр тырыша торғас, бүрәнә араһынан бармағын тартып алған, ә бармаҡ **тиреһе** һыҙырылып ҡалған.* Әкиәттән.

2. Йәнлек, хайуандың тунап алған тышҡы көбө. *Айыу **тиреһе**. Бәрәс **тиреһе**. Ҡуян **тиреһе**. **Тире** иләү. Төлкө **тиреһе**. Һарыҡ **тиреһе**.* ▬ *Ҡуяндың **тиреһе** эт өргән һайын йыртыла.* Әйтем.

**тол** [тол], [*рус.*] *и.* Шартлатҡыс матдә. ***Тол** шашкаһы. **Тол** һалыу.*

**тол** [то$^{о}$л] *с.* Ире йәки ҡатыны үлеп, яңғыҙ ҡалған. ***Тол** ир.* ▬ ***Тол** ҡатын алһаң, мутлығы үҙенән ауыр булыр.* З. Биишева. *Әбей үлде, бабай **тол** ҡалды.* Әкиәттән.

**том** [том], [*рус.* < *гр.*] *и.* Әҫәр йәки баҫманың айырым китаптан торған өлөшө. *Беренсе **том**. Бишенсе **том**. Дүрт **томдан** торған һүҙлек.*

**том** [то°м] *и. иҫк.* Дауа. *Берҙән-бер көндө хан бик ҡаты ауырып китә. Төрлө яҡтан имсе саҡырталар. Имселәр килә, ҡот ҡоя, ҡарай, бер ҙә* ***том*** *таба алмай.* Әкиәттән.

**тон** [тон], [*рус.* < *гр.*] *и.* 1. *муз.* Билдәле бер юғарылыҡтағы музыкаль тауыш. *Түбән* ***тон.*** *Юғары* ***тон.*** ▬ *[Гармунсы] йырсының тауышына тура килтерерлек* ***тон*** *һайлай алмай яфалана ине.* Р. Солтанғәрәев.

2. Һүҙ, телмәрҙең хис, мөнәсәбәтте сағылдырған әйтелеш рәүеше; тауыш. *Асыулы* ***тон.*** *Йомшаҡ* ***тон.*** *Ҡаты* ***тон.*** ▬ *Сыртланов бик һалмаҡ* ***тон*** *менән аңлатма бирергә кереште.* С. Ағиш.

3. Төҫтөң асыҡлыҡ дәрәжәһе. *Асыҡ* ***тон.*** *Тоноҡ* ***тон.***

**тон** [то°н] **I** *ҡ.* Буръяҡлап торған нәмәләре төпкә ултырып, таҙарыу. *Һыу* ***тона.*** ▬ *Көн эҫе ине. Кисә яуып үткән ҡойма ямғырҙан һуң юлда ҙур-ҙур күләүектәр* ***тоноп*** *ҡалған.* Р. Ғабдрахманов. *Таштуғайҡай, һинен йылғаҡайың* ***тоноп*** *ҡына аҡҡан һыу икән.* Халыҡ йырынан.

**тон** [то°н] **II** *ҡ.* 1. Томанһыу, һүренкегә әйләнеү; томанһыу, һүренке булыу. *Бабай йоҡонан* ***тонған,*** *йәшкәҙәп торған йәшкелт күҙҙәрен асты.* Ғ. Дәүләтшин. *Тик йондоҙҙар бейеклектә берсә янып, берсә* ***тона.*** М. Кәрим.

2. Көпләнгән, тығылған һымаҡ булыу. *Танау* ***тона.*** ▬ *Сусҡаларҙың сыйылдауына, күҙ алдынан үткән имәнес картинаға минең иҫ китте, ҡолаҡтар* ***тондо.*** Д. Юлтый. *Машина урамдан үткәндә, тәҙрәләр дер һелкенеп, ҡолаҡ* ***тоноп*** *ҡала.* М. Хисмәтов.

*ҠУШЫМТА 5*

## Сит телдәрҙән һүҙҙәр үҙләштереү һеҙөмтәһендә яһалған омографтар

*аналитик — аналитик*
*биофизик — биофизик*
*биохимик —биохимик*
*ботаник — ботаник*
*график — график*
*диалектик — диалектик*
*дидактик — дидактик*
*динамик —динамик*
*дистрофик — дистрофик*
*диэлектрик — диэлектрик*
*догматик — догматик*
*истерик — истерик*
*классик — классик*
*комик — комик*
*косметик — косметик*
*критик — критик*
*лирик — лирик*
*логик — логик*
*математик — математик*
*метафизик — метафизик*

*механик — механик*
*мимик — мимик*
*мистик — мистик*
*оптик — оптик*
*паралитик — паралитик*
*пластик — пластик*
*политик — политик*
*прагматик — прагматик*
*практик — практик*
*прозаик — прозаик*
*радиотехник —радиотехник*
*ревматик— ревматик*
*романтик — романтик*
*сатирик — сатирик*
*сифлйтик — сифлитйк*
*скептик — скептик*
*склеротик — склеротик*
*статистик — статистик*
*тактик — тактик*
*техник — техник*
*трагик — трагйк*
*тропик — тропик*
*фанатик — фанатик*
*физик — физик*
*химик — химик*
*эластик — эластик*
*электрик — электрик*
*электротехник — электротехник*
*эмпирик — эмпирик*
*энергетик — энергетик*
*эпик — эпик*

ҠУШЫМТА 6

## Омограф ялғауҙар ҡушыу һөҙөмтәһендә яһалған омографтар

### 1. Исем яһаусы *-ма/-мә* һәм ҡылымдың юҡлыҡ формаһын яһаусы *-ма/-мә* омоғраф ялғауҙары һоҙомтәһендә

*аиырма — аиырма*
*аҡлама — аҡлама*
*аңлатма — аңлатма*
*асыҡлама — асыҡлама*
*атлама — атлама*
*ашлама — ашлама*
*белдермә — белдермә*
*белешмә — белешмә*
*берекмә — берекмә*
*берләшмә — берләшмә*
*бешмә — бешмә*
*билдәләмә — билдәләмә*
*биләмә — биләмә*
*бүлмә — бүлмә*
*быума — быума*
*иҙмә — иҙмә*
*иретмә —иретмә*
*иҫкәртмә — иҫкәртмә*
*йөкләмә — йөкләмә*
*йыйылма — йыйылма*
*йәймә — йәймә*
*күнекмә — күнекмә*
*күпмә — күпмә*
*танытма — танытма*
*ташлама — ташлама*
*теҙмә — тёҙмә*
*текмә — текмә*
*тигеҙләмә — тигеҙләмә*
*күптермә — күптермә*
*күсермә — күсермә*

*күтәрмә —күтәрмә*
*ҡайтарма — ҡайтарма*
*ҡаптырма — ҡаптырма*
*ҡаралама — ҡаралама*
*ҡарама — ҡарама*
*ҡатлама — ҡатлама*
*ҡатнашма — ҡатнашма*
*ҡоролма — ҡоролма*
*ҡыйма — ҡыйма*
*ҡысынма — ҡысынма*
*ҡысытма — ҡысытма*
*ҡыҫҡартма — ҡыҫҡартма*
*нығытма — нығытма*
*ойошма — ойошма*
*осорма — осорма*
*осортма — осортма*
*өндәмә — өндәмә*
*өҫтәмә — өҫтәмә*
*саҡма — саҡма*
*салма — салма*
*сәсәтмә — сәсәтмә*
*төшәмә — төшәмә*
*уйҙырма — уйҙырма*
*уйма — уйма*
*ултырма — ултырма*
*урама — урама*
*төҙәтмә — төҙәтмә*
*төкәтмә — төкәтмә*
*төшөрмә — төшөрмә*
*туҡыма — туҡыма*
*тултырма — тултырма*
*үрсетмә — үрсетмә*
*һибелмә — һибелмә*
*һуғылма — һуғылма*
*әсемә — әсемә*
*яҙма — яҙма*
*япма — япма*

### 2. Сифат яһаусы *-ма/-мә* һәм ҡылымдың юҡлыҡ формаһын яһаусы *-ма/-мә* омограф ялғауҙары ҡушыу һөҙомтәһендә

*алынма — алынма*
*башҡарма — башҡарма*
*күсмә — күсмә*
*ҡаҙылма — ҡаҙылма*
*ҡабартма — ҡабартма*
*ҡушылма — ҡушылма*
*өҫтәлмә — өҫтәлмә*
*сағыштырма —сағыштырма*
*сәсмә — сәсмә*
*тыума — тыума*
*ултыртма — ултыртма*
*үрмә — үрмә*
*һайланма — һайланма*

### 3. Исем яһаусы *-ма/-мә*, сифат яһаусы *-ма/-мә*, һәм ҡылымдың юҡлыҡ формаһын яһаусы *-ма/-мә* омоғраф ялғауҙары ҡушыу һөҙөмтәһендә

*баҫма — баҫма — баҫма*
*борма — борма — борма*
*күрһәтмә — күрһәтмә — күрһәтмә*
*ҡойма —ҡойма — ҡойма*
*ҡушма — ҡушма — ҡушма*
*өйөрмә —өйөрмә — өйөрмә*
*тағылма — тағылма — тағылма*
*тартма — тартма — тартма*
*төртмә — төртмә — төртмә*
*һыҙма — һыҙма — һыҙма*

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Баш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Һүҙлектең төҙөлөшө һәм файҙаланыу тәртибе . . . . . . . . . . . . 20
Файҙаланылған һүҙлектәр исемлеге . . . . . . . . . . . . . . . . 25
Шартлы ҡыҫҡартмалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 26

### Һүҙлек

А . . . . . . . . . . . . . . . . . 29
Б . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
В . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Г . . . . . . . . . . . . . . . . . 72
Ғ . . . . . . . . . . . . . . . . . 72
Д . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
Е . . . . . . . . . . . . . . . . . 76
З . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
И . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Й . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
К . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
Ҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . 124
Л . . . . . . . . . . . . . . . . . 178
М . . . . . . . . . . . . . . . . . 180
Н . . . . . . . . . . . . . . . . . 185
О . . . . . . . . . . . . . . . . . 188
Ө . . . . . . . . . . . . . . . . . 196
П . . . . . . . . . . . . . . . . . 205
Р . . . . . . . . . . . . . . . . . 207
С . . . . . . . . . . . . . . . . . 210
Т . . . . . . . . . . . . . . . . . 242
У . . . . . . . . . . . . . . . . . 292
Ү . . . . . . . . . . . . . . . . . 299
Ф . . . . . . . . . . . . . . . . . 303
Х . . . . . . . . . . . . . . . . . 304
Һ . . . . . . . . . . . . . . . . . 309
Ш . . . . . . . . . . . . . . . . . 333
Ы . . . . . . . . . . . . . . . . . 339
Э . . . . . . . . . . . . . . . . . 342
Ә . . . . . . . . . . . . . . . . . 345
Ю . . . . . . . . . . . . . . . . . 350
Я . . . . . . . . . . . . . . . . . 350

*Ҡушымталар*
1. Исем ҡылымдарҙың исемләшеүе һөҙөмтәһендә яһалған омонимдар . . . . . . . . 373
2. Исем ҡылымдарҙың сифатлашыуы һөҙөмтәһендә яһалған омонимдар . . . . . . . . 374
3. Һүҙ формаларының осраҡлы тап килеүе һөҙөмтәһендә яһалған омонимдар . . . . . . . . 375
4. Омографтар һүҙлеге . . . . . . . . 375
5. Сит телдәрҙән һүҙҙәр үҙләштереү һөҙөмтәһендә яһалган омографтар . . . . . . . . 380
6. Омограф ялғауҙар ҡушыу һөҙөмтәһендә яһалган омографтар . . . . . . . . 381